# БАШКОРТ ХАЛЫК ИЖАДЫ

# XI
# ТОМ

*Был китапты уҡыһаң,*
*Аҡыл алырһың, туған.*
*Бында юк алдыҡ, тылсым,*
*Бында бары ла ысын.*
*Тышы ғына – әкиәт,*
*Ҡарамаҡҡа, әкәмәт,*
*Эсендә бөтә хикмәт,*
*Хикмәт төбө – хәҡиҡәт.*
*Шулдыр уның әрсәһе:*
*Йүнләп кенә әрсеһәң*
*Емешенән ҡабығын,*
*Хикмәтен – табырһың,*
*Аңларһың яйың менән*
*Ни әйтә вайым менән*.*

# BASHKIR FOLK ARTS

## RIDDLES

# БАШКИРСКОЕ НАРОДНОЕ ТВОРЧЕСТВО

## НОВЕЛЛИСТИЧЕСКИЕ СКАЗКИ

# BASKURT HALK FOLKLORU

## ROMANSI MASALLAR

Издательство
"КИТАП"
имени
Зайнаб
Биишевой

УФА – 2008

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ

## XI ТОМ

## НОВЕЛЛИСТИК ӘКИӘТТӘР

Зәйнәб Бииҡева исемендәге "КИТАП" нәшриәте

ӨФӨ • 2008

УДК 821.512.141-34
ББК 82.3 (2 Рос-Баш)
Б 28

Мөхәрририәт:
*Әхмәт Сөләймәнов* (баш мөхәррир), *Зөфәр Тимербулатов, Раил Бикбаев, Салауат Галин,* |*Нур Зарипов*|, *Эрнест Ишбирҙин, Фәнүзә Нәҙершина,* |*Зиннур Ураҡсин*|, *Ғайса Хөсәйенов*

Текстарҙы һайлап алыусыһы һәм төҙөүсеһе,
инеш мәҡәлә һәм һүҙлек авторы – ***Әхмәт Сөләймәнов***
Аңлатмалар – *Лев Бараг, Әхмәт Сөләймәнов*
Томдың яуаплы мөхәррире – *Салауат Галин*

**Күсереп баҫҡанда томға һылтаныу мотлаҡ**

Редакционная коллегия:
*Ахмет Сулейманов* (главный редактор), *Зуфар Тимербулатов, Равиль Бикбаев, Салават Галин,* |*Нур Зарипов*|, *Эрнест Ишбердин, Фануза Надршина,* |*Зиннур Ураксин*|, *Гайса Хусаинов*

Подбор текстов, составление и глоссарий – ***Ахмет Сулейманов***
Комментарии – |***Лев Бараг***|, ***Ахмет Сулейманов***
Ответственный редактор тома – ***Салават Галин***

**При перепечатке ссылка на том обязательна**

**Башҡорт халыҡ ижады.** 11-се том. Новеллистик әкиәттәр. –
Б 28 Өфө: Китап, 2008. 568 бит.

ISBN 978-5-295-04635-3
ISBN 5-295-01393-6

Был том башҡорт халҡының тормош-көнкүреш әкиәттәренең мөһим өлөшөн тәшкил итеүсе новеллистик әкиәттәрҙән төҙөлдө. Уларҙың ҡайһы берҙәре тәүләп баҫтырыла. Материал төп геройҙың характер үҙенсәлеге буйынса төркөмләп урынлаштырылды. Том инеш мәҡәлә, аңлатмалар һәм һүҙлек менән йыһазландырылды.

УДК 821.512.141-34
ТП – 150/08 ББК 82.3 (2 Рос-Баш)

ISBN 978-5-295-04635-3
ISBN 5-295-01393-6

© Сөләймәнов Ә. М., төҙөү, 2008

## Төҙөүсенән

«Башҡорт халыҡ ижады» тупланмаһының 1981 йылда нәшер ителгән тормош-көнкүреш әкиәттәре йыйынтығынан айырмалы рәүештә, быныһы тик новеллистик сюжеттарҙан төҙөлдө. Әкиәт эпосының интернациональ булыуын иҫәпкә алып, аңлатмалар менән уларҙа файҙаланылған әҙәбиәт исемлеген, әүәлгесә, рус телендә биреү маҡсатҡа ярашлы тип табылды. Тупланманың әкиәттәрҙән торған башҡа томдары кеүек үк, быныһы ла донъяға мәғлүм сюжеттарҙың башҡорт варианттарының ҡабатланмаҫ йөкмәткеһе, инеш мәҡәләнең һәм аңлатмаларының сағыштырма материалға бай булыуы менән бүтән халыҡтарҙың да фольклорсыларының, этнографтарының, халыҡ мәҙәниәте, педагогикаһы белгестәренең иғтибарын йәлеп итмәй ҡалмаҫ тигән ышаныс бар.

Башҡорт халҡының тормош-көнкүреш әкиәттәрен системаға килтереүҙә баһалап бөткөһөҙ ярҙамы һәм донъя әкиәт ғилеме талаптарына яуап бирерлек итеп, уларға типологик анализ яһаған остазым, арҙаҡлы ғалимыбыҙ, тарих фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт университеты профессоры Лев Григорьевич Бараг (1911–1994), файҙалы кәңәштәрен йәлләмәгән филология фәндәре кандидаттары Мөхтәр Мофаззал улы Сәғитов (1933–1986) менән Нур Талип улы Зариповтарҙы (1925–1997) рәхмәт тойғоһо, ихтирам менән иҫкә алам. Был томды тикшереүҙә ҡатнашҡан, изге теләктәрен, эшлекле тәҡдимдәрен әйткән ҡәләмдәштәрем С. Э. Галин, Ф. А. Нәзершина, Р. Э. Солтангәрәева, Б. С. Байымов, Г. Р. Хөсәйенова, Ю. Ф. Ишбирҙин һәм Р. С. Сөләймәновтарға рәхмәтемде күндерәм.

*Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ*

## От составителя

В отличие от 4-ой книги сказок свода «Башкирское народное творчество», изданной в 1981 г., составленной из бытовых сказок, данный том нового свода состоит исключительно из новеллистических сказок.

Принимая во внимание интернациональный характер сказок, комментарии и список литературы, нашли целесообразным дать на русском языке. Как и другие тома сказок, настоящий том, надеемся, тоже привлечет к себе внимание фольклористов, этнографов, а также специалистов по народной культуре, педагогике и т. д., т. к. он содержит сюжеты с оригинальными содержаниями, а предисловие и комментарии оснащены богатым сопоставительным материалом.

Предлагая читателям и почитателям башкирского фольклора, с чувством глубокого уважения и искренней благодарности вспоминаю своего учителя, видного сказковеда, доктора филологических наук, профессора Башгосуниверситета Льва Григорьевича Барага (1911–1994), помогавшего систематизировать бытовые сказки башкирского народа и сделавшего им типологический анализ, а также своих тоже рано ушедших из жизни старших коллег, кандидатов филологических наук Мухтара Муффазалловича Сагитова (1933–1986) и Нура Талиповича Зарипова (1925–1997), помогавших мне в свое время полезными советами. Искренно говорю: «Рэхмэт!» и своим коллегам С. А. Галину, Ф. А. Надршиной, Р. А. Султангареевой, Б. С. Баимову, Г. Р. Хусаиновой и Э. Ф. Ишбердину, Р. С. Сулейманову, которые приняли участие при обсуждении данного тома, сделали дельные замечания и выразили добрые пожелания для улучшения книги.

*Ахмет СУЛЕЙМАНОВ*

# ТОРМОШ-КӨНКҮРЕШ ӘКИӘТТӘРЕ

Әкиәттәрҙе, гәҙәттә, мөғжизәүи сәсмәүер тип нарыҡлайҙар. Былай тигәндә, аңлашыла торғандыр, беренсе нәүбәттә тылсымлы (башкөллө йәки баштан аяҡ, саф тылсымлы; тылсымлы героик һәм батырҙар тураһындағы) әкиәттәр, шуға етә хайуандар тураһында әкиәттәр күҙ уңында тотола. Әммә әкиәт эпосының биләмәһе улар менән генә сикләнмәй. Уның сиктәре, «мөғжизәүи сәсмәүер» кеүек үк, төр йәһәтенән атамалаш, сюжет хасил итеүгә, уның төрлө бөгөлөштәр яһай-яһай, йылдам ғына үҫеп китеүенә этәреш биреүсе эске мөмкинлектәре (механизмы, поэтикаһының башҡа үҙенсәлектәре, стиле уртаҡ законсалыҡҡа буйһонһа ла) нигеҙҙә кеше ышанырлыҡ ваҡиғаларҙы, гәҙәттә, комиклыҡ призмаһы аша яҡтыртҡан әҫәрҙәрҙе лә үҙ эсенә ала. Фәндә уларҙы төрлөсә атап йөрөтәләр: берәүҙәр «новеллистик әкиәттәр», «новеллистик тормош-көнкүреш әкиәттәре», «халыҡ новеллаһы» тип (В. Я. Пропп, 67; М. А. Сакали, 170, В. П. Аникин, 5; Д. С. Яшин, 89; А. А. Глонти, 33), икенселәре «сатирик тормош-көнкүреш», «көнкүреш-сатирик», «сатирик» әкиәттәр (Д. М. Молдавский, 56; Е. Ф. Тарасенкова, 75; Н. А. Каргаполов, 37; У. С. Конкка, 41; Е. Д. Торсонов, 73; Д. Обидов, 62; Н. В. Соболева, 7), тип нарыҡлаһа, өсөнсөләре «реалистик әкиәттәр» (Ю. М. Соколов, 73, 335–368; Ә. И. Харисов, 13, 82, 146; 83, 67) тип тә атап ҡуйғылай. Әммә уларҙың барыһы ла башлыса бер үк сюжеттар менән эш итә. Айырма бары ул сюжеттар теҙемен теге йә был остан иңләү кимәленә генә ҡайтып ҡалды. Шуғалыр ҙа хайуандар тураһындағы әкиәттәр менән тылсымлы әкиәттәр сигенән тышта ҡалған сюжеттарҙың барыһын да үҙ эсенә алған «тормош-көнкүреш әкиәттәре» терминына һуңғы осорҙа өҫтөнлөк бирелә башланы: (Э. В. Померанцева, 64; Н. П. Лупанова, 51; М. А. Унгвицкая, 80; М. А. Хәсәнов, 85; Е. А. Костюхин, 46; А. Усенбаев, 81; Е. С. Сидорова, 71; А. С. Федосик, 21; Н. М. Ведерникова, 29; Ю. И. Юдин, 88; Л. Ш. Ямалет-

динов, 71; Кирәй Мәргән, 43; Ф. А. Алиева, 4; М. А. Вавилова, 27 һ. б.). Был атама, әлбиттә, шартлы.

Беҙҙә лә былдай әкиәттәрҙең берҙәм генә ҡабул ителгән атамаһы юҡ. Халыҡтың йәнле телендә уларға ҡарата берсә «ҡыҫҡа әкиәттәр» йә «көлкөлө әкиәттәр» тигән, берсә «хикәйә» йә «хикәйәт» тигән атамалар ҡулланыла. Башҡорт әкиәттәренә башлап мөрәжәғәт итеүселәр ҙә халыҡ телендәге атамаларҙы иҫәпкә алырға тырышҡан. Мәҫәлән, 1859 йылда Мирсалих Биксурин «әкиәт» тип баҫтырған реалистик характерҙағы сәсмә әҫәрҙе (23, 49–59) М. Березин 1876 йылда сыҡҡан «Төрөк хрестоматияһы»нда хикәйәт (22, 5–62) тип бирә. И. Ильминский шундайыраҡ типтағы икенсе бер әкиәттең жанрын 1861 йылда «хикәйә» тип кенә билдәләгән (40). Профессор Ғ. Б. Хөсәйеновтың аңлатыуынса, фантастик һәм реалистик хикәйәттәр бар: «реалистик хикәйәттәр күберәк тормош-көнкүреш әкиәттәренә, бигерәк тә... көләмәстәргә тартым» була (84, 248). «Хикәйәт» атамаһы ғәрәп телендәге үҙенең тәүге мәғәнәһе буйынса «әләкләү», «ирештереү», «мәрәкәләү» тигәнде аңлата. Аҙаҡ «хикәйәт» атамаһы ошо мәғәнәлә фарсыларға, афғандарға килеп инә һәм итальяндар «новелла» тип йөрөткән әҫәрҙәргә оҡшаш хикәйәләргә күсерелә (24, 8; 37, 37–44). Беҙҙә лә ул халыҡ телендә, асылда, ошондайыраҡ мәғәнәлә йөрөй. Әммә башҡорт фольклор ғилемендә ул баштан уҡ ерегеп китә алмаған. 1926 йылда башҡорт әкиәттәрен беренсе булып төркөмләгән Ғ. Вилданов тылсымлы (уныңса, «мифлы-ялған ышаныулы», «хыяли», «рухани») һәм хайуандар тураһындағы (уныңса, «хайуандар тәңгәлендә»ге) әкиәттәрҙән башҡаларын «әхлаҡи һәм тормош әкиәттәре» тип кенә атаған (31, 16). Төрки телдәре белгесе Н. К. Дмитриев, 1941 йылда башҡорт әкиәттәренең яңы бүленешен тәҡдим итеп, хайуандар тураһындағы, тылсымлы һәм батырҙар тураһындағы әкиәттәр менән бер ҡатарҙан «тормош-көнкүреш әкиәттәре» һәм «ғибрәтле әкиәттәр» тигән төркөмдәр күрһәткән (9, 25—27). Аҙаҡ башҡорт фольклористикаһында, атап әйткәндә, Ә. И. Харисов (13, 9; 83, 69–10), М. Х. Минһажетдинов (14, 12–15; 54), Кирәй Мәргән (43, 69–13), Ғ. Б. Хөсәйенов (84, 243), Ә. М. Сөләймәнов (18, 6–30; 19, 6–29; 74) хеҙмәттәрендә улар, ике төркөм берләштерелеп, «тормош-көнкүреш әкиәттәре» тип кенә йөрөтөлә башланы.

## 1. Тормош-көнкүреш экиәттәренең тамырҙары

Үткән быуатта фольклор ғилемендә шундай ҡараш өҫтөнлөк иткән: тормош-көнкүреш экиәттәре – йәнәһе лә, башҡа экиәттәрҙән аҙаҡ барлыҡҡа килгән күренеш. Был ҡараш совет осоронда ла йәшәне. Уны Ю. М. Соколов, В. П. Аникин, Э. В. Померанцева, А. А. Мордвинцев, В. А. Бахтина, Н. И. Кравцов, В. Н. Морохин, Н. В. Соболева кеүек рус фольклорсылары ла, башҡалар ҙа (Х. Жумалиев, М. Әүәзов, Д. А. Яшин, Ф. А. Алиева һ. б.), шул иҫәптән башҡорт ғалимдары ла (Ә. И. Харисов, Ғ. Б. Хөсәйенов, Кирәй Мәргән, К. Ә. Әхмәтйәнов) яҡланы. «Фольклор эстетикаһы» тигән китабында В. Е. Гусев уны шулай дөйөмләштерҙе: «Иң боронғо экиәт төрҙәре – хайуандар тураһындағы экиәттәр менән архаик тылсымлы экиәттәр; шунан тәүтормош община ҡоролошо дәүерендә – нахаҡтан рәнйетелеүсе геройҙар һәм үҙҙәренә ҡатын табыусы геройҙар тураһындағы экиәттәр (батырҙар экиәте), феодализм дәүерендә – синфи конфликтлы тылсымлы экиәттәр, шунан аҙаҡ тылсымлы экиәттәрҙе ҡыҫырыҡлаусы мажаралы һәм көнкүреш экиәттәре тыуған» (35, 127). Был һығымтаға ҡушылыусылар, асылда, уҙған быуат урталарында Ф. И. Буслаев, А. А. Котляровский, А. Н. Пыпин кеүек мифология мәктәбе вәкилдәре алға һөргән концепцияға нигеҙләнә. Ул концепция буйынса, татар-монгол иҙеүе дәүерендә мифтарҙан былиналар (тарихи йырҙар), былинанан эпик экиәттәр айырылып сыға. Артабан экиәттә лиризм, идиллик хыялланыу, ваҡыты менән сатира формаһын алыусы ғибрәтлелек үҫешә барып, повесть һәм ғибрәтле мәҫәлдәр менән тоташыусы мәрәкә-новеллалар хасил була (1, 62). Рус иле татар-монгол баҫҡынсылары иҙеүен XIII–XV быуаттарҙа кисерә. Тимәк, уларса, эпик (йәғни тылсымлы) экиәттәр шунан да һуңыраҡ барлыҡҡа килә була. Ә сатирик һәм ғибрәтле тормош-көнкүреш экиәттәренең хасил булыу ваҡытын В. Е. Гусев тағы ла һуңғыраҡ дәүерҙәргә ҡайтарып ҡалдыра. Беҙҙең көндәргәсә һаҡланып ҡалған бик боронғо яҙма ҡомартҡылар ҙа, һынлы сәнғәт үрнәктәре лә шуның киреһен раҫлай. Мәҫәлән, боронғо Һинд сығанаҡтарында шундай сюжеттар айырыуса мул файҙаланылған. Тимәк, улар бик боронғо замандарҙа уҡ Һиндостанда популяр булған. Хәҙер АТ 875В тибы[1] тип йөрөтөлгән зирәк ҡыҙ тура-

---

[1] Сюжет йә мотив тибының аталышы хаҡындағы мәғлүмәтте АТ (The Tupes of the Folktale. A Classification and Bibiographu Antti Aarnes Verzeichnis der Marchentupen (FFC 3). Translaten and Enlarged by S. Thompson. — Helsinki, 1961 (FFC 184) һәм СУС (Сравнительный указатель сюжетов: Восточнославянская сказка / Сост. Л. Г. Бараг, И. П. Березовский, К. П. Кабашников, Н. В. Новикова. Л.: Наука, 1979) халыҡ-ара экиәт күрһәткестәре, Ә. М. Сөләймәновтың «Экиәттә хәҡиҡәт» китабы (Өфө: Китап, 1997. 373–387 б.) һәм «Файҙаланылған әҙәбиәт» исемлегендә күрһәтелгән экиәт йыйынтыҡтарының аңлатмаларынан алырға мөмкин (10; 11; 14; 15; 16; 18; 19).

һындағы сюжет «Махабхарата» менән «Ятака»ға ингән (18, 352). Ул шулай уҡ «Шукасаптати» тигән йыйынтыҡта ла бар (87, 80–81). Беҙҙәге «Фәүкинур», «Аҡыллы ҡарт» ише новеллистик экиәт[2] шул сюжетҡа нигеҙләнә. «Шукасаптати» ҙа шулай уҡ АТ 1730, 1410 типтарын хәтерләтеүсе сюжеттарҙа килтерелгән. Тәүгеһе иренә тоғро ҡатындың аҙғын мулланы хур итеүе тураһындағы «Мулла шайтанға әйләнде», икенсеһе «Ҡатын хәйләһе» тигән башҡорт новеллистик экиәттәренә оҡшаш. Грузин фольклорсыһы А. А. Глонти раҫлауынса, «Тарих атаһы»н Геродот теркәгән (Геродот. История, Кн. 2, разд. 12). Рампсинит хазинаһы тураһындағы сюжет (АТ 950) б. э. тиклем XII быуатта йәшәгән Рампсиниттар династияһынан булған Рамзес III тигән фараон исеме менән бәйле (34, 353). Ул сюжетҡа нигеҙләнгән етеҙ бур тураһындағы экиәттәр хәҙер бик күп халыҡтарҙа, шул иҫәптән башҡорттарҙа ла («Мәскәү ҡарағы менән Петербург ҡарағы», «Байҙы бөлдөргән таҙ», «Батша менән бур»), билдәле. Геродоттың «Тарих»ында беҙгә «Ер экиәте» рәүешендә билдәле сюжет та теркәлгән. Бөйөк тарихсыға уны скиф риүәйәте тип еткергән булғандар. Антик донъяла сатирик, юмористик экиәт мотивтары комедияларҙа файҙаланылған. Ошондайыраҡ мәғлүмәттәргә таяныш, В. Я. Пропп тормош-көнкүреш экиәттәренең йәшен байтаҡҡа «ҡартайта» төшә. Әммә ул: «Тәүтормош укладтары менән тормош-көнкүреш экиәттәренең бер уртаҡлығы ла юҡ», – тип, уның барлыҡҡа килеүен «ер эшкәртеү үтә ябай стадиянан сығып, ырыу ҡоролошон ҡол биләүселек дәүләте алыштырған» (67, 251) дәүер менән бәйләй.

Шуның менән бергә 30-сы йылдарҙан алып тормош-көнкүреш экиәттәренең шишмә башы феодализмдан бик күп алдағы дәүерҙәрҙә башлана, һәм улар башҡа экиәт жанрҙары менән бер рәттән үҙ аллы үҫеш ала тигән фекерҙәр ҙә әйтелә килә. Мәҫәлән, А. И. Никифоров, көләү һәм сатира кешенең үҙ-үҙен кеше итеп һиҙә башлау дәүере менән бәйләнгән, тиһә (60, 50), И. И. Колесницкая АТ 851А тибындағы сюжетҡа ҡоролған экиәттәр (башҡорттарҙа «Балҡан таҙ» шундайҙар рәтенә ҡарай) матриархат дәүеренә хас никах алды һынау йолаһын сағылдырыуын (44, 132–137), В. И. Чичеров тормош-көнкүреш экиәттәренең, ғөмүмән, бик боронғо замандарҙа барлыҡҡа килеп, төрлө экиәт жанрҙары менән йәнәш үҫеү ихтималын әйткән (86, 277), ә күренекле совет этнографы А. М. Золотарев тормош-көнкүреш экиәттәренең тәүге яралғылары дуаль йәмғиәттә үк тыуыуын ғилми яҡтан нигеҙләгән (дуаль йәмғиәт – кешеләрҙең тәүтормош көтөүсе алмашҡа килгән йәмғиәт. Унда ырыуҙар пар-пар булып берләшкән, һәм улар үҙ-ара ғына никах мөнәсәбәтенә инә алған. Ырыуҙаштарҙың никахлашыуы ҡәтғи тыйылған). Көнкү-

[2] Сығанағы күрһәтелмәһә, экиәт «Башҡорт халыҡ ижады: Экиәттәр» йыйынтығының 1-се, 5-се китаптарынан (18; 19) алынған булыр.

решендә хәҙерге заманғаса тәүтормош билдәләрен һаҡлаған халыҡтар ижадын өйрәнеү 50-се йылдарҙа Е. М. Мелетинскийҙы ла ошондайыраҡ һығымтаға килтергән. Айырым әйткәндә, «Героик эпостың килеп сығышы» тигән хеҙмәтендә ул тормош-көнкүреш әкиәте тылсымлы әкиәт менән бер мәлдә, «нигеҙҙә, ырыу ҡоролошо тарҡалған мәлдә үҫешә», тип яҙғайны (52, 23). А. М. Золотарев менән Е. М. Мелетинскийҙарҙың концепцияһы һуңғы йылдарҙа У. Н. Конкка (45), Т. И. Михайлов (55), Е. С. Котляр (47), Ю. И. Юдин (88), М. А. Вавилова (26), Е. Р. Торсонов (79) һ. б. тарафынан нығытылды һәм артабан үҫтерелде. Башҡорт фольклорында был ҡарашҡа беренсе булып М. Х. Минһажетдинов ҡушылды (54).

Тормош-көнкүреш әкиәттәренең тәүтормош ырыу ҡоролошо дәүере менән бәйләнешен палеолит осоронда мәмерйә стеналарына төшөрөлгән һүрәттәр ҙә ҡеүәтләй. Ҡайһы берәүҙәр феодализмға тиклем сәнғәттә реализм булыуын шик аҫтына алһа, тәүтормош аусылары яһаған һүрәттәр был фекерҙе тулыһынса кире ҡаға: «Палеолит сәнғәте баштан уҡ үҙенең объекттарын, иң әүәл кейекте, реалистик һынландырыуға ынтылған» (63, 105). Палеолит реалисы айырым деталь менән дә йәнлек тураһында тулы төшөнсә биреп була, йәнлектең эҙен һүрәтләү – йәнлектең үҙен һынландырып, уның ишен булдырыу, тип белгән (63, 35). Кейектәрҙе теүәл һүрәтләргә өйрәнеп алыу менән, кешеләр уларҙың айырыуса характерлы һыҙаттарын айырыңҡырап һүрәтләргә тырышҡандар. Бындай саҡта тәүтормош рәссамдары ырыуҙаштарының кейек-натурщик хаҡында мәғлүмәттәре булыуына, һүрәтләнгән өлөшөн күреү менән, ҡалған яғын күҙ алдына баҫтыра алыу һәләтенә иҫәп тотҡандар. Тәүтормош һынлы сәнғәтенә хас «әйтеп бөтөрмәү» алымы тел төбө менән хикәйәләп һөйләнеүсе тормош-көнкүреш әкиәттәрен хәтерләтә.

«Тәүтормош сәнғәте хаҡында әйткәндәребеҙҙән шул да яҡшы аңлашыла: ул сәнғәт кейектәрҙе дөйөм һүрәтләүҙе маҡсат итеп ҡуймай, ә һунарсылар белгәнсә, улар күреп өйрәнгәнсә, сағылдыра. Йәнлектәр донъяһын тәрәндән белеү улар өсөн йә йәшәү, йә үлем мәсьәләһе менән бәйле була... Шуға күрә лә кейектәр донъяһына үтеп инеү, уларҙы үҙҙәре менән бер күреү боронғо кешеләрҙең донъяға ҡарашының һәм психологияһының мөһим һыҙаты була, уларҙың бөтә рухи донъяһында үҙенең эҙен ҡалдыра. Тарихтағы иң боронғо «хайуандар эпосы» шулай тыуа. Унда кейектәр кешесә сығыш яһай», – тип яҙғайны А. П. Окладников (63, 113). Тимәк, боронғо таш быуат һүрәттәре «кешесә сығыш яһаусы» хайуандар тураһындағы әкиәттәргә лә «үҙенсәлекле иллюстрация» булып торған (25, 141). Иң боронғо әкиәттәр, тимәк, һынлы сәнғәттән айырылғыһыҙ булған. Улар бер үк ваҡытта йәнлектәр тураһында ла һөйләгән. Тәүтормош ижадына хас синкретизмдың бер формаһы бына шулайыраҡ

күҙ алдына баҫа. Беҙҙең уйыбыҙса, замандар үтә килә ошо синкретик ижадтан «Алдар тәлкә» (АТ 170; 14, № 11) һәм «Үле ҡыҙға — тере ҡыҙ», «Тутый менән һаңғырау ҡоштар» (59, оп. 10/315, 58–59-сы б.) һәм «Туғыҙ Туңҡылдаҡ менән бер Мыймылдаҡ» (АТ 1535), «Һаламторхан» (59, оп. 10/38, 47–48-се б.) һәм «Бабай менән егет» (АТ 545Б) тибындағы бер осраҡта хайуандар тураһындағы, икенсе осраҡта тормош-көнкүреш әкиәттәре рәүешендә һөйләнелә торған уртаҡ сюжетлы әкиәттәр тыуған. Тимәк, шартына ҡарап, бер үк сюжет тибына ике әкиәт жанры (хайуандар тураһындағы әкиәт тә, тормош-көнкүреш әкиәттәре лә) эйә була ала.

Тормош-көнкүреш әкиәттәренең тылсымлы әкиәттәр менән дә уртаҡ «мөлкәте» бар. Әлегә шул «уртаҡ мөлкәт»тең төбө-тамырын асыҡлап тормаҫтан, фантастика билдәләренә тылсымлы әкиәттәр генә түгел, тормош-көнкүреш әкиәттәре лә дәғүә итергә хаҡлы икәнен, ул билдәләрҙең айырым мотив, образ, художестволы деталдәрҙә осрауын констатациялау менән генә сикләнәбеҙ.

Шулай итеп, тормош-көнкүреш әкиәттәренең синыфтар барлыҡҡа килгәнгә тиклем бик күп алда тыуыуы бәхәсһеҙ.

## 2. Башҡорт халҡының тормош-көнкүреш әкиәттәренең өйрәнелеше

Башҡорт тормош-көнкүреш әкиәттәренең фольклористик маҡсаттарҙа яҙып алыу һәм баҫтырыу эше нигеҙҙә XIX быуаттың икенсе яртыһында һәм XX быуат баштарында башлана. Был тәңгәлдә бигерәк тә А. Г. Бессоновтың эшмәкәрлеге баһалап бөткөһөҙ.

Д. К. Зелениндың хеҙмәте лә иғтибарҙы тарта (30, 441–490). Башҡорт тормош-көнкүреш әкиәттәрен яҙып алыу менән күренекле яҙыусы Н. А. Крашенинников (18, № 85) һәм беренсе башҡорт алфавитының авторы М. Ҡулаев та (19, № 92, 97) шөғөлләнгән.

Беҙҙең быуаттың 30-сы йылдарынан башлап, республикабыҙҙағы ғилми архивтарҙа тормош-көнкүреш әкиәттәренең тотош фонды барлыҡҡа килә. Был эштә Р. Нигмәти, Б. Бикбай, Ғ. Әмири, Ш. Насыров, М. Тажи, Н. Асанбаев иште яҙыусылар, Ә. И. Харисов, Кирәй Мәргән, М. Х. Минһажетдинов, Н. Д. Шоңҡаров, С. Ә. Галин, Ғ. Б. Хөсәйенов, С. Миржанова һымаҡ фольклор, әҙәбиәт, тел белгестәре, Әхмәт Исламғолов, Хәлим Ҡәнзәфәров, Ғата Исхаҡов, Ғәли Ишбулатов, Роза Нафиҡова кеүек һәүәҫкәр фольклорсылар, айырым энтуазиастар, бигерәк тә,

башҡорт дәүләт университетының башҡорт бүлеге талиптары ҙур әүҙемлек күрһәтте.

Тормош-көнкүреш әкиәттәре фонды айырыуса 60–80-се йылдарҙа нык тулыланды. 1939 йылда сыҡҡан «Башҡорт халыҡ әкиәттәре» тигән китаптан башлап 1961 йылға тиклем уларҙың айырым өлгөләре егерменән ашыу йыйынтыҡта баҫылып сыҡты. Әммә, бөтәһен бергә алғанда ла, ул баҫмалар башҡорт халҡының тормош-көнкүреш әкиәттәре репертуарының байлығын да, уларҙың тематик төрлөлөгөн дә, художестволы үҙенсәлектәрен дә асыҡ итеп күҙ алдына баҫтырырға мөмкинлек бирер хәлдә булманы, сөнки, А. Г. Бессонов йыйынтығын иҫәпкә алмағанда, китаптан китапҡа бер үк әкиәттәр күсеп йөрөнө. Ә уларҙың һаны утыҙға ла етмәне. Бары һуңғы осорҙа ғына башҡорт халҡының тормош-көнкүреш әкиәттәре репертуарын тулыраҡ күҙалларға мөмкинлек бирерлек йыйынтыҡтар донъя күрҙе. Бында «Башҡорт халыҡ ижады» тигән күп томлылыҡҡа ингән әкиәт томдары күҙ уңында тотола. Уларҙың башҡортсаларына 271 тормош-көнкүреш әкиәте, 20 көлдөрөк, 27 ымһындырыҡ ингән.

Башҡорт тормош-көнкүреш әкиәттәрен ғилми яҡтан баһалауҙа тәүге һүҙҙе Н. К. Дмитриев әйткән. А. Г. Бессонов йыйынтығына яҙған баш һүҙҙә тормош-көнкүреш әкиәттәрен тематик циклдарға бүлеп, ҡайһы бер күҙәтеүҙәр яһаған. Уның ҡарашы Ә. И. Харисов һәм М. Х. Минһажетдиновтарҙың хеҙмәттәрендә артабан үҫтерелде.

Башҡорт әкиәттәренең поэтикаһы, стиле хаҡында ла әлдәнәле әйтелә килә. А. Г. Бессонов йыйынтығына яҙған баш һүҙендә Н. К. Дмитриев тотороҡло стилистик формулаларға иғтибар иткән (9, 21—28). Башҡорт әкиәттәренә хас бындай күренештәр һәм уларҙың ҡайһы бер үҙенсәлектәре тураһында Р. М. Әхтәров, Ж. Ғ. Кейекбаев, М. Х. Минһажетдинов, Н. Т. Зариповтарҙың хеҙмәттәрендә лә әйтелде. Бынан тыш «стиль күҙлегенән башҡорт халыҡ әкиәттәренең лексикаһы ла иғтибарға лайыҡлы» булыуы (Ж. Ғ. Кейекбаев (42, 181–182), шиғри диалогтарҙың (М. Х. Минһажетдинов (14, 19, 27), «йыл үҫәһен көн үҫә» (Ә. И. Харисов (83, 7), «бер бите ай, бер бите көн» (Н. Т. Зарипов (16, 24–28) ише тасуирлау формулаларының әһәмиәте хаҡында ла әйтелде. Һуңғы йылдарҙа әкиәт теленең үҙенсәлеге лә иғтибарға алына башланы (39).

Башҡорт халыҡ әкиәттәренең поэтикаһына, стиленә ҡағылышлы хеҙмәттәр нигеҙҙә ошолар менән сикләнә. Башҡа халыҡтарҙың фольклористикаһында иһә был өлкәлә тикшеренеүҙәр интенсивыраҡ һәм төрлө яҡлабыраҡ алып барыла (Р. М. Волков, 32; Н. Рошияну, 68; Н. В. Новиков, 61; Ю. М. Соколов, 73, 292–373; В. И. Чичеров, 86, 276–309; В. Я. Пропп, 66–67; В. П. Аникин, 5; Л. Г. Бараг, 6; В. А. Бахтина, 7–8; Н. М. Ведерникова, 29; С. Г. Лазутин, 49; Д. С. Лихачев, 50; Э. В. По-

меранцева, 64; Т. Д. Курдованидзе, 48; А. И. Алиева, 2; Л. Ш. Ямалетдинов, 77; Л. Ф. Дунаевская, 38). Эммә шунының үкенесле, әкиәт поэтикаһы һәм стилен тикшереүгә бағышланған күп кенә хеҙмәттәрҙең авторҙары, шул иҫәптән башҡорт ғалимдары ла, үҙ-ара һүҙ ҡуйышҡандай, ғәҙәттә, тылсымлы әкиәттәргә генә мөрәжәғәт итте.

Тормош-көнкүреш әкиәттәренең поэтикаһы хаҡында һүҙ алып барғанда, фольклорсылар иң әүәл уларҙың көтөлмәгәнсә тамамланыуын (Ю. М. Соколов, 73, 342; Е. Ф. Тарасенкова, 76, 78; Ф. А. Алиева, 4, 71–78; аңғармаҫтан бөгөлөштәр яһауын (У. Б. Длагат, 36, 78), йыйнаҡ булыуын билдәләне (В. И. Чичеров, 86, 306; В. П. Аникин, 5, 216); Е. Ф. Тарасенкова, 76, 78, Л. Ш. Ямалетдинов, 77, 16). Бынан тыш уларҙа тел төбө менән әйтеү, контраслылыҡ (4, 78–84), баҫҡыслылыҡ алымы файҙаланылыуы (76, 72–80), ситуацияларҙың герой тарафынан ойошторолоуы, персонаждарҙың үҙ-ара урын алмаштырышыуы (29, 112–113) һ. б. хаҡында ла һүҙ булды. Ҡайһы бер тикшеренеүселәр тормош-көнкүреш әкиәттәренең аллогизмды үҙ итеүен (В. П. Аникин, 5, 215—216), мауыҡтырғыс булыуын (Л. Ш. Ямалетдинов, 7, 16, С. Г. Лазутин, 49, 16–20 һ. б.) һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Тикшеренеүселәр тормош-көнкүреш әкиәттәренең комиклыҡ поэтикаһына ла әҙме-күпме ҡағылғаны бар. Н. А. Каргаполов (44а, 6–8), А. Усенбаев (81, 25), Д. Обидов (62, 16–17), Н. В. Соболева (72, 77–78) һымаҡ белгестәр нигеҙҙә комик эффект тыуҙырыусы гипербола, эпитет, сағыштырыу һымағыраҡ тасуирлау сараларын, В. П. Аникин (5, 214–216), Е. Ф. Тарасенкова (76, 77–78), У. Б. Далгаттар (36, 91–103) комик ситуация тыуҙырыу алымдарын күҙҙән кисерҙе, Н. А. Савушкина (69), Л. Ш. Ямалетдинов (77, 16–17) шул мөмкинлектәрҙең икеһенә лә иғтибар итте. Уларҙың хеҙмәттәрендә традицион формулаларҙың ҡулланылышы, диалог һәм башҡа телмәр үҙенсәлектәре хаҡында ла ҡыҙыҡлы ғына фекерҙәр бар. Тормош-көнкүреш әкиәттәрен махсус тикшергән байтаҡ фольклорсылар, мәҫәлән, У. С. Конкка, И. П. Лупанова, Д. М. Молдавский, М. А. Унгвицкая, Е. Д. Торсонов, Ю. И. Юдин һ. б. поэтика мәсьәләһенә бөтөнләй һуғылманы. Башҡорт халҡының тормош-көнкүреш әкиәттәренең поэтикаһы өҫтөндә лә һуңғы дәүерҙәргәсә күҙәтеүҙәр яһаусы булманы. Бары яңыраҡ ҡына ҡайһы бер хеҙмәттәр күренә башланы (19, 18 29; 74; 10, 5–13; 11, 5–14).

## 3. Тормош-көнкүреш әкиәттәрен төркөмләү

Жанр билдәләре йәһәтенән тормош-көнкүреш әкиәттәрен төркөмләү мәсьәләһендә лә ғалимдар әлегәсә уртаҡ фекергә килгәндәре юҡ. Берәүҙәр уларҙы был яҡтан бүтәнсә бүленмәҫ художестволы берәмек кеүек күрә. Быға үҙҙәре үҙ иткән «новеллистик» йәки «көнкүреш-новеллистик», «халыҡ новеллаһы», «сатирик» йәки «сатирик-көнкүреш әкиәттәре» терминдарына, хатта «тормош-көнкүреш әкиәттәре» тигәненә лә тарыраҡ мәғәнә һалыуҙары, аҙ һанлы сюжеттар менән эш итеүҙәре сәбәп булған. Ҡайһы бер фольклорсылар был кәмселекте иҫәпкә ала, әммә әле беҙ һүҙ алып барған әкиәттәрҙең тәүге эске төркөмләнешен хайуандар тураһындағы һәм тылсымлы әкиәттәр менән «тиң хоҡуҡлы», тип ҡарай. Мәҫәлән, В. И. Чичеров уларҙы ике эре төркөмгә бүлә һәм һәр төркөмдө, тылсымлы, хайуандар тураһындағы әкиәттәр һымаҡ уҡ, «жанр» тип атай. Унынса, тәүгеһенә – новеллистик, мажаралы әкиәттәр, икенсеһенә көнкүреш-сатирик әкиәттәр менән көләмәстәр инә. Э. В. Померанцева ла, асылда, ошо уҡ принципҡа таяна. Айырма тик шунда ғына: В. И. Чичеров «жанр» тигән урында ул «төр» («вид») һүҙен ҡуллана һәм тәүге «төр»ҙө – «мажаралы әкиәттәр», икенсеһен «көнкүреш әкиәттәре» тип айыра. Мажаралыһына, унынса, тарихи һәм өлөшләтә новеллистик әкиәттәр, икенсеһенә сатирик әкиәттәр менән көләмәстәр инә. Н. В. Соболева иһә новеллистик, сатирик, тылсымлы, хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙе һәм шулай уҡ көлдөрөк менән көләмәстәрҙе бер тиң күрә: уларҙың бөтәһен дә жанр төркөмдәре тип иҫәпләй.

Тормош-көнкүреш әкиәттәрен ғилми яҡтан төркөмләүҙә ғалимдарҙың консенсусҡа ирешә алмауы билдәле бер йөкмәтке һәм персонаж (характер) тибына нигеҙҙә билдәле бер форма тибы тап килеүен иҫәптән сығарыуҙарынан килә булһа кәрәк. Беҙҙең ҡарамаҡҡа, тап шул үҙенсәлек менән әҙме-күпме иҫәпләшеүселәр тормош-көнкүреш әкиәттәрен уңышлыраҡ төркөмләйҙәр. Бына шуға бер нисә миҫал: Ю. М. Соколов уларҙы әкиәт-новеллалар (новеллистик әкиәттәр йәки новеллистик көнкүреш әкиәттәре), юмористик әкиәттәр менән сатирик әкиәттәр һәм әкиәт-көләмәстәр төркөмөнә, А. С. Федосик – әкиәт күрһәткестәрендәгесәрәк разрядтарга, Л. Ш. Ямалетдинов – сатирик, юмористик, мажаралы һәм ғибрәтле, М. А. Вавилова – мажаралы-новеллистик (новеллистик, тарихи) һәм сатирик-комик (сатирик һәм юмористик), М. Х. Минһажетдинов иһә көнкүреш ваҡиғаларын объектив хикәйәләүсе, сатирик-юмористик һәм ғибрәтле әкиәттәргә бүлеп сыға.

Жанр йөкмәткеһе йәһәтенән тормош-көнкүреш әкиәттәре, ысынлап та, бер төрлө түгел. Йәғни, уларҙың йөкмәтке яғынан бер-береһенә яҡыныраҡ, оҡшашыраҡ булған һәр төркөмө

билдәле бер жанр формаларындараҡ бирелеүсән. Тормош-көнкүреш әкиәттәренең берәүҙәрендә аҡыллылыҡ, әхлаҡи камиллыҡ, ғаилә татыулығы кеүек мөһим проблемалар күтәрелә һәм улар, ғәҙәттә, көтөлмәгәнсәрәк хәл итеЛә; икенсе бер төркөмөндә хәйләкәрлек, мутлыҡ, тапҡырлыҡ, етеҙлек йәки шуларҙың киреһе – иҫәрлек, бер ҡатлылыҡ, аңралыҡ кеүек проблемалар үҙәккә күсә; тыңлаусыларҙың зирәклеген, уяулығын һынау маҡсатында һөйләнелә торған әкиәттәр ҙә бар.

Жанр йөкмәткеһе йәһәтенән үтә лә сыбар башҡорт тормош-көнкүреш әкиәттәрен өҫтөнлөк итеүсе художестволы пафос, композиция үҙенсәлеге, персонаждар функцияһындағы төп оҡшашлыҡтар нигеҙендә *новеллистик, юмористик (сатирик)* әкиәттәр тигән жанр төрҙәренә бүлергә мөмкин.

## 4. Новеллистик әкиәттәр

«Новелла» һүҙе «яңы», йәғни «яңы жанр» тигәнде аңлата. Башҡорттоң «ҡарһүҙ»е кеүек, ул тәүҙә жанр йәһәтенән төрлө-төрлө сәсмә әҫәрҙәргә ҡарата ҡулланылыр булған. Аҙағыраҡ, башлыса, көнкүреш йөкмәткеле «анекдотик» хикәйәләрҙе новелла тип йөрөтә башлағандар.

Тарихи яҡтан ҡарағанда, әҙәби новеллалар, үҙҙәренең барлыҡҡа килеүҙәре менән халыҡ новеллаһына, новеллистик әкиәттәргә, бурыслы. Шик юҡ, үҙ аллы әҙәби жанр булып формалашҡас, фольклорға уларҙың да йоғонтоһо булмай ҡалмаған. Айырым сюжеттарҙың хатта әҙәби сығанаҡтарҙан килеүе лә ихтимал. Новеллистик әкиәттәр төркөмөнә ингән әҫәрҙәр менән эш иткәндә, йәнә шуны ла иҫтә тотоу кәрәк: классик әҙәби новеллалар һымаҡ уҡ новеллистик тормош-көнкүреш әкиәттәренең дә күптәрендә сюжет конфликты ябыҡ формала, йәғни ваҡиғаның башланышы, үҫтерелеше, хәл ителеше мотлаҡ сюжет рамкаһы эсендә барһа ла, уларҙың араһына тигеҙлек билдәһе ҡуйып булмай. Новеллистик әкиәттәрҙә новеллизм билдәләре (новеллаларға хас көтөлмәгәнлек эффектының бушағыраҡ булыуы, герой характерында киҫкен үҙгәреш) анаҡ ҡына күҙәтелмәүе лә ихтимал. Ҡайһы саҡта быны сәбәбе йә башҡарыусының, йә яҙып алыусының профессиональ әҙерлегендәге кәмселек менән дә аңлатыла. Шуға күрә халыҡ новеллаларын әҙәби новеллалар үлсәме менән баһаларға ярамай.

Тематика, йөкмәтке һәм характерҙар, сюжеттар тибы яғынан новеллистик әкиәттәрҙе бер нисә төркөмгә бүлгеләргә мөмкин: 1) зирәктәр, 2) мөхәббәт һәм ғаилә тоғролоғо, 3) үтә үҙ һүҙле ҡатындар, 4) ҡыйыу ҡыҙ менән яуыз ҡараҡтар тураһындағы новеллистик әкиәттәр, 5) йомаҡ-әкиәттәр һәм ғибрәтле әкиәттәр.

1) *Зирәктәр тураһындағы әкиәттәр.* Күп кенә новеллистик әкиәттәрҙә сюжет конфликтын сисеүҙә аҡыл эйәләре хәл иткес

роль уйнай. Шулай булһа ла улар тәүҙә үҙәктә күрһәтелмәй. Билдәле бер ваҡытҡа тиклем ижтимағи тормошта ҡатнашмайҙар, баһаланып та бөтмәйҙәр, хатта ҡыйырһытылалар, әҙәрләүҙәргә дусар ителәләр. Ҡыҫҡаһы, ваҡиғанан ситтә торалар. Тик хан, батша, ил бәләгә тарығас ҡына, иҫкә алыналар, сөнки кәңәштәренә мохтажлыҡ тыуа. «Ҡурайсы» (*927*) әкиәтендә аҡыллы ҡурайсының барлығы хаҡында башта бер ниндәй ҙә мәғлүмәт бирелмәй. Ул бары, бик ҡыйын хәлдән сығыу сараһын тапмай аптыраған саҡта, сюжеттың иң көсөргәнешле мәлендә генә, пәйҙә була. Пәйҙә була – аңын-тоңон белеп тә ала, конфликтты ла хәл итә. Баштан уҡ әҫәрҙең коллектив геройы, халыҡ, хәл иткеһеҙ мәсьәлә алдына ҡуйыла: байҙың ғәйеп булған улын тапмаһалар ҙа, уның хаҡында ҡайғылы хәбәр килтерһәләр ҙә, ауыр яза көтә. Уны йыртҡыстар өҙгөләүе беленгәс, хәүеф ана-бына ғәмәлгә аша тигәндә генә, ҡурайсының пәйҙә булыуы ҡайғылы хәбәрҙе һүҙһеҙ генә, ҡурай моңо менән, һөйләп биреүе халыҡты язанан ҡотҡара ла ҡуя.

«Лоҡман Хәким» (АТ 654С), «Аҡыллы ҡарт менән иҫәр батша» (АТ 981) тибындағы әкиәттәрҙә тәүҙә әҙәрләнгән, үлемгә хөкөм ителгән аҡыллы ҡарттар, батшаға һәм батшалыҡҡа килгән ҡыйын хәлдән сығыу юлын әйтеп, ҡарттарҙы үлтереү йолаһының юҡҡа сығарылыуына сәбәпсе була.

Социаль ғәҙелһеҙлек менән осрашҡанда, аҡыллы ҡарттар төрлө юлдар менән үҙҙәренең аҡыллылығын, дошманының (антагонисының) ахмаҡлығын иҫбат итә. Һүҙ барған әкиәттәрҙә аҡыллылыҡты иҫбатлап, конфликтты хәл итеүҙең иң таралған сараһы – тапҡыр һүҙ. Тапҡыр һүҙ йә йомаҡ, йомаҡҡа тартым кинәйә, мәҡәл кеүек төрлө осраҡҡа ярамалы формала, йә, тураһын әйтеп, фаш иткәс, аҙаҡ кире ҡайырып, ҡаты әйтелгәнде йомшартып ҡуйыу рәүешендә була. «Батша менән һабансы» әкиәтендә батша һабансы менән йомаҡ формаһында һөйләшә. Вәзир шул һөйләшеүгә шаһит була. Тик һүҙ айышына төшөнә алмай. Шуның менән үҙенең отҡор түгеллеген күрһәтеп, бер хур була: язаға тарттырыу менән ҡурҡытып, батша шул йомаҡ-диалогтың мәғәнәһен әйтеүҙе талап иткәс, уны һабансынан йөк-йөк алтын-көмөшкә һатып алып, үҙе лә һиҙмәҫтән, һуңғы йомаҡ талап иткән яуапты «башҡарып күрһәтеүсе» хәленә төшә. Шулай ул үҙ иҫәрлеген үҙе фашлай. Тағы бер мәсхәрәгә ҡала.

Аҡыллылыҡ, геройҙың һүҙенән бик, эш-хәрәкәте аша асыла. Эш-хәрәкәттең һөҙөмтәһенә юлыҡмайынса, антагонист уның асылы хаҡында бер ни ҙә белмәй. «Ҡурай тураһында әкиәт»тә (АТ 782) әсә, үҙенең һөтөнә баҫып бешерелгән өшәне батшаға ашаттырып, уны, йола буйынса, үҙенең улы хисабына индереүе арҡаһында, үз улын үлемдән ҡурсалап алып ҡала.

Аҡыллылығының асылыу үҙенсәлеге йәһәтенән *әкиәт зирәктәренең дүрт тибы* айырым-асыҡ күҙгә ташлана. Шартлы рәүештә, *зирәктәрҙең беренсе тибына*, герой ҡуҙғалғанға тиклем

ук, уға үҙ белдеге (инициативаһы) менән файҙалы кәңәш биреүсе ҡарай («Өс ауыҙ һүҙ», АТ 910В; «Ата васыяты», АТ 915А; «Ата һүҙе» АТ 911* + 893; «Әсә һүҙе», өлөшләтә АТ 911* + 893). Герой кәңәш һорап мөрәжәғәт иткәндә, аҡыллы кәңәш биреүсене лә ошо типҡа индерергә була («Яҡшы һүҙ – йән аҙығы», АТ 910В; «Аҡыллы ҡарт менән иҫәр батша», АТ 981; «Лоҡман Хәким», *654С*). Һорағанда ғына, кәңәш биреләме; әллә һорамағандаламы, әкиәттең йөкмәткеһе өсөн бының артыҡ әһәмиәте юҡ. Аҡыл эйәһен герой ҡайҙа, ҡасан (төйөнләнеүҙәме, әллә ваҡиға үҫешендәме), нисә мәртәбә осрата, былары хаҡында ла шуны уҡ әйтергә була. Иң мөһиме – шул кәңәштең геройҙы уйға һалырлыҡ, уны уйҙан әшкә ҡыбырлатырлыҡ булыуында. Геройҙың нисек «ҡыбырлауы» иһә бирелгән кәңәштең табышмаҡлылыҡ, йәшерен мәғәнәлелек кимәленә бәйләнгән. Хикмәт шунда, кәңәш мәҡәл рәүешендә лә («Өс ауыҙ һүҙ»: «Йәнең кемде һөйһә, шул матур», «Яҡшылыҡҡа итмә яманлыҡ», «Боҫло ашты бора баҫма»; «Яҡшы һүҙ – йән аҙығы», АТ 920В; «Буръяҡ һыуға кермә», «Бөркөт һауалаған ерҙә ем булыр», «Ашыҡҡан – ашҡа бешкән»), афоризмһыҙ ғына ла («Ата васыяты», АТ 910; «Урамға таяҡһыҙ сыҡма, атыңды кешегә йомош итеп бирмә, бисәңде үҙеңдән башҡа ҡунаҡҡа ебәрмә». «Әсә һүҙе», яҡынса АТ 911* 893: «Байҙар менән ҡулдашаһың ҡулдашыуға! Ағаларыңа яҡын бул»).

Ике осраҡта ла уртаҡ бер законлылыҡ күҙәтелә: кәңәштә билдәлелек билдәһеҙлектә бирелә. Кәңәштең аҡыллы һүҙ булыуы билдәле. Шулай булмай, уны әллә кем түгел, аҡһаҡал һата йә атай, йә әсәй әйтә бит. Ҡасан, ҡайһы осраҡта, нисек уны тоторға кәрәк икәне иһә билдәһеҙ. Шул уртаҡлыҡ та еткән кеүек. Әммә әкиәт өсөн кәңәштең әйтелеү рәүеше формаль күренеш кенә түгел. Нисек кенә гәжәп тойолмаһын, сюжеттың хәл ителеү үҙенсәлеге лә, геройҙың характерының булмышы ла, йөкмәткенең мәғәнәлелеге лә күп йәһәттән ошо фактор менән билдәләнә. Кәңәш мәҡәл рәүешендә әйтелә ҡалһа, әкиәт геройы уны һүҙмә-һүҙ үтәй, ҡәҙимге телмәр рәүешендә булһа, уның хаҡмы, түгелме икәнен тикшереү өсөн, тәжрибә яһап ҡарай. «Өс ауыҙ һүҙ» әкиәтенең геройы: «Ике ҡыҙымдың ҡайһыһы матур?» – тип һораған ҡартҡа көн элгәре аҡһаҡалдан тәүҙә һатып алған, «йәнең кемде һөйһә, шул матур» тигән һүҙҙе әйтә – үлемдән ҡотола, сөнки ҡарт ҡутырлы ҡыҙын яратҡан, шуға ла һорауына кем ул теләмәгән яуапты бирә, шуның башын ҡыйып ултырыр булған.

Халыҡ аңында мәҡәлдәр шикләнерлек урыны булмаған, яҙылмаған закон, аксиома тигән ҡараш йәшәй. Шул ҡараш, күрәһең, әкиәткә лә күскән. Шуға ла герой уға ревизия яһап тормай. Ә бына «Ата васыяты»нда кәңәштә «аксиома»лыҡ юҡ. Әммә «ни өсөн?» һорауына урын бар. Ана шул геройҙы уйға һала ла инде. Шуға ла ул, кәңәште киреһенсә тотоп, уның асылын тикшереп ҡарай.

Шул уҡ ваҡытта зирәктәр тураһындағы новеллистик әкиәттәр аҡыллы һүҙҙең догма булырға тейеш түгеллеген дә иҫкәрткәндәй итә. Мәҡәл-кәңәштәр йыш ҡына йомаҡҡа яҡын күсмә мәғәнәле була. «Васыят» әкиәтендә кәңәш, ҡарамаҡҡа, мәҡәл рәүешендә түгел, әммә бер нәмәне әйтеп, икенсене күҙ алдында тотоу йәһәтенән йомаҡҡа тартым мәҡәлсә. Үлер сағында ҡарт бер улына: «Улым, һин ауыл һайын һарай һал», – ти, икенсеһенә: «Аҙна һайын кәләш ал», – ти, өсөнсөһөнә: «Ерҙе һөргәс, баш-баштарын ҡондоҙ ҡауырһыны менән ҡаймалап ҡуй», – ти. Кәңәш ошо рәүешле бирелһә, ғәҙәттә, әкиәткә уны аңлатыусы ҡарт образы индерелә. Кәңәш ни рәүешле генә бирелмәһен, ваҡиғаның үҙендә ҡатнашмаған, әммә герой юлығыр ситуацияны алдан күҙаллаусы аҡыл эйәләре хаҡындағы новеллистик әкиәттәр, тотош алғанда, бер маҡсатҡа хеҙмәт итә. Улар үҙ аллы фекер йөрөтөргә, кеше һүҙенә һуҡыр рәүештә эйәрмәҫкә кәрәк икәнен иҫкәртә.

*Әкиәт зирәктәренең икенсе тибы* тәүгеһенән шуның менән айырыла, ул, беренсенән, үҙе төп герой вазифаһын атҡара; икенсенән, эҙәрләүсе биргән мәсьәләне, логик фекер йөрөтөп, сисә һәм ике аралағы сәкәләште үҙ файҙаһына хәл итә. «Өс икмәк» (*655*) әкиәтенең геройына батша һынау үткәрә. Герой, әле әйткән ысулды ҡулланып, батша аҫыл таш тип иҫәпләгәндең ябай быяла, шәп ат тигәндең ишәктән дә алама мал, ә уның үҙенең батша нәҫеленән түгел, икмәк бешереүсе затынан икәнен иҫбатлап, язанан ҡотола. «Бабай, Хызыр, батша» (*656*), «Һанай белеүсе өс ағай» (АТ 655А) кеүек әкиәттәрҙең дә геройы зирәктәрҙең икенсе тибына ҡарай.

*Әкиәт зирәгенең өсөнсө тибы* – «Фәүкинур», «Аҡыллы ҡарт» (АТ 875В + 875Е*) әкиәттәренең төп геройы булған аҡыллы ҡыҙ йөҙөндә һынлана. Батшаның тәкәһен бәрәсләтергә, бер тиренән тун тегергә; юлдан да килмәһен, юлһыҙ ҙа килмәһен, бүләкле лә килмәһен, бүләкһеҙ ҙә килмәһен, тип аҡыл етмәҫлек мәсьәләләр ҡуйыуына, ҡыҙ шул уҡ принципта яуап бирә: батша, атайың ҡайҙа, тиһә, бала килтерә, тип яуап бирә; бер тиренән тун тегергә ҡушһа, бер ҡарыш сыбыҡ менән буйыңды үлсә, ти; батша янына кәзә менеп, юл ҡырлап бара, ҡулындағы турғайҙы уға бүләк итергә һона ла – осора ла ебәрә.

«Ағзам» (*92*), «Йылҡысыбай» (АТ 889) кеүек әкиәттәрҙең геройын *әкиәт зирәгенең дүртенсе тибы* иҫәбенә индерергә була. Уның үҙенсәлеге шунда, ул үҙен, алдаша белмәүе, намыҫлылығы арҡаһында, теләһә ниндәй сетерекле ситуациянан да еңел сыға ала торған кеше итеп таныта.

Һөнәргә, ғилемгә эйә булыу ҙа новеллистик әкиәттәрҙә аҡыллылыҡ, зирәклек тип баһалана («Әминбәк», «Шакир», АТ 654В*; «Әлмирйән», яҡынса АТ 922А). «Өс ауыҙ һүҙ», «Ата васыяты» кеүек әкиәттәрҙә герой аҡыллы һүҙҙең мәғәнәһенә төшөнөүҙә ҡыйынлыҡ кисерһә, был төркөмгәсә ҡараған әкиәттәрҙеке

һөнәр, гилем алыу юлында ауырлыҡтар күрә. Шуныһы иғтибарҙы йәлеп итә: сюжет тибы бер үк булһа ла, төрлө халыҡта был ауырлыҡ төрлөсәрәк асыла. АТ 654 В тибындағы монгол әкиәтендә (57, 36–37) бик күп йылҡы өйөрөнә хужа булған байға, улын уҡытыу өсөн, бер аҙ мал бүлергә тура килһә, шул уҡ сюжетҡа ҡоролған «Әминбәк» тигән башҡорт әкиәтенең геройы ата-әсәһенән һунғы малын, һуңғы тинен тотона. Шулай итеп, башҡорт әкиәтенә социаль мотив үтеп инә. Әммә бер михнәттең бер рәхәте тигәндәй, ҡыйын үҙләштерелгән һөнәр, гилем, аҙаҡ геройға бөтән ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға ярҙам итә.

*Зирәктәрҙең айырым бер тибы* Ерәнсә сәсән йөҙөндә һынланыш тапҡан. Уның бер үҙенсәлеге шунда: ул бығa тиклем телгә алынған әкиәт зирәктәренә хас һыҙаттарҙы бер үҙендә дөйөмләштерә. Әммә уларҙан айырмалы рәүештә ул бер үк мәлдә Ейәнсура, Күгәрсен райондарында нығ таралған риүәйәттәрҙең (мәҫәлән, Ерәнсә ҡәбере, Ерәнсә тирәге, Бәндәбикә кәшәнәһе тураһындағы риүәйәттәрҙән), көләмәс һәм ҡобайырҙар геройы ла. Ерәнсә сәсәндең исеме ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, ҡырғыҙ даирәһендә лә киң билдәле. Уның хаҡындағы сюжеттарҙың параллелдәре үзбәктәрҙә – Алишер Науаи, төрөкмәндәрҙә – Мирали исемдәренә бәйле латифа (көләмәс) һәм әкиәттәр рәүешендә таралған. Ерәнсә сәсән әрмәндең Пул-Пугы менән Һиндостан батшаһы Экбәрҙең баш кәңәшсеһе Бирбалды хәтерләтә.

Ерәнсә сәсән сюжет ситуацияларында бай йә хан менән сәкәләшә. Хакимдарҙы төп башына ултырта, йәберләнеүсене ҡурсалай. Төрлө ситуацияға, мөхиткә яраҡлаштырып, әкиәтселәр уны йә көтөүсе малай («Торахан менән Йәнәбәхан һәм Ерәнсә сәсән», *875Е** – *921* + 920 С + 875В + *927*** + *2890*), йә халыҡҡа итәғәтле абруйлы йомарт ир («Ерәнсә сәсән менән хан») йә вәзир («Ерәнсә сәсән хикмәттәре», *1533* + *921 С* + *921Н* + 1362А* + *921** + АТ 920С + өлөшләтә АТ 922А һ. б.) тип күрһәтә. Социаль яҡтан кем сифатында ла, Ерәнсә, төрлө ситуацияла (хатта бер үк әҫәрҙә лә) төрлө-төрлө роль атҡара: бер осраҡта, ул язаға тартылыуға хөкөм ителеүсенең ғәйепһеҙ булыуын иҫбат итеүсе ғәҙел судья («Ерәнсә сәсән хикмәттәре»), икенсе ҡараһаң, ҡарт менән уның ҡыҙын, зирәклектә һынап ҡарап, кәләшлеккә ҡыҙ һайлаусы егет, йә булмаһа, ҡатынына дәғүәләшеүсе хакимды хур итеп, ғаиләһен хурларға юл ҡуймаусы намыҫсан ир («Торахан, Йәнәбәхан һәм Ерәнсә сәсән», «Ерәнсә сәсән менән хан»), тағы бер күрешеүҙә ике хан араһындағы ыҙғышты бер үҙе хәл итеп, илде ҡан ҡойошло яуҙан ҡурсалап алып ҡалыусы оҫта дипломат («Торахан, Йәнәбәхан һәм Ерәнсә сәсән»). Былар бөтәһе лә уның ил эсендә зирәклектә, ғәҙеллектә бер кеше булыуын раҫлай һәм уны шулай танырға мәжбүр итә. Шуға сәсән тип йөрөтөлөүе лә бушҡа түгел. Ә сәсән тип халыҡта:

*Ҡылыстан үткер, яу ҡыйған,*
*Ҡан сығармай, яу һуйған,*
*Ил сигендә дан алған,*
*Ил тышында һан алған,*
*Ханға ҡаршы уҡ булған,*
*Бейгә ҡаршы ут булған*

кешегә генә әйтәләр (20, 135).

Әммә новеллистик әкиәттәрҙә Ерәнсә сәсәндең шундай бер үҙенсәлеге лә асыла: әйтерһең дә, уның йөҙөндә ике кеше сығыш яһай. Йәш сағында берәүҙең дә кәңәшенә мохтажлыҡ күрмәй, үҙе белеп, үҙе ҡуйып, ниндәй ҡыйын ситуацияла ла юғалып ҡалмай. Өйләнеүе була – алыштыралармы ни: башына бәлә төштөмө – юғалып ҡала, бошона башлай. Шул саҡ уны ҡатыны йыуата, аҡыллы кәңәше менән уға ярҙамға килә. Ерәнсә, бары уның кәңәшен тотҡан сүрәттә генә, хаким ҡуйған бурыстарҙың мәғәнәһеҙлеген фаш итә, еңеүсе булып сыға («Ерәнсә сәсән хикмәттәре», «Торахан менән Йәнәбәхан һәм Ерәнсә сәсән», «Ерәнсә сәсән менән хан»). Ҡатынының һүҙе менән иҫәпләшмәгән хәлдә, Ерәнсә уңайһыҙ хәлгә ҡала («Ерәнсә батыр», АТ 920 С + 875В; «Торахан менән Йәнәбәхан һәм Ерәнсә сәсән). Ә ҡатыны ҡатнашмаған ситуацияларҙа үҙен әүәлгесә зирәк итеп күрһәтә. Тимәк, өйләнгәс тә, зирәклеген юғалтмай Ерәнсә, бары үҙенә тиң күреп алған үтә теремек, өлгөр кәләше менән сағыштырғанда ғына, һүлпәнләнгәндәй тойола. Ә ҡатындың, үҙен зирәктәрҙең-зирәге тип таныҡҡан иренә ҡарағанда ла, аҡылға теремек һәм өлгөр итеп күрһәтелеүенең сәбәбе бар. Сәбәп тигәндә, был урында новеллистик әкиәттәр өсөн яҙылмаған бер ҡанунды күҙ уңында тотабыҙ. Ул ҡанун буйынса, төп герой йәки уның иң яҡын партнеры сифатында ҡатын-ҡыҙ кеше күрһәтелгән сүрәттә, уны, ғөмүмән, интеллектуаль һәм әхлаҡи яҡтан камиллыҡта ир кешенән өҫтөн итеп һүрәтләйҙәр. Беҙгә таныш «Фәүҡинур» әкиәтенең героиняһы зирәклектә батша тиклем батшаға ал бирмәй. Батша ҡатыны булыуға өлгәшеүе – шул камиллығын баһалау мәғәнәһенә эйә. Яңы шарттарҙа иһә уның үҙаллылыҡ, тәүәккәллек кеүек сифаттары асыла. Батша үҙе өйҙә юҡта бер ниндәй хөкөм ҡылмаҫҡа әйтһә лә, бер бәхәсте аҡыллы хәл итә Фәүҡинур. Әкиәттең эске ҡануны шулай: кем тыйғанды тотмай, шул тейешле язаһын ала. Батша ла Фәүҡинурҙы айырырға итә. Әммә: «Нимә теләйһең, шуны ал», – тип уға һайлау мөмкинлеге бирә. Фәүҡинур иһә батшаның үҙен генә һайлай. Шулай итеп әкиәт уны ярата белеүсе, хәләлен генә тиңһенеүсе, уға тоғро ҡатын кимәленә күтәрә. «Өс таҙ менән бер аҡыллы ҡыҙ» (АТ 921), «Алтмышта ҡыҙ һораҡҡан хан» (*921*) әкиәттәрендә аҡыллы ҡыҙ үҙен кәләшлеккә алырға итеүселәрҙе тиңһенмәй һәм тапҡыр яуаптары менән уларҙы ниәттәренән баш тартырға мәжбүр итә.

Ҡатын-ҡыҙҙы шулай интеллектуаль һәм рухи, әхлаҡи яҡтан камил, хатта ошо йәһәттән ир партнерынан да өҫтөн итеп күрһәтеүҙең тамыры матриархат дәүеренә хас әсәлек башланғысын олоҡлау традицияһына барып тоташа. Феодаль-патриархаль шарттарҙа ул, әлбиттә, яңы интерпретация алған: ҡатын-ҡыҙҙың ирҙәрҙән кәм түгеллеге идеяһын үткәреүсе художестволы сараға әүерелгән. Тимәк, ҡатыны менән йәнәш күрһәтелгәндә, Ерәнсәнең зирәклеге кәмһетелмәй. Киреһенсә, зирәктәрҙең-зирәге тип танылған кешенең үҙ ҡатынының зирәклеге менән иҫәпләшеүе синфи йәмғиәттә лә әсәлек башланғысы һанланырға тейеш тигән идеяны асыуға хеҙмәт итә һәм унын абруйлы аҡыл эйәһе булыуын тағы бер иҫбатлай ғына.

2. *Мөхәббәт һәм ғаилә тоғролоғо тураһындағы әкиәттәр.* Кешелекте борон-борондан йәмғиәттең тәүге ячейкаһы, ғаилә проблемаһы, ир менән ҡатын мөнәсәбәтен юлға һалыу мәсьәләһе борсой килгән. Шуға күрә лә фольклорҙа никах һәм ғаилә темаһы мөһим урын алған. Тормош-көнкүреш әкиәттәрендә ул *ике юҫыҡта*, бер-береһен яратышыусыларҙың үҙ-ара мөнәсәбәте һәм ғаилә тоғролоғо юҫығында, яҡтыртыла. Геройҙың әүҙемлек кимәле ошо ике факторға бәйле. Беренсе осраҡта егет актив, икенсеһендә – ҡатын. Шул факторҙар һүҙ барған әкиәттәр төркөмөнөң идея йүнәлешен дә билдәләй.

Һүҙ мөхәббәт тигән илаһи тойғо хаҡында барһа ла, әкиәт хис, кисереш, уйланыуҙарға туҡталып тормай. Егет менән ҡыҙ яратышыуы хаҡында, ғәҙәттә «Борон-борон заманда бер егет менән ҡыҙ бер-береһен бик яратып йөрөгәндәр» («Фәҡир кейәү») тибындағы бер-ике һөйләм генә әйтелә. Йыш ҡына унын ла булмай, сөнки әкиәт өсөн туранан-тура психологизациялау мөһим түгел. Унын ҡарауы яратышыусыларҙың эш ҡылыҡтарын, ҡауышыу юлында тыуған ҡаршылыҡтарҙы үтеүҙәре ентекле һүрәтләнә, һәм шул уларҙың хис-тойғоларының кимәле хаҡында төшөнсә тыуҙыра. Ә ҡаршылыҡтар тормоштағыса төрлө яҡтан төрлө кимәлдә бирелә. Егеттең ярлы балаһы, ҡыҙҙың бай балаһы булыуы ла («Фәҡир кейәү», *875*), яратышыусы йәштәр араһына бай килеп инеүе лә («Кашиҡәрип менән Маһимөһөр», АТ 974), һылыу ҡыҙға төштә ғашиҡ булып, өндә уны эҙләп ыҙа сигеү ҙә («Төштә ғашиҡ булған», «Буйҙаҡ батшаның төштә ғашиҡ булғаны, өндә кәләш алғаны», АТ 725), башҡаһы ла – ҡаршылыҡ. «Һалдат тураһында әкиәт» (АТ 854), «Таҙҙың һалдат булғаны, шунан батша булғаны» (СУС-855*) ише әкиәттәрҙең геройына бер кем дә үтеп инә алмаҫлыҡ тип иҫәпләнгән нығытмаға инеү ҡыйынлығын үтергә тура килә.

Генетик яҡтан ҡарағанда, һүҙ барған әкиәттәр бер кимәлдә тормайҙар, әлбиттә. Уларҙың күпселегендә синфи йәмғиәт билдәләре (синфи йәмғиәткә хас этнографик мәғлүмәттәр конфликт характеры, әҙәби әҫәргә яҡынлыҡ) өҫтөнлөк итә. Әммә улар – тышҡы күренеш, һуңғы дәүер өҫтәмәһе булыуы ихтимал. Һәр

хәлдә, ҡарамаҡҡа ярлы менән бай араһындағы ҡаршылыҡҡа ҡоролғандай тойолған «Фәҡир кейәү» әкиәтенең (кейәү егет ярлы, бай уны хушһынмай, ҡыҙын бик биргеһе килмәй, шуға уны ауыр һынауға дусар иттерә) нигеҙендә иһә матриархатҡа хас йола ята. Ул осорҙа кейәүҙе никах алды һынауҙары аша үткәреү фарыз булған. Ҡыҙ йортона килгәндә, егеттән йәйәү ҙә килмәҫкә, һыбай ҙа килмәҫкә талап итеүҙә, уны ҡышҡы сатлама һыуҡта яғылмаған өйгә бикләп ҡуйыуҙа, әле генә мейестән алынған эҫе икмәкте телдертеүҙә, асылда, шул боронғо никах алды һынауының саҡҡылары сағыла, тип уйларға ерлек бар. Һәр йола һәр кемсәнә өсөн фарыз тип иҫәпләгән замандар үтеп китеп, синфи ҡаршылыҡтар көсәйә башлағас, никах алды һынауын әкиәт түбән ҡатлам кешеһенең бәхет юлында синфи тигеҙһеҙлек тыуҙырған кәртә кеүек аңлата башлаған. Шуның кеүек, башҡа новеллистик әкиәттәрҙәге ғашиҡ егеттең алдында тыуған ҡаршылыҡтарҙы ла төптән уйлағанда, шул боронғо һынау йолаһының тора-бара яңы интерпретация алыуы һөҙөмтәһе тип ҡарарға булалыр. Әйткәндәй, ҡайһы бер әкиәттәрҙәге ҡаршылыҡ мотивында, боронғолоҡтоң эҙемтәләре «күҙгә бәрелеп» үк тора. Тарихи яҡтан ҡарағанда, еткән ҡыҙҙы әҙәм заты үтеп инмәҫ таш һарайҙа тотоу мотивы борон батша балаларын кеше-ҡара күҙенән айырыу (изоляциялау) йолаһына барып тоташа (65, 43–45). «Һалдат тураһында әкиәт»тә таш йорттоң ун дүртенсе ҡатындағы балконда торған батша ҡыҙына һоҡланған, икенсе төрлө әйткәндә, бер күреүҙә ғашиҡ булған һалдатҡа хаким шундай шарт ҡуя: «Ҡырҡ көн эсендә, һиҙҙермәй генә минең өйөмә (таш нығытмаға. – *Ә.С.*) кер. Керһәң – ҡыҙым һинеке, керә алмаһаң, башыңдан яҙырһың!»

Тарихи нигеҙҙәре нисек булғанда ла, мөхәббәт хаҡындағы тормош-көнкүреш әкиәтенең геройы үҙенең алдына ҡуйылған бөтә төр ҡаршылыҡтарҙы еңеп сыға. Шуның менән үҙенең хистәренең сафлығын да, көсөн дә иҫбатлай. Сюжет үҙенсәлегендәге, конфликттың хәл ителешендәге айырмалыҡтарына ҡарамаҫтан, был төркөмсәгә тағы шундай бер билдә уртаҡ: улар һәр кемдең шәхси бәхеткә, үҙе тиңе менән ҡауышырға хаҡлы булыуын раҫлай. Ә был идея дөйөм кешелек әһәмиәтенә эйә.

Әле генә ҡаралған төркөмсәләге кеүек үк, мөхәббәт темаһын ғаилә юҫығында яҡтыртҡан новеллистик әкиәттәрҙә лә башта егет кеше бик актив итеп күрһәтә үҙен. «Ғафи улы менән Сафи улы» (АТ 882А + өлөшләтә 881*) әкиәтенең геройы, йолаһын йола итеп, башта, унда сабып, бында сабып, ҡыҙ күҙләй. «Хәйерсе ҡыҙы» (яҡынса АТ 880 + өлөшләтә 882А) тигәненеке лә кәләшлеккә ҡыҙҙы үҙе һайлай: уҡ ата ла, уғы кем йортона төшһә, шуның ҡыҙын алмаҡ була. Ике егет тә, үҙҙәре бай булһа ла, ярлы ҡыҙы менән никахлаша. Социаль тигеҙһеҙлек сиген аша атлауҙары – уларҙың да мөхәббәтенең көслө булыуына ишара. Әммә, егет менән ҡыҙ мөхәббәте хаҡындағы әкиәттәрҙең

геройҙарынан айырмалы рәүештә, был төркөмсәгә ингәндәренекенең активлығы ошоноң менән сикләнә лә ҡуя.

Мөхәббәт темаһын ғаилә төҙөүгә ынтылыш юҫығында яҡтыртҡан әкиәттәрҙә – егет кеше, никахлашҡандан һуңғы дәүер юҫығында яҡтыртҡандарында ҡатын һынауҙарға дусар була. Ике осраҡта ла һынау, һыналыу сюжет үҙәген хасил итә.

Героиняның һынауҙарға юлығыуына, формаль яҡтан ҡарағанда, ҡатын тоғролоғона бәхәс («Ғафи улы менән Сафи улы», «Хәйерсе ҡыҙы») йә ире өйҙә юҡ ҡатынын аҙғынлыҡҡа ылыҡтырырға маташыу («Батша булған батша ҡыҙы менән батша малайы», «Ғәзиз», АТ 881) һөҙөмтәһендә, антагонист ауыҙынан сыҡҡан нахаҡ һүҙ сәбәпсе була. Әммә, кәләш алғансы, бик әүҙем булып та, шул ялған һүҙҙе дөрөҫкә алып, ҡатынын битәрләгән ирҙең аҡылына килмәүе, ятраҡҡан ҡатынын табып, ғаиләне яңынан тергеҙергә аҙым яһамауы, улай ғына ла түгел, хатта апатияға бирелеүе мәсьәләгә икенсе яҡтан ҡарарға ла мәжбүр итә. Беҙҙең уйыбыҙса, бында ғаилә төҙөүҙә инициативаны үҙ ҡулына алыуға өлгәшкән ир үҙенә тәғәйен мөмкинлекте әлегә тулыһынса файҙаланыуға өлгәшә алмаған дәүер үҙенсәлекле сағылыш алған. Тимәк, был төркөмсәлә лә һүнеүгә табан барған матриархат традициялары менән яңы ғына һөжүмгә күскән патриархаттың үҙ-ара мөнәсәбәте, атап әйткәндә, патриархаттың, бер йүнәлештә ярайһы уңышҡа өлгәшһә лә, икенсе йүнәлештәрҙә матриархат алдында бирешеп, ҡаушап ҡалғылаған, һәм сигенгеләгән осоро художестволы сағылыш тапҡан. Бынан иһә шундай һығымтаға килеүе ҡыйын түгел. Ғаилә тоғролоғо тураһындағы новеллистик әкиәттәрҙең үҙәгендәге мотив бик боронғо дәүерҙәргә барып тоташа. Шуға ла ике йәш кешенең никахҡа тиклемге мөнәсәбәттәре тураһындағы әкиәттәрҙән бүленеп сыҡҡан булыуы ла ихтимал. Ҡатын алғанға тиклем «Ғафи улы менән Сафи улы» ише әкиәттәрҙең геройының инициативалы булыуы ла ҡеүәтләй был фекерҙе.

Һүҙ барған әкиәттәр төркөмөнә инеүсе сюжеттарҙың боронғолоғона шул да дәлил. Эҙәрләнә башлағас, героиня ирҙәр кейеме кейә һалып ала. Шул уны ят ирҙәрҙең бәйләнеүенән ҡотҡара. Баштан уҡ ирҙәр кейеме кейгәне ят ирҙәр эҙәрләүенә бөтөнләй ҙә дусар булмай. «Ирҙәр кейеме кейеү» мотивы художестволы вазифа йәһәтенән «Ала ҡарға» (АТ –; 14, № 54), «Ҡарамулла» (АТ 313А; 14, № 60) ише тылсымлы әкиәт геройының эҙәрләнеүселәрҙең әүермәнлек («киәфәт үҙгәртеү») юлы менән ҡотолоуын хәтерләтә. Был оҡшашлыҡ ике мотивтың генетик яҡтан тамырҙаш булыуынан килә. Әммә йөкмәтке йәһәтенән улар айырыла. Тылсымлы әкиәттә киәфәт үҙгәртеү – йәнде һаҡлау сараһы булып ҡына аңлашыла. «Ирҙәр кейеме кейеү» мотивына ла был идея ят түгел. Әммә новеллистик әкиәттә әхлаҡ проблемаһы үҙәккәрәк күсә: ирҙәр кейеме кейеү – нахаҡтан рәнйетелгән ҡатындың ғаиләгә тоғролоҡ һаҡлау

өсөн, бөтә сараларҙы күреүен, намыҫлылығын асыу алымы ла. Сараһыҙҙан ситкә киткәс, башҡа һынау ғазаптарын да ул бары ошо маҡсат хаҡына кисерә. Шулай тоғролоҡ һаҡлай белеү бәрәбәренә ире менән яңынан ҡауыша. Әкиәт бына шулай ғаилә тоғролоғона мәҙхиәгә әүерелә.

«Ун ике биғлый» (АТ –), «Ышаныслы ҡатын» (АТ 1350), «Һалдат менән батша ҡатыны» (СУС 983*), «Үгәй әсә, ҡырҡ вәзир менән мулла» (АТ 875), «Ҡатын хәйләһе» (АТ 1410) ише әкиәттәрҙә лә ир – мәшәү, ҡатын кеше бик әүҙем, бик инициативалы, тик кире яҡҡа, аҙғынлыҡ яғына. Әкиәт шуны фашлай ҙа. Асылда, бында ла ғаилә тоғролоғо, сафлыҡ проблемаһы үҙәктә тора. Бындай әкиәттәр ҙә ғаилә бөтөнлөгөн һаҡлауҙа ҡатын кешенең хәл иткес роль уйнауын һыҙыҡ өҫтөнә ала.

Шулай итеп, мөхәббәт, ғаилә тоғролоғо, намыҫлылыҡ идеяһы әкиәттәрҙә симпатия менән ыңғай күренештәрҙе һүрәтләү аша ғына түгел, намыҫһыҙлыҡты, хыянатты фашлау ярҙамында ла үткәрелә.

3. *Үтә үҙ һүҙле ҡатындар хаҡындағы әкиәттәр.* Был төркөмгә ирле-ҡатынлыларҙың психологик яҡтан һыйышыу-һыйышмау проблемаһы үҙәк урынды алған новеллистик әкиәттәр инә. Әлегәсә ҡарап сығылған төркөмдәргә ингән әкиәттәрҙә, башта үҙен төп герой сифатында таныткан ирҙе ситкәрәк ҡыҫырыҡлап, алғы планға ҡатын сығыусан булһа, улар менән сағыштырғанда, тарафта ҡаралаһы әкиәттәрҙә ир менән ҡатын ролдәре менән алмашышҡан кеүек: ир кеше баштан уҡ инициативаны үҙ ҡулына эләктерә лә аҡыл эйәһе урынын ала, ә ҡатын икенсел планға күсә, тәьҫир итеү объектына әүерелә. Шуға күрә лә Ю. М. Соколов, Е. Ф. Тарасенкова, А. А. Глонти, В. Я. Пропп, В. П. Аникин, Ю. И. Юдин һ. б. тикшеренеүселәрҙең бындай әкиәттәрҙе үҙәк герой итеп кире холоҡло ҡатын һынландырылған әкиәттәр рәтенә ҡуйыуҙары менән һис тә килешеп булмай. В. Я. Пропптың АТ 900 һәм 901А тибындағы сюжеттарға нигеҙләнгән (башҡорттарҙа улар «Наҙлы ҡыҙ», «Халиҡ ҡыҙы Хәҙисә» ише) әкиәттәр генетик яҡтан тылсымлы әкиәттәр менән бәйләнгән тигән ҡарашы ла бәхәсле.

Үтә үҙ һүҙле ҡатындар хаҡындағы әкиәттәр, үҙҙәренең идея йүнәлеше, йөкмәткеһе буйынса, логик яҡтан үҙ-ара тығыҙ бәйләнештә торған ике төркөмсә хасил итә. Улар бер-береһенән ир кешенең үтә үҙ һүҙле ҡатындың холҡон төҙәтеү буйынса эш күрә башлау ваҡыты, әүҙемлек кимәле һәм никахта тороу дәүеренең оҙайлылығы менән айырыла, сөнки тап шул ваҡыт факторы менән ир кешенең әүҙемлек кимәле ул ҡулланған саралар биргән һөҙөмтәнең сифатын билдәләй. Ошо принципты төп үлсәм итеп алған, беренсе төркөмсәгә «Наҙлы ҡыҙ», «Халиҡ ҡыҙы Хәҙисә» ише әкиәттәрҙе индерергә була. Уларҙың төп геройы, йәш егет, белә-күрә, үҙ һүҙле ҡыҙға өйләнә. Хикмәт

ана шунда ла инде. Тимәк, егет үҙ көсөнә ышана. Быныһы – бер. Икенсенән, башҡаға уның күңеле ятмай, тимәк, егет шул ҡыҙҙы ғына ярата. Был һығымтаны шул да ҡеүәтләй: 1) «Халиҡ ҡыҙы Хәҙисә» тибындағы әкиәттәрҙә үҙһүҙлелеге менән яманаты сыҡҡан ҡыҙҙы кәләшлеккә алыу уйынан егетте үҙ әсәһе, хатта шул ҡыҙҙың атаһы ла кире күндерергә тырыша, уға өйләнмәҫкә кәңәш бирә; 2) «Наҙлы ҡыҙ» ишеләрендә, үҙен әллә кемгә ҡуйып, ҡыҙ егетте битәрләй. Әммә егет ун йылдан һуң да ниәтенән ҡайтмай. Ике осраҡта ла егет үҙ һүҙен һүҙ итә. Иң мөһиме шул – ул белә-күрә алған үҙ һүҙле кәләшен, ипһапҡа килтереп, уны тулыһынса үҙ идеалына еткереү өсөн, тәрбиә эшенә тәүге көндән үк тотона һәм ыңғай һөҙөмтәгә ирешә.

Икенсе төркөмсәгә ҡараған әкиәттәрҙә иһә үҙһүҙлелек никахлы хәлендә байтаҡ йәшәгән, тимәк, инде характеры формалашҡан ҡатындың төп һыҙатына әүерелгән. Ул ҡатындың ни тиклем нығ үҙ һүҙле булыуы тыңлаусы күҙ алдына килтерерлек итеп тасуирлана: үҙ һүҙле ҡатындан хатта дейеү пәрейе ҡурҡып ҡаса. Үҙһүҙлелектең, ғөмүмән, ни тиклем яман икәнен асыу өсөн дә, шундай уҡ принцип менән эш итә әкиәт: һыу төбөнә китеп барғанда ла, ҡатын үҙ һүҙен бирмәй, ҡулын күтәреп, бармаҡтарын ҡайсылата. Йәнәһе, үләнде салғы менән сабалар, тип һин яңылыш һөйләйһең, уны ҡайсы менән киҫәләр.

Һуңғы ике деталдә ирҙең кемлегенә лә ишара бар. Ғүмер буйы шул ҡатын менән тороуы уның үтә лә сабыр кеше булыуын да, шул арҡала ҡатынының характерында үҙһүҙлелек һыҙатының нығыныуына үҙе сәбәпсе икәнен дә аңларға булыша. Тап бына шуға ла уны әҙәм рәтенә килтерергә һуңлап тотоноуы – бушҡа көсәргәнеү генә булып сыға («Яман ҡатындан дейеү пәрейе ҡасҡан», АТ 1365 +1364А + 1164; «Яуыз ҡатын менән дейеү», АТ 1164). Ниәте изге булһа ла, уны ғәмәлгә ашырыу эшенә ирҙең үтә лә һуңлап тотоноуы ыңғай һөҙөмтә бирмәй.

Ошо урында «Күп йәшәгән ни белгән, күп йөрөгән шул белгән» тигән мәҡәл хәтергә килә. «Халиҡ ҡыҙы Хәҙисә», «Наҙлы ҡыҙ» әкиәттәренең геройы ил гиҙгәнме, нисек, ул хаҡта һүҙ юҡ. Әммә үҙ һүҙле кәләшен тәүге көндәрҙән үк тәрбиәләй башлауы әле генә ҡаралған әкиәттәрҙең геройына (ғаиләле булып байтаҡ йәшәгән иргә) ҡарағанда, күпкә тәжрибәле итеп таныта. Тәрбиә ысулын уңышлы һайлауы ла шул турала һөйләй.

«Наҙлы ҡыҙ»ҙа – кейәү булған батша улы «маска кейеү» алымын файҙалана, йәғни үҙенең ысын булмышын йәшерә. Тәүҙә фәҡир егет ҡиәфәтендә килеп, элек үҙен һанға һуҡмаған наҙлы батша ҡыҙын кәләш итеп, ярлы тормошон татытып, донъя көтөргә өйрәткәс кенә, үҙенең ысын йөҙөн аса. «Халиҡ ҡыҙы Хәҙисә» әкиәттәрендә иһә кейәү егет, «фәһемле (күргәҙмә) тәр-

биә» ысулын ҡуллана: ул ике әйтеп тә, бер тыңламаған эте менән атын кәләше алдында үлтерә һуға. Шулай күргәҙмә һабаҡ алған кәләш ылдым ғына донъя көтөп ала ла китә.

«Үтә уҡымышлы» замана кешеһе әкиәттәрҙә һүрәтләнгән тәрбиә сараларын белеп, сәсенә йәбешеүе, уларҙы педагогика менән уртаҡлығы булмауҙа шелтәләүе ихтимал. Шуға күрә шуны ла әйтеп китеү урынлы булыр: әкиәт өсөн (новеллистик әкиәт өсөн бигерәк тә) нимә һүрәтләнеүенән, нимә әйтелеүенән бик, ни әйтергә теләү, асыл мөһим.

«Халиҡ ҡыҙы Хәҙисә» әкиәтенең «Ике ҡабат әйттермә» (59, оп. 61/12, 86) тигән вариантында шундай бер фәһемле эпизод бар. Ҡыҙының, тиҫкәрелекте ташлап, әҙәм рәтенә килеүен күреп, ҡайны ҡарт үҙ һүҙле әбейен дә тәрбиәләп биреүҙе һорағас, кейәүе унан ике сыбыҡ бөктөрөп ҡарай: ҡыуы бөгөлмәй – шарт һына, йәше түңәрәк яһап бөгөлә. Шуның менән, йәш булһа ла, кейәү егет йәшәрен йәшәгән ҡартҡа, кешене йәштән тәрбиәләргә кәрәк, аҙаҡ тәрбиәләүҙең файҙаһы юҡ, тимәксе.

Ҡартайғас ҡына, әбейен тәрбиәләтергә теләгән ҡарт «Яман ҡатындан дейеү пәрейе ҡасҡан», «Яуыз ҡатын менән дейеү» ише әкиәттәрҙәге ирҙе хәтерләтә. Шуға ла кейәү егеттең ҡайныһына биргән һабағы уға ла ҡағыла. Ә инде, ғөмүмән алһаҡ, ул – һәр кемгә лә фәһем бирерлек һабаҡ. Әгәр мәсьәләгә тарихи яҡтан килһәк, был төркөмгә ингән әкиәттәрҙә лә заманында матриархаттың үҙ позицияларын тартҡылаша-тартҡылаша ғына патриархатҡа ҡалдыра барыуын, «Наҙлы ҡыҙ», «Халиҡ ҡыҙы Хәҙисә» ише әкиәттәрҙә патриархат башланғыстарының тантана итеүен, «Яман ҡатындан дейеү пәрейе ҡасҡан», «Яуыз ҡатын менән дейеү» кеүектәрендәге унын ваҡыт-ваҡыт инициативаны юғалтыуын, матриархаттың яңынан һөжүмгә күсеүен төҫмөрләргә лә була.

4. *Ҡыйыу ҡыҙ менән яуыз ҡараҡтар тураһындағы әкиәттәр.* Башҡорт халҡының әкиәт фонында ҡыйыу ҡыҙҙың яуыз ҡараҡтар менән алышы хаҡындағы әкиәттәр АТ 955В («Һуҡтырылған һалдат», 59, оп. 35/4, 115–117), АТ 956А («Ен ҡараҡтары»), АТ 9568 («Ҡырҡ ҡараҡ»), АТ 156 («Аҡ келәт»), АТ 976 («Хәтирә») кеүек күп вариантлы сюжет типтарын үҙ эсенә ала.

Ҡайһы саҡта тикшеренеүселәр (В. М. Ведерникова, (29, 98–99; Л. Ш. Ямалетдинов, 77, 10) яуыз ҡараҡтар тураһындағы әкиәттәрҙе етеҙ бурҙар тураһындағылар менән бер рәткә ҡуя. Улар был әкиәттәрҙең геройҙары ла, структуралары ла бер-береһенә оҡшамауын иҫәпкә алып бөтмәй. Нахаҡтан рәнйетелеүсе ҡыҙҙы һыйындырған («Зариф бай менән Һаҙый бай», АТ 709; 59, оп. 6513, 445–447) тылсымлы әкиәт геройынан, хакимдарҙы, байҙарҙы өклән йөрөгән етеҙ бур тураһындағы сатирик әкиәттәрҙең геройынан («Алдарҙың алтын урлағаны»,

«Ҡасим бур» һ. б.) һәм риүәйәт геройҙары Бейеш, Ишмырҙа, Баяс, Ғәҙибәк, Насирҙарҙан айырмалы рәүештә, әле һүҙ барасаҡ төркөмгә ингән әкиәттәрҙәге яуыз ҡараҡтар байын да, фәҡирен дә, хеҙмәтсене лә, түрәне лә талай, кеше айырмай. Был үҙенсәлек башҡа халыҡтарҙың әкиәттәрендә лә күҙәтелә: татар әкиәтендә байҙың йортон баҫалар (77, № 40), төрөктөкөндә батшаның хазинаһын (78, № 52), рустарҙыҡында поптыҡын (58, № 343) талай. Етмәһә, улар садистарса эш итә: ҡыҙҙарҙы ла («Яңғыҙ ҡыҙ» (59, оп. 10/38, 40–50-се б.), сабыйҙы ла («Һуҡтырылған һалдат») аямай һ. б.

Яуыз ҡараҡтар тураһындағы әкиәттәрҙең килеп сығышы хаҡында төрлө фекер бар: сыуаш фольклорсыһы Е. С. Сидорова уларҙың генезисын – татар-монгол яуы осоро (71, 193), рус фольклорсыһы В. М. Ведерникова – XVIII–XIX быуаттарҙағы ҡасҡындар хәрәкәте (29, 99) менән бәйләй. Дөрөҫөндә, улар, татар фольклорсыһы Л. Ш. Ямалетдинов әйтмешләй, «килеп сығыуҙары яғынан боронғораҡ» (77, 10) күренеш. Халыҡтың мифологик ҡараштары менән әҙме-күпме таныш кеше иғтибар итмәй ҡала алмаҫлыҡ шундай үҙенсәлектәр бар был әкиәттәрҙә. Яуыз ҡараҡтар ҡараңғы төпкөлдә йәшәй, ҡара кәсепкә ҡара төндә генә сыға. Ошо үҙенсәлектәре, мифологик ҡараштар, инаныуҙар буйынса, көн яҡтыһынан ҡурҡыусы ен, шайтан, пәрей кеүек зыянлы мифик заттарҙы (ен ҡараҡтары тип әйтеү ҙә бушҡа түгелдер), ҡыҙ урлауҙары менән шундай уҡ кәсеп менән шөғөлләнеүсе тылсымлы әкиәттәргә хас дейеүҙәрҙе, убырҙарҙы хәтерләтә. Кәсепкә сыҡҡанда, ҡараҡтарҙың мосафир («Ҡырҡ ҡараҡ менән ҡыҙ»), ҡыҙ («Ен ҡараҡтары», баҙарсы «Хәтирә») булып кейенеүҙәре шул зыянлы мифик заттарҙың әүермәнлегенә (үҙ ҡиәфәттәрен үҙгәртә алыуҙарына) оҡшаш. Уларға сихырсы һыҙаттары ла хас. «Ҡыҙ менән ҡырҡ ҡараҡ» (АТ 955–956В; (59, оп. 21/8, 353–369-сы б.) әкиәтендә ҡараҡтың йоҡлап ятҡан ҡыҙҙар битен үле ҡул менән һыйпауы була – улар үле кеүек йоҡлай. Татар (77,№ 40), төрөк (78, № 52) әкиәттәрендә ошо уҡ маҡсатта ул ҡәбер тупрағын файҙалана. Быңдай миҫалдар, яуыз ҡараҡ образы – яуыз мифик заттарҙың образын яңынан баһалау һөҙөмтәһе, тип әйтергә нигеҙ бирә, буғай. Аҙаҡ улар «Урман төпкөлдәрендәге» ирҙәр йортонда йәшәп, ирҙәр ҡорона инеү хоҡуғына имтихан тотоусылар (инициация йолаһы үтәүселәр) образы менән ассоциациялашыуы ихтимал, сөнки В. Я. Пропптың әйтеүенсә, уларға ҡараҡлыҡ менән шөғөлләнеү ҙә хас була. Етмәһә, улар күмәгенә бер ҡатын тотҡан (65, 104, 109-сы б.). Әкиәт ҡараҡтары ла ҡыҙҙарҙы шул маҡсат менән урлай. «Урланған ҡыҙ» (12, ед. хр. 94, 182–183-сө б.), «Аҡ келәт» ише әкиәттәрҙә генә һәр ҡараҡ үҙенә айырым ҡатын йүнләй. Быңдай миҫалдар иһә әле һүҙ барған әкиәттәрҙең тәүтормош ғаиләһе йәшәгән һәм ул тарҡала башлаған осорҙарҙағы ҡараштар менән бәйле булыуын тоҫмалларға мөмкинлек бирә.

Традицион экиәттең эске законсалығы буйынса, әгәр герой тыйылғанға ҡолаҡ һалмай икән, ул бермә-бер язаға йә ҡазаға тарый. Әле һүҙ барған экиәттәрҙә ҡыҙҙың ҡараҡтар ҡулына юлығыуының сәбәбе асыҡ ҡына әйтелмәй. Ҡараҡтарҙың хәбәрсеһе (разведчигы), ҡыҙ сығып киткән арала, өйгә инеп йәшеренә. Тимәк, ата-әсәһе, ҡунаҡҡа киткәндә, уға өйҙән сыҡмаҫҡа ҡушҡан. Хәйер, «Ен ҡараҡтары» экиәтендә тыйыу мотивы асыҡ ҡына әйтелгән. Ҡыҙ ҡараҡтар йортона барып ҡайтҡас, ағаһы: «Ни эшләп барҙың?» – тип уны ороша (18, 275). Әммә шуныһы мөһим, ҡыҙ тәүҙә, үҙенең һаҡһыҙлығы арҡаһында, бәләгә тарый яҙғас (йә тарығас), бик һаҡ эш итә башлай һәм шул уға ҡараҡтарҙы фашларға мөмкинлек бирә. «Ен ҡараҡтарын»да ҡараҡтарҙы ҡыҙ өйгә ылыҡтыра – ағаһы уларҙың килгән береһен ҡылыстан үткәреп тора. «Ҡырҡ ҡараҡ» тибындағы экиәттәрҙә, тотҡондан ҡасып ҡайтып еткәс, ҡыҙ уларҙың башына үҙе етә. Дөрөҫ, «Хәтирә» экиәтендәге ҡыйыу ҡыҙыҡай һымаҡ уҡ, бөтәһен дә ҡырып һалмаған сүрәттә лә, үсен ҡайтармай ҡалмай. Әммә шуны ла иҫтә тотоу кәрәк. Боронғо ырыу ҡоролошо дәүерендәге хәрби тәртип буйынса, ике яҡтың көстәре осрашҡас, еңеүсене билдәләү өсөн, уларҙың бөтәһенең дә дөмбәҫләшеүе шарт тип иҫәпләнмәгән. Әгәр берәй яҡтың ҡашҡаһы (батыры) еңелә йә һәләк була икән, шул яҡ тотошо еңелгән булып иҫәпләнгән. Шуның кеүек әгәр ҡараҡ атаманы үлтерелә ҡалһа, уның иптәштәре үҙҙәрен еңелгән тип иҫәпләргә тейеш була. «Ҡырҡ ҡараҡ», «Аҡ келәт» экиәттәрендә беҙ, асылда, шундай ситуация менән осрашабыҙ. Ҡараҡтар күмәк («ҡырҡ» һүҙе лә экиәттә, асыҡ иҫәптән бигерәк, «бик күп» тигән мәғәнәлә ҡулланыла). Ә ҡыҙ яңғыҙ. Шуға ла уның тәүәккәллеге, ҡыйыулығы айырыуса тәрән мәғәнә ала. Шулай ҙа «Хәтирә» экиәтенең героиняһы ҡыйыулыҡ йәһәтенән башҡа экиәттәрҙең героиняларынан байтаҡҡа юғарыраҡ тора, сөнки, ни генә тимә, үҙен эҙәрләүсе ҡараҡтарҙы ул символик рәүештә генә еңмәй, ә атаманын да, ҡалған ҡараҡтарҙы ла үлтерә: тәүгеһен бысаҡтан үткәрә, тегеләрен, мискәлә йәшеренеп ултырғандарында, ҡайнар май менән ҡойондора.

Шуныһы ла бар. «Ҡырҡ ҡараҡ» тибындағы экиәттәрҙә ҡыҙҙың күмәк ҡараҡтар менән йөҙмә-йөҙ осрашыуҙан һаҡланыуы, әммә улар алдында теҙ сүгергә теләмәүе бер ни тиклем айҙа ҡыуышып йөрөгән ике зат араһындағы мифты хәтерләтә (17, № 2). Ул мифтар кешенең, үҙенән ҡеүәтле ҡара көстәргә ҡаршы торорға хәле етмәһә лә, уларҙан еңелеп ҡалырға теләмәүен сағылдыра. Әйтелгәндәрҙән сығып, яуыз ҡараҡтар хаҡындағы экиәттәрҙең башҡалары менән сағыштырғанда, хронологик яҡтан «Хәтирә» экиәте байтаҡҡа йәшерәк тип баһаларға була.

* * *

Шулай итеп, башҡорт халҡының новеллистик әкиәттәренең төп төркөмдәренә ҡыҫҡаса байҡау яһап сыҡтыҡ. Әгәр новеллистик әкиәттәрҙе төркөмләү принцибына әҙмә-әҙлекле таянһаҡ, был фондтың әле беҙгә билдәле булған өлөшөндә генә лә тулы бер нисә төркөмдө айырып күрһәтергә булыр ине. Шуларҙың күҙгә иң ныҡ бәрелеп торғаны мәкерҙәр тураһындағы новеллистик әкиәттәр төркөмсәһелер. Уларҙа ла сюжет асылда аҡыллы кәңәш биреүсе зирәктәр хаҡындағы новеллистик әкиәттәр принцибына нигеҙләнә: берәү кәңәш бирә, башҡалар ул кәңәшкә һүҙмә-һүҙ эйәрә («Мәскәй», «Кеше һүҙе кеше үлтерә», АТ 1353; «Кеше менән шайтан», АТ 1577; «Ялғансы вәзир», *975***).

Әммә изге әшкәртеүсенең кәңәше – кәңәш алыусыны уңышҡа юлыҡтырыусы изге ниәтле кәңәш булһа, һуңғы төркөмсәләге кәңәш – мәкер кәңәше, уны тотоусыны уңайһыҙ хәлгә ҡуйыусы, хатта һәләкәткә юлыҡтырыусы кәңәш. Шуға ла был әкиәттәрҙе «зирәктәр тураһындағы новеллистик әкиәттәрҙең киреһе» тип нарыҡларға ла булыр ине.

Мәкерҙәр тураһындағы әкиәттәрҙә лә сиселеш көтмәгәндә була, хатта кульминация моменты менән тап килә яҙа. Бындай саҡта мәкер ниәте менән башҡаларҙы һәләкәткә этәреүсе персонаж үҙ маҡсатына ана ирешәм, бына ирешәм тигән мәлгә килеп етә. Әммә тап ошо саҡта ул, ғәҙәттә, язаһын таба. «Ялғансы вәзир»ҙә баш вәзирҙе, йоғошло сир менән ауырый, тип ханды ышандырыуға ирешкән икенсе вәзир, үтә сабырһыҙлығы арҡаһында, үҙ башына үҙе етә. Беренсе вәзир аша хан ебәргән пакетты йәлләттәргә үҙе алып бара. Ә ундағы хатта пакетты килтереүсене язаларға ҡушылған була.

Әкиәттәрҙең ахырында, ғәҙәттә, яуыз зат язаға тарттырыла, яҡшылыҡ еңә. Мәкерҙәр тураһындағы әкиәттәр үҙҙәре лә «мәкерерәк» һәм шунлыҡтан был законлылыҡҡа буйһоноп бөтмәй: ҡайһы берҙәре мәкерлектең тантанаһы менән тамамлана («Мәскәй», «Кеше һүҙе кеше үлтерә», «Кеше менән шайтан»).

Новеллистик әкиәттәрҙә, ғәҙәттә, ваҡиғалар уртаһында ҡайнаусы түгел, ә кәңәш биреп, үҙе ситтә ҡалыусы персонаж төп герой була, сөнки сюжеттың бөтә үҫеш юлын ул билдәләй. Әйтелгәнде мәкерҙәр тураһындағы әкиәттәр ҙә раҫлай.

Герой тураһында һүҙ сыҡҡанда, тағы шуны ла әйтергә кәрәк. Новеллистик әкиәттәрҙәге берәй персонаж башта кире яҡтан нарыҡланып, әҙәрләүҙәргә дусар ителһә, ул, асылда, ыңғай персонаж булып сыға. Ошо әйтелгәндең киреһе лә булып ҡуя. Герой үҙ аллы һәм етеҙ эш итеүсән булғанда, сюжет та

[illegible] үҫә, әгәр ул башҡаларға ҡолаҡ һалып ҡына, кеше һүҙе уйынса ғына йөрөһә, үҙе лә ваҡиғалар ҡоло булып ҡала. Ә сюжеттың тармаҡланыуы быуындары, бөгөлдәре, герой алдына ҡуйылған бурыс, уға әйтелгән кәңәш (йә ҡотҡо һүҙ) һанына ҡарай килеүсән. Дөйөм алғанда, новеллистик әкиәттәр актив, әхлаҡи һәм интеллектуаль яҡтан камил шәхесте идеаллаштыра, шуның кимәленә етергә саҡыра.

*Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ*

# I. ЗИРӘКТӘР

## 1. Торахан менән Йәнәбәхан һәм Ерәнсә сәсән

Борон бер заманда Торахан менән Йәнәбәхан тигән ике батша йәшәгән. Уларҙың араһы алтмыш саҡрым булған.

Бер ваҡыт Торахандың айғыры ҡыҙыраған*. Шул мәлдәрәк Йәнәбәхандың бейәләре ҡолон һалып бөткән, ти. Шунан Торахан батшаға хәбәр ебәргән: «Бәй-бәй! Бына һинең айғырың ҡыҙырағанға, минең бейәләр ҡолон һалып бөттө!» Хәҙер был батша аптырай бит инде: «Ни эшләп алтмыш саҡрым ерҙәге айғыр ҡыҙырағанға, бейәләре ҡолон һалып бөттө икән?»

Хәҙер Торахан батша халҡын, ғәскәрен йыйып ала. Шул һорауына яуап эҙләй. Бөтә халыҡ, бар ғәскәр:

– Юҡ, яуап таба алмайбыҙ, – ти.

Тик бер ҡарт әйтә:

– Минең бер таҙ көтөүсем бар, яланда ҡалды. Белһә, шул белер, – ти.

– Барығыҙ, килтерегеҙ шул таҙ малайҙы! – тип ҡысҡыра Торахан.

Таҙ артынан кеше ебәрәләр. Ул һыу аръяғында көтөү көтә, ти.

– Эйҙә, Таҙ ағай, һине батша саҡырта, – тип барып әйтә теге кеше.

Ярар, хәҙер ҡайтып киләләр былар. Таҙ итеген елкәһенә йөкмәп ҡайтып килә. Һыуға килеп еткәс, аяғына кейеп, кисеп сығып китә был.

– Бәй-бәй, ағай, һин ни эшләп былай ҡорола ялан аяҡ килдең дә, һыуға еткәс, итек кейәһең? – ти икән юлдашы.

– Аяҡ ташты йыртa, шуға кейәм, – ти теге.

Ҡайттылар. Батшаға килделәр – тирә-яҡ тулы ғәскәр. Батша быға эштең әрәсәһен әйтеп бирә лә:

Йә, Таҙ, яуап табаһыңмы? – ти.

Табам. Һин миңә алтмыш малай бир – алтмышы ла минең менән бер тиң булһын, – ти Таҙ.

Таҙға алтмыш малай йыйып бирәләр, ти.

Бер сәркәш* үгеҙ бир миңә!

Сәркәш үгеҙ һорап алды.

Бер оло кәзә тәкәһе бир!

Кәзә тәкәһе лә алды. Хәҙер Таҙ алтмыш егеткә лә һөнәрсел булырға ҡуша:

Ҡайһыныһы йырлаһын, ҡайһыныһы бейеһен, ҡайһыныһы ҡурай тартһын! – ти. – Барыбыҙға ла ҡылыс бир, – ти.

Батша ҡылыс бирә. Былар сығып китәләр Йәнәбәхан батшалығына. Барып керәләр. Батша сарҙағынан ҡарап ятҡан икән.

– Бик күп вәзирҙәр килә. Һуғыш асырға киләләрме икән? – тип һалдаттарын ҡаршы ебәрә.

– Һеҙ ни эш менән киләһегеҙ? Һуғыш асырғамы?

– Юҡ, беҙ майҙанға сыҡтыҡ. Уйнарға сыҡтыҡ, – тиҙәр, үҙҙәре эттәрҙе ҡырып, үлтереп тик киләләр икән былар. Хәҙер батша тәңгәленә килеп етәләр. Батшаның да ике эте лауылдап килеп сыға. Уларҙы ла сыйылдатып туҡмай башлайҙар.

– Тороп торогоҙ әле, тороп торогоҙ! – ти батша. – Һеҙ ни эшләп этте ҡырып киләһегеҙ? – ти.

Көтөүсе әйтә:

– Ни эшләп беҙ эттәрҙе ҡырмайбыҙ, – ти. – Мин көтөү көткәндә һарығымды бүреләр ҡырып бөттө, – ти. – Ниңә улар өрмәнеләр, ниңә улар ҡоткарманылар? – ти.

– Эй ахмаҡ, – ти батша, – һинең алтмыш саҡрым ерҙәге һарығыңды бүре ҡырғанын эт ҡайҙан белһен? – ти.

Эй аҡыллы батша, – ти Таҙ, – алтмыш саҡрым ерҙә айғыр ҡыҙырағанға, ниңә һинең бейәләрең ҡолон һала? – ти.

Ярар, батша уйға ҡала.

– Юҡмы берәй аҡыллырағығыҙ? – тип һорай батша.

– Ниңә булмаһын? Бына беҙҙең аҡыллырағыбыҙ.

Сәркәш үгеҙҙе һөйрәп сығара Таҙ.

– Һәй, шул аҡыллы буламы ни? Һаҡаллырағығыҙ юҡмы?

– Бар һаҡаллырағыбыҙ ҙа.

Таҙ кәзә тәкәһен һөйрәп сығара.

– Ярар, – ти батша. – Һинең исемең Ерәнсә сәсән булһын, – ти, – һинең бер һүҙеңә бер алтын, – ти.

Таҙға, көтөүсе малайға, бер һүҙенә бер алтын бирәләр, исемен Ерәнсә сәсән итеп ҡушалар. Шулай итеп, батшаға яуап табып, былар хәҙер ҡайтып китәләр. Торахан батша һорай:

– Йә, таптығыҙмы?

– Таптыҡ.

– Улай булғас, һин минең малайым булаһың, – ти батша, бик яҡшы ат бирә, быны яҡшы итеп кейендерә. – Килен алып

бирәм. Бар, – ти батша, – ҡыҙ күҙләргә бар хәҙер, кәләш алырға.

Таҙ ат эйәрләп менә лә икенсе ауылға сығып китә. Юл буйында бер бабай тап була. Бергә-бергә бара торғас, Ерәнсә әйтә быға:

– Йә, бабай, оҙон юлды ҡыҫҡартайыҡ! – ти.

– Эх ахмаҡ, – ти бабай, – оҙон ни эшләп ҡыҫҡарһын ул, – ти.

Ярар, киләләр, киләләр былар.

– Йә, бабай, ерҙән ҡаҙан аҫып, аш бешерәйек!

– Эх ахмаҡ, ерҙән ҡаҙан аҫып, аш бешерәме ни кеше?

Ярар, килә торғас, бер тура юл, бер борол* юл бар, ти.

– Йә, бабай, һин ҡайһы юлдан китәһең?

– Мин тураһынан китәм.

– Эй бабай, – ти Ерәнсә сәсән, – был юл тура, – ти, – тура булһа ла, борол, – ти.

– Эх ахмаҡ, – ти бабай, – тура юл борол буламы ни?! – тип асыулана бабай.

Егет борол юлдан китә, бабай тура юлдан китә. Хәҙер Таҙ бер ауылға барып керә. Ауыл осондағы өйҙөң кәртәһе эсендә бик матур бер ҡыҙ йөрөй. Һыйыр һауырға йыйына инде.

– Эй ҡарындаш, бик асығып киттем, минең тамағымды ғына туйҙырып ебәр инде! – ти Ерәнсә.

– Юҡ, – ти ҡыҙ, – атайым менән әсәйем әрләй, – ти, – туйҙырмайым, кәрәкмәй, – ти.

Егет әйтә:

– Хәлдән тайҙым, туйҙырып ҡына сығар инде! – ти.

– Ярар, улай булғас, – ти ҙә ҡыҙ Таҙҙы өйгә алып кереп китә. Аш һоҫоп ултырта. Борон заман тары өйрәһенә сумар ашы бешерә инек. Шунан ҡыҙ Таҙҙың ашағанын аңдып ҡарап ултыра. Ерәнсә сәсән алып ҡаба тәүҙә биш бөртөк сумар, икенсеһендә өстө ала. Өсөнсөһөндә йәнә икене ала. Унан берҙе генә ала.

– Өйөгөҙ матур икән, бүрәнәһе эре икән. Был хәтлем бүрәнәне нисәшәрен бер һалып алыҡ килделәр икән? – тип һорай ашап туйғас.

Ҡыҙ быныӊ ашағанын күреп ултырҙы бит инде. Шулай тип яуап бирә:

– Ат арыҡта бишәрен бер килтерҙе, унан өсәрен килтерҙе, һимергәс, берәрен дә саҡ килтерҙе, – ти.

«Ярар», – тип ҡуя Ерәнсә сәсән эстән генә, шунан йәнә һорай:

Был өйҙөң мейесе бик матур икән, – ти, – тик мөрйәһе ҡыйышыраҡ икән, – ти.

– Мөрйәһе ҡыйыш булһа ла, төтөнө тура сыға, – ти ҡыҙ.

Баҡһаң, теге ҡыҙыҡайҙың танауының осо ҡыйышыраҡ икән.

Сығып китә егет. Икенсе өйҙә ҡунып сыҡмаҡсы була. Әлеге бабай ҡыҙҙың атаһы булып сыға. Яусы ебәрә бит хәҙер Таҙ. Китә тегә яусы кеше.

Бына шулай-шулай егет килде, – ти, – мин, – ти, – яусыларға килдем, – ти.

Кем ул?

Бабайға һөйләп бирә был.

Ҡуй, ҡуй, кәрәкмәй, – ти бабай, – ул бер иҫәр малайҙыр! Юлда тап килгәйне миңә, – ти. – Килә торғас: «Юлды ҡыҫтартайыҡ», – тине. Юлды ҡыҫтартып булалыр шул ул?

Атай, һин өндәшмәй килдеңме? – ти ҡыҙы.

Өндәшмәй килдем шул.

Һөйләшеп килһәң, юл ҡыҫҡараҡ була ул, атай.

Ярай, уныһы шулай булһын, ти. Килә торғас: «Ерҙән ҡаҙан аҫып, аш бешерәйек», – тип әйтте. Ерҙән ҡаҙан аҫып, кеше аш бешерәме инде?

Ҡуйынында берәй нәмәһе юҡ инеме һуң?

Әллә, ҡуйынында бар һымаҡ ине.

Уның ҡуйынында ҡор булған, шуны өтөп ашайыҡ, тип әйткән ул!

Шунан, тура юл менән борол юл сатына еткәс: «Һин ҡайһы юлдан китәһең, бабай?» – тип әйтте. Тура юл була тороп, кеше борол юлдан китәме икән?

Юҡ, атай, ул борол юлдан килһә лә, әллә ҡасан килде. Һинең тура юл тип һайлағаның борол булған. Был егеткә оярһәң дә, барам; бирмәһәң дә, барам, атай, – тигән ҡыҙ.

Ҡарт аптырай хәҙер, яусыға әйтә:

– Алты бейә килтер, алтыһы ла ала булһын, алтыһы ла бер тиң булһын, – ти.

Хәҙер яусы аптырай бит инде.

– Был тиклем бер төҫ алты бейәне ҡайҙан тапһын инде, – тип ҡайтып килә.

Ҡайта ла малайға:

– Бер төҫ алты бейә һорай. Ул бик ауыр һорай, – ти.

– Эй, аныһы өсөн аптырап торма, ағай, килтер әле бер сыра, – ти.

Килтерә. Ерәнсә сәсән шул сыраны тигеҙ генә итеп алты өлөшкә ҡырҡа ла биреп ебәрә. Был алып бара инде.

– Уф ахмаҡ, – ти ҡарт, – ошо бейә буламы ни? – ти.

Яусы ҡайтып китә. Ҡайтып, батшаға һөйләй. Батша әйтә:

– Ярар, быны миңә килен таштан ҡата тегеп ебәрһен, – ти (килен тип тегә ҡыҙҙы әйтә).

– Ярар, мин уға таштан ҡата тегермен, ул миңә ҡомдан еп ишеп ебәрһен, – ти ҡыҙ.

Ҡайта тегә яусы:

– Шулай тип әйтә бит әле, – ти батшаға.

– Ярар, миңә яуап ҡайтарырлыҡ икән, – ти. Тағы китә, йомош әйтә, бер үгеҙ биреп ебәрә:

– Мин ҡунаҡҡа барыуға, ошо үгеҙҙе быҙаулатып торһон, – ти.

Ҡыҙҙың атаһы ҡайғыра инде.

– Әй-й-й, үгеҙ быҙаулаймы ни ул? – ти.

– Атай, унын өсөн ҡайғырма, бар, сыҡ та үгеҙҙе һуй, үҙеңә ит булыр, – ти.

Үгеҙҙе һуйҙыра. Ҡапҡаһының алдына сымылдыҡ ҡорҙора. Атаһын шул сымылдыҡ эсенә кертә. Хәҙер батша килеүгә теге ҡыҙ:

– Эй Хоҙайым, атайым тиҙерәк уғлан* килтерһә ярар ине, – тип үрле-ҡырлы йөрөп ята, ти.

Батша тыңлап тора ла:

– Эй ахмаҡ, атай кеше уғлан килтерәме ни? – ти.

Ҡыҙ:

– Аҡыллы батша, үгеҙ быҙаулаймы һуң? – ти.

Яуабына яуап табылды бит инде. Шул ерҙә батша атын бора ла ҡайта ла китә.

Шунан Ерәнсә сәсән кәләшен алып ҡайтып китә. Үҙ алдарына донъя көтә башлайҙар. Егеттең һәр һүҙенә әлегәсә бер алтын бирәләр. Шунан егет, маһайып:

– Үәт мин ир: бер һүҙемә лә бер алтын алам мин, – ти.

Кәләше әйтә:

– Юҡ әле. Һин ир түгел әле, һин иргәләк кенә, – ти. – Ирҙәр менә шунда ир була: ирҙәрҙең күкрәгенең уртаһында йөн була, – ти.

Ерәнсә сәсән һунарға йөрөр булған. Бер шулай һунарға барған сағында икенсе бер һунарсы менән осраша. Икеһенә бер ҡуян тап булған була. Береһе:

– Мин аттым, – ти. Икенсеһе:

– Мин аттым, – ти. Оло кеше:

– Б...ҡтан сыҡмаған, мине еңергә уйлайһыңмы? – ти ҙә Ерәнсәне тотоп алып ҡайта ла китә, быны атып үлтереү менән ҡурҡыта.

Ҡайтҡас, ҡулын шаҡарып бәйләп, ишек төбөнә ултыртып ҡуя. Һунарсы үҙе ашарға ултыра. Ашап ултыра торғас, тирләй ҙә түшен ысҡындырып ебәрә. Түшен ысҡындырғайны – егет шарҡылдап көлөп ебәрҙе, ти.

– Мин һине, ашап бөткәс, атырмын тигән инем. Һин минән көләһеңме ни әле? – тип ашап ултырған еренән һикереп килеп төшә был ир.

– Юҡ, һинән көлөү ҡайҙа ул. Ҡатынымдың һүҙенә генә көләм. Мин, шулай, шулай, бер һүҙемә бер алтын алам, мин ирмен, тигәс, ҡатыным: «Юҡ әле, һин ир түгел, иргәләк кенә. Үәт ирҙәр шул була, уларҙың күкрәгенең уртаһында йөн бу-

ине, тип әйткәйне. Шуға көлдөм, ағай, шуға көлдөм, – ти Ерәнсә сәсән.

Ярар, һинең ҡатының яҡшы кеше, белемле кеше икән. Ҡатынының хаҡына ебәрәм, – ти ҙә тегене ҡайтарып ебәрә.

Хәҙер ҡайтып килә инде был егет. Ҡайтып килһә, аҫып үлтермәгә энеһен аҫҡаҡҡа мендереп алып баралар, ти. Ул да ағаһы һымаҡ ҡуянға йөрөргә әүәҫ булған, ти. Ағаһы юҡта һунарҙа низағ килеп сыҡҡан да, шуның гилләһенән язаламаксылар икән.

Теге энеңде үлтерәләр хәҙер, ана, батшалар аҫа, тиҙ бул, тамағыңа ашап торма, йүгер, – ти ҡатыны.

Ашап тороу ҙа юҡ, был тора ла йүгерә хәҙер.

Тороп торoғоҙ, тороп торoғоҙ, нимә тип әйтә? – тип һөрән һалып бара үҙе.

«Атҡан уғым ҡуяндың аяғынан үтеп ҡолағынан сыҡты», – тип әйтә бит. Нисек улай булһын ул? Үҙ һүҙен бирмәй. Шуға аҫырға хөкөм сыҡты.

Аяҡтан үтеп ҡолаҡтан сыға буламы? – тип зыуылдашалар, ти, язалаусылар.

Юҡ, уның атҡанын мин дә күреп торҙом: ошолай итеп ҡуян ҡолағын тырнап тора ине, шул саҡта атып ебәргәйне, аяғынан үтеп, ҡолағынан сыҡты ла китте, – тип яуап ҡайтарҙы ла ҡуйҙы, ти, Ерәнсә.

Шулай итеп, энеһен үлемдән ҡотолдороп, алып ҡайтып китә.

Шулай донъя көтөп яталар, ти, әле һаман да.

## 2. Ерәнсә батыр

Ерәнсә бик үткер телле сәсән, аҡыллы батыр булған. Бер-заман-бер көн һыбай ҡырҙа йөрөй икән. Юлда быға Ҡурамша тигән бер ҡарт тап була. Икәүләп китеп ултыралар, ти, китеп ултыралар, ти. Китеп ултыра торғас, Ерәнсә батыр бабайҙан һорай ҡуя:

– Бынауы тауҙың үҙәгенән һыу ярып аҡҡанға күпме була икән?

Ҡарт бер нәмә лә аңламай. Аңламағас:

– Белмәйем, – тип кенә яуап бирә.

Килә торғас, Ерәнсә батыр йәнә һорау бирә:

– Бынауы тауҙың башына аҡ төшөүенә ни саҡлы булыр икән?

– Ҡайҙан беләһең инде уны? – тигән Ҡурамша ҡарт.

Килә биргәс, Ерәнсә сәсән:

– Әйҙә, ағастан ҡаҙан аҫайыҡ, – ти. Ерәнсә шулай тигәс, түҙмәгән ҡарт:

– Ней, гел юҡты һөйләп бараһың, ҡустым? – тип асыуланған быға.

Ерәнсә өндәшмәгән, көлөмһөрәп кенә ҡуйған.

Бер юл сатына килеп еткәндәр былар. Ерәнсә батыр йәнә һорай, ти:

– Йә, ҡайһы юлдан китәбеҙ? Бына был юл түтә, түтә булһа ла, урау. Быныһы урау. Урау булһа ла, түтә, – тигән.

– Һин алмашаның* артынан йөрөгән мин алйот! Әйҙә киткән һин бороу юлдан кит. Мин түтә юлдан китәм, – тип ҡарт юрттырып китеп барған.

Алда һаҙ булған. Теге ҡарт барып, атын батырып, маташып ятып ҡалған. Ерәнсә батыр урау юл менән китеп, ҡарттың өйөнә үҙенән алда барып төшкән.

Ҡарттың ҡыҙы була. Ул бик өлөшлө ҡыҙ булған була. Үҙе һылыу ҙа икән, етмәһә. Ерәнсәнең күҙе төшә бит был ҡыҙға. Шулай ҙа иң элек бының аҡылын һынап ҡарарға була.

Теге ҡыҙ ярпы һалма* бешереп торған. Ерәнсә батыр бик асығып килгән була. Ҡыҙ быға һалма һалып бирә. Ерәнсә эре ярпы һалманың өс-дүртен бер ыңғай һоғона-һоғона ашап, әҙерәк туйғас, берәмләп ашай башлаған. Теге ҡыҙ шаршау эсенән күҙен йылтыратып ҡарап тора, ти. Ашап туйғас, Ерәнсә батыр ҡыҙға һорау биргән.

– Ай-һай, был өйөгөҙҙөң бүрәнәләре бик эре икән! Бер атҡа нисәшәрен тейәп килделәр икән? – тигән.

Теге ҡыҙ:

– Атябыҡ саҡта өс-дүрт бүрәнәне алып килде. Ҡарыулан-ғас*, берәүҙе генә һөйрәп килде.

Аҡылы үткер икән был ҡыҙҙың, тип уйлап ҡуя Ерәнсә батыр.

– Беҙ атайың менән килә инек. Ул түтә юлдан киткәйне. Мин урау юлдан килдем. Атайың килгәс, беҙгә барып ҡайт-һын, – тип ҡайтып китә.

Ҡарт атын саҡ сығарып, һуң ғына ҡайтып төшә. Үҙе һуҡрана. Ашарға ултырғас, ҡыҙы бер ҡунаҡ килеп китеүе тураһында һөйләп бирә. Атаһы:

– Әй, шул алмаша булғандыр әле күп булһа, миңә төптө юҡты һөйләп, башымды ҡаңғырткайны, – тип ҡыҙына Ерәнсә батырҙың һорауҙарын әйтеп биргән.

Ҡыҙы:

– Юҡ, атай, ул алмаша түгел, бик аҡыллы, үткер һүҙле кеше икән. Ул һинең менән гел уратып һөйләшкән. Тау үҙәгенән ҡасан һыу йырып аҡты, тип, һинең күҙең йәшләнеп йөрөүенә күпме була, тип һораған. Тау башына аҡ төшөүе, тип, һинең сәсеңә сал төшөүенә күпме була, тигәнде һораған. Әле ул һине саҡырып ҡайтты, – тигән.

Ҡурамша ҡарт икенсе көндө Ерәнсә батырға ҡунаҡҡа китә.

Ерәнсә батыр тегене ҡунаҡ итеп, ҡайтыр саҡта ҡырҡ тәкә бирә ҡа:

Оно тәкәләрҙе бәрәсләтеп, һикһән баш итеп ҡуй. Эшләмәһәң, башыңды ҡырҡырмын! – тигән була.

Ҡарт илай-илай ҡырҡ тәкәне алып ҡайта. Ҡыҙы ҡаршы сығып һорай:

Ни эшләп илайһың, атай? Был тәкәләрҙе ҡайҙан алып килдең?

Әй ҡыҙым, ҡыҙым! Башым бәләгә генә юлыҡты бит. Ошо тәкәләрҙе бәрәсләтеп, һикһән баш итергә ҡушты теге Ерәнсә батыр. Уны нисек итәһең инде? – ти ҡарт.

Һәй, уға ғына илап ни! Бер ҙә бушҡа ҡайғырма. Иртәнсәк үҙем ни эшләргә белермен! – тип яуап бирә ҡыҙы.

Иртәнсәк иртә менән бер кеше алып, ҡыҙ ҡырҡ тәкәне лә һуйҙырып, ҡунаҡ саҡырып, ит ашап тик яталар, ти.

Ерәнсә батыр көтә-көтә лә килә ҡартҡа – ҡыҙыҡ бит инде – ҡарт ни эшләр икән? Атынан төшмәй генә килеп, тәҙрәнән һорашлай:

Ҡурамша ҡарт өйҙәме?

Ойҙә лә, ауырып ята әле ул, – тип яуаплай ҡыҙ.

Ҡайһылай ауырый?

Тулғаҡ тотоп ауырый.

Кит, юҡты һөйләмә! Ниндәй тулғаҡ тотһон, ти, ир кешене!

Шулай булғас, ҡырҡ айғыр тәкәне бәрәсләтеп булалыр шул?

Ерәнсә батыр, бер һүҙ ҙә әйтмәй, кире әйләнеп ҡайта ла китә. Бер аҙ йөрөгәс, ҡыҙҙы ҡоҙалап, кәләш итеп ала. Былар татыу ғына торалар.

## 3. Ерәнсә сәсән менән хан

Элгәре Ерәнсә сәсән тигән кеше йәшәгән. Ул бик яуапкәр*, шул хәтле сумарт* булған. Ингән бер кешене, балаһы булһын, олоһо булһын, айырмаған: һәр ваҡыт һыйлап, хөрмәт итеп сығарып торған. Шунан бының даны киткән.

Бер ваҡыт шул дан барып ишетелгән ханға. Уны ишеткәс тә, хан:

– Эх, был Ерәнсә сәсәнде нисек күрергә икән? Шулай, шулай, тип бик маҡтайҙар ҙа баһаң, – тигән.

Шунан хан Ерәнсә сәсәнде күрергә ниәтләнеп, атҡа ултырып сығып китә. Килә, килә. Килә торғас, был уйлай инде: «Һуң, мин унда барып индениһәм, ул минән һорашыр: «Һин кем булаһың?» – тип әйтеп. Мин ни нәмә тип әйтермен икән? Түкта. «Мин һинең олатаңдың олатаһының олатаһының дуҫымын», – тип әйтәйем». Шул яуапты әҙерләп, тынысланып бара инде был. «Шулай тип әйтһәм, ҡәҙер итер мине лә», – тип уйлай хан.

Бер ваҡытты барып етә. Ерәнсәнең ҡапҡаһына барып инә. Ҡапҡаһына инеүгә, Ерәнсә йүгереп килеп сыға ла:

– Әйҙүк, әйҙүк, хуш килдең, хуш килдең, – тип индереп алып китә, түргә мендереп ебәрә ханды.

Һөйләшеп ултыралар. Һөйләшеп ултыра торғас, Ерәнсә:

– Һин кем булаһың һуң әле? – тип һорай икән.

– Мин, – ти хан, – һинең олатаңдың олатаһының олатаһының дуҫы инем, – ти.

Шул ерҙә Ерәнсә белә тегене: «Һуң, был йәш тә баһаң. Минең олатамдың олатаһының олатаһын ҡайҙан белһен ул? Был кәнде алдап ултыра». Ерәнсә, йәне көйөп, аш өйөнә сығып китә лә әбейенә әйтә:

– Һин беҙҙең алға бүтән ризыҡ алып барма, ҡара һыуҙы табаҡҡа ҡой ҙа шуны килтереп ултырт, – ти.

– Ярар, ярар, – ти әбейе.

Бер ваҡытты ҡара һыуҙы тултырғансы табаҡҡа ҡоя ла әбей алып барып ирҙәрҙең алдарына ултырта. Ерәнсә:

– Йә, ҡунаҡ, хуш иттек, – ти ҙә эсә, ти, ҡара һыуҙы ҡалаҡ менән һөрпөлдәтеп алып, – яҡындан ҡатнаш, – ти ҙә эсә, ти.

Ахырыһы булдыра алмай, хан да алып эсә башланы, ти, тегене. Эсә торғас, сыҙаманы, ти, хан.

– Һуң, был ни нәхтә?* – тип һораны, ти.

– Былмы? Был – ҡуяндың һурпаһының һурпаһының һурпаһының һурпаһы, – тип әйтте, ти, Ерәнсә.

Шулай итеп, тегенең хәйләһенә яуап ҡайтара инде. Шунан был хан, ярар, ҡоро ҡара һыуҙы эсеп ҡайтты, ти. Ҡайтырға сыға ла эй уйлана, эй уйлана. Уйлана торғас: «Туҡта, – ти, – быға мин бер эш бирәйем, – ти. – Әгәр ҙә шуны үтәмәһә, башын ҡырҡайым», – ти. Йәне ныҡ көйгән, ти, быны. (Хан булғас ни, башын ҡырҡтырһа ла ихтыяр инде уға.)

Шулай тип уйлай ҙа хан Ерәнсәне саҡырта. Саҡыртҡас ни, Ерәнсә килә. Хан әйтә быға:

– Үәт, – ти, – һиңә бирәмен ҡырҡ баш тәкә, – ти. – Фәлән көндө барырмын. Шул ваҡытҡа һикһән баш булып торһондар, – ти. – Әгәр ҙә мин барғансы һикһән баш булмаһа, башыңды ҡырҡам, – ти.

Ерәнсә уйланып ултыра-ултыра ла, ахыры, булдыра алмай, ҡырҡ баш тәкәне ҡыуып алып ҡайтып китә. Алып ҡайта. Алып барып кәртәһенә индерә. Әбейе бының өйҙә булмай. Өйгә инә лә бошоноп ҡарап ултыра икән. Анса булмай, әбейе килеп инә. Әйтә:

– Ни нәмә эшләп уйланып киткәнһең әле? Ниндәй уйға төшкәнһең? – тип Ерәнсәнән һорай икән.

Ерәнсә:

– Үәт, – ти, – хан саҡыртып алып, – ти, – миңә ҡырҡ тәкә биреп ҡайтарҙы. Мин барыуға һикһән баш булһын, тип әйтте, – ти инде. – Үәт, шул хаҡта уйланып ултырамын әле. Әгәр

...һикһән баш булмаһа, башыңды ҡырҡарым, тип әйт... ти.

Шунан бер ваҡытты әбейе әйтә инде:

Һәй, юҡҡа аптырама һин. Ниңә аптырайһың шуға?

Эсейе сығарып бирә тегеңә бысаҡ, ҡайраҡ.

Мә, ҡайра, үткерлә.

Ерәнсә бысаҡты үткерләй. Бер ваҡытты алып сыға ла әбейе Ерәнсәгә әйтә:

Ҡара, бер яҡшыһын, мыҡтыһын тотоп һуй тәкәнең, – ти.

Ерәнсә бер һәйбәт тәкәне, иң мыҡты тәкәне, тотоп һуя. Тиреһен һыҙырып, итен ботарлап ҡаҙанға' һала ла бөтә күршеләрен, ауылын саҡырып ала был. Ҡунаҡтарын һыйлай-һыйлайҙар ҙа Ерәнсә менән ҡатыны килгән берәүһенә өсәр ҙә дүртәр, бишәр ҙә алтышар тәкә биреп ҡайтаралар. Кәртәлә бер тәкә лә ҡалманы, ти.

Ярар. Бер ваҡытты был хандың килер көнө килеп етә. Былар көтә инде. Ҡатыны әйтә:

Һин, – ти, – өйҙә тик ултыр. Мин үҙем ҡаршы сығырмын. Һин яман тауыш менән әйҙә аҡыр ҙа аҡыр, – ти.

– Ярар, – тип әйтеп, Ерәнсә өйҙә ҡала.

Бер ваҡытты теге хан сәғәте менән, минуты менән туҡрамай килеп етһә, ҡапҡаны асып ебәрә ҡатын. Асып ебәргәс, хан аты менән кәртә эргәһенән ҡайырылып килеп тороуы була, өйҙә бер ир аҡыра башлай. Хан һорай:

– Кем ул өйҙә ҡысҡырған?

– Ерәнсә, – ти әбей.

– Ни нәмә эшләп ҡысҡыра?

– Ул, – ти, – ханым, тәнәйләй алмай ҡысҡыра.

– Һуң, ир кеше тәнәйләйме?

– Тәкә һуң бәрәнләйме? – тип яуаплаша ҡатын.

– Ә-ә-ә, былай икән әле быларҙың эше, – тине лә, ти, хан әйҙанды ла һыпыртты, ти.

Быҙың һаман да ҡуйғыһы килмәй. Нисек тә булһа Ерәнсәнең башын киҫергә кәрәк бит инде. Йәне көйөүе шул хәтлем инде хандың. Бер ваҡытты был хан Ерәнсә сәсәнде йәнә саҡыртып ала. Саҡыртып ала ла һорай:

– Йә, Ерәнсә, ошо июнь айында ҡайһы ерҙә себен юҡ? – ти. (Себендән ялҡҡандыр инде.)

– Ҡайһы ерҙә әҙәм юҡ, шунда себен юҡ, – ти Ерәнсә.

– Ҡайһы ерҙә юҡ һуң ул? – ти.

– Анауы тауҙың башында, – ти.

Хан шундай ергә, себендән ҡасып, йорт һалырға итә инде.

– Әйҙә барайыҡ, әләй булһа, – ти.

Бер ваҡыт, эйәртеп алып ханды, сығып китә. Алып китә, алып китә. Хан китте, ти, бышлығып, әлеге һимеҙ нәҫтә. Бер тауға мендерҙе, ти, Ерәнсә, әле етмәйбеҙ, ана етәбеҙ, быныа

етәбеҙ, тип тауҙан төшөрҙө лә тағы тауға алып менеп китте, ти. Шулай бара торғас, хандың хәле бөттө, ти.

– Ана, етеп барабыҙ. Еттек, еттек тигәндәй инде, – тип Ерәнсә һаман алып килә, ти.

Бер тауҙың башына менгәс:

– Бына ошо ерҙә себен юҡ, – тип әйткәс, ултырҙылар, ти, хәл алырға.

Тышылдап киткән, тирләп киткән, ти, хан. Тыңлап ултыра, ти, себен тауышы ишетеләме, юҡмы, тип. Анса булмай, тыж-ж-ж итеп бер себен төшенә килеп ҡунды, ти, хандың.

– Үәт, себен юҡ, тип әйткәйнең, бына ла баһа себен! – тип әйтте, ти, был.

– Һуң, мин әйттем бит: ҡайҙа әҙәм юҡ, шунда себен юҡ. Һинең менән беҙ әҙәм булмай – этме?

Шулай итеп, Ерәнсә ханға ерҙе* һыр бирмәгән, уны ыҙалатып-ыҙалатып ҡайтып киткән, ти. Хан ҡабат Ерәнсәгә тарымаҫ булды, ти.

## 4. Ерәнсә сәсән хикмәттәре

Шулай бер ваҡыт Ерәнсә сәсән менән батша сәйәхәткә сығып киткәндәр. Улар юлда һуғышып йөрөүсе дүрт кешене күргәндәр. Ерәнсә сәсән менән батша тегеләр янына килеп етеп, һораша башлағандар:

– Ни эшләп һуғышаһығыҙ?

– Беҙ дүртебеҙ ҙә бер кешенең уландарыбыҙ. Атайыбыҙ яңыраҡ ҡына үлде. Атайыбыҙҙан беҙгә мираҫҡа бер кәзә ҡалды, – тигәндәр тегеләр батша менән Ерәнсә сәсәнгә.

Бүлешкәндә, дүрт улға кәзәнең дүрт бото тейгән. Кәзәнең бер тояғы яралы булған. Ағалары уны бәләкәй ҡустыларына инселәгән.

Яралы тояҡты сепрәк менән урап ҡуйған булалар. Бер саҡ урманда бер юлаусы яҡҡан уттың эҫе көлө ҡалған була. Кәзә шул көлгә килеп баҫҡан икән, тояғындағы сепрәккә ут токанған, ти. Кәзә аяғының ауыртыуына түҙә алмай, тажылдап, яҡындағы бер игенлеккә барып ингән. Иген яна башлаған. Был игенлек ауылдағы иң бай, иң һаран, иң уҫал бер байҙыҡы икән, ти. Бай дүрт туғанға барып, иген хаҡын түләтмәк булған. Ауырыу тояҡ иң бәләкәй ҡустыныҡы булғас, иген хаҡын шунан һора, тигәндәр. Уларҙың ошолай зыҡ ҡубып һуғышып йөрөүҙәре лә шуның өсөн икән. Ерәнсә сәсән быларҙың һүҙен тыңлап торған-торған да дүрт туғандың талашына бик ғәҙел хөкөм сығарған.

– Туғандар, былай дөрөҫ түгел. Ауырыу аяҡтың бер ҙә йөрөгөһө килмәгән. Уны, борсоп, һау аяҡтар алып киткән, ауы-

[illegible] уларға эйәргән. Шулай булғас, янған иген хаҡын да [illegible] хужалары түләргә тейеш, – тигән.

Ерәнсә сәсән менән батша юлдарын артабан дауам иткәндәр. Бара торғас, улар бер күл янына килеп сыҡҡандар. Батша Ерәнсәгә һорау биргән:

– Был күлдең ниңә ҡамышы юҡ икән?

– Ямғыр яумағанға.

– Ие, күл булһын да, ямғыр яумағанға ҡамыш үҫмәһен, тимен.

Бара биргәс, уларға бер йылғаны аша сығырға тура килгән. Батша атын эсерә башлаған. Ерәнсә атының башын тартҡан.

– Һин ниңә атыңды эсермәйһең, һыуһаған бит?

– Аяғы менән эсә бит, шулай булғас, ниңә башын тартмаҫҡа, – тигән Ерәнсә.

Батша быны: «Күлдәге ҡамыш та һыу эсендә ултыра, шулай ҙа ямғырһыҙ үҫә алмай», – тип аңлаған.

Сәйәхәттә йөрөгәндә, Ерәнсә сәсәндең ҡатыны үлеп ҡала. Батша быны ишетә, ләкин Ерәнсә сәсәнгә әйтмәй. Бер ваҡыт батша Ерәнсәнән һорай:

– Атаның үлеүенә нисек ҡарарға кәрәк икән?

Ерәнсә:

– Атаның үлеүе – яңы тыуған айҙың батыуы.

Батша:

– Ә әсәнең үлеүенә нисек ҡарарға?

– Әсәнең үлеүе – шаулап аҡҡан шишмәнең ҡороуы менән бер.

– Ә ҡатындың үлеүенә нисек ҡарарға һуң?

– Ҡатындың үлеүе – хандың үлеүе.

Хан үлһә, бөтә ил ҡараңғылыҡта ҡала; ҡатын үлһә, бөтә өй ҡараңғылыҡта ҡала.

Сәйәхәттән ҡайтҡас, Ерәнсә сәсән ҡатынының үлеүен белә. Бер ни тиклем ваҡыт үткәндән һуң бер еңгә-ҡатынға өйләнә.

Батша бер ваҡыт Ерәнсәнән һорай:

– Йә, Ерәнсә, яңы ҡатыныңдан ризаһыңмы?

– Йәшәйбеҙ инде шунда: ятҡанда дүртәү булабыҙ, торһаҡ икәү булабыҙ, – тигән Ерәнсә.

– Нисек аңларға быны?

– Шулай: кис ятҡанда, ул үҙенең элекке ирен уйлай, мин үҙемдең үлгән ҡатынымды уйлайым. Килеп торһаҡ, тағы ла икәү генә булабыҙ.

– Улай икегеҙ ике уйҙа булғас, бергә тора алмаҫһығыҙ, – тигән батша. – Һине яңынан йәш ҡыҙға өйләндерергә кәрәк булыр, ҡалымын үҙем түләрмен, – тигән.

Ерәнсә баяғы еңгә-ҡатынды айырған да, кәләш эҙләп, ил ҡыҙырып сығып киткән. Юлда бара торғас, уға бер ҡарт осраған, ти. Иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас, улар артабан бергәләп киткәндәр. Бер аҙ барғас, Ерәнсә ҡарттан:

– Ағас ҡаҙанды ҡайнатмайыҡмы? – тигән.

Ҡарт уның һүҙен аңламаған, бер ни тип тә яуап ҡайтармаған.

Бер аҙҙан Ерәнсә тағы:

– Арыҡ атты ашатмайыҡмы? – тип һораған.

Ҡарт һаман ауыҙ асып һүҙ ҡатмаған. Бер йылғаға еткәс, Ерәнсә бабайға ҡарап:

– Был юл, – тип күрһәтә ул уңға киткән юлды, – тура, тура булһа ла, бороу; быныһы, – ти ул, һулға киткән юлды күрһәтеп, – бороу, бороу булһа ла, тура.

Бабай уның һөйләнеүенә асыуланған да:

– Мин һинән юл һорамайым, теләгән юлыңа кит, – тигән.

Шулай итеп, былар айырылып китәләр: бабай – уңға, тура, тура булһа ла, бороу юлдан; Ерәнсә – һулға, бороу, бороу булһа ла, тура юлдан киткән. Бабай тура юлдан китһә лә, көнө буйы аҙапланып, батып-сумып йөрөгән: уңға киткән юл бик батҡаҡ, һаҙлыҡлы булған. Ерәнсәнең юлы бороу булған, уның байы* бик таҡыр булған. Шуға ул ыҙаланмайынса ғына бер ауылға яҡынлашҡан.

Ауылға етәрәк Ерәнсәгә өс-дүрт ҡыҙ осраған. Ҡыҙҙар бөтәһе лә утын күтәргән булған. Ул арала булмай, шымшыҡлап ҡына ямғыр ҙа яуа башлаған. Араларында бер ҡыҙ үҙенең бишмәтен сискән дә утын өҫтөнә япҡан.

Ерәнсә уға:

– Туғаным, ниңә һин утын өсөн өҫтөңдө һыулайһың? – тигән.

Ҡыҙ уға:

– Бишмәт һыуланһа, ошо утынды яғам да киптерәм; утын һыуланһа, бөтә өй эсе ас ҡала, – тигән.

Ерәнсәгә был ҡыҙҙың үҙе лә, уның яуабы ла бик оҡшаған. Улар шулай һөйләшә-һөйләшә ауылға барып еткәндәр. Ерәнсә үҙе менән һөйләшкән теге ҡыҙ ҡайһы өйгә барып инер икән тип ҡарап торғанда, батҡаҡҡа батып, бысранып бөткән теге ҡарт килә, ти. Ҡарт та теге ҡыҙ ингән өйгә инеп китте, ти. Тегеләрҙең артынса уҡ Ерәнсә лә барған, йоҡлап китергә рөхсәт итеүҙәрен һораған. Ерәнсәне күреп таныгас, бабай теше-тырнағы менән ҡаршы килгән.

– Юл буйына, теләһә ниндәй мәғәнәһеҙ һүҙ һөйләп, минең башты ҡатырып килде, – тигән.

Ҡыҙ (уның исеме Ҡарасәс булған):

– Ниндәй мәғәнәһеҙ һүҙ һөйләне һуң ул, атай? – тигән.

– Ул миңә: «Ағас ҡаҙанды ҡайнатмайыҡмы, арыҡ атты ашатмайыҡмы?» – тине, тип Ерәнсәнән ишеткәнде түкмәй-сәсмәй ҡыҙына еткергән.

Ҡыҙ:

– Атай, ул һиңә бер ниндәй ҙә мәғәнәһеҙ һүҙҙәр әйтмәгән. Һин үҙең аңламағанһың. «Ағас ҡаҙанды ҡайнатыу» тигәне –

төмәке тартып алмайыҡмы»; «арыҡ атты ашатмайыҡмы» тигәне, «ашап алмайыҡмы» тигән һүҙе булған. «Был юл тура, тура булһа ла, бороу» тигәне лә дөрөҫ: ул юл, бик тура булһа ла, батҡаҡлы, барыуы ҡыйын. Шуға ла бороу булып һанала. «Был юл бороу, бороу булһа ла, тура» тигәне – «юл урау, алыҫ, мәгәр унан барыуы еңел» тигән һүҙ, сөнки ул ҡоро юл булған.

Ҡыҙының ошо һүҙҙәренән һуң атай кеше мосафирҙы йоҡлатып ебәрергә риза булған.

Күмәкләшеп сәй эсергә ултырғандар. Шул ваҡыт Ерәнсә өйҙө түңәрәтеп ҡарай ҙа:

– Өйөгөҙ һәйбәт икән. Тик сағарағы*, ҙур икән, – ти.

Ҡыҙ ҙа аптырап тормаған:

– Сағарағы ҙур булһа, ҡыҫырға була. Буҫағаһы ҙур булмаһын, – тигән.

Сағарағы ҙур тигәне – ҡыҙҙың күҙе ҙур тигән һүҙ булған. Ерәнсә сәсәндең танауы ҙур булған. Буҫағаһы ҙур, тип ҡыҙ шуға төрттөргән.

Шундай һүҙҙәр менән Ерәнсә сәсән ҡыҙҙы һынаған да уны үҙенә ҡатынлыҡҡа һоратҡан. Ҡыҙ Ерәнсәгә ҡарап ҡашын һыйпаған. Шуның менән ошо ҡаш бөртөгөндәй мәһәр бирә алһаң, тигәнде аңғартҡан. Ерәнсә лә аптырап ҡалмаған, сәсен һыйпап күрһәткән, йәнәһе, «ҡаш бөртөгө нимә ул, мин ошо сәс бөртөгөндәй мал бирә алам».

Бабай ҡыҙ өсөн мәһәр итеп бер тоҡ алтын һораған. Ерәнсә ҡайтып, батшаға үҙенең ҡатынлыҡҡа алырға һәйбәт ҡыҙ табыуын, бабайҙың бер тоҡ алтын һорауын хәбәр иткән. Батша алтын бирергә риза булған. Тик ул тоҡ тулырлыҡ булмаған. Алтынды алып, Ерәнсә Ҡарасәстәргә киткән. Бабай ҙур тоҡ алып, алтын алырға сыҡҡан. Ҡарасәс һылыу Ерәнсәгә:

– Шундай тоҡто алтын менән тултырыу мөмкинме һуң? – тип тоҡтоң төбөнә ҡырсынташ һалған да өҫтөнә Ерәнсәнең алтынын һалған.

Ерәнсә сәсән Ҡарасәс һылыуҙы алып ҡайта. Улар һәйбәт кенә йәшәй башлайҙар.

Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, батша Ерәнсәнең ҡатынын күрергә килгән. Бер күреүҙә үк Ҡарасәстең һылыулығына хайран ҡалып, Ерәнсәгә көнләшә башлай. Нисек тә булһа уны тартып алырға уйлай, Ерәнсәгә ҡулынан килмәҫлек йомоштар ҡуша. Шулай бер көн батша Ерәнсәгә таштан, балсыҡтан ике ҡатлы һарай һалырға ҡушҡан. Әгәр үтәмәһә, кәләшен аласағын әйткән. Ерәнсә аптыраған-аптыраған да ҡайтып батшаның йомошо тураһында ҡатынына һөйләгән. Ҡатыны Ҡарасәс һылыу уға, урманға барып, бер нисә тутыйғош балаһы алып ҡайтырға ҡушҡан. Ерәнсә алып ҡайтҡас, Ҡарасәс тутыйғош балаларын «таш», «балсыҡ» тип әйтергә өйрәтә башлаған. Ҡоштар тамам әйтергә өйрәнгәс, Ерәнсә сәсән тутыйғош балаларын

батша һарайына алып барып, һарай башына ултыртҡан да үҙе батша янына ингән.

– Йә, батшам, – тигән ул, – балсыҡтан ике ҡатлы өй эшләргә нәмәләрең әҙерме? Мин ғәскәремде алып килдем, – тигән.

Шул ваҡыт тутыйғош балалары:

– Таш! Балсыҡ!

– Таш! Балсыҡ! – тип ҡысҡыра башлағандар.

Батша тутыйғош балаларының ҡысҡырышыуын йорт төҙөргә килгән ғәскәр тауышы икән тип уйлаған да, ҡурҡып, Ерәнсәне ипле генә ҡайтарып ебәргән.

Бының менән дә еңә алмағас, батша Ерәнсәгә:

– Минең ҡырҡ ҡусҡар тәкәм бар, шуны бәрәнләт, – тип хәбәр ебәргән.

Ерәнсә ҡайтып йәнә ҡатынына кәңәш иткән. Ҡатыны уға:

– Ниңә аптырарға, батша килгәс, үҙ яуабымды бирермен әле, – тигән.

Бик күп ваҡыттар үткәс, батша Ерәнсәләргә үҙе киткән.

Батшаның килә ятҡанын күргәс, Ҡарасәс һылыу тиҙ генә урын йәйә һалып, Ерәнсәне ятҡырып, баҫырып һалып ҡуйған. Үҙе ҡунаҡ ҡаршыларға сыҡҡан. Сыҡһа, батша Ерәнсәне һорай, ти. Ҡарасәс уға:

– Ерәнсә өйҙә лә ул, тик ауырып ята. Бала тапҡандан һуң һаман төҙәлә алмай, – тигән.

Батша быға бик ғәжәпләнгән дә:

– Һе, иҫәр, ир кеше бала табамы ни? – тигән.

Ҡарасәс һылыу:

– Ҡырҡ ҡусҡар тәкәнең бәрәнләгәнен кем күргәне бар? – тигән.

Батша Ҡарасәс һылыуҙың дөрөҫ яуабына аптырап, бер һүҙ ҙә әйтә алмай, боролоп ҡайтып киткән дә яңынан бер хәйлә ҡормаҡ булған. Шунан, ауырыған кешегә һалышып, йәнә Ерәнсәне саҡыртҡан да:

– Мин Ҡарасәс бешергән ашты ашаһам, йүнәлер инем. Һин миңә Ҡарасәс һылыуҙан икмәк бешертеп алып кил. Уның ҡулы бешергәнде генә ашағым килә, – тигән.

Ерәнсә ҡайтып ҡатынына әйткән. Ҡатыны аптырап тормаған, үҙенең һөтөн һауып алған да шуға ҡамыр баҫып икмәк бешергән дә Ерәнсәне батшаға ебәргән. Батша икмәкте ашай ҙа:

– Был икмәк бик тәмле, нимә ҡушып бешерҙе икән Ҡарасәс һылыу? – тигәс, Ерәнсә барыһын да һөйләп биргән.

Батша:

– Мин һеҙгә бүтәнсә бер ниндәй ҙә яманлыҡ ҡылмам: Ҡарасәс һылыуҙың һөтөнә баҫып бешерелгән икмәкте ашаным, шуға ул минең әсәм хөкөмөндә була, мин уға ул хөкөмөндә булам, – тигән.

Шунан һуң батша Ерәнсә сәсәнде, элеккесә, үҙенең иң яҡын вәзире итеп ҡалдырған. Ерәнсә ҡыуана-ҡыуана өйөнә ҡайтып киткән.

Бер көндө батша үҙенең вәзирҙәрен йыйып алған, ти. Тәхетендә ултырған көйө берәм-берәм вәзирҙәрен үҙ алдынан үткәргән, үткән берећенә үҙенең башын һыйпап күрһәткән, ти. Вәзирҙәрҙең береће лә бының айышына төшөнмәгән. Сираттың иң аҙағында Ерәнсә сәсән торған. Батша башын һыйпағайны, Ерәнсә телен сығарып күрһәтте, ти. Шунан батша вәзирҙәренә:

– Йә, ни аңланығыҙ? – тигән.

– Бер ни ҙә аңламаныҡ, – тигәндәр вәзирҙәр.

– Башымды һыйпап күрһәтеүемә һеҙ бер ни тип тә яуап бирә алманығыҙ. Быңа һеҙ яратмаған, һеҙ күралмаған Ерәнсә телен сығарып күрһәтте. Минең баш һыйпауым – «кеше башына бәлә нилектән килә?» тигән һорауым ине. Ерәнсә сәсән телен күрһәтеп: «Бәлә кеше башына теле арҡыры килә», – тине. Бөгөндән башлап Ерәнсә минең иң яҡын вәзирем булып ҡала.

Шулай итеп, Ерәнсә батшаны ла, үҙен күралмаған вәзирҙәрҙе лә еңгән, ти.

## 5. Ерәнсә сәсәндең ҡаҙ бүлгәне

Ерәнсә сәсән бер байҙың өйөнә инә. Теге байҙың ике улы, ике ҡыҙы, бисәһе менән үҙе – алтаулашып, аптырашта ҡалып ултыралар, ти.

– Ни эшләп былай ҡайғырышып ултыраһығыҙ? – тип һораған, ти, Ерәнсә.

– Бына, Ерәнсә, беҙ алтаубыҙ, ҡаҙыбыҙ бишәү генә. Шуны бүлә алмай аптырашып ултырабыҙ.

– Рәхим ҡылып, рөхсәт итһәгеҙ, үҙем бүлеп бирер инем, – тип әйтте, ти, Ерәнсә, – тик миңә бер тоҡсай кәрәк булыр.

Байҙың бер ҡыҙы, йүгертеп, тоҡсай алып килде, ти. Ерәнсә һәйбәтләп кенә биш ҡаҙҙы алып, янына ҡуйҙы, ти. Табындағы кеше һанын да, ҡаҙ башын да иҫәпләп сыҡты, ти. Шунан бүлергә тотондо, ти. Ҡаҙҙың берећен алып байға һондо, ти.

– Һин инде, бай ағай, бисәң менән татыу ғүмер иткәнһең. Инде бынан һуң да һеҙҙе Хоҙай айырмаһын. Бына шуның өсөн һеҙҙең икегеҙгә бер ҡаҙ. Хәҙер инде иҫәпләп ҡарағыҙ: һеҙ икәүгә бер ҡаҙҙы ҡушҡас күпме була?

– Өс була, Ерәнсә, өс.

Шунан Ерәнсә тағы бер ҡаҙҙы алды ла байҙың ике улына һуҙҙы, ти:

– Бына һеҙ ҙә икәү инегеҙ, бер ҡаҙҙы ҡушҡас, һеҙ ҙә өсәү булдығыҙ. Шулаймы? – ти.

– Эйе, эйе, өсәү булдыҡ, – тиештеләр, ти, тегеләр.

Ерәнсә тағы бер ҡаҙҙы алып, байҙың ике ҡыҙына һуҙып:

– Бына һеҙ ҙә, бер ҡаҙ ҡушылғас, өсәү булдығыҙ. Шулай бит? – тине, ти.

– Шулай, шулай, Ерәнсә, – тиҙәр ҡыҙҙар.

Ерәнсә ҡалған ике ҡаҙҙы үҙенә табан тартып ҡуя ла:

– Бынау ике ҡаҙ эргәһенә үҙемде ҡушһам, беҙ ҙә өсәү булабыҙ. Дөрөҫмө?

– Дөрөҫ, дөрөҫ, – тиҙәр тегеләр. – Өсәү булаһығыҙ.

Шунан ни Ерәнсә ике ҡаҙҙы ла бик һәйбәтләп кенә тоҡсайына һалып алды ла, үҙ юлы менән китте, ти.

Ерәнсә сәсән урамдан үтеп бара икән. Быны тағы бер һаран бай күреп ҡалған да саҡырып алған.

– Инеп сыҡ әле, Ерәнсә, – тип әйтте, ти, бай. – Йомош бар.

Ерәнсә инһә, бай үҙенең бисәһе, бала-сағаһы менән йыйылып ултырған, ти. Табын уртаһында батмуста бер ҡаҙ ята, ти.

Бай әйтте, ти, быға:

– Бына ошо ҡаҙҙы ғәҙел генә итеп бүлеп бирә алһаң, сәй эсерермен үҙеңә.

Ерәнсә, еңен һыҙғана биреп, ҡаҙҙы ҡулына алды, ти. Әйләндереп-әйләндереп ҡарап ҡуйҙы ла ҡаҙҙы ботарларға тотоноп китте, ти. Иң тәүҙә ҡаҙҙың башын ҡырҡып алды, ти.

– Бына һиңә, бай ағай, баш кешегә – башы.

Ерәнсә ҡаҙҙың муйынын ҡырҡып алды, ти.

– Бына һиңә, байбисә, бисә кешегә ҡаҙҙың муйыны булһын. «Ир – баш, ҡатын – муйын».

Шунан Ерәнсә, ҡаҙҙың ике тәпәйен ҡырҡып алып, байҙың малайҙарына һуҙҙы, ти.

– Бына һеҙгә, икегеҙгә, малай кешеләргә, ике тәпәй. Ир бала күп йөрөргә, донъя гиҙергә тейеш ул.

Ахыр сиктә Ерәнсә байҙың ике ҡыҙына ҡаҙҙың ике ҡанатын ҡырҡып бирҙе, ти.

– Бына һеҙгә, ҡыҙҙар, икегеҙгә – ике ҡанат. Ҡанат тотһағыҙ, тиҙерәк осоп китерһегеҙ: кейәү тиҙерәк сығыр үҙегеҙгә.

Шулай берәм-берәм һәр ҡайһыһына өлөш биреп бөткәс:

– Һәр кем үҙ өлөшөн алды. Был еренең кәрәге табылманы. Үҙем генә алмаһам, – тип ҡаҙҙың ҡалған яғын үҙе һалып алып, сыҡты ла китте, ти.

## 6. Ҡатыны тоғролоғона инанған бай менән Ерәнсәс

Борон ерән сәсле бер кеше йәшәгән. Шуға уны «Ерәнсәс» тип атап йөрөткәндәр. Бик аҡыллы, бик мут булған, ти, ул. Уның менән телгә килгән бер кеше әҙәм көлкөһөнә ҡалған, ти.

Бер мәл Ерәнсәс ил гиҙергә, донъя күрергә сығып китә. Китеп ултырһа, быға бер бай осрай.

Кем булаһың, ҡайҙа китеп бараһың? – тип һорай теге бай.

– Ерәнсәс булам. Ил гиҙеп, донъя күрергә тип китеп барам. Һин үҙең кем булаһың да, ҡайҙа китеп бараһың? – ти Ерәнсәс.

– Мин фәлән ҡала байы. Оҙон сәфәргә сыҡтым әле, – ти ҙә бай һорай ҡуя. – Ерәнсәс тинең исемеңде. Теге телгә килгән бер кешене әҙәм көлкөһөнә ҡалдырыусы Ерәнсәсме?

– Шул була торғайныҡ.

– Әһә, әләйһәң, йә минең менән булашып ҡара. Һин йолҡоштан отолған, әҙәм көлкөһөнә ҡалған мин булайым. Үҙем зирәк, ҡатыным тоғро. Һинән отолһам, арғымағымды менгән, ошо бүрегемде кейгән, бай исемен йөрөтҡән мин булмайым! – тине, ти, бай.

– Ашыҡма, бай. Ашыҡма. Һәр эштең үҙ мәйеле. Әле сәфәр тотаһың, һау булһаҡ, осрашырбыҙ. Шунда күҙ күрер. Әлегә икебеҙ ҙә юл кешеһе. Юлсының юлын бүлеү яҙыҡ булыр. Юлсының юлда булыуы яҡшы, – тине, ти, күҙен ҡыҫып Ерәнсәс.

Шул һүҙҙән һуң Ерәнсәс бер яҡҡа, бай бер яҡҡа юл алды, ти.

Китеп ултыра, ти, Ерәнсәс, китеп ултыра, ти. Һораша-һораша теге байҙың ҡалаһына барып етте, ти. Өйө эйәһенә оҡшамай ҡалмай тип, ҡала ҡыҙырып йөрөй торғас, яҡшы ғына бер йортҡа барып инде, ти. Инде лә фатир һораны, ти.

– Ирем өйҙә юҡ. Сәфәргә киткән. Ул ҡайтҡансы йәшәһәң, йәшәп торорһоң шул, – тигән ҡатын. Был әлеге байҙың йорто булып сыҡҡан. Бер ҡыҙы, бер улы бар икән. Улар ҙа әлеге байға оҡшағандар ине, ти.

Шулай байбисәлә фатирҙа тора Ерәнсәс. Ҡала күреп йөрөп килә лә өйҙә ҡунаҡ була, йөрөп килә лә ҡунаҡ була. Ерәнсәс һылыу ғына егет булған икән. Ҡалаға килеп арыу ғына кейенеп тә ебәргәс, уғата һөймәлекле кешегә әйләнде лә ҡуйҙы, ти. Байбисә быға эйәләште лә китте, ти. Оҙаҡ та үтмәне, ти, былар ирле-ҡатынлы булып йәшәп алды ла киттеләр, ти.

Бер ваҡыт бай ҡайтыр ваҡыт яҡынлаша. Ерәнсәс ҡатынына:

– Ireң килер мәл етте. Мине итексе тип әйтерһең, – ти.

– Ярар, – тигән ҡатын.

Ерәнсәс, ғүмере итек тегеп ҡарамаған кеше, күн, еп, беҙ, ҡаҙаҡ йүнләп алып, өҫтөнә икенсе кейем кейеп, аш өйөндә шаҡ та шоҡ итек тегә башланы, ти.

Бай ҡайтып инә. Ҡатыны унын алдында өлтөрәп торған була, ти.

– Һин юҡта итексе ялланым әле. Итеге лә кәрәк, ҡатаһы ла кәрәк. Сит-ят ирҙәргә йөҙ-һынынды күрһәтеп, ҡала итекселәре артынан йөрөгәнсе, тигәйнем инде. Һин ни тиерһең? – тигән була, ти.

Бик һәйбәт иткәнһең. Эйҙә, текһен үҙебеҙҙә, – тине, ти,

ире. Ә Ерәнсәс тегеләрҙең һөйләшкәненә ҡолаҡ һала-һала ултыра торғас эстән генә: «Әһә, ярыҡ кәмәгә ултырҙыңмы, бай абзыҡай? Хәҙер арлы-бирле теккән итектәрем өсөн һыҙырып аҡсаңды ла алһам, ни тиер икәнһең?» – тип әйтә, ти.

Шулай аҙна-ун көн үткәйне, Ерәнсәс бай алдына килеп, арлы-бирле теккән итектәренә һатыулаша-һатыулаша артығы менән түләтте, ти. Шунан өҫтөндәге итексе кейемен һыпырып ташланы ла бик ҡупшы егет хәленә инде лә ҡуйҙы, ти.

– Инде, бай абзый, һал бүрегеңде, сығар арғымағыңды. Башҡаһы кәрәкмәй, бай исемең үҙеңә ҡалһын, – тине, ти.

Бай шул саҡ юлда булған һөйләшеүҙе хәтеренә төшөрҙө лә бөтәһен дә аңланы, ти. Бер ағарҙы, бер буҙарҙы, ти. Маңлайынан тирҙәр бәреп сыҡты, ҡулдары ҡалтырай башланы, ти. Хәл юҡ, бүркен һалып тотторорға, арғымағын сығарып бирергә тура килде, ти.

Ерәнсәс ана шулай байҙарҙы мәсхәрә итер булған. Һүҙгә оҫта, хәйләгә шәп булғанға Ерәнсәс сәсән тип йөрөтөр булғандар уны. Аҙаҡ Ерәнсә сәсән булып киткән.

## 7. Ерәнсә сәсәндең һаран байҙы ултыртҡаны

Ерәнсә сәсәнде бер һаран бай эшкә яллаған.

– Күпмегә риза булаһың?

– Мин, бай ағай, күп алмайым, – тигән Ерәнсә сәсән, – хаҡ ярым хаҡ булыр, бер табаҡ борсаҡ булыр. Миңә шул етә.

«Бер табаҡ борсаҡ» тигән һүҙҙе ишеткәс, бай һөйөнөп китә. Ерәнсә сәсәнде алып ҡайтып эшкә ҡуша.

Ерәнсә сәсән эшен бик яҡшы итеп бөтөрөп ҡуя ла бай янына инә.

– Эш бөттө, бай ағай, борсаҡты бир инде, – ти.

Бай әйтә:

– Ҡустым, бөгөнгә борсаҡ юҡ, иртәгә килерһең.

Ерәнсә иртәгеһенә тағы килә. Бай быны тағы алдап ебәрә. Шунан Ерәнсә, бай ғаиләһе менән ашарға ултырғас ҡына, тағы килеп ҡапҡаны ҡаға.

Тәҙрәгә байҙың бисәһе килә.

– Юҡ, юҡ, бай ағайың өйҙә юҡ, – ти.

– Улай икән, – ти Ерәнсә, – бик шәп булды бит әле. Минең йомош, байбисә, һинең үҙеңдә ине. Ҡапҡаңды ас әле.

Шунан тәҙрәгә байҙың ҡыҙы килә.

– Юҡ, юҡ, атайым да, әсәйем дә өйҙә юҡ.

– Уныһы бигерәк тә шәп булды, – ти Ерәнсә сәсән, – минең йомош, һылыу, һинең үҙеңдә ине. Асып индерһәңсе тиҙерәк.

Шунан тәҙрәгә байҙың малайы килгән.

– Юҡ, юҡ, атайым да, әсәйем дә, апайым да өйҙә юҡ, – ти быныһы ла.

– Һай, бик шәп булды бит әле. Мин, егет, һинең үҙеңде күрергә тип килгәйнем. Ас тиҙерәк, – ти Ерәнсә.

Шунан бай түҙмәгән, ти. Үҙе килеп, әрләшә-әрләшә ҡапҡаны асҡан, ти.

– Һай, ҡорогор бәндә икәнһең. Беребеҙ ҙә өйҙә юҡ, тип әйттеләр бит һиңә. Тағы нимә кәрәк?

– Шул берегеҙ ҙә өйҙә юҡ саҡты һайлап килдем дә инде мин, бай ағай, – тигән дә Ерәнсә сәсән, өйгә үк инеп киткән. – Үҙегеҙ өйҙә саҡта килһәм, ашап ултырған ашығыҙ бүленер, тип уйланым. Кеше ашап ултырғанда, ризығын бүлгәнсе, үҙҙәре юҡта ғына кереп, ауыҙ итеп сығыу яҡшы булыр, – тинем.

Шунан бай ни эшләһен, бөтә ғаиләһе менән ҡарап тора, Ерәнсә сәсән туйғансы ашай ҙа, борсаҡты тейәп, үҙ юлына китә.

## 8. Ерәнсә сәсәндең ҡалмыҡ ҡыҙынан отолғаны

Бер ҡалмыҡ ҡыҙы булған. «Үҙе ун өс йәштә генә, үҙе бик отҡор, бик зирәк: берәүҙе лә алға сығармай имеш» тигән хәбәрҙе ишеткәс, Ерәнсә сәсән барып, уны эҙләп табып, күреп, һынап ҡайтмаҡ була. Ауылдан ауылға, йәйләүҙән йәйләүгә һорашып йөрөй торғас, алда йәнә бер йәйләү күреп ҡалды, ти. Шунда тиҙерәк барып етәйем тип китеп ултырһа, бер әбей менән йәш кенә ҡыҙ осраған. Улар тар ғына инештә кер йыуып торалар ине, ти. Барып еткәс, Ерәнсә сәләм биргән. Әбей сәләмде алған.

– Һүҙгә мәргән ҡалмыҡ ҡыҙы ошонда йәшәйме? – тип һораған Ерәнсә.

– Ошонда, – тигән әбей.

– Шул ҡыҙҙы күрергә ине лә мәргәнлеген һынарға ине. Ерәнсә тиклем Ерәнсәнең алдына төшөрҙәй түгелдер ҙә, моғайын?

– Әллә инде, – тине лә, ти, әбей ҡыҙға күҙ һирпеп алды, ти.

– Әбей, шул ҡыҙҙың тирмәһен өйрәтһәңсе.

Шулай тигәйне, ти, Ерәнсә, теге ҡыҙ әбейҙән алда яуап биреп өлгөрҙө, ти.

– Ана, ауыл ятҡан ергә еткәс тә тиҙ табырһың. Туғыҙ һөңгөлө тирмә булыр. Һин эҙләгән ҡыҙ шунда тора.

Ерәнсә сәсән ауылға барып инә. Туғыҙ һөңгөлө тигәне – туғыҙ терәүле тигән һүҙҙер инде ул, тип туғыҙ терәүле тирмәне эҙләп йөрөй башлай. Йөрөй-йөрөй – табалмай. Шунан был арып-талып тағы бер тирмәгә инә. Хужалары быны ҡунаҡ итә. Сәй эсеп, гәпләшеп ултырһа, көн асыртып китеп, тирмә түбәһендәге тишектәрҙән эскә ҡояш нурҙары төшә. Һанап ҡараһа, тишектәр ҙә, нурҙар ҙа туғыҙ, ти. Ҡыҙҙы һынап ҡарап, мәргән һүҙҙә алышмаға килгән сәсән, шунда үҙенең отолғанын аңлаған.

## 9. Ерәнсә сәсәндең кәләш алғаны

Борон Ерәнсә сәсән бер байҙың ҡыҙын кәләшлеккә алырға булған, ти. Шуны белеп ҡалғас, күптәр:

– Ишетмәй ҙә, теле лә юҡ, күрмәй ҙә, – тип уны кире күндерергә тырышҡандар. Шуның өсөн Ерәнсә тәүҙә ҡыҙҙы күрергә булған, ти.

Ерәнсә барған көндө йыйын булған, ти. Аттар сабышы уҙғарылған. Ярышыусылар урам аша үткән. Ерәнсә сәсән байҙың тәҙрәһенән ҡарап:

– Аттар нисек шәп саба! – тип әйткән, ти. Ҡыҙ бер нәмә лә тип яуап бирмәгән, ти.

– Бынау алда берәүһе ҡалай шәп килә, кемдең аты икән? – тип һораған. Ҡыҙ унда ла өндәшмәгән.

– Аттар талыҡты, – тигән, ти, егет.

– Талыҡһа, талыҡҡандыр инде, – тип, ҡыҙ шаршауын асып, бер тапҡыр ғына өндәшкән, ти. Ерәнсә сәсән ҡыҙҙың һаңғырау ҙа, һаҡау ҙа түгеллеген белгән, ти. Шуны белгәс ни, сыҡҡан да икенсе берәүгә барған. Шул кешене яусы итеп ошо ҡыҙға ебәрергә булған, ти. Яусы:

– Исемең кем, фамилияң кем? – тип һораған.

– Исемемде лә, фамилиямды ла әйтеп тормайым, Ерәнсә сәсән тип әйт тә ҡуй, – тип яуап биргән, ти.

Ҡыҙҙың атаһы:

– Исеме, фамилияһы нисек? – тип һорағас, яусы:

– Исемен дә, фамилияһын да әйтмәне, Ерәнсә сәсән тип әйтергә ҡушты, – тигән.

– Сәсән булғас, тиген кеше түгелдер, – тигәндәр ҙә риза булғандар, ти.

– Байлығы күпме? – тип һораған, ти, бай.

– Бер өйөр йылҡым бар, үҙе теләгәнен алыр тип әйтте, – тигән, ти, яусы.

Шунан ижәп иткәндәр ҙә ике малайҙы мал алдыра ебәргәндәр, ти. Малайҙар барғас, Ерәнсә сәсәндең һарайын ҡарайҙар. Ҡараһалар, бер генә айғыр тора, ти. Икенсе урында кәртәһе бармы икән, әллә ошо бер генә айғырмы икән, тип аптырағандар малайҙар.

Иртәгеһенә: «Малды алып ҡайтайыҡ», – тип әйткәндәр.

Ерәнсә сәсән теге айғырҙы күрһәткән, ти. Малайҙар берәү генә булғас, бай риза булмаҫ, тип, айғырҙы алмай ҡайтҡандар, ти.

Ҡайтып ошо хаҡта әйткәс:

– Исеме Ерәнсә сәсән булғас, сәсән кеше тиген түгелдер. Берәү булһа ла, алып килегеҙ, – тип әйткән дә айғырҙы алдыртҡан, ти.

Шулай итеп, бай бер өйөр айғыр алам тип, бер айғыр алған, ә Ерәнсә сәсән кәләшле булып ҡалған, ти.

## 10. Отҡор егет

Борон бер ҡарт, ун-ун биш саҡрым ерҙән, аяғын саҡ һөйрәп ҡайтып килә ятһа, бер йәш егет осраған, ти, быға. Осрап, исәнлек-һаулыҡ һорашҡан:

– Бабай, әйҙә, икәү барайыҡ, – тип әйтте, ти. Бабай ни:

– Берәүҙән икәү яҡшы, тигәндәр, әйҙә һуң, – тип, унын һүҙен ҡеүәтләгән дә башҡаса һүҙ ҡатмаған.

Китеп баралар, ти, былар, китеп баралар, ти. Китеп бара торғас:

– Бабай! – тине, ти, егет.

– Әү! – тигән булды, ти, бабай.

– Бабай, әйҙә, бер-беребеҙҙе күтәрешә-күтәрешә барайыҡ.

– Һине ҡалайтып күтәрәйем мин: үҙем аяғымды саҡ һөйрәп барам...

Егет бүтән бер һүҙ ҙә ҡатманы, артабан атлауын белде, ти. Шулай өнһөҙ-ниһеҙ бара торғас, был икәү бер арыш баҫыуына барып сыҡты, ти.

– Һай, арышы! Алай-былай шаулап ултырмаһынмы! Тик, бабай, уны ашап бөткәндәр икән дә баһаң! – тип телгә килгән егет.

– Ахмаҡ! Ашап бөтмәгә һуң! Орлоғо эсендә бит унын! – тигән, ти, бабай асыуы килеп.

Ярар. Артабан китте, ти, былар. Китеп ултыралар, китеп ултыралар, ти. Китеп ултырһалар, беҙҙең ошо Ташморон саҡлы ғына ерҙә күмәк кеше, тим ағасына һалып алып, мәйет күтәреп китеп бара, ти. Шуны күргәс, теге егет:

*– Үлеме икән был кеше,*
*Тереме икән был кеше?*
*Үлерлекме йәшәүе,*
*Йәшәрлекме үлеүе? –*

тип әйтте, ти.

*– Үлгән тере булырмы,*
*Тере үлек булырмы?*
*Һинең кеүек алйотҡа*
*Юлдаш булғанмын юҡҡа! –*

тип ҡул һелтәп, бабай үҙенең йортона боролдо, ти. Егет унан ҡалманы, ти. Ихатаға ингәс:

Бабай, һыуһатты бит әле, – ти.

Бар, ана, ултыр. Бирерҙәр, – ти бабай ҡырыҫ ҡына.

Ҡарттың ҡыҙы бар икән. Йүгереп йөрөп, атаһының тунын систереп, киптерергә элеп ҡуйҙы ла, аяғынан сарығын һалдырҙы, ти. Ара-тирә тышта ултырған егет яғына күҙ һалғылап ла ала, ти.

Атай, кем балаһы һине көтөп ултыра ул? – ти.

– Һи-и, бер алйот малай ул! Һыу һорай ине. Сығарып бир әле шуға. Эсә һалһын да тайһын. Ултырмаһын унда йән көйҙөрөп! – ти ҡарт.

– Уның алйот икәнен ҡайҙан белдең?

– Ҡайҙан, тип ни, – юлдаш булып килә торғас, бер-беребеҙҙе күтәрешеп барайыҡ, тине.

– Эй, атай, күтәрешеп барайыҡ, тигәне – һөйләшеп барайыҡ, тигәне. Һөйләшеп барһаң, юл ҡыҫҡара.

– Шулаймы икән ни, ҡыҙым?

– Шулай, атай, шулай. Тағы ни тине?

– Бер ерҙә бешеп, шаулап ултырған арыш баҫыуына еткәс: «Эйәһе ашап бөткән икән», – тине.

– Дөрөҫ әйткән икән, атай. Ул баҫыу – бер фәҡир әҙәмдеке булған. Байҙан ул үтескә алған. Ана шул арышты урып һуҡҡас, уны байға бирә. Үҙенә ҡалмаясаҡ. Ана шуны әйткән ул егет.

– Тағы бер хикмәтле һүҙе бар әле уның. Бер мәйетте алып баралар ине: «Тереме икән, үлеме икән?» Үлгән – үлгән инде! Үлгән тере була, тимени! – тине – тип әйтте, ти, ҡарт. Атай улай түгел. Кеше изге эш ҡылһа – мәсет һалдырһа, күпер эшләтһә, юлдар эшләтһә – исеме үлмәй уның. Кеше үлһә лә, уның эше ҡала, исеме ҡала.

– Һи-и-и, балам, яңылыштыҡ бит былай булғас. Бар, инһен әле.

Саҡыралар.

– Юҡ, инмәйем, атайың алйот тине бит мине.

– Юҡ, ул яңылышҡан.

Егет инә. Бергәләп сәй эсәләр. Егет әйтә:

– Бабай, һинең ҡыҙың бик зиһенле икән, мин шундай кәләш эҙләй инем, миңә ҡыҙыңды бир, – ти.

Бабай ризалаша инде. Туй яһатып, егет ҡыҙҙы алып ҡайтып китә. Ул отҡор егет әллә кем түгел, Ерәнсәнең үҙе булған, ти.

## 11. Ерәнсә батша менән Көрәнсә батша

Булған бер Ерәнсә батша, булған Көрәнсә батша. Береһе торған ер башында, береһе – ер аръяғында. Былар бер ваҡыт береһен-береһе ишетәләр:

– Бер-беребеҙгә күренешәйек әле, – тигән Көрәнсә батша.

– Эйҙә-эйҙә, – тигән Ерәнсә батша.

Шулай итеп, Көрәнсә алыҫ сәфәргә сығып китә. Ғәскәре-ние менән килеп етә Ерәнсәнең ере сигенә. Ерәнсә вилайәтенә инергә рөхсәт һорап илсе ебәрә.

Ерәнсә рөхсәт итә. Көрәнсәне бик һәйбәтләп ҡаршылайҙар. Ике батша тормош хәлдәре, донъялары тураһында һөйләшәләр,

байлыктары, нәсел-ырыуҙары, мәғдән, халыҡ тураһында һорашалар.

Һөйләшеп-һорашып бөткәс, Ерәнсә Көрәнсәне табынға сакыра. Үҙе ашарға шалҡан ғына ултырта. Былар хәҙер шуны ашап ултыралар. Шул саҡ Көрәнсә билендәге алтын ҡылысын ала ла, ҡынынан һурып, тубығының аҫтына һала.

Тегенән күрмәксе, хужа ла үҙенең ҡылысын ала ла аяҡ аҫтына һалып ҡуя.

Һөйләшеп ултыралар. Ҡылыстар асыҡ. Былар инде шулай бер-береһенә һөжүмгә ҡараған кеүек ултыралар. Ашап туйғас, эш бөткәс, китер ваҡыт еткәс, хужа һорай Көрәнсәнән:

– Ул хикмәтең ни булды, яртылай ултырғас, ниңә ҡылысыңды алып, асып ҡуйҙың? – ти.

Көрәнсә:

– Әгәр ҙә батша булып тороп, ер аяғы-ер башы ерҙән килгән кешегә хөрмәтем ошо тиһәң, муйыныңды сабып өҙә инем. Ә һин нишләп алдың? – ти. Хужа:

– Мин, ниңә алдым тигәндәме? Әгәр: «Бар хөрмәтем ошомо?» – тип һораһаң, мин һинең башыңды сабып өҙә инем, – ти.

– Мин килмәнем һинең байлығыңды ашарға, – ти Көрәнсә. – Минең үҙемдә лә байлыҡ етерлек. Мин һине күрергә генә килдем, – ти.

– Миңә тыныс, һәйбәт һөйләшеү генә кәрәк ине, – ти.

Ерәнсә уның был һүҙҙәре менән килешә.

Шулай итеп, был ике батша берен-бере һынашып, дуҫлашып, тыныс ҡына тороп киткәндәр, ти.

## 12. Ерәнсә сәсәндең килен эҙләгәне

Борон заманда Ерәнсә тигән бер ҡарт сәсән йәшәгән. Уның улы булған. Улы үҫеп еткәс, кәләш әйттерергә булғандар. Улы башлап һүҙ ҡуҙғатҡан.

– Атай, – тигән ул, – ваҡыт етте бит инде. Кәләш алып бир.

– Яҡшы, – тигән атаһы Ерәнсә ҡарт, – килен алып бирермен, тик ҡуйған шарттарға түҙ. Әгәр түҙә алһаң, бына тигән килен алып бирермен, тигән.

Улы уйлап-нитеп тормаған, ризалашҡан.

Икенсе көндө Ерәнсә ҡарт ат еккән дә улын ултыртып күрше ауылға килгән. Танышдарына инеп сәй эскәндәр. Шунда Ерәнсә ҡарт ни эш менән йөрөүен әйтеп биргән дә:

Нисек, беҙгә килен булырлыҡ ҡыҙҙар бармы ауылығыҙҙа? – тип һорай ҡуйған.

– Һәй, ҡыҙҙар булмай буламы һуң? – тигән хужа биш-алты ҡыҙҙың өйөн өйрәткән.

Сәй эсеп бөткәс, Ерәнсә ҡарт атын егеп, улын арбаға ултыртып алған да бая хужа өйрәткән ҡыҙлы йорттарҙың береһенә

барып туҡтаған. Туҡтағас, һикереп төшкән дә сыбыртҡыһы менән улын яра башлаған. Эй яра, эй яра. Яра торғас, өйҙән бер ҡыҙ йүгереп килеп сыҡҡан да, аптырап:

– Олатай, олатай, ни эшләп улыңды туҡмайһың? – тип һораған.

Ерәнсә ҡарт уға:

– Әйткәнде тыңлай. Шуға туҡмайым, – тип яуап бирә, ти, һаман.

– Бәй, әйткәнде тыңлаған кешене кеше туҡмайҙыр шул? Тыңлаулы кеше аҡыллы була бит! – тигән, ти, ҡыҙ.

– Әйҙә, улым, киттек. Бында эш сыҡманы, – тип, Ерәнсә атын борған да танышы өйрәткән икенсе өйгә барған. Ҡапҡа төбөнә барып туҡтаны ла тотондо, ти, тағы малайын һыҙырырға. Һыҙырып торғанда, был өйҙөң дә ҡыҙы аптырап килеп сыҡты, ти. Баяғыса һорашты, ти, Ерәнсә йәнә баяғы яуапты бирҙе, ти.

Ҡыҙ шунда:

– Аһ, олатай, тыңлаулы кешене ниңә ыҙалатаһың инде? Бик һәйбәт, тыңлағас, – тине, ти.

Ерәнсә ҡарт туҡмауын ҡуя ла:

– Ярар, улым, киттек. Бында ла беҙҙең өлөш юҡ. Табырбыҙ әле, – тип һөйләнә-һөйләнә өсөнсө ҡапҡаға китте, ти. Килеп туҡтағас та, улын тағы туҡмай был. Эй туҡмай, эй туҡмай. Туҡмап торһа, йорттоң ҡыҙы тәҙрәне аса ла:

– Олатай, ни эшләп улыңды туҡмайһың? – тигән.

Ерәнсә ҡарт уға ла:

– Әйткәнде тыңлай бит! Шуға туҡмайым, – тип яуап бирә.

Ҡыҙ ҡысҡырып көлгән дә:

– Нығыраҡ туҡма, олатай! Егет булып бөткән! Ни эшләп кеше әйткәнде генә эшләй ул, үҙе белеп эшләмәй? – тине лә тәҙрәне шарт ябып ҡуйҙы, ти.

Ерәнсә ҡарт улына йылмайып күҙ ҡыҫты ла:

– Әһә, күрҙеңме, улым? Былай булғас, эш беште. Бына ошо инде һиңә тип эҙләгән килен, – тип шул ҡыҙҙы улына кәләш итеп алып бирҙе, ти.

## 13. Һынсыл ҡарт

Элек ҡарттар бик һынаусан, һәр ваҡыт аҡыл менән эш итеүсән, тикшеренеүсән, ҡыҙыҡһыныусан, шуның өҫтәүенә йор һүҙле булғандар. Улдарына кәләште ата-әсә үҙҙәре һайлап, һынап алып бирер булған.

Шундай бер һынаусан, күпте күргән – күпте белгән ҡарт улына кәләш һайларға сығып китә. Ҡырлайсы* булып кейенә, арбаһына һандыҡ, һандыҡтың эсенә булавкалар, тараҡтар һ. б.

нәмәләр тейәп бер ауылға килеп керә. Ә был ҡарттың башында (уйында) хәйлә, шуға күрә кеше күләүенә ҡарамай:

*– Суп йыям, суп килтерегеҙ!*
*Суп кәрәк, күп кәрәк,*
*Суп кәрәк тә күп кәрәк! –*

тип таҡмаҡлап һамаҡлай башлай. Кешеләр быға аптырай – шундай һантый бабай икән, тип торалар-торалар ҙа: «Кәрәк икән, мә», – тип биҙрәләп-биҙрәләп бабайҙың арбаһына суп килтереп һалалар. Бабай тегеләргә булавкалар, тараҡтар һ. б. нәмәләр тарата. Тегеләр күләшә-күләшә был әйберҙәрҙе алалар, һантый ҙа инде был бабай, тип уйлайҙар. Хәҙер бөтәһе лә суптәрен килтереп бөтә. Бер ҡыҙ килтермәгән була, уға ҡарт бабай өндәшә:

– Ҡыҙым, ниңә суп килтермәйһең, әллә сүбең юҡмы?

– Юҡ шул, бабай, бер генә сүбем дә юҡ, – ти ҡыҙ.

– Кит, булмаҫты!.. Бар алып кил инде, тараҡ алырһың.

– Иҙәндәреңде, мейес араларын тырнаштырып һепереп ҡара.

Ҡыҙ әйтте:

– Иҙәндәрҙе әле генә һеперҙем, әҙерәк кенә, бер устай ғына сыҡты суп, – ти. Бабайҙың йөҙө яҡтырып:

– Бына, исмаһам, тырыш, уңған ҡыҙ! – тип, улына кәләшкә шундай ҡыҙ табыуына шатлана:

*Ҡыҙ-ҡатындың егәрлеге –*
*Ҡаҙанлыҡта, усаҡта.*
*Ир-егеттең уңғанлығы –*
*Балта менән бысаҡта.*

## 14. Әғзәм

Күфәр ҡалаһында бер егет йәшәгән. Исеме булған Сабит. Ул гел генә йылға буйына барып тәһәрәт алып, шунда намаҙ уҡып йөрөгән. Бер көндө һыу буйына барһа, алма ағып килә, ти. Сабит алманы тотоп алған да ашай башлаған. Яртыһын ашағас, башына бер уй төшкән бының. «Ни эшләп мин һорауһыҙ-ниһеҙ кеше алмаһын ашайым әле? Эйәһе табылһа, хаҡын түләр инем», – тигән эстән генә. Шул арала бының янына бер ир килеп сыҡҡан. Килгән дә был дәғүә күтәргән:

– Ни эшләп минең алмамды ашаның? – тигән. – Рөхсәтһеҙ кейгәнең өсөн язаһын татырһың, – тип ҡурҡытҡан.

– Улай булһа, мин түләйем.

– Түләр инең дә, мин һин биргәнде алмам шул. Бер һүҙ әйтәм, ҡолағыңды һал әле:

*Өйөмдә бер ҡыҙым бар,*
*Ул ҡыҙымдың бото юҡ,*

*Ҡарар өсөн ҡото юҡ,*
*Ҡулы менән күҙе юҡ,*
*Теле юҡҡа, һүҙе юҡ.*

Шул ҡыҙымды алмаһаң, ярты алманың яҙаһын татырһың, – тип янай был һаман.

*Алай тиһәң, алайым,*
*Әхирәттең ғазабынан*
*Ҡотолайым, ҡалайым, –*

тип әйткән, ти, егет.

*Алмаҡ булды ҡыҙы ни,*
*Ҡабул булды һүҙе ни.*

Шунан был ир егетте өйөнә алып ҡайтып китә.

Кейәү килә тип, бик күп халыҡ йыйыла. Ҡыҙҙы алып киләләр. Егет ҡыҙҙан сирҡана, хәүефләнә. Ҡараһа, уның бөтә ағзаһы ла теүәл. Егет аптырап китә:

– Миңә тигән ҡыҙ аяҡһыҙ, ҡулһыҙ, күҙһеҙ, телһеҙ булырға тейеш ине, – ти.

Ҡыҙҙың әсәһе:

– Ошонан башҡа беҙҙең ҡыҙыбыҙ юҡ, – тигәс, егет туҙына ла китә:

– Һеҙ юрамал мине мыҫҡыл итәһегеҙ. Атаһы ялғансы икән. Алмайым ҡыҙын, – ти.

Ҡыҙҙың атаһы килеп етә.

– Минең һүҙемдә ялған юҡ. «Аяғы юҡ» тип әйтеүем – «ул һис уйынға йөрөмәне» тигәнем. «Күҙе юҡ» тип әйткәнем – «һис бер әҙәмгә бер күҙ һалманы»; «теле юҡ» тип әйткәнем – «буш хәбәрҙе һис ҡасан һөйләмәне»; «ҡулы юҡ» тип әйткәнем – «һис ҡасан кеше нәмәһен рөхсәтһеҙ тотманы» тигәнем, – ти.

Егет ҡыҙҙы алды, ти, ҙур туй яһанылар, ти. Бер нисә йылдан һуң уларҙың улдары тыуа. Алты йәше еткәс, малайҙы мәктәпкә бирәләр. Мәктәптә йөрөй был, йөрөй. Барған һайын муллаһы илап ултыра икән, ти. Был бала:

– Һин ниңә илайһың? – тип һорай.

– Эй, һин нимә беләһең! – тип уныһы малайҙы ҡыуып ебәрә.

Малай, өҙмәй ҙә ҡуймай, өсөнсө тапҡыр килеп һораған. Өсөнсө һорағанында, мулла ни өсөн илағанлығын әйтә:

– Батшабыҙ ҡатыны менән ыҙғышҡан. Ҡатыны уға, һин ғазраилһың, һин йәһәннәм беләклеһең, тигән. Батшабыҙ уға: «Мин улай икән, талаҡ, талаҡ, талаҡ*. Мин һине айырам», – тигән. Аҙаҡтан батшабыҙ үҙенең ғәйептәрен таныған. Ләкин ҡатыны менән торорға хаҡы бармы, юҡмы икәнен белмәй (өс тапҡыр талаҡ әйткән бит инде). Бөтә муллаларҙы йыйып алып, шуны һорай. Муллалар яуап бирә алмай. Шунан батша уйларға беҙгә өс көн ваҡыт бирҙе. Шул арала яуап таба алмаһаҡ, ул

беҙҙең башыбыҙҙы өҙәсәк. Беҙ һаман яуап таба алмайбыҙ әле. Шуға илайым мин, – тигән.

Тыңлап торған да был бала, әйткән:

– Барғанығыҙҙа һеҙ мине лә алып барығыҙ. Мин яуап бирепкарармын, – тигән.

Батша янына баралар былар.

– Йә, яуап таптығыҙмы? – тигән батша.

– Беҙ бер бала алып килгәйнек. Шул бала яуап бирергә теләй, – тиҙәр муллалар.

Батша баланы индерергә ҡуша. Алып инәләр. Батша бынан яуап бирергә теләү-теләмәүен һорай. Бала ризалығын бирә:

– Һин тәхетеңдән төш. Мин тәхеткә менеп яуап бирәйем, – ти.

Батша тәхетенән төшә. Алты йәшлек бала тәхеткә ултырып, батшаға һорау бирә.

– Йә, әүәлге эштәреңдән тәүбәгә ҡайттыңмы?

– Ҡайттым.

– Тәүбәгә ҡайтҡасың, тамуҡтан ҡотолдоң. Хәҙер һинең ҡатының талаҡ түгел. Шулай булғас, ҡатының айырылмаған, үҙеңдеке.

Баланың һүҙен башҡалар ҙа хуплаған. Батша бик ҙур йыйын йыя. Бөтә халыҡты һыйлай. Шул йыйында был балаға Әғзәм* тип исем ҡушалар.

## 15. Ярты алма

Борон заманда бик уҡымышлы, бик әҙәпле бер кеше йәшәгән, ти. Ул шундай дәрәжәлә аҡыллы булған, кешенән рөхсәтһеҙ ҡапҡаһын асып инмәҫ, кеше ишеге алдынан сыбыҡ түгел, сүп тә алмаҫ булған.

Бына бер ваҡыт был аҡыллы кеше арыҡ буйына барған. Белгән доғаларын уҡып, арыҡ һыуында йыуынып ултырғанда, ҡып-ҡыҙыл булып бешкән алма ағып килә, ти. Был кеше, алманы күреү менән, аптырап ҡалған. Тотоп та алған, үҙе лә һиҙмәҫтән, умыра тешләп алған – ярты алманы ашап та өлгөргән. Шул ваҡыт уның башына ошондай уйҙар килгән: «Был кем алмаһы икән? Аңын-тоңон белмәҫтән, ни өсөн мин уны ашаным һуң әле?» Ошо уйҙар менән борсолоп оҙаҡ йөрөгән, ти. Быға тиклем бер кемдең дә әйберенә рөхсәтһеҙ теймәгән кешегә был эш ҙур гонаһ булып тойолған. «Был ярты алманың эйәһен ҡайҙан, нисек табырға?» Ошондай уй менән, ярты алманы тотоп, уның хужаһын эҙләп сығып киткән. Күп һыуҙар кискән, күп ауылдар үткән – алма хужаһын таба алмаған.

Бына бер ауылға барһа «Бер йәш егет ҡулында тотоп торған икән, арыҡҡа төшөп, алмаһы ағып киткән икән»

тигән хәбәр ишетә һәм һорашып шул егетте табып ала. Ул ярты алманы шунда уҡ таный. Теге кеше ярты алманы хужаһына бирә лә:

– Ашалған яртыһы өсөн нимә бирәйем? Һине нисек ризалатайым? – тип һорай. Егет тә аптырап ҡалмай:

– Ҡыҙың булһа, ҡыҙың бир. Башҡаса ризалыҡ бирмәйем, – ти.

Башҡаларҙың әйберен алып өйрәнмәгән был кешегә егеттең был һорауы бик ауыр була, ләкин рөхсәтһеҙ алғас, нисек булһа ла уның ризалығын алырға теләй ҙә ҡыҙын бирергә риза була. Егеткә ҡыҙы тураһында ошоларҙы һөйләй:

– Егет, минең ҡыҙым барлығын бар, уны алһаң уңырһың: уның аяғы ла, ҡулы ла, күҙе лә, ауыҙы ла юҡ, – ти.

Егет аптыраšта ҡалған. Ни өсөн ҡыҙын һораным әле, тип үкенеп тә ҡуя. Ләкин «Егет һүҙе бер булыр тигәндәй, тәүҙә вәғәҙәләшкәс, вәғәҙәне боҙорға ярамай, яҙмышыма яҙғаны шулдыр», тип уйлай ҙа ҡыҙҙы әйттерергә бара.

Бына уның янына еңгәләре бик матур бер мөләйем йөҙлө, оялсан ғына ҡыҙҙы алып киләләр. Егет был ҡыҙға ҡалҡып та ҡарамай. Еңгәләр:

– Кәләшең булаһы ҡыҙ ошо, – тиҙәр. Егет һаман кемделер көтә. Уға тағы ла ошо ҡыҙ уның кәләше икәнен аңлаталар. Егет, тороп, кейенә башлай, еңгәләргә үҙенең ҡайтып китәсәген белдерә. Еңгәләр аптырашып ҡалалар ҙа сәбәбен һорашалар. Егет:

– Эй, еңгәләр! Ҡыҙығыҙҙың атаһы алдаҡсы икән! Алдаҡсының ҡыҙын алырға теләмәйем! – ти. Еңгәләр ары йүгерә, бире йүгерә. Ни өсөн тигәндә, берҙән, кеше алдында көлкөгә ҡалыу ҡурҡыта, икенсенән, алма ашаған ҡайнаға кешенән шыртлай икән былар. Шулай ҙа:

– Егет, ашыҡмай тор әле. Барыһын да асыҡлау кәрәк, – тиҙәр. Егет еңгәләргә:

– Ҡыҙҙың атаһын алып килегеҙ, – ти.

Ҡыҙҙың атаһы килә, бөтә эште энәһенән ебенә тиклем һораша. Егет әйҙә бер үк һүҙҙе ҡабатлай:

– Алдаҡсы ла алдаҡсы!

Шул ваҡыт ҡыҙҙың атаһы егеткә ошолай тип һамаҡлай:

*Аяғы юҡ, тигәнем –*
*Яман эшкә йөрөмәне;*
*Ҡулы юҡтыр, тигәнем –*
*Яман эште тотманы;*
*Күҙе юҡтыр, тигәнем –*
*Нәмәхарам* баҡманы;*
*Ауыҙы юҡ, тигәнем –*
*Яман һүҙҙе әйтмәне, –*

тип әйтеүем булыр, егет, – ти. – Һиңә вәғәҙә иткән ҡыҙым ошо инде, – ти. – Риза булһаң – ҡыҙ һинеке. Риза булмаһаң, нимә менән ризалатырмын. Әйт, егет, һүҙеңде: ни һорайһың? – ти.

Егет, былдай ҡыҙ эләккәненә шатланып, риза булып, ҡыҙҙы алып, ауылдарына ҡайтып киткән, ти.

## 16. Алтмышта ҡыҙ һораткан хан

Бер ваҡыт бер хан һунарға сыға. Үҙе менән вәзирҙәре лә була. Күпмелер ваҡыт йөрөгәс, күҙ асҡыһыҙ ҡом бураны сығып китеп, хан аҙаша. Ҡайҙа барырға белмәй, ары һуғыла, бире һуғыла – юл тапмай, ти. Шулай йөрөй торғас, хан бер ер өй күреп ҡала. Ер өй эсендә ут яна икән. Хан аптырап китә. Былдай ҡом араһында кем йәшәй икән, тип барып ҡараһа, бер ҡыҙ ултыра, ти. Ҡыҙ ханды ҡаршы сығып ала. Иҫәнләшәләр. Ҡыҙ ханға атынан төшөргә ярҙамлаша, атын бәйләп ҡуя, өйгә индереп, ашарға ултырта. Хан ҡыҙҙан:

– Атаң-әсәң бармы? – тип һорай.

– Улар, ҡуйҙарҙы йәшереп, анау тауҙа яталар. Хан бик насар, – тип зарлана, ти, ҡыҙ.

Хан аптырай. Өндәшмәй. Иртәнсәк ҡайтып китә. Вәзирҙәренә үҙенең күргәндәрен һөйләй:

– Ҡомлоҡта бер ҡыҙ йәшәй, – ти, – ата-әсәһе менән һөйләшегеҙ. Улар нимә һораһалар, шуны бирегеҙ, тик ҡыҙҙы миңә килтерегеҙ, – ти.

Вәзирҙәр баралар. Ҡыҙ быларҙы ла ҡаршы сығып ала, аттарын бәйләй, ашата, эсерә. Вәзирҙәр ҡыҙға әйтәләр.

– Атаң-әсәң килһә ине. Улар менән һөйләшәһе һүҙ бар.

– Юҡ, был ата-әсәләр әше түгел. Һеҙ бит миңә килгәнһегеҙ. Миңә генә һөйләгеҙ, – ти.

Вәзирҙәр әйтәләр:

– Һиңә хандың күҙе төшкән. Кәләш итеп алмаҡсы, – тиҙәр.

– Бик яҡшы. Тик миңә мин һораған мәһәрҙе килтерһен – мин барырмын, – тигән ҡыҙ. – Егерме төлкө килтерһен, егерме бүре, егерме ҡаплан, егерме нуҡта, егерме баҡта ат.

Вәзирҙәр әйтәләр:

– Был ғына нимә ул беҙҙең хан кеүеккә! Бер көндә килтерергә була был мәһәрҙе.

Улар ҡайтып китәләр, ханға бөтәһен дә һөйләп бирәләр.

– Ҡыҙ мәһәрҙе үҙе һорай, – тип көлә-көлә ҡыҙҙың теләген әйтәләр.

Вәзирҙәре әйткәнде ишеткәс, хандың башы эйелде лә төштө, ти, үҙе бер нәмә лә өндәшмәҫ булды ла ҡуйҙы, ти. Вәзирҙәр аптырайҙар. Бер ғауымдан һуң хан, телгә килеп:

– Мин хан булып ултырғансы, шул ҡыҙҙы минең урынға ултыртһаҡ, яҡшыраҡ булыр ине, – тине, ти.

Вәзирҙәр тағы аптырашып китәләр.

– Эйе, егерме йәштә кеше йәш була, йәғни төлкө кеүек була. Егерме йәштән ҡырҡ йәшкә тиклем бүрегә әйләнә, йәғни ҡабырға эҙләп кенә йөрөй. Ҡырҡ йәштән алтмышҡа тиклем ҡаплан була. Алтмыштан һикһәнгә тиклем – баҡта ат, һикһән йәштән йөҙ йәшкә тиклем кеше нуҡтаға әйләнә, йәғни тере булһа ла – нуҡта, үле булһа ла – нуҡта...

Хан алтмыштан уҙған була. Хан бик ныҡ оялған да үҙенең ниәтенән баш тартҡан, ти.

## 17. Фәүкинур

Борон заманда бер батша йәшәгән, ти. Ул бик яуыз булған. Бер заман батша ошолай иғлан итә, ти: «Кем дә кем минең ҡырҡ кәзә тәкәмде ҡырҡ көндә бәрәсләтеп, һикһән итеп алып килеп бирә, шул кешегә ярты байлығымды бирәм». Уның был шартына бер кем дә риза булмаған, ти.

Шул ауылда ҡыҙы менән ярлы ғына бер ҡарт йәшәгән, ти. Ҡыҙҙың исеме Фәүкинур булған. Ҡыҙ атаһына әйткән, ти:

– Бар, атай, шул тәкәләрҙе алып кил.

Атаһы риза булмай, ти:

– Батша ҡырҡ тәкәне ҡырҡ көндә һикһән итеп бирергә ҡуша бит, уны нисек итеп һикһән итеп бирәбеҙ, – ти икән атаһы.

Шулай ҙа ҡыҙ атаһын ризалатып, тәкәләрҙе алырға ебәргән, ти. Атаһы барып тәкәләрҙе алып ҡайтҡан да, бик борсолоп, ҡыҙына әйткән, ти.

– Ауыртмаҫ башҡа тимер таяҡ алдың бит, балам, ул ҡырҡ кәзә тәкәһен һикһән иткәндәрен ҡасан күргәнең бар?

Ҡыҙ әйткән:

– Ярар, атай, ҡайғырма. Һуй бөгөн бер тәкәне, – тигән.

Шулай көн һайын бер тәкәне һуйып, ҡырҡ көндә ҡырҡ тәкәне ашап бөттөләр, ти. Шунан ҡырҡ көндән һуң батша:

– Барығыҙ, белеп килегеҙ, тәкәләр һикһәнгә еттеме икән? – тип вәзирҙәрен ебәргән.

Вәзирҙәр килһә, бабай өйҙә юҡ, ти. Фәүкинурҙан һорайҙар икән:

– Атайың өйҙәме?

Фәүкинур:

– Атайым өйҙә юҡ, мунсала улан килтерә, – тип яуап биргән.

– Эй, алйот ҡыҙ, һин нимә һөйләйһең, ир кеше улан килтерәме икән? – тигәндәр.

Ҡыҙ:

– Батшаның тәкәһе бәрәсләйме икән һуң? – тип яуап биргән, ти.

Вәзирҙәр килеп, ҡыҙҙың яуабын батшаға әйткәндәр.

– Эә-ә, күрһәтәйем әле мин ул ҡыҙға, – тип батша ҡыҙға бер тирә биреп ебәргән. – Ошонан ҡыҫҡа ла итмәһен, оҙон да итмәһен, тун тегеп ебәрһен, – тигән.

Ҡыҙ быға яуап итеп, бер сирек кенә сыбыҡ биреп ебәргән:

– Ошоға арҡырыһын да, буйын да үлсәп ебәрһен, – тигән.

Шунан батша тағы отолғанын аңлаған.

Батша вәзиренә әйткән:

– Ҡыҙҙы барып саҡырып килегеҙ, юлдан да килмәһен, юлһыҙ ҙа килмәһен, бүләкле лә килмәһен, бүләкһеҙ ҙә килмәһен, – тигән.

Вәзирҙәр ҡыҙға батшаның шартын әйтәләр. Ҡыҙ:

– Ярай, барырмын, – тип риза булып ултырып ҡала.

Фәүҡинур юлдың ҡырынан ғына килә лә бер турғай тотоп алып, батша янына ингәс, уны осороп ебәргән. Батша күрмәй ҙә ҡалған, турғай ишектән осоп сығып та киткән, ти.

– Йә, аҡыллы ҡыҙ, һин миңә бисәлеккә килергә ризаһыңмы? – тигән батша.

– Бәй, батша һоратҡас, нисек риза булмайым, ти? Тик мин ярлы ҡыҙы бит, – тип яуап ҡайтарған ҡыҙ.

Батша ҡыҙға:

– Мин һине бисә итеп алам, тик мин өйҙә юҡ саҡта минең эшемдән бер ниндәй ҙә бойороҡ бирмәҫһең. Әгәр инде бойороҡ бирә ҡалһаң, мин һине айырырмын, – тигән.

Ҡыҙ риза була. Шулай итеп, улар бергә тора башлайҙар.

Берҙән-бер көндө батша ситкә киткән. Шул саҡ яҡындағы тирмәнән ике кеше килгән, ти. Иртәнсәк тороуға берәүһенең бейәһе ҡолонлаған. Теге ҡолон арба эргәһендә йөрөп ятҡан булған, ти. Шунан ике юлаусы талашҡан да киткәндәр. Берәүһе әйтә, ти:

– Минең арбам ҡолонлаған.

Икенсеһе:

– Минең бейәм ҡолонлаған.

Эй талашалар, ти, эй талашалар. Шунан аптырап, береһенберeһе еңә алмағас, батшаға киткәндәр. Килһәләр, батша өйҙә юҡ, бисәһе генә өйҙә, ти. Былар хәлде һөйләп биргәндәр. Берәүһе әйтә:

– Ҡолон минең арбаның артынан эйәрә.

Шунан Фәүҡинур әйткән:

– Йәш бала, ҡайҙа шылтырауыҡ булһа, шуға эйәрә. Ҡолон да шулай, – тигән.

Шулай итеп, тегеләрҙең ҡолонон бүлеп биргән, ти. Шунан теге кеше аңлаған да ҡолондо кире эйәһенә ҡайтарған. Бисә был ваҡиғаны аҙаҡ батшаға һөйләп биргән. Батша:

– Һин һүҙеңдә тормағанһың икән. Нимә теләйһең, шуны ал. Мин һине айырам, – тигән.

Бисәһе батшаға:

– Беҙ аҙмы-күпме, яманмы-яҡшымы бергә торҙоҡ. Айырылышҡанда, тел еңел әйтһә лә, ҡыйын булыр. Беҙ инде, эш улайға киткәс, былай итәйек. Ҙур мәжлес ҡорайыҡ, һый күп булһын. Иҫергәндең иҫе юҡ. Беҙгә айырылышыу еңел булыр, – тигән.

Батша уйлап тормаған, ризалыҡ биргән. Шунан бисәһе батшаны эсереп иҫертеп, көймәгә һалып алған да ҡайтҡан да киткән.

Китеп ултыралар, ти. Бер заман батша уянып киткән дә:

– Ҡайҙа барабыҙ, мин ҡайҙа? – тип һораған.

Бисәһе:

– Һин минә, ни теләһәң, шуны алып ҡайт, тинең. Эй, батшам, миңә һинән башҡа бер нәмә лә кәрәкмәй, – тигән.

Шунан батша:

– Һинең алдыңа сығып булмаҫ, ахыры, әйҙә кире ҡайтайыҡ, – тигән.

Улар кире батша һарайына ҡайтып, бергә тора башлағандар.

## 18. Аҡыллы ҡарт

Борон-борон заманда булған, ти, бер батша. Уның эргәһендәге ауылда йәшәгән, ти, Абдрахман исемле бик аҡыллы бер ҡарт.

Ул ҡарттың Фәйрүзә исемле берҙән-бер ҡыҙы булған. Ҡарт ҡыҙын күп уҡытҡан.

Ҡарт батшаның яуызлығын яратмаған, уны төшөрөргә теләгән. Батша быны белеп ҡалып, ҡартты үлтерергә булған.

– Алтмышҡа еткән бөтә ҡарттарға бүләк бирәм! – тип алдалап, ҡарттарҙы саҡыртҡан, фәләнсә көнгә килеп етергә ҡушҡан.

Тирә-яҡтағы бөтә ҡарттар йыйылып сығалар. Бер Абдрахман ҡарт ҡына бармаҫҡа була. Үтеп китеүселәр:

– Әйҙә, Абдрахман, бүләк алырға барайыҡ! – тип ҡысҡырып китәләр. Ҡарт:

– Һеҙ нимә һөйләйһегеҙ? Мин етмеш йәштән уҙған инде, – тип әйтеп ҡала.

Икенселәре:

– Һәй, әҙер аҡсанан ҡалаһың! – тиҙәр.

Уларға ҡарт:

– Мин илле һигеҙ йәштә генә, – тип тороп ҡала.

Ҡарттар батшаға баралар. Батша исемлек ҡағыҙҙарын йыйып алып ҡарап сыға, аҡыллы ҡарттың килмәүен белә.

Абдрахман килмәйенсә, бүләк бирмәйем, уны килтерһәгеҙ, өпрәм, – тип ҡарттарҙы сығарып ебәрә.

Ҡарттар буш ҡул менән ҡайтып китәләр.

Батша:

Был юл менән Абдрахманды үлтереп булманы инде. Икенсе хәйлә ҡорорға кәрәк, – ти. – Ҡыҙын һоратам, ҡыҙын бирмәһә, үҙен үлтерәм, – тигән ҡарар ҡыла.

Оҙаҡламайынса батша ике яусы ебәрә. Яусыларына, Абдрахман ҡарт ни һораһа, шуға риза булырға ҡуша. Яусылар килгәс, бабай ҡыҙына:

Һин һөйләш, мин һөйләшмәйем. Үҙенең һарайынан беҙҙең ишек алдына тиклем етерлек буҫтау әҙерләһен. Туй кәрәк-ярактарын килтерһен, – ти.

Ҡыҙ, атаһы өйрәткәнсә, яусыларға һөйләп бирә. Батша яусылары аптырашып ҡайтып китәләр. Ҡайтып, батшаға һөйләп биргәс, батша барыһына ла ризалыҡ белгертә, тик бер шарт ҡуя.

Ҡыҙ бер сирек буҫтауҙан бер салбар, бер бишмәт текһен, – ти.

Яусылар китәләр, батша шартын ҡыҙға әйтәләр. Ҡыҙ, көтөп торорға ҡушып, атаһы янына кәңәшкә сыға. Атаһы менән кәңәшләшеп алғас, ҡыҙ яусыларға:

– Мин батша ҡуйған шарттарға риза, әгәр ҙә ул минең шарттарға күнһә. Бер таптан бер ултырғыс, бер өҫтәл яһаһын. Ултырғысына ултырып, буҫтауҙы өҫтәлгә һалып бесерлек булһын, – тип бер тап киҫәге айырып бирә. Яусылар, батшаға ҡайтып, барыһын да һөйләп бирәләр. Батша: «Ай-һай, был бабай ошоҡа етмәһә ярар ине, – тип уйлап ҡуя. – Барыһына ла ризамын, тик мин барыуға үгеҙҙе бешереп, бешергәндән һуң быҙаулатып торһон», – тип яусыларҙы тағы ҡыҙға ебәрә.

Ҡыҙ быға ла риза була. Көн вәғәҙәһе ҡуйышып, туйға килергә ҡушып ҡайтара.

Батша бөтә ергә «Йәшел буҫтау әҙерләргә!» тигән әмер тарата. Тиҙ арала егерме саҡрымға һуҙылырлыҡ йәшел буҫтау ла килтерелә. Көн вәғәҙәһе менән туйға сығалар. Килешеү буйынса, батша һарайынан ҡарттың ишек алдына ҡәҙәр йәшел буҫтау йәйеп һалына.

Ҡунаҡтарҙың килгән көнөндә ҡарт, ҡыҙынан мунса яҡтырып, мунсаға китә. Ҡунаҡтар килеп, буҫтауҙы тау кеүек итеп өйөп ҡуйҙылар ҙа өйгә инеп ултырҙылар, ти.

Батша бабайҙың өйҙә юҡлығын күреп, ҡайҙа китеүен һорай. Ҡыҙ уға:

Атай мунсаға китте, – ти.

Ни эшләргә?

Бәй, бәпәйләргә.

Бәй, ир кеше бәпәйләйме ни?

– Һинең аҡылың ҡайҙа? Үгеҙҙе һуйғас, иге лә булһын, быҙауы ла булһын, имеш!

Ҡунаҡтар был ҡыҙҙың һүҙенә шаҡ ҡаттылар, ти. Был эш менән дә ҡартты еңә алмағанын күреп, әҙәм көлкөһөнә ҡалған батша, ҡарт менән ризалашып, уға мунсанан ҡайтырға ҡушты, ти. Аҡыллы ҡарт, иҫән-һаулыҡтар менән, күрешеп сыға. Батша ҡарттың ҡыҙын биреүе тураһында риза булыу-булмауын һорай.

– Ҡыҙым Фәйрүзә риза булһа, мин риза, – ти ҡарт.

Ҡыҙ риза була. Боронғоса килешеп, өс көн ҡунаҡ булышып, батша ҡайтып китә. Аҡыллы ҡарт әлеге егерме саҡрым оҙонлоҡтағы буҫтауҙы тирә-яҡтағы ҡарт-ҡороларға өләшеп сыға.

Күп тә үтмәй, батша Фәйрүзәне икенсе ҡатын итеп алып ҡайта.

Биш-алты ай үтеп киткәс, батша йыраҡҡа сәфәргә йыйына башлай. Үҙе юҡта ҡатындарына закон сығармаҫҡа бойора.

Батша китеүгә йыл да үтмәйенсә, ике ҡатын да бала таптылар, ти. Тәүге ҡатыны ҡыҙ бала, Фәйрүзә ир бала килтерҙе, ти.

Балалар тыуып, ике-өс ай торғас, оло ҡатын ир балаға көнләшә башлай. Үҙенең бала ҡараусыһына ир баланы үлтерергә ҡуша. Быньң өсөн күп бүләктәр вәғәҙә итә.

Бала ҡараусыһы баланы йәлләй ҙә үлтерергә баҙнат итмәй. Оло ҡатын бер әйтә, ике әйтә. Ахырҙа бала ҡараусы был турала Фәйрүзәгә еткерә. Был һүҙҙәрҙе ишетеү менән Фәйрүзә атаһына кәңәшкә китә.

Атаһы ҡыҙынан:

– Тирә-йүндә шул көндәрҙә тыуған тағы берәй ир бала бармы, юҡмы? – тип һорай.

– Күршелә генә тимерсенең ҡатыны ун көнгә һуң ир бала тапты, – тип әйтте, ти, Фәйрүзә.

– Һин ул ҡатынға, балаларҙы алмашайыҡ, тип әйт, – тигән.

Фәйрүзә, атаһының кәңәшен тотоп, тимерсенең ҡатынына ошо хаҡта һөйләп бирә. Тимерсенең ҡатыны, ни тиһен, ас кеше ни, риза була. Фәйрүзә тимерсе ҡатынын үҙ янына эшкә ала. Улар, бер кемгә лә һиҙҙермәй, балаларын алышалар. Ләкин һәр кем үҙ балаһын үҙе имеҙә, ти. Был эште берәү ҙә һиҙмәгән.

Балалар бергә йәшәй, бергә үҫә. Уларҙың ҡайһынығы тимерсенеке, ҡайһынығы батшаныҡы, белерлек булмай. Батшаның өлкән ҡатыны ниәтен тормошҡа ашыра алманы, ти.

Бер көндө ике кеше ҡауын-ҡарбуз һатып йөрөй икән. Уларҙың береһенең аты, икенсеһенең арбаһы була. Шундай эҫе көндө батша һарайы тәңгәлендә ял итергә туҡтайҙар. Йоҡлайҙар. Тороуҙарына бейә ҡолонлаған, ти. Яңы тыуған ҡолон, имәм тип, арбаны тәрткөләп йөрөгән. Быны күреп арба эйәһе:

– Минең арба ҡолонлаған, – тип ҡысҡырып ебәргән.

Ат эйәһе:

– Минең бейә ҡолонлаған, – тигән.

Шулай итеп, тарткылаша торғас, үҙ-ара тауышҡа килгәндәр.

Бейәң ҡолонлаһа, бейәнде имер ине. Ул минең арбаны ортколәй, – тигән арба эйәһе.

Ҡысҡырышып, талашып, хәлдән тайғас, улар батша йортона инголәр. Уларға ҡаршы батша ҡатындары сыға. Фәйрүзә йөк ыьына килә лә, ҡолондо ситкә ебәреп, ҡолон килеп бейәнеме, роаныымы имерен күҙәтергә ҡуша. Шул саҡ ҡолон килеп, бейәне имә башлай. Фәйрүзә ҡолондо эйәһенә бирә. Оло ҡатын ның закон сығарыуын эсенә генә һалып ҡуйҙы, ти. Батша айтыу менән Фәйрүзәнең закон сығарыуы тураһында әйтте, ти.

Фәйрүзә, һин мин юҡта закон сығарғанһың. Ни теләһәң, уны ал, мин һине айырам, – тигән батша.

Айырһаң айырырһың инде. Тик мин тәүҙә атайыма ҡайтып киләйем әле, – ти ҙә Фәйрүзә атаһына ҡайтып, ошо хаҡта ойләп бирә.

Ярар, балам, һин уға: «Мин барҙа бер мәжлес ҡорғаның юҡ, бер һыйланайыҡ, шунан мин китермен», – тип әйтерһең. Исергәс, үҙен тейәп ал да кит. Айнып, һораһа: «Миңә һин генә кәрәк», – тиерһең, – тигән ҡарт.

Фәйрүзә батшаға:

Мин барҙа бер мәжлес ҡорғаның юҡ, – тип мәжлес ҡорорға әйткәс, батша риза булды, ти, ашамлыҡ, эсемлек әҙерләтте, ти. Көн вәғәҙәһе менән ҡунаҡ йыйыла. Эсеү башлана. Эсеп, серешеп, тәгәрәп бөтәләр. Фәйрүзә менән бала ҡараусы ғына сермәйҙәр. Батша иҫереп йығылғас, Фәйрүзә:

Миңә һин генә кәрәк, – тип батшаны сығарып арбаға һала ла, туҙан туҙҙырып, ата йортона ҡайтып китә. Икенсе көндө агина уянып китһә, ҡайныһы Абдрахман ҡартта ята икән, ти. Үҙено үҙе ышанмайынса, күҙҙәре аларып, һикереп килеп торҙо, ти.

Ни эшләп мин бында? Кем килтерҙе? Ни эшләп мине итерҙең? – тип һорай икән Фәйрүзәнән.

Ни эшләп һине килтермәй, ти? Һин үҙең әйттең бит: «Нимә кәрәк, шуны ал», – тип. Бына мин һине алып ҡайттым. Һинән башҡа миңә бер ни ҙә кәрәкмәй, – тигән Фәйрүзә.

Ни эшләһен, батша, риза булып, Фәйрүзәне кире алып ҡайтып киткән. Тағы ла бергә тора башлағандар. Оло ҡатындың ылды үҫә, батша улы барлығын белмәй. Балалар дүрт-биш йәшкә лә етәләр. Балалар ат булышып, берәй нәмә урлашҡан уйын уйнашалар. Тимерсе малайы батша булып, батша малайы ат ҡарағы булып уйнайҙар икән. «Аттарын урлаһалар», малайҙар «батшаға» килгән булалар. «Ат дағаларға», «сана табаны төмөрләтергә» тимерсе малайына, йәғни батша малайына барған уйын уйнайҙар, ти.

Батша был эштәрҙе күрә йөрөй. Фәйрүзә быны һиҙеп, тиҙерәк бөтә ғаиләһе менән баҡсаға сығырға саҡыра. Былар сығалар. Шул саҡ батшалағы тимерсе малайы ағастарға күрһәтеп:

– Былай-алай һәйбәтме бынауы ағастар. Ҙурайғас, мин уларҙан күмер яғырмын әле, – ти.

Тимерселәге батша малайы:

– Мин батша булып алһам, был ағастарҙан ҙур-ҙур йорттар һалдырыр инем, – ти.

Батша үҙендәге малайҙың тимерсе улы икәнен белмәй бит инде, балаларҙың һүҙенә йәнә аптырай.

Бер көндө уйын ваҡытында «тимерсе малайы» булған батша улы батша ҡулындағы малайҙы илата. Шунан батша тимерсегә: «Фәлән көндө малайың судҡа килеп етһен. Килгәнендә ат менән дә килмәһен, йәйәү ҙә килмәһен», – тип ҡағыҙ ебәрә.

Бер ҙур кәзә тәкәһенә Фәйрүзә тимерсенең улын мендерә лә батша һарайына ебәрә. Тәкә, баҡырып, батша йортона килеп керә. Батша ғәрләнеп:

– Ниңә кәзә тәкәһе менеп килдең? – ти.

Малай:

– Ни эшләйем һуң, үҙең бойорғас: ат менән дә килмәһен, йәйәү ҙә килмәһен, тигәнһең бит. Осоп килер инем, ҡош түгелмен, – тип әйтте, ти.

Шул саҡта батша йортона тимерсе килеп инә. Фәйрүзә күҙгә алып сыға ла батшаның эргәһенә үҙенең, тимерсе эргәһенә тимерсенең малайын ултыртып:

– Әйтегеҙ, балалар кемгә оҡшағандар? – ти. Батша аптырап:

– Миңә, – ти.

Тимерсе лә:

– Быныһы миңә, – ти. Шул саҡ Фәйрүзә менән тимерсе ҡатыны булған хәлде һөйләп бирәләр.

Шулай итеп, батша менән тимерсе үҙ балаларын кире ҡайтарышып алалар.

Батша оло ҡатынын судҡа бирҙе, ти. Суд уны таш менән атыуға хөкөм итте, ти. Ләкин Фәйрүзәнең ялбарыуын, башҡа ваҡытта хыянатһыҙ булыуына ҡарап, аҙаҡ уны ғәфү итте, ти. Ошо көндән алып улар рәхәт йәшәп алып киттеләр, ти.

Абдрахман ҡарттың батша йортонда булғаны ла юҡ, ти. Йәштәргә аҡыл өйрәтеп, үҙ аҡылы менән рәхәтләнеп йәшәп ята, ти. Хатта батша үҙе лә уға кәңәшкә, аҡыл һорарға килә икән, ти.

## 19. Хан менән ярлы ҡыҙы

Борон-борон заманда бик уҫал бер хан булған. Берҙән-бер көн ул ауға сыҡҡан. Атҡан бер йәнлеге йығыла бара, ти, хан үҙе быға иҫе китеп һөйөнә, ти.

– Мин ниндәй ҡеүәтле кеше, – ти икән, – атҡан һайын бер йән үлтерәм, – ти икән.

Бер аҙҙан һуң хан атҡан йәнлектәрен йыймаға ҡуша, үҙе ял итергә ултыра. Килтерәләр бит быға теге йәнлектәрҙе. Хан ҡарай алдан да ҡарай, арттан да ҡарай; улай ҙа ҡарай, былай да ҡарай, эй ҡарай, эй ҡарай ҙа шунан әйтә:

– Был ниндәй әкәмәт һуң? – ти. – Эстән ҡабыҡ, тыштан тире, быңдай йәнлек буламы? – ти.

Баҡһаң, йәнлек тигәндәрен халыҡ, ханға үс итеп, йәнлек тиреһенә төрлө нәмә тултырып, урманға ултыртып бөткән икән бит, хан шуларҙы атып йөрөгән икән.

Быны белгәс, хан оялышынан шартларҙай булған, асыуланған, яматайланған*, аҡырған-баҡырған да былай тигән:

– Хәҙер үк, – тигән, – минең фарманымды тыңламаға бөтә халыҡ йыйылһын! – тигән.

Халыҡ йыйылған. Ҡайһыныһы көлә, ҡайһыныһы һыҡтай, ҡайһыныһы илай – нимә эшләгәндәрен белмәҫһең.

Хан киләә әкрен генә атлап, оялышынан битен ҡаплап. Ҡысҡыра икән:

– Кем, – ти, – һеҙҙе быңдай яуызлыҡҡа, аламалыҡҡа өйрәтте? – ти. – Был бит, – ти, – үҙегеҙҙең һөйөклө ханығыҙҙы мәсхәрәләү бит! – ти. – Мин, – ти, – асыуымдан шартлармын, – ти, – йә гөгөҙгә таш булып ятырмын, – ти. – Миңә, – ти, – киләһе йомаға хәтле, – ти, – ошо таш ҡойманан кейем тегеп килтерегеҙ, – ти. – Йәнлек яһай белгән ҡулдарығыҙ таштан кейем дә тегә белер! – тигән дә һарайына инеп киткән.

Халыҡ аптырашта ҡалған, илаша-илаша, өйҙәренә таралған. Улар араһында йәше туҡһанға еткән бер бабай ҙа булған икән. Ул да ҡайтып илап ултыра, ти. Һыу һөлөгө кеүек, төҫкә матур ҡыҙы бар икән был ҡарттың. Шул ҡыҙ атаһын шундай хәлдә күргән дә былай тигән:

– Атаҡайым, йәнем, ни булды һиңә? Ниндәй ҡайғы төштө башыңа?

Бабай былай тигән:

– Эй, Хәлимә ҡыҙым, күҙ нурым, һыҡтамай эш булырмы? Ханды үҙең беләһең, уға таш кейем кәрәк, уны нисек эшләмәгә һуң?

Хәлимә эшкә оҫта, һүҙгә тапҡыр, аҡыллы бер ҡыҙ булған икән. Ул атаһына былай тигән:

– Атай, киләһе йомаға ханға бар ҙа былай тип әйт: «Кейем тегергә аршын тауар кәрәк. Тауар булмаһа, – тип әйт, – таштан ни тегеп була. Тик тегеүсе һинең буйыңды үлсәмәй текмәй», – тип әйт, – йәғни мәҫәлән, бер аршын буйы сыбыҡ алабыҙ ҙа, шул сыбыҡты ҡуябыҙ ҙа былай үлсәйбеҙ:

*Бына бында – итәге,*
*Итәгенең етәге;*
*Бына бында – ең осо,*
*Бына бында – яғаһы,*

*Ягаһының ҡапҡаһы.*
*Үлсәмәнек буйынды –*
*Тегә алманыҡ күлдәкте:*
*Тик халыҡҡа япмасы*,*
*Эште беҙгә яҡмасы!*.*

Бына шулай тип әйт, атай, һинең әйткән яҡшы һүҙең халыҡты хан язаһынан ҡотҡарыр.

Атаһы Хәлимәнең һүҙен торорға булған.

Йома еткән. Хандың әмеренә буйһоноп, барлыҡ халыҡ һыҡтай-һыҡтай майҙанға йыйылған. Шул саҡ биҙәкле тунын кейеп, һөңгөһөн алып ҡулға, сыҡҡан, ти, хан алға. Һорай, ти, күҙҙәрен аҡайтып:

– Йәгеҙ, халыҡтар, миңә таштан кейем тектегеҙме? Булмаһа, барығыҙҙы ла киҫтерермен!

Аранан бер аҡһаҡал сыҡты, ти. Ул Хәлимәнең атаһы икән.

– Кейем текмәгә аршын тауар кәрәк. Булмаһа, таштан да тегеп була. Әммә тегеүсе һинең буйыңды үлсәмәй тороп текмәй, йәғни мәҫәлән, бер аршын буйы сыбыҡ алабыҙ ҙа шуны ҡуябыҙ ҙа былай үлсәйбеҙ:

*Бына бында – итәге,*
*Итәгенең етәге;*
*Бына бында – ең осо,*
*Бына бында – ягаһы,*
*Ягаһының ҡапҡаһы.*
*Үлсәмәнек буйынды –*
*Тегә алманыҡ күлдәкте;*
*Тик халыҡҡа япмасы,*
*Эште беҙгә яҡмасы!*

Хан ҡартты тыңлаған да былай тигән:

– Эй, ҡарт, был һүҙҙәрҙе һөйләмәгә һин үҙең белдеңме, әллә берәйһе өйрәттеме?

Аҡһаҡал ҡарт уйлап торған да:

– Минең телгә оҫта, һүҙгә бөткән ҡыҙым бар. Шул өйрәтте, – тигән.

– Ә, шулаймы ни? – тигән хан, ауыҙын йырып ҡына. – Ҡыҙыңа ҡайт та: «Егерме йомортҡанан киләһе йомаға себештәр сығармаһа, башын киҫермен, тип әйтте хан», – тип әйт.

Ҡарт өйөнә ҡайтып киткән дә тағы илай башлаған. Ҡыҙы күреп ҡалған да һораған:

– Атай, ниңә илайһың? Ниндәй ҡайғы төштө башыңа?

– Эй, ҡыҙым, – тигән атаһы, – ниңә иламайым, ниңә һыҡтамайым? Хан тағы ла хәсрәткә төшөрҙө. «Әгәр ҙә, – ти, – ҡыҙың, – ти, – киләһе йомаға егерме йомортҡанан егерме себеш сығарып бирмәһә, башын киҫтерәм, тине».

Ҡыҙы көлөп ебәргән.

– Атай, ҡайғырма! – тигән ул. – Килтер әле уларҙы, бер ашайыҡ рәхәтләнеп, – тигән дә йомортҡаларҙы ҡаҙанға һалып бешерә башлаған.

Йомортҡалар бешкәс, ашап, бер яҡшылап туйынып алғандар. Шунан ҡыҙы былай тигән:

– Атай, – тигән, – киләһе йомаға һин ошо яңы үргән сабатаның эсенә йөн, йомортҡа ҡабыҡтарын һал да ханға алып бар. «Ханым, солтаным, тип әйт, – тигән, – себештәр өс аҙнала сығырға тейеш булһалар ҙа, һинән ҡурҡып, бер аҙнала сыҡтылар. Үҙең беләһең, улар сығыуға ашамаға кәрәк, ярлы хәйерсенең ярмаһы булмағас, себештәр сыҡтылар ҙа, үлделәр ҙә. Ярма бирмәгә һин дә оноткан икәнһең, мин дә белмәнем һорамаға» тип әйт, – тигән.

Бабай шулай итмәгә булған.

Йома еткән. Майҙанға халыҡ йыйылған. Биҙәкле тунын кейеп, һөңгөһөн ҡулға алып сыҡҡан, ти, хан алға. Һорай, ти, күҙҙәрен аҡайтып:

– Йә, аҡһаҡал, кил бында! Ҡайҙа һинең егерме себешең? Һинең оҫта ҡыҙыңдың күрәйек һөнәрен!

Аҡһаҡал алға сыҡҡан да, ҡулындағы сабатаһын алға ҡуйып, былай тигән:

– Ханым, солтаным, себештәр өс аҙнала сығырға тейеш булһалар ҙа, һинән ҡурҡып, бер аҙнала сыҡтылар. Үҙең беләһең, улар сығыуға ашамаға кәрәк. Беҙҙең кеүек ярлы фәҡирҙә ярма ҡайҙан булһын? Себештәр сыҡтылар ҙа, үлделәр ҙә. Ярма бирмәгә һин дә оноткан икәнһең, мин дә белмәнем һорамаға, – тигән дә сабатаны ханға тотторған.

Хан ҡулындағы сабатаһына ҡарай ҙа ҡартҡа ҡарай, ҡартҡа ҡарай ҙа халыҡҡа ҡарай, ти, әй ҡыҙарған, ти. Оялышынан ни әйтергә белмәй, ти. Шунан былай тип әйткән, ти:

– Ярай, аҡһаҡал, дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ! Ҡыҙың бик үткен икән. Ул минең йәш ҡатыным булыр! – тигән.

Шулай итеп, хан Хәлимәгә өйләнгән, ти. Әле лә йәшәйҙәр, ти.

## 20. Бер зирәккә – бер зирәк

Борон-борон заманда беҙҙең яҡтан бик тә алыҫта ятҡан бер илдә йәшәгән, ти, сатраш уйнаусы бик аҡыллы бер егет. Сатрашсылар эллә ҡайҙан килеп уйнаһалар ҙа, уны бер кем дә еңә алмай икән. Еңелмәҫ егеттең даны шул илдең ханы ҡолағына ла барып еткән. Баҡһаң, хан да сатраш уйнарға ярата икән. Ул теге егетте саҡыртып ала ла үҙе менән сатраш уйнарға ҡуша.

– Әгәр еңелһәң, – тигән хан сатрашсы егеткә, – үҙең күтәреп алып китерлек байлыҡ бирәм, ә еңһәң, мин һиңә бер йомаҡ

әйтмәксемен: һин шуға яуап табырһың. Әгәр ҙә мәгәр тапмаһаң, башыңа ҡаза төшөр: язаланырһың!

Хан ҡуйған шартҡа егет риза булған һәм былар, ҙур келәмгә ултырып, икәүләшеп сатраш уйнай башлағандар.

Хан нисек кенә тырышмаһын, егетте ота алмаған. Шунан ул, тамам асыуланып, тегегә былай ти икән:

– Бына һиңә, егет, бер йомаҡ: ҡаҙанда ҡайнаған һөттөң нимә уйлауын бел һин. Әгәр шуны белмәһәң, мин һинең башыңды өҙөргә ҡушасаҡмын. Шуны белеү өсөн, һиңә бер йыл ваҡыт бирәм. Бар, белеп кил, – ти.

Ни эшләмәк кәрәк – егет хандың әмеренә буйһона, сөнки уның ҡылығын яҡшы белә икән: бер әйттеме, һүҙенән ҡайтмай.

Егет, уйланып тора-тора ла, башы һуҡҡан яҡҡа сығып китергә мәжбүр була. Ул көн бара, төн бара. Осраған бер кешегә әлеге йомаҡты әйтә. Әммә уға береһе лә яуап бирә алмай. Шулай килә торғас, ул бер аҡһаҡ юлсыға тап була. Артабан улар икәүләп китәләр.

Бер мәлде быларға мәйет күтәреп килгән кешеләр осрай.

Егет шунда юлдашын туҡтата ла былай тип һорай икән:

– Белергә ине, был тере мәйетме икән, әллә үлеме?

Аҡһаҡ быға ғәжәпләнә, шулай ҙа яуап бирә:

– Тере мәйет була тиме ни? Мәйет үле була инде ул! Ана, күпме туған-тыумасаһы артынан илап бара ла баһа!

Улар бергәләп йәнә байтаҡ юл үтәләр. Бер заман иген баҫыуына барып сыға былар. Егет башаҡтарын бәүелтеп ултырған игенгә ҡарай ҙа йәнә:

– Белергә ине, урылған игенме икән был, әллә урылмағанмы? – тип һорай.

Аҡһаҡ тамам аптырауға ҡала: берсә игенгә, берсә юлдашына ҡарап ала. Яурындарын һелкетеп ҡуя. Ләкин бер ни тип тә өндәшмәй.

Ул арала булмай, көн кискә ауыша. Юлсылар урманға яҡынлашып килгәндә, аҡһаҡтың ныҡ ҡына йонсоуын күреп, егет:

– Бар, урманға инеп үҙеңә өсөнсө аяҡ һайлап ал! – ти.

Аҡһаҡ инде, юлдашын бөтөнләй аҡылһыҙға һанап, ҡулын һелтәй.

Шулай бара торғас, улар Аҡһаҡтың өйөнә килеп етә. Ҡараңғы ла төшә. Аҡһаҡ шул сәбәптән: «Донъяның бер диуанаһы икән, төндә йә эт-ҡошҡа юлығыр», – ти ҙә юлдашын үҙ өйөндә ҡундырып сығарырға була.

Егетте тышта ҡалдырып, инә һалып, унан ишеткәндәрен ҡыҙына һөйләп бирә. Был ҡыҙ бик тә зирәк булған. Атаһы һөйләгәнде тыңлап бөткәс, бер ҙә иҫе китмәй генә:

– Бер ахмаҡ инде шунда, – тип һүҙен бөтөрөүгә:

– Ҡунаҡтың һорауҙары бик урынлы, атай. Кешене күмгәндә, уның йә балалары, йә иҫән саҡта ҡылған һәйбәт эштәре булһа, ул – тере мәйет, ә инде балалары ла, кешегә файҙа

[..]илтергән һәйбәт эштәре лә булмаһа, ул үле мәйет инде. Һин [..]ымаҡ тигән егет бик аҡыллы булған.

Яҡшы, – тигән атаһы был яуапты ишеткәс. – Баҫыуҙа үҫеп [..]тырған игенде күргәс, ул былай тигәйне: «Урылған игенме [..]кән был, әллә урылмағанмы икән?» Бынының нисек аңларға?

Бында ла аптырарлыҡ бер ни ҙә юҡ, атай. Әгәр баҫыу [..]ҡаһы, бурысҡа батҡан булһа, игене урылған булыр. Әгәр ул [..]урысһыҙ булһа, игене урылмаған, тип әйтергә теләгән.

Мин арығас, ул миңә, урманға инеп, өсөнсө аяҡ һайлап [..]ырға ҡушты. Бынынына ни тиерһең?

– Бик дөрөҫ әйткән. Һинең арығаныңды күргәс, ул һиңә таяғын барыр өсөн урмандан таяҡ ҡырҡып алырға кәңәш биргән. [..]сөнсө аяҡ тигәне – таяҡ булыр.

Ҡыҙы аңлатып биргәс, юлдашының аҡыл эйәһе икәнлегенә [..]өнгән аҡһаҡ уны өйгә саҡырып индергән дә, ҡулын, битен [..]уҙырып, табын түренә ултыртҡан, ти. Егет аталы-ҡыҙлының [..] һөйләшеүҙәрен тыңлап торған икән. «Хандың йомағына [..]апты, тапһа, тик ошо ҡыҙ ғына табыр», – тип уйлаған.

Табында ултырғанда, ни сәбәптән оҙон юлға сығыуын әйтеп [..]ргән. Уны тыңлап бөткәс, ҡыҙ былай ти:

– Юҡҡа аптырағанһың икән. Был йомаҡты сисеү бер ни түгел. Бар, ҡайт та ханға әйт: «Ҡайнаған сағында, һөт утҡа һәр [..]ҡыт киҫәтеү яһай: «Ҡабаланма, ут, өтәләнмә. Асыуландырһаң [..]шып китеп, һине һүндереп ҡуйыуым бар!..»

Ана шулай итеп, ҡыҙ үҙенең зирәклеге арҡаһында егетте [..]лемдән ҡотҡарған, ти. «Үҙ тиңемде табыуым ошолор», – тип, [..]т яусы ебәреп, уны кәләш итеп алған, ти.

«Бер зирәккә – бер зирәк» – тигәндәре шул була инде.

## 21. Иң тәмле нәмә

Борон-борон заманда бер бабай менән әбей йәшәгән, ти. Улар [..]ик ярлы торғандар, аслы-туҡлы көн иткәндәр. Уларҙы ҡарт [..]өндә ҡарап, тамаҡтарын туйҙырырлыҡ улдары булмаған. [..]улған береһе үлеп торған. Тик бер ҡыҙҙары ғына ҙурайып ки[..] алған. Ҡыҙ үҙенең һылыулығы менән тирә-яҡта дан тотҡан. [..]ның даны хан улына ла килеп ишетелгән. Шунан ул һылыу [..]ҙҙы күрергә килгән. Күргән. Шул бер күреүҙән ғашиҡ бул[..] да ҡуйған. Егетте ҡыҙ ҙа оҡшатты, ти. Хан улы яусы [..]әреп һоратҡас, ҡыҙҙың ата-әсәһе ҡаршы килеп тормаған. [..]кәп уҡытып, ҡыҙҙы алып, ҡайны йортонда бер нисә көн тор[..] да хан улы ҡыҙҙы алып ҡайтып та киткән. Киткән саҡта [..]а-әсәһе ҡыҙға:

Төшкән ереңә барғас, беҙгә күстәнәскә тәмле берәй нәмә [..]ерһең, – тигән.

Ебәрермен һуң, – тигән ҡыҙ.

Килен төшөргәс, хан өйөндә ҙур мәжлес ойошторолған. Ярлы ата-әсәһе ҡулында йәшәгән саҡта ғүмерҙә күрмәгән бик күп төрлө тәмле-тәмле ашамлыҡтар менән табын тулған. Быларҙың ҡайһыныһын күстәнәскә ебәрергә булыр икән тип, ҡыҙ бөтә ашамлыҡтарҙы ла тәмләп ҡарарға булған. Тәмләп йөрөй, тәмләп йөрөй. Тәмләп йөрөй торғас, бик ныҡ һыуһап киткән дә был һалҡын һыу эскән. Уға рәхәт булып киткән. Һыу бөтә нәмәләрҙән дә тәмлерәк тойолған.

## 22. Атаһын тоҙ кеүек яратҡан ҡыҙ

Батшаның өс ҡыҙы булған. Бер ваҡыт батша ҡыҙҙарын саҡырып алған да һорай икән.

– Һеҙ мине нисек яратаһығыҙ?

Иң оло ҡыҙы әйткән:

– Атай, мин һине балдан да татлы итеп яратам.

Икенсеһе:

– Шәкәрҙән дә татлы итеп яратам, – тигән, ти.

Иң кесе ҡыҙы:

– Мин һине тоҙ кеүек яратам, – тигән.

Батша өлкән ҡыҙҙарының яуабына һөйөнгән. Ул мине тоҙ кеүек әсе итеп ярата икән, тип кесеһенең һүҙенә бик көйөнгән. Шуның үсен алмаҡсы булып, батша ике ҡыҙын ике батшаға кейәүгә биргән, иң кесеһен иң насар кешегә бирергә ҡәһәтләнгән.

Бер әбейҙең бер генә улы булған була. Егерме биш йәше тулһа ла, һаман бишектә ята икән был егет. Батша ҡыҙын шуға бирмәксе булған. Оҙаҡламай ҡыҙҙы шул егеттең йортона оҙатҡандар, ти.

Ҡыҙ теген тегә, сигә икән, таҡыя тегә, бәйләй. Үҙе был әйберҙәрҙе әбейҙән һаттыра икән. Бер ваҡыт әбей тағы ла баҙарға йыйына башлаған. Килене унан бер-ике сәнскеле сыбыҡ алып ҡайтыуын һораған. Әбей сыбыҡ алып ҡайтҡан. Килен кеше ошо сәнскеле сыбыҡ менән бер-ике тапҡыр егеткә һуҡҡан икән, егет бишектән һикереп төшкән дә шунда уҡ эшкә керешкән. Ҡыҙ уны эшкә өйрәтә. Ә ул көндәм эшләй, ти. Егет бик эшсән булып сыға. Былар шулай итеп бик яҡшы ғына йәшәп алып китәләр.

Бер ваҡыт ҡыҙ үҙенең атаһы менән әсәһен ҡунаҡҡа саҡырырға булған. Ҡыҙҙың әсәһе:

– Барайыҡ, – тип әйтә, ти. Ә атаһы:

– Бармайыҡ, йөрөмәйек, – тип тартыша, ти.

Шулай ҙа, еңешә торғас, барырға булалар.

Ҡыҙ һыйҙы бик яҡшы итеп әҙерләгән, ти. Өҫтәлдә йәнең ни теләй, барыһы ла бар, ти. Ул ашамлыҡтарҙы шундай матур итеп бешергән, ти, уларға ҡараһа, ашағыһы килмәгән кешенең

...ағыһы килә башлаған, ти. Ҡунаҡтар өҫтәл тирәләй ултырышҡандар. Улар тәмләп-тәмләп ашай башлағандар. Кешеләр ...ай, ҡыҙҙың атаһы ашамай тик ултыра, ти. Баҡһаң, теге ҡыҙ ... атаһына бөтә нәмәне лә тоҙһоҙ итеп әҙерләгән икән, ти. Шунда батша үҙенең хатаһын аңлаған.

Эй, ҡыҙым, мин яңылышҡанмын. Ысынлап та, тоҙһоҙ бө... нәмә лә тәмһеҙ була икән, – тип үҙенең элекке хаталары өсөн ...ынан ғәфү үтенгән дә күп итеп байлыҡ бүлеп биргән, ти.

Шул ваҡыттан алып улар бик оҙаҡ татыу, матур тормош ...ергәндәр.

## 23. Яҡшы ҡатын яман ирҙе әҙәм итә

Борон-борон заманда бер яуыз батша йәшәгән, ти. Берҙән...ер көндө «ҡаңҡ-ҡаңҡ-ҡаңҡ» тип ҡаңғылдашып ҡыр ҡаҙҙары ...өп баралар, ти. Батша вәзиренә әйткән, ти:

Улар нимә тип баралар, беләһеңме? Һиңә өс көн бирәм. Шул ҡыр ҡаҙҙарының нимә тип ҡаңғылдашып барғандарын ...мәһәң, мин һине дарға аҫып үлтерәм.

Вәзир бик ныҡ ҡурҡҡан, ни эшләргә лә белмәгән, ти. Шунан бер әбей эргәһенә барған. Теге әбей әйткән:

Уны тик батшаның ҡыҙы ғына белә. Һин шунан барып ...ора.

Батшаның ҡыҙы вәзирҙе бик йәлләгән дә әйткән:

Ул ҡаҙҙар: «Яман ирҙе яҡшы ҡатын әҙәм итә», – тип һөйләшеп китеп баралар, – тигән.

Өс көн үтеп киткәс, батша вәзирҙе саҡырта. Батша:

Йә, белдеңме? – тип һораған.

Вәзир:

Белдем, – тип батша ҡыҙы өйрәткән яуапты әйткән.

Батша:

Һиңә быны кем әйтте? Әгәр ҙә дөрөҫөн генә әйтмәһәң, мин һине дарға аҫып ҡуям, – тип ҡурҡытҡан.

Мине йәлләп, ҡыҙың әйтте, – тигән вәзир.

Ҡыҙына батшаның бик асыуы килгән дә унан үс алмаҡсы ...ған. Шул ҡалала бер ярлы ғына, етем, хәйерсе бер егет ...әгән, ти. Батша шуны эҙләтеп ала ла, ҡыҙы менән икәүһен ...е урман, ете тау, ете диңгеҙ аша ебәрттерә.

Батшаның ҡыҙы теге етем малайҙы йыуындыра, кейендерә тәрбиәләп кеше итеп ала.

Ҡыҙ көн һайын уҡ, ян эшләй, йәнлектәр ата, шул йәнлектәрҙең тиреһен һуйып алып киптерә, ти. Шулай итеп, былар ...н итәләр, ти.

Берҙән-бер көндө былар янына ял итергә бер бабай туҡтаған, ти. Былар уны ашатҡандар, эсергәндәр – ҡунаҡ иткәндәр. Теге бабай:

– Хәҙер ошонан каруансылар үтергә тейеш. Уларҙың бер алама тайҙары, бер кәнтәй эттәре булыр. Һеҙ тирегеҙҙе һатҡан хаҡҡа шуларҙы һорағыҙ, – тигән дә үҙ юлы менән киткән, ти.

Шунан күп тә үтмәгән, тире йыйғыс каруансылар күренгән. Улар бик күп тире йыйғандар, ти. Былар ҙа тиреләрен һатып, бер алама тай менән кәнтәй эт алып ҡалғандар, ти.

Каруансылар киткәс, ҡатын тәрбиә ҡыла торғас, теге алама тай – толпарға, кәнтәй эт арыҫландай һунар этенә әүерелде, ти. Егет ир ҡорона тулып, толпарҙы менеп, эт эйәртеп һунарға йөрөй башланы, ти.

Бер заман теге батша вәзирҙәрен эйәртеп урманға болан ауларға сыға. Йөрөйҙәр былар, йөрөйҙәр – бер ҙә тота алмайҙар, ти. Шунан бер заман боланды ҡамап алып, һуғабыҙ ғына тиһәләр, теге болан батшаның башынан аша ырғып сығып ҡаса. Шул ваҡытта көтмәгәндә урман араһынан килеп сыҡҡан бер кеше боланды һуға. Теге кешенең әҙерәк ҡулы яралана. Батша ебәк ҡулъяулығын ала һалып, теге боланды һуҡҡан кешенең ҡулын бәйләгән. Ҡулъяулыҡта батшаның исеме яҙылған була. Батша был егеттең батырлығына, оҫҡорлоғона бик аптыраған, уның кем икәнен белергә тип, ҡайтҡас, кеше ебәрткән. Уға:

– Бер ерҙә бер ҡатын менән бер батыр егет йәшәй, – тип килеп әйтәләр.

Батша үҙе китә күрергә. Барһа, болан һуҡҡан егеттең яраһын бәйләп ебәргән ҡулъяулығын йыуып, киптерергә элеп ҡуйғандар. Өйҙән бер ҡатын килеп сыға. Ҡараһа – ҡыҙы. Ҡыҙ ҙа атаһын танығаn. Таныған да килеп күрешеп:

– Бына, атай, мине хурлап хәйерсе малайға ҡушып ебәрһәң дә, хур булманым. Етем егетте лә хур итмәнем, әҙәм иттем, – тигән.

Ана шунан ҡалған, ти, «яҡшы ҡатын яман ирҙе әҙәм итә» тигән һүҙ.

Батша ҙур туйҙар яһап, кейәүен батша иткән, ти.

Беҙҙә булдыҡ ул туйҙа. Эстек – иҫермәнек. Ашаныҡ – туйманыҡ. Беҙҙе ялҡмай тыңлаусыларҙы хәбәр менән һыйланыҡ, әкиәтте ҡуйманыҡ.

## 24. Ҡаҙҙар ни тиҙәр?

Бер ваҡыт батша вәзире менән баҡсала һөйләшеп ултыра икән. Шул саҡта һауанан ҡыр ҡаҙҙары ҡысҡырышып үтеп киткәндәр. Шунан батша вәзирҙәренән һорашырға керешкән.

– Эй, вәзир әфәнде, һин бик күп китаптар уҡыған кеше бит инде. Әйтсе, һауала осҡан ҡаҙҙар ни хаҡында һөйләшәләр икән? – тигән.

– Эй шаһым, – тигән вәзир. – «Юлға сыҡһаң, иптәшең үҙең-

ған яҡшы булһын. Яман дуҫтан һаҡлан, яҡшы дуҫҡа таян», – тип һөйләшәләр, – тигән.

Вәзиренең был яуабынан батша бер ҙә ҡәнәғәтләнмәгән.

Ҡаҙҙарҙың һөйләшеүҙәре, һәр бер һүҙҙе айырым-айырым ҡысҡырыуҙары былай тигән һүҙҙәргә бер ҙә оҡшамай бит. Һин уларҙың тауыштарын ысынлабыраҡ тыңлап ҡара әле, – тигән.

Мәгәр был арала ҡаҙҙар йыраҡлашҡан, тауыштары ишетелмәй башлаған. Вәзир урынынан торған да ҡаҙҙар осоп киткән яҡҡа ҡарай йүгергән. Йүгерә икән вәзир, эй йүгерә икән. Йүгерә торғас, ҡаланан сығып киткән. Китеп бара торғас, бер ауылға барып ингән. Һаман йүгерә икән вәзир. Күнәк көйәнтәләп, бик сибәр бер ҡыҙ һыу алып, тыҡрыҡтан сығыуы менән, тыны бөтөп, йүгереп барыусы вәзирҙе күргән.

– Бабай, ниңә йүгерәһең? Әллә янғын сыҡҡанмы? – тигән ҡыҙ.

Вәзир күкрәген тотоп, һулыуын* көскә алып:

– Эй балам, – тигән, – күптән түгел ошонан ҡыр ҡаҙҙары уҙып киттеләр. Улар ҡысҡырышып баралар ине. Батша минән: «Шулар нимә тип осалар?» – тип һораны. Мин яуап бирә алманым. Ҡаҙҙарҙың тауыштарын яҡынан тыңлап ҡайтайым тип, арттарынан барам, – тигән вәзир.

Ҡыҙ матур итеп йылмайып көлгән дә:

– Бабай, осҡан ҡаҙҙар артынан ҡыуып етә алмаҫһың, йығылып үлерһең. Мин шишмәнән һыу алған саҡта, улар минең түңгәлдән ҡысҡырып осоп киттеләр. Уларҙың ни тигәнен мин бик яҡшы аңланым. Улар: «Ирҙәрҙе әҙәм иткән дә ҡатындар, әрәм иткән дә ҡатындар», – тип һануз* бер һүҙҙе ҡабатлап ҡысҡырышалар ине, – тигән.

Вәзир ҡыҙҙан ишеткән һүҙҙәрҙе батшаға ҡайтып әйткән. Батша вәзирҙең ҡаҙҙарҙы ҡыуып етеүенә ышанмаған.

– Бер юлы ике тапҡыр алдамаҡсы булаһың. Беренсе – ҡаҙҙар артынан ҡыуып еттем, тип, икенсе – улар шулай, шулай тип һөйләшәләр, тигән булаһың. Быларҙы һиңә кем әйтте? Әйтмәһәң, хәҙер мин һине вәзирлектән сығарып ташлайым, – тигән.

Эш былайға киткәс, вәзир бер ауылда һыу алып ҡайтыусы бик сибәр ҡыҙ әйтеүен иҡрар итергә* мәжбүр була. Батша шунда уҡ ул ҡыҙҙы тотоп килтерергә ҡушҡан. Вәзир ауылға тағы барған. Ҡыҙ һыу алып ҡайтҡан тыҡрыҡ тапҡырындағы йортҡа кергән. Ҡыҙ сәстәрен тарап ултыра икән. Ул кисәге бабайҙы шунда уҡ таныған да хөрмәт менән түргә ултыртҡан, сәй ҡайнатып, хазинала бары менән вәзирҙе һыйларға керешкән. Вәзир һүҙ башлаған:

– Мин кисә һин өйрәткән яуапты батшаға әйткәйнем. Батша минең ҡаҙҙар артынан ҡыуып етеүемә ышанманы. «Үҙең белмәгәнһең, өйрәтеүсене табып килтер ҡаршыма» тигәс, сара таба

алманым, һине батша янына алып китергә килдем, ҡыҙым, – тигән.

Ҡыҙ йылмайған да:

– Ниңә бармаҫҡа? Барам мин. Батша ҡаршыһына һис ҡурҡмайса барам, – тигән.

Вәзир ҡыҙҙы батша һарайына алып барған. Батша ҡыҙҙан һораштыра башлаған.

– Нихәл, ҡыҙым? Ҡаҙҙарҙың һөйләшеп барыуҙарын ишеттеңме? Нимә һөйләп остолар? – тигән.

Ҡыҙ үҙенең яуабында:

– Ишеттем, шаһым. Улар: «Ирҙәрҙе әҙәм итеүсе лә ҡатындар, әрәм итеүсе лә ҡатындар», – тип баралар ине, – тигәс, батша:

– Ҡаҙҙарҙың шулай тип осоуҙарына берәй төрлө дәлил бармы һуң? – тип һораған.

Ҡыҙ былай тигән:

– Бер батшаның йәш кенә ҡатыны булған. Батша ҡарт булғанға күрәлер инде, йәш ҡатын батшаны һис яратмаған. Батшаның бер хеҙмәтсе егете булған. Йәш ҡатындың шул хеҙмәтсе егеткә дәрте килгән дә көн һайын егетте үҙ янына саҡыра икән. Егет ҡатындан шикләнеп, ул саҡырған урынға бармай икән.

Ниһайәт, батша өйҙә юҡ саҡта, батша ҡатыны бер аҫрау ҡыҙ арҡылы хеҙмәтсе егетте бүлмәһенә саҡыртҡан, йомош ҡуша, йәнәһе. Хеҙмәтсе егет батша ҡатынының бүлмәһенә ҡурҡа-ҡурҡа ғына керә. Егет килеп кереү менән, батша ҡатыны уны ҡыҫып ҡосаҡлап үбергә лә керешкән. Хеҙмәтсе егет, ҡурҡып, тиҙерәк бүлмәнән сығып китергә тырыша, ҡатын сығармаҫҡа тырыша икән. Ниһайәт, егет бүлмәнең ишеген бәреп сыҡҡан да ҡаса башлаған. Ҡатын егетте тоторға артынан ҡыуа сыҡҡан икән, шул ваҡытта батша ҡайтып килгән. Осрашҡас, батша:

– Ни хәл бар? Нимәгә йүгерәһең? – тигән.

Ҡатын:

– Ана, күр хеҙмәтсеңде. Һин юҡтан файҙаланып, минең бүлмәмә инеп, миңә йәбешмәксе була, оятһыҙ. Хәҙер үк аҫтырып үлтерт шуны, – тип ҡысҡырған.

Батша аңын-тоңон һорашып тормаған, хеҙмәтсеһен, бисә һүҙе менән, аҫтырып үлтерткән. Егетте үлтергәс, ҡатын бик ҡайғырған. Ҡайғыра торғас, һағышына түҙә алмай, үҙен-үҙе ағыулап үлтергән. Ҡатынын бик ратҡанлыҡтан, батша уның үлемен күтәрә алмаған, хәсрәтенән ул да үҙен-үҙе ағыулап үлтергән. Бына, шаһым, – тигән ҡыҙ, – бер ҡатын хатта ике ирҙе әрәм итмәгәнме инде?

Батша:

– Ярар, быныһы булды. Ҡатындың ирҙәрҙе әҙәм итеүе хаҡында ниндәй нигеҙҙәр бар икән һуң?

Ҡыҙ һүҙгә керешеп:

Бар, шаһым, бар, – тигән. – Бер бик фәҡир, бик йыуаш, атаҡылға ла зәғиф булыуы менән халыҡҡа билдәле бер егет бар ине, ти. Был егеттән бик күп ерҙәргә, ҡыҙ һорап, яусылар барған. Ҡыҙлы кешеләр был егеттең яусылары менән һөйләшеү түгел, ҡапҡаларына ла индермәгәндәр. «Ул егет тигәнегеҙ әҙәмме ни ул? Әҙәм тиһәң, йүне юҡ; хайуан тиһәң, йөнө юҡ. Уға писек ҡатын тәрбиәләмәк кәрәк тә, бала тәрбиәләмәк кәрәк?» тигәндәр.

Шулай халыҡтар араһында был егеттең бер ҙә ҡәҙере юҡ икән. Уны күргәс, кем булһа ла хәҙер мыҫҡыллап көлөргә керешкән.

Бер заман был егеттең яусыһы бер ҡыҙлы кешенең йортона барып кергән. Был ҡыҙҙың ата-әсәһе лә яусыға йылап ҡына:

Бер йыл буйына шул малайығыҙ өсөн яусы булып йөрөйһөгөҙ. Берәү ҙә ҡыҙын бирмәне. Беҙҙә лә ундай булдыҡһыҙ егеттәргә бирә торған ҡыҙ юҡ, – тип торғанда ғына, яусы менән ата-әсәһе янына ҡыҙ үҙе килеп кергән дә:

– Атай, әсәй, – тигән, – минең яҙмышым – шул егеттер. Һис тә борсолмағыҙ, яусыға ҡараңғы сырай күрһәтмәгеҙ, мин барам ул егеткә, – тигәс, ата-әсәһе ҡыҙҙарының был теләгенә ҡаршы килмәгәндәр.

Ҡыҙҙарын шул булдыҡһыҙ егеткә кейәүгә биргәндәр. Ҡыҙ егет менән тормош көтә башлаған. Ҡыҙ ҡул эштәренә бик оҫта булған. Бай кешеләрҙән эш алып, сигеүҙәр сиккән, һуңға табан үҙ аҡсаһына тауарҙар алдыртып, иренән һаттыра ла башлаған. Ниһайәт, әлеге булдыҡһыҙ тигән егет беренсе дәрәжәләге сауҙагәр булып киткән. Уға кем булһа ла хөрмәт менән ҡарай башлаған. Егеттең был дәрәжәгә өлгәшеүе тураһында һәр кем дә: «Аҡыллы ҡыҙға өйләнде. Шул уны кеше итте», – тип һөйләгән, – тип ҡыҙ һүҙен бөтөргәс, батша ҡыҙҙың аҡыллылығына, намыҫлылығына һоҡланып, үҙе урынына батша буласаҡ малайына кәләш итеп алып биргән.

Ҡыҙ, аҡыллы булыуы арҡаһында, үҙенең намыҫына бер ваҡытта ла тап төшөрмәгән.

## 25. Батша ҡыҙының хөкөмө

Бер ваҡыт бер бабай ер һөрөп йөрөгәндә, бер көршәк алтын табып алған, ти.

– Был алтынды нимә эшләтергә икән? – тип бер аҡыл эйәһенән кәңәш һораған.

Аҡыл эйәһе:

– Һин уны батшаға алып барып ҡына бир, – тип кәңәш биргән.

Шул һүҙ буйынса, бабай юлға сыҡҡан. Юлда быға өс кеше тап булған да:

– Ҡайҙа бараһың, олатай? Күршәгеңдә ни? – тип һораған, ти.

Бабай:

– Батшаға алтын алып китеп барам, – тигән икән, был өсәү алтынды талап алып киткән дә барғандар.

Бабай барған да батшаға:

– Мин һиңә алтын килтерә ята инем, өс әҙәм килде лә һалдырып алып китте, – тигән.

Батша теге өсәүҙе таптырып, саҡыртып алған да:

– Һеҙ ниңә бабайҙың алтынын тартып алдығыҙ? – ти икән.

– Беҙ алманыҡ уны, – тип танған теге өсәү.

Батша уларҙың өсөһөн дә зинданға ултыртҡан. Ултыртыуын ултыртҡан, артабан улар менән ни ҡылырға белмәгән.

Батшаның бер ҡыҙы булған. Шул ҡыҙҙың башына бер уй килә.

– Һин ул бәндәләрҙе миңә бир. Уларҙың эшен тикшерәйем дә асығын беләйем, – тип әйткән, ти, атаһына.

Батша килешкән. Ҡыҙ зиндандағы өсәүҙе сығарған да әйткән:

– Бер бабай һүҙенә ҡарап, атайым һеҙҙе нахаҡтан рәнйеткән. Мин һеҙҙе ҡотҡарамын. Бының өсөн һеҙ миңә тырышып хеҙмәт күрһәтергә тейешһегеҙ. Быны мин һеҙҙе йәлләгәнгә генә әйтәм, – тигән.

Теге өсәү ризалашҡан.

Бер ваҡыт батша ҡыҙы төшкө ашҡа ул өсәүҙе үҙ янына ултыртҡан да әйткән, ти.

– Бер хикмәтле эш бар. Мин шуға төшөнә алмайым. Һеҙ шуны үҙегеҙҙең аҡылығыҙ менән төшөндөрөп ҡарағыҙ әле, – тигән ти.

Теге өсәү:

– Була ул. Әйтәбеҙ беҙ уны, – тигән.

Ҡыҙ һөйләп алып киткән:

– Борон бер кеше йәшәгән, ти. Был кешенең бик ҙур емеш баҡсаһы булған. Уның бер еткән ҡыҙы булған. Ҡыҙҙың аҫырауҙары күп булған. Бер ваҡыт, шул ҡыҙыҡай әлеге емеш баҡсаһында ултырғанында, бер ағаста бик матур сәскә күреп ҡалды, ти. Ҡыҙ үҙенең аҫрау ҡыҙҙарына әйткән:

– Шул сәскәне алып бирегеҙ әле миңә. Алып бирһәгеҙ, мин һеҙҙе бик яратырмын, – тигән.

Ҡыҙҙар, ни тиклем тырышып ҡараһалар ҙа, сәскәне алып бирә алмағандар, ти. Батша ҡыҙы асыулана башлаған. Ошо мәлдә баҡсала ҡарауылсы бабай ҙа булған, ти. Ҡарт килеп, ағас башына менгән дә ҡыҙға сәскәне алып биргән, ти. Ҡыҙ бабайға:

– Ни теләһәң, шуны бирәм, һора, – тигән, ти.

Ҡарт әйткән:

– Кейәүең тәүге төндә ҡунырға килгәндә, һин уның тамағын

…ырғас, минең янға килерһең, тәүҙә минең янда ҡунырһың. …әүгә сыҡҡас та, онотоп ҡуйма, – тигән, ти.

Ҡыҙ ризалыҡ биргән.

…ҙаҡ та тормай, батша ҡыҙын кейәүгә биргән. Кейәүе кил…ән. Ашағандар, эскәндәр, төнгө кейемдәргә кейенгәндәр ҙә йоҡ…ларға ятҡандар. Шул саҡ теге бабайҙың әйткәне хәтеренә …сөп, ҡыҙ кейәүенә:

Мин шулай-шулай бабайға һүҙ биргәйнем. Мин ошо төндә …бабай янына баҡсаға барып, вәғәҙәмде үтәһәм, арыу булыр …не, – тигән, ти.

Кейәүе ҡаршы килеп тормаған.

Улайтып һүҙ биргәсең, бар әйҙә, бар, – тигән, ти.

Ҡыҙ аҫыл-аҫыл кейемдәрен кейеп киткән, ти, ҡарт янына. Юлда быға бүре тап булған, ти. Ул ҡыҙҙы ашарға итә, ти. Ҡыҙ …а:

Мин бабай менән һүҙ ҡуйышҡанмын. Тотма мине, ебәр. …үҙемдә торайым, – тигән.

Бүре ҡыҙҙы ебәргән дә юлда тороп ҡалған. Ҡыҙ баҡсаға …рып инеп, бабай янына килгән.

– Һин ошо төндә килергә ҡушҡайның. Мин килдем, һин ни …һең? – тигән.

Ҡарт:

Миңә һинән бер ни кәрәкмәй. Мин һине һынамаға әйткәй…м. Алла ярлыҡаһын һине, һүҙеңә тоғро ҡыҙ икәнһең. Бар, …ҙерәк кейәүең янына ҡайт, – тигән, ти.

Ҡыҙ имен-һау кейәүе янына ҡайтып ятҡан.

Батша ҡыҙы теге өс кешегә:

– Һеҙ ни тиерһегеҙ? Ни өсөн тәүге төндә кейәү егет үҙенең …ләшен ебәргән? Ниңә уға бүре теймәгән? Ҡыҙ төнөн үҙ теләге менән килһә лә, ни эшләп баҡса ҡарауылсыһы уға теймәгән, …мен көйө ҡайтарған? Йә, шуны әйтеп ҡарағыҙ әле.

Теге өсәүҙең береһе:

– Ҡуйынынан шундай ҡыҙҙы сығарып ебәргәс, кейәү эшкин…гән булған инде, – тигән.

Икенсеһе:

– Юлда тап булған бүренең теше булмаған, шуға ҡыҙға тей…гән. Моғайын, ул ҡарт бүре булғандыр әле. Шулай булма…нда, ысҡындырмаҫ ине, – тигән.

Өсөнсөһө:

Теге баҡса ҡарауылсыһы мәмәй ауыҙ булған. Шулай бул…һа, төнөн үҙе теләп килгән ҡыҙҙы кем кире ебәрһен инде, – …гән.

Батша ҡыҙы шулай итеп һынаған да атаһына хәбәр ебәргән. Батша алтынды ошо өсәү урлағанына төшөнгән.

– Хәҙер алтынды урлауығыҙ көн кеүек асыҡ. Башығыҙҙы …мәҫтән борон, яҡшылаңҡырап эҙләгеҙ ҙә алтынды килтереп …ырығыҙ, – тигәс, теге өсәү бик ныҡ шөрләнеләр, ти.

Шунан алтынды килтереп батшаға тапшырҙылар, ти. Алтынды алғас, батша барыбер аттырған, ти, тегеләрҙе.

Ә батша ҡыҙы үҙенең аҡыллылығы арҡаһында ҙур дәрәжәләргә ирешкән, ти.

## 26. Батша хаҡы

Борон заманда бер кеше була. Уның ашарға ла, кейенергә лә аҡсаһы булмай. Нисек булһа ла берәр ерҙән аҡса табырға кәрәк тип, сара эҙләй башлаған. Уйлана торғас, ахырҙа тапҡан: белемсе булып китмәк булған.

– Кешенең балаһы күпме торғанын беләм. Ерҙең уртаһын да күрһәтә алам, – тигән был әҙәм.

Был һүҙҙе бер генерал ишетеп ҡала. Ишеткәс тә, үҙенең хаҡын белгеһе килде лә, ти, белемсене саҡыртып алды, ти.

– Йә, егет, әйтеп ҡара әле, мин күпме торам?

– Сирек тин тораһың, – тине, ти, теге, күҙен дә йоммайынса. Эй туҙып китте, ти, генерал, эй туҙҙы, ти.

– Нисек һин мине, генерал башым менән, сирек тингә ҡуяһың? – тине лә, ти, аяҡ-ҡулына бығау һалып теге кешене батшаға оҙатты, ти.

Белемсе батша алдына килеп баҫа.

– Ни өсөн һине бында алып килделәр? – тип һораны, ти, батша.

Теге кеше ауыҙын да асырға өлгөрмәне, генерал бәреп һөйләп алып китте, ти.

– Улайһа, бығауҙарын сисегеҙ. Бындай кеше булғас, бик һәйбәт, – тип әйтте лә, ти, батша, – әйҙә, минең менән баҡсаға, – тип, теге кешене эйәртеп тышҡа алып сығып китте, ти. Баҡсаға ингәс:

– Һин ниҙәр беләһең? – тип һораны, ти.

– Мин кешенең хаҡын да, ерҙең уртаһын да беләм.

Батша әйтә:

– Әгәр минең хаҡты белһәң, ерҙең уртаһын әйтһәң, һиңә бер тоҡ алтын!

Шунан һуң былар баҡсаның урта бер еренәрәк килгәс, теге әйтә:

– Бына ошо инде ерҙең уртаһы.

Батша әйтә:

– Нисек инде ошо урын ерҙең уртаһы булһын?

Теге кеше:

– Ышанмаһаң, үлсәп ҡара, – ти.

Батша әйтә:

– Ярар. Ә мине нисек баһаларһың?

Теге кеше батшаның муйынынан тәреһен алып:

– Бына был Алла бит, – ти. – Ул бар кешеләрҙән дә ҙур – үҙе бер тин тора. Иң әүәл – Алла, унан батша. Шулаймы?

– Шулай.

– Шулай булғас, һин ярты тин тораһың, үәт!

Шунан ни батша ни эшләһен, бер һүҙ ҙә әйтә алманы, ти. Тегә кеше тик торғанда тоҡ тултырып алтын алып ҡайтып китте, ти.

## 27. Миһырбанлы ҡатын

Элекке ваҡытта бик миһырбанһыҙ бер батша булған. Ҡатыны иренең киреһе ине, ти, бик изгелекле, бик миһырбанлы кеше ине, ти. Былар бер көндө ирле-ҡатынлы яландарға, урмандарға сығып киткәндәр. Урманда бер ҡош бик матур итеп һайрай икән. Ҡоштар һайрауы быларға бик оҡшаған. Ҡайтҡас, батша вәзирҙәрен йыйған да:

– Беҙ бер ҡоштоң һайрауын ишеттек. Кем дә кем шул ҡошто тотоп алып ҡайта, фәлән ҡәҙәре алтын бирәм, – тигән.

Донъяла хәйлә тигән нәмә бар бит. Төрлө хәйләләр уйлап киткән, ти, дүрт кеше тегене тоторға. Тапҡандар ҡошто, тоҙаҡ һалып тотҡандар ҙа, ситлек яһап, шунда бикләп, батшаға илтергәндәр. Батша алған да ситлекте, ҡош алдына төрлө ризыҡтар ҡуйған. Ҡош һайрай башлаған.

Беренсе көндө бик өҙҙөрөп, бик матур һайраған. Икенсе көнө әҙерәк, өсөнсө көн тағы ла әҙерәк, дүртенсе көн тағы ла әҙерәк һайраған. Ун-ун биш көндән һуң, көнөнә бер мәртәбә генә һайрай ала ла, ти, тына ла ҡуя, ти. Унан көн аша, тора килә ике-өс көнгә бер генә һайрап ҡуя, ти. Бара торғас, бөтөнләй һайрамаҫ булды, ти. Миһырбанлы ҡатын был ҡошто бик йәлләне, ти.

– Әйҙә ҡошто урынына алып барып ебәрәйек. Күрәһеңме, нисә генә көн эсендә, бахыр, ни хәлгә ҡалды, һайрауҙан яҙҙы. Үҙенең торған еренә алып барайыҡ. Һайрамаҫмы икән? – тигән, ти.

Батша вәзирҙәрен саҡыртып алған да:

– Урынына илтеп ҡуйығыҙ был ҡошто. Алып барып ебәргәс, тыңлап торогоҙ, һайрармы, юҡмы.

Вәзирҙәр ҡошто алып барып ебәргәндәр икән – тотонған, ти, өҙөлөп һайрарға. Әй һайрай, әй һайрай, ҡараңғы төшкәнсе һайраны, ти, ҡошсоҡ.

Ҡайтҡандар теге вәзирҙәр, күргән хәлде һөйләп биргәндәр. Батша ҡатыны әйткән шунда:

– Әйҙә барайыҡ әле, шулаймы икән?

Иртәгеһен аттарын еккәндәр ҙә батша менән ҡатыны урманға киткәндәр. Барһалар, ҡош тәү күргәндәге һымаҡ, матур

итеп һайрап ултыра, ти. Туҡтармы тип, ҡыскә тиклем көткәндәр, туҡтамаған. Шунда ҡатын әйткән, ти, батшаға:

– Һин бына фәлән тиклем кешене төрмәлә тотаһың. Уның араһында хаҡы ла бар, наҡаһы ла барҙыр, – тигән. – Һин бының өсөн әхирәттә яуап бирерһең бит. Бына бит ҡош нимә эшләне? – тигән. – Теге төрмәгә япҡандарҙың өйөндә, ҡайһыныһының ата-инәһе, ҡатыны барҙыр, ҡайһыһының балаһы, ҡайһыныһының туғаны барҙыр. Һин ҡайт та тикшереү яһа, наҡаҡтан рәнйетелгәндәрен тотма, сығар, – тигән.

Ҡатынының шул һүҙенән һуң быға уй төшкән. Ҡайтҡас та, фарман тарата: «Шундай, шундай кешеләрҙе төрмәнән сығарырға. Бер кем дә ҡалмаһын, бөгөндән сығарырға».

Батша ҡатынының миһырбанлығы арҡаһында, төрмәләр астырылып, ундағы бөтөн ғәйепһеҙҙәр иреккә ебәрелгән, ти.

## 28. Хәйләкәр итексе

Борон-борон замандарҙа бер батшалыҡтың баш ҡалаһында иң ситтәге бер өйҙә ярлы ғына итексе йәшәгән. Ул үҙенең бөтә ғүмере буйына бер генә һум да аҡса йыйнай алмаған. Иртәнән кискә тиклем эшләп тапҡан аҡсаһын көн һайын ҡатын бала-сағалары менән ашап бөтөрә барған.

Ярлы йәшәһә лә, был итексенең күңеле һәр ваҡыт күтәренке булған. Эшкә барған сағында йырлай-йырлай бара, ҡайтҡанда ла уйын-көлкө һүҙҙәр һөйләп ҡайта икән. Шулай ҡайғы-хәсрәтһеҙ генә йәшәгән был итексе.

Был илдең батшаһы биктән бик уҫал, хәйләкәр булған, ти. Ул бик күп ғәскәр тотҡан, бик күп шымсылар аҫраған. Ҡул аҫтындағы барлыҡ халыҡты үҙенә ҡол иткән.

Көндәрҙән бер көндө ҡул аҫтындағы кешеләр нисек йәшәйҙәр, нимә уйлайҙар, ни һөйләйҙәр икән, шуны үҙ күҙем менән күрәйем, үҙ ҡолағым менән ишетәйем әле, тип уйлаған да хеҙмәтселәр кейә торған кейемдәр кейеп, ҡараңғы төшкәс, ҡала буйлап йөрөргә сығып киткән.

Бик оҙаҡ йөрөгән батша: тәҙрәләрҙән ҡараған, ишек төптәрендә тыңлап торған. Тик, ни саҡлы ғына йөрөһә лә, иҫ китерлек бер ни күрмәгән дә, ишетмәгән дә: берәүҙәр көндөҙгө табыштарын һөйләй, икенселәре зыян күреүҙәренә зарланып, илап-һыҡтап ултыра, өсөнсөләре ҡатындары менән талаша, дүртенселәре бала-сағаһын тиргәй. Шулай йөрөй торғас, батша ҡала ситендәге бәләкәй генә бер өйгә барып ингән. Шунан ғына ул көлөү, йыр тауыштары ишеткән. Бик ғәжәп иткән батша был эшкә. Шунан асыуы килгән. Бында ниндәй кешеләр тора икән, улар нимәгә шул тиклем шат икән, тип, инеп ҡарамаҡ булған. Туҡылдатҡан икән, хужалар ишек асып, хөрмәтләп ҡаршы алғандар ҙа табын эргәһенә саҡырғандар. Батша өй

...эсе, табынға күҙ йөрөтөп һалып алған. Өй эсе бик ярлы, тағында ла иҫ китер һый юҡ, ти. Шулай ҙа табын тирәләй ултырыусыларҙың йөҙҙәре шат, күңелдәре күтәренке, ти.

Ултыра батша күрһәтелгән ергә. Иттән ауыҙ итә, тегеләр менән бергә һурпа эсә. Үҙе һыйлана, үҙе уйлана. Был әҙәмдәрҙең күңелле ултырыуҙарының серен белгеһе килеп, эсе яна. Эсе янмаҫ ине, ошоғаса батшалыҡ итеп, үҙ батшалығында көр күңелле кешене күреп өйрәнмәгән була. Аҙаҡ килеп батша түҙмәгән:

– Һин, дуҫ кеше, минең һорауымды ауырға алып, асыуланма. Минең шуны белгем килә: һин кем, ниндәй һөнәр менән көн итәһең, нисек шулай байрамһыҙ-ниһеҙ ит бешереп, байрамдағы кеүек күңел асып ултыра алаһың? – тип һораған.

– Мин ни – итексемен. Үҙең күреп тораһың – ярлымын. Баҙарҙа минең бәләкәс кенә бер кибетем бар. Шунда мин үткенселәрҙең итектәрен табанлайым, йыртыҡ ҡаталарын ямайым, һүтелһә, тегеп бирәм. Иртәнән кискә тиклем шуның менән мәшғүл булам. Эшләп тапҡан аҡсама ризыҡ алам да кис ҡатын, бала-сағалар менән һыйланам. Ашарыңа булһа, байрамһыҙ көн дә байрам шикелле күңелле була, – тигән хужа.

– Әгәр ҙә һис көтмәгәндә һинең кеүектәрҙең кибеттәрен яптырып ҡуйһалар, ни эшләрһең? – тип һораған батша.

– Йә Хоҙа. Ундай хәлде мин дошманыма ла теләмәҫ инем. Ул саҡта минең кеүектәр өй эстәре менән ас ҡалыр ине. Ундай хәл булмаҫ! Ниндәй яуызы улай итәр икән?

Батша тағы ла аҙыраҡ ултыра биргән дә, хушлашып, һарайына ҡайтып киткән.

Икенсе көндө иртәнсәк батша үҙенең бойороғон белдерер өсөн, хәбәрселәрен сығарып ебәргән. Был хәбәрселәр урамдан урамға, майҙандан майҙанға, баҙарҙан баҙарға йөрөп, батшаның бойороғон әшкәр итеп йөрөгәндәр. Батша ял иткән ваҡытта бер генә кеше лә эшләмәҫкә, ҡалалағы һөнәрселәрҙең кибеттәрен ябырға ҡушылған булған.

Батшаның башына ни эшләп ундай йүнһеҙ уй төштө икән, тип халыҡ ҙур аптырашта ҡалды, ти. Үҙ-ара батшаны әрләйҙәр. Әрләһәләр ҙә, уның ҡаты күңелле булғанын белгәнлектән, береһе лә бойороғон боҙорға баҙнат итмәй, һөнәрселәр кибеттәрен ябып, өйҙәренә ҡайтып китәләр.

Эңер төшөү менән, батша кисәге кейемдәрен кейеп, тағы ла һарайҙан сығып киткән. Ул ыңғай итексе өйөнә барған. «Күрәйек әле, бөгөн дә һинең күңелең күтәренкеме икән, бөгөн дә, байрамһыҙ көндө лә байрам итеп була, тип әйтерһеңме икән?» тип уйлаған.

Итексенең өйөнә барып инһә, хужалар, бер ни ҙә булмағандай, тағы ла табын тирәһендә уйын-көлкө һүҙҙәр һөйләп, ашап, эсеп ултыралар. Итексе кисәге ҡунаҡтың килеүенә шатланған.

Әйҙүк, дуҫ кеше, әйҙүк. Табын янына уҙ, – тигән.

Батша:

– Һин тағы ла кисәге кеүек һыйланып ултыра икәнһең. Батшаның бөгөнгө әмерен ишетмәнеңме, әллә уны боҙҙоңмо? Аҡсаны ҡайҙан таптың?

– Эй, ҡәһәр төшһөн инде ул беҙҙең батшаға! Әллә ниндәй бойомға ашмаҫ, йүнһеҙ бойороҡтар сығарып ята шунда. Шуның арҡаһында бына ғаиләм ас ҡала яҙҙы. «Инде ни эшләргә?» тип аптырап торҙом да, шунан урамға сығып киттем. Берәүгә һыу килтереп бирҙем, икенсе берәүгә баҙарҙан алған әйберҙәрен күтәрешеп алып килдем. Тағы бер-ике урында шуның һымаҡ йомош-юлға йөрөнөм дә бер аҙ аҡса таптым. Бына шуға алған аҙыҡты ашап, тамаҡ туйҙырып ултырабыҙ.

Был хәлгә батшаның тағы ла ныҡыраҡ эсе янған. Шат итексене сәйнәп ташларҙай булған. Тик сер бирмәҫ өсөн генә бер аҙ һөйләшеп ултырған да һарайына ҡайтып киткән.

Икенсе көндө иртүк батшаның бер хеҙмәтсеһе килеп еткән. Ул итексене һарайға алып киткән. Һарайға барғас, батша уның биленә ауыр ҡылыс тағып һарай ишеге төбөнә баҫтырып ҡуйырға ҡушҡан. Уны шулай баҫтырып ҡуйғандар ҙа кискә тиклем урынынан ҡуҙғалмаҫҡа бойороҡ биргәндәр.

– Бер генә аҙым ситкә атлама, атлаһаң, батша башыңды сабып өҙҙөрөр, – тигәндәр уға.

Итексе меҫкен көн буйына һаҡта торған. Кис өйөнә бер ни ҙә алып ҡайта алмаған. Шулай ҙа аптырамаған итексе. Ҡайтып инеү менән таяҡ алған да йырлай-йырлай шуны юнырға тотонған. Юна торғас, биленә батша таҡҡан ҡылыстан айырып алғыһыҙ ҡылыс килеп сыҡҡан. Шунан итексе уны ҡынға тығып, булат ҡылысын күршеһендәге сауҙагәргә алып барып һатҡан да шул аҡсаға бик күп итеп аҙыҡ алып ҡайтҡан.

– Мә, ҡатын. Күп итеп аш яраштыр. Батша мине һаҡсы итеп ҡуйып яҡшы итте, бөгөн табышыбыҙ тағы ла мулыраҡ буласаҡ, – тигән.

Кис булғас, батша тағы итексе өйөнә килеп еткән. Бөгөн инде ул итексенең күңел асып, кәйефләнеп ултырырлыҡ рәте юҡтыр. Инде йырлап, күңел асып ултыра алмайҙыр, тип уйлаған. Килһә, эш башҡаса булған. Өйгә ингәс, ни күҙе менән күрһен – итексенең күңеле тағы ла күтәренкерәк, табында һый тағы ла мулыраҡ.

Итексе был танышын яҡын дуҫылай күреп, шатланып ҡаршы алған да ҡыҫтап-ҡыҫтап һыйларға тотонған. Табын янында үҙенең батша биргән ҡылысты һатып, урынына ағас ҡылыс һалып ҡуйыуын көлә-көлә һөйләгән.

– Ҡана, ҡатын, килтер әле ҡылысты. Мин яһаған ҡылысты дуҫҡа күрһәтәйек әле, – тигән.

Ҡатыны ағас ҡылысты алып килгәс, бөтәһе лә көлгәндәр. Унан туйғансы ашап-эскәндәр, шунан ары батша һарайына ҡайтып киткән.

Икенсе көндө иртәнсәк итексене яңынан батша һарайы ишеге төбөнә һаҡҡа ҡуйғандар. Итексе ағас ҡылысын биленә аҫып ояныын текә тотоп, һис тә һис эре генә баҫып торған. Ҡылыс ағас булғас, уны күтәреп тороуы кисәге һымаҡ ауыр булмаған. Ә батша: «Инде әләкте, хәҙер минән ысҡына алмаҫ», – тип уйлап, ашап-эсеп, кәйефе күтәрелеп, тәхетенә менеп ултырған. Ултырған да итексенең мутлығын фаш итергә хәйлә уйлай башлаған. Шунан һуң үҙенең янында торған тоғро хеҙмәтсеһенән ҡаҙна башлығын саҡыртҡан. Ҡаҙна башлығы килеп инеүе булған, батша аяҡ тибеп ҡысҡырынырға тотонған:

- Һин хыянатсы, һин уғры, һин алдаҡсы! Ҡаҙнанан йөҙ һумлыҡ алтын урлағанһың, үҙең минең күҙемде алдап, тоғро булып маташаһың. Ҡайҙа, шунан һаҡсыларҙы саҡырығыҙ әле, хәҙер үк мин был яуызға язаһын бирәм. Хәҙер үк минең күҙ алдымда башын сабып өҙһөндәр был ҡәбәхәттең.

Хеҙмәтселәр батшаның әмерен һә тигәнсе еренә еткергәндәр. Һарай ишеге төбөндә торған ҡылыслы һаҡсыны батша алдына килтереп тә баҫтырғандар. Был әлеге итексе булып сыҡҡан.

Батша итексегә үҙен танытмаҫ өсөн, башындағы таժын ҡаш өҫтөнә төшөрөп, арҡа ябыуына ышыҡланыбыраҡ ултырған.

– Билеңдәге ҡылысыңды ал да, ошо хыянатсының башын сабып өҙ әле. Ул, уғры, минең ҡаҙнамдан алтын урлаған, – тигән батша итексе-һаҡсыға.

Һис бер гонаһы булмаған ҡаҙна башлығы үҙенең ҡапыл шондай хәлдә ҡалыуына бик ныҡ аптыраған, аптырауҙан телдән ҡалған. Аҙыраҡ иҫенә килгәс, батша алдына тубыҡланып, күҙ йәштәрен түгеп, ялынырға тотонған.

– Хөрмәтле батша хәҙрәттәре, минең һис ни ғәйебем юҡ, күңелем саф, ғүмерем буйы мин һиңә тоғро хеҙмәт иттем. Ҡана ҡаҙналағы бөтә малды тикшерәйек. Хазинаң тиненәсә теүәл. Һинең асыуың бушҡа ғына. Нахаҡҡа мине әрәм итә күрмә, – тип ялбарған. Батша үҙенекен һөйләүен белгән.

– Һанап та тормайбыҙ, нитеп тә тормайбыҙ. Илама ла... Эй һаҡсы, нимәгә ҡатып тораһың, бойороҡ бирелде бит?! Сап шул хыянатсының башын! – тип ҡысҡырған батша, ажарланып.

Итексе бик ныҡ аптыраған, был ҡыйын хәлдән нисек ҡотолорға белмәй, ҡатҡан да ҡалған. Сабыуын сабыр ҙа ул. Ҡаҙна башлығы елкәһенә ағас таяҡ ҡына төшкәс, үҙенең башын сабып өҙөрҙәр. Бынан нисек ҡотолорға? Батшаның күңеле йомшарып, ҡаҙна башлығын ғәфү итмәҫме икән тип:

– Эй, рәхимле батшам, һин был меҫкенде ғәфү ҡыл. Үлтермә уны. Һинең бер аҙ хазинаңа тейгән икән, инде ғүмеренең ахырынаса һис бер хыянат ҡылмаҫтай булғандыр. Бик булмаһа, тормаңҙа генә яптыр, – тип әйтеп ҡараған.

Юҡ. Батша яҡын да килмәгән.

Уны һис кенә лә ғәфү итәсәгем юҡ! Башҡаларға һабаҡ булһын, батшаны алдарға ярамағанын бөтәһе лә күрһен. Һин

минең эшкә ҡыҫылма! Үҙеңә тейгәнен утә. Бойороҡто башҡар. Сап тигәс, өҙә сап шул яуыздың башын. Тиҙ бул! Юҡһа, мин үҙеңдең башыңды өҙҙөрөргә ҡушырмын.

Былай ғына эш сыҡмаҫтай булғас, итексе хәйлә менән ҡотолоу юлын эҙләгән. Аңарса булмай, башына бер уй килгән. Ул күҙҙәрен түшәмгә терәп, ҡулдарын өҫкә һоноп:

– Йә Хоҙа, әгәр ҙә был кеше ысынлап та ғәйепһеҙ булһа, минең булат ҡылысымды ағасҡа әйләндер. Мине кеше үлтереү гонаһынан, гонаһһыҙ бәндәңде хаҡһыҙ үлемдән ҡотҡар! – тип әйткән дә ҡынынан ҡылысын тартып сығарған.

Батша ҡырындағы барлыҡ халыҡ таң ҡалған – һаҡсының ҡылысы «ағасҡа әйләнгән дә ҡуйған», ти. Бының серен батшанан бүтән белеүсе булмаған. Шулай ҙа ул асыуланмаған. Итексенең ошондай ҡыйын хәлдән дә бик оҫта ҡотолоуы ла уға оҡшаған. Ул ҡаҙна башлығын ғәфү иткән дә итексегә:

– Хәйләлеккә һинән уҙҙырып булмаҫ. Мине алдаһаң да, оҫталығың, аҡылың өсөн маҡтайым үҙеңде, – тигән.

Шунан һуң итексегә бик күп алтын, көмөш аҡсалар бүләк итеп, өйөнә ҡайтарып ебәргән.

Шунан ары итексе яңынан элеккесә көндөҙҙәрен эшләп, кис өйөнә ҡайтҡас, ҡатын, бала-сағалары менән һыйланып, шат, бәхетле йәшәй башлаған.

## 29. Фәҡир

Борон заманда бер ҡарт йәшәгән. Ул бик фәҡир көн иткән. Ҡырҡ йыл буйы көтөү көткән. Ул, донъяла кешеләр барыһы ла бер төрлө, ниңә береһе бик яҡшы, икенсеһе бик насар йәшәй икән, шуны белергә ине тип, ил гиҙергә сығып киткән. Бара торғас, бер урманға барып еткән. Унда бер кеше ғибәҙәт ҡыла икән. Фәҡир:

– Мин ҡырҡ йыл буйы көтөү көттөм, фәҡирлектә йәшәнем, берәй заман мин яҡшылыҡ күрерменме икән? – тип һорай. Теге кеше:

– Мин ҡырҡ йыл буйы ғибәҙәт ҡылам, ярай, теләгеңде Хоҙайға еткерермен, – ти ҙә ҡарттың атын, ашамлығын алып ҡала.

Фәҡир юлын дауам итә. Ул бер йортҡа барып керә. Бында уны ашаталар, эсерәләр, кейем бирәләр. Былар бөтәһе алты кеше икән, гел байҙарҙы ғына талап йөрөгән бурҙар икән. Улар фәҡиргә юлға аҙыҡ биреп, оҙатып ҡалалар. Ул юлын дауам итә, бара торғас, ҡартҡа бер аҡыл эйәһе осрай. Ҡарт аҡыл эйәһенә нисек йәшәгәнен, ни өсөн килгәнен һөйләп бирә. Аҡыл эйәһе уға:

– Һин килгәндә ҡырҡ йыл ғибәҙәт ҡылыусыны ла, алты бурҙы ла осраттың, – ти. – Ғибәҙәт ҡылыусы һине алданы, бул-

ҡан нәмәләрендә алып ҡалды. Уның бөтә нәмәһе ялған. Ул кешеләрҙе алдап, кеше малы менән генә йәшәй, бөтә ғүмере ойына ялғанлап, көс түгеп йәшәүселәрҙең хеҙмәтенән файҙаланып көн күрә, – ти. – Уға яҡшы тормош теге донъяла булмаҫ, тамуҡ булыр, – ти. – Теге алты бурҙың урыны ожмахта булыр. Ниңә тиһәң, улар, байҙар талап йыйған байлыҡты урлап, һинең күек фәҡирҙәрҙе ашата, кейем бирә, – ти. – Улар, теге ғибәҙәт ҡылыусыға ҡарағанда, хаҡ эш эшләйҙәр, – ти.

Аҡыл эйәһе ҡартты байҙарға, ғибәҙәт ҡылыусыларға ышанмаҫҡа өйрәтеп ҡайтарып ебәргән. Ҡайтҡанда ҡарт бурҙарға инеп, аҡыл эйәһенең һүҙҙәрен әйткән. Бурҙар уға бик күп алтын, байлыҡ, юл аҙығы биреп, оҙатып ҡалғандар.

## 30. Дәрүиш менән мосафир батша

Бик уҡымышлы ғына бер батша була. Бының ҡатыны үлә. Төрлө яҡҡа вәзирҙәрен ебәреп ҡарай:

– Фәлән ерҙә берәүҙең ҡыҙы бар, белешеп килегеҙ. Бирмәҫ микән миңә, – ти.

Юҡ, бирмәй, – ти ҙә ҡайта тегеләр.

Үҙе лә йөрөштөрөп ҡарай – үҙенә лайыҡ ҡатын булырҙай кешене осратмай. Шулай йөрөй торғас: «Фәлән ҡалала бер тол ҡатын бар. Үҙе үткер, үҙе килеп тороп матур. Үҙе торғаны менән бер аҡыл эйәһе», – тигән хәбәр ишетә.

– Шуға барып ҡарарға микән әллә? – тип кәңәш һорай яҡындарынан.

– Барып ҡарарға кәрәк, – тип әйтә улары.

Шунан үҙенең урынына ышаныслыраҡ ярҙамсыларынан берәүҙе ҡалдыра ла, өҫтөндәге яҡшы-яҡшы кейемдәрен һыпырып ташлап, хеҙмәтселәр кейә торған кейемдәр кейеп алып, әлеге ҡалаға сығып китә.

Китеп бара, китеп бара, ғүмерҙә күрмәгән хәлдәрҙе күрә, ғүмерҙә күрмәгән ерҙәрҙе үтә батша. Шулай бер урында ер һөрөләр, иген сәсәләр, ашлыҡ уралар. Китә биргәс, әйләнеп ҡараһа, әлеге урып-йыйылған ашлыҡ көлтәләренә ут төртөп, яндырып яталар. Был ни хәл? Аптырап, хайран ҡалып тора ла китә.

Китеп бара батша, китеп бара. Китеп барһа – бер урынға бик күп халыҡ йыйылған. Уртала берәү былардан өҫтәрәк баҫып тора. Тегеләре һөрән һала, был өндәшмәй. Был ни ғәләмәт? Аптырап ҡарап тора ла китә үҙ юлы менән.

Китеп барһа батша, бер таш ята. Берәү шул ташты күтәреп ҡарарға маташа. Маташтыра – күтәралмай. Әлеге таш өҫтөнә инә бер таш һалғайны – күкрәгенә хәтлем күтәрҙе. Тағы бер таш һалғайны, тағы бейегерәк күтәрҙе, ти. Хайран ҡалып торҙо, ти, батша. Шунан инде тағы китә.

Китеп бара батша, китеп бара. Бара торғас ҡараһа – бер йылға, ә ярында елле имән үҫеп ултыра. «Туҡта, ошонда туҡрап, сәй ҡайнатып, тамаҡҡа эсеп алайым әле», – тип барһа, бер ҡарт ҡына дәрүиш ултыра.

– Әссәләмәғәләйкүм!

Сәләм бирә инде. Сәләм биргәйне, ҡарт боролоп ҡарап ҡуйҙы, тора килеп:

– Вәғәләйкүмәссәләм! – тип сәләм алды, ҡулын һоноп күреште, ти. – Әйҙүк, ултыр.

– Ярай, мин сәй ҡайнатып алырға тип килеп ултырам, – ти батша. – Йылғанан һыу алайым әле.

Юҡ. Ҡайнатып торма. Бына ҡайнағаны ла етер. Мин күп эсмәйем. Әйҙә, ултыр.

– Ярар.

Ҡарт менән килешеп китте, һөйләшеп алып китте.

– Беҙҙең ил гәжәп ер. Аҡылға мыуафиҡ булмаһа, ысын булһа ла һөйләмә, тигәндәр. Ана шуның кеүек аҡылға мыуафиҡ булмаған хәлдәр ошо беҙҙең ерҙә була. Йә, күргән нәмәләреңде һөйләп ебәр, улым, – ти дәрүиш.

– Йә, ярар. Ишеткәнде һөйләһәм, буш булыр. Күргәнде һөйләйем инде. Бер урында ер һөрҙөләр, сәстеләр, үҫеп сыҡты, әйләнеп ҡарауыма, шул ашлыҡты урып, яндырып ебәрҙеләр.

– Ә-ә-һә. Һин улай-былай ғына кеше түгел икәнһең, өҫтөңә эленде-һалынды кейһәң дә. Бик эшмәкәр, баш кеше икәнһең. Һин күргәндең мәғәнәһе шуға тап килә: һин барында ал да гөл, һин китһәң, һине яндырырға, һине бөтөрөргә йөрөйҙәр.

Был батша, әһә, тип ҡуя эстән генә: һиҙгән булған икән үҙе лә быңдай эште.

– Шунан, – ти, – килә бирһәм, ғәммә*, – ти, – ә өҫтә бер кеше. Шуны әллә төшөрөп алырға итәләр, әллә ни инде, зыу киләләр, – ти.

– Ә-һә, ғәммә баш кешегә ҡысҡыра. Ҡысҡырыу менән ни баш кеше уға ҡолаҡ та һалмай. Һиңә лә шулай ҡысҡыраларҙыр әле, – ти, дәрүиш әйтә.

Инде хәҙер был мосафир таш күтәреүҙе әйтә.

– Уныһы ни ғәләмәт булыр икән? – ти.

– Ә-әһә, ташты әйтәһең икән. Ташты әйтһәң, уныһы былай ул, балам, – ти дәрүиш әйтә. – Берәү ғүмерҙә урламаған, кешенең бер нәмәһенә теймәгән. Урларға уңай саҡта ла тыйылып ҡала. Быным ағай-энеһе, ата-әсәһе күҙ алдына килә: быны алһам, үҙемә, үҙемдең затыма шимдек* килтерәм, гонаһ ҡылам бит инде, тип уйлай. Теге бәндәнең ташты тәү ынтылғанда күтәрә алмауы – ана шул булыр, балам. Инде таш өҫтөнә таш һалғас, күкрәгенә тиклем күтәреүенә киләйек. Кеше лә шулай: бер урланымы, берҙе ялған хәбәр һөйләнеме – ҡабат туҡтай алмай. Әле һин әйтереңде әйтеп бөтмәнең, егет. Төп маҡсатың нимә һинең?

Ана, фәлән ҡалала бер ҡатын бар, тип әйтәләр. Шуны күреп һөйләшмәк булып китеп барам. Килмәç микән миңә? – ти мосафир батша.

Ҡуй, егет. Буш менән булма. Кире айҙан. Ул ҡатын әлләнисәмә ир ҡуйынынан үткән, береһе менән дә йүнләп тора алмай айырылған ҡатын ул. Мин бик яҡшы беләм уны. Беҙзең әкрәбә* ул, – ти дәрүиш. – Һин ҡайт, балам. Үҙеңдең ҡалаңда табалманыңмы?

Бар инде ул. Һоратырға яусы ебәргәйнем, береһе лә мине мөрхәтһенмәне*.

Ә-һә, шулай тиң. Улар, балам, һиңә һоратмағандар бит. Һин һайлағанды үҙҙәренә һоратҡандар.

Дәрүиш һүҙен тотоп ҡайтты был. Ҡайтып, тикшереп ҡараһа, ысынлап та шулай булған икән шул. Баш кеше исеменән ялсылар ҙа үҙҙәренә һораталар икән. Үҙҙәренә бәрәү ҙә бирергә риза булмағас, ҡайталар ҙа: «Бирмәйҙәр», – ти ҙә ҡуялар, имеш. «Кемгә бирмәйҙәр?» – тип һорарға уйына ла килмәй бит инде, үҙ кешеләрем, тип ышанғас. Шунан инде теге яусыларҙан берәм-берәм яуап алып, ғәйептәрен йәшергәндәрен язалатып, ғәйептәрен таныгандарын шелтә менән ҡотҡара. Әлеге үҙе барҙа ла гөл, үҙе юҡта бөтәһен дә юҡ итергә торған ярҙамсыларына ла шундай уҡ хөкөм сығара.

Һарайында тәртип урынлаштырып, бер аҙ тынысланғас, тәүге һоратҡан ҡыҙҙы үҙенең иң ышанысла кешеһе аша яңынан һоратып ризалыҡ ала. Шунан ни ижәп-никах уҡытып, туй яһанылар. Туйында көрәшселәр көрәште, атлылар бәйге сапты, ҡурайсылар – ҡурайҙа, йырсылар – йырҙа, бейеүселәр бейеүҙә ярышты.

*Тәпән-тәпән ҡымыҙ ҙа, бал да буҙа,*
*Аяҡ* тот та ҡаҙы һоғон, әйҙә, ҡоҙа.*

Бына шундай ғиш-ғишрәттә бер аҙна йөрөнөк. Шулайтып егеттәрҙең туйына мин дә барып етештем. Шулай ҙа була икән донъяла.

## 31. Батшалыҡтан баш тартҡан алйот ҡарт

Борон заманда бер әбей менән бабай йәшәгән, ти. Былар бик ярлы торғандар. Бер генә һыйырҙары булған. Көндәрҙең береһендә бабай әйткән, ти, әбейгә:

Ҡара әле, әбей, беҙ ғүмеребеҙҙең буйы бик ярлы йәшәнек, һыйырыбыҙҙы һуяйыҡ та халыҡты саҡырып, фатиха алайыҡ. Фатиха алһаҡ, бәлким, байып китербеҙ, – тигән. Әбей:

Ярар, улай булғас, һыйырҙы һуй, саҡырайыҡ һуң, – тигән.

Бабай һыйырҙы һуйған. Әбей ҡаҙан тултырып ит һалған. Шунан күҙ күргән кешеләрен саҡырғандар. Ул бахырҙарҙың итен ашап ни, тип, бер кеше лә килмәгән. «Беҙҙе ауыл халҡы, ярлы тип, кешегә һанамай», – тигәндәр ҙә икәүләп кенә ашарға ултырғандар. Шул ваҡытта быларға бер хәйерсе килеп ингән. Бабай был хәйерсене бик йылы ҡаршы алған.

– Олатай, әйҙә, түргә мен, аш аша, – тип, бик һәйбәт итеп һыйлаған. Аш ашап бөткәс бабай быға:

– Йоҡлап китерһең, – тип әйткән.

– Юҡ, мин йоҡламайым. Әгәр ҙә берәй нужа төшһә, мин ҡара урманда булырмын. Килерһең минең янға, – тигән.

Әбей менән бабай бер һыйырҙы икәүләп ашап бөткән.

Ашарҙарына бөткәс, ҡарт баяғы ҡара урманға киткән. Китеп бара торғас, юл буйында йоҡлап ятҡан бер айыуға осраған. Айыу бынан:

– Һин, ҡарт, ҡайҙа бараһың? – тип һораған.

– Фәлән-фәлән ергә ҡара урманға барам. Шундағы ҡартта йомош бар, – тигән ҡарт.

– Улай булғас, минең ғүмерем буйы башым һыҙлай, белеүселәр булһа, һорашып ҡайт, нимә дауа икән? – тигән айыу бабайға.

Бик күп ер барғас, дүрт ҡарт таш өҫтөндә намаҙ уҡып ултыралар, ти. Көн-төн намаҙ уҡыйҙар икән, хатта тубыҡтары тишелеп, ҡан сығып тора икән, ти.

– Беҙ көн-төн намаҙ уҡыйбыҙ, беҙгә ожмахмы икән, тамуғымы икән, шуны һорашып ҡайт, – тигәндәр улар.

– Ярар, – тигән дә ҡарт үҙ юлына китеп барған.

Бик күп ер барғас, дүрт-биш һыбайлы килеп сыҡҡан. Былар ҡараҡтар икән.

– Ҡарт, ҡайҙа бараһың?

– Ҡара урманға барам.

– Улай булғас, һорап белеп ҡайт. Беҙ ғүмеребеҙ буйы урлап, талап йәшәйбеҙ, беҙгә ожмахымы икән, тамуғымы икән? – тигәндәр.

– Ярар, – тигән дә ҡарт, үҙ юлын дауам иткән. Шунан бер ҡалаға барып инә. Бөтә халҡы урамда йыйылышып, илашып йөрөй икән. Ҡала халҡы:

– Һин, ҡарт, ҡайҙа бараһың? – тип һораған.

– Ҡара урмандағы ҡартҡа барам.

– Улай булғас, һорашып, белеп ҡайт, беҙҙең батшабыҙ үлде, беҙгә кем батша булыр икән? – тигәндәр.

Ҡарт үҙенең юлын дауам иткән, бик тиҙ ҡара урманға барып еткән дә теге ҡартты осратҡан. Иҫәнләшкән-һаулашҡан.

– Юлда ниҙәр осраттың? – тип һораған теге ҡарт.

– Ауылдан сығып бер аҙ килгәс, юлда йоҡлап ятҡан бер айыуҙы осраттым. Башым ауырый, йөрөй алмайым, башыма нимә дауа икән, белеп ҡайт, тине, – тигән.

Хәйерсе ҡарт уға:

Алйот кешенең башын ашаһын, уға шул дауа, – тигән ю, тағы ниҙәр күрҙең? – тип һораған.

– Таш өҫтөндә дүрт ҡарт намаҙ уҡып ултыра ине. Беҙгә ожмахмы, тамуҡмы, белеп ҡайт, тинеләр, – тигән.

– Уларға тамуғы, сөнки улар бик белемсе булып киткәнләр, – тигән.

– Шунан килә торғас, дүрт ҡараҡ тап булды. Беҙгә ожмахымы, тамуғымы, белеп ҡайт, тинеләр, – тигән.

– Уларға ожмахы, сөнки улар ҡасып, ҡатын, бала-сағаларынан, ата-инәләренән биҙеп, нужа күреп, йөрөйҙәр, – тигән.

– Шунан бер ҡалаға килдем. Уларҙың батшаһы үлгән. Уларға кем батша булыр икән, шуны белеп ҡайтырға ҡуштылар, – тигән.

– Ул ҡалала алама бүрек, алама сәкмән кейгән ҡарт батша булыр, – тигән.

Шунан ҡарт ҡайтып киткән. Баяғы ҡалаға килеп еткән. Ҡала халҡы алама бүрек, алама сәкмән кейгән ҡарт батша буласағын әйткән.

– Ул кеше һин булаһың, – тип халыҡ быны һөйрәп алған да киткән.

– Юҡ, мин батша була белмәйем, – тигәс, көсләшмәгәндәр, сөйәргәндәр.

Шунан ҡайтып бара торғас, теге ҡараҡтарға тап булған. Уларға ожмах буласағын әйткән. Шунан теге намаҙ уҡып ултырыусыларға осраған. Уларға тамуҡ буласағын әйткән. Килә торғас, баяғы айыуға осраған. Айыуға, алйот кешенең башын ашаһа, шул дауа булырын әйткән.

– Батша бул тигәндәр, батша булманың, һин икәнһең ул алйот! – тип бабайҙы тотоп, башын ашаған да ҡуйған айыу.

## 32. Ахмаҡ

Борон-борон заманда бер бабай бар ине, ти. Бының бер улы бар ине, ти. Былар бик ярлы ине, ти. Былар нимә генә эшләһәләр ҙә, эштәре уңмай – артҡа китә ине, ти. Былар был бәхетһеҙлектәренән ҡыйынлыҡтар күреп, бик күп ваҡыт ас торалар ине, ти. Шунан бабай улына:

Бар, улым, үҙ бәхетеңде үҙең эҙләп алып ҡайт, минең бәхетем булманы инде, бәлки, һинеке булыр, – тине, ти. Улы:

Ярай, атай, – тип, сығып китте, ти.

Был, бара-бара, бер арыҫлан-кейеккә осраны, ти. Арыҫлан-кейек:

Эй, ағай. Ҡайҙа бараһың? Кил әле бында, – тип саҡырып алды, ти. Егет:

– Минең бәхетем юғалды, шуны эҙләргә барам, – тине, ти. Арыҫлан:

– Улай булғас, һин бик йыраҡ барырһың әле. Минең башым бик ауырта, шуға нимә килешер икән. Һорап ҡайт, – тине, ти. Егет:

– Ярар, – тип ары китте, ти. Был, бара-бара, бер батшаға барып етте, ти. Был батша быға тағы:

– Ҡайҙа бараһың? Ниндәй егет? – тип һораны, ти. Был егет:

– Минең бәхетем юғалды, шуны эҙләргә барам, – тине, ти. Батша:

– Улай булғас, һин бик оҙаҡ барырһың әле. Бына минең баҡсамда бер сәтләүек ағасы бар, шул үҫмәй, ҡорой. Шул ни өсөн ҡорой икән, һин шуны һорашып ҡайт әле, – тине, ти. Егет:

– Ярар, – тип тағы китте, ти. Был, бара-бара, тағы бер батшаға барып етте, ти. Кис булғас, был шунда кереп ҡунды, ти. Ул батша тағы ла:

– Ҡайҙа бараһың, һин ниндәй егет? – тип һораны, ти. Егет:

– Мин бәхет эҙләргә барам, бәхетем юғалды, – тине, ти. Был батша тағы:

– Улай булһа, һин бик йыраҡ барырһың әле. Бына минең баҡсамда алма ағасы бар. Шул әллә ни эшләп үҫмәй – ҡорой. Шуны һорап ҡайт әле, ни өсөн үҫмәй икән? – тине, ти. Егет:

– Ярар, – тип тағы сығып китте, ти. Был, бара-бара, тағы бер батшаға барып етте, ти. Шунда кереп ҡунмаҡсы булды, ти. Был батша ла:

– Һин ҡайҙа бараһың? Һин ниндәй егет? – тип һораны, ти. Егет тағы ла:

– Мин бәхет эҙләргә барам, бәхетем юғалды, – тине, ти. Батша:

– Ә-ә, улай булһа, һин йыраҡ барырһың әле. Минең баҡсамда сейә ағасым бар, шул әллә ни эшләп үҫмәй. Шуны һорап ҡайт әле, ни өсөн үҫмәй икән ул? – тине, ти. Егет:

– Ярар, – тип тағы бынан сығып китте, ти.

Был егет, бара-бара, тағы бер батшаға барып керҙе, ти. Был батша ла:

– Ҡайҙа бараһың, егет? Һин ниндәй егет булаһың? – тип һораны, ти. Егет:

– Мин бәхет эҙләргә барам. Минең бәхетем юғалды, – ти. Батша:

– Улай булғас һин күп бараһың икән әле. Бына минең баҡсамда муйыл ағасы бар ине, шул ҡорой башланы, шуны һорап ҡайт әле, – тине, ти.

Егет тағы:

– Ярар, – тип сығып китте, ти. Был бара-бара. Бик күп ер-ҙәрҙе үтеп китте, ти: әллә ниндәй урмандар, әллә ниндәй йылғалар сығып бөттө, ти. Шулай бик оҙаҡ барғандың һуңында,

...н озон бер тауға барып сыҡты, ти. Был тауҙың буйынан бу... тишек тә тишек, ти. Тау янында һәр тишек ауыҙында – ... ... ҙә берәр һалдат бағауылда тора, ти. Был егет иң тәүҙә ... ... менән инеп китерлек иң ҙур тишеккә барып, һалдат...:

Был ниндәй тишек? – тип һораны, ти. Һалдаттар:

Был – бәхет тишеге, – тинеләр, ти.

Егет:

Кем бәхетенеке был? – тине, ти. Һалдаттар:

Фәлән байҙыҡы, – тинеләр, ти.

Егет быларҙан үҙенең ҡайһы ауылдан килеүен, исемен әй..., үҙ бәхетенең тишеген һораны, ти. Һалдаттар быға өндәш...әр, икенсе башҡа ҡул ғына һелтәнеләр, ти. Был аптырап ... башҡа табан китте, ти. Һәр тишекте һораша бара, ти, ... бара, ти. Һәр ҡайһыһы, фәлән байҙыҡы ла, фәлән ...ыҡы, тип әйтәләр, ти. Бер ҙә быныҡы күренмәй, ти. Был ... ла бара. Бара торғас, тишек бәләкәйләнде, ти. Бәләкәйләнә ..., бүрек һыймалы, унан йоҙроҡ һыймалы ғына булып ..., ти. Улары янында бағауыл да юҡ, ти. Ҡайһыһында ...ендәр гөрөлдәшә, ҡайһыһында сәүкәләр сырылдаша, ти. ... һаман бара – һаман быының бәхет тишеге сыҡмай, ти. Бара..., тишек тағы ла бәләкәйләнеп сәпсек һыймалы, ҡондоҙ һыймалы ғына ҡалды, ти – һаман быының бәхет тишеге юҡ, ти. Бара-бара, тишектәр тағы бәләкәйләнде, ти. Тишектәр ҡорт, ... һыймалы ғына булып ҡалды, ти. Унда ла таба алманы, ти, был үҙ тишеген.

Инде хәҙер тауҙың иң осона барып сыҡты, ти. Тауҙың иң ...нда энә күҙәүендәй генә бер тишек күрҙе, ти. Шуның ал...нда бер аҡһаҡ себен генә үлергә етеп безелдәп торған була, ти. Шунан был егет аҡһаҡ себендән:

Бында нишләп тораһың? – тип һораны, ти. Аҡһаҡ себен:

Фәлән ауылдың, фәлән егеттең бәхет тишеге был, шуны ...ап торам, – тип, был тишек ошо егеттеке икәнен белдерҙе, ти. Егет үҙенең бәхет тишеге бәләкәй, бигерәк юҡ икәненә шаҡ ...ты, ти. Шунан был егет, бер аҙ уйлап торғандан һуң, бер ...ер көрәк алып, ҡара тиргә төшөп, үҙенең бәхет тишеген ки...еп ҡаҙырға кереште, ти. Был эй ҡаҙа, ти, эй ҡаҙа ти, ҡаҙа ...ас, арыу ғына иркенәйтте, ти, кеше һыйырлыҡ та була ...ланы, ти, теге. Тағы ҡаҙа торғас, төпкә төшөрҙө, ти. Бара ...ас, тау аҫтында бер өйгә барып сыҡты, ти. Егет өйҙә бер ...дат күрҙе, ти. Өйҙөң эсе тулы алтын, ти. Һалдат быға:

Һин кем, бында нимә эшләп йөрөйһөң? – тине, ти. Егет:

Бәхетемде эҙләргә килдем, һеҙ сығармай бүлеп ятҡыр...һығыҙ икән бында, бынан һуң был алтындарҙы бында тот...й минә ебәрегеҙ, сығырға юл астым, – тине, ти. Һалдат:

Улай булғас ебәрәбеҙ. Былар барыһы ла һинең бәхет инде ... тип, егетте тынысландырып ебәрҙе, ти. Шул һалдаттан

арыҫландың башы ауыртыуының сәбәбен дә, муйыл, сәтләүек, сейә, алма ағастарының ни өсөн үҫмәгәнлектәрен дә һорап белде, ти. Егет килеүенән риза булып, күңелләнеп сығып китте, ти. Һалдат бының бәхет тишеге ауыҙына сығып ҡалды, ти. Был килгән юлы менән ҡайтып уҡ китте, ти. Ҡайтҡанына, теге муйыл ағаслы батшаға барып керҙе, ти. Батша быны күргәс тә:

– Нихәл, ҡайттыңмы? Ниҙәр күрҙең? Минең муйыл ағасы ниңә үҫмәй? – тип һорашырға кереште, ти. Егет, бар күргәнен һөйләп, быға:

– Һинең муйыл төбөндә өс бот баҡыр бар икән, шуны алһаң, элеккенән шәберәк үҫер, тинеләр, – тине, ти. Батша:

– Улай булғас, шул баҡырҙы һин алып кит әле, үҙеңә булыр, – тине, ти. Егет:

– Юҡ, минең үҙ бәхетем үҙемә еткән, кешенекенә ҡатышмайым, – тип батша янынан сығып китте, ти.

Ашыға-ашыға бара, ти, был. Бара торғас, сейә ағасы эйәһе булған батшаға килеп етте, ти. Сейә эйәһе быны инергә ҡыҫтаһа ла, был инмәне, ти.

– Мин ҡайтырға ашығам, мин бәхетемде таптым инде. Һинең сейәң төбөндә бер табаҡ көмөш тәңкә бар икән, шуны алһаң, үҫер, – тине, ти. Сейә батшаһы:

– Улай булғас, үҙең алып кит ул тәңкәләрҙе. Үҙеңә булыр, – тине, ти. Егет:

– Юҡ, булмай, мин ҡайтырға ашығам. Үҙ бәхетем үҙемә еткән, – тип тағы сығып китте, ти.

Бара торғас, был алма ағасы эйәһе булған батшаға ла ҡайтып етте, ти. Бында тағы кереп тормай, батшаның үҙен генә саҡырып сығарҙы ла, ти:

– Һинең алма ағасың төбөндә ат башындай алтын бар, тинеләр, – тине, ти, – шуны алһаң, үҫер, – тине, ти. Батша тағы:

– Улай булғас, һин үҙең алып кит әле, үҙеңә булыр, – тине, ти. Егет тағы:

– Мин ҡайтырға ашығам, үҙ бәхетем үҙемә етер, – тип алтынды алып тормай ҡайтып китте, ти. Был тағы сәтләүек ағасы эйәһе булған батшаға ҡайтып керҙе, ти. Бында тағы өйгә кереп тормай, батшаны тышҡа ғына сығарып:

– Һинең сәтләүегең төбөндә төрлө аҫыл таштар, яҡшы мәрйендәр бар икән, шуны алһағыҙ, ағасың үҫер, – тине, ти. Батша:

– Улай булғас, уны һин алып кит, үҙеңә булыр, – тине, ти. Егет тағы:

– Юҡ, мин ҡайтырға ашығам, минең үҙ бәхетем үҙемә етер, – тип, тағы сығып китте, ти.

Китте, ти, китте, ти, теге арыҫланға ла килеп етте, ти. Арыҫланға:

– Һиңә ахмаҡ кешенең мейеһен ашарға ҡуштылар, шуны ашаһа, башы төҙәлер, тинеләр, – тине, ул. Арыҫлан быға:

– Йә, туған, ниҙәр күрҙең, һөйлә әле? – тине, ти.

Бына иң элек сәтләүексегә, алмасыға, унан сейәсегә, унан [illegible]сыға инеп киткәнен, уларҙың ни йомош ҡушҡандарын, [illegible] ҡайҙа, нисек тапҡандарын да һөйләне, ти.

Быны һөйләп бөтөргәс, арыҫлан:

– Һиңә баҡыр биргәндәр, алмағанһың; көмөш биргәндәр, алмағанһың; алтын биргәндәр, алмағанһың; ҡиммәтле аҫыл таштар, яҡшы мәрйендәр биргәндәр, алмағанһың. Шулар үҙҙәре [illegible] түгелме ни?! Шул тапҡан бәхетеңде алмай, юҡ бәхетте [illegible] йөрөгәс, мин һиндәй ахмаҡты бүтән таба алмам. Мин һинең мейеңде ашайым, – тине лә, ти, егетте һуғып үлтереп, [illegible] ашаны, ти.

Тфү, тфү, тфү, әстәғәфируллаһы тәүбә!!!

## 33. Йылҡысыбай

Бер ауылда Әхмәт исемле башҡорт байы була. Был бай, ауылдан биш саҡрым ерҙә тирмә ҡороп, үҙенең мең башлап йылҡыһы менән ғүмер иткән, ти. Йылҡыларын ҡараусы бик ышаныслы ялсыһы Йомағужа исемле бер кеше булған. Әхмәт был ялсыһын бик ятаҡан, уға үҙенән дә бик ышанған. Үҙ [illegible]онда уға ни теләһә, шуны эшләп йөрөргә ирек биргән. Бай уны Йылҡысыбай тип кенә йөрөткән.

Көндәрҙән бер көндө ауылдашы Абдулла тигән бай менән Әхмәт бай ҡалаға барып ҡайтырға булған, ти. Китер ваҡытта Абдулла бик ҡайғылы күренгән. Әхмәт уның ҡайғырыуының сәбәбен һораған, ти. Абдулла үҙенең ышаныслы ялсыһы бул[illegible]ға, йылҡыһының ҡарауылсыһыҙ ҡалыуына ҡайғырыуын [illegible]. Әхмәт бай быға яуап итеп:

– Һин үҙең ялсыларыңа яҡшы ҡарамайһыңдыр? Үҙең яҡшы булһаң, улар ҙа яҡшы булырҙар. Бына минең Йомағужа тигән ялсым бар. Мин уға мөмкин ҡәҙәре яҡшы булырға тырышам. Шуның өсөн дә ул да яҡшы хеҙмәт итә. Уның шул яҡшылығы өсөн Йылҡысыбай тип исем бирҙем. Уға мин үҙемдән дә была[illegible] ышанам, – тигән, ти.

Абдулла:

– Юҡ, һин ни ҡәҙәр ышанһаң да, ялсыларҙың тәбиғәте барыһының да бер була. Һинең Йылҡысыбайыңда ла әллә ниндәй хеҙмәттәр булып сыҡмаһын, – тигән.

Әхмәт Абдулланың һүҙен ҡолаҡҡа алмай, үҙ-ара бәхәсләшеп [illegible]ндәр. Абдулла һаман:

– Һинең Йылҡысыбайың да алдай торғандыр әле, хыянат итә торғандыр әле, – тигән.

Әхмәт үҙенең ныҡ ышаныуын ҡеүәтләгән. Шунан Абдулла:

– Әгәр минең һүҙем дөрөҫ булып сығып, Йылҡысыбай һине алдай торған булып сыҡһа, һин миңә ни бирерһең? – тип һораған, ти.

Шунан Әхмәт:

– Әгәр һинең әйтеүең дөрөҫ булып, Йылҡысыбай алдай торған булһа, үҙемдең мең баш йылҡымды, тирмәмде, барлыҡ йорт йыһазымды, Йылҡысыбайҙы ла һиңә бирермен, – тигән, ти.

Әгәр ҙә Абдулла әйткәнсә булмай сыҡһа, ул ике ҡыҙын, ике мең һум аҡса ҡушып, Әхмәт байға бирергә булған, ти. Юлға китер алдынан ғына Абдулла үҙенең ҡыҙҙары янына инә һалып:

– Ҡыҙҙарым, беҙ Әхмәт менән икәү ҡалаға китәбеҙ. Әхмәттең өйҙә юҡлығынан файҙаланып, ялсыһы Йылҡысыбай янына барып, ҡотортоп, байының өйөр айғырын һуйҙырып ашағыҙ, – тип әйтеп сыҡҡан, ти.

Ҡыҙҙары:

– Ярар, атай. Ҡушҡаныңды урынына еткерербеҙ, – тип ҡалғандар, ти.

Әхмәт менән Абдулла ҡалаға киткәс тә, Абдулланың ике ҡыҙы бик шәп итеп кейенеп, аталарының иң яҡшы аттарын менеп, Әхмәттең тирмәһенә барып, Йылҡысыбайҙы һорағандар, ти. Йылҡысыбай килеп сығып, шатлығынан көлөп ебәреп:

– Йә Алла, күктән көткәнде ерҙән бирҙе, – тип, уларҙы тирмәһенә алып ингән, ти, алдарына бик тәмле аштар килтереп ҡуйған, ти.

Былар аш ашап, ҡымыҙ эсеп, һүҙҙән һүҙ сығарып, Йылҡысыбайҙы маҡтап, тамам аҡылынан шашыр дәрәжәгә еткергәндән һуң:

– Йылҡысыбай ағай, беҙҙең һиңә ҙур үтенесебеҙ бар, – тип һүҙ башлап, өйөр айғырын һуйып ашатыуын һорағандар. Ул ваҡытта ҡунып ҡайтырға ла риза булғанлыҡтарын аңғартҡандар, ти. Йылҡысыбай:

– Ай, йөрәккәйҙәрем, һеҙҙең өсөн өйөр айғырын ғына түгел, Аҡбуҙатты ла һуйған булыр инем, уны бай үҙе егеп китте шул, – тип өйөр айғырын һуйырға сығып киткән, ти. – Бай килһә, айғырҙы урланылар йәки бүре алып китте, һис булмаһа, батып үлде, тип әйтермен әле, – тигән, ти.

Ул сығып киткәс:

– Йылҡысыбай алдамай тип әйткән булалар, алдамауы шул икән, – тип көлөшәләр, ти, Абдулла бай ҡыҙҙары.

Бер ваҡыт айғырҙы һуйып, итен бешереп ашап, Йылҡысыбай тирмәһендә ҡунып, Абдулланың ҡыҙҙары ҡайтып киттеләр, ти. Ҡыҙҙар ҡайтып киткәс, Йылҡысыбай күңелһеҙ, ҡайғылы хәлдә ҡалып:

– Эх аҡылһыҙ, аҡылһыҙ, ҡыҙҙарға ҡыҙығып киттең дә байҙы менә тигән өйөр айғырынан ҡолаҡ ҡаҡтырҙың, – тип үҙен үҙе шелтәләй башлаған, ти. – Бай ҡайтып килһә, нимә тип яуап бирермен икән? – тип уйланған. – Туҡта, бабайҙар: «Кәңәш итеүсең булмаһа, башыңдағы кәпәсең менән кәңәш ит», – тип әйткәндәр, мин дә шулайтып ҡарайым әле, – тигән дә бүркен

өр агастың башына кейҙереп ҡуйып, уны үҙе итеп, үҙен бай
итеп булып, бүреккә:

Эссәләмәғәләйкүм! – тип ҡысҡыра ла, бүрек тарафынан
үҙе булып:

Вәғәләйкүмәссәләм! – тип яуап бирә.

Шулай итеп, үҙе бай ҙа, үҙе булып та һөйләшергә тотон-
ған, ти.

Иҫән генә торҙоңмо, Йылҡысыбай?

Бүрек тарафынан:

Аллаға шөкөр, бай ағай. Шулай ҙа бер уңайһыҙ эш булып
ҡуйҙы бит әле: өйөр айғырын, ҡәһәр һуҡҡан, бүре ашап
китте, – тигән була.

Бай булған булып:

Ниңә һин юҡты һөйләйһең? Ул айғыр бүрегә генә бирешә
торған малдыр шул? – тигән дә, ти, эсенән генә, юҡ былай
һарып сыҡмай, тип яңынан сәләм биреп, яңынан сәләм алып,
исәнлек-һаулыҡ һорашҡан, ти.

Йә, Йылҡысыбай, беҙҙең өйөр айғыры ни эшләп мал
араһында күренмәй? – тип һораған була, ти, йәнә.

Шунан үҙе булған булып:

Бай, ул батып үлеп ҡалды, – тип яуап биргән, ти.

Һуң уның тиреһе, һөйәктәре ҡайҙа? – тип, бай булып һо-
раған да тағы аптырап ҡалған, ти.

Яңынан сәләм биреп, иҫәнлек һорашҡас, «бай»ҙың өйөр ай-
ғырын һорауына яуап итеп:

Өйөр айғырын урлап алып киттеләр, – тигән булған, ти.

Шунан тағы бай булған булып:

Беҙҙең шулай уҫал эттәребеҙ бар була тороп, нисек бурҙар
килеп ала алһын уны? – тип һорай ҙа тағы аптырап ҡала.

Шунан һуң, бүркенә ҡарап:

Инде, бүркем, һиңә тағы бер генә мәртәбә килеп ҡарайым
да, шунда ла рәтле яуап таба алмаһаң, һинең яныңа ғүмерем
буйы килмәм, – тип, яңынан бүреккә сәләм биреп, иҫәнлек-һау-
лыҡ һорашҡан була, ти, шунан бай булып:

Ҡара әле, Йылҡысыбай, йылҡыларҙың араһында өйөр
айғырын күрә алманым. Ҡайҙа һуң ул? – тип һораған да, үҙе
булып:

Бай, үҙең киткәс, Абдулла байҙың фәрештә кеүек матур
ҡыҙҙары килделәр. «Йылҡысыбай ағай, һин байҙың өйөр айғы-
рын һуйып ашатһаң, беҙ һинең янда ҡунып ҡайтырбыҙ», тигәс-
тәре, шундай һылыуҙарҙың теләктәренә ҡаршы килергә көсөм
етмәне лә өйөр айғырын һуйып ашаттым, – тип яуап биргән
булып, «бай»ҙың асыуланмауын үтенгән, ти.

Бай булған булып:

Ярар инде, бик яҡшы булған, килгән ҡунаҡтың күңелен
тапҡас. Шулай иткән яҡшы, – тине, ти.

Шунан бүркенә ҡарап:

– Ай, бүркем, бик дан кәңәш бирҙең бит әле. Ни эшләһә лә эшләр, – тип, бүркен алып кейеп, тынысланып, тирмәһенә инеп киткән, ти.

Ул арала Әхмәт бай менән Абдулла бай ҡаланан ҡайтып килгәндәр, ти. Абдулла, ҡайтҡас та янына сыҡҡан ҡыҙҙарынан:

– Йә, нихәл, балаларым, ҡушҡан йомошомдо эшләнегеҙме? – тип һорай, ти.

Ҡыҙҙары маҡтанышып:

– Атай, эштәр булды, Йылҡысыбайға барып, өйөр айғырын һуйҙыртып ашап ҡайттыҡ. Йылҡысыбай үҙенең байына: «Урланылар йәки бүре ашаны, улай ҙа булмаһа, батып үлде, тип алдармын әле», – тип ҡалды. Беҙ ҡунаҡ булып ҡына түгел, ҡунып та ҡайттыҡ, – тип һөйләгәндәр, ти.

Абдулла:

– Рәхмәт, балаларым, – тип тиҙ генә Әхмәт бай янына барып:

– Йә, дуҫҡай, күр инде, һинең теге ышаныслы Йылҡысыбайың ниҙәр эшләгән? Беҙ киткәс тә, минең ҡыҙҙарым һинең йәйләүеңә килгәндәр икән. Ул уларға һинең өйөр айғырыңды һуйып ашатып ҡайтарған. Ҡыҙҙарым: «Байға ни тип яуап бирерһең?» – тигәс, «Бүре ашап китте йәки урланылар, тип әйтермен, һис булмаһа, батып үлде, тип әйтермен», – тигән, ти. Һин уны алдашмай тигән инең, күр инде хәҙер. Унан һуң, анауы көндө, бәхәсләшкәндә, биргән вәғәҙәңде иҫеңдән сығармағанһыңдыр? – тигән.

Әхмәт быға ҡаршы:

– Юҡ, минең Йылҡысыбай яҡшы әҙәм ул. Әгәр ҙә, ысынлап, һуйған булһа, йәшермәҫ, «Һуйҙым», тип әйтер, – тигән ти, Әхмәт бай. Абдулла башын сайҡап:

– Юҡ, юҡ, булмаҫ. Был бик ҙур эш, – тип ҡараһа ла, Әхмәт:

– Уның нимәһе ҙур булһын? Ҡунаҡтар өйөр айғырына ҡарағанда ҡәҙерлерәк булалар, – тигән, ти. – Әгәр ҙә Йылҡысыбай алдай торған булһа, һиңә бирәм тигән нәмәләр бөтәһе һиңә булһын, – тигән, ти.

Шунан бер ваҡыт Йылҡысыбай ятҡан тирмәгә барып ингән, ти, был икәү. Иҫәнләшеп, күрешкәс, Әхмәт бай:

– Бына әле беҙ йылҡылар араһында йөрөгән инек, өйөр айғырын күрә алманыҡ, ул ҡайҙа икән? – тип, белмәмешкә һалышып, һораған булған, ти.

Йылҡысыбай:

– Һеҙ ҡалаға киткәс, Абдулла байҙың ҡыҙҙары килгәйне. Улар: «Йылҡысыбай ағай, әгәр байҙың өйөр айғырын ашатһаң, беҙ ҡунып та китер инек», – тинеләр. Шундай оҗмах хуры кеүек ҡыҙҙарҙың үтенесен кире ҡайтарғым килмәне. Айғырҙы һуйҙым. Инде хәҙер, бай ағай, үҙең ни эшләтһәң дә, эшләтерһең, – тип һүҙен бөтөргән, ти, Йылҡысыбай.

Әхмәт кинәнеп:

– Ай, ҡустым, рәхмәт һиңә. Ҡунаҡтарҙың күңелдәрен табып [illegible] иткәнһең, – тип әйткән, ти.

Шунан һуң Абдулла бай:

– Йылҡысыбай, һин миңә шуны әйт. Ҡайһы ҡыҙым менән яттың? – тигән, ти.

Йылҡысыбай:

– Оло ҡыҙың менән, – тигәс:

– Рәхмәт, ғәҙел икәнһең, – тип илле мең һум мәһәр менән оло ҡыҙын Йылҡысыбайға, йәнә илле мең һум мәһәр биреп, кесе ҡыҙын Әхмәткә йәрәште, ти.

Үҙенең тура, йәнә килеп ғәҙел булыуы менән Йылҡысыбай ҙа бай булып көн итеп, әле һаман да йәшәй, ти.

## 34. Нәүшируан*-Ғәҙел менән Хәтәмтай*-Йомарт

Элек Нәүшируан исемле бер батша бар ине. Ул фарсы вилайәтендә батшалыҡ ҡылды. Шул тиклем тоғролоҡло ир ине, ти, кем, донъяла уның кеүек кеше булманы, ти. Шуның өсөн халыҡ уны Ғәҙел тип исемләр ине, ти.

Шул замандарҙа Хәтәмтай тигән тағы бер ир бар ине, ти. Йомартлыҡта шул ҡәҙәре камил ир ине, йыһанда уның бәрәбәренә һис кеше булманы. Шул сәбәптән замандың олоһо, кесеһе уны Хәтәмтай-Йомарт тип йөрөтөр ине, ти.

Нәүшируан-Ғәҙел менән Хәтәмтай-Йомарт бер-береһе менән [illegible] дуҫ инеләр. Бер-береһен бик ҡаты ололай инеләр, ти.

Көндәрҙән бер көн төрлө халыҡ төрлө хәбәр йөрөтөп, уларҙың дуҫлыҡтарын өҙөп, араларына дошманлыҡ һалды, ти. Нәүшируан-Ғәҙел йән асыуынан бер ваҡыт:

– Мин батшамын! Хәтәмтай минең аяғыма баш ҡуйһын. Юҡһа һәләк итермен! – ти. Был һүҙ Хәтәмтайҙың ҡолағына ишетелә. Хәтәмтай әйтә:

– Азат кеше була тороп, донъя ғәмәле өсөн, бер әҙәмдең аяғына барып баш ҡуймаға ни мохтажлығым бар?! Уның кеүек батшалар миңә хәжәт түгел, – ти.

Был хәбәр Нәүшируан батшаға барып етте, ти. Батша бик ҡыҙынды, үс алырға ҡәһәтләнде, ти.

Хәтәмтайҙың Аҡтамаҡ атлы бер аты бар ине, ти. Йүгерешлектә уның бәрәбәренә мал юҡ ине, ти. Хатта шул ҡәҙәре ине, кем, бер айлыҡ юлға бер көндә барып килер ине, ти. Нәүшируан-Ғәҙел Хәтәмтай-Йомартҡа үсегеп: «Йә башын, йә Аҡтамаҡ атын алдырам!» – тип ҡәһәт итте, ти.

Нәүшируан батшаның ҡыҙы бар ине, ти. Ул шундайын күркәм ине, кем, һылыуылыҡта уның янында Нәркәс менән Йолоктәр* оялыр ине, ти.

Берҙән-бер көндө, ил-йортон йыйып, Нәүшируан-Ғәҙел:

– Ил-йортом! Мин – Нәүшируан-Ғәҙел, дошманым – Хәтәмтай. Мин батша булһам да, ул бер ҡара кеше булһа ла, миңә башын һалмаһа, уны бөтөрөп, донъяға батшалығымды белдермәһәм, тәхет өҫтөндә ултырып хөкөм йөрөтмәгәнлектән ни абруйым булыр? Эй, халыҡ, кем булһа ла барып Хәтәмтайҙың башын алып йә булмаһа атын килтерһә, яңғыҙ ҡыҙыма шуны кейәү ҡыламын, – тип яр һалды, ти.

Ул заманда шул батшалыҡта бер ярлы егет бар ине, ти. Үҙе бик ғәййәр, үҙе бик сибәр кеше ине, ти. Шул егет уйға ҡалды, ти: «Минең бында ташлап китмәҫтәй дәүләтем юҡ. Әгәр бәхетем булһа, ҡыҙын алып, батшаға кейәү булырмын. Бәхетем булмаһа, үлеп китермен», – тип Хәтәмтайҙың башын йә булмаһа атын алып килмәгә ант итте лә юлға сыҡты, ти.

Бер нисә көн юл йөрөп ярлы егет Хәтәмтайҙың ауылына яҡынлаша. Егет шулай тип уйлай: «Мин Хәтәмтайҙың өйөнә тура бармайынса, яланда йөрөп, үҙемдең моратыма етәйем йәиһә туп-тура уның өйөнә барып, ҡунаҡ булайым да йоҡоһонда башын киҫәйем». Шундай уйҙар менән килә торғас, бер ауылға килеп инде, ти. Ауыл ситендәге өйҙән бер ир сыҡҡайны, шунан:

– Йомарттың ауылы ҡайһы яҡта ла, өйө ҡайһы тирәлә? – тип һораны, ти. Ул ир:

– Ни өсөн уны һорайһың? Ни йомошоң бар? – тине, ти. Егет әйтә, ти:

– Мин бер ғәрипмен. Йомартҡа барһам, Хоҙай хаҡына берәй нәмә бирмәҫме?

Теге кеше Йомарттың ауылын да, өйөн дә өйрәтеп ҡалды, ти.

Шул өйрәтеү буйынса ярлы егет Хәтәмтайҙы табып алды. Хәтәмтай-Йомарттың ғәйре* малдары ҡулында юҡ ине, мәгәр маҡтаулы аты ғына ҡулында ине, ти. Был, ғәрип ҡунаҡ өсөн тип, шул атын йығып һуйҙы, бешерҙе, уны алдынан-артынан ҡалғансы һыйланы, алдында гел үҙе йөрөп хеҙмәт ҡылды, ти. Ятыр ваҡыт еткәс, Хәтәмтай үҙе түшәктәр йәйеп, үҙе урын әҙерләп, ҡунағын яткырҙы, ти. Бер аҙҙан һуң үҙе лә ятты, йоҡоға ла китте, ти. Егет Йомарттың был эштәренә хайран булды, ти, эстән генә шулай уйланы, ти: «Мин ни эшләйем? Ошондайын йомарт, ошондайын яҡшы кешене бер ҡыҙ өсөн үлтермәгә теләйем?! Минең был эшем һис тә ирлек булмаҫ! Быны үлтермәһәм дә, ғүмерем эсендә бер ҡыҙ табырмын. Әммә бының кеүек йомарт ирҙе таба алмам». Шулай уйланды ла, ти, егет зар-зар иланы, ти. Уның илауына Йомарт йоҡоһонан уянды, ти. Йоҡоһонан уянып:

– Эй, минең ғиззәтле ҡунағым, ни өсөн былай илайһың? – тип һораны, ти.

Егет ни эш менән килгәнлеген баштан-аяҡ һөйләп бирҙе, ти.

Хәтәмтай-Йомарт был һүҙҙәрҙе ишетеп:

Уай дариға*, бер йомошоң бар, береһе юҡ, – тип аһ орҙо, ти. Егет илай-илай:

Мин был ниәттәремдән ҡайттым инде, – тине, ти. Йомарт:

Уай дариға, маҡтаулы Аҡтамаҡ атымды һуйып көндөҙ үҙеңә ашаттым. Әгәр башым һинең ниәтеңә яраһа, ул да ҡорбан булһын, – тип ятҡан еренән һикереп тороп, кирәгә башында* торған хәнйәрен алып, үҙ башын үҙе киҫәм тигәндә генә, ҡатыны сәсрәп килеп тороп, ҡулынан тотоп алды, ти.

Эй, Йомарт, Йомарт! Ни эшләүең был?

– Кит бынан! Ҡунағымдың йомошон йомошлаймын!

– Йомарт, һин яңылышаһың бит! Башыңды киҫеп бирһәң дә, батшаға барып еткәнсе, төҫөң үҙгәрер. Батша һинең башың икәнен танымаҫ. Бәлкем, таныһа ла, золомлоҡ итеп, ҡыҙын бирмәҫ. Һинең башың бушҡа әрәм булыр. Егеткә башыңды тере көйөнсә биреп тә, был фәҡирҙең хеҙмәтенә ярай алаһың да инде.

Ҡатынының был һүҙе Хәтәмтайға бик оҡшай төшөп, үҙен нуҡталап, теҙгенде егеткә тотторҙо, ти. Егет ни ҡәҙәре уны алып китмәҫкә тырышһа ла, уның ай-вайына ҡарамай, ахыр үҙен етәкләттерҙе, ти.

Байтаҡ юлдар йөрөп, байтаҡ һыуҙар кисеп, байтаҡ көндәр килә торғас, Хәтәмтай-Йомарт менән ярлы егет Нәүшируан-Ғәҙелдең ҡалаһына яҡынлаштылар, ти. Хәтәмтайҙы фәлән егет алып килә ята, имеш, тигән хәбәрҙе ишетеп, Нәүшируан батша үҙе быларға ҡаршы сыҡты, ти. Ҡаршы сыҡһа, күрҙе, ти: ярлы егет Хәтәмтай-Йомартты етәкләп алып килә ятыр, ти. Хәтәмтайҙың ҡулы баулы, муйыны баулы, башы нуҡталы. Был хәлгә Нәүшируан батша хайран ҡалды ла егеттән һораны, ти:

– Нисек итеп уны тотоп алдың?

Егет башынан үткәндәрен, ишеткән-күргәндәрен ҡалдырмай һөйләп бирҙе, ти. Уның һөйләгәнен ишеткәс, Нәүшируан-Ғәҙелдең күңеле тулды, ти. Батша иларға тотондо, ти. Илап-илап алғандың һуңында:

– Йомарт тигән шул булыр: ашап ултырған ашын кешегә бирер, менә торған атын бирер. Мәгәр Хәтәмтай кеүек башын бирер йомарт ир булырмы? – тине, ти. Үҙ нәүбәтендә Хәтәмтай-Йомарт былай тине, ти:

Теләһәң, бадишаһым, башымды киҫ, теләһәң, ҡол ҡыл – барыһына ла ризамын, берүк был егеттең йомошон йомош итә күр.

Ни хәл итһен, Нәүшируан-Ғәҙел Хәтәмтай-Йомарттың йомартлығына хайран булып туҡтамайынса, баяғы егеткә ҡыҙын бирҙе, ти. Шунан һуң йәнә әйтте, ти:

Хәтәмтай, йомартлығынан башын да аяманы. Мин, асыуымда баҫа алмайынса, уны үлтерһәм, халыҡ араһында минең Ғәҙел атым юғалыр.

Шулай тип әйткәндең һуңында Хәтәмтайҙы азат ҡылып ҡосағына алды, ти. Дуҫлыҡтары яңынан ҡайтты, ти.

Бынан һуң һәр икеһе лә оҙон ғүмер һөрөп, татыулыҡ менән тереклек итеп, әхирәткә күстеләр, ти.

## 35. Хәтәмтай

Булған, ти, элек Хәтәмтай тигән батша. Бер ваҡыт вәзире менән ултырғанда, ул маҡтана башлаған.

– Минең кеүек йомарт кеше булмаҫ инде, – ти икән был.

Вәзире әйтә:

– Юҡ, һин йомарт түгел, бынан ике айлыҡ юлда бер ҡатын батша бар. Бына ул йомарт, исмаһам, – ти. – Хоҙай ризалығы өсөн саҙаҡа рәхим итегеҙ, тип барған бер теләнсегә бер алтын бирә, ти.

Шунан батша әйтә:

– Йомартлығы дөрөҫ булһа, һине баш вәзирем итеп ҡуйырмын. Дөрөҫ булмаһа, башыңды киҫермен, – ти ҙә, атына атланып, ике айлыҡ юлға сығып китә.

Ҡатын батша һарайына еткәс, хәйерсе кейеме кейеп, барып инә лә саҙаҡа һорай. Ҡатын батша уға бер алтын бирә. Хәтәмтайҙан башҡа хәйерселәр ҙә инә. Уларға ла берәр алтын бирә. Алтынды алғас, сығып китә лә батша кире килеп инә. Инә лә тағы саҙаҡа һорай.

Ҡатын батша:

– Һин хәйерсе кешегә оҡшамағанһың. Ни өсөн былай йөрөйһөң? – ти.

– Мин һине һынар өсөн килдем. Мин дә йомарт. Шулай ҙа ингән бер кешегә бер алтын бирә алмайым. Ул тиклем ғәмгә ҡайҙан алтын еткерәһең? – ти.

– Бынан ике айлыҡ юлда бер итексе бар. Беҙен бер сәнскәндә, ҡысҡырып көлә, икенсе сәнскәндә, үкереп илай. Ни өсөн уның улай иткәнен белеп ҡайтһаң, мин һинең һорауыңа яуап бирермен, – ти ҡатын батша.

Батша тағы ике айлыҡ юлға сығып китеп, теге итексене барып таба. Ул, ысынлап та, беҙен бер сәнскәндә, ҡысҡырып көлә, икенсе сәнскәндә, ҡысҡырып илай. Итексенән батша быны сәбәбен һорай. Итексе:

– Бынан ике айлыҡ юлда бер мәзин күлдәген һыуға манып кейә лә, манараға йүгереп менеп аҙан ҡысҡыра. Күлдәге кибә биргәс, йүгереп төшөп тағы һыулай ҙа, тағы менеп, тағы аҙан ҡысҡырырға тотона... Ни өсөн шулайта икән? Шуның сәбәбен һорап, килеп әйт. Шунан мин дә һиңә әйтермен, – ти.

Батша итексе менән хушлаша ла мәзинде эҙләп китә. Мәзин янына еткәс, ҡарап тора. Ысынлап та, күлдәген һыуға манып кейеп ала ла был манараға менеп аҙан әйтә. Шунан тағы

нүгереп төшә лә, көлдәген яңынан сылатып кейә лә тағы менеп китә, ти.

Батша мәзинде саҡыртып ала ла:

– Ни өсөн шулай йөрөйһөң? – ти.

Мәзин әйтә:

– Бынан ике айлыҡ юлда һатыусы егет тауыҡ йомортҡаһы хәтле гәүһәр ташты киҫкәгә һалып, төйөп, он яһай. Сәғәт туҡтаһа, шуны елгә осороп ебәрә. Әгәр шунының сәбәбен белһәң, әйтермен, – ти.

Батша теге егетте эҙләп китә. Эҙләп таба ла һорай:

– Ни өсөн һин был тиклем малды елгә осораһың? – ти.

Егет әйтә:

– Бынан ике айлыҡ юлда ҡом сахраһында бер егет яланғас көйө йүгереп йөрөй, – ти. – Әҙәм балаһын күрһә, кире артына ҡарап йүгерә, – ти. – Уның ни өсөн йүгергәнен белеп кил. Шунан мин дә һиңә һөйләрмен, – ти.

Батша ике айлыҡ юлды үтеп, ҡом сахраһына барып етә. Теге егетте күрә. Сыр яланғас, ти. Быны күргәс, ҡаса башланы, ти. Батша егетте көскә туҡтатып, янына саҡырып ала ла:

– Егет, һин нишләп былай япа-яңғыҙың ҡом сахраһында йөрөйһөң? – ти.

Егет әйтә:

– Мин, – ти, – икенсе ауылға барып, бер мәҙрәсәлә уҡыным, – ти. – Ауылға ҡайтып барғанда төндә бер ауылға ҡунырға керҙем. Унда ҙур өйҙә бер ҡарт ҡына тора икән. Шуға фатирға төштөм. Иртәгеһенә ҡарт мине өйҙә ҡалдырҙы ла үҙе сығып китте. «Егет, аша, эс. Мин ҡайтҡансы тор. Тик бер ишекте лә асма», – тине. Шунан ни өйҙә бер үҙем ултыра торғас, эсем бошоп китте лә ишекте барып астым. Асһам – бик матур бер ҡыҙ ултыра. Ҡыҙ янына индем. Ул ҡыҙ мине яратты, мин дә уны яраттым. Алыҫ түгел бер күл бар ине. Шул күл буйына төштөк. Күлгә төшкәс, ҡыҙ: «Егет, берүк, һыуға сумма күрмә инде», – тип әйтте. Мин үҙемсә уйлай һалып ҡуйҙым: хужа, ишекте асма, тигәйне, тыңламай астым: ниндәй матур ҡыҙ таптым. Әгәр ҙә һыуға сумһам, бәлки, бынан да яҡшы ер табырмын, тип сумғайным, ошо ҡом сахраһы булып сыҡты, ти. Мин ошонда ҡом сахраһында ҡалдым. Шунан бирле кейемем дә юҡ, шәрә көйөнсә йөрөйөм, – ти.

– Ниңә әҙәм балаһына ҡатнашмайһың? – тип һорай батша.

– Теге ҡыҙҙы шул тиклем һағындым. Әҙәм балаһын күрһәм, тағы ла ныҡыраҡ һағына башлайым, – ти егет. – Шуның өсөн ҡасам, – ти.

Шунан батша килгән юлы менән кире китә. Теге кибетсе егет йәшәгән ергә еткәс, иртәнге сәғәт туғыҙҙа уның кибете янына бара. Егет тауыҡ йомортҡаһы саҡлы гәүһәр ташын киҫкәгә һалып төйә-төйә лә елгә осороп ебәрә. Батша ҡом сахраһында ҡасып йөрөгән яланғас егет тураһында һөйләп бирә лә:

– Ниңә һуң һин шул хәтле малды әрәм итәһең? – тип һорай. Теге егет әйтә:

– Бынан ары осормайым инде, – ти. – Мин атанан бер генә ул инем. Донъяла ниндәй боҙоҡлоҡ бар, шуның барын да эшләп йөрөнөм. Ата һүҙен бер ваҡытта ла тотманым. Эстем. Аҡсам күп булды. Аҡсам күп булғас, дуҫ-иштәрем дә күп булды, мине яраттылар. Инәй үлде, – ти. – Әжәл сире менән сирләй башлағас, атай мине янына саҡырып алды ла өгөтләне. «Эй, балаҡай, мин үләм инде. Мин үлгәс, аҡсаң бөтөр. Аҡсаң бөткәс, бер дуҫың да яратмаҫ, бөтәһе лә һине ташларҙар, һин, дуҫтарыңа гәрләнеп, үҙеңде үҙең үлтерерһең», – тине. Шунан мин атайҙың һүҙенән көлдөм: «Һи, мине дуҫтарым ташлай буламы һуң», – тигәйнем. Атай: «Ташламаҫ тиһең – ташларҙар. Ташлауҙарына гәрләнеп, һин үҙеңде үҙең үлтерерһең. Үлер булһаң, мин өрләккә ҡағып ҡуйған ҡулсаға аҫылырһың», – тине лә, шунан күп тә тормай, йән бирҙе. Иллеләп дуҫтарым: ҡыҙҙар, егеттәр менән ҡырға хөзөргә* сыҡтыҡ. Шул ваҡытта уҡ минең аҡсам бөттө лә, улар һала алған аҡсаны һала алманым. Шунан мине күркә бешерергә ҡалдырып, ҡыҙҙар менән уйнарға киттеләр. Уйға батып торғанымда, бер ҡош килеп төштө лә бешкән бер күркәне алды ла китте. Иптәштәрем аш ашарға килде. Бер күркә етмәй бит инде. Иң яҡын күргән дуҫым асыуланып, килә килеп, миңә һуғып ебәрҙе. «Аш һаҡларға ҡалғас, нимә ҡарап ултырҙың?» – тип әрләне. Шунан был һуғып ебәргәндән гәрләнеп, һыуға ташланырға һыу ситенә барҙым. Барғайным, атайҙың васыяты иҫемә төштө. Иҫән ваҡытында бер тыңламаным, исмаһам, үлер саҡта әйткән һүҙен тыңлайым, ул ҡағып ҡалдырған ҡулсаға еп таҡтым. Муйынды епкә кейҙерәйем тигәнемсә, ҡулсам һурылып иҙәнгә йығылып төштөм. Шуның артына ниҙер дөбөр-дөбөр ҡойолдо. Тороп ҡараһам, атай түшәмгә алтын гәүһәрҙәр күмеп ҡалдырған булған да, шулар ҡойолған икән. Араһынан яҙыу яҙылған ҡағыҙ таптым. Иплəп уҡыһам: «Күрҙеңме, балаҡай. Дуҫтарың ни эшләтте? Хәҙер аҡылланырһың. Инде иҫке дуҫтарыңдан үсеңде ал. Кибет ас та иртә һайын тауыҡ йомортҡаһы саҡлы гәүһәр ташын төй-төй ҙә елгә осороп ебәр. Быны күреп дуҫтарың һарғайырҙар», – тип яҙған. Хәҙер мин гәүһәрҙе осормайым инде: бөтә дуҫтарым һарғайышып бөтөп бара, – ти.

Батша ары китә, мәзингә барып етә. Гәүһәр таш онтаусы егеттә булыуын әйтә, уның үҙенең ни өсөн кейемен сылатып аҙан әйтеүенең серен һораша.

– Мин бер ауылда мәҙрәсәлә уҡып ята инем. Һәр көндө таң атмаҫ борон мәзин байҙы ирештереп, аҙанды унан алда әйтә инем, – ти мәзин. – Бер иртән тороп барғайным, бик шәп ямғыр яуҙы. Өҫтөм сыланғайны, манараға менгәс тә, бер ҡош килеп мине күтәреп алып китте. Ҡош мине бер кәртәләнгән зыярат эсенә килтереп ташланы. Шунан шул мәлдә өс-дүрт кеше

килеп, бер ҡәбергә бер әйбер күмеп китте. Мин кәртә буйында шул көйөнә ятып ҡалдым. Таң атып ҡояш сыҡҡас, зыярат эсенә бик күп халыҡ килеп инде. Шунан мине тотоп алып, аяҡ-ҡулымды бәйләп алып киттеләр. Һис кенә лә уларҙың телен белмәйем. Теге ҡош мине икенсе батша иренә килтереп ташлаған икән. Шунан бер кеше килде лә: «Бөгөн батшаның ҡыҙы юғалған. Уны урлауҙа һинән шикләнәләр», – тине. Мин уға үҙ хәлемде һөйләп бирҙем. Төндә кемдәрҙеңдер зыяратҡа нимәнеләр күмеп киткәнлеген әйттем. Шунан соҡоп ҡараһалар, батшаның ҡыҙы икән. Ҡыҙ әле үлмәгән булған. Соҡоп алғас, батша, ҡыҙымды ҡотҡарыусыға бирермен, тигән булған икән, ҡыҙҙы миңә бирҙе. Шунан мин ул ҡыҙ менән тора башланым. Мине бер ергә лә сығарманылар. Тотҡонда торған шикелле торҙом. Шунан ҡасып киттем дә күлдәгемде һыуға манып кейҙем дә, зыярат ҡоймаһына баҫып, ниңә мин бында йөрөйөм, китәйем, тип теге ҡошто көтә башланым. Ҡош мине осороп алып китеп, яңынан ошо уҡыған ауылыма килтереп ташланы. Хәҙер инде теге ҡыҙ янына барғы килә. Көн дә шул ҡоштоң яңынан килгәнен көтәм. Башта, осороп алып киткәндә, күлдәгем һыулы булғанға, хәҙер ҙә һыулап көтәм, ҡош һаман да килмәй, – ти.

Батша мәзин ҡырынан китә лә итексе янына килә. Итексегә мәзиндең хәлен бәйнә-бәйнә һөйләп бирә. Шунан итексе һөйләй башлай:

– Бар ине минең ҡатыным, – ти. – Биш ваҡыт намаҙҙы, ураҙаны ҡалдырмай ине. Тауыҡтарға ем һалырға сыҡҡанда ла, башын шәл менән бөркәп, ҡулына бирсәткә кейеп сыға ине. «Ниңә улай итәһең?» – тип һораһаң: «Унда нәмәхәрәм әтәс бар. Тәнемде күрһәтмәйем», – тип әйтә торғайны. Минең ҡатыным ана шундай әҙәпле ине. Шунан бер рәт урамда йыйылышып торған ирҙәр янына сыҡтым. Ирҙәр төрлө ҡатындар тураһында: тегенең ҡатыны тегеләй, быныҡы былай, тип һөйләй башланылар. Уларҙың һүҙҙәренә мин дә ҡатышып киттем: «Булыр-булыр ҙа – минең ҡатыным кеүек әҙәпле ҡатын булмаҫ: биш ваҡыт намаҙын да, ураҙаһын да ҡалдырмай», – тип әйткәйнем, шунан берәү: «Һин ҡатыныңды һынағың килһә, бер төн йоҡоңдо йәлләмә», – тип әйтте. Шунан мин уның менән: «Нишләп һин улай минең ҡатынды нахаҡтан рәнйетәһең?» – тип ыҙғыштым. Ҡайттым. Кис булды. Бик иртә йоҡларға яттым. «Туҡта әле, йоҡлаған кеше булып ятайым да ҡатынды һынап ҡарайым», – тип уйланым да йоҡлаған булып яттым. Ҡатыным еҫле һабын менән яҡшылап йыуынды, биҙәнде, шандалдар һөрттө, серпәндәр яҡты, матур-матур кейемдәрен кейҙе лә төн уртаһында йорттан сығып китте. Ҡатыным бер аҙ киткәс, мин дә йәшеренеп уның артынан киттем. Барып керҙе ҡатыным бер генә тәҙрәле бер өйгә. Унда тулы насар кешеләр: ҡараҡтар, башкиҫәрҙәр. Шуларҙың эсеп ята торған ерҙәре икән. Шунан күренмәйенсә генә тәҙрәнән ҡарағайным – ҡатынымды уратып

алғандар. «Нишләп бөгөн һуң килдең?» – тип әрләйҙәр минең бисәне. «Теге суҡынған, ҡәһәр һуҡҡыры, абышҡа булған нәмә ниңәлер оҙаҡ йоҡламаны бит!» – ти ҡатыным. Шунан мин күренмәйенсә генә өйөмә ҡайтып киттем. Йоҡларға яттым. Бер аҙҙан ҡатыным да ҡайтып инде. Шунан шандалдарын, кершәндәрен йыуып ташланы. Таңға ҡарай минең яныма килеп ятты. Мин бер нәмә лә тоймаған булып, йоҡлаған кеше һымаҡ булып ятам. Ята торғас, был, тәһәрәт алып, намаҙ уҡыны. Намаҙ уҡып, ҡулына бирсәткә кейеп, шәл ябына башланы. Шунан ҡатынымдан: «Ҡайҙа киттең?» – тип һораным. Ул: «Тауыҡтарға ем һалам», – тине. «Тауыҡтарға ем һалырға шәлдәр ябынып, бирсәткәләр кейеп сығалармы ни?» – тим. «Эй, йәнекәйем, унда бит нәмәхәрәм әтәс бар бит», – ти. Шунан мин: «Үткән төндә йөрөүең нәмәхәрәм түгел инеме ни? Унда нимә эшләнең?» – тинем. Ҡатыным уға ҡаршы: «Мин һине яҡшылығың өсөн генә ҡалдырам», – тип әйтте лә сығып китте. Шунан бирле мин уның насар юлға төшөүен уйлайым да илайым; теге тауыҡтарға ем һалғанда әтәсте нәмәхәрәм һанап, бөркәнеп сыҡҡаны иҫемә төшһә, көләм, – тип һүҙен бөтөрҙө, ти, итексе.

Батша итексе менән хушлаша ла ҡатын батшаға ҡарай юл ала. Барып еткәс, итексе менән булған хәлде һөйләй. Шунан был ҡатын да һөйләй башлай:

– Мин бер батшаның берҙән-бер ҡыҙы инем, – ти. – Беҙгә килеп-китеп йөрөй торған бер ишан бабай бар ине. Уның кәүештәренең үксәләрендә бәләкәй ҡыңғырауыҡтар бар ине. Шунан мин унан: «Ишан бабай, нишләп һинең кәүештәреңдә ҡыңғырауыҡтар бар, ә кешеләрҙекендә юҡ?» – тип һорағайным, ул миңә: «Ер өҫтөндә ваҡ ҡына төрлө ҡорт, мәхлүктәр күп. Уларҙы тапап беҙ бәндәләр гонаһлы булабыҙ. Шуларҙы тапамаҫ өсөн, мин ҡыңғырауыҡлы кәүеш кейеп йөрөйөм. Улар шуның тауышын ишетеп ҡасалар, тапалмай ҡалалар», – тине. Шунан бер көндө мин сирләп киттем дә ишан бабайҙы саҡырттыҡ. Ул өшкөрөп киткәс, атайҙың гәүһәр таш тиҫбеһе юғалды. Шунан атай тентеү яһатты. Тиҫбе табылманы. Шунан бер көндө мин уйнарға сыҡҡан еремдән ишан бабайға барып керҙем. Шунан ҡайтып атайға: «Атай, һинең юғалған тиҫбең ишан бабайҙарҙа», – тип әйттем. Шунан атай ишан бабайҙарға тентеү яһатты. Тентеү яһағас, ишан бабайҙың баҙҙарынан бик күп алтын табылды. Ишан бабайҙы аттырып, бөтә малын атай алды. Ишан бабай бөтә бандиттарҙың башлығы булып, халыҡты талап ятҡан. Хәҙер атай үлде. Мин батша булып ҡалдым. Халыҡҡа мин ишан бабайҙан һалдырып алған алтынды ғына өләшәм, – тип һүҙен ослай ҡатын батша.

Хәтәмтай батша, ҡатын батша менән хушлашып, үҙ иленә ҡайтып китә. Теге вәзирен, тәүҙә әйткән һүҙе буйынса, баш вәзир итеп ҡуя.

## 36. Лоҡман Хәким

Борон-борон заманда ҙур бер батшалыҡта Лоҡман Хәким исемле бик ғалим бер кеше йәшәгән. Батша, күп белгәне өсөн, уны күрә алмай, нисек тә булһа юҡ итергә хәйлә ҡора. Хәйләһе барып сыға, «сихырсы» исеме тағып, ул уны тәрән ҡойоға һалдырып күмдерә.

Лоҡман Хәкимде күмгәндән һуң күп тә үтмәй, яуыз батша үлеп китә. Уның урынына икенсе батша тәхеткә ултыра. Көндәрҙән бер көндө ит ашағанда, батшаның тамағына һөйәк тора. Төрлө табиптарҙы саҡыралар – береһе-бер һөйәкте ала алмай.

Был батшалыҡта күпте күргән, күп йәшәгән бер ҡарт була. Батша был ҡарттан, батшалыҡта тағы ла берәй белемсе юҡмы икән, тип һорарға ҡуша. Килгән батша вәзиренә ҡарт:

– Бынан ете йыл элек Лоҡман Хәким тигән бик ғалим кеше бар ине. Үлгән батша уны, күп белгәне өсөн, ҡойоға һалып күмдерҙе. Бәлки, ер аҫтында йәшәргә им тапҡандыр. Итһә, шул ғына ярҙам итер ине, – тигән, ти.

Батша ҡартты ҡойонан ҡаҙып алырға ҡуша. Лоҡман Хәким үлеүгә үлмәгән, әммә бик ныҡ йонсоған була. Батшаның ауырыуын уға әйткәс, Лоҡман Хәким:

– Батшаның бер улы бар икән. Шул улын һуйып, итен ашаһын, һөйәк уның тамағынан сығыр, – тигән, ти.

Был һүҙҙәрҙе батшаға әйтәләр. Батша үҙенең берҙән-бер улын һуйырға йәлләй.

– Ағастың япрағын киҫһәң, икенсе япрағы үҫеп сыға, тамырын киҫһәң, ағас ҡорой. Йәлләмә бер балаңды, һуй, үҙең тере булһаң, балаларың булыр әле, – тигән уға бер вәзире.

Батша улын һуйырға риза була. Лоҡман Хәким баланы һалып, уны ап-аҡ шаршау менән ышыҡлай ҙа ҡуй һарығы килтерергә ҡуша. Ҡуйҙы килтерәләр. Ҡарт шул ҡуйҙы салып ебәрә. Ҡуйҙың салыу ҡаны шаршау артында илап ултырған батшаға сәсрәп китә. Батша, улымды һуйҙылар икән, тип:

– Ах! – тип ҡысҡырып ебәрә. Ҡысҡырып та ебәрә – тамағындағы һөйәк атылып килеп тә сыға.

Шунда торған халыҡ Лоҡман Хәкимдең был аҡыллы хәйләһенә шаҡ ҡата. Улының һуйылмауын белгәс, батша ҡыуанып бөтә алмай, ти. Шунда ул вәзирҙәренә мәжлескә әҙерләнергә, халыҡты йыйып килтерергә ҡуша. Был мәжлескә төрлө яҡтан күп халыҡ йыйыла. Батша халыҡ алдында Лоҡман Хәкимгә рәхмәттәрен әйтә, күп байлыҡ бирә лә:

– Былай ярлы булып йәшәмә, шатлыҡта, рәхәттә көн күр, ҡайғыны белмә! – ти.

Шунан алып, ҡарттарҙы үлтермәй башлағандар, ти.

Лоҡман Хәким әле лә ҡайғы-хәсрәт күрмәй, шат-рәхәт йәшәй, ти, ауырыу кешеләрҙе һауыҡтыра, ти.

## 37. Бабай, Хызыр, батша

Элек бер бабай менән бер ҡыҙыҡай ғүмер итәләр ине, ти. Бабай бер заман сәфәргә сығып киткән: сәфәргә сығып китеп, йөрөп-йөрөп ҡыҙы янына күңелһеҙ генә әйләнеп ҡайтҡан, ти.

– Атай, ниңә күңелһеҙ генә ҡайтып килдең әле? – тип һораған, ти, ҡыҙы.

– Эй балам, балам. Ил батшаһын күрҙем. Ул миңә: «Әссәләмәғәләйкүм, ҡарт кеше, – тине. – Үәт, бабай, һиңә тип бер һорау бирәм әле: донъяла ваҡытта миңә Хызыр* ғәлиәссәләмде күрһәт. Хызыр ғәлиәссәләмде күрһәтһәң, күп малдар бирермен. Күрһәтмәһәң, башыңды сабып өҙәрем», – тине. Уйланып торҙом, торҙом да, «Иншалла, рахман, ҡырҡ көндән күрерһең», тип яуап бирҙем, – ти ҡарт. Был һүҙҙәрҙе һөйләп биргәс, ҡыҙы:

– Эй атай, ҡырҡ көн буйы теләктә ултыр, йәме. Донъя шөғөлөн мин үҙем эшләрмен, – тигән.

Атаһы ҡырҡ көн буйы теләктә ултырҙы, ти. Ҡырҡ көн тулғас, бер ат мендереп, береһен етәкләтеп, батша бер вәзирен ебәрҙе, ти.

– Һине батша саҡырта, – тип килеп әйткәс, теге бабай:

– Ярар. Бар, балам, ҡайтып тор. Мин үҙ яйым менән барырмын, – тигән.

– Йә, атай, хәйерле сәфәр һиңә, – тип оҙатып ҡалған ҡыҙы. Бабай батшаға китеп ултырғанда, уға бер йәш егет ҡаршы осраны, ти.

– Әссәләмәғәләйкүм, бабай. Ҡайҙа бараһың, бабай, былайтып? – тигән был.

– Мине батша саҡырта, балам. Хызыр ғәлиәссәләмде күрһәтәм тип вәғәҙә бирҙем. Күрһәтһәң, күп малдар бирәм тип әйтте. Күрһәтмәһәң, башыңды сабып өҙәм, тип әйтте, – тигән.

Йәш егет әйткән:

– Барма, бабай, улай булғас, – тигән.

– Юҡ, балам, барам инде, вәғәҙә бирҙем бит. Вәғәҙә – иман бит, – тигән бабай.

– Улай булһа, бабай, һинең менән мин дә барайымы? – тигән егет.

– Әйҙә, әйҙә, рәхим ит, улым, – тигән бабай.

Барып керҙеләр, ти, был икәү батша йортона.

– Йә, килдеңме, бабай? – ти батша.

– Килдем, килдем, улым.

– Ҡырҡ көн булды. Миңә Хызыр ғәлиәссәләмде күрһәтмәнең бит әле, – тигән батша.

– Иншалла, рахман, көтөп тор. Күрерһең, – тип бабай теләктә ултырып ала.

Теге йәш егет һаман баҫып тора, ти. Өҫтәл артында батшаның өс вәзире ултыра.

Йә, ҡырҡ көн үтеп китеп бара бит инде. Ни эшләтәйек был картты? – тип һорай батша. Оло вәзире былай тип яуап бирә.

Битенә ҡара яғабыҙ ҙа урам буйында туҡмап йөрөтөп, үлтерәбеҙ.

Батша уртансы вәзиренән кәңәш һорай:

Һин нимә тиерһең?

Урам буйлап йөрөтөп тормайбыҙ. Ошонда турайбыҙ ҙа үлтерәбеҙ уны.

Батша кесе вәзиренән һорай:

Йә, һин ни әйтерһең?

Был бабайҙы үлтереп, ни төшөр тиһең? Ипләп килгән, ипләп кенә ҡайтарайыҡ та ебәрәйек шуны, – тигән кесе вәзир.

Былар шулай һөйләшеп, кәңәш-төңәш итә, теге егет һаман [illegible] тора бирә.

Әй падишаһым-солтаным, – ти аҙаҡ килеп, – оло вәзиреңдең инәһен шулай үлтергәндәр ине. Шуға шундай үлемде генә һөйләй: кеше йәштән ни белә – ҡәлбенә* шул берегә. Уртансы вәзиреңдең атаһы итсе булған. Уға шуның ғәҙәте береккән. Бәләкәй вәзиреңдең атаһы бик гүзәл кеше булған. Шуға иң гүзәл һүҙҙе шул әйтте, – тип аҡыл эйәһе булған йәш егет һүҙен әйтеп бөткән дә, башҡалар алдарына килгәнсе, тиҙ генә юҡ булған.

Күрҙеңме? – тине, ти, бабай батшаға. – Хызыр ғәлиәссәләм шул була, – ти.

Шунан батша бабайҙы хөрмәтләп, бүләктәр биреп, өйөнә ҡайтҡан.

Бабай менән ҡыҙы оҙаҡ ғүмер кисергәндәр, ти.

## 37а. Бер фәҡир кешенең һүҙе

Үткән заманда бер батша булған. Бер ваҡыт батша сайранлыҡҡа сыҡҡан*. Сайранлыҡҡа сыҡҡан юлының эсендә бер фәҡир генә дәрүиш ултырған. Шул дәрүиш әйткән:

Әй һиммәтле бадишаһым, әйтә торған бер һүҙем бар. Бер мең алтын бирһәң, шуны һиңә әйтер инем, – тигән. Батша туҡталып:

Бер мең алтынлыҡ ни һүҙ икән һуң ул, әйтеп ҡара, – тигән. Фәҡир кеше әйткән:

Әй һиммәтле бадишаһым, әйтә торған һүҙем шулдыр. Берәр нәмә эшләмәк булһаң, иң әүәл, эшләмәҫ борон, ахырын фекерләп ҡара: шул эштең ахыры нисек булыр, – тигән.

Әйткән һүҙ – атҡан уҡ. Батша фәҡир дәрүишкә бер мең алтын бирә. Ҡайтҡас, унан ишеткән һүҙҙе һәр ергә яҙып сыға: тотонған һауыт-һабаһына ла, һөртөнгән таҫтамалына ла, кейер кейеменә лә, ултырған тәхетенә лә...

Берҙән-бер көндө батша ауырып китә. Тәҡәт итмәй ауырый, ти, был. Шунда бағыусылары, белемселәре, табиптары:

– Боҙоҡ ҡаның күбәйгән, бадишаһыбыҙ. Боҙоҡ ҡаныңды алдырыу кәрәк, – тип әйтәләр, ти.

Батша ат еккән ергә ат саптырып, хат еткән ергә хат ебәреп ҡан алыусы табип эҙләтә. Табипты икенсе бер батшалыҡтан табып килтерәләр быға. Батшаның ҡулынан ҡан алыу өсөн, табипҡа алтын лаҡан алып киләләр. Алтын лаҡан ситендә әлеге яҙыу тора: «Берәй эште эшләмәк булһаң, иң әүәл, эшләмәҫ борон, ахырын фекерләп ҡара: шул эштең ахыры нисек булыр». Яҙыуҙы уҡып сыҡҡас та, табип ҡулындағы ҡан алғысын ҡуя ла икенсеһенә тотона. Быны күреп батша ҡулын тартып ала:

– Ни өсөн тәүге ҡан алғысың менән алманың? Һүҙҙең дөрөҫөн әйт, юғиһә башыңды өҙәм, – тигәс, табип ҡурҡышынан:

– Әүәлге ҡан алғысым ағыу менән һуғарылған ине. Әгәр уның менән алһам, һин өс ай ауырыр инең дә үлер инең. Бына ошо яҙыуҙы күрҙем дә батша үлмәһен тип, ҡоралғысты алмаштырҙым, – ти.

Теге ҡоралғысты был батшаға дошман батша эшләтеп биргән булған икән. Батша табипҡа бик күп бүләктәр биргән. Фәҡир дәрүиштең һүҙе бер һүҙ булһа ла, ҡайһылай файҙа итте, тип, ул фәҡирҙе таптырып, уға йәнә бер мең алтын биргән.

## 38. Һынап белеүсе ағай-энеләр

Борон-борон заманда өс ағай-эне бергә торғандар. Уларҙың ике дөйәһе булған. Улар ул дөйәләрен бик бейек кәртә эсендә тотҡандар. Бер ваҡыт төндә уларҙың дөйәләре юғалып киткән. Сығып ҡарайҙар ҙа, өлкәндәре әйтә:

– Эй туғандар, беҙҙең кәртә бик бейек бит. Бынан менеп урлаған кеше бик оҙондор, – ти. Уртансыһы әйтә:

– Оҙон булһа, күҫәлер, – ти. Кесеһе әйтә:

– Күҫә булһа, Мусалыр, – ти.

Шулай әйтәләр ҙә Муса тигән кешене эҙләргә сығып китәләр. Юлда барған ваҡытта юлдарының ҡаршыһына бер кеше килеп сыға. Үҙе оҙон. Былар һорайҙар:

– Һинең исемең кем? – тип. Теге кеше әйтә:

– Минең исемем Муса, – ти. Шунан ағай-энеләр:

– Эһә, бына таптыҡ: үҙе оҙон, үҙе күҫә, үҙе Муса! Давай, бир дөйәләрҙе! – тиҙәр. Муса әйтә:

– Һеҙҙең дөйәләрҙе мин алманым, – ти.

Ағай-энеләр:

– Эйҙә әле ҡазыйға барайыҡ, – тип ҡазыйға алып китәләр.

Ҡазыйға барғас, булған ваҡиғаны һөйләп бирәләр. Шунан һуң ҡазый өс ағай-энене сығарып, усына тары бөртөгө йома ла тағы индереп:

Усымдағы нимә? – ти. Егет яуабында:

Йоморолор, – ти.

Тағы берәүһе әйтә:

Йоморо булһа, һарылыр, – ти. Өсөнсөһө әйтә:

Һары булһа, тарылыр, – ти. Ҡазый усын асһа – үҙе йоморо, үҙе һары, үҙе тары.

Шунан һуң ҡазый Мусаға:

Бир быларҙың дөйәһен, – тип Мусаны ҡыуып сығарып ебәрә.

Шунан Муса ағай-энеләргә:

Эй туғандар, таң атып килгәндә генә барып алғайным. Әйҙә, дөйәләрегеҙҙе бирәйем инде, – тип, алып барып, дөйәләрен [illegible]реп ебәрҙе, ти.

Шулай итеп, өс ағай-эне һынау арҡаһында, дөйәләрен табып алып, әле булһа ла береһе әйткәнде икенсеһе йөпләп, кәңәш-мәңәш итеп, татыу ғүмер һөрәләр, ти.

## 39. Аҡсаны кем урлаған?

Борон-борон заманда булған, ти, бер ҡарт. Уның булған, ти, өс улы. Уртансы улы оло улынан бер ая түбәнерәк, оло улы уртансыһынан бер ая бейегерәк ине, ти. Өсөнсөһө олоһонан ике ая, уртансыһынан бер аяға тәпәш ине, өлкәне уға ҡарағанда ике аяға, уртансыһы бер аяға ҙур ине, ти. Быларҙың көнкүреше шул хәтлем хөрт ине, ти.

Бер ваҡыт, ҡартлыҡ етеп, аталары үлеп киткән, ти. Унан ни бары дүрт йөҙ тәңкә аҡса ла һандыҡ ҡына ҡалған, ти. Өс туған түңәрәкләп ултырғандар ҙа бар байлыҡты бүлешергә тотонғандар. Дүрт йөҙ тәңкә аҡсаның өс йөҙөн тигеҙ итеп бүлгәндәр. Бер йөҙ тәңкә аҡса менән бер һандыҡты бер нисек тә бүлешә алмайҙар икән, ти. Бүлә башлаһалар, береһенә кәм, икеһенә артыҡ сығып тик тора, ти. Яңынан бүлһәләр, икеһенә кәм, береһенә артыҡ сыға, ти. Шунан һуң тегеләр уйлап, уйлап, уй осона сыға алмай, аптырашып ултырғандар ҙа бер йөҙ тәңкә аҡса менән һандыҡты уртаҡ мәнфәғәтләнергә булғандар, ти. Һандыҡты асып, бер мөйөшөнә уртаҡ файҙаланырға тейешле аҡсаны һалғандар, ҡалған өс мөйөшкә үҙҙәренең өлөштәрен һалғандар, ти. Был һандыҡты нәүбәт буйынса көн дә береһе һаҡлап торған, ти. Үҙ сираты еткәс, уртансы егет теге уртаҡ файҙаланылырға тейешле аҡсаны алып, йәшергән дә ҡуйған. Аҡса кәрәк булып төшкәс, һандыҡты асып ҡараһалар, уртаҡ аҡса юҡ, ти. Һин алғанһың да, һин алғанһың, тип, үҙ-ара ыҙғышып та бөттөләр, ти, табылманы, ти, аҡса. Ахырҙа өлкәне, кем алғанды белер өсөн, ҡазыйға барырға тәҡдим итте, ти. Ҡалған икәүһе:

Ҡуй, бармайыҡ та, – тиҙәр икән.

Өлкән ағай уларҙың һүҙенә ҡараманы, китте, ти, бер үҙе, ҡазыйға тип. Ул күҙ күремендәй ер киткәйне, унан бер аяға ҡайтыш уртансы егет, уныһы күҙ күреме ер киткәйне, унан бер ая, өлкәненән ике ая ҡайтыш егет юлға сыҡты, ти. Эй, баралар, ти, былар, эй, баралар, ти. Байтаҡ ер киткәс, иң оло ағаларына йүгән тотҡан тәпәшәгерәк буйлы бер кеше осраны, ти. Был кеше сәләм биреп, иҫәнләште лә, ти:

– Бер бейә күренмәнеме? – тип һораны, ти.

– Әллә бейәңдең уң бото сатан инеме? – тигән оло ағай. Йүгән тотҡан кеше:

– Эйе, сатан ине, – тигән.

Оло ағай:

– Юҡ, күрмәнем, – тигән дә ары киткән дә барған, ти.

Йүгәнле кеше бара бирһә, уртансы егеткә тап була:

– Арыумы, егет, иҫәнме? Юлда бер бейә күрмәнеңме?

– Әллә бейәңдең ауыҙы ҡыйыш инеме?

– Эйе, ҡыйыш ине. Әллә күрҙеңме? Әйтсе, ҡайҙа?

– Юҡ, күрмәнем, – тине лә, ти, был да үҙ юлына китте, ти.

Бер аҙ бара биргәс, йүгәнле иргә кесе егет осраны, ти.

– Эй, Алла бәндәһе, юлда бер бейә күренмәнеме? – тине, ти, ат эҙләүсе кеше йәнә.

– Әллә бейәңдең ҡойроғо юҡ инеме? – тине, ти, егет.

– Юҡ ине шул.

– Юҡ. Улай булһа, күрмәнем.

Егет ары китте, ти. Йүгәнле кеше улар киткән яҡҡа ҡарап торҙо, торҙо ла, ти:

– Моғайын, ошо егеттәр минең бейәне бер хәлгә төңкәлткәндәрҙер әле. Ҡазыйҙан ҡаратып ҡарайым әле, – тип, һөйләнә-һөйләнә ҡазыйға китте, ти.

Бер ваҡыт ҡазый йортона иң тәүҙә оло егет, тора биргәс уртансы егет, тағы торараҡ кесе егет, унан йүгәнле кеше килеп инделәр, ти. Ҡазый былар менән иҫәнләште лә ниңә килеүҙәрен һорашты, ти. Яуапты иң тәүҙә йүгәнле кеше бирҙе, ти.

– Мин һиңә бер йомош менән килгәйнем әле.

– Йә, ниндәйерәк йомош ул? – тине, ти, ҡазый.

– Өс тәүлектән бирле бейәмде таба алмайым. Булмаған урыным, кисмәгән кисеүем, артылмаған тауым, һуғылмаған ағасым, һөрөнмәгән түңгәгем ҡалманы – барыбер моратыма ирешә алманым. Әле бөгөн иртә менән, эҙләргә сыҡҡанда, ошо оҙон егет минең бейәмдең артҡы уң аяғы сатан икәнлеген, уртансыһы ауыҙының ҡыйыш икәнлеген, кесеһе ҡойроғо юҡ икәнен белде. Күрҙегеҙме, әйтегеҙ, тип ҡараһам, әйтмәнеләр. Моғайын, уны ошолар урлағандарҙыр әле, – тип осланы, ти, йүгәнле үҙенең һүҙен.

Ҡазый уртансы егет менән кесеһен ҡара-ҡаршы ике бүлмәгә бикләтеп, өлкән егеттән һорау ала башланы, ти:

– Йә, алла бәндәһе, был әҙәмдең бейәһен һин алдыңмы?
– Юҡ.
– Ул ваҡытта уның сатан икәнен ҡайҙан белдең?
– Ҡустылар менән низағлашҡандан* һуң, мин иртә менән юлға сыҡҡайным. Килә торғас, бер яҡтан болондоң тапалыуына иғтибар иттем, ҡараһам, бер хайуан йөрөгән. Меҫкендең артҡы уң аяғы юлында ҡара һыҙат ҡалған. Был хайуан уң аяғына ғәриф булған икән, уны шуға һөйрәп йөрөгән икән, тип үттем. Мәгәр үҙен күреүгә күрмәнем, – тине, ти, егет.
– Ярар, – тине, ти, ҡазый.
Шунан уртансы егетте индерҙе, ти.
– Йә, һин был бәндәнең бейәһен алдыңмы?
– Юҡ.
– Ул саҡта уның ауыҙы ҡыйыш икәнен ҡайҙан белдең?
– Оло ағайым, беҙҙең менән даулашып, сығып китте, мин дә артынан төшкәйнем. Киләм, киләм, ҡараһам, бер ерҙә бер хайуан йөрөгән. Ныҡлабыраҡ ҡараһам, үләнде, балаларҙың ҡыйыш саңы* кеүек итеп, ҡыйыш өҙгән. Шунан мин ҡарап торҙом, торҙом да, был бахырҙың ауыҙғынаһы ҡыйыш булған икән, тип уйҙым, – тине, ти, егет.
– Ярар, – тине, ти, ҡазый.
Шунан иң кесе егетте саҡырып индерҙе, ти.
– Йә, әйт әле, был бәндәнең бейәһен әллә һин алдыңмы?
– Юҡ.
– Улайһа, әйт, уның ҡойроғо юғын ҡайҙан белдең?
– Үҙ-ара ыҙғыштан һуң, ағайымдар юлға сыҡҡас, мин дә арттарынан төшкәйнем, юлда бер әкәмәт диҡҡәтемде үҙенә борҙо. Бер хайуан туҡталған да бәүел иткән; бәүел тегә торған урындан өс-дүрт аҙымға барып еткән. Был мәхлүк, моғайын да, ғәриф икән, ҡойроғо булһа, бәүелде йыраҡ ебәреүгә ҡамасаулар ине, тинем, – тине, ти.
Һорау алып бөткәс, ҡазый:
– Был бәндәләрҙе ҡайҙа күрҙегеҙ? – тип, өсөһөнә лә бер юлы һорау бирҙе, ти.
– Шул юл менән алға барырға, барырға ла уңға киткән һуҡмаҡ менән уңға боролорға. Шунан алыҫ түгел болон булыр. Теге хайуан шунда йөрөгән, – тинеләр, ти, өс ағай.
Йүгәнле юлға сыҡты, ти. Егеттәр ҡазыйға ни өсөн килгәнлерен аңлатҡансы, йүгәнле ҡыйыш ауыҙ, сатан, тоҡос ҡойроҡ бейәһен етәкләп килеп тә етте, ти. Егеттәрҙән түбәнселек менән ғәфү үтенеп, рәхмәт әйтеп, ҡайтып китте, ти.
Ҡазый аптырауҙа ҡалды, ти. «Был егеттәр үҙҙәре лә күрәҙәләр. Аҡсаны кем алғанын нисек белермен икән», – тип баш ватты, ти. Шулай ҙа бер әмәлен тапты, ти. Егеттәрҙе ҡайтармай, ҡунаҡлатырға булды, ти. Егеттәр риза булып, ҡазыйҙың өйөндә ҡунырға ҡалдылар, ти.

Ҡазый кискелеккә оҫтабикәһенән итле, туҡмаслы аш бешерткән дә арыш икмәге менән егеттәр урынлашҡан бүлмәгә индереп, ашағанда, былар нимә һөйләшерҙәр икән, тип, икенсе бүлмәнән тыңлап торҙо, ти.

– Тфү, – тине, ти, өлкән егет, сәйнәй башлаған арыш икмәген иҙәнгә төкөрөп, – ҡазый зыярат өҫтөндә үҫкән игенде ашай икән.

Уртансы егет табаҡтан ит алып сәйнәп:

– Ҡазый беҙгә эт имсәген имеп үҫкән һарыҡтың итен ашатты, – тип ҡысҡырып ебәрҙе, ти.

– Уйнаштан тыуған ул ҡазый, – тине, ти, өсөнсө егет.

Шул саҡта ҡазый килеп инеп, былярҙан һораша башланы, ти. Тәүҙә оло егеттән:

– Һин был икмәктең зыярат өҫтөндә үҫкәнен ҡайҙан белдең? – тигән.

Егет:

– Мин был икмәкте ҡабыу менән, тәнем ойоп, күҙ алдарым ҡараңғыланып киткән кеүек булды. Шунан шуға мин, был икмәк зыярат өҫтөндә үҫкән игендән бешерелгәндер, тип уйланым да уйлағанымды әйттем, – тине, ти.

Ҡазый уртансы егеттән:

– Ә һин был һарыҡтың эт имеп үҫкәнен нимә менән иҫбат итә алаһың? – тип һораны, ти.

Уртансы егет:

– Итте туҫтаҡтан алып ҡабыуым булды, шул саҡта тугандарым менән ҡан туҙышып талашҡым, эт булып ырылдағым килеп китте. Шуға күрә, был һарыҡ бәрәс сағында эт имеп үҫкәндер, юҡһа мине ул хәтлем елкендермәҫ ине, тинем, – тине, ти.

Ҡазый быны ла күңеленә һалып ҡуйҙы ла, ти, кесе егеттән:

– Уйнаштан тыуғанымды иҫбат ит, – тип һораны, ти.

Уныһы:

– Һин беҙгә ит ултырттың да, ашағыҙ, тинең. Оло кеше булһаң да, аш башлап, бисмилла итеп, үҙең ауыҙламаның. Шуға күрә һине мин зинанан тыуған, тинем, – тине, ти.

Был егеттәрҙең һүҙҙәренә нимә тип тә яуапларға белмәне, ти ҡазый. Егеттәргә йоҡларға ҡушты ла, ти, үҙе, ат ектереп, сығып китте, ти. Килде, ти, бер крәҫтиәнгә.

– Һин миңә хәйер итеп биргән арышыңды ҡайҙан алғайның? – тип һораны, ти.

Крәҫтиән:

– Ҡазый абзый, үҙең дә күреп тораһың, беҙҙә ер бик аҙ. Минең өлөшөмә ер нәҡ зыярат һыртынан тура килде. Иген сәскән ваҡытта, бер өс-дүрт таяҡ зыярат эсенә инеп сәсергә тура килде. Шуның игенен һиңә хөшөр саҙаҡаһына бирҙем, – тине, ти.

Ҡазый был крәҫтиәнгә бик асыуы килеп сығып китте лә, ти, һарыҡ хәйер иткән кешегә барҙы, ти.

һинең миңә биргән һарығың бәрәс сағында эт имеп үсмөгәндер бит? – тип һораны, ти.

Эйе, ул эт имеп үҫкәйне. Ул тыуғас, биш-алты көндән һуң әсәһен бүре тамаҡланы. Ошо ваҡытта минең Алабай тигән тонтәй этем бар ине. Ул да көтөүгә миңә эйәреп йөрөй торғайны. Уйлап йөрөнөм, йөрөнөм дә һарыҡ бәрәсен эт имеҙергә күйҙым. Былар ваҡыт үтеү менән дуҫлаштылар. Шулай итеп, һиңә биргән һарыҡ эт имеп үҫкән һарыҡ ине, – тине, ти, крәҫтиән.

Бынан киткәс, ҡазый, әсәһенә барҙы, ти:

Әсәй, – тине, ти, – һин әйт: мин никахлы атанан тыуҙымлы әллә зинананмы? – тине, ти.

– Аһ, аһ, әллә аҡылыңдан шаштыңмы? Үҙ әсәйеңә шундай һорауҙар биреп ултырмаһаң? – тине, ти, әсәһе.

– Йә, әсәй, әйт инде. Миңә бик кәрәк, – тип ныҡышты, ти, ҡазый, ниңә кәрәклеген дә әйтте, ти.

Шунан һуң әсәһе:

– Йә, ярар, әйтһәм әйтәйем. Атайың үлеп, утыҙ туғыҙ көн үтте, ҡырҡынсы көнө етте. Ҡырҡын уҡытырға күҙ күргән таныш мулланы, мәзинде, ауыл ҡарттарын Ҡөрьән уҡытырға саҡырҙым. Ҡөрьән уҡып, аш ашағанса кис булды. Мулланан башҡаһы сығып ҡайтып бөттөләр. Мулла Фәрхетдин генә аяғына кейгән, төҙәтенгән булып ултырып ҡалды, атайыңды маҡтап алған булды: «Шулай ҙа үлгән кеше артынан үлеп булмай бит инде. Аллаһы тәғәлә урынын йәннәттә ҡылһын», – тигән була. Шунан бара торғас, әллә нимәләргә төшөп китте. Һөйәм, имеш, һине алтынсы ҡатынлыҡҡа алам, имеш... Ул беҙҙән бик һуң китте. Шунан һуң мин ауыр аяҡлы булып ҡалдым инде. Ул мине алманы, алданы, – тине, ти, әсәһе.

Ҡазыйға хәл асыҡланды, ти. «Теге суҡынған егеттәр үҙҙәре лә күрәҙәләр икән. Нисек итеп низағаларын хәл итергә?» – тип борсолдо, ти.

Таң атты, ти. Бик һәйбәтләп тамаҡтарына ашап алғас, ҡазый егеттәрҙе үҙ янына саҡырып алып, улар менән әңгәмә башланы, ти.

Шулай берҙән-бер ваҡыт, – тине, ти, ҡазый, – ике батша араһында бик ҡаты һуғыш башланып китте, ти. Былар әй, һуғышалар, әй, һуғышалар, ти. Һаман да еңешә алманылар, ти әле. Шунан ике яҡтан да ат саптырып, фарман ебәреп, һуғышты туҡтатмаҡсы булдылар, ти. Халыҡтың хәйерселәнеүе иң сиккә еткән, был һуғышта байҙар байынылар, ярлылар бөлгөләр, ти. Кейем етешмәй. Телгә һалып йоторлоҡ та он юҡ, ти. Уйлап ҡарағыҙ әле, егеттәр, һеҙ бер аҙыҡһыҙ, кейемһеҙһегеҙ, ти. Төндә матур кейемле, күп аҡсалы яңғыҙ кешенең үтеп барғанын күрҙегеҙ, ти. Ул саҡта ни эшләр инегеҙ? – тине, ти.

Олo егет менән кесе егет бер юлы:

Нимә эшләйһең инде? Яҙмышың шулай булғас, кеше малы

менән маллы булып булмай. Ҡаршы тап булһа ла, иҫәнләшеп, яҡшылыҡ менән үтергә лә китергә кәрәк, – тигәндәр.

Уртансы егет өндәшмәй, иренен уртлап, ауыҙын турһайтып, тик ултырҙы, ти. Ҡазый уға:

– Һин ни эшләр инең? – тигәс, егет:

– Ни эшләр инең, тиһегеҙ. Халыҡ ас, кеше кейемһеҙ, ә ул тәтәй күлмәге кейеп йөрөй. Осраһа, өҫтөндәге күлмәк-ыштанын һалдырып алып, шыр яланғас көйө ҡайтарып ебәрер инем, – тине, ти.

Шул саҡ ҡазый:

– Кеше малына улай ҡыҙығырға ярамай. Йөҙ һум аҡсаны ла һин алғанһың. Уны хәҙер үк туғандарыңа бир, ҡылған енәйәтең өсөн тәүбә ит, – тине, ти.

Уртансы егет ҡурҡты, ти. Ҡалтырана-ҡалтырана уртаҡ файҙаланырға тигән йөҙ һум аҡсаны кеҫәһенән алып бирҙе, ти. Туғандар аптырашып киттеләр, ти.

– Бынан һуң тағы ла бындай хәлдәр була күрмәһен, бәлә-ҡазанан хаҡ тәғәлә үҙе һаҡлаһын, – тип, ҡазыйға егерме биш һум биреп, ҡалған аҡсаны теүәл егерме бишәрҙән бүлешеп алып, ҡайтып киттеләр, ти.

## 40. Өс икмәк

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер батша. Бер саҡ ул үҙенең вәзирҙәрен саҡыртып алған да былай тип әйткән, ти:

– Минең батшалығымдағы иң яҡшы кешене табып килтерегеҙ. Иң яманы кем – уны ла килтерегеҙ. Яҡшыһына бүләк бирәм, ә яманын язалатырмын.

Был батшалыҡта булған, ти, тағы ла бер ҡарт. Ошо фарманды ишеткәс, ул үҙе үк батшаға китте, ти. Батша һарайына барып кергән, ти, был ҡарт. Шунан:

– Мин һинең саҡырыуың буйынса килдем. Ниндәй йомошоң барҙыр инде минең кеүек ҡартта? Һорауыңды әйт тә ашамаға бер-ике киҫәк икмәк бир инде, – тип әйткән, ти.

Батша тыңлап торған да былай тип яуап биргән, ти:

– Ҡарап торам, торам да һиңә, ҡарт, донъяла һинән дә яман кеше юктыр, – тип уйлайым. – Өҫтөңдәге кейемеңә ҡарамаға ҡурҡырһың. Йә, һөйләй һал, ниндәй яҡшылығың бар һуң һинең? Яҡшылығың бер ҙә булмаһа, яҙмышыңды тыңлармын.

Ҡарт күп уйлап тормаған:

– Батша, мин насар түгел, бына һин насар, – тигән.

Шул ыңғайға батша урынынан һикереп торған да, ҡылысын алып һелтәмәгә булған икән, был ваҡытта, ни эшләр икән был тип ҡарт янына йыйылған халыҡ:

– Теймә ҡартҡа, һөйләһен әле һүҙен, яҙаларға өлгөрөрһөң, тип гөр килә башлаған.

Батша урынына ултырған:

– Йә, һөйлә, ҡарт, ниндәй яҡшылығың бар? – тигән.

Ҡарт әйткән:

– Минең яҡшылығым шул, – тигән, – мин таштарҙың аҫылын, аттарҙың яҡшыһын, батшаларҙың нәҫелен беләм, – тигән.

Батша шунда уҡ вәзирҙәренә үҙ батшалығындағы иң яҡшы аҫыл таштарҙы иҙәнгә йәйеп һалырға бойорған. Бер аҙ үтеүгә иҙән таш менән тулған.

– Йә, был таштар оҡшаймы һиңә? – тигән батша.

Ҡарт:

– Был таштарҙың береһе лә аҫыл түгел шул. Улар бит быяла ғына, – тип яуап биргән.

Батша асыуынан һикереп торған да тағы ла ҡартҡа ҡамсы менән киҙәнгән.

Ҡарт:

– Ашыҡма, батша, мине үлтереп, һиңә бер файҙа ла булмаҫ. Бына белеп ҡал. Унан файҙа табырһың, – тигән дә, таяғы менән теге таштарға һуға ла вата икән, һуға ла вата икән.

Таштарҙың тышы ғына аҫыл ташҡа оҡшап ялтырауыҡ, эсе кәҙимге быяла икән. Быны күреп, батша аптырап тора, ти.

Ҡарт һаман да:

– Бына инде һинең аҫыл таштарың. Уларҙы аҫыл таш тип бүләккә биреп һине алдағандар, – тип һөйләй бирә, ти.

Батша:

– Ҡалай яҡшы ҡарт булып сыҡтың әле һин. Мә, һиңә шуның өсөн бер икмәк, – тип әйткән дә уға бер бөтөн икмәк биргән, ти.

Ҡарт уны һөйөнөп-һөйөнөп ашаны, ти. Батша:

– Ҡарт, һин аттарҙың иң яҡшыһын беләм тигәйнең бит әле, – тигән дә вәзирҙәренә үҙенең Ҡара байталын сығарырға әмер бирҙе, ти.

Ҡарт теге атты һыу буйына алып барырға ҡушты, ти. Үҙе лә йылғаға китте, ти.

Бер аҙ торғас, әллә ҡайҙан күк күкрәгән, ҡыңғырауҙар шалтыраған тауыштар ишетелә. Шундай тауыштар сығарып, һарайҙан алтын менән биҙәлгән толпар ат килеп сыға. Уны етәкләп һыу буйына алып баралар. Халыҡ та бара, батша ла бара. Ҡарт атты һыуға төшөрөргә ҡуша. Төшөрәләр. Ҡарт инде ҡарап тора. Ҡарап тора-тора ла:

– Атың – ат түгел, батша, ишәктән дә алама ат был, – ти.

Батша ояла, ҡыҙара, ни эшләргә белмәй:

– Ябығыҙ атты урынына, – ти.

Шунан ҡарттан:

– Ниңә насар һуң минең ат? – тип һорай.

Ҡарт әйтә:

– Йылғаға төшкәс, һыу эсерҙән элек, хәжәт итте. Яҡшы ат булһа, улай итмәй, элек һыу эсә, унан хәжәт итә, – ти. Батша атына бик асыуы килә лә, уны юҡ итергә әмер бирә. Үҙе ҡартҡа ҡарап:

– Һин бик яҡшы ҡарт булып сыҡтың, мә, һиңә тағы бер икмәк, – ти.

Шунан ҡартҡа килеп тағы ла һорай:

– Йә, ҡарт, – ти, – һин батшаларҙың нәҫелен беләм ти инең, әйт, мин ниндәй нәҫелдән, – ти.

Ҡарт ҡарап тора-тора ла батшаға әйтә:

– Халыҡты сығар һарайҙан, вәзирҙәр генә ҡалһын, – ти.

Халыҡ сыға һарайҙан, вәзирҙәр генә ҡала. Шунан ҡарт батшаға ҡарап:

– Батша, һин бит батша нәҫеленән түгел. Икмәк бешереүсе нәҫеленән, – ти.

Хан, асыуынан ни эшләргә белмәй, һикереп тора ла, ҡылысы менән ҡартты ул сабырҙан, был сабырҙан ҡала.

– Мине үлтереп, һиңә файҙа булмаҫ, – ти ҡарт әйтә, – мин былай ҙа үлемгә баҫымлағанмын, – ти. – Һин, батша, дөрөҫлөктө тикшер, унан үлтерерһең, – ти ҙә тағы дауам итә ҡарт. – Бынан алыҫ-алыҫ ерҙәрҙә, ете тау, ете даръя сыҡҡас, бер ҡала булыр. Унда әле булһа ла йөҙ йәшлек әбей булыр. Ул һинең әсәң булыр. Икмәк бешереүсенең ҡатыны шул булыр, – ти. – Унда вәзирҙәреңде ебәр, улар тикшереп ҡайтырҙар, – ти.

Шунан батша үҙенең вәзирҙәрен ебәрә. Улар күҙ асып йомғансы барып етәләр, ти, теге әбей торған ҡалаға. Эҙләп таптылар, ти, әбейҙең өйөн. Әбей ҡурҡып китте, ти. Өйгә ингәс, вәзирҙәр:

– Ҡурҡма, әбей, беҙ һиңә теймәйбеҙ. Һин беҙгә шуны ғына әйт: бынан ете тау, ете даръя артында беҙҙең илдә бер батша бар. Шуға яматай* уҙғынсы бер ҡарт: «Һин батша нәҫеленән түгел, икмәк бешереүсенең улы, ышанмаһаң, әсәңдән һора, ул әйтер», – тине. Уның әсәһе һин икәнһең. Дөрөҫөн әйт, әбей, шулаймы? – тинеләр, ти. Тыңлап торған-торған да әбей:

– Дөрөҫ, уландар. Минең ирем батша ине. Минең бөтләк балаларым ҡыҙ булды. Берҙән-бер көндө, мин ауырға ҡалғас, батша әйтте миңә: «Әгәр ҙә мәгәр һин тағы ла ҡыҙ бала тапһаң, мин һине үлтерәм. Минең урыныма ҡалыу өсөн малай кәрәк. Ул тап миңә», – тине. Ни хәл итәйем, минән тағы ла ҡыҙ тыуҙы. Шул көндө генә күршебеҙҙә икмәк бешереүсенең ҡатыны ир бала тапты. Быны ишеткәс, мин аҫрауҙар арҡыры уға ун бот он, өҫтәүенә, алтын биреп, ҡыҙ баланы шул ир балаға алыштым. Бына шул бала хәҙер һеҙҙең батшағыҙ инде, – тигән.

Вәзирҙәр быны ишетеп, хайран ҡалып, ҡайтып киттеләр, батшаға был турала түкмәй-сәсмәй һөйләп бирҙеләр, ти.

Быны ишеткәс, батшаның иҫе китте, ти, был ҡарт ошо

урала ҡайҙан белә икән, тип уйланы, ти. Шунан һуң уға тағы бер икмәк биргән дә:

– Хәҙер әйт миңә, ҡайҙан белдең минең икмәк бешереүсе улы икәнемде? – тигән.

Ҡарт:

– Ниңә белмәйем ти? Һин минең һәр бер яҡшы һүҙемә берәр икмәк бирә барҙың. Атайың икмәксе булғанға, шулай эшләнең һин уны, – тигән.

Батша был ҡарттың тапҡырлығына хайран ҡала ла уға ҙур-ҙур бүләктәр бирә, йорт һалдырып бирә.

– Һин минең икмәк бешереүсе улы икәнемде кешегә һөйләмә инде, – тип тыйып ҡуя.

## 41. Ҡарбуз

Борон-борон заманда бер ҙур ҡала ситендә йәшәгән, ти, бер егет үҙенең ҡарт әсәһе менән. Былар бик фәҡир булған, ти. Егет хәйер һорашып йөрөгән ваҡытта батша һарайына барып ингән, ти. Тегене батша ҡыҙы күреп ҡала ла:

– Нимә эшләп, егет, еткән көйөңә, шулай йөрөйһөң? Мин һиңә эш бирәм, ризаһыңмы? – тип һораған.

– Риза, – тигән егет.

– Һин каруан башлығы булып йөрө, әгәр яҡшы эшләһәң, үҙеңә кейәүгә сығырмын, – тип һүҙ ҙә биреп ҡуйған.

Теге егет шул эшендә бик уңышлы йөрөй, ти. Шулай бер көн сәхрә аша китеп барғанда, һыу бөтөп, каруан ауыр хәлдә ҡалған. Ярай ҙа быларҙың бәхетенә бер ҡойо тура килгән. Кемгә төшөп һыу алырға? Шыбаға тота башлағандар. Ҡойо төбөнә төшөү егеткә тура килгән. Ул төшөп киткән. Төшһә, ҡойо төбөндә бер ишек тора, ти. Шунан ул нисек етте шулай һәрмәнеп булһа ла, барып асып ебәрһә, ни күҙе менән күрһен – ҡартайып бөткән ике ҡыҙ ултыра, ти, эргәләрендә ҡылыс тотоп бер ҡарт тора, ти. Былар бик татыу ғына сәләм алышалар. Егет һыу һорағас, ҡарт:

– Мин һиңә һыу бирермен, тик бер шартым бар, – ти.

– Әйт шартыңды, – ти егет.

Ҡарт әйтә:

– Бына ҡырҡ йыл инде бер-береһе менән мин матур ҙа, мин матур, тип талашып тик ултыралар. Береһе Айһылыу исемле. Ул ай ҡыҙы. Береһе Көнһылыу исемле, ул – ер ҡыҙы. Бына шул бәхәсте сисеш. Әгәр әйтә алмаһаң, башың һул яҡҡа, кәүҙәң уң яҡҡа китер, – ти.

Егет уйлап тора ла:

*– Матур, матур күренмәй,*
*Һөйгән матур күренә, –*

тип һамаҡлап яуап бирә.

Егет шулай тип әйтеп тә бөтөрә – ҡарт Айһылыуҙың башын сабып та өҙә.

– Бына һиңә дүрт йоморо шар, сыҡ та береһен аша. Артыңа ҡарама, шунан һыу булыр, – ти ҡарт.

Егет ер өҫтөнә сығып, теге шарҙы ашап ҡарай. Шар ҡар, боҙ һымаҡ һыуыҡ була. Шуға күрә лә уға «ҡарбоҙ» тип исем бирәләр. Эсендәге орлоғон сәсеп үҫтерә башлайҙар. Ҡарбуз үҫтереү һөнәре шунан ҡалды, ти.

Был егеттең даны китте, ти. Шунан ни батша ҡыҙы уға кейәүгә сыға. Әле булһа бик матур итеп тормош көтөп торалар, ти.

## 42. Шакир

Элекке заманда бер ауылда ирле-ҡатынлы ғаилә була. Уларҙың бер генә улдары була. Йәшәүҙәре фәҡир тормошта булғанға, атаһы улына ҡалаға барып эшләштереп ҡайтырға ҡуша. Шакир эшләп өс һум аҡса йыя. Бер ҡалала эшләгәндән һуң, икенсе ҡалаға барып инә. Ҡала эсенә кергәс, бер эскәмйәгә барып ултыра. Ҡарап ултырһа, халыҡ бер яҡҡа ағыла башлай. Ҡарап ултыра-ултыра ла береһенән һорай был малай:

– Был халыҡ ҡайҙа бара?

Теге кеше әйтә:

– Баҡса эсендә бер мәктәп бар, – ти. – Шунда, – ти, – сатраш уйыны өйрәнәләр, – ти.

Был малай уйлап тора ла шул мәктәптең ишек төбөнә бара. Уҡытыусынан һорай:

– Һеҙ мине өйрәткән өсөн күпме алырһығыҙ икән? – ти. Уҡытыусы:

– Өйрәнеп сыҡҡансы өс һум алабыҙ, – ти.

Шулай итеп һөйләшеп, Шакир мәктәпкә инә. Инеп, шул ҡәҙәре уйнарға өйрәнә, яҡын-тирәлә уның хәтле өйрәнгән кеше булмай. Шунан һуң ул өйҙәренә ҡайта. Өҫтө-башы бик өҙгөләнеп бөткән була.

Ҡайтҡандан һуң, ата-әсәһе, аҡса йыйғылап быны икенсе бер ҡалаға оҙаталар. Был юлы ла, ҡалаға барып кергәс, урамда бер эскәмйәлә ултыра. Шунан һуң бында төркөм-төркөм халыҡтың ҡала ситенә табан киткәнен күрә. Бер кешенән һорай:

– Был халыҡтар ниңә ҡала ситенә ҡарай баралар? – ти. Ул кеше:

– Унда бер мәктәп бар, – ти. Ул шундай мәктәп, унда төрлө уйынға өйрәтәләр, – ти.

Шунан һуң егет ошо мәктәпкә бара ла һорай:

– Күпме алаһығыҙ өйрәткән өсөн? – ти.

– Өйрәнеп сыҡҡансы өс һум, – тиҙәр.

Был егет тағы ла төрлө уйынға өйрәнергә тотона. Шул ҡәҙәрле тырыша, уның ҡәҙәрле өйрәнгән бер бала ла булмай. Аталары янына яҡшы музыкант булып ҡайтып китә.

Ауылға ҡайтҡас, атаһы менән әсәһе аҡса йыйып, өсөнсө ҡалаға ебәрәләр. Был ҡалаға барып кергәс тә, малай йәнә уҡырға инә. Бында ла ул шул ҡәҙәрле яҡшы уҡый, уға бер кем дә етә алмай. Уҡығандан һуң, атаһының өйөнә ҡайта. Аталарына ишмәгә уҡығанлығын әйтмәй.

Шакирҙың атаһы менән әсәһе ярлылыҡтан өйҙәренә юлаусылар төшөрә башлайҙар. Бер көндө быларға дөйә каруаны менән йөрөүсе бай сәй эсергә туҡтай. Бының атаһы улын ошо байға тамаҡ ялына биреп ебәрә. Был бай быны дөйәгә атландырып алыҫ юлға алып китә. Бара-бара ҡом сәхрәһенә барып сығалар. Ҡом сәхрәһендә һыу табалмайынса йөрөйҙәр. Шулай йөрөгән ваҡытта теге малай бер тәрән соҡорҙа һыу күрә. Ала башлағас, дөйәләр бик һыуһағанлыҡтан, һыу әҙәйеп, яртышар биҙрә генә сыға башлай. Шунан биленә бау тағып, Шакирҙы соҡорға төшөрәләр. Төшкәс, малай биҙрәне тултырып алып биреп тора башлай. Соҡорҙа һыу бөткәс, ҡойо төбөн соҡорға тотона. Соҡой торғас, ҡойо төбөнән алтын сыға башлай. Малай байына ҡысҡыра:

– Бында алтын бар, – ти.

Байы ҡысҡыра:

– Тиҙерәк биҙрәгә һал, – ти.

Шакир биҙрәгә тултырып биреп тора, өҫтән тартып алып, йоккә тейәп торалар. Әллә нисәмә йөк алтын тейәгәс, малай ҡысҡыра:

– Соҡорҙа алтын бөттө, – ти.

Бай соҡорға епте тағы төшөрә:

– Биленә бәйлә епте, – ти. Шакир, епте биленә бәйләп, соҡорҙан сыҡтым тигән ваҡытта ғына, бай епте киҫә лә ебәрә. Малай дөбөр-шатыр йәнә соҡор төбөнә килеп төшә.

Алтындарын тейәп, бай үҙе китә. Шакир, өҫкә сыға алмайынса, ике көн шул соҡор төбөндә ята. Бынан һис кенә лә сығыу мөмкин түгел, ти. Ике көндән һуң бер юлаусы үтеп барғанда, һыу алырға тип, соҡорға биҙрәһен төшөрә. Шакир:

– Мине был соҡорҙан сығарһана? – тип ялынып, ялбарып ҡысҡыра.

Теге кеше малайҙы соҡорҙан тартып сығара. Шакир уға рәхмәттәр уҡып, үҙ юлы менән китә. Бара-бара, бер өйгә барып етә. Барып инә был йортҡа. Өйҙә бер ҡарсыҡ ҡына йоҡлап ята, ти. Шакир сөйҙә бер скрипка элеүле торғанын күрә. Әбейҙе уятмайынса ғына, скрипканы алып уйнарға тотона. Шул хәтлем моңландырып уйнай. Әбей йоҡоһонан илап килеп уяна.

– Был скрипканың тауышын нисә йылдар инде ишетә алмайынса интеккәйнем, рәхмәт, балам, – ти ҙә ҡарсыҡ, – ни мохтажың бар? – тип һорай.

Малай быға:

– Минең мохтажым бик ҙур, – ти. – Бара торған ерем йәйәү барып етер ер түгел, – ти.

Ҡарсыҡ Шакирҙы атҡа ултыртып оҙата. Китә малай, китә. Алтын тейәп ҡасҡан байҙың каруанын ҡыуып етә. Барып етеп, иң арттағы дөйәһенә атланып ала. Байы, артына әйләнеп ҡараған сағында, быны күрә. Күрә лә:

– Эй, улым, – ти, – алдағы ауылға барып еткәс тә, һине соҡорҙан сығарырға кешеләр ебәрермен тип уйлап ҡына бара инем, – ти. – Үҙең дә ҡотолғаның икән. Бик арыу булған. Быны оҙаҡламай ҡалабыҙға ла ҡайтып етәрбеҙ, – ти.

Шунан бай бер яҙыу яҙа ла, конвертҡа һалып йәбештереп, ҡапҡа номерын яҙа ла Шакирға:

– Быны ошоно алып ҡайтып, абыстайыңа тапшырып: «Быны абзый һиңә ошо хатты ебәрҙе», – тип һөйөнсө ал, – ти.

Хатты ҡуйынына тыға ла Шакир ҡалаға ҡарап саба. Бара торғас, малай: «Туҡта, бында ни нәмә тип яҙылған икән», – тип хатты аса ла уҡып ҡарай. Хатта: «Быны ошо хат килтереүсе малайҙы, мин ҡайтҡансы, нисек булһа ла, юҡ итеп, йыйыштыр», – тип малайҙы үлтерергә ҡушылған була. Эшең былай икән әле, тип Шакир тота ла бай булып икенсе төрлө хат яҙа: «Зөбәйҙә исемле ҡыҙыбыҙҙы ошо хат килтереүсе егеткә никахлаштырып ҡуй. Ошо егет кейәүебеҙ булһын», – тип яҙа. Шакирҙың яҙыуы байҙың яҙыуынан һис бер төрлө лә айырып алырлыҡ булманы, ти.

Байҙың ҡатыны Шакир биргән хатты уҡып ҡарай – иренең яҙыуы. Хатты уҡып сыҡҡас, байбисә ҡыҙына хәлде әйтеп, уны Шакирға бирә.

Шакир бай ҡыҙы Зөбәйҙә менән тора башлай. Бай ҡайтып етә. Ҡатыны ҡаршыларға сыға. Бай унан:

– Мин ҡушҡан эште еренә еткереп эшләнеңме? – тип һорай. Ҡатын әйтә:

– Эшләнем, эшләнем, – ти. – Кейәү бик матур икән, – ти.

Шул һүҙҙе ишеткәс байҙың күҙҙәре аҡайып китә.

– Ниндәй кейәү хаҡында һөйләйһең һин? – ти.

Байбисә әйтә:

– Зөбәйҙәне шул егеткә бирергә ҡушып хат яҙғанһың да инде.

Бай әйтә:

– Ни эшләп улай булһын, ти? – ти.

– Мә, хатыңды уҡып ҡара, – тип ҡатын Шакир килтергән хатты сығарып бирә.

Бай хатты уҡып ҡарай ҙа үҙенең ҡулыныҡынан айыра алмай, башын тотоп ултыра төшә.

– Ысынлап та, мин шулай яҙҙыммы икән? – тип ултыра, ти.

Бай ни ҡәҙәрле үлтерергә тырышһа ла, егет шулай үҙенең уҡығанлығы арҡаһында үлемдән ҡотолдо, ти.

Кис булғас, Шакирға Зөбәйҙә:

– Унда, – ти, – байҙар менән батшалар сатраш уйыны уйнайҙар, – ти. – Уйнап, уйнап батшаны кем ота, шуға батша үҙенең батшалығын да, ҡыҙын да бирә икән, – ти.

Был һүҙҙе ишеткәс, Шакир өндәшмәй генә эсенә һалып ҡуя. Шунсе көндө кис менән тота ла теге батшаның йортона бара. Барғас, батшаға әйтә:

– Һеҙҙең менән сатраш уйнарға мөмкинме? – ти.

Батша:

– Уйнай белһәң, уйнарһың, – ти.

Был егет батша менән сатраш уйнарға тотона. Уйнай торғас, Шакир батшаның бөтөн байлығын отоп ала, шунан батшаның үҙен дә, ҡыҙын да отоп алып, уның йортонда тороп ҡала. Шунан үҙен үлтерергә йөрөгән байҙы, тәүге ҡайныһын, саҡыртып ала. Бай килгәс, уға:

– Теге соҡорҙан алған алтындарҙы миңә килтереп бушат! – ти.

Бай, ни эшләһен инде, бөтә алтындарҙы килтереп ҡаҙнаға ташлыра, Шакир батша бөтә был алтындарҙы фәҡирҙәргә таратып бирә.

## 43. Иблиәмин

Уҙған заманда Ғабдрахман исемле сауҙагәр йәшәгән. Бының Иблиәмин исемле бер улы булған. Был ете класс бөткән. Сауҙагәр үҙе ҡарт була инде.

Шул заманда был ҡалаға каруандар килгән, бик алыҫ ерҙән эре сауҙагәрҙәр, ти. Атаһы Иблиәмингә: «Мин ҡартайҙым, һин ошо сауҙагәрҙәр менән барып, сит мәмләкәттән мал алып ҡайт», – ти. Шулай ти ҙә мең һум аҡса бирә. Яҡшы аттарға мендереп, каруанға эйәртеп, улын оҙатып ҡала.

Ул заманда машина юҡ, поезд юҡ бит инде, былар ун көн, ун биш көн, айҙар буйы баралар, йөҙләгән кеше. Шулай бара торғас, бер ҡалаға килеп керәләр. Аттарын, дөйәләрен фатирға ҡуялар ҙа, был ҡалала ниҙәр бар, ниҙәр юҡ икән тип, ҡарап йөрөйҙәр. Иблиәмин дә сыға. Тамаша ҡылып йөрөй торғас, ни арзан, ни ҡиммәт икәнен белеп бөттөләр. Ҡиммәтлеһен һаттылар, арзанын үҙҙәренә алдылар, ти.

Бер ерҙә иғлан ҡаҙаҡлағандар: «Бер йыллыҡ курс бар, скрипка уйнарға» тиелгән. Иблиәмин һорай:

– Бер йыл уҡырға күпме алаһығыҙ?

– Мең тәңкә. Ашау-эсеү, ятыу-йоҡлау беҙҙән; белһәң дә, белмәһәң дә артыҡ уҡытмайбыҙ, – тиҙәр.

«Ҡалайым әле, – ти ҙә Иблиәмин тороп ҡала. – Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр кәрәк тип, юҡҡа әйтмәйҙәрҙер әле», – ти.

Каруан ҡайтып китте, был тороп ҡалды. Йылы тулғас, быға әйтәләр:

– Беҙҙә күптәр уҡыны, һиңә еткәне булманы. Тағы бер йылға ҡалаһыңмы, аҡсаң бармы? – тиҙәр.

Аҡсам бөттө тип, был ҡалмай. Килгән каруанға эйәреп ҡайтып китә. Ҡайтып еткәс, ата-инәһе ҡаршы сығып ала. Ашбылау бешереп, бының тамағын туйҙыралар. Шунан һуң атаһы менән әсәһе һорай:

– Йә, улым, ниндәйен малдар, ниндәйен байлыҡ алып ҡайттың? – тиҙәр.

– Эй, атай, мин йәшлек һауаһы менән бер ни ҙә алып ҡайтманым, уҡып ҡына ҡайттым, – ти. Атаһы тора ла:

– Улым, ошо аҙнала тағы бер каруан китә. Мин һиңә йәнә мең тәңкә аҡса бирәм. Һин был юлы әрәм-шәрәм итмә инде, байлыҡ алып ҡайт. Юғиһә, беҙ ҡартайҙыҡ, ҡартлыҡта көн итергә кәрәк бит, – ти.

Былар икенсе тапҡыр сығып киттеләр. Поезд да юҡ, самолет та юҡ бит инде. Әллә ун биш көнлөк, әллә айлыҡ юл үттеләр, баяғыса бер ҡалаға барып еттеләр. Әлегесә, аттарын, дөйәләрен, ишәктәрен ҡуйҙылар ҙа, ҡалаға сыҡтылар, тамаша ҡылып йөрөйҙәр. Байҙар мал йыя, Иблиәмин донъя күрә. Кис булғас, ҡайтып киләләр ине, бер ерҙә тағы иғлан элеүле тора. Килһә, унда бильярд уйнарға өйрәтәләр, тип яҙылған.

Был мең тәңкәне бирә лә, бер йыл уҡып, иң алдынғы булып сыға. Икенсе каруанға эйәреп ҡайтып китә.

Баяғыса ата-инәһе ҡаршы сығып ала, аш-былау бешереп ашаталар ҙа һорайҙар:

– Йә, улым, ниндәйен малдар, ниндәйен байлыҡ алып ҡайттың? – тиҙәр.

– Юҡ, атай, йәшлек һауаһы менән бер ни алып ҡайталманым, бильярд уйнарға өйрәндем. Егет кешегә һөнәр кәрәк бит, – ти.

Ҡартайған атаһы менән әсәһе әйтә:

– Эй, улым, улым, былай булғас, кешеләргә күренергә лә оят бит инде. Бына тағы һиңә мең тәңкә аҡса, был юлы, зинһар, тип әйтәбеҙ, беҙҙе тыңла инде. Исраф итмә, өсөнсө меңде бирәбеҙ бит инде, – тиҙәр.

Тағы бер каруанға эйәреп, юлға сыға был. Өсөнсө яҡҡа бик алыҫҡа сығып китәләр. Автомобиль юҡ, поезд юҡ, самолет юҡ, аттарын менеп, дөйәләрен, ишәктәрен менеп, баралар ҙа баралар. Шулай бара торғас, бик йыраҡтағы бер ҡалаға килеп етәләр. Баяғыса фатирға төшәләр ҙә ҡалаға тамаша ҡылырға сығалар. Быларға эйәреп, Иблиәмин дә сыға бит инде. Ҡарайҙар: ни бар, ни юҡ. Байҙар әйбер ала, һатыу итә. Иблиәмин генә бер ҙә күңеленә оҡшаған нәмә тапмай. Йөрөй торғас, йәнә бер ерҙә иғлан күреп ҡала. Уҡып ҡараһа, бында бер йылға ҡалып, юғары класта уҡырға тиелгән. Торлаҡ та, ашау-эсеү һәм башҡалары – барыһы ла бар тиелгән.

Һорашып белһә, унда алтын һаплы ҡәләмдәр менән генә яҙышып ултыралар, дворян балалары ғына уҡый икән. Был

шулар араһында алдынғы булып, юғары класс бөтөрөүенә диплом алып сыға. Өсөнсө диплом бит инде!

Хәҙер тағы ла үҙ яғынан килгән каруанға эйәреп ҡайтып китә. Был юлы ла атаһы-инәһе ҡаршы сығып алып, аш-былау бешереп, тамағын туйҙыра. Атаһы тағы һораша башлай:

Йә, улым, ниндәйен байлыҡтар, ниндәйен малдар алып ҡайттың? – ти. Улы ни эшләһен, шул бер яуабын бирә инде:

Эй, атай, мин йәшлек һауаһы менән бер ни алып ҡайтманым. Тағы уҡып ҡына ҡайттым, – ти.

Хәҙер атаһы быны урамға ла сығармай. Оят, ти.

Хәҙер былар йорттарын, кибеттәрен һатып, икенсе ҡалаға күсеп китәләр. Йыраҡ ҡалаға.

Әбей менән бабай һөйләшеп бер өйгә керҙеләр, фатирға төштөләр. Ашамлыҡтар алып керәйек тип, баҙарға сыҡтылар. Иблиәмин өйҙә ҡалды. Барып еткәс, ҡарт өй һатҡан аҡсаһын ҡараһа, аҡса юҡ. Юлда төшкән дә ҡалған. Бына бит ул нисек була.

Былар бер көн ас ултыра, ике көн, өс көн ултыралар. Ул заманда ҡыҙ бала булһынмы, ир бала булһынмы, һатыу булған. Иблиәмин әйтә:

Атай, мине баҙарға сығарып һатығыҙ, мең тәңкәнән дә кәмгә бирмәгеҙ, – ти.

Быны мунса индереп, таҙартып, кейендереп, баҙарға алып сығалар. Сит илдән бер каруан килә. Каруан баҙарға туҡтала. Юлда килгәндә был каруандың өлкән хеҙмәтсеһе ауырып үлгән икән. Шуға кеше эҙләй был. Каруан башлығы килә лә:

Был егет һатлыҡмы? – тип һорай.

Һатлыҡ, – ти ҡарт.

Күпме тора?

Мең тәңкә!

Уҡый-яҙа беләме?

Бына дипломы, юғары класс бөтөрҙө, – ти ҡарт.

Хәҙер каруан башлығы ҡартҡа мең тәңкә аҡсаны бирә лә егетте алып китә. Иблиәмин ата-инәһе менән хушлаша ла: «Тере булһаҡ, бер күрешербеҙ», – тип тегенең артынан китә.

Был ҡалала эштәре бөткәс, каруан үҙ юлы менән ҡайтып китә.

Бер тәүлек барғас, бер ҡойо төбөндә тамаҡ туйҙырып, ял итеп алырға булалар. Туҡтаһалар, һыу аҙ ғына. Каруан башлығы Иблиәмингә әйтә:

Давай, етерлек итеп һыу сығар, – ти.

Иблиәмин силәк бауына йәбешә лә ҡойоға төшөп китә. Төшә лә үҙҙәренә лә, аттарға ла, дөйәләргә етерлек итеп һыу сығара.

Һыуҙы сығарып бөткәс, ҡараһа, ҡойоноң төбөндә бер ишек бар. Ишекте шарт тартып асып ебәргәйне, тегендә саф алтын ята. Был силәк алтын тултырып сығара. Силәктәрҙе бай үҙе тартып алып тора. «Бөттө!» – тип ҡысҡыра Иблиәмин. Шунан

һуң үҙе силәккә ултырып сығып килә. Шул саҡ байҙың күңелендә көнсөллөк тыуа. «Әгәр ҙә быны сығарһам, алтындың яртыһын ала бит был», – тип уйлай. Байҙың билендә хәнйәр була. Шуны ала ла силәк бауын – ҡых! Иблиәмин ҡойо төбөнә төштө-китте. Иблиәмин һушына килгәс, бауҙы ҡараһа, бауҙың бысаҡ менән ҡырҡылғанын белде.

«Ит изгелек, көт яуызлыҡ», – тип ҡойо төбөндә ята был хәҙер үкенеп. Ни эшләргә белмәй ҡаранып ултыра торғас, ҡойоноң икенсе яҡ стенаһында тағы бер ишек бар икән, шуны күрә был. Ишекте асып ҡараһа, йә хоҙай, бер ғифрит йоҡлап ята! Шунда бер скрипка эленеүле тора. Иблиәмин рөхсәт һорай:

– Миңә уйнарға рөхсәт ит, – ти.

Ғифрит теле менән әйтә алмай, ҡулы менән генә ишара яһай.

Иблиәмин скрипканы ала ла бик моңло көйҙәр уйнарға тотона. Их уйнай, их һыҙҙыра был, прәме илаһыларҙы килтерә, ти. Шул саҡ ғифриткә лә йән ҡунып, «ах!» тип тороп ултыра.

– Эй, егет, әлдә килеп еттең әле! Ярты сәғәттән йән бирә инем бит, – ти. – Шулай ҙа ни эшләп бында килеп төштөң әле һин? – тип һорай.

Иблиәмин барыһын да һөйләп бирә.

– Мин һине үлемдән ҡотҡарғанмын икән, хәҙер һин мине бынан сығар, – ти Иблиәмин.

– Һине сығарыу ғына етмәй бит, ниңә ул һине харап иткән? Мин уның үҙен юҡ итәйем, – ти ғифрит. Егет әйтә:

– Юҡ инде, улай итмә. Мин уның эшсеһе, мине шунда илтеп кенә ҡуй, – ти.

Иблиәмин шулай тигәс, был сығара ла каруанға еткереп кенә илтеп ташлай.

Бай Иблиәмингә:

– Эй Иблиәмин, – ти. – Бау өҙөлөп китте лә алалманыҡ һине, – ти.

«Беләм мин һинең мутлығыңды», тип эстән генә уйлай ҙа Иблиәмин байға бер һүҙ ҙә әйтмәй.

Хәҙер былар ҡуҙғалып китәләр. Ун биш көн барҙылар. Өс көнлөк юл ҡалды. Өс көнлөк юл ҡалғас, бай һәр саҡ үҙенең өйөнә хат яҙып, бер кешеһен алдан саптыра икән. Был юлы ул ҡатынына хат яҙа: «Сәфәребеҙ уңманы. Ошо хатты алғас, был егетте йоҡлаған сағында үлтереп ергә күмегеҙ».

Шулай тип яҙа ла, элеге-баяғы байлыҡты уртаҡлашыуҙан ҡурҡа бит инде, Иблиәминде, өс көндө өс сәғәттә үтерлек атына мендереп, алдан ебәрә. Иблиәмин хатты алды ла хәбәр итергә сапты. Ҡалаға яҡынлағас, атынан төштө лә ипләп кенә хатты асты, нимә яҙылғанын уҡып ҡараны. Уҡып ҡараһа, ни күҙе менән күрһен, үлтерергә ҡушҡан. «Әһә, һин шундаймы ни

әле», – ти ҙә Иблиәмин тегенең хас үҙе һымаҡ иттереп хатты яҙынан яҙа. Хатты ул былай тип яҙа: «Беҙ был юлы ҙур байлыҡҡа осраныҡ. Оло хеҙмәткәр үлгәйне, уның урынына бер йәш егет алдым, исеме Иблиәмин. Шуның арҡаһында сәфәребеҙ ҙә бик уңды. Был егетте кейәү итербеҙ. Мин ҡайтҡансы никах уҡытып, ҡыҙҙы ҡушып ҡуй». Аҙаҡ тегенең хас үҙе һымаҡ итеп, ҡултамғаһын да ҡуя инде. Шикләнергә урын ҡалдырмай.

Яҡшы атҡа атланып, барып керҙе был бай торған ҡалаға. Иблиәмин байҙың ҡапҡа төбөнә барып еткәйне, бер ҡыҙ йүгереп сығып ҡапҡа асты, Иблиәмин ҡулынан хатты алып, йүгереп инеп тә китте. Хатты алып керҙе, лә әсәһенә уҡыны. Хатты уҡығас, тотондолар шатланырға. Хеҙмәтселәренә аш-һыу әҙерләргә ҡуштылар, шул кис үк никах уҡыттылар. Шулай итеп, Иблиәмин байҙың ҡыҙының ҡуйынына керҙе, бер кис ҡунып та сыҡты.

Таң атҡас, Иблиәмин кәләшен эйәртә лә ҡалаға сығып китә. Тамаша ҡылып йөрөй торғас, бер урында иғлан күреп ҡала. Килеп уҡыһалар, былай тип яҙылған: «Кем дә кем бильярд уйнап батшаны өс тапҡыр еңә, шуға батша үҙенең батшалығын бирә. Еңә алмаған кешенең башын киҫә».

Күрәһең, батшаның үҙ вариҫы булмағандыр инде.

Кәләшен ҡайтарып ебәрә лә, Иблиәмин үҙе батшаға китә. Килә лә был:

– Мин уйнайым, – ти.

Батша ҡарап тора ла быға:

– Ай-һай, булдыра алырһыңмы? – ти. – Башың киҫелеүҙән ҡурҡмайһыңмы? – ти.

– Юҡ, – ти был. Етмәһә: – Эйҙә, тиҙерәк уйнайыҡ, – тип батшаның үҙен ашыҡтыра. Белә бит инде каруандың ҡасан ҡайтып етерен.

Уйнай башлайҙар былар. Батшаның вәзирҙәре ҡарап тора, былар уйнайҙар, кем, һиңә әйтәйем, шарҙар бәрелешкәндә, осҡондар сәселеп тора! Батша ла шәп уйнай икән, шайтаның, тәүге ҡулды ул ота. Иблиәмин сер бирмәй. Икенсе ҡулды ла батша ота бит. Батша:

– Йә, егет, өсөнсөһөн уйнайһыңмы, әллә башың иҫән саҡта ҡайтып ҡына китәһеңме? – ти.

– Юҡ, – ти Иблиәмин, – уйнайбыҙ, – ти.

Шунан өсөнсөһөн уйнай башланылар. Эй, асыуланып, батша уйнай, унан яман тырышып, Иблиәмин уйнай. Башын киҫтерәһе килмәй бит инде бының. Шулай тырыша торғас, отто бит был батшаны. Егеткә йән кереп китте, батша ла һағая төштө. Тағы уйнанылар, тағы Иблиәмин отто. Өсөнсөһөн уйнанылар, уныһында ла батша отолдо. Шулай итеп, үҙенең вәзирҙәре алдында батша быға үҙенең батшалығын бирҙе, егеттең башына үҙенең таҡыяһын* кейҙерҙе.

Батша таҡыяһы башында булғас, бының ҡулға күсте бит инде власть. Был хәҙер вәзирҙәрен саҡыртып ала ла: «Фәлән юлдан бер каруан килә, шул байҙың малдарын, байлығын иҫәпләп, пошлина алып ҡайтығыҙ», – тип бойороҡ бирә.

Былар ни эшләһендәр, батша үҙе бойорғас, барғандар ҙа байҙың бөтә малын, байлығын иҫәпләп, Иблиәмин сығарған алтынды, пошлинаға тип, алып ҡайтҡандар.

Каруан ҡайтып етеп, бай өйөнә керһә, өйҙә байҙың ҡыҙы ла юҡ.

– Ҡыҙыбыҙ ҡайҙа? – тип һорай был бисәһенән.

– Ҡайҙа булһын, кейәүҙә, – ти бисәһе.

– Ниндәй кейәү ул тағы?

– Атаҡ-атаҡ, һин нимә, һаташып ҡайттыңмы әллә? Үҙең бит Иблиәмин тигән бер егетеңде хат яҙып алдан ҡайтарғайның, шуға, мин ҡайтҡансы никах уҡытып, ҡыҙыбыҙҙы бир тип әйтеп яҙғайның, – тигән.

Бай шунда ғына был егеттән тамам отолғанын һиҙгән.

Шулай итеп, Иблиәмин байҙың ҡыҙын да, үҙе тапҡан алтынды ла алып, батша булып киткән. Атаһы менән әсәһен дә янына алдырып, рәхәт донъя көтә башлаған. Әле лә шунда йәшәйҙәр, ти.

## 44. Әлмирйән

Борон-борон заманда Урал тауында йәшәгән, ти, бер бабай менән әбей. Уларҙың Әлмирйән исемле берҙән-бер улдары булған. Йылдар уҙған, Әлмирйән буй еткән, егет булып өлгөргән. Бабай менән әбей улдарына төрлө һөнәрҙәр өйрәткән. Әлмирйәндең белмәгән һөнәре булмаған.

Берҙән-бер көндө Әлмирйән атаһынан:

– Мин хәҙер, атай, үҫтем, төрлө һөнәр беләм. Мине эш эҙләп ҡайтырға ебәрсе, – тип һораған.

Атаһы менән әсәһе рөхсәт иткән, Әлмирйән юлға сыҡҡан. Бик оҙаҡ барған был. Бара торғас, сабатаһы туҙып бөткән. Берҙән-бер көндө Әлмирйән, бер йылға буйына килеп, ял итергә ятҡан. Бик күп көндәр йоҡо күрмәгәнгә, бик ҡаты йоҡоға сумған. Йоҡоһонда төш күреп уянған да тағы юлын дауам иткән. Бер аҙҙан алда ҡала күренгән. Берәр эш табылмаҫмы тип, Әлмирйән туп-тура ҡалаға килеп ингән. Тик был көндө уға бер ниндәй ҙә эш табылмаған.

Иртәгеһенә таң менән ҡала буйлап барғанда, Әлмирйән эргәһенән бер кеше:

- Кемдең яҡшы һөнәре бар, шул кеше ханға барып һөнәрен күрһәтһен. Хан шул кешегә бик күп байлыҡ бирә, – тип оран һалып үткән.

Әлмирйән туп-тура хан һарайына барған. Һарайҙың матурлығына һоҡланып ҡарап китеп бара торғас, хан янына барып еткәнен һиҙмәй ҙә ҡалған. Әлмирйәнде күргәс, хан:

– Әй, егет, һин ҡайҙа килгәнеңде беләһеңме? – тип ҡысҡырған икән, Әлмирйән, һиҫкәнеп, баҫҡан урынынан артына шыуышҡанын һиҙмәй ҙә ҡалған, ти. Хан Әлмирйәнде үҙ янына саҡырған. Әлмирйән биленә ҡәҙәр эйелеп:

– Ҡәҙерле ханым, мине ғәфү ит. Мин, һүрәт ҡарап, ҡайҙа килеп сыҡҡанымды белмәй ҙә ҡалғанмын, – тигән.

– Ярай, ярай, күп телеңә һалышма, ни йомош? – тигән хан.

– Миңә берәй эш булмаҫмы, хөрмәтлө ханым, – тигән, ти, Әлмирйән.

Хан, егеттең шул ҡәҙәр һүҙ байлығына аптырап, һорау артынан һорау биргән, ти. Аҙаҡтан килеп:

– Һиңә шул ҡәҙәр тел байлығын кем өйрәтте? – тип һораны, ти.

Әлмирйән иҫе китмәй генә:

– Донъяға тыуғанда уҡ һөйләшә инем мин, – тигән. Хан аптырап торған да, вәзирен саҡырып:

– Бар әле, был егеткә берәй эш табып, эшкә ҡуш, – тигән.

Ошо көндән алып Әлмирйән ханға эшләй башлаған. Уның эшенә хан бик һоҡланып, тирә-яҡҡа данын тарата икән.

Бер көндө ханға бер батшалыҡтан сапҡын килде, ти. Хан уны бик хөрмәтләп ҡаршы алды, ти. Сапҡындың йомошон үтәргә бер өй ялсылар яллап ҡуйҙы, ти. Сапҡын, бер нисә көн торғас, ханға килеп:

– Хөрмәтле ханым, мине үҙ ханым Басир хан һеҙгә бер һорау менән ебәрҙе. Һорауға яуап бирә алмаһаң, бөтә ҡыҙ-ҡырҡын, бисә-сәсә, бала-сағаларығыҙҙы үҙебеҙгә алып ҡайтып бөтәсәкбеҙ, – тигән, ти. Хан ҡайғыға ҡалһа ла, үҙен һынатмаҫҡа тырышып:

– Ниндәй һорау ул? Тыңларға әҙермен, – тигән булды, ти.

– Беренсе һорау шул: донъяла кешенән, кейектән башҡа тағы ниндәй йән эйәһе йәшәй? Икенсе һорау: ошо ҡумтаның эсендә нисә бүлмә бар, ҡайһы бүлмәһендә әйбер бар, ниндәй әйбер? – Сапҡын өсөнсө һорауын әйткән. – Кисә минең ханым ҡайҙа барған, нимә күргән? Ошо һорауҙарға яуапты бер аҙнала әйтеп бөтөргә тейешһегеҙ, – тип сапҡын ҡайтып киткән, ти.

Хан ҡайғыһынан иҫһеҙ ятып ҡалған, ти. Әлмирйән, һыу эсергә тип, һарайға инһә, хандың иҫһеҙ ятыуын күреп, янына барған да:

– Һеҙгә ни булды, ханым? – тип һораған.

Хан:

– Миңә теге сапҡын бик ҙур бәлә килтерҙе, – тигән. Әлмирйән:

– Ниндәй бәлә ул, берәй яуызлыҡ ҡылмаға иттеме?

Хан Әлмирйәнгә бөтәһен дә һөйләп бирҙе, ти. Шунан Әлмирйән уйлап ултырҙы ла, ханға ҡарап:

– Һеҙҙең эштәр бик мөшкөл икән шул, ханым, – тигән булды, ти.

Хан, Әлмирйәндең әйткәнен ишеткәс, тағы ла нығыраҡ ҡайғыра башланы, ти. Әлмирйән иртәгеһенә ҡояш ҡалҡыр-ҡалҡмаҫтан эшкә китте, ти. Хан, күпме генә уйлаһа ла, һорауҙарға бер ҙә яуап таба алманы, ти. Шунан ҡатынына инеп, ҡайғыһын һөйләй биргәс, ҡатыны:

– Һөйөклөм, беҙгә был бәләнән ҡотолорға һинең ялсың Әлмирйән генә ярҙам итәсәк, – тигән.

Хан, ҡатынының һүҙенә бик шатланып, үҙенең бүлмәһенә инде, ти. Теге һорауҙарҙы тәүҙә вәзиренә биреп ҡараны, ти. Вәзир бер нәмә лә әйтә алманы, ти. Шул арала кис булды, ти.

Әлмирйән дә эштән ҡайта. Хан Әлмирйәнде саҡырып алған да:

– Әгәр ҙә һин мине ошо бәләнән ҡотҡарһаң, һиңә ярты байлығымды бирәм, үҙемдең ханлығымдан булмаһа, икенсе ханлыҡтан күңеләңә оҡшаған ҡыҙҙы алып бирермен. Үтәй алмаһаң, бөгөндән үк яҡты донъя менән хушлашырға тура килер, – тигән, ти.

Әлмирйән бер аҙ уйлап торған да ханға:

– Ҡәҙерле ханым, мин һеҙҙең шартығыҙҙы үтәргә әҙермен. Тик һеҙ миңә нимә һораһам, шуны бирергә тейешһегеҙ. Шартығыҙҙы үтәгәс, вәғәҙәгеҙҙе онотмағыҙ, – тине, ти.

Хан Әлмирйәндең әйткән һүҙенә риза булған. Әлмирйәнгә хан беренсе һорауҙы әйтте, ти.

– Донъяла кешенән, кейектән башҡа тағы ниндәй йән эйәһе йәшәй?

Әлмирйән уйлаған да ханға:

– Донъя – ер өҫтө генә түгел, унда һауа ла бар. Унда ла кешеләр, төрлө йән эйәләре йәшәй, – тине, ти.

– Улай булһа, ҡайҙа? – тигән хан.

Әлмирйән:

– Һауалағы йондоҙҙарҙа беҙҙән дә элек донъяға тыуған кешеләр йәшәй, – тигән Әлмирйән.

Хан Әлмирйәндең күпте белеүенә аптыраған: вәзиренә ҡарап, эйәк атып ҡуйған. Әлмирйән икенсе һорауҙы әйтеүҙе һораны, ти. Хан, бер бәләкәй генә ҡумта килтереп:

– Был ҡумтаның эсендә нисә бүлмә, ҡайһы бүлмәһендә әйбер бар, әйберҙәрҙең нимәһе бар? – тине, ти.

Әлмирйән, уйлап тормайынса, ҡыҙып-ҡыҙып:

– Был ҡумтала ете бүлмә, бүлмәнең уртаһында бер әйбер бар, был әйбер осло ҡаҙау һымаҡ. Тик ҡаҙау түгел, күҙәүе бар. Күҙәүе булғас, энә был, – тип һөйләп бирҙе, ти.

Икенсе һорауға яуап алғас, хан:

– Булды, былай булғас, – тип бала кеүек ҡысҡырғанын үҙе лә һиҙмәй ҡалды, ти.

Әлмирйән күп уйлап тормаған, өсөнсө шартты һорап, яуап ҡайтарырға ашыҡҡан.

– Кисә теге хан ҡайҙа барған, нимә күргән? – тигән һорауҙы ишетеп, Әлмирйән тәүҙә аптырап ҡалған. Был һорау Әлмирйәнгә башҡа һорауҙарға ҡарағанда ауырыраҡ тойолған. Шулай ҙа ул яуап бирергә ашыҡҡан.

– Кисә ул хан Стамбулда булған, Стамбул ҡыҙына ғашиҡ булып ҡайтҡан. Ул ҡыҙҙы нисек алырға белмәй, әле булһа аптырап, ҡайғырып ултыра, – тип әйткән, ти, Әлмирйән.

Хан һорауҙарға яуаптарҙы тапшырып килеү өсөн сәфәргә әҙерләнә башлаған, ти. Шул сак Әлмирйән:

– Был яуаптарҙы үҙем барып тапшырһам, бик һәйбәт булыр ине, – тине, ти.

Хан риза булды, ти.

Әлмирйән хандан бик күп аҡса алып, теге илсе килгән ханға китте, ти. Көн барған, төн барған. Бер ҡалаға килеп еткән. Басир ханды табып, үҙенең ҡайҙан килеүен әйткән. Хан яуаптарҙың дөрөҫлөгөнә аптырап ҡуйған, ти. Ул Әлмирйән артынан ханға тағы бер кеше лә белмәгән бер нисә һорау биреп ебәрмәксе булған. Быны белеп ҡалған да Әлмирйән ханға:

– Мин хандың ялсыһы. Мөмкин булһа, был һорауҙарға ла яуапты үҙем бирәйем, – тигән. Басир хан:

– Үҙеңдең башыңды һаҡлағың килһә, был әйткән һүҙеңдән кире ҡайт, башың йәл булмаһа, яуап бир, – тигән.

Әлмирйән хандың бөтә һорауҙарына теҙеп яуап биреп торған, ти.

Хандың иң аҙаҡҡы һорауы былай булған:

– Күк йөҙөндә нисә йондоҙ бар?

Әлмирйән уйлап та тормай:

– Күк йөҙөндә йондоҙ күп, ләкин йондоҙҙарҙың иҫәп-хисабына сығып булмай. Йондоҙҙар урындарынан күсеп йөрөй. Шуға күрә йондоҙ һанаусы ла уларҙы һанап бөтә алмай, – тигән, ти. Басир хан Әлмирйәндең һүҙен тыңлап торған да, аптырап:

– Һеҙҙе был ҡәҙәре һүҙ байлығына кем өйрәтте? – тип һораған, ти.

Әлмирйән:

Ер йөҙөндә бөтә кеше лә бер булмай, береһе бай, береһе ярлы, береһе белемле, береһе белемһеҙ булырға мөмкин, – тигән, ти.

Хан тағы һорау бирҙе, ти:

Ҡасан бөтә кеше лә белемле булыр һуң?

Ҡасан да ҡасан бөтә кеше бер тиң хоҡуҡлы була, ярлы

ла, бай ҙа булмай, шунда ғына барлыҡ халыҡ тиң белемле булырға тейеш, – тине, ти, Әлмирйән.

– Улай булһа, һин минең ҡайғырғанды, Стамбул ханы ҡыҙына ғашиҡ булғанды ҡайҙан белдең? – тип һораған хан.

– Һеҙҙең төҫөгөҙ бына ошо ҡумтаға төшкән, ә күҙегеҙҙә Стамбул ҡыҙының шәүләһе бар. Шунан белдем, – тигән, ти, Әлмирйән.

Әлмирйән сығып киткәс, хан вәзирҙән ҡумтаны алдыртып ҡараған-ҡараған, ләкин бер нәмә лә күрә алмаған.

Бик күп ваҡыт үтеп киткән, ҡояш әйләнеп ҡалҡып, әллә нисә батҡан. Әлмирйән ҡайтырға йыйына башлаған, ти. Басир хандың ҡайтарғыһы килмәгән.

– Мин һиңә үҙ ханыңдыҡынан да яҡшыраҡ эш табам, бында ҡал, – тигән.

Әлмирйән, риза булып, үҙ ханына ҡайтмаған, ти, яңы ханда эшләй башлаған, ти.

Бер ваҡыт Басир хан Стамбулға сығып китә. Үҙе ҡайтҡансы, Әлмирйәнде ханлыҡҡа ултыртып китә. Хәтһеҙ ғүмер уҙғас, хан Әлмирйәнгә хат яҙған, ти. «Мин ҡайта алмам, һин минең ханлыҡты үҙең апарып тор. Бәлки, ҡайтырмын да. Стамбул ҡыҙы миңә һораүҙар бирә, бер-икеһенә яуап бирҙем, иртәгә һынауҙы яңынан башлайбыҙ», – тигән, ти.

Әлмирйән уйлап торған да, вәзирҙәр алып, Стамбулға килеп еткән, ти. Ҡала ситендәге бер өйгә туҡтап, вәзирҙәрен ҡалдырған да киткән ханды күрергә. Хан һарайының ҡапҡа төбөндә бик күп кешенең торғанын күрә лә яҡыныраҡ бара. Барһа, ни күҙе менән күрһен, Басир хан ҡапҡа төбөндә илап ултыра. Әлмирйән яҡыныраҡ килеп:

– Егет, ни эшләп илайһың, ни ҡайғың бар? – тигән булды, ти. Хан:

– Миңә хан ҡыҙы һорау биргән ине, мин яуап эҙләнем-эҙләнем – таба алманым. Хәҙер ҡушҡан көн дә етә инде, – тигән, ти.

Әлмирйән эстән генә: «Бик ваҡытлы килгәнмен икән, булмаһа, ярҙам итеп ташлайым әле», – тип уйлап алды ла, ти:

– Ниндәй һорау бирҙе? Әйт, мин яуап табам, – тине, ти.

Был егет, бәлки, яуап бирә алыр, тип хан:

– «Был донъяла нимә иң тәмлеһе, нимә иң әсеһе?» тип әйткәйне, – тигән булды, ти. – Бына ошо һорауҙы ике көн уйланым, яуап таба алманым. Ошо һорауға яуап бирһәм, хан ҡыҙы минеке буласаҡ ине, – тип үкенеп ҡуйҙы, ти.

Әлмирйән Басир ханға ҡарап:

– Һеҙҙең һүҙегеҙ буйынса, ярлы-ябағаға бик ҡаты күренәһегеҙ. Мин ул һорауға яуап бирә алам, ләкин һинең менән беҙҙең эш килешмәйәсәк. Һин бик ҡаты хан икәнһең, – тигән дә китеү яғына атлаған булған, ти.

Хан Әлмирйәндең аяғына йығылып:

– Егет, ни теләһәң, шуны алырһың, тик миңә ярҙам итә күр, – тип ялынған, ти.

– Әйтһәм, әйтәйем. Донъяла иң тәмлеһе – йоҡо, иң әсеһе һүҙ, – тигән, ти, Әлмирйән.

Хан Әлмирйәнгә бик күп аҡса бирҙе, ти.

Әлмирйән, иртүк тороп, хан ҡапҡаһының төбөнә килгән дә Басир хандың сыҡҡанын көтә башлаған. Күп тә тормай, хан шатланып килеп сыҡҡан, ти. Әлмирйән ханға:

– Эш нисек, егет? – тигәс, Басир хан Әлмирйәнгә:

– Бик башлы икәнһең, хандың ҡыҙын шаҡ ҡатырғансы әйттем дә ҡуйҙым. Әйҙә, егет, мин һине үҙ нәзирем итәйем, беҙгә киттек, – тигән, ти.

Әлмирйән менән Басир хан ҡапҡанан сығып киттеләр, ти. Әлмирйән ханға:

– Минең иптәштәрем бына бында ғына торалар, уларҙы ла үҙебеҙ менән алһаҡ, яҡшыраҡ булыр ине, – тигән, ти.

Хан Әлмирйәндең һүҙен йыҡмаған.

– Бар, иптәштәреңде ал да мине ҡыуып ет, – тип, атына атланып, ары китте, ти.

Әлмирйән, ҡалаға килеп, иптәштәрен алған да хан артынан ҡыуа сыҡҡан, ти. Хан күпмелер ер киткәйне, Әлмирйән бик тиҙ ҡыуып етте, ти. Басир хан үҙенең бер вәзирен танып:

– Һин бында ҡасан килдең? – тип һораған, ти.

Вәзир ханға:

– Беҙ, һинән хат алғас та, юлға сыҡтыҡ. Бына үҙ урыныңа ҡалдырған ханың, – тип Әлмирйәнгә күрһәтте, ти.

Хан Әлмирйәнде танып:

– Был атаҡлы аҡыл эйәһе кем тиһәм, һин икәнһең, Әлмирйән! Ай һин, егет, телгә бик оҫта кеше лә инде! Туйымдың түрендә ултырасаҡһың, үҙ ханлығымды ла һиңә бирәм, үҙем Стамбул ханлығын алам. Стамбул ханының ҡыҙы берәү генә, бүтән бер балаһы ла юҡ, шулай булғас, хан мине ханлыҡҡа ҡалдыра тигән һүҙ, – тине, ти.

Хан, ҡайтҡас, хат еткән ергә хат, илсе еткән ергә илсе ебәреп, кеше йыйҙы, ти. Әлмирйәндең тәүге ханын да саҡырҙы, ти. Хан һарайында өс көн, өс төн һый барҙы, ти. Дүртенсе көн тигәндә хан бөтә халыҡты йыйып:

– Бына был егет һеҙҙең ханығыҙ буласаҡ. Мин үҙем Стамбул ханлығын аласаҡмын. Һеҙ был егет менән ризаһығыҙмы? – тине ти.

Бөтә халыҡ бер ауыҙҙан:

– Риза, риза... Риза булмаған ҡайҙа, – тине, ти.

Шулай иттереп, Әлмирйән кәләш әйттереп, ата-әсәһен саҡыртып алып, Басир хан батшалығында хан булып ҡалды, ти.

## 45. Ҡурайсы

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер бай. Уның Гәрәй исемле бер улы булған, ти. Гәрәй йәштән үк атаһының ялсылары менән һунарға йөрөргә яратҡан. Ул ваҡытта урмандарҙа йыртҡыс кейек бик күп булған, ти. Бер көндө Гәрәй атаһына:

– Атай, мин бөгөн һунарға үҙем генә барам, – тигән.

Атаһы уға яңғыҙына һунарға барырға рөхсәт итмәгән. Гәрәй уның һүҙен ҡолағына ла элмәгән, үҙенең егетлеген күрһәтергә теләп, береһенә лә әйтмәйенсә япа-яңғыҙы сыҡҡан да киткән. Шул китеүҙән ул кире ҡайтмаған. Бер көн үткән, ике көн үтеп киткән. Гәрәй һаман юҡ, ти. Бай ялсыларынан Гәрәйҙе таптыра икән. Бер аҙна ваҡыт үткән, Гәрәй һаман да юҡ, ти. Шунда бай үҙенең ялсыларын йыйған да:

– Гәрәйҙе teләһәгеҙ ҡайҙан эҙләп табығыҙ. Кем дә кем миңә ҡайғылы хәбәр алып ҡайтып ауыҙын аса, үҙенә үпкәләһен: йыртҡыс бүреләргә ырғытасаҡмын, – тигән дә Гәрәйҙе эҙләргә сығарып ебәргән, ти.

Тегеләр эй эҙләйҙәр, эй эҙләйҙәр, ти. Гәрәй юҡ та юҡ, ти. Урман-тауҙы ҡыҙырып эҙләй торғас, йыртылып бөткән ҡанлы өҫ кейемдәрен генә тапҡандар. Шунан ялсылар, нисек байға ҡайтып күренергә белмәй, аптырашта ҡалғандар, ти. Шул саҡ бер үткенсе ҡарт осраған. Улар ҡартҡа барыһын да теҙеп һөйләп биргәндәр ҙә унан кәңәш һорағандар. Ҡарт тыңлаған да:

– Ярар, уландар, хәҙер йоҡларға ятығыҙ, иртән юлға сығырбыҙ, мин дә һеҙҙең менән барырмын, – тигән.

Ялсылар тынысланып йоҡларға ятҡандар, ти.

Иртән күмәкләшеп юлға сыҡҡандар.

Бай йортона ҡайтып етһәләр, хужа уларҙы ҡапҡа төбөндә үк көтөп тора икән, ти.

– Йә, таптығыҙмы? Ниндәй хәбәр килтерҙегеҙ? – тип һорай башланы, ти, бай ялсыларҙан.

Ялсылар бер һүҙ ҙә әйтмәйҙәр, ти. Шул саҡ әлеге үткенсе ҡарт ҡынынан ҡурай тартып сығарған да уйнап ебәргән. Ҡурайҙың тауышы шундай моңло, һағышлы, ти, баҡсалағы һандуғастар ҙа, хайран ҡалып, һайрауҙарынан туҡтап тыңлап торғандар, ти.

Бай ҙа, ялсылар ҙа бер ҡурайсыға, бер ҡурайға ҡарап торғандар ҙа илағандар ҙа ебәргәндәр, ти. Ҡурай моңонан бай улының һәләк булыуын аңлаған. Ҡурай моңонан ләззәт табып ҡайғыһын баҫҡан, ти.

Ялсылар береһе бер ауыҙ асып һүҙ әйтмәгәндәр, ти.

Бына шулай ҡурайсы ҡурайының моңо менән кешеләрҙе үлемдән алып ҡалған, ҡайғылының ҡайғыһын баҫҡан, ти.

## 46. Аҡыллы ҡарттың үлемдән ҡотолғаны

Борон заманда булған, ти, бик аҡыллы бер ҡарт. Әйткән һүҙе раҫ килеп кенә торған, ти, бының. Берҙән-бер көндө был ҡартты батша янына елтерәтеп алып килтергәндәр, ти.

– Әйт әле, бабай, иртәгә нимә була? – тип һорғанылар, ти.

Ҡарт:

– Иртәгә борсаҡ ҡатыш ямғыр яуыр. Күп ерҙә иген әрәм булыр, – тип әйтте, ти.

– Ә төндә нимә була? – тип һорғанылар, ти.

Ҡарт:

– Төнө буйы ғәскәр башлығының аяҡтары һыҙлап сығыр, – тип әйтте, ти.

Икенсе көндө ысынлап та борсаҡ ҡатыш ямғыр яуып, игендәр әрәм булды, төнө буйы ғәскәр башлығының аяҡтары һыҙлап сыҡты, ти.

Шунан батша үҙенең һанаттарын саҡырып алды ла:

– Был берәй сихырсы ҡарттыр. Беҙҙең башҡа бәхетһеҙлек кенә юрап йөрөйҙөр ул! Нимә әйтһә – шул була. Хәҙер үк аҫып үлтерегеҙ үҙен! – тип бойороҡ бирҙе, ти.

Аҫыр алдынан бабайҙан:

– Берәй һүҙең юҡмы, сихырсы ҡарт. Булһа, әйтеп ҡал! – тинеләр, ти.

– Әйтер һүҙем юҡ, иллә-мәгәр бер генә үтенесем бар: батшаның нурлы йөҙкәйҙәрен күреп үлгем килә, шуны күрһәтһәгеҙ ине! – тигән булды, ти, ҡарт.

Ҡартты батша янына алып инделәр, ти. Ул аҙ ғына батшаға ҡарап торҙо ла боролоп сыға башланы, ти. Сыҡҡанда:

– Хуш инде, батшам, үлемдән ҡалыу юҡ – ҡол да үлә, батша ла үлә! – тип әйтте, ти.

Шул ваҡыт батша:

– Эй, ҡарт, ысынын ғына әйт әле, мин ҡасан үләм? – тип һораны, ти.

– Мин үлгәндән һуң, теүәл ете көн үткәс үләһең. Бына шуның өсөн мин һинең менән бәхилләшергә индем дә инде! – тип әйткән булды, ти.

Батша шунда уҡ үҙенең был ҡартты аҫырға тигән бойороғон кире алды, ти, бабайҙы ашатып-эсереп, ебәктән генә кейендереп, уға ғүмеренә етерлек байлыҡ биреп сығарып ебәрҙе, ти.

## 47. Батша менән мосафир

Борон бер батша, үҙ батшалығындағы бар кешенән ҡыҙыҡ ҡына һорау алырға булып, бөтәһен дә үҙ һарайына йыйып алған. Һорау бөтә кешегә лә бер булған: «Һин ни өсөн тыуҙың?»

– Кем дә кем үҙенең ниңә тыуғанын белмәй, шул кешенең башы киҫелә, – тип иғлан иткән батша.

Һорау башланған. Һәр кемдең үләһе килмәй бит инде, шуның өсөн береһенән-береһе уҙҙырып яуап бирә башлағандар. Тере ҡалыр өсөн, кем ни генә уйлап тапмаған. Хатта:

– Тәбиғәт биргән һауаны һулар өсөн.

– Йоҡонан уянып, күҙемде асыр өсөн.

– Хәрәкәт итер өсөн.

– Аллаға иман килтерер өсөн... – кеүек яуаптар ҙа булған.

Бөтәһе лә яуап биреп бөтөп барғанда, ундай яуаптар ҙа бөтә башлаған. Иң һуңында бер мосафир ҡалған. Унан да:

– Һин ни өсөн тыуҙың? – тип һорағас.

– Белмәйем, – тип яуап биргән теге.

Батша ҡыуаныш киткән.

– Бына бит, – тигән ул, – ни өсөн тыуғанын белмәгән бәндә минең батшалыҡта бар. Шуның өсөн дә, шарт буйынса, уның башы киҫелергә тейеш. Ниңә тыуғанын белмәгәс, уға ғүмер тейеш түгел.

Шулай тигән батша. Шундағы бар халыҡты язалау майҙанына йыйып, мосафирҙың башын киҫергә булғандар. Мосафирҙың башы өҫтөнә айбалта күтәрелгәс, батша һуңғы тапҡыр унан:

– Бәлки, ниңә тыуғаның иҫеңә төшкәндер? – тип һораған.

Мосафир, мин ҡасандыр тыуғанмын, ҡайҙалыр тыуғанмын, бына хәҙер инде үләм, тип уйлаған да, ҡапыл:

– Үлер өсөн, – тип яуап биргән.

Иҫәпһеҙ халыҡ менән тулы майҙан бер юлы «ах» иткән. Нисек береһе лә иҫкә алмаған, ҡалай шәп яуап бирҙе был илсе! Быndaй дөрөҫ яуапты ишеткән батша үҙенең ниәтен ғәмәлгә ашырырға көс тапмаған. Үлемде «үлем» һүҙе менән еңеүсе мосафир балта аҫтынан торғас, тағы ла ил буйлап сәйәхәтен дауам иттергән.

«Бөтә кеше лә үлә, ниңә уны ваҡытынан алда яҡты донъянан айырырға», – тип уйлаған да батша үҙенең һорауының мәғәнәһеҙ булыуына төшөнгән. Ошонан һуң ул аҡыллыраҡ батшалыҡ итә башлаған, ти.

## 48. Батша менән һабансы

Элек заманда бер батша булған. Ул батша үҙенең вәзирҙәре менән бик күп кешеләрҙе үлемгә хөкөм иткән. Уның хөкөмө аҫыу ҙа киҫеү булған.

Бер ваҡыт, хөкөм барғанда, залға батшаның ҡыҙы килеп керә лә, атаһынан рөхсәт һорап, хөкөмдө тыңлай башлай. Хөкөм залында бер кешене аҫырға хөкөм итәләр.

Суд бөткәс, ҡыҙ атаһына бара ла былай ти:

– Атай, был кешене дөрөҫ хөкөм итмәнегеҙ. Бар кеше лә бер үк һүҙҙе һөйләне.

Батша ҡыҙының һүҙен тыңлап тора ла теге кешене ҡаһылда* аҫмаҫҡа ҡушып, шунан вәзирҙәрен эйәртеп ҡырға сыға. Күп тә бармайҙар, бер һабансы күрәләр. Уның янына туҡтап китмәк булалар. Һабансы ер башына сыға. Батша уға һорау бирә:

– Әгәр-мәгәр?

– Дигәр-мигәр, – тип яуап ҡайтара һабансы.

Батша:

– Был ерҙең файҙаһын күпме пайға бүләһең? – тип һорай.

Һабансы:

– Файҙаһын бишкә бүләм: беренсеһе – көтөргә алғайным, шуны түләйем; икенсеһе – бушҡа китә, зыяны ла, файҙаһы ла юҡ; өсөнсөһө – көтөргә бирәмен, дүртенсеһе – елгә оса, бишенсеһе – үҙем ашайым, – ти.

Батша һабансыға:

– Ҡош ебәрермен. Йолҡа белерһеңме? – ти.

– Эй батшам, йолҡоп бөтөрөрмөн, мамығын да ҡуймам.

Һабансы шулай тигәс, батша, вәзирҙәрен эйәртеп, юлын дауам итә. Шунан баш вәзир:

– Нимә тураһында һөйләштегеҙ? – тип һорай батшанан. – Мин аңламаным, – ти.

Батша вәзиренән иртән ошо һөйләшкәнде фәлән сәғәткә белеп килергә бойороҡ бирә:

– Белмәһәң, минән изгелек көтмә. Хөкөм итеп, теге кеше урынына һине аҫтырырмын.

Вәзир ата-әсәһе янына ҡайта. Әсәһе унан:

– Ниңә бик тиҙ ҡайттың? – тип һорай.

Вәзир әсәһенә:

– Батша менән китеп барғанда, юлда бер аҡыл эйәһе осраны. Батша менән уның һөйләшкәнен тыңлап торһам да, ни тураһында һүҙ барғанын аңламаным. «Әгәр иртәгә фәлән сәғәткә килмем шуны белмәһәң, хөкөм ителгән кеше урынына һине аҫтырырмын» тине, – тип әйтте, ти, вәзир.

Әсәһе тыңлап тора ла вәзирҙе һабансыға ебәрә. Һүҙҙең айышын шунан һорашырға ҡуша.

Вәзир килә теге һабансы янына. Үҙенең ниәтен белдерә, ләкин һабансы бер ни ҙә әйтмәй:

– Ерҙе һөрөп бөтөрәһем бар әле, – тип уның һүҙен ҡолағына ла элмәй.

Аптырап, вәзир кире ҡайтып китә.

Әйтеү түгел, янына ла килтермәне, – ти әсәһенә. – Әгәр белмәһәм, батшаның мине аҫтырасағын әйткәйнем, «Кешене аҫҡанды ҡарап торорға яратаһың бит. Әйҙә, һине аҫҡанды беҙ ҡарап торорбоҙ, әллә аҫылынғың килмәйме?» тип кенә яуап ҡайтарҙы, – ти.

Әсәһе:

– Былай итеп ҡара. Ал бер мискә көмөш тәңкә, бер мискә алтын тәңкә. Һабансыға бир ҙә ялбар, – ти.

Вәзир алтын, көмөшөн тейәп алып, яҡшынан-яҡшы аттар, арбалар менән йәнә һабансы янына китә. Һабансы ерен һөрөп бөтөп килә. Вәзирҙе күргәс:

– Тағы килдеңме ни әле? – ти.

Вәзир ялбара башлай:

– Әйт инде. Бер мискә алтын тәңкә, бер мискә көмөш тәңкә алып килдем, – тип ҡарай, һабансы ыҡҡа бармай.

– Ҡорһаҡ асты әле, ашарға ҡайтам, – ти.

Вәзир ялбара ла ялбара, ялбара ла ялбара. Һабансы аҙаҡ килеп бер мискә алтын тәңкәгә, бер мискә көмөш тәңкәгә батша менән һөйләшкәнде әйтергә була. Унда ла ҡайҡалай*. Аҙаҡ:

– Ярар, һин миңә алтын, көмөштәреңде биреп киттең, ти. Аҙаҡ, мин бирмәнем, талап алды, тиерһең әле, моғайын, – ти.

Вәзир ҡағыҙ, ҡәләм алып: «Бөтә нәмәне лә үҙем бирҙем», – тип яҙыу яҙып, ҡултамғаһын һалып, һабансыға тоттора.

– Һинең яныңа килгәс, батша әйткән һүҙ нимә тигән һүҙ була? – тип һорай хәҙер вәзир.

Һабансы үҙенең яуабында:

– Батша миңә: «Әгәр-мәгәр», – тип әйтте, – ти. – Мин уға ҡаршы: «Дигәр-мигәр», – тип яуап ҡайтарҙым, – ти. – Ул – «Иҫәнмеһегеҙ, һаумыһығыҙ», «иҫәнбеҙ, һаубыҙ» тигән һүҙ булыр. Батша менән: «Был ерҙән сыҡҡан ашлыҡты нисә пайға бүләһең?» – тип һораны. Мин: «Бишкә бүләм – беренсеһе көтөргә алғанға китә», – тинем. Уныһы – «ашағанды түләйем» тигәнем. «Файҙаһы ла, зыяны ла юҡ» тигәнем – «Ҡатыным бар, шуға ашатам» тигән һүҙем. «Көтөргә бирәм» тигәнем – ҡартайғас, беҙҙе ҡараһын өсөн, улымды аҫырауым. «Елгә оса» тигәнем – «Ҡыҙым бар» тигәнем. Бишенсе пай – үҙем ашайым.

– Ярар, – тине, ти, вәзир. – Шунан батша һиңә тағы: «Ҡош ебәрермен, йолҡорһоңмо?» – тигәйне, һин: «Йолҡоп бөтөрөрмөн, мамығын да ҡалдырмам», – тинең. Уныһы ни булыр? – тип һорағайны, ти, һабансы:

– Уныһы инде – һин. Һине яланғас ҡалдырырмын тип әйтеүем ине, – ти һабансы. Шунан тора биргәс: – Бөтөн малыңды йолҡоп алдым, бар хәҙер ҡайт, – тине, ти.

Вәзир йүгереп ҡайтып китә лә әйтелгән сәғәткә батшаға бара. Барғас, һабансынан ишеткәндәрен әйтә. «Мамығын да ҡалдырмам» тигәнен төшөрөп ҡалдыра. Шунан батша һорай:

– Ә аҙаҡҡы һүҙҙәре ни нәмәне аңлата? – ти.

– Һеҙҙең: «Ҡош ебәрермен. Йолҡорһоңмо?» – тигәнегеҙгә ҡаршы: «Йолҡормон, мамығын да ҡалдырмам», – тигәне – мин икән. Һабансы мине һыпырып алып ҡалды, – тип әйтеп, вәзир аҫылыуҙан ҡотола.

Батша ҙур йыйын йыя. Унда, һабансы менән батшаның ни һөйләшкәнен аңламаған өсөн, вәзирҙе вәзирлектән төшөрөп, уның урынына һабансыны һайлап ҡуялар.

Һабансы вәзир булғас, аҫылырға хөкөм ителгән теге кешегә аңынан суд була. Вәзир булған һабансы батшаға аҡыл бирә.

– «Саҡырылған кешеләр барыһы ла килгәндәрме?» – тип һора. Улар, килдек, тип берәм-берәм әйтеп сыҡһындар, – ти.

Батша:

– Саҡырылғандар бөтәһе лә килгәндәрме? – тип һорай.

– Килгәндәр, килгәндәр.

Яуап шулай була.

– Килһәләр, берәм-берәм кемлегегеҙҙе әйтеп сығығыҙ, – ти батша.

Барыһы ла, саҡырыуҙарын тотоп, инеп торалар, исемдәрен әйтеп торалар. Вәзир булған һабансы башлап судҡа биргән кешене саҡыра.

– Быны бер бүлмәгә ябып ҡуйығыҙ, – ти.

Ярҙамсылары шунда уҡ әмерҙе еренә еткерәләр. Саҡырылғандарҙың икенсеһен икенсе бүлмәгә, өсөнсөһөн өсөнсө бүлмәгә ябып ҡуялар. Шунан вәзир-һабансы судҡа биргән кешене сығарып яуап ала.

– Был гонаһлы кеше гонаһын ҡайҙа ҡылып ята ине, – тип һорай.

Теге кеше:

– Бына фәлән ергә барғайныҡ, минең улымды ошо кеше үлтереп ята ине, – ти.

– Янында кемдәр бар ине?

– Бына ошо кешеләр бар ине, – тип судҡа биреүсе геүаһ* итеп килтергән кешеләрҙе күрһәтә. – Улымдың ауыҙынан йәне лә сығып өлгөрмәгәйне, – тип өҫтәй.

Вәзир:

– Был ваҡиға ҡайһы тирәлә булды: тауҙың итәгендәме, түшендәме, башындамы; көндөң сығышындамы, байышындамы, төшлөк яғындамы, төньяғындамы?

– Тауҙың түбәһендә, ҡояш сығышы яғында ине.

Шунан вәзир:

– Улыңды үлтергәнде шаһитта күрҙеме? Бергә күрҙегеҙме? – ти.

– Бергә булдыҡ, бергә күрҙек, – ти теге кеше.

Шунан вәзир-һабансы уны кире бүлмәһенә ябырға ҡуша. Хәҙер шаһитты саҡыралар. Вәзир булған һабансы:

– Теге кешенең улын был кеше үлтереп ятҡанын бергә күрҙегеҙме? – тип һорай.

– Ул беҙҙе тау башына алып менде. Унда ағас төбөндә үлгән кеше ята ине. Шунан, улымды үлтереүсе ошо инде, тип бына был кешене күрһәтте, – ти шаһит.

Вәзир-һабансы ҡартты кире яптыра ла бүлмәһенә икенсе шаһитты саҡырта. Вәзир унан һорау ала башлай.

– Һин был кешенең кеше үлтереүен нисек күрҙең? – ти.

– Судҡа биреүсе мине юлда күрҙе лә, бына улымды үлтергән кеше ошо инде, тине. Шунан миңә, геүаһ булырһың, тинеләр, – ти икенсе шаһит.

Вәзир уны ла кире яптыра ла өсөнсө шаһитты саҡырта.

– Фәлән ҡарттың улын үлтергәнде күрҙеңме? – тип һорай вәзир.

Шаһит әйтә:

– Эйе, үлтереп ята ине, беҙ өҫтөнә барып сыҡтыҡ. Малайҙың ауыҙынан йәне лә сыҡмағайны әле, – ти.

– Ҡайҙа үлтереп ята ине: тауҙың итәгендәме, түшендәме, башындамы; көндөң сығышындамы, байышындамы, төшлөктәме, төньяғындамы? – тип һорай вәзир.

Шаһит:

– Ҡайһы ерҙә тип ни, тауҙың тас ҡояш байышы яғы түшендә ине инде, – ти.

Өсөнсө шаһитты ла индереп ябалар. Хәҙер инде вәзир ғәйепләнеүсенән һорау ала.

– Ул көндө мин ул тау янында булманым, ул тау яғына барманым, – тип яуап бирә ул кеше.

Шунан суд хөкөм сығарырға кәңәш бүлмәһенә инеп китә. Суд киткәс, залда тыңлап ултырыусылар:

– Хәҙер судта бер зиһенле кеше бар икән. Шулай булғас, суд бөтөнләй икенсе төрлө бара. Элек ғәйепләнеүсене, һорап-нитеп тормайынса, атырға, аҫырға хөкөм итә торғайнылар, – тип шатланалар.

Кәңәш бүлмәһендә һабансынан вәзиргә әйләнгән кеше һөйләй.

– Өс шаһит өс төрлө һөйләне. Малайҙы үлтереүҙә ғәйепләнеүсе һис ғәйепле түгел. Уға бер ҙә юҡҡа бысраҡ ташлағандар, – ти.

Суд сығып, ҡарар уҡыла. Ғәйепләнеүсе ҡотҡарыла, кешегә бысраҡ ташлағанға күрә, судҡа биреүсегә, шаһит булып килеүселәргә штрафтар һалына.

Халыҡ шатланып таралып китә. Шулай итеп, батшаның ҡыҙы судтың бөтә эшен үҙгәртеп ебәреүгә сәбәпсе була. Һабансы дөрөҫ хөкөм итеүсе ышаныслы вәзиргә әйләнә.

## 49. Аҡыллы батша

Борон заманда ҡара нуғай тигән бер халыҡ булған. Быларҙың шундай ғәҙәте бар ине, ти. Батшалары ете йыл батшалыҡ иткәндән һуң, уны бер киң даръя аръяғына, кеше йөрөмәй

торған бер утрауға сығарып ташлайҙар ине, ти. Донъяла нисә төрлө бәлә булһа, ул утрауҙа шуның бөтәһе лә бар ине, ти. Унда ташлаған әҙәмде йылан сағып, айыу, бүре ашап бөтөрә икән. Батшаларын алып барып ташлап ҡайтып килгәндә, иң әүәл кем осрай, был халыҡ шуны тағы ете йылға батша итеп ҡуя икән.

Шулай бер саҡ нәүбәттәге батшаларын сығарып ташлап ҡайтып килә ятһалар, бер әҙәм килә, ти. Туҡтаталар быны, һорашалар:

– Һин кем?

– Мин йәшем уҙған бер ҡарт әҙәм.

– Беҙ һине батша итеп ҡуябыҙ. Ғәҙәтебеҙ шулай.

Ҡарт ҡаршы тора алмай. Быны батша яһап ҡуялар, туй, байрам үткәрәләр.

Ҡарт шулай бер-ике йыл тәхеттә ултыра. Шунан, илендәге ҡартыраҡ кешеләрҙе саҡырып, һораша башлай.

– Ниңә һеҙ батшағыҙҙы шулай алама ергә алып барып ташлайһығыҙ? – ти.

– Ата-бабаларҙан ҡалған ғәҙәт шулай, – тиҙәр былар.

Шунан был уйға ҡала: «Ете йыл үткәс, был минең башҡа ла төшәсәк бит», – ти. Шунан был бик ҙур кәмә эшләтә. Бик оҫта кешеләрҙән бер мең халыҡты алып, даръя аръяғындағы теге утрауға алып сыға ла, утрауҙы сүп-сарҙан, әҙәмгә зарар итә торған йылан-саян затынан, һәр төрлө йыртҡыстарҙан таҙарттыра. Шунан һуң уртаһына ғына бер һарай һалдыра башлай. Баҡсалар яһата был. Һарайҙы һалдырып, тағы батшалығына ҡайтып, ете йыл тулыуын көтә башлай.

Был батша үҙе бик ғәҙел генә хөкөм йөрөткән икән. Халыҡ быны бик яратҡан. Батшалыҡтан төшөр мәл еткәс, был ҡарт ил халҡын үҙе саҡыртып ала ла әйтә:

– Йә, уландар, ғәҙәтегеҙҙе атҡарығыҙ. Мине теге утрауға сығарып ташлағыҙ. Мин әҙер, – ти.

Халыҡ өндәшмәй.

– Минән берәй йәбер-золом күргән булһағыҙ, бәхилләшәйек, – ти. – Хушлашайыҡ. Яҡшы ғына айырылышайыҡ, – ти был.

Шунан халыҡ быны ақылына таң ҡалып ҡарап тора ла:

– Был ҡарт бик аҡыллы булды, үлгәнсе батшабыҙ шул булһын, – тип быны кире батша итеп ҡалдыралар. Теге ҡарт, үлгәнсе, батша булып, ғәҙел хөкөм итеп тора. Утрауҙағы һарайҙы тағы ҙурайта. Унда яңы ҡала ҡороп, батшалыҡты шунда уҡ күсереп ҡуя.

Әҙәмде әҙәм иткән аҡыл булыр, хур иткән – наҙанлыҡ булыр.

## 50. Бөкрө

Борон заманда бер бөкрө булған. Был кешенең ғаиләһе бик ҙур булған. Ә үҙе эшләй алмаған. Шунлыҡтан улар аслы-туҡлы ғына көн итәләр икән. Был кешенең торған вәләйәтендә* «эшләмәгән кешеләрҙе бынан һөрөргә» тигән әмер сыға. Был бөкрө ағай, нимә эшләһен, – китә. Диңгеҙ менән китеп бер вәләйәткә барып сыға. Бында уны тотоп алалар ҙа батшаға илтеп бирәләр.

– Һин ниндәй кеше? – тип һорай унан батша.

– Бына мин шундай-шундай кеше, – ти Бөкрө, – үҙ илемдә эшкә ашманым, – ти, – шуға күрә вәләйәтемдән һөрҙөләр, – ти.

Теге батша быға:

– Улай булғас, – ти, – минең ярлыларҙы ашата торған ашхана бар, – ти, – шунда ғаиләң менән туҡланып торорһоң, – ти.

– Юҡ, – ти Бөкрө, – улай түгел, – ти. – Мин унда бушҡа ашап йөрөмәйем, – ти. – Һин миңә әҙәм эшләй алмаған эш бир, мең алтын түлә, – ти.

– Туҡта, мин һанаттарымды йыйып кәңәшләшәйем улайһа, – ти теге батша.

Шунан ул тиҙ генә һанаттарын йыя ла уларға:

– Бына шундай-шундай эшкә ашмаған бер бөкрө бүтәндәрҙең хәленән килмәгән эш һорай, мең алтын түлә, тип әйтә, – ти.

Шунан бер һанаты әйтә:

– Әйҙә, беҙ уға шундай эш бирәйек: ул бер ай буйы, күҙен дә йоммайынса, һине ҡарауыллаһын, булдыра алмаһа, ҡыуып ебәрербеҙ, – ти.

Башҡа һанаттар ҙа, батша ла был тәҡдимде яҡшы тип ҡабул ҡыла, Бөкрө лә быға риза була:

– Әйҙә һуң, көнө-төнө йоҡламай, батшағыҙҙы ҡарауыллап ҡарайым, – ти.

Шунан тотона ул батша һарайын ҡарауылларға. Көнө-төнө ҡарауыллай, бер ҙә йоҡламай. Ун биш көндәй ҡарауыллағас, батша: «Туҡта, мин быны һынап ҡарайым әле. Ысынлап та тоғромо икән?» – тип бер хәйлә уйлап таба. Ул хәйлә ҡалай булған, әйтеп тормайым – үҙегеҙ төшөнөрһөгөҙ.

Бер ваҡыт батша йоҡлап ятҡан саҡ була, шунда сәхрәлә ыҙғышҡан тауыш сыға. Батша уяна ла Бөкрөгә:

– Йә, барып бел әле, ниндәй ыҙғыш икән был ҡараңғы төндә, – ти.

Был тыңлай батшаның һүҙен, китә. «Барырмы шул ыҙғыш сыҡҡан урынға, әллә юҡмы?» – тип батша, йәшеренеп кенә, бының артынан төшә.

Ҡарауылсы барһа, күрә: ыҙғыш тип барған урынында, айҙай балҡып, бер ҡыҙ ултыра.

– Был ниндәй тауыш? – тип һорай Бөкрө.

Ҡыҙ:

– Мин һинең батшаңдың ғүмере. Бына һинең батша үләсәк, шуға ҡысҡырам, – ти.

Ҡарауылсы:

– Мөмкинлек бармы һуң батшаның ғүмерен оҙайтырға? – тип һорай.

– Мөмкинлек бар, – ти ҡыҙ. – Үҙеңде ҡорбан итһәң, ғаиләңде ҡорбан итһәң, батшағыҙҙың ғүмере оҙайыр, – ти уға ҡыҙ.

– Тороп тор, – ти уға Бөкрө, – мин ҡайтып өйҙәгеләрҙән рөхсәт алайым да батшаның ғүмерен һаҡлап ҡалайым.

Батша, әлбиттә, быларҙың һөйләшкәндәрен бөтәһен дә ишетеп, тыңлап тора. Бөкрө ҡайта ла өйҙәгеләренә әйтә:

– Бына эш шулай. Бөгөнгө көндә батшаның ғүмере бөттө. Мин инде бөкрө. Барыбер эшкә ашмайым. Мин үлһәм, һеҙгә лә рәхәт көн юҡ. Әйҙә, йәшәгән батша йәшәһен, – ти.

Ғаиләһе риза була быға. Быны тыңлап торған батша тынысла磨ып, ҡайтып китә.

Бөкрө теге ҡыҙ янына бара.

– Мин үҙем дә, ғаиләм дә риза. Ҡойондоҡ, таҙарындыҡ, рәхим ит, йәнебеҙҙе ал, – ти.

Ҡыҙ:

– Инде һинең дә, ҡатының, бала-сағаңдың да ғүмере оҙайҙы, батшағыҙ ҙа иҫән ҡалды. Бар ҡайт, һәйбәт кенә эшлә, тыныс ҡына йәшә, – ти уға.

Бөкрө был ҡыҙ янынан ҡайтып китә, таң алдынан батша эргәһенә килеп инә.

– Ҡайҙа булдың, нимә бар? – тип һорай батша Бөкрөнән.

– Ана бер яман ҡатын менән ире ыҙғышҡан икән, шуларҙы килештереп килдем, – ти уға Бөкрө.

Иртәгеһенә батша тора ла үҙенең һанаттарын йыя.

– Бына беҙ, ул тәү килгәндә, эшкә ашмаған кеше тигәйнек. Был кеше минең дә, үҙенең дә ғүмерен оҙайтты. Мин уны үҙемә урынбаҫар итеп алам, ғүмер буйына лайыҡлы булып торһон, – ти.

Әле лә теге Бөкрө шул эшендә, ти. Батшаның урынбаҫары булып, ғәҙел хөкөм ҡылып йәшәп ята, ти.

## 51. Төш һөйләмәҫ кинйә ул

Борон бер ҡарт менән әбей йәшәгән, ти. Уларҙың өс улы булған, ти. Былар үҙ ғүмерҙәренә фәҡирлек менән көн иткәндәр, ти. Уларҙың бер генә кәзәһе булған. Бер көндө атаһы әйткән, ти:

– Инде, балалар, мин үҙ ғүмеремә бәхет таба алманым. Һеҙ үсөгөҙ, өс яҡҡа сығып, бәхет эҙләп ҡарағыҙ. Тәүҙә фәлән ергә барып йоҡлап, төш күреп ҡайтығыҙ. Ҡайтыуығыҙға кәзәмде

һуйып, аш бешереп әҙерләп торормон, – тип әйткән, ти.

Шунан өс улы өс яҡҡа сығып киткән, ти. Китеп бара торғас, бер һыуға барып туҡтағандар, ти. Береһенең дә ризығы булмаған, һыу эсеп, шунда йоҡлағандар, ти. Иң оло улы төш күргән, икенсеһе лә төш күргән, ти. Ятып йоҡлап, төш күргәс, был өс ағай ҡайтырға сыға.

– Йыуыныгыҙ ҙа инегеҙ, инәйегеҙ аш төшөрә, – тип ҡаршылаған, ти, ҡарт.

Былар аҙаҡҡы кәзәләрен һуйып, аш бешереп, улдарын көтөп ултырғандар, ти. Малайҙары урынға түңәрәп ултырғас, ҡарт:

– Йә, ниндәй төштәр күрҙегеҙ? Һөйләп ебәрегеҙ әле, – тигән. Иң оло улы һүҙ алды, ти.

– Атай, мин бойҙай үлсәнем. Үлсәнем-үлсәнем – үлсәп бөтә алманым. Шул тиклем бойҙай күп ине, кисеп йөрөнөм, – тип әйтте, ти.

– Эй, улым, бай булырһың, бәхетеңде тапҡан икәнһең, – тип әйткән дә, ти, атаһы, икенсеһенән:

– Улым, һин ни төш күрҙең? – тип һораған.

– Атай, мин алтын үлсәнем. Үлсәнем-үлсәнем – үлсәп бөтөрә алманым, ян-яҡҡа тараттым, – тип әйткән, ти, уныһы. Уныһына ҡарт:

– Һин батша булырһың, – тип әйткән дә, ти, өсөнсөһөнән һораған:

– Йә, кинйә улым, һин ни төш күрҙең?

– Атай, мин төш күрҙем. Төшөмдө һөйләмәйем.

– Улайһа, һиңә мин ашарға бирмәйем!

– Бирмәһәң бирмәҫһең, һөйләмәйем!

Шунан ҡарт, йәне көйөп, кесе улын ҡыуып сығарып ебәргән, ти. Бер ризыҡһыҙ көйөнә егет сығып киткән. Киткән, киткән. Китеп бара торғас, бер ҡалаға барып еткән. Быны бер көтөүсе күреп, йәлләп, ашатҡан, эсергән, ти. Шунан:

– Нишләп улайтып йөрөйһөң? – тип һорай ҡуйған.

– Оло ағайым бер төш күрҙе, бәләкәйе бер төш күрҙе. Улар атайыма төштәрен һөйләнеләр, мин һөйләмәнем. Шуға атайым мине ҡыуып сығарҙы, – тип әйткән, ти, яуабында теге.

Кинйә малай һыҙғырырға шәп булған, ти. Бер һыҙғырып ебәрһә, бөтә ҡоштар бының эргәһенә йыйылалар икән. Көтөүсе алып ҡайтҡас, һыҙғырып ебәргән икән, шәмдәр һүнгән, бар булған ҡоштар йыйылған, икенсе һыҙғырған икән, шәмдәр янған, ҡоштар таралған.

Ҡала оло бит инде, халыҡ күп. Хәбәр шунда уҡ таралған, ти. Быны бер бай саҡырып алдырған.

– Нишләп былай йөрөйһөң?

– Атайыма төшөмдө һөйләмәнем, шуға күрә атайым ҡыуып сығарҙы, – тине, ти, егет.

– Төшөндө һөйлә миңә!

– Һөйләмәйем. Атайыма һөйләмәгән төшөмдө ят кешегә һөйләй буламмы? Һөйләмәйем!

Ҡарышҡас, бай быны ябырға ҡушҡан. Егетте алып сыҡҡандар. Алып сыҡҡандар икән, был һыҙғырып ебәргән. Һыҙғырып ебәрһә, байҙың ихатаһына ҡоштар килеп тулған, ти. Байҙың ҡарындашы был хәлде күреп, аптыраған да шул күреүҙә үк егетте яратҡан да ҡуйған, ти.

Бер көндө бай ҡатыны менән ҡунаҡҡа киткән. Ҡунаҡҡа китеп, бер нисә көн үткәс, «бабай бәләгә тарыны» тигән хәбәр килеп төшкән. Ҡыҙ нишләргә белмәй, аптырай, ҡайғыра. Егет ҡыҙҙы зиндан тәҙрәһе янына саҡырып ала ла:

– Бир ун кеше, мин шунда барам, ағайыңдың хәленә инәм, – тип әйткән, ти.

– Ҡасмаҫһыңмы?

– Юҡ, ҡасмам.

Ҡыҙ тотҡон егетте сығарған да ебәргән. Бәләгә тарыған ергә барһа, бай үлем хәлендә ята, ҡатыны күптән үлгән. Егет байҙы ҡотҡарып, алып ҡайтты ла шым ғына урынына барып боҫто, ти. Бай үҙе ябып ҡуйған егет икәнен күҙ алдына ла килтермәй бит инде.

Ҡайтып, рәтләнгәс, ҡарындашына бай:

– Мине бер егет ҡотҡарып алып ҡайтты. Әгәр шундай егет осраһа, һине шуға һүҙһеҙ бирер инем, – тип әйтте, ти.

– Ағай, һине ҡотҡарған кеше теге төшөн һөйләмәгән егет булһа, нишләр инең?

– Ул таш келәттә тотҡонда ята ла инде. Ни хәл сыҡһын ул унан?

Ҡарындашы һөйләп биргән. Шунан бай риза булып, ҡыҙҙы шул егеткә биргән. Биргән дә үҙе күп тормай донъя ҡуйған. Үлер алдынан шаһиттар саҡыртып, геүаһландырып, бар мөлкәтен кейәүе менән ҡарындашына ҡалдырыуын әйтеп васыят яҙҙырған, ти.

Берҙән-бер көндө егет кәләше менән ата-әсәһенең хәлен белеп килмәксе булды, ти. Ҡайтһа, ике ағаһы байыу түгел, аталарының елкәһендә йәшәп яталар, ти. Хәл-әхүәл белешкәс, егет:

– Һөйләмәгән төшөм ошо бай килеренегеҙ ине, – тип әйтте, ти. Ата-инәһе, үткән эштән ошо ише төш яҡшы, тип, улдарын ҡунаҡ итеп, аҙаҡ үҙҙәре уларға күсенеп барып, бөгөн булһын өргә-бергә ҡыуанышып йәшәп ятыуҙары, ти.

## 52. Кинйә малайҙың төш күргәне, төшө алдына килгәне

Элек бер бай булған. Шул бабай төш төшөртә торған* өй эшләтәм тип, айырым өй эшләткән дә балаларын шунда ҡун-

дырған. Тәүҙә оло улын йоҡлатҡан. Шунан иртәнсәк һорай икән бынан:

– Йә, балам, ни төш күрҙең?

– Һо-о, атый*, мин шул хәтле һәйбәт төш күрҙем. Иген сәскәнбеҙ, тим, бик күп иттереп, осонан-осо ла күренмәй: шул хәтле ныҡ үҫкән, урожай көслө. Быны нисек йыйып, ҡайҙа һалып бөтөрбөҙ икән, тип әйтәм икән, тим, – тип әйтә, ти.

– Һай, балам, байығанһың икән былай булғас, – тип ҡарт был улының арҡаһынан һөйөп ебәрә.

Икенсе көндө икенсе улын йоҡлата. Икенсе улы яңы өйҙә йоҡлай ҙа, иртәнсәк атаһы быны саҡыртып алып һорай.

– Йә, балам, ниндәй төш күрҙең?

– Һи-и, атый, мин шундай төш күрҙем: һин бик ҙур магазиндар эшләткәнһең, ағайымдың атын һатҡанбыҙ ҙа шул аҡсаға эсе тулы тауар алғанбыҙ икән, тим. Мин һатыу итеп торам икәнмен, тим, – тип әйтә, ти, уртансы улы.

– Афарин, улым! Һин дә байыға икәнһең, былай булғас, – тип арҡаһынан һөйөп ебәрә атай кеше.

Өсөнсө көн бабай иң кесе улын, Таҙҙы, йоҡлата. Йоҡлата ла иртәнсәк саҡыртып ала.

– Йә, балам, ниндәй төш күрҙең?

– Бер ниндәй ҙә төш күрмәнем.

– Күргәнһең бит, һөйлә.

– Юҡ, күрмәнем.

– Күргәнһең бит!

– Юҡ!

Бабай шул урында кесе улын бәргеләп, һуҡҡылап:

– Әйт, һөйлә төшөңдө! – тип йәнә һорай.

Шунан бабай Таҙҙы туҡмап-туҡмап, атының ҡойроғона тағып һөйрәтеп ауыл осона алып сығып китә. Шунан китеп барһа, көймәләргә ултырып хан китеп бара.

– Бабай, ҡайҙа алып китеп бараһың быны?

– Үлтереп ташлайым.

– Ниңә үлтерәһең? Ниңә язалайһың?

– Һуң, төшөн һөйләмәй бит! Бүтән балдар һөйләне, быныһы – юҡ.

– Улай булғас, һат һин миңә уны.

– Һатам. Ал, әйҙә.

Бабай кесе улын шулайтып һатып ебәрә. Хан быны алып ҡайтып эшкә ҡуша. Шунан бер аҙҙан һорай хан:

– Һин ниндәй төш күргәйнең? Һөйләп бир әле. Атайыңа һөйләмәгәсең, һөйлә миңә.

– Атайыма һөйләмәгән төштө һиңә һөйләп торасағым да юҡ, – ти, Таҙ әйтә.

– Мин һине зинданға ултыртам, – ти, хан әйтә.

Элек кешене язалау өсөн соҡор ҡаҙып, шунда төшөрөп ултыртҡандар. Был ултыра. Хандың бер ҡыҙы була. Йәш егетте

был ҡыҙ йәлдәй бит. Ата-инәһенән урлап бер икмәк менән бер көршәк һөттө бау менән төшөрә икән быға. Егет шуның менән ризыҡланып тора. Атаһы ризыҡ бирһә, бирә, бирмәһә – юҡ.

Бер ваҡыт хан һарайында тауыш ҡуба. Ошо мәлдә генә теге кыҙ егеткә аҙыҡ алып барған була. Егет һорай:

– Был ниндәй тауыш? – ти.

– Бына батшанан ике бысаҡ килгән. Шул бысаҡтың ҡайһынныһы ҡол бысағы, ҡайһыныһы бай бысағы, шуны айырып бирергә кәрәк, тип ебәргән. Халыҡ йыйылған. Икеһе лә бер иш бысаҡ, береһен-береһенән айырырлыҡ түгел. Шуларҙы айыра белмәй шаулашалар әле, – ти ҡыҙ.

– Һи, уны ни айырыуы нимә ул. Һәр береһен утҡа тотоғоҙ. Бай бысағынан май сығыр, ә тегеһенең тотҡаһы яныр, – ти.

Шунан ҡыҙ бысаҡтарҙы, Таҙ әйткәнсә, утҡа тота. Утҡа тотһа – бер бысаҡтан май сыҡты, ти, икенсеһенең тотҡаһы көйҙө, ти. Шунан ҡыҙ атаһына бысаҡтарҙың ҡайһыныһы кемдекелеген айырып күрһәтә лә:

– Атый, шулай тип яҙып ебәр, – ти.

Хат яҙып ебәрә. Оҙаҡ та ваҡыт үтмәй: «Дөрөҫ тапҡанһығыҙ», – тип батшанан ҡағыҙ килә.

Егет зинданда һаман ултыра, ҡыҙ, йәшереп-боҫороп ҡына, аҙығын ташып йөрөй. Шул арала әлеге батша тағы ханға мәсьәлә ебәрә: «Ике күгәрсен ебәрермен. Айырып ебәр. Шуларҙың ҡайһыныһы ҡарт күгәрсен, ҡайһыныһы йәш күгәрсен». Хан йәнә кеше йыя. Тегеләрҙән һорап ҡарай хан – берәүһе лә белмәй, ти. Береһе әйтә:

– Бынауы булырға тейеш, – ти.

Икенсеһе:

– Юҡ, ошоноһо булыр, булһа, – ти.

Ҡыҙ тағы аҙыҡ алып барған саҡ була. Теге егет йәнә һорай инде:

– Ниңә зыуҙашалар? Нимә булған?

– Батша күгәрсендәр ебәргән. Йәше менән ҡартын айырһын, тип әйткән, ти, – тип әйтә ҡыҙ.

– Һи, уны ғына айырыуы ни! Ал да һин уларҙы, ҡапҡа башына ултырт. Үҙең ҡарап ҡына тор. Оло күгәрсен ҡапҡа башында елдә оҙаҡ ултырмаҫ, хәҙер үк төшөр, йәше ултырып ҡалыр.

Ҡыҙ, егет әйткәнсә, ултырта. Күгәрсендәрҙең береһе оҙаҡ ултырмай, төшә. Төшкәнен атаһына күрһәтеп әйтә:

– Бына быныһы оло булырға тейеш, – ти. – Ана тегенеһе – йәш.

Шулай яҙып, күгәрсендәрҙең тояҡтарына бәйләп ебәрәләр. Тегенән, «Дөрөҫ» тигән яуап килә.

Шунан аҙмы-күпме торғас, батшанан йәнә лә хәбәр килә. «Шундай, шундай эш бар. Тиҙ арала килеп ет», – тигән була хатта. Шунан хан әйтә ҡыҙына:

– Ҡыҙым, тегеләрен белдең. Әйҙә, китәйек инде шунда, – ти.

– Атый, уны мин белмәнем бит һуң, – ти ҡыҙы.

– Кем белде һуң, һин белмәй.

– Ана соҡорҙа ултырған егет белде.

– Нисек?

– Мин уға бара торғайным. Шунан ул: «Ниндәй зыуҙыҡ? – тине. – Нишләйҙәр?» – тине. Шунан мин, шулай-шулай, тип әйтеп бирҙем. Шунан ул нишләргә икәнде өйрәтте. Шунан хан егет янына бара ла хәлде аңлатып әйтә:

– Әйҙә әле, минең менән барайыҡ, – ти шунан.

– Нишләп мин унда барайым, ти. Мин бер һатылған ҡол. Өҫтөмдә лә юҡ минең. Хәҙер мин ябыҡҡанмын.

Шунан хан тегене мунса керетеп, өҫ-башын алмаштырып:

– Әйҙә, китәйек инде, – ти.

– Әллә. Барырғамы, юҡмы? Бир миңә эш, – ти.

Ярар, күнеп, баралар тегендә. (Әкиәт тек әкиәт инде!) Өс ҡыу баш йөрөй, ти. Туҡ-туҡ итеп сығып йөрөйҙәр. (Үлгәс, йөрөй торғаны бармы инде унын!) Шунан батша әйтә:

– Килдеңме?

– Килдем.

– Бына шуларҙан айырылып булмай бит инде. Ошоларҙы, бер нәмә итеп, хәл итергә кәрәк ине. Былар ялыу менән килгәндәр. Береһе үлгән дә, икенсеһе унын ҡатынын алған. Унан өсөнсөһө алған. Шул ҡатынды береһе әйтә, минеке, ти, икенсеһе әйтә: «Юҡ, минеке», – ти. Бына шуларҙы айырырға кәрәк. Әйҙә шуны хәл ит, – ти ханға.

– Юҡ, мин быны хәл итә алмайым. Итһә, ошо егет хәл итер.

Шунан теге егет әйтә:

– Мин ни эшләтәйем уны. Мин ни һатылған бер ҡол. Һеҙҙең берегеҙ батша, берегеҙ хан. Минең хөкөм йөрөмәҫ бында...

– Минең матур ғына ҡыҙым бар. Хәл ит. Бирәм шуны. Өҫтәүенә ярты байлығымды алырһың. Мин үҙем дә ҡартайғанмын. Ҡотолайымсы шуларҙан, – ти, батша әйтә. – Батшалығымды ла бирермен, әйҙә, хәл ит кенә, – ти.

Хан әйтә:

– Ана, мин дә үҙен яратып йөрөгән ҡыҙҙы бирәм. Малын да бирермен, эй бүтәнен дә. Тик шуны хәл итешеп кенә ебәр.

Шунан был егет риза булып, тегеләрҙе ҡарап, икеһен бер ергә ултырта, береһен яңғыҙ ултырта ла ошолай итеп, усынусҡа ҡуйған килеш араларына ҡулын тығып ебәрә лә ике яҡҡа айыра һелтәп ебәрә – туҡ-туҡ итеп, икеһе бер ергә, береһе яңғыҙ сығып китә. Шунан аҙаҡ тегеләр дәғүәләшеп батшаны борсоп йөрөмәҫ була.

Егет батша ҡыҙын да, хан ҡыҙын да ала. Ике ҡатын менән йәшәп ята. Һәйбәт кенә йәшәп ята. Батшаның ҡыҙынан ҡыҙы тыуа, хандың ҡыҙынан улы була.

Бер ваҡыт был салҡан ятҡан да батша ҡыҙынан тыуған ҡыҙын түшенә баҫтырып уйнатып ята. Уйнатып ята торғас, теге ҡыҙы кесекәй итә лә ебәрә. Кесәү битенә лә сәсрәй бының. Шул ерҙә был шарҡылдата көлөп ебәрә. Көлөп ебәргәс, батша ҡыҙы ҡутарғансы тартып* ала ҡыҙын.

– Мин ҡыҙ тапҡас та! Минең ҡыҙымдан көлә! Теге бисәһенең улы булғас, ни! – тип, сығып китеп, атаһына барып әйтә:

– Атый, бына шулай ҙа шулай. Кейәүең минән көлә, – ти.

Шунан батша килә.

– Кейәү, ниңә ыҙғышып киттегеҙ әле?

– Нишләп ыҙғышайым мин? Ыҙғышмайымсы?

– Бына шулай тип әйтә бит. «Көлә. Мәсхәрә итә минең баламды», – ти бит.

– Көлә? Мин унан көлгәндән түгел, үҙемдең төшөм иҫемә төшкәндән көлдөм, – ти.

– Ниндәй төш ул?

– Атайыма төшөмдө һөйләмәгәнгә, атайым теге ханға һатып ебәрҙе. Шул арҡала, бында һиңә кейәүмен. Ана шул төш ул.

– Һинең ата-инәйең бармы ни?

– Бар. Булмаҫҡа ни!

– Ниндәй төш күргәйнең? Һөйлә әле миңә.

– Һөйләйем инде. Хәҙер һөйләргә була. Мин төшөмдә шулай тип күрәм, – ти егет. – Атайым ҡулыма һыу ҡойоп тора. Инәйем таҫтамал тотоп тора, – ти. – Йылы ғына һыу, – ти. – Ана шул йылы һыу менән бит йыуҙым, – ти. – Ул төштө мин ни тип һөйләйем инде уға? Тегеләр һымаҡ алдап һөйләй алманым бит мин, – ти. – Әгәр һөйләһәм дә, әллә нимә тиер ине әле ул атайым миңә, – ти. – «Бындай төш – яҡшы төш түгел уға», – тиер ине. Фәлән дә фәсмәтән тиер ине. Ағайҙар, бай булдыҡ та фәлән-төгән, тип һөйләнеләр, – ти. – Мин улай тип һөйләй белмәнем, – ти.

– Һин, улай булғас, атайыңа барып ҡайт, – ти батша.

– Ярар һуң. Батшаның һорағаны – фарманы.

Батша тегенең атаһына хәбәр ебәрә. Улың килә, тимәй, батша килә, тип хәбәр итә.

Был барып төшә. Күрергә тип күп кеше йыйыла. Шунан кеше сығып бөткәс, ҡул йыуырға булалар. Атаһы йылы һыу ҡойолған еҙ ҡомған менән ҡул йыуҙырып тора, әсәһе таҫтамал тотоп тора. Шул ерҙә илап ебәрә егет.

– Ниңә илайһың? – тиҙәр тегеләр.

– Илайым шул. Мине, төшөн һөйләмәй, тип яҙаланығыҙ. Төшөм бына шул ине минең. Төшөмдә инәйем таҫтамал тотоп тора ине, һин һыу ҡойоп тора инең, атый. Ана шуның өсөн мин ул төштө һөйләмәнем.

Шул ерҙә күмәкләшеп илашып, былар, аталы-уллы аңлашып, киренән яраштылар, ти. Шунан егетте бик яҡшылап ҡу-

наҡ итәләр, танһығы ҡанғас, егет ата-инәһен алып, кәләштәре янына ҡайтып китә.

Бай булдыҡ, тип алдап төш һөйләгән ағайҙарының бер нәмәләре лә юҡ, ти. Аталарына иген сәсешеп, мал ҡарашып ҡына йән аҫрап яталар ине, ти. Уларҙы ла алып ҡайтып китә егет. Бисәләре янына ҡайтһа, ҡайны ҡарт уны ысынлап та батша итеп ултыртып ҡуя. Шунан егет үҙе хөкөмөн йөрөтөп, гәҙел батшалыҡ итеп бөгөн булһын йәшәп ята, ти.

*Әкиәтем китте ары,*
*Үҙем киттем бире.*
*Сыуал артында сей тире.*
*Танһығым ҡанманы, тиһәң,*
*Һөйләрмен әле кире.*

## 53. Батшаның ҡырҡ төш юраусыһы менән бер вәзире, йәнә килеп күрәҙәсе малай

Бер ҡарт ялан буйлап китеп барғанда бер ҡыу башҡа тап була. Алып ҡараһа, маңлайында бер яҙыу бар, ти. Унда: «Был баш арҡаһында ҡырҡ бер кеше үләсәк», тип яҙылған була. «Ҡайһылайыраҡ яуыз баш. Кешеләргә зарары теймәһен, юҡ итәйем», тип ҡарт уны өйөнә алып ҡайта. Башты яндырып, көлөн бер сепрәккә төрөп, һандығының төбөнә һалып ҡуя.

Был ҡарттың Гөлфәрәх исемле ҡыҙы булған, ти. Ул көн һайын атаһы өйҙә юҡ саҡта һандығын аҡтарып сыға икән, ти. Бер көндө гәҙәте буйынса һандыҡты аҡтара торғас, иң төптә ятҡан әлеге төргәкте килтереп сығара. Был ниндәй төргәк икән, тип, Гөлфәрәх уны сисеп ҡарай. Сисһә, он кеүек нәмә. Гөлфәрәх уны усына һалып, ыуғылай, ни икәнен белә алмағас, тәмләп ҡарай ҙа кире һандыҡ төбөнә һалып ҡуя.

Айҙар үтә. Бына бер заман атаһы Гөлфәрәхтең ауырға ҡалғанын күрә лә аптырап:

– Ҡыҙым, мин һине кейәүгә биргәнем юҡ бит әле, ни эшләп улай? – тип һораны, ти. Гөлфәрәх һандыҡ төбөндәге көлдө тәмләп ҡарағанын һөйләп бирҙе, ти. Шунан шикләнгәнен әйтте, ти.

Бына бер мәлде Гөлфәрәхтең улы тыуа. Малай бик зирәк булып үҫә. Ун йәшендә ул шундай оҫта төш юраусы булып китә, хатта кешенең ниндәй төш күргәнен әйтер ине, ти.

Шул илдең батшаһының ҡырҡ төш юраусыһы була. Улар бөтәһе лә батша һарайында йәшәй. Бер ваҡыт бер әбей өйөнөң дүрт мөйөшөндә дүрт йылан ята, улар бик уҫал итеп ыҫылдайҙар икән тип төш күрә, төшөнән ҡурҡҡан әбей иртәгеһен, бер ҡаҙ бешереп алып, батшаның төш юраусыларына китә. Малай әбейҙең ниндәй төш күргәнен белә лә уның ҡаршыһына сығып:

– Әбей, һин төшөңдә дүрт мөйөшөңдә дүрт йылан күрҙең. Был яманға түгел, яҡшыға. Өйөңдөң дүрт мөйөшөнә алтын күмелгән. Әйҙә ҡаҙып ҡарайыҡ. Яртыһы һиңә, яртыһы миңә булыр, – ти. Ләкин әбей уға ышанмай. Юлын дауам итә. Малай, үҙенә ышанмағанлыҡтарын күргәс, тиҙ генә ҡағыҙ яҙа ла әбейгә һиҙҙермәйенсә генә уны ҡаҙ эсенә һала.

Әбей барып, ҡырҡ төш юраусынан төшөн юрата. Улар яман юрайҙар. Өйөн ташлап китергә кәңәш бирәләр. Әбей сығып киткәс, ул ҡалдырған ҡаҙҙы ашай башлайҙар ҙа эсенән ҡағыҙ тартып сығаралар. Унда: «Һеҙ әбейҙең төшөн насарға юраныгыҙ, ысынында ул – яҡшыға. Өйөнөң дүрт мөйөшөндә алтын күмелгән» тип яҙылған була. Төш юраусылар тикшереп ҡарарға булалар. Әбейҙең өйөн емереп, мөйөшөн ҡаҙалар ҙа алтын табып алалар. Шунан малайҙан ҡотолмаҡсы булалар. «Һине батша саҡырта», тип алдап саҡыртып алалар ҙа, ҡырҡ алтынға уны үлтерергә бер кеше яллайҙар. Был кеше үлтерергә йыйынғанда, малай көлөп ебәрә. Теге кешенең:

– Ниңә көләһең? – тигән һорауына былай тип яуап бирә, ти:

– Һин бөгөн мине ҡырҡ алтынға үлтерһәң, иртәгә йөҙ алғындан буш ҡалырһың, – ти.

Теге кеше уны үлтермәй, бикләп ҡуя. Шул кисте батша төш күрә. Имеш, ул йылға уртаһындағы күперҙә тора. Шул ваҡыт уға ҡырҡ бер йылан ташланып үлтерергә әҙерләнгәндә, бер күгәрсен ҡотҡарҙы, ти. Уяныуы була – батша төшөн онота ла ҡуя. Шунан төш юраусыларын саҡырта ла шарт ҡуя:

– Әгәр өс көн эсендә мин күргән төштө белеп, уны юрамаһағыҙ, үҙегеҙҙе үлтерәм, – ти.

Төш юраусылар, батшаның ниндәй төш күргәнен белә алмай, аптыраған мәлдә генә теге малай иҫтәренә төшә лә, бәлки үлтереп өлгөрмәгәндер әле, тип, яллаған кешегә баралар. Был кеше төш юраусыларға малайҙы кире йөҙ алтынға һатып ебәрә. Төш юраусылар малайҙы батшаға алып баралар. Ул батшаның ниндәй төш күргәнен һөйләп бирә.

– Батшам, төшөңдә күргән ҡырҡ бер йыландың ҡырҡы – һинең ҡырҡ төш юраусың, береһе – вәзирең. Улар һине үлтереп, батшалыҡты үҙҙәренә алырға йыйыналар. Һине ҡотҡарған бер күгәрсен – мин, – тип, малай батшаның төшөн дә һөйләгән, уны юрап та биргән. Батша шунда уҡ үҙенең ҡырҡ төш юраусыһы менән вәзирен язалатып үлтертә лә улар урынына малайҙы ҡуя.

Шулай итеп, кеше башына яҙылған һүҙҙәр дөрөҫкә сыға. Шул баш арҡаһында ҡырҡ бер кеше: ҡырҡ бер юраусы, бер вәзир үлгән, ти.

## 54. Көтөүсе батша

Борон заманда Ғәли исемле бер батша булған. Был батша батшалыҡ итә торғас, ҡомһоҙланып китеп, халыҡты бик ыҙалата башлаған, сиктән тыш ауыр һалымдар һалған, ти.

Халыҡ кәңәшләшеп, был батша өҫтөнән ҡағыҙ яҙып, ҙурыраҡ батшаға бер кеше ебәргән. Ғәли батша быны һиҙмәй ҙә ҡалған. Теге кеше ҙур батшаға барып, халыҡтың зарын тапшырып, унан фарман алып ҡайта. Фарманды мөйөш һайын эләләр. Унда: «Ғәли батшаны иртәгеһе көн сәғәт ун икелә аҫмаға», – тип яҙылған булған, ти.

Ғәли батша белмәй әле, үҙенең тәхетендә ултыра бирә. Батшаның бер яҡын вәзире була. Ул Ғәли батша янына керә лә:

– Батшам, һин нимә ишетәһең? – ти.

– Бер нәмә лә ишетмәйем. Ни булған? – ти батша.

– Һин бер ни белмәй ултыраһың, батшам, һине бит иртәгә сәғәт ун икегә аҫмаға, – ти.

Батша сыға, ҡарай, ысынлап та шулай. Батша ҡалтыранып китә. Ни эшләргә? Ҡайҙа барырға? Инде ҡасмаға ғына ҡала.

Батша шул төндә үк ҡасып китә. Үҙе менән бер ни ҙә, хатта ашарға ла, аҡса ла алмай ҡаса. Тик Сәлимә исемле яратҡан ҡыҙын ғына эйәртә. Көнө буйы баралар былар, төнө буйы баралар. Ҡалаларға етәләр, үтеп китәләр. Хәйер һорашып та алалар. Кисә тәхеттә ултыр, бөгөн хәйер һораш. Донъя ни эшләтмәй бәндәһен.

Бара торғас, ҡыҙы менән батша тағы бер ҡалаға барып керә. Шунда урын табып, ҡуналар инде былар. Иртәгеһен баҙарға баралар. Баҙар туп-тулы, һатыусылар ҡумталарын асҡандар. Бер аҙ ашарға табып булмаҫмы, тип, урлашыу яғын ҡарап, теге икәү магазинға керә. Магазин – мануфактура магазины булып сыға. Шулай ҙа бер мөйөштә кәстрүл менән май ултыра икән. Батша кәстрүлде шылдырырға уйлап ынтыла. Шул саҡ быны күреп ҡалалар ҙа ҡыйнап ташлайҙар.

Бер әбей быларҙы ҡыҙғанып, хәйер бирә. «Хәйер һорашып ҡына тамаҡ туйҙырылмаһа инде», – тип уйлай Ғәли батша. Ҡыҙына ла кәңәш итә. Шунан башҡа сараһы ла булмай шул. Эшләр ине – һөнәре юҡ, урлар ине – туҡмайҙар.

Хәҙер былар, хәйер һораша-һораша, ишетмәгән-күрмәгән яҡтарға китеп баралар. Күп бара торғас, бер ауылға барып етәләр. Шунда ситтә генә бер өйгә фатир һорап керәләр. Унда әбей менән бабай ғына тора икән. Әбей менән бабай уларға кәңәш бирә:

– Һеҙ, былай йөрөгәнсе, беҙҙең байға көтөүгә ялланығыҙ. Тамағығыҙ туҡ, өҫтөгөҙ бөтөн булыр, исмаһам, – тиҙәр.

Иртәгеһенә әбей менән бабай, байҙың торған ерен өйрәтеп, быларҙы сығарып ебәрәләр.

Ғәли батша Сәлимәһе менән бай йортона барып керә. Байҙың йөҙ баш һарығы, илле баш һыйыры бар икән. Шуларҙы көтөргә кәрәк була. Инде көтөү көтәләр аталы-ҡыҙлы. Йылдан артыҡ ваҡыт үтеп китә.

Бер саҡ көтөү көткәндә, төш ваҡыты еткәс, Ғәли ҡыҙын йылға буйына һыу алырға төшөрә. Үҙе ут яғып ебәрә. Ҡыҙ һыу буйына төшһә, ҡурҡып китә. Яҡындан ғына офицер кейемендә бик матур бер кеше килә. Ул өйрәк атып йөрөгән икән бында. Егет тә ҡыҙҙы күреп, матурлығына һоҡланып, ашыға-ашыға килә, ти. Сәлимә һыуын сайпылдыра-сайпылдыра атаһы янына йүгереп килә. Егет уның артынан бара. Ата менән ҡыҙ янына килә теге егет, иҫәнләшә, ултыра. Уны-быны һөйләшмәйҙәр. Кем икәнен һорарға Ғәли ҡыймаңы, ти. Теге егет, хәйер итепмелер, бер аҙ аҡса бирә лә китә.

– Был кеше сауҙагәр малайымы икән, батша малайымы икән? Оялып, һораманым да, – ти батша ҡыҙына.

Егет батша улы булған, ти. Сәлимәне күргәс тә, уға күҙе төшә. Ҡайтҡас, был ашамай ҙа, эсмәй ҙә икән. Батша хәүефләнеп:

– Беҙҙең малайға ни булған был? – ти, кеше аша һорашғырып та ҡарай.

Батшаның вәзире:

– Бына, батшам, – ти, – һунарға йөрөгәндә, улың, бер көтөүсенең ҡыҙын күреп, шуға ғашиҡ булған. Атам шул ҡыҙҙы алып бирһен, тип әйтә улың, – тигән.

Батша менән ҡатыны бик аптырашалар.

– Батша була тороп, көтөүсе ҡыҙын алып булмаҫ инде, – тиҙәр. – Беҙгә кемдәр килмәй, – тиҙәр.

Егет:

– Миңә башҡа кәрәкмәй, – ти.

Ата менән әсә, аптырағас, эстәнме, тыштанмы – уныһы билдәле түгел, риза булалар.

Батша:

– Көтөүсе ни ҡыҙын, шатлана-шатлана, биреп ебәрер минең улыма, – ти ҙә, аттар ектереп, көтөүсе янына улы менән яусыһын ебәрә.

Яусы Ғәлигә:

– Бына, – ти, – шундай хәл, – ти. – Күптән түгел һинең ҡыҙыңды бер батшаның улы күргән, ҡыҙыңды ул бик оҡшатҡан, – ти. – Хәҙер һин биреп ебәр ҡыҙыңды батша улына кәләшлеккә, – ти.

Ғәли батша ашыҡмай. Мин көтөүсе, тимәй әле. Ҡыҙын биреү тураһында ла һөйләмәй.

– Ул егеттең, – ти Ғәли «көтөүсе», – ни эше бар һуң? Батша улы булғас ни, ҡалала тик йөрөй торғандыр бит ул? – ти. – Берәй һөнәре бармы һуң уның? – ти.

– Ниндәй һөнәре булһын уның? Батша улы бит ул! Һөнәр нимәгә ул уға? – ти яусы.

– Мин ҡыҙымды бер төрлө лә һөнәр белмәгән кешегә ултыртып ебәрә алмайым. Иң элек егетегеҙ һөнәр өйрәнһен, шунан бында килер, – тигән Ғәли батша.

Егет ҡайтып китә хеҙмәтселәре менән. Ҡайта ла яҡшы атына ултырып сығып китә был. Һөнәргә өйрәнеү урыны эҙләй башлай, ти, хәҙер был. Бер ауылға бара. Унда эшкә өйрәтә торған оҫталыҡ йорто бар икән. Тик унда бай малайҙарын, сауҙагәр балаларын алмайҙар. Ата-әсәһе булмаған ярлы-ябаға ғына һөнәр өйрәнә икән бында. Батша улына дүкәмит алыу ни тора? Дүкәмитте яңынан әҙерләп, ярлы кейемен кейенә лә килә был оҫталыҡ йортона:

– Мине ике көндә һөнәргә өйрәтеп сығар, – ти батша улы хужаға.

– Бер һөнәрең дә булмағас, һине нисек итеп ике көндә өйрәтеп сығараһың? Бер һөнәргә өйрәнеү өсөн генә лә кәм тигәндә ике аҙна ваҡыт кәрәк, – тиҙәр быға.

Егет ике аҙнаға риза була. Өйрәнеп йөрөй был ипләп кенә. Септә һуғырға өйрәтәләр быны. Септә һуғырға өйрәнгәс, яҡшы кейемдәрен кейенеп, ярһып торған атына ултырып, өйгә лә ҡайтып тормай, Ғәли кейәүсе янына килә был.

– Инде бына өйрәндем, – ти. Септәһен күрһәтә.

Шунда ғына Ғәли һөйләшә башлай егет менән.

– Быйдай септәне көнгә күпме эшләргә була һуң? – ти.

– Көнөнә берҙе эшләп була, – ти егет.

– Берәһе бер һум торһа септәнең, тамағығыҙҙы туйҙыра алырһығыҙ, ал ҡыҙымды, – ти. – Тик яландан алып китмә, фатирыма кил, – ти.

Егет «кейәүсе»нең фатирына килә. Йәрәшеп батша йортона китәләр былар. Ғәли «кейәүсе» лә ҡоҙа булып бара. Теге батша Ғәлигә «кейәүсе ҡоҙа» тип кенә өндәшә икән. Ашайҙар, эсәләр ҡоҙалар. Бер-ике стакан эсмәгә, телдәре асылып китә. Ғәли батша үҙенең хәлдәрен һөйләп бирә.

– Мин батшанан кейәүсе булдым, ҡоҙа, – ти.

Теге батша шаҡ ҡата. Кейәүсе ҡыҙы булманы, батша ҡыҙы булып сыҡты бит килен! «Бына мин дә бөгөн батшамын, иртәгә кейәүсе булыуым бар», – тип ҡурҡыуға төшә.

– Ғәли батша бай булһа ла, кейәүен тиккә генә һөнәргә өйрәттермәгән икән. Бөгөн батша, иртәгә әллә кем. Һөнәрле кеше һис ҡайҙа ла юғалмаҫ, – ти.

## 55. Һалдат менән батша

Борон-борон заманда бер ярлы ғына бабай менән әбей йәшәгән, ти. Бер ваҡыт уларҙың бер ир балалары донъяға килгән.

Баланы бик ҡыйынлыҡ менән тәрбиәләп ир еткергәс, батша бойороғо буйынса уны егерме биш йыл хеҙмәт итергә әрмеләргә алып киткәндәр.

Егет эҫеһен дә, һыуығын да күреп, егерме биш йылын тултырып, ҡайтырға сыҡҡан. Әй килә, әй килә, ти, был. Текә тауҙар аша, киң даръялар кисә икән – һис туҡтамай, тырмашып булһа ла алға барыуын белә, ти. Шулай килә торғас, ул батша йәшәгән ергә лә яҡынлашҡан, ти. Шул ваҡыт бик шәп итеп ямғыр яуып ебәргән. Лысма һыу булып, арып, арманһыҙ булған һалдат батша йортона килеп еткән. Килеп етеүен еткән, батшаның һаҡсылары уны индереү түгел, йортҡа яҡын да ебәрмәйҙәр, ти.

Килеп кергән һалдаттың киң күкрәгенә, янып торған күҙенә ҡарап торҙо ла, ти, батша:

– Һиңә ни кәрәк? – тип һораны, ти.

– Мин һиңә егерме биш йыл хеҙмәт итеп ҡайтып барам. Ҡайтып еткәс, ауылдаштарым: «Һин батшабыҙға егерме биш йыл хеҙмәт иттең, үҙен бер күрҙеңме һуң?» – тип һораһалар, мин ни тиермен? Шуға яуап биреү өсөн, һине күрергә керҙем, – ти һалдат.

Батша:

– Ярай, улай булғас, – тигән дә һалдатҡа алтын һауытҡа һалып эсемлек биргән. Һалдат эсемлекте эсеп бөтөргән дә алтын һауытты кеҫәһенә һалған. Батша аптыраған:

– Ниңә һалып алдың уны? – тип һораған.

– Мин кешеләргә, батшаны күрҙем, ышанмаһағыҙ, бына уның бүләге, тип әйтәсәкмен, – тип әйткән, ти, һалдат.

«Ай, хәйерһеҙ, бөлдөрә бит был мине», – тип уйлап торған да, ти, батша:

– Мин уны былай ҙа һиңә бүләк итергә тип тора инем әле. Оҡшаһа, ал әйҙә, ал, әле былай ғына һорай ҡуйыуым, – тигән булды, ти.

– Шулай йомарт булырһың, тип уйлағайным да мин. Улай булғас, һин миңә бер иҫке эйәренде лә бүләк итеп бир инде, – тигән һалдат.

Батша хеҙмәтселәренә иҫке эйәр кертеп бирергә ҡушҡан.

Егет эйәрҙе алған да батшаға:

– Һин был эйәрҙе биргәнлеккә ҡултамғаңды һалып, мөһөр баҫып, яҙма ҡағыҙ бир инде, – тигән.

Батша «Иҫке эйәр фәлән һалдатҡа бирелде» тип ҡул ҡуйып, мөһөр баҫып, яҙыу биргән.

Батша янынан сығып, бара биргәс, һалдат, иҫке эйәрҙе ташлап киткән. Шунан Иҫке эйәр тигән ерҙә йәшәгән байға барып еткән дә тегене ҡыуа башлаған, ти. Бай аптырап китә. Егет уға батша яҙып биргән яҙыуын күрһәтә. Бай ышанмай. Һалдат:

– Ышанмаһаң, әйҙә икәүләп батшаға барайыҡ, – ти.

Китәләр бергә. Батшаға барғас, егет теге ҡағыҙҙы күрһәтеп:

– Бына һин бүләк иткән ерҙе был бай миңә бирмәй, – ти. Батша аптырап китә.

– Мин һиңә ер бирҙемме ни? Иҫке эйәрҙе бирҙем. Шул турала ҡағыҙ бирҙем, – ти.

– Бәй, Иҫке эйәр – ер исеме ул. Мин һинән шуны һораным, шуны алдым. Әгәр һүҙеңдә тормаһаң: «Беҙҙең батша алдаҡсы икән ул!» – тип бөтә илгә таратам, – ти.

Ҡурҡышынан батша риза булған да ҡуйған, теге байға икенсе урынға күсергә ҡушҡан.

Һалдат ерҙе алғас, аталарын, үҙе кеүек ярлыларҙы килтереп һәр кемгә тигеҙ итеп ер бүлеп биреп, яҡшы ғына йәшәй башлаған, ти.

## 56. Аҡыллы ҡарт

Бынан күп заман элек бер ҡалала булған, ти, бер йәш батша. Ул ҡарттарҙы бер ҙә яратмаған, ти. Шуға күрә уларҙы үлтереп бөтөрөргә бойорған, ти. Тик бер генә егет үҙенең ҡартайып бөткән атаһын, ер аҫтына йәшереп, үлемдән ҡотҡарып алып ҡалған, ти.

Күп тә үтмәгән, күршеләге илдең батшаһы был йәш батшаға һуғыш асҡан, ти. Йәш батша ғәскәр йыя башлаған. Атаһын йәшергән теге егет, яуға китер алдынан хушлашыр өсөн, атаһы янына ер аҫтына төшкән. Атаһы улын былай тип оҙатып ҡалған, ти:

– Улым, һеҙ бик алыҫ ерҙәргә китәһегеҙ. Һеҙгә унда бик ауыр булыр: арырһығыҙ, асығырһығыҙ, аттарығыҙҙы һуйып ашап бөтөрөрһөгөҙ. Хатта ғәскәр башлығының атын да һуйып ашарһығыҙ. Шунан һуң инде һеҙ, теләһәгеҙ ҙә, теләмәһәгеҙ ҙә, кире әйләнерһегеҙ. Ҡайтышлай бөтә һуғышсылар үҙ аттарынан һалдырып алған нәмәләрен ташлап ҡалдырырҙар. Күтәреп килеүе бик ауыр булһа ла, һин эйәрең менән йүгәнеңде ташлама. Һеҙгә күреп туйғыһыҙ бер матур күк ат осрар: эйәре, йүгәне булмаған кешеләргә ул яҡын да килмәҫ, һинең янына елеп килер ҙә алдында ғына туҡтар, шунан һуң баш эйер. Һин уға йүгәнеңде һал да эйәрләп ғәскәр башлығына алып бар. Башлығығыҙ һине үҙенең яҡын кешеһе күрер, шунан инде үҙенең дуҫы итер. Ярар, бар, хуш бул, улым! – тигән, ти.

Бөтә нәмә ҡарт әйткәнсә булып сыҡҡан. Яуға барғанда, ғәскәрҙең ашарға аҙығы бөткән. Шуға һуғышсылар үҙ аттарын һуйып ашай башлағандар. Бара-бара башлыҡтарының да атын ашап, башҡа һуйыр нәмә ҡалмағас, кире боролғандар, ти. Атларға еңелерәк булһын өсөн, һуғышсылар аттарҙан һалдырып

алған эйәрҙәрен дә, йүгәндәрен дә ташлап ҡалдырғандар. Тик, атаһының һүҙҙәрен иҫендә тотоп, теге егет кенә эйәрен дә, йүгәнен дә ташламаған, ти.

Шулай ҡайтып килгәндә, күреп туя алмаҫлыҡ матур бер күк ат ғәскәрҙәрҙең ҡаршыһына уйнаҡлап килеп сыҡҡан, ти. Бөтә кеше уны тотоп алырға теләгән, әммә ул бер кемгә лә тоттормаған. Шулай сабып йөрөй торғас, ул ҡулында эйәре, йүгәне булған егет янына юртып килеп туҡтаған да башын эйгән. Егет уның башына йүгәнен һалған да, эйәрләп, ғәскәр башлығына алып барған. Шунан бирле ул ғәскәр башлығының дуҫы булып киткән.

Бер ваҡыт батша үҙенең ғәскәре менән диңгеҙ яры буйына күңел асып йөрөргә сыҡҡан. Яр башында торған батша диңгеҙ төбөндә бер нәмәнең йылтылдауын күргән. Батша үҙ артынан йөрөүселәргә шул йылтылдаған нәмәне диңгеҙ төбөнән алып сығырға бойорған. Бойороҡ буйынса күп кенә кеше диңгеҙ төбөнә сумған, әммә берәүһе лә кире ҡалҡмаған, ти.

Теге йәш егет сумырға нәүбәт яҡынлашып килгәндә генә атына һикереп менгән дә елдереп ҡайтҡан да киткән. Егет ер аҫтындағы атаһы янына төшә һалған да уға диңгеҙ яры буйында булып ятҡан хәлде һөйләгән. Улы һөйләп бөткәс, теге ҡарт:

– Улым, диңгеҙ яры буйында өлкән ағас үҫеп ултыра. Шул ағастың осонда ҡош ояһы бар, шул оя эсендә ҙур алмас ята. Ошо алмас ташының йылтылдауы, диңгеҙ өҫтөнә төшә лә күрер күҙгә төптә ятҡан аҫыл таш һымаҡ тойола. Диңгеҙгә сумырға һинә нәүбәт килеп еткәс, батшанан: «Батшам, миңә лә диңгеҙ төбөндә үлеп ҡалырға тура килер, шунын өсөн миңә ошо ағас башына менеп, һуңғы тапҡыр тыуған ауылым яғына ҡарап алырға рөхсәт итһәңсе!» – тип үтен. Ул һиңә рөхсәт бирер. Һин ҡош ояһындағы теге аҫыл ташты алып төш. Артабан инде нимә эшләргә кәрәклеген минең улым булған кеше үҙе белергә тейеш, – тигән.

Егет:

– Нимә эшләргә кәрәклеген үҙем белермен, атай, – тигән дә, атын менеп, диңгеҙ буйына сабып та киткән.

Диңгеҙ төбөнә сумырға нәүбәт килеп еткәс, батшаға:

– Батшам, миңә лә дингеҙ төбөндә үлеп ҡалырға тура килер, шуның өсөн ошо ағас башына менеп, һуңғы тапҡыр тыуған ауылым яғына ҡарарға рөхсәт итһәңсе! – тигән.

Батша уға рөхсәт иткән. Егет ағас башына менеп, оянан алмасты алып төшкән дә батшаға:

– Батшам, диңгеҙ төбөнә ҡарағыҙсы. Әгәр унда теге нәмәнең йылтылдап ятыуын күрә торған булһағыҙ, мин уны төшөп алып сығырмын, – тигән.

Батша диңгеҙгә ҡараған. Йылтылдау хәҙер бөтөнләй һүнгән булған.

– Ниңә йылтылдамай ул хәҙер? – тигән батша.

– Бына ул, минең уста, шуға йылтылдамай, мин ул аҫыл нәмәне ағас башынан алып төштөм, – тип егет алмасты батшаға тотторған да йылтылдауҙың хикмәтен һөйләп биргән.

– Быға нисек башың етте һинең? Һуғыш ваҡытында бик матур ат тотоп алып, ғәскәр башлығына бүләк иткәнһең, хәҙер алмас бүләк иттең, – ти батша.

Егет батшаға:

– Эй батшам, әйтһәм дә, ҡурҡам, әйтмәһәм дә, ҡыйын. Ярар, әйтһәм әйтәйем инде. Һин ҡарттарҙы үлтереп бөтөрөргә бойороҡ биргәс, ҡартайып бөткән атайымды йәшереп алып ҡалғайным. Үҙем эшләгән ошо бөтә эште мин унан өйрәндем. Хөрмәтле батшам, әгәр һин ҡарттарҙы үлтереп бөтөрөргә бойормаған булһаң, улар бик күп яҡшы кәңәштәр биргән булырҙар ине, – тигән, ти.

Ошонан һуң инде егеттең атаһын батша ер аҫтынан сығарырға ҡушҡан, уны үҙ эргәһенә саҡыртып, ҙур хөрмәт күрһәткән.

Ошо көндән алып батша үҙенең теге дыуамал әмерен юҡҡа сығарып, ҡарттарҙы үлтермәҫкә тигән яңы әмер биргән, ти.

## 57. Аҡыл һандығы

Борон бер батшалыҡта етмеш йәшкә еткән ҡарттарҙың муйынына таш бәйләп ҡаянан ташлар булғандар. Батша: «Етмеш йәшкә еткән кеше – аҡыл эйәһе була», – тип үҙенән аҡыллы кеше булыуынан ҡурҡҡанға шулай иткән.

Бер егет етмеш йәшкә еткән атаһын ошо үлемдән һаҡлап алып ҡалған. Уны һандыҡта ғына тотҡан. Егеттең был эшен берәү ҙә белмәгән, күләше лә һиҙмәгән. Егет атаһын кәләше һыуға киткән арала ғына ашатҡан-эсергән, хәжәтенә сығарған.

Бер ваҡыт егеткә батшанан хат килеп төшкән. Был батша егеттең ҡайныһы тейешле кеше икән. Батша: «Кейәү, миңә ҡунаҡҡа кил. Үҙең менән бер дуҫыңды, бер дошманыңды ла алып килергә онотма! Әгәр ошоларҙы үтәй алмаһаң, башыңды киҫтерәм. Үтәһәң, батшалығымды бирәм», – тигән. Егет уйға ҡалған. Уйлаған-уйлаған да атаһына кәңәш иткән.

– Атай, нишләйем икән? – тип һораған.

Атаһы улын иғтибар менән тыңлаған да былай тигән:

– Ҡайғырма, улым! Хәҙер үк кит! Барып етер саҡта этеңде саҡырып тотоп ал да туҡмап-туҡмап кире ебәр. Шунан кире саҡыр. Ул һиңә йылмая-йылмая, ҡойроғон болғай-болғай кире килер. Бара биргәс, бисәңде туҡма. Ул шунда уҡ илап, яр һалып атаһына йүгерер. Һинең атыңа ҡабат ултырып та тормаҫ.

Егет:

– Ҡыҙын туҡмағас, батша мине имен ҡалдырмаҫ шул, – тип был кәңәшкә риза булмаған. Атаһы:

– Улым, мин әйткәнде тот. Ҡурҡма, – тигән.

Егет атаһы өйрәткәнсә эшләгән. Туҡмалған эт, ысынлап та, ҡойроғон болғап кире килгән. Кәләшен бер элеп ебәреүе булған – уныһы дыулап сығып китте лә, ер-һыу илап, атаһына барҙы, ти.

Егет барып еткән батшаға. Барып еткәс:

– Кейәү, мин әйткәндәрҙе үтәнеңме? – тип һорай икән батша. Егет:

– Эйе, батшам! Бына мин килеп етер саҡта этемде тотоп алып туҡмап-туҡмап ебәрҙем дә кире саҡырҙым. Ул, ҡойроғон болғап, йылмая-йылмая миңә кире килде. Бисәмде бер генә элеп ебәреүем булды, ул, хатта атыма ла ултырып торманы, илап һиңә йүгерҙе. Бына үҙҙәре лә йөҙҙәре. Этем – дуҫым, һинең ҡыҙың – дошманым, – тигән.

– Дөрөҫ! – тигән батша. Шунан:

– Әллә һиңә аҡыл өйрәтеүсе булдымы? – тип һораған.

– Юҡ! – тигән егет.

Батша кейәүенә батшалығын биргән. Йәш батша:

– Аҡ һаҡалда – ил аҡылы. Мине батша түгел, ҡарт атайым батша итте, – тип ҡарттарҙы үлтереү йолаһын бөтөрткән. Ил ҡарттары менән кәңәш-төңәш итеп батшалыҡ иткән. Йәш батша аҡ һаҡаллы атаһын түргә ултыртып ҡәҙер-хөрмәт иткән. Шуға уның бөтә эштәре лә уң килеп торған, ти. Ул батша әле лә имен. Ғәҙел хөкөмлө хаким булғанға бөтә халыҡ ҡәҙерләй, ти, үҙен. Бөгөн барып, кисә үҙем күреп ҡайттым. Алдамайҙар икән. Алдан-арттан ҡалғансы һыйлап, күстәнәстәр биреп ҡайтарҙы. «Минең хаҡта йәштәргә һөйлә. Ата-инәләрен ҡәҙер-хөрмәт итһендәр. Оло кеше – алтындан ҡиммәт аҡыл һандығы», – тип ҡалды.

Әкиәтем ары китте, үҙем бире киттем.

## 58. Ҡурай әкиәте

Борон-борон заманда урман артында, аҡ өҫтөнә төшкән ҡара тап һымаҡ, йәшәгән, ти, бер яуыз хан. Был хан аҙна һайын сәсен ҡырҙыра торған булған. Бының өсөн ул аҙна һайын бер йәш егетте саҡырта икән. Килгән егеттәрҙең береһе лә кире ҡайтмаған: сәсен ҡырҙырып бөтөү менән, хан уларҙың башын ҡырҡтырып торған. Бөтә тирә-яҡ, хандың был яуызлығынан ҡотолоу әмәлен таба алмайынса, ҡурҡып йәшәгән. Хандың теләген үтәмәҫкә бер кемдең дә баҙнаты етмәгән.

Шул тирәлә, ете урман артында, ни тапһа, шуның менән туҡланып көн күргән бер бабай менән әбей булған. Уларҙың

буйға еткән өс улдары бар икән. Хан бабайҙың тәүҙә өлкән улын саҡыртҡан – егет кире әйләнеп ҡайтмаған. Бер аҙнанан һуң уртансы улын саҡыртҡан. Уныһы ла кире ҡайтмаған. Өсөнсө аҙнала сират ҡарттың кинйә улына килеп еткән.

Ҡарт менән ҡарсыҡты ҡайғы баҫҡан. Етмәһә, улар тапҡан-таянғандарын юл аҙығы итеп өлкән улы менән уртансы улдарына биреп ебәргәндәр икән. Кинйә улдарына биреп ебәрергә бер нәмәләре лә ҡалмаған, ти. Шулай әсә, баш вата торғас, улына юл аҙығы булырлыҡ нәмә уйлап тапҡан. Алабута онон үҙенең һөтөнә баҫып, бер ҡабартма бешергән. Егет ошо аҙыҡты тоҡсайына һалып алған да, ата-әсәһе менән хушлашып, юлға сыҡҡан.

Ирәндекте артылып киткән юлдан билән башына күтәрелгәс, егет һуңғы тапҡыр үҙенең тыуып үҫкән еренә боролоп ҡараған. Уның күңеле тулып киткән. Үҙе лә һиҙмәҫтән, сылтырап аҡҡан һалҡын шишмәләренә, шаулы урмандарына, тын ғына ауылына, күккә олғашып торған Ирәндек тауына ҡарап, моңланып бер йырлап ебәргән, ти.

Тауҙар артылып, урмандар үтеп, йылғалар кисеп, егет бер заман хан һарайына барып еткән. Шунда уҡ уны һарай хеҙмәтселәре хан янына алып ингәндәр. Хан егеткә үткер бысаҡ тоттороп, үҙенең сәсен ҡырырға ҡушҡан.

Хан башындағы таҗын һалыу менән, егет, иҫе китеп, аптырап ҡалған: хандың түбәһендә тәкәнеке кеүек бер мөгөҙө һерәйеп тормаһынмы!

Шулай ҙа егет ҡаушап ҡалмаған. Хандың сәсен бик оҫта итеп ҡырып ташлаған.

Сәсен ҡырҙырып бөткәс, хан егеткә:

– Һин ошонда тороп тор, – тигән дә икенсе бүлмәгә сыҡҡан.

Юлдан асығып килгән егеттең бик ашағыһы килә башлаған. Ул, күп уйлап тормай, тоҡсайынан өшәһен алған да ашарға тотонған. Ошо ваҡытта ғына хан килеп ингән. Ҡомһоҙ хан егеттең шундай тәмләп ашап ултырғанын күргәс: «Бының ашап ултырған нәмәһе мин ғүмер буйына ауыҙ итмәгән бик тәмле нәмә булһа кәрәк», – тип уйлаған. Ауыҙынан һеләгәйе килә башлаған, хан егеткә:

– Нимә ашайһың һин? Миңә лә аҙыраҡ һындырып бир әле, ауыҙ итеп ҡарайым, – тигән.

Егет бер аҙ һындырып биргән. Хан өшә һынығын ашап бөткән дә:

– Бик тәмле икән дә шул! Нимәнән бешерелгән һуң был? – тип һораған.

– Был алабута өшәһе. Әсәйем уны үҙенең күкрәк һөтөнә баҫып бешерҙе, – тигән егет.

Хан, ни эшләргә лә белмәй, аптырап: «Әсәһенең һөтөнә баҫып бешерелгән өшәһен ашағас, хәҙер мин уның имсәктәш

туғаны булдым. Шулай булғас, унын ҡанын ҡойорға минең хаҡым юҡ. Үлтермәһәм, мөгөҙлө булыуымды кешегә һөйләп йөрөр. Йә, хәҙер ни эшләргә? Был бәләнән нисек ҡотолорға һуң?..» – тип уйға ҡалған. Шулай уйлаған да хан егетте күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән, кеше аяғы баҫмаған ергә олаҡтырырға ҡушҡан. «Шунда үҙ үлеме менән дөмөкһөн!» – тигән.

Хандың хеҙмәтселәре егеттең ҡул-аяҡтарын бәйләгәндәр, күҙҙәрен ҡаплағандар ҙа атҡа артмаҡлап, шыр урман эсенә алып барып ташлағандар.

Егет әтлек, һарына, һәр төрлө еләк менән тамаҡ аҫраған. Үк-һаҙаҡ яһап алып, йәнлек аулаған. Йәнлек тиреһенән кейем теггеп алған. Нимә генә эшләһә лә, кеше аяғы баҫмаған ҡара урманда япа-яңғыҙ ҡыҙырып йөрөү уға бик күңелһеҙ булған. Егеттең эсе бошҡан, ата-әсәһен, тыуып үҫкән Ирәндек буйын һағынып моңайған. Хандың серен һаҡлап йөрөү ҙә ҡыйын булған. Урман яңғыратып:

– Хандың түбәһендә мөгөҙ бар! – тип ҡысҡырып та ҡараған. Тауышын йәнлектәр генә ишеткән.

Егет әйләнеп ҡайтыр юл тапмаған.

Бер ваҡыт, ныҡ арығандан һуң, ташты яҫтыҡ, үләнде түшәк итеп, ағас күләгәһендә хәл йыйып ятҡанда, егеттең ҡолағына ниндәйҙер моңло бер тауыш ишетелгән. Ул урынынан тора һалып, шул тауыш сыҡҡан яҡҡа киткән. Бара торғас, егет һөрголт ҡая ташлы бер тау түбәһенә күтәрелгән. Шунда уҡ ҡаҡыя башлы бер ҡыу ҡурай ултырғанын күргән. Шул ҡурай тишектәренә ел өрөүҙән моңло тауыш сығарып, һыҙғырып ултыра икән. Егет ҡурайҙы өҙөп алып, эсенә өрөп ҡараһа, баяғы моңло тауыш тағы ла көслөрәк ишетелгән. Егет быға бик ҡыуанған. Ҡурайҙы өрә-өрә, үҙе белгән көйҙәрҙе уйнарға ла оҫтарып киткән. Яңы көйҙәр сығара башлаған. Егеттең йөрәген өйкәгән сер, ҡайғы-хәсрәте таралып, күңеленә еңел булып киткән.

Бер ваҡыт йәш егет, бер ҙә уйламағанда, үҙенең тыуып үҫкән еренә килеп сыҡҡан. Егеттең шатлығы эсенә һыймаған. Шунда ул тау итәгенә ултырған да уйнап ебәргән. Яҡындағы йәйләү кешеләре, ҡурай тауышын ишетеп, егет янына килгәндәр. Егет башынан үткәндәрҙе халыҡҡа һөйләп сыҡҡан, һуңынан уны көй итеп ҡурайҙа уйнап ишеттергән. Быны ишеткәс, йәйләү кешеләренең батырлығы артҡан, яуыз ханға асыуҙары ҡабарған. Шунан улар берҙәм булып күтәрелгәндәр ҙә хан һарайына яу булып барғандар. Теге егеттең атаһы ханды мөгөҙөнән тотоп торған, бөтә ҡалған халыҡ был яуызды ни тура килһә, шуның менән туҡмап үлтергән, ти.

Бына шул замандан бирле ҡурай халыҡтың шатлығын да, ҡайғыһын да әйтеп биреүсе моңло бер уйын ҡоралы булып ҡалған, ти.

## 59. Ҡурай тарихы

Элгәре ваҡ-төйәк батшалар заманында Искәндәр исемле бер батша йәшәгән. Ул мөгөҙлө булған. Сәсен алған кешене үлтертеп торған. Әгәр үлтертмәһәм, мөгөҙөм барлығын халыҡҡа һөйләр, тип ҡурҡҡан.

Бер ваҡыт уға сәсен алдырырға туғанырак кешене ебәрәләр. Теге кеше Искәндәрҙең сәсен ала. Хәҙер Искәндәр батша уйға ҡала. «Сәс алыусыны үлтерергәме, юҡмы? Үлтертһәм дә ҡыйын, үлтертмәһәм дә ҡыйын». Үлтертмәҫ ине, хур була, үлтертер ине – туғаны. Шунан әйтә:

– Был сер һинең эсеңә һыймаҫ инде, минең мөгөҙөм барлығын халыҡҡа һөйләргә теләрһең. Бына һиңә бер ҡурай. Серҙе әйткең килһә, сәхрәгә сыҡ та ошо ҡурайҙы өр ҙә өр, өр ҙә өр, – тигән.

Сәс алыусы ҡайтып киткән. Батшаның мөгөҙө барлығын әйткеһе килдениһә, сәхрәгә сыға ла икән, ҡурайын өрә икән. Шулай өрөп йөрөй торғас, бер бик матур көй килеп сыҡҡан. Башҡалар ҙа, унан күрмәксе, ҡурайҙан көй сығарырға өйрәнәләр.

Башҡорттар араһында ҡурай шулай таралған да киткән, ти.

## 60. Сер

Йәшәгән, ти, бер батша. Ул батша үҙенең яуызлығы менән тирә-яҡта ҡан ҡалтыратып тотҡан, ти. Шул батшаның маңлайында мөгөҙ бар икән, ләкин был турала бер кеше лә белмәгән, ти. Йыл һайын ул бер ҡабат сәсен алдыра икән. Уның сәсен алырға йыл һайын бер йәш егет үҙенең ғүмерен бирә икән. Ни өсөн тигәндә, ул батша, сәс алған егет минең мөгөҙөм барлығын кешегә һөйләр тип, ҡурҡып, уларҙы үлтертә торған булған.

Бер ваҡыт, шулай, үҙе йәш, үҙе көслө, үҙе сибәр бер егетте алып килгәндәр. Был егет бер ваҡытта ла серен кешегә сисмәҫ булған. Батша шул турала белгән дә, сәсен алдырғас, егетте иреккә ебәрергә булған. Серҙе кешегә һөйләмәҫкә ҡушып, уны ҡат-ҡат ант иттергән дә, ауылына ҡайтарып ебәргән. Ауыл халҡы уның имен ҡайтыуына бик шатланған, шул уҡ ваҡытта аптыраған да. Ни өсөн һуң батша уны ғына иреккә ебәргән? Һораштырып ҡарағандар, ләкин егет батшаның мөгөҙөн күргәне турала береһенә лә, хатта әсәһе менән һөйгән ҡыҙына ла, әйтмәгән.

Шулай йылдар үткән. Күп һыуҙар аҡҡан, егеттәр һаман береһе артынан береһе китеп торған, әйләнеп ҡайта алмай, юғалып торған. Ә был егет бер ваҡыт һарғая, кибә башлаған. Төрлө ерҙән табиптар саҡырып килтергәндәр, төрлөсә дауалап ҡарағандар, ләкин бер дауа ла уның сирен ала алмаған.

Күрше ауылда бик аҡыллы ҡарт бар икән. Шул килеп, егетте ҡараған да былай тигән:

– Әй улым, һинең ниндәйҙер серең бар, моғайын. Ул серҙе һин береһенә лә һөйләмәгәнһең дә, шуға ауырыйһың булыр. Әгәр шулай, кешегә һөйләргә ярамай торған сер икән, һөйләмә. Һин былай ит. Һыу янына бар. Бар ҙа серенде һыуҙағы ҡамыштарға һөйлә, – тигән.

Был егет һыу буйына барып, ҡамыштарға үҙенең серен сискән: күкрәге бушағас, һауығып, тағы ла бик оҙаҡ йәшәгән, ти. О ҡамыштар шунан һуң һары булып ҡалған, ти.

## 61. Ҡурай

Борон бер батшаның мөгөҙө булған, ти. Ул көн дә бер егетте саҡыртып сәсен алдыра ла сәсен алған бер егетте үлтереп тора, ти. Батша шулайтып мөгөҙө барлығын йәшерергә уйлаған.

Берҙән-бер көндө сират әбейҙең яңғыҙ ғына улына килеп еткән, ти. Шунан әбей әйткән:

– Балам, мин һиңә имсәк һөтөмдән өшә бешереп бирәйем. Һин батшаның сәсен алыр алдынан шуны ашарһың, – тигән.

Егет киткән. Батшаның сәсен алыр алдынан егет әсәһе биргән өшәне ашап алған. Быны күреп торған батша:

– Егет, һин бик тәмле итеп тороп ниндәй ризыҡ ашайһың ул шулай? Ҡана мин дә ашап ҡарайымсы, – тигән.

Батша ашап ҡарай ҙа:

– Ҡалай тәмле ул! Нисек бешерелгән был? – тип һорай. Егет:

– Әсәйем үҙенең күкрәк һөтөнә бешерҙе был өшәне, – тигән. Шунан батшаның башына: «Бер әсәнең күкрәк һөтөнә бешерелгән өшәне ашағас, хәҙер мин быға имсәктәш туған булдым бит инде. Ни эшләргә инде?» – тигән уй төштө, ти.

Егет батшаның сәсен алып бөтә. Батша:

– Мин һине башҡалар кеүек үлтермәйем – беҙ икебеҙ хәҙер имсәктәш туған булдыҡ. Минең хаҡта һөйләмә, – тип, тыйып, алтын алып, иленә ҡайтарып ебәрә.

Батшаның мөгөҙө барлығын һөйләмәйенсә, теге сит серҙе эсенә һыйҙыра алмай, ауырыуға һабышты, ти. Шунан әсәһенән:

– Әсәй, мин батшаның мөгөҙөн күрҙем, ни эшләйем икән? – тип һораған. Әсәһе:

– Һин ҡырға сығып ҡына әйт, – тип өйрәткән. Егет ҡырға сығып, ҡырлы ҡурай табып алып шуның эсенә: «Батшаның мөгөҙө бар», – тип әйткән, ти. Бер сыҡҡан, ике сыҡҡан... Ҡурайға серен әйтә торған. Аҙаҡ ҡурайҙы ҡулына алып, эсенә өҙө башлауы була – ул үҙенән-үҙе:

*Батшаның мөгөҙө бар,*
*Беҙҙең батша мөгөҙлө.*
*Туңҡайып торһа батша,*
*Хәтерләтә үгеҙҙе, –*

тип йырлай башлар булған. Шулай инде:

*Күкрәгеңдә оҙаҡ тотһаң, сер сир була,*
*Ауыҙыңдан бер ысҡынһа, бар мир тула.*

## 62. Йыр-моң сере

Элгәре, бик-бик борон заманда йәшәгән, ти, бер егет. Ул бик һөнәрмән булған. Үҙе йырсы, үҙе оҫта бейеүсе ине, ти. Уның ҡыл ҡумыҙы ла бар ине, ти. Шул ҡыл ҡумыҙында уйнап та, йырлап та, унан ҡалһа бейеп тә барса халыҡты таң ҡалдырыр булған. Әммә берҙән-бер көн:

– Халыҡты аҙҙыра! – тип, уны бей зинданға яптырған.

Егет зинданда ла тик ятмаған. «Ҡыл ҡумыҙ уйнарға ярамаһа, икенсе төрлөһөн яһай алмайымдыр шул мин!» – тип, ҡулына эләккән ҡылдарҙы йыя барып, аяҡ аҫтындағы ағасты юнғылап киптереп, бер нәмә этмәләй башлаған. Тырыша торғас хәҙер беҙ скрипка тип йөрөткән ҡорамалды килтереп сығарған. Скрипка яһаған да моңло иттереп тороп уйнап ебәргән. Скрипка моңо уның ҡайғыһын баҫҡан, дәрт биргән.

Теге бейҙең япа-яңғыҙ ғына ҡыҙы бар ине, ти. Исеме Мәликә ине, ти. Шул ҡыҙ теге һөнәрмән егет зинданда ултырған мәлдә бик ҡаты ауырып ята ине, ти. Уның түшәктә ятыуына байтаҡ айҙар, йылдар үткән була. Бей уға бер төрлө лә дауа таба алмаған, ти. Бер көндө зиндандағы егеттең моңланып ҡына скрипка уйнауын Мәликә ишетеп ҡалған да беренсе мәртәбә башын ҡалҡытҡан. Башын ҡалҡытҡан да:

– Ана, ишетәһегеҙме? Шул скрипкасыны минең янға алып килә һалығыҙ! Юғиһә мин үләм, – тигән, ти.

Егетте Мәликә ятҡан бүлмәгә алып ингәндәр. Ул ингәс, бей ҡыҙы:

– Эле генә зинданда уйнаған көйөңдө уйна әле! Зинһар! – тигән. Егет бер көй уйнаған, ике көй. Иртәнсәк башын ҡалҡытырға ла хәле булмаған Мәликә урынынан ҡалҡып уҡ ултырған.

– Етәр! – тип әйтеүсе булмағас, егет уйнаған да уйнаған. Хеҙмәтселәр килтереп ултыртҡан бер туҫтаҡ ҡымыҙҙан бер уртлап тамағын ебетә лә йәнә уйнай, ебетә лә йәнә уйнай, ти. Ә ҡыҙ ынтылып, һаҡ ҡына сымылдығын ҡайырып ҡарағайны – егеттең матурлығын күреп, таң ҡалды, ти. Егеттең үҙен күргәс, Мәликә урынынан тороп уҡ китте, ти. Әсәһе менән еңгәләренә:

– Мин шәбәйҙем. Мине мунсаға алып барығыҙ, йыуындырығыҙ, – тигән.

Мәликәне мунсаға төшөрөп сәстәрен тарап, толомдарын үреп, ҡашмау, сулпыларын, тәңкәле еләндәрен кейҙереп сынъяһау итеп ултыртып ҡуйҙылар, ти. Шунда бей ҡыҙы әйтте, ти:

– Егетте лә мунсаға төшөрһөндәр, матур итеп кейендерһендәр.

Һөнәрмән егетте йыуындырып, сәсен алып, уға матур-матур кейемдәр кейендерҙеләр, ти. Уны ҡабат зинданға ябыусы булмаған. Егет тик ҡыҙ янында ғына уйнап ултырыр булған. Матур ҡыҙҙы күргәс, уның скрипкаһы тағы ла моңлораҡ, йырҙары тағы ла һағышлыраҡ булып китте, ти. Уны тыңлаған Мәликә тамам аяҡҡа баҫты, ти.

Ана шулай итеп, йыр менән скрипка моңо егетте тотҡонлоҡтан ҡотҡарған, йыр-моң үлем түшәгендә ятҡан кешене аяҡҡа баҫтырған.

Йыр-моңдоң бына шундай тылсымлы сере бар уның!

*Өлөшләнөң моңо бар,*
*Моңо барҙың көнө бар;*
*Көнө барҙың өнө бар,*
*Өңө барҙың йүне бар:*
*Моңһоҙҙо йыр моңайта,*
*Моңлоно ул ҙурайта;*
*Йыр-моң шифа барына,*
*Йыр-моң тиңдер дарыуға.*
*Шулдыр уның тылсымы,*
*Сере шунда, ысыны.*

## 63. Ҡурай моңо

Бик борон заманда, тауҙар түңгәктәй, күлдәр күләүектәй саҡта йәшәгән, ти, бик данлыҡлы бер ҡурайсы. Үҙ ғүмерендә бик күп туйҙарҙа, күп йыйындарҙа ҡурай уйнап, бөтә Уралда дан алған кеше булған, ти. «Атанан күргән – уҡ юныр, инәнән күргән – тун бесер» тигәндәй, бының ике улы ла, ҡурай тиһәң, йән атып торор булғандар, ти. Көндәрҙән бер көндө ҡарт ҡурайсы, әжәле етеп килгәнде һиҙенеп, уландарын саҡырып алды ла былай тине, ти:

– Балаҡайҙарым, мин күп йәшәнем, күп күрҙем. Ҡурайым менән ҡайғылының күңелен астым, моңһоҙҙо моңландырҙым, дәртһеҙҙе дәртләндерҙем, бәхетленең бәхетен бүлештем.

– Шулай, атай, шулай, – тиештеләр, ти, уландары.

– Ҡайҙа барһам да, урыным түрҙә булды. Донъя ҡыуманым. Бына атай-олатайҙар янына оҙон юлға сығырға ятылына. Һеҙгә

бүлеп ҡалдырыр малым да юҡ. Башҡалар һымаҡ бай мираҫ ҡалдыра алмайым. Бигәйбә, балалар. Тәүфиҡ бирһен үҙегеҙгә...

– Шулай, атай, шулай, – тиештеләр, ти, уландары.

– Ҡәҙерләп белеп тотонһағыҙ, минән ҡалған менән дә кәмхур булмаҫһығыҙ. Берегеҙгә – ана еҙ ҡурайым, берегеҙгә йорт менән Саптар бейә. Йә, әйтегеҙ, кем нимәне теләй?

– Тәүҙә ағайым әйтһен, – тине, ти, кинйә ул.

– Ҡурай тартып, үҙең дә мандымайһың. Өй менән бейә миңә булһын, – тине, ти, оло ул.

– Һин шуға ризамы, Кинйә? (Кинйә улдың исеме лә Кинйә булған икән, ти.)

– Риза, атай, риза, – тигәйне, ти, Кинйә, атаһы түшәк аҫтынан ҡурайын тартып сығарҙы ла уға тотторҙо, ти.

– Йә, бәхилләшәйек, уландар... Кинйә, һин ҡурайыңды тартып ебәр әле... Еҙ ҡурайым тауышын ишетәйемсе...

Кинйә моңло итеп бер көй уйнап ебәрҙе, ти. Шул моңдо тыңлап ятып, ойоғандай итте лә, ти, ҡарт, ҡабат ҡайтмаҫ ергә китте, ти.

Ҡарт ҡурайсыны һәйбәтләп ҡуйып, бер аҙ ваҡыт үткәйне, оло ағай бай ғына бер ҡатынды кәләшлеккә алды, ти. Ҡатын бай ҡыҙы булған икән. Яңғыҙы ғына йәшәһә лә ҡуры өҙөлмәгән, оло ағайға сыҡҡас байлығы тағы ла ишәйеп китте, ти. Бай еңгәй тәү көндән үк Кинйәне ек күрҙе, ти. Инде балаһы булып, нығынып алғайны, бахыр Кинйәгә көн бөттө, ти. Баланы ҡараған да шул, мал артынан йүгергән дә шул, утын, бесән ташыған да шул булды, ти. Көнө-төнө эшләһә лә, өҫтөндә алама сәкмән, аяғында тишек ҡынйыраҡ ҡына ине, ти. Энеһенең ауыр хәлен оло ағай күрә йөрөй. Күрә йөрөү менәнме ни ул, бисә һүҙенән үтә алмағас, ҡалайтһын инде, өндәшмәгән.

Күп түҙгән Кинйә еңгәһенең ыҙалатыуына. Күп түҙгән. Аулаҡ саҡтарҙа ҡурайын уйнап, күңел йыуатыр булған. Йылдар үткән, Кинйә бынамын тигән егет булып еткән. Көндәрҙең береһендә, был еҙ ҡурайын алған да ағаһы йортон ташлап сыҡҡан да киткән. Эй киткән был, эй киткән. Китеп ултыра торғас Ыйыҡты үтеп, Әйгә барып еткән. Әйҙе кисеп, Йүрүҙәнгә барып еткән. Шунда бер мәмерйә табып алып, инеп ял итеп алмаҡ булған. Бер кәштә һымаҡ ҡына ергә мүк түшәп, ҡурайын ҡосаҡлап ята торғас, ойоп киткән. Бер ваҡыт зыу килеп һөйләшкән тауышҡа мәмерйә эсе яман шау-гөр яңғырай башлағанға уянып ҡараһа, шаҡ ҡата: бер өйөр шайтандар үҙҙәренең кәсептәре тураһында һөйләшә икән.

Берәүһе әйтә:

– Мин фәлән хандың ҡыҙын ауырыттым.

– Унан нисек ҡотолорға булыр ине? – тип, һораны, ти, икенсеһе.

– Унан еҙ ҡурай менән генә ҡотолорға була. Янына килеп еҙ ҡурайҙа уйнаусы булһа, ҡыҙ иҫән-һау булып килеп торасаҡ.

Шайтандың һуңғы һүҙен Кинйә ишетмәй ҡалды ла, ҡабатлап әйтмәҫ микән, яҡшылабыраҡ тыңлайым әле, тип, һонолоңҡорағайны, тәгәрәп килде лә төштө, ти.

– Эһә, беҙҙең хәбәрҙе тыңлап ятаһың икән әле, – тип, быны тотоп алып дөрә башланылар, ти, шайтан халҡы.

– Юҡ, бер һүҙегеҙҙе лә ишетмәнем, – тип ҡарай Кинйә, тегеләр өҙмәй ҙә ҡуймай:

– Ишеткәнһеңдер, ишеткәнһеңдер, – тип, күҙенә инеп киләләр, ти, быныҡ.

– Юҡ, тим бит инде. Нимәне ишетәйем мин?

– Ауырыған хан ҡыҙын еҙ ҡурай уйнап төҙәтеп булыуын әйткәнде ишеттеңме, юҡмы?

– Юҡ!

– Алдаша, алдаша. Хәҙер үк өҙгөләп ташларға кәрәк быны, – тиешә тегеләр. Шул саҡ Кинйә ҡурайын ала килеп, тыжлатып өрөп ебәргәйне – тегеләр терт итеп ҡалды, ти. Инде көй сыға башлауға, тегеләрҙең эҙе лә, еҫе лә ҡалманы, ти.

– Эһә-ә, эшегеҙ былай икән әле, – тине лә, ти, Кинйә үҙ юлы менән китте, ти. Бара торғас, бер ҡалаға барып етте, ти. Барып инһә, берәү осраны ла:

– Эй, егет, һин бында ситтән килгән яңы кешеһеңдер, моғайын? – тине, ти.

– Эйе.

– Улайһа, ҡурайыңды йәшер. Бында ҡурай тотоу, ҡурай уйнау, йыр йырлау тыйыла.

– Ниңә?

– Ҡалаға ингәндә ҡапҡалағы әмерҙе уҡыманыңмы ни?

– Юҡ.

– Уҡымаһаң, кире барып уҡы, аңларһың бөтәһен дә, – тине лә, ти, теге кеше китте, ти, үҙ юлы менән, ҡурайын ҡуйынына тыҡты ла Кинйә китте, ти, кире юлы менән. Килеп ҡапҡаға ҡараһа, унда шулай тип яҙылған була: «Хандың берҙән-бер ҡыҙы ауырыу сәбәпле, ҡалала йыр йырлап, ҡурай уйнап, күңел асыу тыйыла. Кем дә кем был әмерҙе үтәмәй, кем булыуына ҡарамаҫтан, шуның башы киҫеләсәк». Егет, әмерҙе ҡабат-ҡабат уҡығандың һуңында, елкәһен тырнап, улай-былай ҡаранып тора, ти, ҡапҡаның икенсе яғында тағы бер ҡағыҙ күреп ҡалды, ти: «Кем дә кем хандың ауырыу ҡыҙын һауыҡтыра, хан ҡыҙҙы шул кешегә бирә. Ҡыҙға өҫтәп ярты ханлығын бирә. Кем дә кем һауыҡтырам тип тә, һауыҡтыра алмай, шул кешенең башы киҫеләсәк». «Ай-ай, закун ҡаты икән быларҙың, кем тегеләй!» – тип тора ине, ти, бер сиреү* кешеһе килеп сыҡты, ти.

– Нимәгә аптырап ҡалдың, егет? – тине, ти, теге.

– Закун ҡаты икән һеҙҙә, тип аптырап торам.

– Ҡаты, ҡаты, ана шеш башындағы баштарҙы күрҙеңме?

– Юҡ, – тип, яҡшылап ҡараһа, ҡапҡаның теге яғынан да, был яғынан да ҡойма бағанаһы һайын шеш тора, шеш башында баш тора, ти.

– Күрҙеңме инде? Улар хан ҡыҙын һауыҡтырып, хан кейәүе, ярты ханлыҡҡа хужа булайым тип, булдыралмаған кешеләрҙең башы булыр, – тине лә, ти, теге сиреү кешеһе ҡалаға инеп китте, ти.

Ҡала урамдары буйлап йөрөй торғас, Кинйә хан һарайын табып алды, ти. Ҡапҡаға барһа, һаҡсылар яланғас ҡылыс менән юлын быуҙылар, ти.

– Ҡайҙа бараһың, аламаголош?

– Ханға хәбәр итегеҙ. Ҡыҙын һыуыҡтыра килдем, – тине, ти. Кинйә шулай тигәйне, теге һаҡсылар хахылдап көлөп ебәрҙеләр, ти.

– Эй, йолҡош, йолҡош. Һинән былайыраҡтар, затлы-затлы заттан сыҡҡан ир-егеттәр: хан улы, бай улы, батша улы, башҡаһы булдыра алмағанды һин йолҡош ҡайҙан булдыралаһың инде?! – тинеләр ҙә йәнә хахылдашырға тотондолар, ти.

– Нимәгә кешнәшәһегеҙ унда? – тип, һарайҙан ҡарауыл башы килеп сыҡҡан, ти.

– Көлмәй, илайһыңмы ни? Бына бер аламағолош, хан ҡыҙын һауыҡтырам, ханға әйтегеҙ, – ти. Шулай тигәйнеләр, ҡарауыл башы ла тотондо, ти, көлөргә. Быларҙың тауышына хан үҙе килеп сыҡты, ти.

– Йә, ни бар, ниңә улай кешнәшәһегеҙ?

– Ханым, солтаным, бынауы аламағолош һеҙҙе саҡырта, ҡыҙыңды һауыҡтырам, ти, – тине, ти, ҡарауыл башы.

– Үтәп ҡара. Тик үкенерҙән булмаһын, егет. Минең шартым ҡаты!

– Беләм. Ҡыҙыңды күрһәт, – ти Кинйә.

Хан Кинйәне ҡыҙы ятҡан бүлмәгә алып инеп китә. Бүлмә тигәс тә бүлмә, ти! Бала-сағалы ике ғаилә тормалы, ти! Ул тәҙрәләрҙең яҡтылығы, ул стеналарҙың, түшәмдең матурлығы! Бөтәһе лә аҫыл таштар менән биҙәлгән, селтәрләп һырланған, һырҙарына алтын йүгертелгән, ти. Бүлмә уртаһында аҡ ебәк йәймәләр түшәлгән бейек күпмәлә сибәрҙәрҙән-сибәрерәк ҡыҙ ята, ти. Ятҡан ере өрһәң, осоп китмәле ҡорған менән ҡоролған, ти. Сымылдыҡ тирәләп ҡыҙ-ҡырҡын, әбей-һәбей ултыра, ти.

– Бына ошо була минең ҡыҙ. Һауыҡтырһаң, ҡыҙ һинеке. Бында инеп тә һауыҡтыралмаһаң, үҙеңә үпкәлә, – ти хан.

– Ярар, ханым, солтаным. Минең дә бер шартым бар. Мин дауалағанда, бүлмәлә ҡыҙҙан башҡа кеше булмаһын, – тине, ти, Кинйә. (Ҡурайҙы күрһә, тартып алыр ҙа, башты киҫер, тип шөрләй инде, әлеге лә баяғы.)

– Һин әйткәнсә булһын, – тип хан сыға, хан артынан башҡалар ҙа сыға.

Кинйә ишекте эстән элде лә, ти, ҡуйынынан ҡурайын алып, моңло бер көй уйнап ебәргәйне, ҡыҙ күҙҙәрен асты, ти, икенсе

көйҙө уйнауға тороп ултырҙы, өсөнсө көйҙө уйнауға иҙәнгә төшөп, кәүешен кейә һалып, көй ыңғайына бейегәндәй итеп йөрөй башланы, ти. Егет ҡыҙҙы йоторҙай булып, унан күҙҙәрен алалмай, әйҙә уйнай, әйҙә уйнай.

Хан килеп ингәс, Кинйәнең ҡулындағы ҡурайҙы күреп асыуланырға иткәйне, ҡыҙын күреп телһеҙ ҡалды, ти.

– Рәхмәт, егет, һауыҡтырыуыңа! Вәғәҙәм – антым. Мә, ҡыҙым һиңә булһын, – тип ҡыҙының ҡулын тотторҙо, ти, – ярты ханлығым да һиңә, тип ҡулындағы фирүзә ҡашлы бер йөҙөгөн Кинйәгә бирҙе, ти. – Тик, егет, мин һине хөкөмгә лә тарттырмаҡсымын әле. Ҡурай тартып, минең әмерҙе үтәмәгәнһең, – тип әйтеүенә, ике һаҡсы ике яҡтан Кинйәне тотоп та алды, ти.

– Ханым, солтаным, бер генә ауыҙ һүҙ әйтергә рөхсәт итһә? – тип үтенде, ти, Кинйә.

– Ыҫҡындырығыҙ, әйтһен.

– Ҡыҙыңды һауыҡтырған дарыу ошо ҡурай моңо булды. Һинең әмереңде беләмен. Ул ҡыҙың ауырыған саҡта бирелгән. Ҡыҙ һауыҡҡас, әмерҙең көсө лә бөтөргә тейеш бит, – тигәйне, ти, Кинйә, хан:

– Һинеке хаҡ, – тип Кинйәне кейәү итте, ти. Өҫтөнә аҫыл-аҫыл кейемдәр кейҙерҙе, ти. Кинйә менән хан ҡыҙының туйы ҡырҡ көн, ҡырҡ төн барҙы, ти. Туйҙа булмаған, һыйланмаған кеше ҡалманы, ти.

Мине лә саҡырғайнылар, бөгөн барып, кисә ҡайттым. Эсмәгән эсемлек, ашамаған ашамлыҡ ҡалманы. Тик береһе лә ауыҙға теймәне. Бөтәһенә ни сәбәпсе? Шайтандарҙың иҫәрлеге сәбәпсе.

Экиәтем ары, үҙем бире.

## 64. Батша ҡыҙы менән теләнсе

Борон бер батша бар ине, ти. Бер ваҡыт уның янына бер теләнсе килеп инде, ти.

– Ниңә бында килдең? – тип һораны, ти, батша унан.

– Саҙаҡа һорарға.

– Кешенән һорағансы, хәлеңде һөйләп, Алланан һорарға ине, – тине, ти, батша.

– Хәлемде әйтеп тә һорап ҡараным – бирмәй бит, бирмәгәс...

Шулай тигәйне, ти, теләнсе, батша эй туҙынып киткән булды, ти.

– Һин минең менән ирәгәләшмәк булаһыңмы ни әле! Ҡайҙа, килтерегеҙ әле минең ҡылысты! Хәҙер тураҡлап ташлайым үҙеңде!

Ҡыҙып китеп, батша шулайтып ҡысҡырына башлағайны – теләнсе сығып тайҙы, ти.

Тауышҡа батша ҡыҙы килеп инде, ти.

– Нимәгә көйәләнәһең, атай, шул хәтлем? – тип һорағайны, атаһы:

– Бер теләнсе килеп ингәйне, ни эшләп былай йөрөүен һораһам, теләнсемен, ти. Улайтып кешенән теләнселәп йөрөгәнсе, хәлеңде әйтеп, Алланан ғына һорамай ни, тиһәм, һораным, ти, хәлемде лә әйтеп һораным инде, тип һүҙләшергә тотондо. Шуға йәнем көйҙө лә: «Ҡайҙа әле минең ҡылыс! Хәҙер сапҡылайым!» – тигәйнем, сығып китте, – тип яуап бирҙе, ти. Быға ҡаршы ҡыҙы:

– Ай, атай, һәйбәт итмәгәнһең бит! Берәй нәмә биреп сығарһаң да булыр ине инде. Унан ғына батша кешегә ни булыр ине тиһең, – тип әйтте, ти.

– Батшамын, тип, кем етте шуға малыңды тарат та ултыр инде, ә?!

– Һиндә юҡ нәмә юҡ! Биргәндән ни ерең кәмер ине?

Шул һүҙҙе ишеткәс, батша:

– Һин дә минеке. Батшамын, тип һине лә теләһә кемгә биреп ебәрергәме ни инде? – тине, ти.

– Бир, әйҙә, бир мине лә.

– Әләйһәң, шул теләнсегә бирҙем һине!

– Бирҙеңме?

– Бирҙем!*

– Бирҙеңме?

– Бирҙем!

– Биргән икәнһең, хуш! – тине лә, ти, ҡыҙ, сыға килеп, ҡыҙ ҡуша торған аҡ тирмәһен, үҙенә инселәнгән алтын-көмөшөн, башҡаһын йыйып, төрөп, дөйәгә тейәне, ти. Шунан һәйбәтен ҡарап, бер бейәне эйәрләне, ти, өҫтөнә офицер туны, башына алтын таж кейҙе лә, ти, дөйәһен етәкләп, теләнсе артынан һыбай сыҡты ла китте, ти.

Китеп бара ҡыҙ, китеп бара, ти. Юлда бер әҙәм осрай быға.

– Теләнсе күренмәнеме? – тип һорай ҡыҙ унан.

– Күрҙем, анауы яҡҡа китеп бара ине, – ти теге кеше.

Ҡыҙ шул яҡҡа китә. Бара-бара, быға йәнә берәү осрай. Ҡыҙ йәнә:

– Теләнсе үткәне күренмәнеме? – тип һорай.

– Күрҙем. Ул әле генә ҡаланан сығып китте, – ти тегеһе.

Ҡыҙ бара, бара. Бара торғас, ҡыуып етә лә тегене:

– Ултыр менеп дөйәгә! – ти. Теләнсе дөйәгә менеп ултыра. Хәҙер икәүләп китеп ултыралар, китеп ултыралар. Китеп ултыра торғас, бер йылғаға килеп етәләр. Аҡ тирмәне ҡороп ебәрәләр. Тирмә ҡоролоп бөткәс, ҡыҙ:

– Өҫтөңә таҙа кейемдәр, аяғыңа кәүеш менән ситек, ҡулыңды йыуырға һабын бирәмен. Мә, тот та һыуға төшөп, йыуынып, кейенеп кил. Алам-һаламыңды һелтә, – тине, ти, теләнсегә. Теләнсе һыуға төшөп, йыуынып, таҙа кейемдәрҙе кейеп, иҫкеләрен быраҡтырҙы ла, ти, ҡыҙ янына килде, ти. Ҡыҙ уға:

– Әйҙүк, түрҙән уҙ, – тип әйтте, ти.

Теләнсе:

– Ул урында ултырыу миңә яҙыҡ, – тип түргә уҙманы, ти.

– Һис тә яҙыҡ түгел, мин рөхсәт иткәс, һинең өсөн хәләл урын ул, – тине, ти. Теләнсе түргә үтеп ултырҙы, ти. Шунан ҡыҙ һораша башланы, ти:

– Йә, батшала булдыңмы?

– Булдым, – ти теләнсе.

– Батша ни тине һуң?

– Батша миңә: «Ниңә былайтып йөрөйһөң?» – тине. Мин: «Саҙаҡа һорайым», – тинем. Быға ҡаршы батша: «Кешенән һорағансы, ниңә Алланан һорамайһың?» – тине. «Алланан һорап ҡараным инде мин», – тинем. Шуға батшаның йәне көйҙө лә китте. «Ҡайҙа әле минең ҡылыс! Тураҡлап ташлайым хәҙер!» – тип екерҙе. Шунан ни мин сыҡ та тай, – тине, ти, теләнсе.

– Дөрөҫ. Шулай булған икән шул. Һин киткәс, мин батша янына индем дә: «Атай, ни нәмәгә йәнең көйҙө?» – тигәйнем, ул: «Минең янға бер теләнсе кергәйне. Шунан: «Һин ниндәй кеше?» – тип һорағайным, ул минең менән ирәгәләшә башланы. Шунан мин: «Ҡайҙа әле минең ҡылыс! Тураҡлайым!» – тип ҡысҡырғайным, ул сығып тайҙы, тине. Шуның һуңында мин уға: «Ай, атай! Улай итмәҫкә булған икән. Уға бер нәмә биргән булһаң, арыу булыр ине бит! Һиңә ни етмәй инде, йә», – тигәйнем ул: «Һин дә минеке. Һине лә бирергә тейеш буламмы ни инде?» – тине. Мин әйтәм: «Бир әйҙә!» «Бирҙем, бирҙем, бирҙем һине шуға!» – тине. Шулай тигәйне: «Улай булғас, хуш!» – тинем дә, кәрәк-ярағымды тейәнем дә һинең артыңдан төштөм. Хәҙер мин һинеке инде. Никах уҡы ла ал мине.

Ҡыҙ шулай тигәс, теләнсе никах уҡый.

Шунан аҡ тирмәлә шул көндө үк ҡауыша был икәү.

Ирле-ҡатынлы булғас, батша ҡыҙы:

– Беҙ бында оҙаҡ тора алмабыҙ. Ҡалаға күсәйек, – ти. Шунан былар ҡалаға күсеп киләләр. Бер фатир табып шунда йәшәп алып китәләр. Шулай йәшәй башлағас та, батша ҡыҙы:

– Кәсеп итмәй, тик ятыу килешмәҫ. Бына һиңә бер алтын тәңкә. Баҙарға бар ҙа ебәк һатып алып кил. Таҫтамал һуғырбыҙ ҙа һатырбыҙ, – ти иренә. Теләнсе, баҙарға барып ебәк килтерә. Ҡатын ебәк таҫтамал һуға ла:

– Бар, баҙарға алып барып, һатып ҡайт, – ти.

– Күпме һорайым икән? – ти ире.

– Күңелеңә оҡшаһа, нимәгә булһа ла алыштыр, әйҙә, – ти ҡатын.

Китә теләнсе баҙарға. Баҙарға килһә, бер аҡһаҡал осраны ла, ти, быға:

– Улым, таҫтамалыңды һатаһыңмы әллә? – тип һораны, ти.

– Һатам шул.
– Нимәгә бирәһең?
– Ни булһа ла ярай. Таҫтамалға таҫтамал ғына булмаһын.
– Ике ауыҙ һүҙ өсөн бирерһеңме?
– Бирермен.
Теләнсе таҫтамалын биргәйне, ҡарт:
– Киҙәнһәң дә, кинәт һуҡма, – тип әйтте, ти.
Теләнсе бисәһе янына ҡайтып килә.
– Һаттыңмы таҫтамалыңды? – тип һорай ҡатыны.
– Һаттым.
– Нимәгә бирҙең?
– Ике ауыҙ һүҙгә.
– Ярар, – ти ҡатын.
Бер-ике көн үткәйне, ҡатын иренә:
– Тағы ла ебәк килтер әле. Тағы ла таҫтамал һуғырбыҙ, – тине, ти. Теләнсе баҙарға барҙы, ти. Ебәк һатып алды, ти. Килтереп, бисәһенә бирҙе, ти. Бисәһе тағы таҫтамал һуҡты, ти. Шунан иренә бирҙе лә:
– Бар, тағы ла һатып кил, – тине, ти. Теләнсе баҙарға барғайны, йәнә теге аҡһаҡал пәйҙә булды, ти.
– Улым, таҫтамал һатаһыңмы? – тине, ти, йәнә.
– Һатам шул.
– Ни хаҡҡа?
– Таҫтамалға таҫтамал тимәһәләр, ни бирһәләр ҙә, бирәм.
– Ике ауыҙ һүҙгә бирерһеңме?
– Ярар, бирермен.
– Бирһәң, тыңла. Әгәр ҙә мәгәр һинән: «Алтын һәйбәтме, ер һәйбәтме?» – тип һораһалар, һин: «Ер һәйбәт. Ер – алтындың инәһе», – тип әйт.
Шул һүҙҙе ишеткәс тә, теләнсе боролоп ҡайта ла китә. Ҡайтып килһә, бисәһе һорай:
– Һаттыңмы таҫтамалды?
– Һаттым.
– Нимәгә бирҙең?
– Өс-дүрт ауыҙ һүҙгә бирҙем дә киттем.
– Ярар, – ти ҡатын. – Тағы бер тәңкә ал да, бар, йәнә ебәк килтер. Тағы таҫтамал һуғырбыҙ.
Теләнсе аҡсаны алды, баҙарға барҙы, ебәк алып ҡайтты, ти. Ҡатыны йәнә таҫтамал туҡыны ла:
– Бар, барып һатып кил, – тине, ти.
– Күпмегә бирермен? – тип һорағайны, ти, ире:
– Бир, әйҙә, нимәгә булһа ла, – тине, ти, ҡатын.
Барҙы, ти, ир баҙарға. Баҙарға барғайны – тағы әлеге ҡарт пәйҙә булды, ти.
– Әллә таҫтамал һатаһың инде, балам, – тине, ти.
– Һатам шул.

– Нимәгә бирәһең?

– Нимә булһа ла ярай. Таҫтамалға таҫтамал ғына булмаһын.

– Ике ауыҙ һүҙгә бирерһеңме?

– Бирермен.

– Ниәтләнһәң, булмаҫһың хур – һәр дайымда ниәттә тор, – тигәйне, ти, ҡарт, теләнсе таҫтамалын бирҙе лә китте, ти.

Ҡайтып китеп бара ине, ти, бының башына бер уй төштө, ти. «Туҡта әле, миңә бисә булһа ла, батша ҡыҙы бит әле ул. Өс таҫтамалын да бушҡа биреү ирлек булмаҫ ул. Ояты ни тора. Ҡуй, ҡабат күҙенә күренмәйем!» – тип уйланы, ти. Шул саҡ әлеге аҡһаҡалдың: «Ниәтләнһәң, булмаҫһың хур – һәр дайымда ниәттә тор», – тип әйткәне иҫенә төштө лә, ти, баш һуҡҡан яҡка сығып китәйемсе, тип ниәт ҡылды, ти. Шунан ялан тартып сыҡты ла китте, ти. Китеп ултырһа, бер ҙур дарьяға килеп сыҡты, ти. Шунда бер кешене күрҙе, ти. Ул сауҙа итеп, ил гиҙеп йөрөгән бай булып сыҡты, ти! Теләнсене күреп алыу менән:

– Миңә хеҙмәтсе булып килерһеңме? Миңә бер хеҙмәтсе кәрәк ине, – тине, ти.

– Була ул, – тине, ти, теләнсе.

– Миндә йәшәргә теләһәң, мин һиңә бер карап мал бирермен, – тине, ти, бай. Шулай итеп, теләнсе байҙа тора башланы, ти.

Бер ваҡыт караптар менән сығып киттеләр, ти, былар. Йөҙөп китеп баралар, баралар. Бара торғас, караптар шып туҡтаны ла ҡуйҙы, ти.

– Һыу төбөндә ни ҙә булһа барҙыр, моғайын. Кем дә кем сумып ҡарай, шул кешегә бер карабымды бирәм, – тине, ти, бай.

Теләнсе һыу аҫтына сума. Сумыуы була – осар дейеүҙәр быны тотоп та ала, осортоп алып та китә. Улар уны үҙҙәренең батшалығына килтерә. Осар дейеүҙәр батшаһы әйтә:

– Һине тотоп килтермәгә бер әмер биргәйнек. Беҙгә һинең гәҙел хөкөмөң кәрәк. Әгәр ҙә мәгәр, сығарып та, хөкөмөң гәҙел булмаһа, үлемең шул булыр, – ти.

Теләнсе:

– Ярар һуң. Мин һиңә гәҙел хөкөм сығарырмын, – тигән булды, ти. Осар дейеүҙәр батшаһы:

– Ни яҡшы: ер яҡшымы, алтынмы? – тип һорағайны, теләнсе:

– Һе, ер һәйбәт инде. Ер. Ер – алтындың инәһе.

Осар дейеүҙәр батшаһы:

– Хөкөмөң өсөн рәхмәт. Беҙ шул турала әлмисаҡтан бирле һүҙ көрәштерәбеҙ. Һинең кеүек әйтмәгә берәүҙең дә башына етмәне. Шул һүҙең өсөн һиңә утыҙ мискә алтын, – тине лә, ти, – барығыҙ әле һыуға сылатмай ғына килгән еренә илтеп ҡуйығыҙ, – тип фарман бирҙе, ти. Осар дейеүҙәр утыҙ мискә алтыны-

ние менән теләнсене деүләтеп карапка апарып та төшөрҙөләр, ти. Шунан һуң караптар үҙҙәренән-үҙҙәре ыҡкынып йөҙөп киттеләр, ти.

Бер ҡалаға килеп еткәйнеләр, ти, уның батшаһы байҙы хеҙмәтселәре менән үҙенә ҡунаҡҡа саҡырҙы, ти. Бай:

– Беҙ ҡунаҡ булғансы, зиннәтебеҙҙе һаҡларға һин беҙҙең карапҡа ҡарауыл ебәр инде, – тине, ти. Батша ҡарауылсы ебәрҙе, ти. Шунан былар ҡунаҡҡа килделәр, ти. Ҡунаҡ бүлмәһенә ингәйнеләр, ти, бай ултыраһы урынға теләнсе менде лә ултырҙы, ти. Байға хеҙмәтсе ултыра торған ергә сүгәләүҙән башҡа сара ҡалманы, ти.

Ҡунаҡ булдылар, ти. Шунан бай әйтте, ти, батшаға:

– Йә, тәҡсир, миндә бер һөал бар әле, – тине, ти.

– Әйт, – тине, ти, батша.

Бай әйтте, ти:

– Бына был әҙәм элек минең хеҙмәтсем ине. Мин уны, бер карап бирермен, тип яллағайным. Караптар туҡтап ҡалғас, диңгеҙ төбөн ҡараған өсөн, мин уға йәнә бер карап бирҙем. Уның ике карап зиннәте бар, минеке – ун. Шулай булһа ла, ул миңә тейеш урынға менеп ҡунаҡланы, мин уның урынына ултырҙым. Был ни тигән эш булыр?

– Йә, егет, ниңә һин кеше урынына ултырҙың? Сәбәбен әйт әле, – тине, ти, батша теләнсегә. Теләнсе әйтте, ти:

– Вәзирҙәреңде ебәр әле. Беҙҙең малдың иҫәбен алып килһендәр. Әгәр ҙә мәгәр мин ярлыраҡ булһам, язағыҙҙы бирерһегеҙ.

Батша:

– Бар, барып, был икәүҙең малының иҫәбен алып ҡайтығыҙ әле, – тип вәзирҙәренә әмер ҡылды, ти.

Вәзирҙәр байҙың ун карабындағы зиннәттең һанын сығарҙылар ҙа, ти:

– Йә, кил әле бире! – тигәйнеләр, ти, теләнсе:

– Йә, минең бер мисҡәләге алтындың хаҡын сығарып ҡарағыҙ әле, – тине, ти.

Вәзирҙәр бер мисҡә алтындың хаҡын сығарғайнылар, ул байҙың ун карабындағы малдан ҡимматерәк булып сыҡты, ти. Шунан әйтте, ти, теләнсе:

– Минең тағы егерме туғыҙ мисҡә алтыным, йәнә ике карап малым бар. Йә, шунан кем байыраҡ була инде?

Вәзирҙәр:

– Батшаға еткерәйек тип, барып, беҙ ун караптағы малдың, бер мисҡәләге алтындың иҫәбен алдыҡ. Бер мисҡә алтыны ғына ла ун карап зиннәттән ҡимматерәк булып сыҡты. Әле уның егерме туғыҙ мисҡә алтыны, ике карап малы бар, – тинеләр, ти.

Шунан батша:

– Минең фарманым шул: икеһе ике башҡа ил гиҙһен, ике башҡа сауҙа итһен, – тигәйне, бай китте, ти, йөҙөп, теләнсе

ҡалды, ти, тороп. Шунан дөйәләр яллап, алтындарын тейәп, ҡатыны янына ҡайтырға сыҡты, ти. Үҙенә бик шәп ат һатып алғайны, шуны менеп алды, ти. Үҙҙәренең ҡалаларына етер саҡта дөйәселәренә:

– Ошонда туҡтағыҙ. Төн йоҡламай, зиннәттәремде һаҡлағыҙ. Бурһыҙ ҡала булмаҫ. Килерҙәр ҙә урлап китерҙәр. Мин ҡалаға барып йоҡлармын, – тине лә, ти, китте, ти.

Теләнсе үҙенең өйөнә килеп инһә, тәҙрә төбөндә шәм янып ултыра, ҡатыны йоҡлай, эргәһендә бер егет ята, ти. «Был, моғайын ғына, минең ҡатындың һөйәре икән. Туҡта, йәнен йәһәннәмгә оҙатайым әле мин уның!» – тип, ҡылысын һурғайны, аҡһаҡалдың «киҙәнһәң дә, кинәт һуҡма» тигән һүҙҙәре иҫенә килеп төштө лә ҡылысын кире ҡынына тыҡты, ти. Шул саҡ ҡатыны килеп торҙо, ти. Торҙо ла:

– Тор, улым, атайың килгән, – тип теге егетте уята башланы, ти. Егет һикереп килеп торҙо ла атаһы менән күреште, ти. Шунан атаһына:

– Атай, ен-шайтан эйәләмәһен тип, мин гел шулай әсәйемде һаҡланым. Һин киткәндә, мин инә ҡорһағында ҡалған булғанмын икән. Хәҙер ҙурайҙым. Аллаға шөкөр, һин дә ҡайтып төштөң, – тине, ти.

Шунан һуң өсәүһе лә ҡыуаныстарынан ни ҡылырға белмәнеләр, ти. Шунан теләнсе:

– Улым, мин бик байыным: утыҙ мискә алтыным, тағы ике ҡарап малым бар. Иртәгә шуларҙы барып алып килербеҙ, – тине, ти.

Иртәгеһенә бөтә байлыҡты алып килделәр, ти. Теләнсенең улы батша булып алды, ти.

## 65. Ирәндек

Борон Урал тауҙары араһындағы бер ауылда бер бабай менән әбей булған, ти. Улар ярлының да ярлыһы булғандар: ишек алдында һерәйеп ултырған бер сыуалдан, өй тигәндәренең эсендә бер ҡоштабаҡ менән өс ҡалаҡтан, бер ижау менән өс ғүҫтаҡтан башҡа бер әйберҙәре булмаған, ти, быларҙың.

Бабай ҡартлыҡтан үлеп киткән, әбей Оморҙаҡ исемле буйға етеп килгән берҙән-бер улы менән тороп ҡалған, ти. Берҙән-бер көндө әбей улына:

– Бында һерәйеп ултырған сыуалды һаҡлап ятыуҙан файҙа сыҡмаҫ, улым. Илгә сығып, өҫ-башыңды әҙерәк бөтәйтеп, әҙ булһа ла ризыҡ табып ҡайтыу яйын ҡарар инең, – тигән.

Шунан Оморҙаҡ ситкә сығып киткән, ти. Урал буйлап күп ерҙәрҙе уткән – бер әҙәм рәтле эш тапмаған. Йөрөй торғас, бер байға ялсы булып ингән, ти, был. Өс көн үткән, биш көн үткән,

ете көн үткән, бай һаман бер ниндәй эш ҡушмай, ти, Оморҙаҡҡа. Ҡыҙыҡ бай икән был, тип уйлаған Оморҙаҡ. Аҙна үткәс, бай янына килеп:

– Тик ятыу бик екһетте бит әле, бай ағай. Берәй төрлө эш булмаҫмы? – тип һораған.

– Булыр, – тигән бай.

Бай Оморҙаҡҡа көтөүгә барып, бер ҡыҙыл быҙауҙы салып, тиреһен толоптай һыҙырып алып ҡайтырға ҡушҡан. Оморҙаҡ быны эшләгән. Шунан бай өс ҙур кесерткән тоҡ табып килтерергә ҡушҡан. Егет быныһын да үтәгән. Шунан улар ат егеп, арбаға быҙау тиреһе менән өс тоҡто һалып алып, тау араһына сығып киткәндәр, ти.

Ҡаятау тигән бер текә тау итәгенә килеп еткәс, бай атты туҡтатып, быҙау тиреһен арбанан ергә алып ҡуйырға ҡушҡан. Оморҙаҡ тирене алып ҡуйғас, бай шуның эсенә инеп, бөгәрләнеп ятырға ҡушҡан. Егет, бер ни ҙә аңламаһа ла, быныһын да эшләгән. Шуны ғына көтөп торған бай Оморҙаҡты тыштан оҙон-оҙон итеп теленгән ҡайыш менән сырмап бәйләгән дә ташлаған, ти.

Шунан һуң бай, ситкәрәк китеп, күҙәтеп тора башлаған. Күп тә үтмәй, сәмреғош саҡлы ике ҙур бөркөт килеп, тырнаҡтары менән «быҙау»ҙы эләктереп алғандар ҙа Ҡаятау башына күтәрелгәндәр. Шунда улар, суҡыштары менән суҡып, тырнаҡтары менән ҡайырып, тирене өҙгөләй башлағандар; тире эсендә тере кеше ятҡанын күргәс, ҡурҡышып, осоп киткәндәр. Тирене лә үҙҙәре менән алып осҡандар, ти.

Оморҙаҡ тороп, тирә-яҡҡа ҡараштырып алһа, үҙенән башҡа бер генә йән эйәһе күренмәй, ти. Шул саҡта Ҡаятау аҫтынан Оморҙаҡты күҙәтеп торған бай:

– Ниңә һин унда ҡатып тораһың? Аяҡ аҫтында ятҡан аҫыл таштарҙы, алтын-көмөштәрҙе ташла бында! – тип ҡысҡыра икән.

Оморҙаҡ эйелеп ҡараһа – күҙҙең яуын алып, аяҡ аҫтында, ысынлап та, алтын-көмөш, әллә нисә төрлө матур-матур аҫыл таштар ялтырап ята, ти. Оморҙаҡ шуларҙы түбәнгә ҡарай бырғата башлаған, бай кесерткән тоғона тултырып торған.

Тоҡтарҙың икенсеһе тулып барғанда, Оморҙаҡтың башына: «Был хазинаны ташлауын ташлайым да бит әле мин, үҙем нисек төшөрмөн икән һуң?» – тигән уй килгән.

– Эй, бай ағай, мин бынан нисек төшәйем? – тип ҡысҡырған.

– Һин шундағы хазинаны ташлауыңды бел! Тоҡтарҙың өсөһө лә тулғас, мин һиңә нисек төшөргә икәнен үҙем әйтермен! – тип һөрәнләгән бай аҫтан.

Оморҙаҡ байҙың әйткәненә ышанып, аяҡ аҫтында һибелеп ятҡан алтын-көмөштө, төрлө-төрлө аҫыл таштарҙы йыйып, тау

аҫтына ташлаған да ташлаған. Тоҡтарҙың өсөһө лә тулғас, бай уларҙы бәйләп арбаһына һалған да, китеп барышлай:

– Мин һине ете көн эшләтмәй ашатып тоҡтайным, был таштарың шуның өсөн булыр! Хәҙер инде һиңә шул баҫып торған урыныңда бөтөнләйгә ҡалырға тура килер. Тирә-йүнеңде абайлабыраҡ ҡара әле – унда һинең кеүектәрҙең һөйәге тулып ята! – тип ҡысҡырған.

Оморҙаҡ абайлаңҡырап ҡараһа, ысынлап та, тирә-яғында кеше һөйәктәре тулып ята икән, ти. Яуыз бай бик күп ялсыларын шулай ҡалдырып һәләк иткән икән. Оморҙаҡ, унда һуғылып, бында һуғылып, Ҡаятауҙан төшөү юлын эҙләп ҡараһа ла, бер ҙә уңайлы урын таба алмаған, ти. Ҡаятау теп-текә булып күккә күтәрелеп тора, ти. Шул текә ҡаялы булғанға ла уға Ҡаятау тигәндәр ҙә инде.

Ҡаятауҙан төшөргә бер ниндәй ҙә әмәл таба алмай, өс көн, өс төн ашамай-эсмәй, хәлһеҙләнеп ятҡанда, сәмреғош саҡлы баяғы ике бөркөт бер бүрене осортоп алып менгәндәр ҙә өҙгөләп ашай башлағандар. Шул саҡта Оморҙаҡтың башына бер уй килгән. Кеҫәһендәге бәкеһен алып, бөркөттәргә ташланған был. Бөркөттәр ҡурҡышып осоп киткәндәр, күҙҙәре суҡылған бүрене Оморҙаҡ бәкеһе менән сәнскеләп үлтергән дә тиреһен һыҙырып алып, кәүҙәһен йәшергән дә үҙе шул тирене бөркәнеп ятҡан, ти.

Күп тә үтмәй, баяғы ике ас бөркөт тағы килеп ҡунған. Оморҙаҡтың юҡлығын күргәс, бөркөттәр «бүре»гә йәбешеп, өҙгөләй башлағандар. Шул саҡта Оморҙаҡ тире аҫтынан ҡулдарын сығарып, ике бөркөттөң ике аяғын ҡыҫып тотоп алмаһынмы! Бөркөттәр ҡурҡышып саңҡ-саңҡлап, һауаға күтәрелгәндәр ҙә осоп киткәндәр. Оморҙаҡ уларҙың тояҡтарын ысҡындырмай, йәбешеп барған, ти.

Аяҡтарына аҫылған ауыр йөктән бер нисек тә ҡотола алмаған бөркөттәр, түбән төшөргә ҡурҡып, Уралдың бер бейек еренә килеп туҡтағас ҡына, Оморҙаҡ ҡулдарын ысҡындырған. Ҡурҡышҡан бөркөттәр шунда уҡ күҙҙән юғалғандар, хәйләһе барып сыҡҡан Оморҙаҡ ҡыуанысынан:

– Хәҙер инде өйрәндек, – тип ҡысҡырып ебәргән, ти. Бына шул көндән бирле был тауҙы Ирәндек тип йөрөтә башлағандар, ти.

Оморҙаҡ, Ирәндектән төшөп, тамаҡ яллыҡ булһа ла берәй эш табылмаҫмы тип, ары һуғылып, бире һуғылып, ауыл араһында йөрөп ятҡанда, теге байға йәнә тап булған, ти.

– Мине ялсы итепме, көтөүсе итепме эшкә алмаҫһығыҙмы икән, бай ағай? – тип һораған Оморҙаҡ.

Был Оморҙаҡты танымаған. Ни өсөн тиһәң, берҙән, уны һаҡал-мыйыҡ баҫып бөткән булған, икенсенән, Оморҙаҡтың иҫән йөрөп ятыуы байҙың уйына ла инеп сыҡмаған.

– Миңә бер унған ғына ялсы кәрәк, – тип, бай Оморҙаҡты үҙенә алып ҡайтып киткән.

Өс көн үткән, биш көн үткән, ете көн үткән, бай, теге саҡтағы һымаҡ, һаман бер ниндәй ҙә эш ҡушмаған. Оморҙаҡ һигеҙенсе көндө:

– Тик ятыу бик екһетте бит әле, бай ағай, берәй төрлө эш булмаҫмы? – тип һораған.

– Булыр, – тигән бай.

Бай Оморҙаҡҡа көтөүгә барып, бер ҡыҙыл быҙауҙы һуйып, тиреһен һыҙырып алып ҡайтырға ҡушҡан. Оморҙаҡ быны эшләгәс, бай уға өс кесерткән тоҡ табып килтерергә ҡушҡан. Быныһы ла булғас, ат егеп, арбаға быҙау тиреһе менән тоҡтарҙы һалып алып, тау араһына сығып киткәндәр.

Ҡаятау итәгенә килеп еткәс, бай атты туҡтатып, арбалағы быҙау тиреһен ергә йәйеп һалдырған да Оморҙаҡҡа шуға уранып ятырға ҡушҡан.

– Бер ни ҙә төшөнмәйем бит әле, бай ағай, ни эшләргә кәрәк икәнен тәүҙә үҙең күрһәтеп бирер инең! – тигән Оморҙаҡ.

– Төшөнмәҫлек бер нәмә лә юҡ бында, бына шулай ятырға ғына кәрәк, – тип, байҙың быҙау тиреһенә ураныып ятыуы булған – Оморҙаҡтың уны сырмап бәйләп ташлауы булған.

– Эй, ни эшләүең был, улым? Сығар мине тире эсенән! – тип, ялынып-ялынып ҡысҡыра башлаған бай.

Оморҙаҡ быға ҡарап, рәхәтләнеп көлөп торған арала сәмрегош саҡлы ике ҙур бөркөт килеп, тирене, йәш быҙау икән тип эләктереп алып, Ҡаятау түбәһенә осортоп мендергәндәр ҙә, суҡыштары менән суҡып, тырнаҡтары менән тарткылап өҙгөләй башлағандар, ти. Тире эсендә тере кеше ятҡанын күргәс, бөркөттәр ҡурҡышып осоп киткәндәр, ти.

Байҙың, тире эсенән сығып, аяҡҡа баҫыуын күргәс, Оморҙаҡ тау аҫтынан:

– Эй, бай, нимә ҡарап тораһың, шундағы алтын-көмөштө, төрлө-төрлө аҫыл таштарҙы ырғыта башла бында! Минең кеүек йәһәт-йәһәт эшлә! – тип ҡысҡырған, ти.

Бай шул саҡта ғына ялсыһының Оморҙаҡ икәнен белгән.

– Оморҙаҡ балаҡайым, һин бынан нисек төшә алдың һуң? Мине лә өйрәт әле! – тип ялына башлаған, ти, бай.

– Күп телеңә һалынып торма, шундағы хазинаны ташлауыңды бел! Тоҡтарҙың өсөһө лә тулғас, нисек төшөргә икәнен өйрәтермен! – тип ҡысҡырған Оморҙаҡ.

Бай Ҡаятау башынан алтын-көмөштө, төрлө-төрлө аҫыл таштарҙы түбәнгә ташлап торған. Оморҙаҡ уларҙы кесерткән тоҡтарға тултырып торған, ти. Өс тоҡ та тулғас, Оморҙаҡ, уларҙы бәйләп, арбаға күтәреп һалған да, байға ҡарап:

– Эй, бай, тирә-яғыңды абайлабыраҡ ҡара әле, унда һинең этлегең арҡаһында һәләк булған кешеләрҙең һөйәктәре тулып

ята. Тауҙан нисек төшөргә икәнен һин ана шуларҙан һора! – тип, бер йөк хазина менән үҙенең ауылына, әсәһе янына ҡайтып киткән, ти.

Бай күпме генә ҡысҡырынмаһын, ни саҡлы ғына екеренмәһен, уны ишеткән-ниткән кеше булмаған, ти. Тик шул сәмреғош ҙурлығы ике бөркөт кенә, үҙҙәренә ем өсөн, байҙың бөтөнләй хәлһеҙләнеп йығылыр сағын көтөп ултырғандар, ти.

## 66. Юлда табылған бәхет

Борон заманда бер бабайҙың өс улы булған, ти. Улар яҡшы ғына йәшәгәндәр. Көндәр артынан көндәр, йылдар артынан йылдар үтеп торған. Был өс малай үҫеп еткән. Улар аталарына:

– Атай, беҙгә бәхет кәрәк ине бит әле, – тигәндәр, ти.

Атаһы:

– Һеҙҙең бәхетегеҙ юлда, үҙегеҙ эҙләп табырһығыҙ. Тик юлығыҙҙа үлтергән януарҙарҙың майын билегеҙгә бәйләгеҙ, – тигән.

Юлға сығырға бер нисә көн төйнәлгәндән һуң, йәйҙең йәмле көнөндә бәхет эҙләп сығып киткәндәр, ти, былар. Кис булғас, бер ағас төбөнә ял итергә туҡтағандар. Оло ағайҙары Буранбай – ҡарауыллап торорға, ә бәләкәйҙәре йоҡларға тейеш булалар. Буранбай ҡулына ҡылысын тотоп ҡарауылға баҫа.

Бер ваҡыт, төн уртаһы етәрәк, былар янына айыу килә башлай. Егет айыуҙы үлтереп, майын ҡырҡып алып биленә бәйләгән. Шул арала таң да атҡан. Буранбай туғандарына бер нәмә лә белгертмәгән. Ашап-эсеп алғас, ағайҙар тағы ла оло юлға сыҡҡандар.

Эй киткәндәр, ти, былар, эй киткәндәр – байтаҡ ҡына юл үткәндәр. Бара торғас, оҙон көндө кис еткергәндәр. Егеттәр бер ағас төбөнә ялға туҡтағандар. Уртансы егет – Бикмәт, ҡылысын ҡулға тотоп, һаҡта тора башлаған. Төн урталары етеүгә, быларға бер һеләүһен килә башлаған. Бикмәт тиҙ генә ҡылысы менән һеләүһенде үлтергән дә, майын киҫеп алып биленә бәйләгән. Таң атҡан. Бикмәт туғандарына бер ни ҙә әйтмәгән. Тамаҡ ялғап алып, өс туған тағы ла юлға сыҡҡан.

Өсәүләп эй баралар, ти, эй баралар, ти. Бара торғас, тағы ла кис булған, ти. Ял итергә туҡтағандар. Барыһы ла бик ныҡ арығандар ине, ти. Ике ағай баштарын терәү менән йоҡоға талды, ти. Ағалары йоҡлағанда, иң кесе ҡустылары Баймырҙа һаҡта торорға тейеш була. Ҡылысын ҡулына тотоп ҡарауылға баҫа.

Төн урталары етә башлауға шыуышып ҡына былар өҫтөнә аждаһа килә башлаған. Баймырҙа бик сос булған. Аждаһаның хәйләһен бик тиҙ төшөнөп алған. Боҫоп ҡына барған да бер

киҙәнеүҙә уның башын өҙә сапҡан. Баймырҙа аждаһаның майын киҫеп алып биленә бәйләгән. «Тағы ярты төн бар әле», – тип уйлап ултырғанда, урман эсендә бер ут емелдәгәнен күреп ҡалған, ти. Егет ут күренгән ергә йүгереп барған. Барып етһә, бер ҙур ғына өй күргән. Өйгә инергә теләп, ишеген асып ебәргән дә түргә үк үткән. Бер ҡарсыҡ ҡаҙанда май ҡайнатып тора икән. Бәһлеүәндәй был егетте күреп әбей аптырап ҡалған.

– Һин нисек килеп инә алдың? – тип һораған әбей. – Бында бит ҡош та үтеп инә алмай, – тигән.

Әбейҙең үҙенең уландары булған, ти. Әбей Баймырҙаны уландары янына алып барған. Егеттәр унан:

– Бында нисек килдең, ни йомош менән? – тип һораша башлағандар. Әбейҙең уландары ун ике булған. Ҡиәфәттәре бик ҡурҡыныс, үҙҙәре хәрәкәтсән, күҙҙәре уйнап тора, ти. Быларҙың кемдәр икәнлеген егет тиҙ генә аңлап алған. Баймырҙа ҡаушамай ғына яуап биргән:

– Һеҙгә дуҫ булып килдем!

Егетте ашатҡандар, эсергәндәр, ти. Шунан былар тиҙ генә кейенеп, егетте лә кейендереп, батша һарайын баҫырға тип, сығып киткәндәр.

Әллә ҡайҙан күҙҙең яуын алып торған батша һарайына барып еткәндәр. Ҡойма тишеге аша тәүҙә Баймырҙа ингән. Уның артынан бер-бер артлы ун ике егет һарай эсенә инә башлаған. Баймырҙа тишектән сыҡҡан бер башты ҡылыс менән ҡыйып торған. Шулай итеп, Баймырҙа ун ике ҡараҡты ла юҡ иткән, ти.

Һарайҙың ишеге төбөндә ҡарауылсы, асҡысын баш бармағына элеп, йоҡлап киткән булған икән, ти. Егет тиҙ генә тегенең ҡулынан асҡысын ала ла эскә инә. Һарай эсенә инһә, ни күҙе менән күрһен, ебәккә генә төрөнөп өс ҡыҙ йоҡлап ята, ти. Егет тиҙ генә улар янына барып, өлкән ҡыҙҙың алтын балдағын систереп алған. «Быныһы өлкән ағайыма», – тип уйлаған, ти. Уртансы ҡыҙҙың алтын беләҙеген алған да: «Быныһы уртансы ағайыма», – тип уйлаған. Иң кесе ҡыҙҙың алтын ҡатаһын үҙенә тип алған, ти. Шунан асҡысты кире һаҡсының баш бармағына элеп, таң атыуға ағалары янына килеп тә еткән. Ағаларына бер нәмә лә һөйләмәгән.

Ашап-эсеп алғас, өс ағай тағы ла юлға ҡуҙғалған. Эй киткәндәр, эй киткәндәр, ти. Билдәһеҙ ара үтеп, бик ныҡ арығандар, ти. Бер ауылға саҡ килеп еткәндәр. Ауылдың иң осондағы өйгә фатирға ингәндәр.

Ошо ваҡытта, ун ике ҡараҡты үлтереп, ҡыҙҙарының әйберҙәрен алған кешене батша эҙләтә башлаған булған, ти. Ауыл кешеләре:

– Бында бер йортта өс мосафир бар. Шул егеттәрҙер, – тип әйткәндәр, ти, батша ғәскәрҙәренә. Батша ғәскәрҙәре килеп тә еткәндәр – егеттәрҙе тотоп алып, батшаға алып та килгәндәр. Егеттәр ҡата, беләҙек, балдаҡты, билдәренә бәйләнгән майҙы

өҫтәлгә һалғандар, ти. Ҡараҡтарҙы кесе туған – Баймырҙа үлтергәне асыҡланған. Ҡараҡтарҙан ҡотолоу шатлығынан батша өс егеткә өс ҡыҙын биргән. Егеттәрҙең ата-әсәһен алдырып, ат еткән ергә ат, хат еткән ергә хат ебәреп, ҡунаҡ йыйып, бөтә тирә-яҡта быға булмаған, ҙур туй үткәргәндәр, ти. Өс кейәүен, уларҙың ата-әсәһен батша үҙ һарайында ҡалдырған, ти. Батшаның шатлығының сиге булмаған, сөнки ҡараҡтар бер нисә йыл рәттән уның мөлкәтен талаған булғандар икән.

Үҙе бик ҡартайған булғанлыҡтан, батша кесе кейәүен үҙ урынына ултыртҡан. Айыу үлтергән Буранбайҙы баш вәзир ҡылған. Һеләүһен үлтергәнен ғәскәр башы иткән. Өс ағай бик тыныс, татыу ғүмер иткән, ти. Өс туған бына шулай бәхетте юлда тапҡандар, ти. «Хәрәкәттә - бәрәкәт», тип бушҡа әйтмәгәндәр икән шул ул.

## 67. Батша һайлау

Әүәл һинең менән мин йәшәгән ерҙә, бабай илә* әбей булып, шуларҙан өс ул тыуған, ти. Ай артынан йыл үтеп, малайҙар егет булып үҫеп еттеләр, ти. Өс улдың да өйләнгеһе килде, ти. Тик, аталары бик ярлы булғанға, былар өйләнә алмай йәшәнеләр, ти.

Ул заманда ҡалымды бик күп һорағандар.

Бер саҡ быларҙың батшалары үлеп киткән. Батшаның бер улы ла ҡалмағас, уның берҙән-бер ҡыҙына батша һайларға ҡушҡандар. Был ҡыҙ бик матур булған. Күргән берәүҙең уға күҙе төшкән, ти. Ҡыҙ үҙенә кейәү, илгә батша булыр кешене иң йөрәклеләрҙән һайларға ҡарар иткән. Килә икән, ти, уға күрше батшалар, шаһзадалар килә, ти. Килгән береһе иҫән ҡайтмай, ти. Батша булам, кейәү булам тигән кешене тәүге кистә бер яңғыҙын бер бүлмәгә йоҡларға һалалар икән. Төн етте ниһә, уға төрлө убырҙар, мәскәйҙәр, албаҫтылар һүрәтенә кереп, үлгән батша күренә икән. Шунан кейәү булыр егет ҡото осоп үлә лә ҡуя икән. Шул рәүешле бик оҙаҡ батша һайлай алмай йонсоғандар, ти.

Бабайҙың өс улы ла был бәхетте һынап ҡарарға булған. Тәүҙә оло улы киткән, ти. Уны батша ҡыҙы яғымлы ғына ҡаршы алған, һыйлаған, һуңынан йоҡо бүлмәһенә оҙатҡан, ти. Төн уртаһы еткәс, нимәлер дөбөрләй башланы, ти. Ҡапыл ишек асылып китте лә, ти, ниндәйҙер ут аҡрын ғына килә башланы, ти. Ҡурҡыуынан оло улдың йөрәге ярылды, ти. Оло ул ҡайтмағас:

– Ни булһа ла булыр, – тип уртансы улы китте, ти.

Уны ла батша ҡыҙы яғымлы ҡаршы алды, ти, ашаттыэсерҙе лә йоҡо бүлмәһенә оҙатты, ти. Төн уртаһы еткәйне, тағы ниҙер дөбөрләй башланы, ти. Егет ҡурҡмаҫ өсөн, ҡолағына

мамыҡ тыҡты, ти. Ҡапыл ишек асылып китеп, ниндәйҙер ут яҡынлаша башланы, ти. Егет дер ҡалтырай башланы, ти. Ул, эҫеле-һыуыҡлы булып китеп, һалҡын тиргә күмелде, ти. Бүлмәгә тағы ниндәйҙер һөмһөҙ йән килеп инде, ти. Ул карауатҡа килде лә егеттең юрғанын тартып ала башланы, ти. Егет тамам ағарынды, күҙҙәре маңлайына менде, ти. Ҡотһоҙ йән егеттең аяҡ осон ялап алыуы булды, ти, егет «а-а-а!» тип ҡысҡырып ебәрҙе лә һушын юғалтты, ти. Кемдер шунан кереп, уның муйынын быуҙы, ти.

Иртәгеһен эй көтәләр, ти, өйҙә егетте аталары, эй көтәләр ти. Егет ҡайтманы, ти. Инде кесе улға сират килеп етте, ти. Ата-әсәһе ни тиклем генә ебәрмәҫкә тырышып ҡараһа ла, егет, уларҙың ай-вайына ҡарамай, китте, ти, сығып.

Кесе ул бик матур булған. Уны күреп батша ҡыҙы таң ҡалды, ти. Бик оҙаҡ ҡыйманы, ти, быны һынарға. Һынамаҫ ине – кейәү кәрәк, илгә батша кәрәк. Ахырҙа йоҡо бүлмәһенә оҙатты, ти, быны ла. Баяғыса төн уртаһы еткәйне, ниҙер дөбөр-шатыр килә башланы, ти. Егет ҡурҡырға уйламай ҙа, исмаһам. Йырлап тороп ебәрҙе, ти, ҡысҡырып тороп, оҙон көйгә һалдырып. Тыштан килгән тауыш та тынып ҡалғандай булды, ти. Шунан тағы дөбөрләй, шатырлай башланы, ти. Ишек асылып китте, ти. Ниндәйҙер ут килеп инде лә аҡрын ғына егет янына килә башланы, ти. Егеттең ғәжәпләнеүҙән ауыҙы асылды, ти. Ятағынан төштө лә, егет саҡматашын сағып, ут яндырып ҡараһа, өҫтөнә май шәме ултыртылған бер гөбөргәйелдең әкрен генә килгәнен күрҙе, ти. Гөбөргәйелде шунда ултырған бер һандыҡҡа һалып бикләне лә, май шәмен баш аҫтына ҡуйып, менеп ятты, ти, тағы. Аңғанса бүлмәгә бер һөмһөҙ йән эйәһе килеп инде лә егеттең юрғанын тарта башланы, ти. Егет ырғып тороп һәрмәһә, ниндәйҙер мөгөҙ тотоп алды, ти. Ҡапшабыраҡ ҡараһа, был һөмһөҙ йән кәзә булып сыҡты, ти. Кәзәне мөйөшкә алып барып бәйләне лә, икенселәй менеп ятты, ти. Был юлы ишектән түбә таҡтаһына тейерҙәй булып бик оҙон, кеше һынлы, яман ҡурҡыныс, ап-аҡ нәмә килеп инде, ти. Аҡ шәүлә үҙе туҡтауһыҙ үкерә, ти. Егет сөйҙән бүркен алды ла аҡ шәүләнең башына бәрҙе лә ебәрҙе, ти. Шәүлә кинәт кенә икәүләнеп, яртыһы иҙәнгә барып төштө, ти. Егет саҡма сағып ут ҡабыҙһа, иҙәндә таяҡтан эленгән аҡ сепрәк менән йылмайып торған һылыу батша ҡыҙынан башҡа бер ни ҙә күрмәне, ти. Егет аптырап торған мәлдә, батша ҡыҙы йүгереп килде лә муйынына һарылды, ти.

– Һай-һай, егет. Үҙең дә йөрәкле икәнһең. Бөгөндән башлап мин дә һинеке, ил дә һинеке, – тине, ти.

Шунан былар өс көн, өс төн туй үткәрҙеләр, ти. Бабай менән әбейҙе лә барып килтерҙеләр, ти. Әле булһа ла донъя көтөп, йөн тетеп, һәйбәт кенә батшалыҡ итеп, йәшәп яталар, ти.

Бына нисек ул! Һәр саҡ шулай йөрәкле булырға кәрәк!

# II. МӨХӘББӘТ, ТОҒРОЛОҠ ҺӘМ ХЫЯНАТ

## 68. Фәҡир кейәү

Борон-борон заманда бер егет менән ҡыҙ бер-береһен бик яратып йөрөгәндәр, ти. Тик егет ярлы икән, ҡыҙ бер байҙың берҙән-бер ҡыҙы булған. Егет ҡыҙға:

– Һине урлап алам. Әйҙә, ҡасып ҡушылайыҡ, – ти икән.

Ҡыҙ:

– Юҡ, беҙ улай итмәйек. Һин атайға кил, ул нимә әйтер, – тигән.

Егет ҡыҙҙың ата-әсәһенә килгән, үҙенең ҡыҙҙы яратҡанлығын әйткән, ҡыҙҙы үҙенә кәләш итеп алырға уйлауын белдергән. Тегеләр егеттән көлмәксе булғандар. Бабай:

– Ярай, икенсе тапҡыр килерһең. Тик килгәнеңдә ат менән дә килмә, йәйәү ҙә килмә, юл менән дә килмә, юлһыҙ ҙа килмә – тигән.

Егет икенсе тапҡыр уларға килергә сыҡҡан. Ул һыйыр егеп алған да, ти, бер ҙә юлдан килмәй икән, тик көрт ярып килгән. Килгән, ти, был ҡыҙҙың өйөнә. Бабай тағы ла егеттән көлөргә уйлаған.

– Бына минең бер ҙә яҡмаған ташландыҡ өйөм бар. Һин бөгөнгә шунда йоҡла. Әгәр ҙә туңып үлмәһәң, ҡыҙҙы алырһың, – тигән, ти.

Егет был өйгә кергән. Өй, эт бәйләһәң дә, тормаҫлыҡ һалҡын икән. Егеттең өҫтөндә йүнле бер нәмә лә булмаған. Был өшөй башлай. Өшөгәс, егет ошо өйҙә торған ҙур таш бүкәнде ишек төбөнән түргә, түрҙән ишек төбөнә күтәреп йөрөй башлаған. Шулай йөрөй торғас, тирләп сыға. Йоҡларға ятҡан, ти, был. Төндә өшөп китһә, шулай таш бүкәнде бер урындан икенсе урынға күсереп йылына ла тағы йоҡларға ята икән.

Таң ата. Егеттең иҫән-һау икәнен күргәс, ҡыҙҙың аталары уны һуңғы тапҡыр һынап ҡарамаҡсы булалар. Бабай әйтә, ти:

– Минең әбей икмәк бешерә. Һин мейестән сыҡҡан бер икмәкте эҫеләй көйө ваҡ ҡына итеп тураҡлап тор.

– Ярай, – тигән дә егет өйгә ингән.

Әбей мейестән сығарған бөтә икмәкте тураҡлап бөттө, ти, был.

Бабай менән әбей:

– Ярай, донъя көтөрлөк кеше икәнһең, – тип ҡыҙҙарын ярлы егеткә биргәндәр, ти.

## 69. Ҡыҙ сере

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер ҡарт. Уның иҫәр генә улы булған. Атаһы ҡартайғас, эшләргә кеше булмағанлыҡтан, улар ас йәшәргә мәжбүр булғандар. Атаһы бер көн улын саҡырып алған да:

– Улым, һин ҡалаға барып, эш эҙләп кил, астан үлергә ярамай бит, – тигән.

Иҫәр улы ҡалаға киткән. Ҡалаға барып еткәс, бер бай йортҡа инә. Ҡапҡаһы бейек. Тимер. Ишек алды һәйбәт. Баҡсалы. Баҡса эсендә бай үҙенең ҡатыны менән сәй эсеп ултыра, ти. Уларҙың эргәһендә йомошсолары себен ҡыуып торалар, ти. Егет сәй эсеп бөткәндәрен көтөп тора ла байҙан эш һорай. Бай сусҡа көтөргә ҡуша.

Егет сусҡа көтә башлай. Ул өс сусҡаның береһен бейергә, береһен уйнарға, береһен йырларға өйрәтә. Ял иткән саҡта сусҡаларын бейеткән, уйнатҡан, йырлатҡан, шулай итеп күңел асҡан.

Бер ваҡыт егет янына бер бик матур ҡыҙ килеп сыҡҡан. Ҡыҙ егеттең сусҡаларҙы бейетеп, уйнатып, йырлатып ултырыуын ҡарап торған да бер сусҡаһын һораған. Егет бирмәгәс, ул былай тигән:

– Минең сәс арамда бер серем бар шуны тапһаң, сусҡаңды алмайым, тапмаһаң, береһен алам, – тигән.

Егет серҙе тапмаған. Ҡыҙ бер сусҡаны алып киткән.

Бер аҙ ваҡыт үткәс, алтын көймәгә ултырып, әлеге ҡыҙ тағы килә, тағы бер сусҡаны алып китә. Өсөнсө килгәндә лә егет ҡыҙҙың серен тапмай. Ҡыҙ өсөнсө сусҡаны алам тиһә, егет байҙың, өсөнсө сусҡаны ла юғалтһаң, тереләй тиреңде тунармын тигән һүҙен хәтерләп, сусҡаны бирмәй. Егет бирмәгәс, ҡыҙ үҙ серен үҙе әйтә лә сусҡаны ала. Егет, байҙан ҡурҡып, ҡасып ҡайтып китә. Атаһына:

– Бай аҡса бирмәне, – ти.

Бер ваҡыт ҡыҙҙың атаһы оло туй яһарға була.

– Кем дә кем ҡыҙымдың серен таба, шул уның кейәүе була, – тип тирә-яҡҡа хәбәр тарата. Туйҙа байҙар ҡыҙ серен эҙ-

ләргә, ярлылар ҡарап ҡына торорға тейеш була. Ҡыҙҙың янында өс сусҡа ла бар, ти. Дөрөҫ әйтмәгән кешеләрҙең шунда уҡ башын киҫкәндәр. Төрлөсә әйтеп бөтәләр: имеш, ҡыҙҙың аяҡ аҫтында соҡоро бар, йәки ул баҫҡан ерҙә шишмә сыға. Берәүһе лә дөрөҫ булмай. Шул саҡ әлеге фәҡир егет үҙенең ҡыҙ серен табырға теләүен әйтә. Әйтһә лә, уны ебәрмәйҙәр. Егет оҙаҡ ныҡышҡас ҡына, рөхсәт итәләр. Егет ҡыҙҙың сәсе араһынан ике алтын сәс таба. Бөтәһе лә гәжәпләнәләр. Ярлылар шатлана. Тик бай ҡыҙын ярлыға бирергә теләмәй, егеттәрҙе теҙеп ултырта ла:

– Ҡыҙ кем янына барһа, шуға бирәм, – ти.

Ҡыҙ килә лә ярлы егетенә хушбыйҙар, байҙарға теләһә нәмә һибеп китә. Байҙың һаман биргеһе килмәй.

– Кем һәйбәт бейей, ҡыҙҙы шуға бирәм, – ти.

Бай малайы бейергә төшһә, әлеге бейеүсе сусҡа уның көйөмен һыпыра ла ала. Ярлы егет бейергә төшкәс, бер сусҡа бейеп китте, икенсеһе йырлап, өсөнсөһө уйнап ебәрҙе, ти.

Бай ҡыҙын ярлы егеткә бирергә риза булды, ти.

## 70. Балҡантаҙ

Борон бер бабай менән әбей булған. Бер заман әбейҙең бер малайы тыуған. Уға Балҡантаҙ тип исем ҡушҡандар. Оҙаҡ та тормай, бабай үлеп киткән. Малайҙы әсәһе тәрбиәләп үҫтергән. Тора биргәс, ул да үлгән. Шыпа етем ҡалған Балҡантаҙ. Шунан бер көн өйөн һатып, сығып киткән, ти, был, эш эҙләп. Арыған, талған, асыҡҡан, сарсаған, хәле бөткән малайҙың. Бер ҙур ҡала ситенә еткәс, хәл йыйырға ултырған. Ултыра торғас, бер бабай килеп сыҡҡан:

– Әссәләмәғәләйкүм. Ни эшләп ултыраһың? – тигән.

– Вәғәләйкүмәссәләм! Талыҡтым. Шуға хәл йыйып ултырам. Алыҫтан килдем. Эш эҙләп йөрөйөм. Бер батша хеҙмәткә алмаҫмы икән тип, Мәк* ҡалаһына китеп барам, – тигән Балҡантаҙ.

Улай булғас, мин һине малайлыҡҡа алам. Минең алты улым, ете киленем, бер ҡыҙым бар. Уландарым көллөһө лә һунарсы, гелән һунарҙа йөрөйҙәр. Һин ҡуй көтөрһөң, кискеһен минең шул берҙән-бер ҡыҙымды ҡарауылларһың, — ти теге ҡарт.

Егет, риза булып, теге бабай менән китә. Был бабай батша булып сыға. Алты улы ла, ысынлап, шәп һунарсы икән. Аҡ көйөктәрҙе, күк бүреләрҙе һуғып алып йөрөйҙәр, ти. Иң олоһоноң ике бисәһе бар икән. Уландарынан батша бер ҙә эш эшләтмәй икән.

Хеҙмәтсе егет бик әрһеҙ булып сыға, арымай-талмай эшләй, ти. Батша быға бик ҡыуана.

Бер мәлде уландары һунарҙан бик уңып ҡайталар. Ҡайталар ҙа аталарынан һорай ҡуялар.

— Атай! — тиҙәр, — беҙ уңғанмы, әллә хеҙмәтсе малайың уңғанмы? — тиҙәр.

— Һеҙ уңған, һеҙҙән бик* хеҙмәтсе малайым уңған: кискеһен йорт тирәһендә бер аяҡ тауышы ишетелмәй, көндөҙ ҡуйҙар туйып ҡайта, — тип Балҡантаҙҙы маҡтаған, ти, батша. Кесе улы атаһына әйтә:

— Атай, — ти, — беҙҙең бер һалдат ҡарындашты һората, күҙе төшкән, — ти.

— Ҡыҙымды бер кемгә лә былай ғына бирмәйем. Йомаҡ өйҙөртәм, кем дә кем йомаҡҡа яуап таба, шуға бирәм, тапмаһа, башын ҡырҡтырам, — ти батша.

— Улай ярамай, атай, бер ҙә юҡҡа, затлы кешеләр улар. Бер ниһеҙ берәй кеше йомағынды табыр ҙа ҡарындашты алыр, — тип уйынан кире күндерергә итә тегеләр.

Батша күнмәй:

— Кешем күп. Үлһә үлерҙәр. Йортҡа өс йөҙ егет саҡырам, йомаҡ өйһөндәр, таба алмаһалар, өс йөҙөнөң дә башын ҡырҡтырам, — тип үҙ һүҙен ныҡый.

— Кешене бушҡа, юҡҡа ҡыраһың, — тип уландары асыуланып сығып китәләр.

Был саҡта оло еңгәнең бер ҡустыһы ҡунаҡҡа килгән була, уртансы еңгәнең энеһе батша ғәскәренә һалдатҡа алына (былары батшаның йәш ҡоҙалары була инде). Хәҙер батша өс йөҙ кешене саҡырта, араһында әлеге ике ҡоҙаһы ла була. Берәмләп индереп йомаҡ өйҙөрә башлай. Йомаҡтың яуабын берәүһе лә табалмай. Һалдаттар быларҙың баштарын ҡырҡып бәреп кенә торалар, ти. Ике ҡоҙаны ла үлтереп, тупһаға һуҙып һалалар. Еңгәләр килеп инә. Ни күрәләр — энеләре үлгән. Оло килене батшаға:

— Һин минең мырҙамды үлтерҙең. Маҡтаулы ҡыҙыңды көтөүсеңә бирҙереп, хур итмәһәмме!.. — тип өҫтәл һуғып сығып китте, ти.

Шул сығыуында уҡ Балҡантаҙҙы саҡырып хәбәр ебәрә. Уны шул сәғәттә килтереп тә еткерәләр. Теге ҡатын аулаҡта ғына Балҡантаҙға эштең ниҙә икәнен төшөндөрә. Шунан батша йортона алып бара. Йортҡа барып ингәс, Балҡантаҙ тамаша ҡыла*.

— Еңгә, был ниндәй ҡорбандар?! Һуғыш булдымы әллә? — тип ағарынып китә.

— Әлеге шул йомаҡтарҙы таба алмағанға, батша үлтертеп бөтөрҙө. Бар әле, һин дә инеп сыҡ! — ти.

— Оялам бит әле был алама кейем менән, — ти Балҡантаҙ.

— Оялма. Ин дә, алама кейемеңде һалмай-нитмәй, иҙән уртаһына ултыр, — тип батша килене һаман көсләшә.

Балҡантаҙ инде, ти. Ҡыҙҙы күрҙе, ти. Ҡыҙҙы күргәйне — ултыра төштө, ти. Ҡыҙ шул тиклем матур, таҙ, һүҙ әйтә алмай, ауыҙын асып текләп тик ултыра, ти. Ҡыҙ әйтә:

– Балҡантаҙ, сығып сисен дә, инеп, минең йомағымды тап. Тапһаң, һиңә барам! – ти, үҙе көлә.

Балҡантаҙ йылдам ғына сығып китеп, сисенә һалып инә. Ҡыҙ ата-әсәһе менән килеп рәхәтләнеп көлә, ти.

– Бынамын тигән һалдаттар алалманы, был бахыр ҙа үлемен эҙләп килгәндер инде. Ултыр ултырғысҡа! – тиҙәр.

Балҡантаҙ бүкәнгә ултыра.

Шунан, ни, ҡыҙ тотона йомаҡ өйөргә, Балҡантаҙ яуап бирергә.

*–Ағас башы алт(ы) айыр(ы) –*
*Ул ни булыр, Балҡантаҙ?*
*–Ағас башы алт(ы) айыр(ы) –*
*Алт(ы) ағайың түгелме?*

Исе китеп, батша тәхетенән ҡолап төштө, әсәһе һаман ултыра, ти, әле.

*–Екән төбө ет(е) айыр(ы) –*
*Ул ни булыр, Балҡантаҙ?*
*–Екән төбө ет(е) айыр(ы) –*
*Ете еңгәң түгелме?*

Шулай тигәйне – әсәһе ҡолап төштө, ти. Хурланып-ғәрләнеп, ҡыҙ һаман ултыра, ти, таҙҙы еңеренә ышанып.

*–Ике ҡауын нык һимеҙ –*
*Ул ни булыр, Балҡантаҙ?*
*–Ике ҡауын нык һимеҙ –*
*Ик(е) имсәгең түгелме?*
*–Түңәрәк күлдә эт өрә –*
*Ул ни булыр, Балҡантаҙ?*
*–Түңәрәк күлдә эт өргән –*
*Балҡан айырыҡ* түгелме?*
*–Ялан ерҙә ут яна –*
*Ул ни булыр, Балҡантаҙ?*
*–Ялан ерҙә ут янған –*
*Бүре күҙе түгелме?*

Ҡыҙ бик ғәрләнә, хурлыҡҡа түҙә алмаҫтай булып та китә. Ҡалайтһын, хәл юҡ, тағы һамаҡлап китә:

*–Һин таҙ менән булғансы,*
*Был хурлыҡты күргәнсе,*
*Күк сабаҡ мин булайым,*
*Даръяға инеп сумайым!*
*–Күк сабаҡ та һин булһаң,*
*Күк суртан мин булырым,*

*Даръянан тотоп алырым!*
*–Һин таҙ менән булғансы,*
*Был хурлыкты күргәнсе,*
*Аҡ сабаҡ мин булайым,*
*Диңгеҙгә төшөп сумайым.*
*–Аҡ сабаҡ та һин булһаң,*
*Аҡ суртан мин булырым,*
*Диңгеҙҙән тотоп алырым!*
*–Һин таҙ менән булғансы,*
*Был хурлыҡҡа түҙгәнсе,*
*Күк күгәрсен мин булып*
*Күккә менеп китәрем.*
*–Күк күгәрсен һин булһаң,*
*Күк ҡарсыға булырым,*
*Күктән тибеп алырым.*
*–Һин таҙ менән булғансы,*
*Был хурлыкты күргәнсе,*
*Аҡ күгәрсен мин булып*
*Һауаға менеп китәрем.*
*–Аҡ күгәрсен һин булһаң,*
*Аҡ ҡарсыға мин булып*
*Һауанан тибеп алырым.*
*–Һин таҙ менән булғансы,*
*Был хурлыкты күргәнсе,*
*Аҡ ҡарсыға мин булып*
*Болотҡа менеп китәрем.*
*–Аҡ ҡарсыға һин булһаң,*
*Аҡ бөркөткәй мин булып*
*Болоттан тибеп алырым!*

Шул саҡ ҡыҙҙың оло еңгәһе килеп инә (ни эшләйҙәр икән, тип ингән инде белергә). Ҡыҙ еңгәһенә ҡарап һамаҡлай:

*–Айран бирсе был таҙға,*
*Айланып сығып китһәсе!*

Таҙ тағы яуапһыҙ ҡалмаған:

*–Айран бирһәң, эсәрем,*
*Айланып һине ҡосарым!*
*–Ҡорот бирсе был таҙға,*
*Ҡорошоп сығып китһәсе!*
*–Ҡорот бирһәң, эсәрем,*
*Ҡорошоп һине ҡосарым!*
*–Өйрә бирсе был таҙға,*
*Өйөрөлөп сығып китһәсе!*
*–Өйрә бирһәң, эсәрем,*
*Өйөрөлөп һине ҡосарым,–*

ти ҙә Балҡантаҙ еңгә менән сығып китә.

Ағалары, һунарҙан ҡайтҡас, шул хәтле ҡорбандарҙы күреп, тамаша ҡылалар. Ҡатындарынан һорашып, хәлде белгәс:

— Ни эшләп инмәнегеҙ инде, ниңә туҡтатманығыҙ? — тип үпкәләгәндәр.

— Нисек инәһең унда, ҡурҡмай? Һеҙ үҙегеҙ юрый ҡастығыҙ! Белә тора ниңә ҡастығыҙ? — тип бисәләре сыр-сыу килеп илашып алалар.

— Һылыуығыҙҙы хәҙер Балҡантаҙға бирәбеҙ. Ҡайнымдың шартын шул ғына үтәп сыға алды: һылыуығыҙҙың бөтә йомаҡтарына яуап тапты, — тип хәбәр һалғайнылар, кесе егет ырғып килеп торҙо, ти. Килеп торҙо ла:

— Атайым ҡайҙа? Әсәйем ҡайҙа? Улар нимә ҡарап ултырҙы? Һылыуыбыҙ ни эшләй? — тип ҡысҡырып үҡ ебәрҙе, ти.

— Атаң-әсәң иҫе китеп ята, хурлығына сыҙай алмай. Һылыуың, ни, ни эшләһен. Ултыра инде хәҙер, әллә ниндәй карулға* барам тип.

Кесе ағаһы, ярһып, ҡылыс тотоп, йортҡа инеп китте лә, ти, үлтерәтеп, һылыуын килтереп сығарҙы, ти.

— Башын өҙә сабам.

Ағалары, еңгәләре ҡыҙҙы саҡ һалдырып алалар.

— Ул үҙе теләп алған, йомағына яуап табыусынан башҡа бирәүгә лә бармайым, тип. Үлтермә! — тиҙәр.

Ата-әсәләрен торғоҙалар, дарыу еҫкәтеп аңдарына килтерәләр. Ҡыҙ инде күҙен-башын һыйпап, йәне әсеп ултыра.

Батша үлектәрҙе күмергә әмер бирә. Ҙур соҡор ҡаҙытып, бөтә мәйеттәрҙе бер ергә ауҙарта. Баштарын гел бер яҡҡа һалдырып, иң өҫтөнә ике ҡоҙаһын һалып күмдерә.

Ҡыҙҙың оло еңгәһе менән оло ағаһы кәңәш ҡора: ҡыҙҙы Балҡантаҙға тиҙерәк ҡушырға. Алты еңгәһе ҡыҙҙы алып китә бер ташландыҡ аранға, Балҡантаҙға ҡушырға. Ағалары китә ҡасып, кешенән оялып. Йортҡа инеп бикләнәләр. Батша ултыра аптырап.

— Бисә, ни эшләйек инде?

— Балҡантаҙҙы уҡытайыҡ, батша булырлыҡ итеп. Уҡытыусы тап, — ти бисәһе.

Ағалары һорай:

Туйлыҡҡа нимә бирәһегеҙ?

Мең баш ҡуй алығыҙ.

Юҡ! Егерме биш йәшлек үгеҙ һуйып ашатығыҙ, — тип сорландереп сығып китә ағалары.

Батша ер аҫтына уҡытыусы эҙләп китергә булды, ти. Бисәһенә:

Бикләрһең, асҡысты үҙең ал, бирәүгә лә бирмә! — ти.

Бер аҙ ваҡыт үткәс, уландары һораша әсәһенән:

— Атай ҡайҙа?

– Уҡытыусы эҙләп китте. Батша итмәгә Балҡантаҙ кейәүҙе ҡырҡ йыл уҡытабыҙ.

– Таралышып китеп бөтәйек, – ти уландарының береһе. Икенсеһе әйтә:

– Мәк ҡалаһы ҙур ҡала, китке килмәй бит әле...

Кесеһе әйтә:

– Нимәгә унда китергә! Үҙен (батшаны әйтә инде) үлтерҙек – тыҡтыҡ!

Батша, әжерен ҡайтарыуға һөйләшеп, йәш уҡытыусы табып алып ҡайта. Хәҙер ҡыҙын да, таҙҙы ла ер аҫтына төшөрөргә булалар.

Таҙ һорай:

– Ни эшләтәһең беҙҙе? Ни эшләп хәҙер мин насарға ҡалдым?

– Юҡ-юҡ! Һине батша итергә уҡытам.

– Ярар, батша тотҡан кәләмде беҙ ҙә тоторбоҙ! – тип ҡыҙ иң тәүҙә төшә аҫҡа. Ә Балҡантаҙ ҡарыулаша, ти.

– Һауа алышынмай бит, бында ҡалайтып йәшәрбеҙ, үрсеп, ишәйеп китербеҙ, бала-саға булыр ҙа баһа?

Батша:

– Ер аҫтында матур-матур уҡыу йорттары бар, – тип әүрәтеп, тегеләрҙе ер аҫтына төшөрөп бикләп, төндә үҙе ҡайтып китә. Ҡайтып килә ятһа, оло улы, һағалап тороп, ата ла йығабыны.

Балҡантаҙ кәләше менән ҡырҡ йыл уҡығандың һуңында, сығып, ҡайны урынына батша булып ултырҙы, ти.

## 71. Ун ике һөал*

Мәликә исемле бер ҡыҙ булған. Бер ваҡыт ул бөтә ғәм алдында:

– Ун ике һөалым бар. Кем шуға яуап бирә, шул егеткә барам, яуап бирә алмаһа, башын ҡырҡам, – тигән.

Ул һорауҙарға яуап таба алмай бик күп егеттәр башын һала. Шунан бер егет уртаға сығып:

– Мин яуап бирәм, – тип бәхетен һынап ҡарамаҡ булды, ти.

– Әүәле әҙәми зат ҡайҙан таралды? – ти ҡыҙ.

– Тупраҡтан таралды. Атабыҙ – Ғәҙәм, – ти егет.

– Ҡарға ҡайҙан пәйҙә булды? – ти ҡыҙ.

– Ҡарға Ғәҙәмдең улы ине. Ялҡауы өсөн үҙ фигеленән яҙған, – ти егет.

– Өкө нимә тип әйтә? – тип һорай ҡыҙ.

– Йөктө ауыр һалыр ҙа әҙәм балаһы, шуны һөйрәй алмаҫ. Өкө шуға һеүләп* ултыра, ти.

– Ярғанат ҡайҙан пәйҙә булды?

– Ялғансы бер ҡатын бар ине. Шул ярғанат булды.

– Үрмәксе ҡайҙан пәйҙә булды?

– Ул да бер ҡатын булған. Ауылда һүҙ йөрөтөп, ҡотҡо таратыусы бер ҡатын ине.

– Сысҡан ҡайҙан пәйҙә булған?

– Ул һүҙҙе күп табып һөйләүсе кеше ине, – ти егет.

– Ҡарлуғастың ҡойроғо ниңә асалы* булды?

– Нух пәйғәмбәр ваҡытында уның ҡойроғон аждаһа уя тешләп алып ҡалды*.

– Нухтың Туфан һыуы ҡайҙан ҡалҡты?

– Иртәнсәк мейес яҡҡас, шул мейестең төбөнән ҡалҡып сыҡты.

– Йәш ағас күпме, ҡыуы күпме? – тип һорай ҡыҙ.

– Йәшенән ҡыуы күп, – ти егет.

– Ниңә ҡыуы күп булһын, йәше күп булырға тейеш.

– Ҡыу ботағы булһа, мин ул ағасты ҡыуға иҫәпләйем.

– Донъяла ир күпме, ҡатын күпме?

– Ҡатын күп, – ти егет.

Ҡыҙ:

– Ни эшләп улай булһын? Ир күп булырға тейеш, – ти.

– Мин ҡатындар һүҙенә төшә торған ирҙәрҙе ҡатынға иҫәпләйем, – ти егет.

Шунан ҡыҙ:

– Мин һинеке булам, – тип сәсрәп килеп торҙо, ти.

Шунан шул ҡыҙҙы алып, егет һаман да донъя көтөп ята, ти.

## 72. Һалдат тураһында экиәт

Иҫке режимда бер һалдат хеҙмәт иткән. Ул мылтыҡ атырға ла шәп, аҡыл яғынан да тапҡыр булған.

Бер ваҡыт һалдат, командирынан рөхсәт алып, ҡалаға сығып китә. Ҡала бик ҙур була. Унда батшаның ун дүрт ҡатлы йорто була. Шуның ун дүртенсе ҡатының балконынан батша ҡыҙы ҡарап тора. Һалдат уны күреп ҡала ла: «Ах, бик матур икән!» – ти ҙә ары китә.

Ҡыҙ ишетеп ҡала ла бының һүҙен, атаһына әйтә. Батша сыға ла:

– Эй, вернись! – тип ҡысҡыра. Һалдат кире килә.

– Ҡыҙыма «ах» тип әйтеүең дөрөҫмө?

– Дөрөҫ.

– Әллә уның менән танышырға уйлайһыңмы?

– Не мешало бы.

– Быуна һиңә мең һум аҡса. Ҡырҡ көн эсендә һиҙҙермәй генә минең өйөмә кер. Керһәң – ҡыҙым һинеке, керә алмаһаң, башыңдан яҙырһың, – ти батша һалдатҡа.

Аҡса булғас ни, һалдат генерал булып кейенеп барып та ҡарай, сит ил ҡыҙы, штаб офицеры булып та бара батша ҡыҙы йәшәгән йортҡа – барыбер таныйҙар. Утыҙ көн үтә – һаман эш сығырҙай түгел, ти. Шулай йөрөй торғас, һалдат бер буфетҡа барып керә. Ашарға ултыра – аш бармай: кәйефе юҡ, ти. Ишек алдында иҫке-моҫҡо әйбер кейгән насар ғына ҡарт ултыра. Һалдаттың күңелһеҙләнеп ултырыуын күрә лә шул ҡарт:

– Һин, егет, ниңә көрһөнөп ултыраһың? Нужаңды миңә һөйлә, бәлки, ярҙамым тейер, – ти.

– Генералдар, сит ил кешеләре менән кәңәш итеп тә эш сығармағанды, һинең менән кәңәш итеп тә тормайым, – ти һалдат.

Бер унтер офицер килеп инә. Һалдат уға үҙенең көйөгөн һөйләй. Унтер офицер тыңлап ултыра-ултыра ла:

– Һин беҙҙең кеүек кешеләр менән кәңәшләшмә. Бер ҡарт кешенән кәңәш ал, бер йәш кешенән, – ти.

Һалдат ун дүрт йәшлек берәүҙе тотоп ала, әлеге ҡартты ла саҡырта. Ашарға ултыралар. Шунда һалдат үҙенең хәсрәтен һөйләй. Малай әйтә:

– Нисек тә оҫта табырға кәрәк. Ул гармун да, башҡа ҡорамалдар ҙа эшләй белһен, – ти. Ҡарт әйтә:

– Миңә биш йөҙ һум аҡса кәрәк. Биш йөҙ һумың булһа, февралдең егерме бишендә батша һарайына кертәм, – ти. Һалдат:

– Һин ул аҡсаны ни эшләтмәк булаһың? – ти.

– Минең үҙемә аҡсаның бер тине лә кәрәкмәй. Мин элек гармун, патефон, скрипка, орган эшләй торғайным. Аҡса шуларҙы эшләү өсөн кәрәк, – ти.

Уйын кәрәк-ярағын эшләү өсөн ваҡыт күп кәрәк булған. Шуға уны баҙарҙан ғына һатып алалар. Һалдат орган эсенә ултыра. Органды дүрт кеше күтәрә. Ҡарт органда уйнап, аҡса йыя. Шулай йөрөй торғас, батша һарайы янына килеп етәләр. Ҡарттың матур уйнауы батшаға оҡшай ҙа уға биш йөҙ һум аҡса ташлай. Былар һарай янынан үтеп, батша ҡыҙының өйө янына барып уйнай башлайҙар. Батша ҡыҙы ун дүртенсе ҡаттан тыңлап тора. Ҡыҙға орган бик оҡшай. Атаһына:

– Һатып алайыҡ, атай, – ти. Батша ҡартҡа:

– Органыңды һатаһыңмы?

Мең биш йөҙ һумға килешәләр. Дүрт кеше ун дүртенсе ҡатҡа мендереп ҡуялар органды. Кис етә. Ҡыҙ йоҡларға йыйына. Шул ваҡыт орган эсенән һалдат килә лә сыға. Ҡыҙ ҡото осоп ҡысҡырып ебәрә лә атаһына барып әйтә. Килеп ҡараһалар, бер кем дә юҡ. Батша:

– Бында кем булһын инде? – ти ҙә кире үҙ бүлмәһенә китә.

Ҡыҙ ҙа, тынысланып, йоҡларға ята. Төндә егет йәнә сыға ла ҡыҙҙы әкрен генә уята. Ҡыҙ тағы ҡысҡырырға итә. Һалдат уны тыя:

– Мин атайың менән килешеү төҙөгәнмен. Һин яҡшы беләһең. Хәҙер мин – һинеке, һин – минеке инде, – ти.

– Һин нисек итеп кеше күҙенә күренерһең? – ти ҡыҙ. Һалдат:

– Органым боҙолған, тип оҫта саҡырт, – ти.

Ҡыҙ шулай итә. Иртәгеһенә оҫта саҡырттыра. Оҫта органды ҡарай башлай. Һалдат орган эсендә ултыра. Һалдат ултырған ерҙән уйнарға ҡамасаулап тик ултыра. Ҡыҙ:

– Органдың ишеген асығыҙ, – ти. Асһалар, һалдат килеп сыға ла, батша алдына баҫып:

– Честь имею! – ти.

Договор булғас ни, батша бер ни ҙә эшләй алмай. Батшалығын тәҡдим итә. Һалдат:

– Тажың, тәхетең үҙеңә булһын. Мин улай шарт ҡуймаған, – тип ҡыҙын алып, батша кейәүе булып, донъя көтә башлай.

## 73. Таҙҙың һалдат булғаны, шунан батша булғаны

Боронғо бер заманда әбей менән бабай йәшәгән. Уларҙың өс улы булған. Бер ваҡыт бабай улдарын йыйып алған да:

– Балалар, мин һеҙҙе ир еткерҙем. Хәҙер үҙем ҡартайҙым. Һөнәрле улмаҫ, тигән боронғолар. Улмаҫ борон һеҙҙе һөнәрле итеп ҡалайым, тим. Бына өс йөҙ һум аҡса бирәмен. Өс йыллыҡ юлға сығығыҙ, өсөгөҙгә өс һөнәр өйрәнеп ҡайтығыҙ, – тине, ти.

Уландары өс йыллыҡ юлға сығалар. Өлкәне, өс йылға еткермәй, аҡсаһын эсеп бөтөп, һөнәр алалмай, ҡайтып төшә. Атаһы:

– Ни һөнәр алдың, балам? – тип һораһа:

– Атай, бер һөнәр ҙә алалманым. Берәй эш булыр әле шунда, – ти.

Икенсе улы ла өс йыл аҙып-туҙып ситтә йөрөй ҙә, ҡайтҡас:

– Атай, бер һөнәр ҙә алалманым. Берәй нисек кәсеп итенер әле, – ти.

Ҡарттың кинйәһе ағаларынан бер йылға һуңлап ҡайта.

– Ни һөнәр алдың, балам? – тип һорай бабай унан.

– Атай, мин музыкаға өйрәндем, бейей ҙә беләм, йырлайым да – донъяла ни һөнәр бар, шуларҙың бөтәһенә лә өйрәндем, – ти ҙә Таҙ ҡурай, гармун тартып, скрипка уйнап, йырлап, бейеп күрһәтә.

– Яҡшы, балам. Һөнәрҙәреңдең бер кәрәге тейер, – ти ҡарт.

– Юҡ һөнәр алғанһың, – ти ағалары.

Ғүмер үтә, ҡарттың малайҙарына һалдатҡа барыр ваҡыт етә. Өлкән ағаһы киткән саҡта, Таҙ уға:

— Ағай, армиянан һәйбәт һалдат кейеме кейеп ҡайт, — тип ҡала.

Өлкән ағай хеҙмәтен тултырып ҡайтып инә. Ҡайтһа, аяғында сабата, өҫтөндә алама шинель, ти.

Таҙ:

— Һин һалдат түгел, — тип көлә бынан.

Икенсе ағаһы ла армиянан шул хәлдә ҡайтып төшә. Таҙ йәнә көлә.

— Һеҙ ҡайҙа булдығыҙ: әрмеләме әллә катырҙамы? Мин булһам, улай ҡайтмаҫ инем, — ти.

Оҙаҡ та үтмәй, Таҙға ла армияға китер ваҡыт килеп етә.

— Һалдаттан ҡайтҡаныңда, өҫтөңдә һәйбәт кейем булһын. Шулай булмаһа, туҡмалырһың, — тиҙәр өлкән ағалары.

— Һәйбәт кейенермен. Һеҙҙең кеүек булһам, ҡайтып та күренмәмен, — ти Таҙ.

Армияға бара Таҙ. Быны батшаның һаҡсыһы итеп ҡуялар. Күршеләге батшалыҡ батшаһының ҡыҙы матурлығы менән дан алған була. Икенсе ил батшалары мең һумға шул батша ҡыҙының һүрәтен һатып алалар ҙа, ти, башҡа кешеләргә, йөҙ һум аҡса түләһәләр генә, күрһәтәләр, ти. Таҙ һалдат:

— Эх, йөҙ һум аҡсам булһа, яҡшы ғына итеп барыр ҙа инем, ул ҡыҙҙың үҙен күреп, күреп кенә түгел, ҡатын итеп алып ҡайтыр инем, — тип хәбәр һала. Бер әҙәм ишетеп ҡала ла быныҡ һүҙен батшаға барып әйтә.

— Һинең бер һалдатың: «Батша тиклем батша булып та, шул ҡыҙҙы күрә алмай, мең һумға төшөрөп, һүрәтен алдырып, шуға ҡәнәғәт булған булып йөрөйҙәр. Эх, йөҙ һумым булһа, һүрәтен түгел, үҙен күреп, күреп кенә ҡалмай, кәләш итеп алып ҡайтыр инем», тип әйтә, — ти.

Батшаның быға бик ныҡ йәне көйҙө, ти. Шунда вәзире уға:

— Шаһым, падишаһым, һин уны саҡыртып алып һөйләш, — тигәс, батша һалдатты саҡыртып ала.

— Миңә шулай, шулай тип әйттеләр. Әйттеңме шулай тип?

— Әйттем, — ти һалдат.

— Әгәр мин һиңә шул әйткәнеңде эшләргә ҡушып та, булдыра алмаһаң, башыңды киҫһәм?

— Булдырам, булдырам. Кәк булдырмай?

Теге һылыу ҡыҙҙың атаһының банкыларында был батшаның да бик күп аҡсаһы булған була.

— Әгәр һүҙеңдә тороп, шул ҡыҙҙы мәсхәрә итә алһаң, шул банкыларҙағы бөтә аҡса һинеке, — тип батша һалдатҡа чек яҙып бирә.

Һалдат юлға сыға. Бара теге ҡыҙ йәшәгән батшалыҡҡа. Һораша-һораша, һарайға килә. Банкыға инә. Батшаның чегы менән аҡса ала.

Батшаның балалары йөрөй торған бер ресторан була. Унда бүтән бер кемде лә индермәйҙәр. Ресторанға инеүселәрҙән тик

алтын аҡса ғына түләттерәләр. Барыр юл тик таштан ғына була. Һалдат өҫтөндәге кейемен һала ла хәйерсе кейемен кейеп, ресторан төбөндә хәйер һорап ултыра. Батшаның һанаттары аҡса биреп инеп китәләр. Оҙаҡ та үтмәй, музыка уйнай башлай. Шулай музыка уйнатып, батша ҡыҙы килә. Өҫтөндә күҙ яуын алырлыҡ күлдәк, башында көләпәрә. Бөтәһе лә, алтынлап, аҫыл таштар менән биҙәлгән. Эргәһендә матур егет. Уныһы күрше батшаның улы, ҡыҙҙың һөйгән егете, ти. Батша ҡыҙын бер кем менән дә һөйләштермәҫ булған. Инде берәй ир заты менән һөйләшеп танышҡанын белеп ҡалһа, уны йә аттырған, йә аҫтырған. Шуға ҡыҙ егете менән йәшертен генә осрашыр булған.

Ҡыҙ менән егет ресторанға инә. Егет биш һумлыҡ аш-һыу килтерергә әйтә. Һалдат быны быяла ишек аша күҙенең осо менән генә ҡарап ултыра ла инергә рөхсәт һорай. Батша улы рөхсәт итмәй. Ҡыҙ ҡарап-ҡарап тора ла:

– Инһен. Аҙыраҡ ултырып сыҡһын әйҙә, – ти.

Һалдат инә лә ун һумлыҡ ашамлыҡ, эсемлек килтерергә ҡуша. Теге икәү аптырап ҡала. Сығышлай, ҡыҙ:

– Һин биш һумлыҡ ҡына алдырҙың, теге хәйерсе егет – ун һумлыҡ, – тип ҡуя. Шунан был икәү иртәгә тағы осрашырға һүҙ ҡуйышып сығып китәләр.

Икенсе көндө һалдат тағы ресторан ишеге төбөндә ултыра. Ҡыҙ менән батша улы ла килә. Ресторанға ингәс, егет ун һумлыҡ аш-һыу килтерергә ҡуша. Һалдат ҡыҙҙың рөхсәте менән йәнә инә лә илле һумлыҡ аш-һыу алдырта.

– Һин ун һумлыҡ ҡына алдырҙың, хәйерсе – илле һумлыҡ, – ти батша ҡыҙы. Егете:

– Хәйерселәп йә урлап йыйған аҡсаһылыр әле, моғайын. Иртәгә тине лә ҡалмай уның, – тип һыр бирмәмеш була.

Ресторан эсендә музыка уйнап тора. Үҙәк ялғап ала ла һалдат:

– Миңә лә уйнарға рөхсәтме? – тип һорай. Батша улы рөхсәт бирмәй. Ҡыҙ:

– Рөхсәт, рөхсәт, – ти. Һалдат ҡурай тартып ебәрә. Уныһында уйнай-уйнай ҙа, гармунға тотона, шунан скрипкала һыҙҙырта башлай. Булған халыҡ таң ҡала. Бындай уйынды, бындай музыканы әлегәсә берәүҙең дә белгәне лә, күргәне лә, ишеткәне лә булмай.

– Яҡыныраҡ килеп уйнаһын әле, – тип ҡыҙ уны янына саҡыртып ала. Һалдат уйнай-уйнай ҙа иҫергәнгә һалышып ҡолай.

Күрҙеңме? Хәҙер уны һөйрәп сығарып ташлау ғына ҡалды, – ти батша улы. Ҡыҙ:

Ятһын. Айнығас, үҙ аяғы менән сығыр әле, – тип һалдатты сығартмай.

Һалдат ята быларҙың өҫтәле ҡырында, ни һөйләшкәндәрен түңеләнә һалып ята. Егет әйтә:

– Беҙҙең йөрөгәнгә бик күп була. Ҡасан ҡушылабыҙ? – ти. Ҡыҙ:

– Бөгөн төнгө ун икелә кил минә. Мин ун икенсе ҡатта торам. Атайым һиҙмәһен. Ишектән ингәс тә кнопкаға баҫырһың – минең янға килеп тә менерһең. Таң атмаҫ борон сығып, ҡайтып китерһең. Хәҙер үҙеңдең сәғәтеңде лә, минекен дә сәғәтсегә алып барып бир. Йөрөштәрен сағыштырып, тиңәштереп ҡуйһын, – ти.

Шул һүҙҙәрҙән һуң егет менән ҡыҙ ресторандан сығып китә. Һалдат та тора һалып, урамға сыға ла сәғәтсегә йүгерә.

– Батша улы һиңә ике сәғәт килтерҙеме? – тип һорай сәғәтсенән.

– Бирҙе. Йөрөштәрен сағыштырып, тиңәштерергә ҡушты, – ти сәғәтсе.

– Был хеҙмәтең өсөн күпме түләне?

– Егерме тин.

– Батша улыныҡын ике сәғәткә артҡа ҡалдырып, батша ҡыҙыныҡын минеке менән тиңәштерһәң, мин һиңә биш һум бирермен. Сәғәттәр дөрөҫ йөрөһә, иртәгә тағы илле һум өҫтәрмен.

Сәғәтсе риза була. Һалдат сәғәтен ҡалдырып сығып китә.

Батша ҡыҙы килеп сәғәтен ала. Шунан батша улы ла ала. Аҙаҡ һалдат килә. Биш һумын түләй ҙә сәғәтен алып китә.

Сәғәтсенән сыҡҡас, кейем магазинына инеп, ғәләмәт шәп итеп кейенә, сәс алыусыға барып, сәсен алдырып сыға. Ул арала төнгө ун ике лә етеп килә. Таҙ һалдат ҡыҙҙың йортона барып етеүгә, ун ике һуға. Ҡыҙ әйткәнсә, ишеккә инеү менән, кнопкаға баҫыуы була – тегенең янына барып та етә. Батша ҡыҙы шәм тоҡандырмай. Тоҡандырыр ине, атаһынан ҡурҡа. Атайым ишетмәһен тип, егет менән шым ғына һөйләшә. Ҡыҙ Таҙ һалдатты үҙенең егете тип уйлай ҙа:

– Таң беленмәҫтән сығырһың, – тип уның менән йоҡларға ята.

Ике сәғәт үтеүгә, ҡыңғырау ҡаҡҡан тауышҡа килеп уяналар. Ҡыҙ:

– Кем йөрөй икән унда, бимазалап. Тороп ҡара әле, – тигәс, егет асмалы тәҙрәнән эйелеп ҡарай. Ҡараһа, ҡыҙҙың йөрөгән егете килеп тора, ти.

– Эй, теге алама һалдат килгән дә, – тип алдай Таҙ.

– Ал, ана, биҙрәләге йыуынты һыуҙы, башына түк әйҙә шуның, – ти ҡыҙ. Һалдат түгә – нәҡ башына эләгә теге батша балаһының. Ул, асыуынан ни эшләргә белмәй, һүгенә-һүгенә китеп бара.

– Уңай иттем тегене: баштан-аяҡ ҡойондо. Ишетәһеңме, калай һүгенә, – ти һалдат.

– Ишетәм. Һин инде ҡабаттан йоҡлап китмә. Хәҙер таң беленер, – ти ҙә ҡыҙ, үҙе йоҡлап китә. Таҙ йоҡламай, ҡарап

ята. Ҡыҙ ҡурҡып килеп уяна ла быны төрткөләй башлай. Һалдат йоҡлағанға һалышып ята-ята ла шунан ғына килеп тора. Ҡыҙ ҡабаландыра башлай быны. Ҡабалан ғына йыуынҙыра, ҡабаландырып кейендерә. Һалдат юрый ығышлап алып тик йөрөй. Сәғәтен табалмаған кеше була – ҡыҙ үҙенекен бирә. Тәмәке янсығын юғалтҡан булып, эҙләп алып китә – ҡыҙ атаһының алтын һауытлы тәмәкеһен бирә. Шунан ғына Таҙ һалдат хушлашып сығып китә. Таң атҡас, сәғәтсегә барып, вәғәҙәһен үтәп сыға.

Кис булғас, һалдат теге ресторанға бара ла тағы ла хәйер һораша башлай. Батша ҡыҙы килә. Егете юҡ. Көтә-көтә лә ҡыҙ үҙе генә инеп ултыра. Таҙ һалдат та инеп, тегенең менән бер ҡатарҙағы өҫтәл янына ултыра ла биш йөҙ һумлыҡ һый килтерергә ҡуша. Шул арала үҙе скрипкала уйнай башлай. Халыҡ тағы таң ҡала.

Ҡыҙ һаман яңғыҙ. Егет:

– Теләгегеҙ булһа, әйҙүк, минең өҫтәлгә, – тигәс, ҡыҙ уның өҫтәленә күсеп ултыра. Һалдат уйнай-уйнай ҙа сәғәтенә ҡарап ала. Ҡыҙ күреп ҡала ла:

– Ҡайҙан алдың быны? – тип аптырап ҡала.

Егет яуап бирергә ашыҡмай. Тәмәкеһен килтереп сығара ла урарға тотона.

– Быныһын ҡайҙан алдың?

– Ҡайҙан тип, төндә үҙең бирҙең бит.

Шунан, ни, шулайтып ҡыҙға хәлде аңлатып, танышып, дуҫлаша ла китә былар.

– Бөгөн дә төндә элекке кеүек килерһең. Атайым һиҙеп ҡуймаһын, – ти ҡыҙ ҡайтыр сағында. Һалдат риза була. Шулай барып-китеп, осрашып йөрөй торғас, былар тамам бер-береһенә эҫенешә лә китәләр.

Ҡыҙҙың атаһының икенсе батшаға ҙур түләүе булған була. Шул батша бер заман бурысты ҡайтарыуҙы талап итә башлай. Түләүгә өс кенә көн ваҡыт бирә. Өс көндә түләмәһәң, һуғыш асам тигән хәбәр ебәрә. Ҡыҙҙың атаһының эше мөшкөл була. Батша: «Бөтә лавкаларымды ла һатам», – тип илгә хәбәр тарата. Хаҡы ҡиммәт булғанға, һис бер алыусы булмай. Шул арала теге батша биргән ваҡыт та үтеп бара. Таҙ һалдат килә лә: «Лавкаларыңды үҙем алам», – ти. Батша шат. Тик, приказчигың менән ҡушып алам, тигәс, батша ҡойола ла төшә: уның лавкаларында приказчик булып бер көн улы, бер көн ҡыҙы эшләгән була. Сараһыҙҙын көнөнән риза була батша.

Сауҙа менән кәсеп итеп, Таҙ һалдат банкынан алған аҡсаны кире ҡайтара. Шунан ул: «Мин илемә ҡайтам. Бөтә лавкаларымды күсереп алып китәм. Приказчикты ла алып ҡайтам», – тип иғлан итә. Быны ишетеп, батша бик бошона. Һалдатҡа килеп:

– Кире һатып кит инде. Исмаһам, приказчигымды ҡалдыр! – тип ялына.

– Юҡ, – ти һалдат, – һатмайым. Һатыр өсөн алманым, – ти.

– Ни алһаң да ал. Улымды ғына ҡалдыр инде! – тип ялына батша һаман.

– Аҡсаға һис тә риза түгелмен. Тояҡ урынына – тояҡ: кешегә алмаштырам, – ти һалдат.

– Ниндәй кешегә?

– Ҡыҙыңды биреп, мине кейәү итһәң, улыңды ғына түгел, бөтә байлығыңды кире бирермен.

Батша йәнә уйға ҡала. Күп уйлай, ныҡ бошона батша. Аҙаҡ килеп, егет менән ризалаша. Туй яһайҙар.

Батша ҡыҙын кәләш итеп, үҙе кейәү булып бер аҙ ғүмер һөргәндән һуң, Таҙға үҙ батшалығына ҡайтыр ваҡыт та етә. Ҙур-ҙур каруандар менән ҡайтырға сығалар былар. «Ҡаршы алырға әҙерлән. Батша ҡыҙы менән ҡайтып киләм» тип Таҙ телеграмма һуға. Артынса килеп тә төшә.

– Һеҙҙән һүрәтен ҡараған ялына ғына ла йөҙ һум түләттергән ҡыҙ киленең булыр, – тигәс, батша һәләк ныҡ аптырауҙа ҡала. Шунан ни, ҡасан булһа ла был һалдат барыбер батша булыр, тип уға үҙенең батшалығын бирә.

Батша булып ултыра Таҙ, ултыра. Шунан бер көн кәләшенә:

– Минең атай, әсәй бар бит. Өйгә ҡайтып киләйем, – тип кәңәш итә. Кәләше ризалығын биреп, ире урынына батша булып ҡала. Таҙ, ҡырҡ һалдатты ҡарауыл итеп алып, ҡайтырға сыға.

Юлда быларға бик хәтәр урман осрай. Ул урман шундай ҡуйы, ҡараңғы була, унан бер кем дә үтә алмай, ти. Таҙ менән һалдаттар аҙаша. Көндәр буйына аслы-туҡлы баралар, баралар – урмандың осона һис сыға алмайҙар. Шулай килә торғас, былар бер өйгә килеп инәләр. Инһәләр – бер ҡарт ҡына әбей. Таҙ йоҡлап сығырға фатир һорай. Әбей менән хаҡына килешеп, ял итергә яталар.

Йорттоң тирә-яғы бейек тимер текмә менән уратылған, ҡапҡалары ныҡ була. Шуға Таҙ һаҡсы ҡуйып тормай. Арып, арманһыҙ булған һалдаттар ятыу менән үк ҡур ҙа шар йоҡлап китәләр.

Әбей килгән бер кешене үлтереп, нәмәләрен алып, байығып ятҡан нәмә булып сыға. Үҙе өйҙә ултыра, урманда бандиттары ята. Сәғәт төнгө ун ике тулыу менән, әбей шәмен тәҙрә төбөнә күсерә лә ҡайтарып ҡуя – шул ерҙә бандиттары килеп тә инә. Килеп тә инә – һалдаттарҙы турап та сыға. Таҙ батша иптәше менән икенсе бүлмәлә булып, был хәлде күрмәй ҡала. Тауышҡа ишекте асһа – бандиттар еңеүгә ҡыуанып, ҡыуаныстан эсеп ултыралар. Батша асҡан ишеген ҡалай япҡанын да һиҙмәй ҡала, шул ыңғайҙа тәҙрәнән һикерәләр ҙә эс күлдәктән генә юлдашы менән ҡасып китәләр. Байтаҡ барғас, иптәшенән айырыла.

Атаһына Таҙ инәнән тыума ҡайтып йығыла. Быны күргән ағайҙары эс тырнап көләләр. Әйткән һүҙҙәре буйынса Таҙҙы һыҙырып та алалар. Уның:

– Мин батшамын. Аҙаштым, – тип башынан үткәндәрен һөйләргә итеүен ҡолаҡҡа элеүсе лә булмай. Шулай ҙа атаһы кейем табып, кейендерә Таҙҙы. Шунан Таҙ кәләше янына кире ҡайтып тормай, бер байға көтөүсе булып яллана.

Таҙ көтөү көтә торһон, беҙ киләйек батша ҡыҙы тарафтарына. Ире киткән көндән алып йәш ҡатын уны һағынып көтә башлай. Шулай көн артынан көн үтә. Ҡайтыр көнө үтеп китә.

– Йә мине ташлауы шул, йә берәй хәлгә төңкәлде, – тип йөҙ һалдат ала ла ҡатын Таҙҙы эҙләргә сығып китә.

Оҙаҡ ҡына килгәс, ҡатын да урман эсендәге әлеге йортҡа барып инә. Фатир һорап, әбейҙән ризалыҡ алғас, бүлмәләрҙе ҡарарға тотона. Ҡарап йөрөй торғас, ире йоҡлаған бүлмәгә килеп инә. Инһә – иренең кейемдәре элеүле тора. Эш ниҙә икәнен төшөнә ҡатын. Шунан:

– Ятһағыҙ ҙа, һаҡ булығыҙ, – тип һалдаттарына эште аңғартып ҡуя.

Сәғәт ун ике тулыуы була, әбей шәмен тәҙрә төбөнә күсерә лә утын ҡайтара. Шул сәғәттә бандиттар килеп инә – һалдаттар уларҙы турап та ташлай. Шунан ҡатын әбейҙән һорау ала:

– Ҡайҙа минең ирем? Ҡайҙа иттең уның һаҡсыларын? – тип һорашып, әбейҙең зинданы булыуын белеп ала. Зинданды асһалар – батша һалдаттарының мәйеттәре, ти. Эҙләп-эҙләп иренең кәүҙәһен таба алмай. Шунан әбейҙе тураҡлап сығып китә лә, иренең ауылына барырға булып, телеграмма һуға.

Ҡатын батшаны Таҙҙың байында ҡаршыларға булалар. Телеграмма килеүен ишеткәс тә, Таҙ малдарын алыҫҡараҡ алып китә. Ҡатын ирҙәрсә кейенеп, һораша-һораша килеп, иренең атаһын табып ала.

– Кинйәң ҡайҙа? – тип һораша башлай.

– Ул байҙа көтөүселектә тора.

Китә ҡатын теге байға. Мунса яҡтырта. Көтөүсене килтертергә ҡуша.

– Малдарҙы нисек ташлап китмәк кәрәк? – тип егет һаман килмәҫкә ҡырталаша. Шунан батша бик ныҡышҡас, бай уны малдары менән ҡайтартып ала. Ул арала мунса ла өлгөрә.

– Мунсаң әҙер, батшам, – ти бай.

– Көтөүсең минең менән барһын. Арҡаны ышҡыр, – ти батша.

Мунсанан Таҙ көтөүсе батша кейемендә, килгән ҡатын үҙ кейемен алып килеп сығалар. Мунсанан сыҡҡас, Таҙ батша байға:

– Бар, Таҙ көтөүсең, еҫ тейеп, тәгәрәп ятмаһын, – ти. Бай бара. Ҡарай. Тапмай. Аҙаҡ Таҙҙы ҡатыны менән бергә күргәс, ис-аҡылы китеп аптырай, ни алып, ни бирергә белмәй.

Таҙ батша ике ағаһы менән атаһын саҡыртып ала ла:
– Хәҙер ышандығыҙмы инде? – ти. Ағалары кем уҙарҙан:
– Хаталыҡ беҙҙә, – тип ғәфү үтенешәләр.

Таҙ уларҙы ғәфү итә. Атаһына өр-яңынан өй күтәртеп бирә. Шунан батшалығына ҡайтып китә. Әле лә шунда батшалыҡ итә, ти.

## 74. Генерал ҡыҙын алған һалдат

Бер ҡарттың малайы хеҙмәткә яраған,
Йортонда малай ҡалмаған яңынан.
Малай киткәс хеҙмәткә, ҡотолмаған яфанан:
Эшләргә көсө юҡ, ашарға теше юҡ;
Ул бик ҡартайған, эшләргә кеше юҡ;
Йәше туҡһандан артҡан, әбей һикһәнгә баҫҡан.
Быларға бер етем ҡатнашҡан.
Тереклек бай булған,
Мөгәрәптә май булған,
Теге етем малайға
Урлашырға яй булған.
Малай майҙы урлап ҡаса,
Ҡарттар тәүҙә белмәй ята.
Ҡарт аҙаҡтан һиҙеп ҡалған:
– Ух, был эшең хата! – тиеп,
Унан майҙы тартып алған.
Малай киткән ҡасып,
Ҡарт йүгерә артынан,
Тыптыр-тыптыр баҫып.
Ҡарсыҡ та малайға яман асыулана:
– Бынан кире һин майҙы аслан алма,
Икенселәй ундай эшкә яҡын барма.

Малай әйтә:

– Икенселәй ундай эшкә бармамын,
Һорамайса, майҙы ҡабат алмамын,
Яйы тура килгән саҡта,
Алмайынса ҡалмамын.
Бер яҡтан быны әй өгөтләйҙәр,
Икенсе яҡтан ҡыйнап этләйҙәр –
Ҡарт менән ҡортҡа был малайҙан
Изгелекте өмөт тә итмәйҙәр.

Үҙенең малайы хеҙмәт итә ҙур шәһәрҙә,
Үткерлеге данға сыҡҡан шул шәһәрҙә.
Малай үҙе яман – һүҙе алдан.

Командирҙар ни ҡушһа ла, барған.
Бер ваҡыт был ҡарауыл торғанда,
Бының ҡырына ике генерал барған.
Генералдар ышыҡта кәңәш ҡорған.
Яҡын килһә былар тиеп,
Һалдат төҙләп мылтыҡ ҡорған.

Бер генерал:

– Бик күп аҡса бөтөрҙөм,
Икенсеһе:
– Ҡайҙа барҙың, аҡса бөтөрөп?
– Йыраҡ ҡалаға барып ҡайттым,
Йомошомдо үлтереп.
Йомошом йомош була алманы,
Күрәһе кешене күрә алманым,
Керәһе ергә керә алманым.
Ятҡаным – генералдың ҡыҙы ине,
Исемен дә белә алманым.
Шул ҡыҙҙы күрә алмайса,
Мең һум аҡса бөтөрҙөм.

Икенсеһе:

– Мең һум? Ә мин биш мең бөтөрҙөм.
Һин түгел, мин дә күрә алманым,
Ҡайҙа йөрөгәнен дә белә алманым.
Беҙ түгел, ул ҡыҙҙы батшабыҙ ҙа күрмәгән.
Егерме мең аҡса түккән, үҙе саҡ-саҡ үлмәгән.

Быларҙың һүҙе бөткәнсе, һалдат тыңлап торҙо,
Һалдат, генералдарға асыуланып, тауыш орҙо:
- Ул аҡса миндә булһа, ҡыҙҙы алмай ҡалмаç инем!
Һалдат әйткәс, генералдар киттеләр.
– Батша, һалдатың тиргәне, – тип батшаға ялыу иттеләр.
Шундуҡ һалдатҡа килеп еттеләр:
– Батша саҡыра һине, – тип, әйтеп киттеләр.
Батша бынан бөгөнгөһөнә дөрөç яуап алған.
Һалдат әйткән:
– Ике генерал алты мең, һин – егерме
Ҡыҙҙы күреүгә аҡса бөтөргән.
Ул аҡса миндә булһа, ҡыҙҙы алып ҡайтыр инем,
Ҡайтҡас, барығыҙға әйтер инем.
Батша әйтә:
Әгәр ҙә күреп ҡайтһаң, миллион аҡса бирәмен.

Һалдат әйтә:

– Күреү түгел, алып ҡайтмаһам,
Башымдағы фуражкамды кеймәмен.

Батша әйтә:

– Ҡыҙҙы күреп ҡайтһаң, сығып китәм өйҙән,
Алып ҡайтһаң, үҙемде үҙем атып үлтерәм,
Әгәр алып ҡайтмаһаң, башыңды бөтөрәм.
Һалдат риза була ҡыҙҙы күреп, алып ҡайтырға,
Батша ҡулын ҡуя килешеүгә үҙен үҙе атырға.
Һалдатҡа бер миллион аҡса ла биргәндәр,
Һалдатты оҙатҡан саҡта, ҡул да бирмәйҙәр.
Һалдат барып кергән бер ай тигәндә
Генералдың ҡалаһы тигәнгә.
Фатиры ла тиҙ табылған.
Фатирҙа бер зимагор ҙа булған.
Бер кис шунын менән гәпләшеп ҡунған.
Зимагорға хәтһеҙ аҡса биргән булған.
Зимагор генералдың йортон күрһәтә,
Һалдат ҡыҙҙың йөрөгән ерен күҙәтә.
Бер каршауникты* ла табып ала,
Нәҡ туғыҙҙа генерал ҡыҙы ла шунда бара.
Каршауникта ашау-эсеү бик ҡыйбат –
Аҡсаң булһа, шунда ғына барып ят.
Бер үҙеңә бер пар һыра – утыҙ һум,
Эсергә тиһәң, тағы ла ҡыйбат.
Беренсе көндө һалдат тәҙрәнән генә ҡарап ала,
Шундағы ишектән килеп керә сибәр генә бер ҡыҙ бала.
Ошолор, тип һалдат шунда уйға ҡала.
Ҡыҙ артынан йәш кенә бер егет китә,
Улар икәү бүлмәнән бүлмәгә кереп үтә.
Икенсе көн һалдат эскә инеп ултыра,
Яҡшы-яҡшы ризыҡтарҙы өҫтәленә тултыра.
Теге ҡыҙ менән егет тағы килеп керәләр,
Был һалдаттың ашап ултырғанын күрәләр,
Аҡсаһы күп икәнен дә беләләр.
Ҡыҙ менән егет йөҙ һумлыҡ ашамлыҡ алдылар, ти,
Һалдат бер үҙенә ике йөҙ һумға заказ биреп,
Заказын алдына килтереп тә һалдылар, ти.
Ҡыҙ менән егет һалдатҡа аптырауға ҡалдылар, ти,
Һалдат менән тегеләр ярышып алдылар, ти,
Береһенән-береһе артыҡ итеп алдылар, ти.
Ашайҙар ҙа эсәләр, бушаны, ти, бик күп шешәләр,
Ҡыҙ менән егеттең аҡсалары бөтәләр,
Буш янсыҡты ғына һүтәләр.
Һалдатта аҡса бик күп, бөтмәгән, ти,
Ашап-эсеп туйынһа ла, китмәгән, ти.

Тегеләргә һалдат менән ярышырға
Һис кенә лә аҡсалары етмәгән, ти.
Егет әйтә:

– Осрашайыҡ бөгөн һеҙҙә кискелек, – ти.

Ҡыҙ егеткә:

– Фәлән урам, фәлән нумир, кис килең, – ти.

Егет әйтә:

– Әйтмәһәң дә, үҙем беләм.

Ҡыҙ әйтә:

– Алтынан да һуңға ҡалма.

Егет әйтә:

– Яңғыҙ бул, үҙ янына иптәш алма.

Ҡыҙ әйтә егеткә:

– Урам ҡапҡаһынан керерһең,
Кергәс, шунда уңдан ишек күрерһең,
Шул ишектә звонок. Шылтыратырһың,
Күп түгел, тик бер тапҡыр тартырһың.
Һиgеҙенсе ҡатҡа менгәс, яныма ятырһың.

Һалдат улар һөйләшкәнде тыңлап ултыра,
Бөтәһен дә хәтеренә тултыра.
Ҡыҙ менән егет сығып китәләр,
– Һалдат аҡсаға мул, – тиешеп,
Өйҙәренә ҡайтып китәләр.
Теге егеттең түш сәғәте онотолоп ҡалған,
Һалдат уны тиҙ генә тороп алған.
Бер сәғәт артҡа ебәреп, яңынан һалған.
Сәғәт эҙләп, егет кире кергән булған.
Сәғәтен ул урынында тапҡан,
Ҡарап тормай, түшенә тыҡҡан.
Каршауниктан сығып киткән,
Сәғәтенә ҡарарға аҡылы еткән:
  Хәҙер сәғәт теүәл биштә,
Былай булғас, оҙаҡламай
Булыр кис тә.
Һалдаттың сәғәте алты етте, ти,
Генерал йортон һалдат эҙләп китте, ти.
Оҙаҡламай йортто эҙләп тапҡан,
Ишектәге һәленеп торған бауҙы тартҡан.
Менгән дә ул, ҡыҙ янына һуҙылып ятҡан,

Ҡыҙ шунда ишек, тәҙрәне нығытып япҡан.
«Өй ҡараңғы, уты әле янмай һаман».
Сәғәтенә ҡарай ҙа теге егет,
«Иртә», тиеп, ҡыҙ янына бармай һаман.
Бик йөрәкле икән һалдат, ҡайҙа барып ингән!
Генерал ҡыҙы һалдатты егетелер тиеп белгән.
Бер сәғәт яҡшы ғына һөйләшеп ятҡандар,
Ете тулғас, тыштан килеп, звонокты тартҡандар.
Кем икәнен ҡарамайса, биҙрә тулы бысраҡ һыуҙы
Шул кешенең өҫтөнә атҡандар.
Ул да булһа, ҡыҙҙың һөйгән егете булған,
Егетем, тип, һалдат менән ҡыҙ ҡунған.
Егет бысраҡҡа буялып, ҡайтып киткән.
Һалдатҡа торорға ла ваҡыт еткән.
Һалдатҡа теге ҡыҙ бүләк биргән:
– Кис килгәндә, тағы ла бирермен, – тигән.
Биргән бүләк булған саф көмөш балдаҡ,
Һалдат ҡунды, ҡыҙҙы шулай оҫта алдап.
Балдаҡты кейеп, һалдат сығып китә,
Каршауникка тағы барыр ваҡыт етә.
Туғыҙ тулғас, каршауникка барғандар,
Тағы яҡшы ашамлыҡтар алғандар.
Әүәле һалдат барып ултырған,
Үҙе лә бик дәртле икән, суҡынған.
Икенсе булып, теге егет килгән булған,
Өҫтөндә бысраҡ һыу сәсрәп туңған,
Әйтерһең, сүплек башында төн ҡунған.
Ун бер тулғас, теге ҡыҙ ҙа килгән,
Егетен күргәс, йылмайып, ҡулын биргән,
Егет яман асыуланған, күрешмәгән,
Ҡыҙға хатта берҙе уҡталған,
Ярай әле, һуҡмайса, туҡталған.
– Ниңә һин мине өйөңә саҡырҙың? – ти, –
Саҡыргасың, мин, һуңламай, барҙым, – ти, –
Әллә ниндәй бысраҡтар алдым, – ти. –
Ҡара әле минең өҫтө, күрәһеңме?

Ҡыҙ:

– Мин бит һине үҙ янымда ҡундырҙым,
Биттәреңде лә бит үҙем йыуындырҙым.
Икәүләп бер койкала яттыҡ.
Берәү шунда шылтыратҡас звонокты,
Биҙрәләге йыуынтыҡты шуға аттыҡ.
Бүләк итеп көмөш балдаҡты бирҙем,
Бөгөн килһәң, тағын бирермен, тинем.
Тағы һиңә ни кәрәк?

Кискеһен килгәнендә,
Тағын алырһың бүләк.

Егет:

– Мин ҡунманым янында, башҡа ҡунғандыр,
Һиндә тағы әллә кемдәр булғандыр...
Күтәрмәңә барып, бысраҡҡа ғына буялдым,
Бысранғас, кешеләргә күренеүҙән оялдым.

Егет сыҙаманы, гәрлегенән сығып китте,
Ҡыҙ аптырап, илай башланы.
Арлы-бирле йөрөй торғас, һалдат менән
Бер өҫтәлдә ултырып ашаны.

Ҡыҙ әйтә:

– Биш йыл буйы дуҫлашып йөрөгән инек,
Ул миңә бысраҡ ташлай бөгөн килеп.
Шунда ул һалдаттағы балдаҡты күреп ҡалды,
Бармағынан шунда уҡ һурып алды.
– Был балдаҡты ҡайҙан алдың?

Һалдат әйтә:

– Һуң бит уны үҙең бирҙең.
Ҡыҙ әйтә:
– Әллә төндә егет булып һин килдең?

Һалдат әйтә:

– Эйе. Әллә шуны белмәнең?

Ҡыҙ әйтә:

– Ҡараңғыла йөҙөңдө бит күрмәнем.

Һалдат әйтә:

– Дөрөҫ, янына төндә мин барҙым,
Үҙең биргәс, балдағыңды кейеп алдым.
Ҡыҙ был эшкә бик тә аптыраны:
– Һин ҡайһы яҡ? – тип, һорау алды. –
Булмаһа, икәү бергә булайыҡ,
Урлашмайса, икәү бергә ҡунайыҡ.
Икеһе бергә булырға ҡул бирештеләр,
Береһенә-береһе тиң, тип, килештеләр.
Ҡыҙ егетен хәҙер ныҡлап ташланы, ти,
Һалдат менән йөрөй башланы, ти.
Ҡыҙ, һалдат ни һораһа, шуны бирә,
Һалдат уның алтын йөҙөгөн алып кейә.
Һалдатты ҡыҙ алтын-көмөшкә байытты, ти,

Мул сакта, тип, һалдат үҙ тормошон ҡайғыртты, ти.
Шул шәһәрҙә беренсе урынды һатып алды,
Генералға урам аша алтындан бөтөрөп йорт һалды.
Булғанға уныҡынан ике-өскә артығыраҡ,
Һалдатҡа күптәр йөрөй, ти, яҡынлап.
Алты ай араһында тормошон ҡороп бөтөргән,
Унған булғас, дошмандарын ҡырып бөтөргән.
Ҡыҙҙы алып ҡайта, тип ишеткәндәр, әрнегәндәр,
Аптырашып, бот сапҡандар, ятлай уны әрләгәндәр*.
Генерал ҡыҙын һалдат үҙенә туйлап алған,
Туйҙарында бөтөн шәһәр халҡы булған.
Туйҙары быларҙың һәләк шәп булған.
Һалдат үҙе сит ерҙән булғас,
Таныш, дуҫы күп булмаған, саҡ булған.
Туйы шул ҡәҙәрле булған:
Йөҙәрләгән аттар саптырған.
Туйҙы шаулатып уҙғарғас,
Ҙур-ҙур лавкаларын астырған.
Быларҙа гел шәп тауар булғас,
Күп халыҡтар килеп баҫҡандар,
Кәләше менән өс йәй ғүмер һатыу һатҡандар,
Тағы ун ике ай тигәндә, илдәренә ҡайтҡандар.
Ҡыҙҙы алып ҡайтҡас, ҡуйған бер фатирға,
Үҙе киткән ҡыҙҙы алып ҡайтҡанлығын әйтергә.
Осраған әлеге дошмандары – генералдар:
– Ҡыҙҙы алып ҡайттыңмы? – тип һорағандар.

Һалдат әйтә:

– Алып ҡайтыу түгел, ҡыҙҙы күрмәнем,
Ҡыҙҙың ҡайҙа йөрөгәнен дә белмәнем,
Ярай әле, ғүмер бар икән, әлдә үлмәнем.
– Унда үлмәһәң, бында үләрһең.
Таған әҙер. Шунда башың эләрһең.
Башың унда элгәнгә ҡәҙәрлем,
Елгә осорған миллионды түләрһең.

Һалдат әйтә:

– Үлһәм, ни хәл итмәк кәрәк, үләрмен,
Бик кәрәкһә, икене лә түләрмен.

Бер ваҡыт һалдат ҡайтып
Керҙе батша йортона,
Батша төҙәнә лә һөртөнә.
– Иҫән торҙоғоҙмо, батша?
– Үҙең нихәл, бөттөмө аҡса?
Ҡыҙҙың ҡалаһына керҙеңме?
Ҡыҙҙың үҙен барып күрҙеңме?
Ҡалаһының исемен белдеңме?

Һалдат:

– Ҡалаһының исемен белдем,
Ҡыҙҙың үҙен дә күрҙем,
Атаһын да барып күрҙем.
Ҡыҙ торған ерҙе эҙләп таптым,
Ҡыҙ янына кереп яттым,
Унан бик күп файҙа таптым:
Алтын-көмөштәр алдым,
Алтынлап йорттар һалдым,
Яҡшы ғына байып ҡалдым,
Үҙен йәмәғәт итеп алдым,
Лавкалар асып, һатыуҙар һаттым,
Ҡыҙҙы хәҙер ҡунаҡҡа алып ҡайттым.

Документтарын һалдат батшаға бирҙе, ти,
Саҡыртҡас, ике генерал йүгерешеп килде, ти.

Документта:

«Ҡыҙҙы алып ҡайтһаң, генерал булырға,
Батша үлһә, батша булып торорға,
Иҫке закондарҙы бөтөрөргә,
Ике генералды атын үлтерергә», –
Тип яҙылған ине, ти.
Батшаға һалдат ҡыҙ һүрәтен күрһәтте, ти,
Уны күргәс, тегенең иҫ китте, ти.
Иҫенә килгәс, теҙеп ҡуйҙы һалдаттарҙы,
Мылтыҡтарын күкрәгенә терәтте, ти.
Батшаға һалдаттар әле атмайҙар, ти.
– Сабыр ит, – тип, уны һаҡлайҙар, ти.
Бүлмәһенә керҙе лә үҙе атылды, ти.

Сәбәбе шул:

Ҡыҙ һүрәтен күргәс, ярһыны, ти,
Үҙе атылғас, йөрәге баҫылды, ти.
Генералдарҙы халыҡ яптыра ла аттыра.
Бар дошмандар дер ҡалтырап:
Йә Раббым, – тип саҡ тора.
Хәҙер былар батша һайлайҙар,
Бөтөн халыҡ һалдатты яҡлайҙар,
Унан лайыҡ бүтән тапмайҙар.
Ошо иптәш батша булһын, – тип,
Халыҡтар һис өйҙәренә ҡайтмайҙар.
Бер заман һүҙләшеп туйҙылар, ти.
Был һалдатты батша итеп ҡуйҙылар, ти,
Батша булғас, һалдат яҡшы өйҙәр һалдырҙы, ти,
Теге йортто бабаһына ҡалдырҙы, ти,
Үҙ янына ата-әсәһен алдырҙы, ти.

## 75. Бер һалдаттың Австрия батшаһының ҡыҙын алғаны

Борон заманда бер ауыл егете хеҙмәткә киткән. Шулай бер көн склад һаҡлап тора икән, капитан менән поручиктың һөйләшеп торғанын ишетеп ҡалған. Поручик:

– Ҡайҙан киләһең? – тип һораған.

– Австриянан, – тигән капитан, – уның батшаһының ҡыҙы бик һылыу икән, шуны күрер өсөн 500 һум түләнем.

– Мин дә шунда булдым, 300 һум түләнем, тик күрә алманым, – тигән поручик.

Ишетеп торған һалдат:

– Беҙ илдәребеҙҙе ташлап хеҙмәт итеп йөрөйбөҙ. Һеҙ юҡҡа халыҡ аҡсаһын туҙҙырып йөрөйһөгөҙ икән әле! Мин барһам, бушҡа ла күреп ҡайтыр инем, – тип һүгеп ташлаған офицерҙарҙы. Теге офицерҙар был һалдатты ротныйға* ошаҡлағандар ҙа үҙ юлдарына китеп тә баргандар. Рота командиры һалдатты полк командирына, полк командиры генералға алып барған. Һалдат һаман да:

– Һеҙ ҙә, батша ла халыҡ елкәһен ашап ятыуығыҙ етмәгән, ил көсөн елгә осораһығыҙ. Ул Австрия батшаһының ҡыҙын, аҡса түләп күреү түгел, үҙен алып ҡайтып була, – тигән. Был хәбәрҙе генералдар батшаға еткергән. Батша һалдаттың ҡыйыулығына аптыраған. Ахыры* уға Австрия иленә барырға рөхсәт иткән.

Һалдат юлға сыҡҡан. Австрияның баш ҡалаһына барып, батшаның ҡыҙын күҙәтә башлаған. Берҙән-бер көн батша ҡыҙы бер егет менән үҙҙәренең баҡсаһында ял итеп йөрөй икән. Һалдат ситтән генә ҡасып күҙәтеп торған. Егет:

– Мин бөгөн ҡасан киләйем? – тигән. Ҡыҙ:

– Кис сәғәт туғыҙҙа килерһең, – тигәс, ул ҡайтып киткән. Һалдат извозчикка ултырған да егеттең артынан күҙәтеп барған. Егет бик ҙур бер һарайға инеп киткән. Егет берәй сәғәт самаһы тышта күҙәтеп йөрөгән дә шул һарайҙың ишегенә барған. Кнопкаһын баҫыуы булған – бер ҡатын килеп сыҡҡан:

– Хужа йоҡларға ятты, уятырға ярамай, – тигән. Һалдат:

– Миңә сәғәт төҙәтергә ҡушҡан ине ул, – тигән.

Һалдат сәғәт төҙәткән кеше булып булашҡан да сәғәтте ике сәғәткә артҡа күсереп ҡуйған. Үҙе, сәғәт туғыҙ тулыу менән, теге батша ҡыҙының тәҙрә төбөнә килгән дә тауыш биргән. Ҡыҙ, ҡараңғыла аңын-тоңон белмәй, ултырып менеү өсөн, кәрзин төшөргән. Шуға ултырған һалдат ҡыҙ йәшәгән ҡатҡа менеп тә киткән.

Һалдат батша ҡыҙы менән бергә бит инде хәҙер. Бер аҙ ваҡыт үткәс, һалдат гимнастеркаһының төймәһен өҙөп алған да иҙәнгә төшөрөп ебәргән дә шуны эҙләгәндәй иткән. Ҡыҙ:

– Нимә төшөрҙөң? – тигән.

– Алтын балдағым төшөп китте лә, шуны эҙләйем, – ти икән һалдат.

– Эҙләмә, минекен ал, иртәгә табырмын, – тигән ҡыҙ.

Ике сәғәт үткәс, һалдат кейенгән дә китергә йыйынған. Ҡыҙ:

– Ҡайҙа осрашырбыҙ? – тип һораған.

– Ресторанда көтөрмөн. Сәғәт ундарҙа кил, – тигән һалдат.

Һалдаттың китеүе булған – әлеге егет килгән. Батша ҡыҙы, икенсе егет шаярып йөрөй икән тип, һалдат менән икәүһе йыуынған һыуҙы өҫтән тегенең башына түккән. Егет, асыуланып, үпкәләп ҡайтып киткән.

Һалдат икенсе көн, ашамлыҡ-эсемлектәр алып, әйтелгән ваҡытҡа батша ҡыҙын көтөп ултырған. Батша ҡыҙы әсәһе менән килеп кергән. Бер өҫтәл артына ултырып, былар теге егетте көтә. Көтәләр-көтәләр – теге юҡ, ти. Һалдат барған да ҡыҙҙы үҙ өҫтәленә саҡырған, ҡыҙ аптырап киткән. Шулай аптырап ҡарап торғанында, һалдат ҡулындағы балдаҡты күрһәткән. Күрһәтеүе булған – ҡыҙ шунда уҡ тыңларға мәжбүр булған. Шунан инде аңлашҡандар. Батша ҡатыны:

– Атайың, балам, риза булмаҫ бит, – тигән. Хәҙер инде һалдат менән ҡыҙ ныҡ торған.

Һалдат бик күп хәйләләр ҡороп, батшаны, уның вәзирҙәрен көлкө хәлгә ҡалдырып бөткән. Шунан күп байлыҡтар алып, батшаның ҡыҙын ҡатын итеп, Рәсәйгә ҡайтҡан. Һалдат кеше ҡайҙа барһын инде, үҙенең ротаһына килгән. Батшаға хәбәр иткәндәр. Батша:

– Хеҙмәтен тултырғансы йөрөһөн! – тигән. Бының ҡатынына рота командиры ла, полк командиры ла, генерал да осраған һайын:

– Һин нишләп шул йолҡош менән тораһың? Ауылына ҡайтыр ҙа шул сабатаһын кейеп йөрөр әле! – тиҙәр икән. Ҡатыны бөтәһен дә һалдатҡа һөйләп барған.

Һалдат ни шунда уҡ хәйләне ҡороп та ҡуйған: өс бүлмәле шкаф яһатҡан. Шунан ҡатынына:

– Өсөһөн дә бер юлы: береһен – сәғәт етегә, икенсеһен – һигеҙгә, өсөнсөһөн туғыҙға саҡыр, – тигән. Ҡатыны:

– Ярар, – тигән дә саҡырған тегеләрҙе. Әйтелгән ваҡытҡа башта рота командиры килгән. Уның менән сәй эсеп ултырһалар, ишек шаҡылдатҡандар. Ҡатын быны шкафтың бер бүлмәһенә йәшергән.

Полк командиры килгән икән. Ҡатын хәҙер уны сәйгә ултыртҡан. Инде сәй эсеп бөттөм тигәндә генә тағы ишек шаҡылдаталар. Был командирҙы ҡатын шкафтың икенсе бүлмәһенә бикләгән.

Генерал килгән икән. Ул:

– Сәй-маҙар эсеп тормайым, ятайыҡ! – тигән. Йәнәһе, эште ҡыҫҡа тота. Сисенеп кенә торһа, йәнә ишекте дөбөрләткән тауыш килә, ти. Ҡатын генералды шкафтың өсөнсө бүлмәһенә бикләп ҡуйған.

Был юлы һалдат үҙе ҡайтып инде, ти.

Хәҙер инде һалдат бөтә ғәскәрҙе йыйған да, шкафты алып барып, майҙанда асып ебәргән. Һалдаттар аптырашып ҡалған, ти. Батшаға хәбәр иткәндәр. Батша ни тегеләрҙе ғәскәрҙән ҡыуған, һалдатҡа ҡатыны менән көн итергә рөхсәт биргән. Әтү ни ябай кешене һанға һанамаған булғандар, ти, элек. Имеш, ябай кеше бәхетле булырға тейеш түгел. Һалдат бына шулай түрәләрҙе һемәйткән, ти. Батша кейәүе булып киткән, ти, моратына еткән, ти.

## 76. Аҡыл

Борон-борон заманда бер кешенең өс улы булған, ти. Шунан шул кеше үлергә яткан ваҡытта, иң өлкән улын саҡырып:

– Йә, улым, һиңә нимә кәрәк? Мал кәрәкме? Аҡыл кәрәкме? – тип һораған, ти. Өлкән улы:

– Мал кәрәк, – тигән.

Шунан атаһы уға мал биргән, ти. Икенсе улын саҡырып алып йәнә шулай һораған, ти. Уныһы ла мал һораған икән, тағы мал бүлеп биргән, ти. Кесе улын саҡырып йәнә шул уҡ һорауҙы биргән. Быныһы:

– Миңә мал кәрәкмәй, аҡыл кәрәк, – тигән, ти.

Атаһы:

– Мин үлгәс, фәлән ерҙең баҙарына барырһың, шул баҙарҙа аҡ һаҡаллы ҡарт булыр. Тот та шул ҡарттың һаҡалына йәбеш. Ул һиңә, ни аҡыл һораһаң да, өйрәтер, – тигән дә был ҡарт үлеп киткән, ти.

Алыҫта бер хан йәшәгән. Уның бик һылыу ҡыҙы булған, ти. Шул ҡыҙҙы бай балалары, күп мал биреп, күреп ҡайта торған булғандар, ти. Кесе малайҙың ағалары ла, аталарынан тейгән малдарын биреп, шул хан ҡыҙын күреп ҡайтҡандар. Шунан ҡустыларын саҡырып:

– Бына, беҙҙең малыбыҙ булғас, хандың ҡыҙын күреп ҡайттыҡ. Бар, һин аҡылың менән нимә эшләрһең икән? – тип мыҫҡыллағандар, ти.

Уларҙың ҡустылары таҙ икән, ти. Был Таҙ:

– Һеҙ хан ҡыҙын мал биреп күрһәгеҙ, мин уны бер тинһеҙ күрермен. Күреп кенә ҡалмамын, уны кәләш итеп алып ҡайтырмын әле, – тигән, ти.

Шунан Таҙ баҙарға барған да, атаһы өйрәткәнсә, аҡ һаҡаллы ҡартты табып алып, тотҡан да һаҡалына йәбешкән, ти. Ҡарт:

– Ни мохтажың бар, балам? – тип һораған, ти. Таҙ:

– Миңә хандың ҡыҙын күрергә, янына инергә аҡыл өйрәт, – тигән, ти.

Ҡарт:

– Ярар. Иң әүәл баҙарҙан бер кәзә ал, – тигән.

Таҙ кәзә һатып алған. Шунан ҡарт алға ҡарап, Таҙ артҡа ҡарап кәзәне менгәндәр, хан ҡыҙы торған һарайға юл тотҡандар. Хан ҡыҙы быларҙы күреп ҡалған да:

– Ҡара, ҡара бынауы диуаналарҙы, икеһе ике яҡҡа ҡарап ултырып килә яталар, – тигән дә тәҙрәне асып шарҡылдап көлөп ебәргән, ти.

Шунан һуң бабай кәзәһенең аяҡ-ҡулын бәйләгән дә бысағының һырты менән ҡойроғон ышҡый башлаған. Хан ҡыҙы һарайҙан йүгереп килеп сыҡҡан да кәзәне нисек салырға өйрәтеп биргән, ти.

Былар кәзәне тунап бөткәс, итен ергә өйөп һалғандар, өҫтөнә ҡаҙан түңкәреп, ут яға башлағандар, ти. Хан ҡыҙы быны ла күреп ҡала.

— Эй, был мосафирҙар ит тә бешереп ашай белмәйҙәр икән, – тип йәнә йүгереп килеп сығып, ит бешереү эшен өйрәтеп биргән, ти.

Көн кисеккәс, хан ҡыҙы хеҙмәтселәренә:

– Был мосафирҙар кискә бер ҡайҙа ла китә алмаҫтар. Уларҙы бер бүлмәгә индереп йоҡлатығыҙ, – тип бойорған, ти.

Шунан быларҙы бер бүлмәгә йоҡларға һалғандар икән, ҡарт менән Таҙ урынға талаша башлағандар. Хан ҡыҙы:

– Эй, әле был байғоштар ята ла белмәйҙәр икән, – тип Таҙҙы үҙ бүлмәһенә, ҡартты еңгәһенең бүлмәһенә йоҡларға һалдырған, ти.

Иртән торғас ҡарт ишек алдына сыҡҡан да:

– Мин хандың килене менән йоҡланым, Таҙ хандың ҡыҙы менән ҡунды, – тип һөрән һала башлаған, ти.

Хан ҡыҙы был тауышты ишетеп:

– Зинһар, улай тауышланмағыҙ. Бына һеҙгә теләгәнсә алтын бирәм, – тип бик күп алтын биреп, быларҙы ҡайтарып ебәргән, ти.

Таҙҙың ағалары, был эште ишетеп, көнләшә башлағандар. Таҙҙы үлтермәксе булып, бер ҡумта эсенә һалғандар ҙа, этеп төшөрөү өсөн, урманға таяҡ алырға киткәндәр, ти. Шул саҡ Таҙ янына бер көтөүсе килеп сыҡҡан. Таҙ уға эштең айышын һөйләп биргән, ти. Көтөүсе Таҙҙы ҡумта эсенән сығарған, ти. Шунан Таҙ ҡумта эсенә үҙенең ауырлығындағы бер таш һалған да ҡумтаны боронғоса сөйләп, нығытып, көтөүсе менән үҙе бер яҡта ҡасып торған, ти. Ағалары килгәс, ҡарап та тормай, ҡумтаны һыуға төртөп төшөргәндәр ҙә ҡайтып киткәндәр, ти.

Таҙ көтөүсенең малын ҡыуалаған булып, ағаларының арттарынан төшкән. Ағалары, артта мал баҡырышҡанға әйләнеп ҡараһалар, аптырағандар ҙа ҡалғандар, ти.

– Был тиклем малды ҡайҙан алдың? – тип һоранылар, ти, Таҙҙан. Таҙ:

– Һеҙ һыуға ташлағас, мин бырҡ-бырҡ итеп төшөп киттем бит әле, ана шунда йылҡыларымды ҡайыра алмай йөрөй инем, – тигән. Ағалары был һүҙгә ышанып, аҡыл булмағас ни:

– Йә, улай булғас, һин беҙҙе лә шул ерҙә һыуға ташла. Беҙ ҙә һинең шикелле бер талай мал ҡыуып алып сығайыҡ, – тигәндәр, ти.

– Ярар һуң, – тигән дә Таҙ ағаларын алып барып, икеһен дә ҡумтаға һалып, ныгытып сөйләгән дә һыуға быраҡтырған. Шунан үҙе ҡайтып киткән, ти.

## 77. Таҙ менән Һуҡыр

Борон-борон заманда бер Таҙ менән бер Һуҡыр булған, ти. Бер байҙың бик матур бер ҡыҙы булып, кешеләр күп аҡсалар түгеп шул ҡыҙҙы күрергә баралар икән. Бер көн Таҙ менән Һуҡыр бай ҡыҙын күрергә киткәндәр, ти. Таҙ бер башҡа, Һуҡыр бер башҡа бара. Бара торғас, юлдары осрашты, ти, быларҙың.

– Һуҡыр, ҡайҙа бараһың?

– Байҙың ҡыҙын күрергә барам.

– Уны аҡсаһыҙ күрһәтмәйҙәр, ти, бит.

– Минең ике мең аҡсам бар.

– Икәү бергә барайыҡ. Мин һиңә бер тинһеҙ күрһәтәм.

Китәләр былар. Шунан Таҙ:

– Һин йөҙ һумыңды миңә бир, – тигән. Һуҡыр быға аҡсаһын бирҙе, ти. Таҙ әйтә:

– Һин, Һуҡыр, арттан ғына бар, мин ауылдың осонан: «Кем кәзә һата?» – тип ҡысҡырып барырмын, – ти. Таҙ шулай урам буйлап ҡысҡырып бара, ти. Бара торғас, теге байҙың өйө янына етәләр. Бисәһе менән бай ҡунаҡҡа киткән була. Ҡыҙы еңгәһе менән генә ҡалған икән. Ҡыҙ:

– Әйҙә, еңгә, кәзә һатайыҡ, – ти.

Һатырға булалар. Таҙҙы саҡырып керетәләр.

– Кәзәгеҙ ни хаҡ? – ти Таҙ.

– Утыҙ тәңкә, – ти ҡыҙ.

Таҙ кәзәне алып, һуйырға була. Ҡыҙҙан бысаҡ алдыра. Кәзәнең муйынын бысаҡтың һап ягы менән ышҡый башлай, кәзә сарылдап баҡырырға тотона.

Ҡыҙ, кеше ишетеп, аталарына әйтеп ҡуйыр, тип ҡурҡа ла сығып:

– Үткер яғы менән ышҡыйҙар уны, – тип ҡысҡыра икән.

Нисек етте, шулай сала Таҙ кәзәне. Һуйып, ботарлап бөткәс, ит һалырға һауыт һорай. Ҡыҙ йүгертеп биҙрә алып сығып бирә.

Таҙ биҙрәне түңкәреп ултырта ла итте төп яғына һала башлай. Таҙ һалып тора, ите ҡойолоп төшөп тик тора, ти. Шунан ҡыҙ сығып тағы өйрәтеп китә. Таҙ ҡапҡа төбөнә ут яғып, ит бешерергә була. Ҡыҙ күреп ҡала ла:

– Ағайҙар, улай итмәгеҙ, ана, кереп, беҙҙең ҡаҙанда бешерегеҙ, ти.

Таҙ менән Һуҡыр байҙың өйөнә кереп, итте ҡаҙан тултырып бешереп, ашанып алалар. Ашап бөткәс, тышҡа сығалар ҙа:

– Килене һиңә, ҡыҙы миңә, ҡыҙы миңә, килене һиңә, – тип икәү-ара тас та тос һуғыша башлайҙар. Ҡыҙ тағы ҡурҡыуға төшә.

– Ағайҙар, шауламағыҙ, кеше ишетә бит, – тип өйгә үк саҡырып индерҙе, ти.

Өйгә ингәс тә, былар ҡуймайҙар, һаман шаулашалар. Берәһен байҙың ҡыҙы, икенсеһен килене яндарына алып ятҡас ҡына тынысландылар, ти...

Иртән торғас, Таҙ менән Һуҡыр ҡайтыр юлға сығалар. Юлда ҡола ат менгән бер кеше килә. Иҫәнлек-һаулыҡ һорашалар. Был һыңар күҙле кеше, ти.

– Ҡайҙан киләһегеҙ?

– Беҙ шундай ерҙә булдыҡ, мин таҙ инем, таҙым бөттө, был һуҡыр ине, күҙле булды. Әле шунан киләбеҙ, – тигәндәр.

– Унда нисек барырға? Миңә лә өйрәтегеҙ.

– Анау йорт янына бар ҙа:

*Белдем эшегеҙҙе,*
*Һындырам тешегеҙҙе!* –

тип ботонДо ҡамсыла.

Был һыңар күҙ байҙың ҡапҡа төбөнә бара ла:

*Белдем эшегеҙҙе,*
*Һындырам тешегеҙҙе!*
*Белдем эшегеҙҙе,*
*Һындырам тешегеҙҙе!* –

тип ҡысҡырып үҙен үҙе ҡамсылай башлаған, ти. Байҙың ҡыҙы сыҡҡан да:

– Ағай, ағай, Таҙ менән Һуҡыр беҙҙә ҡунып китте, бер кемгә лә һөйләмә инде, – ти икән.

Теге кеше күҙле булмай бит инде.

– Танауығыҙға... Һеҙҙе түгел, мине һемәйтте был Таҙ. Ярар инде, күҙле булып булманы, – тине, ти, һыңар күҙ, һуҡранып.

Бөттө хәл шуның менән. Әкиәт ары китте, үҙем бире ҡалдым.

## 78. Ҡашиҡәрип менән Маһимөһир

Борон-борон заманда бер әбей булған, ти. Уның Ҡашиҡәрип исемле улы ла йәнә бер ҡыҙы булған. Улар бик ярлы йәшәгәндәр, ти.

Ҡашиҡәрип бер ярлы ғына кешенең Маһимөһир исемле ҡыҙына ғашиҡ булған. Уларҙың араһына бай малайы төшә икән. Маһимөһирҙе ул үҙенә кәләшлеккә алмаҡсы итә, ти.

Берҙән-бер көндө Ҡашиҡәрип, аҡса эшләп ҡайтырға тип, ҡалаға эшкә китергә уйлай. Бай малайы ла уның менән бергә бара. Улар, икеһенә бер ат алып, оҙон юлға сығып китәләр. Баралар, баралар, бер ҙур йылғаға осрайҙар. Йылғаны нисек аша сығырға, тип торғанда, бай малайы Ҡашиҡәрипкә:

– Һин сисенеп, алдан йөҙөп сыҡ, мин һинең артыңдан, кейемеңде алып, ат менән йөҙөп сығырмын, – ти.

Ҡашиҡәрип, уны-быны уйлап тормай, йөҙөп сыға ла китә. Бай малайы Ҡашиҡәриптең кейемен алып, сабып ҡайтып китә.

Ҡашиҡәрип, ояла-ояла, яҡындағы бер бәләкәй ауылға барып етә лә ситтәге бер өйгә инә. Унда бер ир кеше ултыра икән. Ҡашиҡәрип үҙенең ҡайғыһын һөйләп бирә. Уны кейендереп, ашатып, ҡалаға оҙаталар. Ҡашиҡәрип ҡалала эшкә урынлаша: бер сауҙагәрҙең магазинында һатыу итә.

Был сауҙагәр, ауылдан ауылға йөрөп, тауар һатҡан була. Бер ваҡыт ул Ҡашиҡәриптәр ауылында була. Маһимөһир сауҙагәрҙең Ҡашиҡәрип эшләгән ҡаланан икәнен белгәс, уға бер батмус бирә лә:

– Ошоно магазинға ҡуй, килеп хаҡын һораған кешегә минең хаҡта һөйләрһең, – ти.

Сауҙагәр батмусты алып ҡайтып, магазинға ҡуя. Ҡашиҡәрип таныш батмусты күреп, һораша башлай.

– Һине бөгөн үк ҡайтырға ҡушты Маһимөһирең, уны бай балаһына ҡушалар, – ти тегеһе.

Ҡашиҡәрип йәйәүләп юлға сыға. Бара торғас, кис була башлай. Бер тау янына еткәс, ул, бөгөн барыбер ҡайтып етеп булмай, ни эшләһәм дә, һуңға ҡалырмын тип, тауға менә. Ҡаянан ташланырға уйлай. Шулай аҫҡа ҡарап торһа, унда бер күк атлы кеше:

– Егет ни эшләйһең унда? – ти.

– Үлгем килә, – ти Ҡашиҡәрип.

– Улайһа, кил, үҙем үлтерәм, – ти теге кеше.

Ҡашиҡәрип тауҙан төшә лә теге кешегә хәлен һөйләп бирә.

– Әйҙә, һине хәҙер үк ауылыңа илтеп ҡуям, – ти теге кеше. – Күҙеңде йом, – ти.

Ҡашиҡәрип, атҡа менеп, күҙен йомоп ултыра. Улар күк толпар менән осортоп китәләр.

Теге кеше бер ауылға алып барып төшөрә лә:

– Күҙеңде ас, ауылың ошомо? – тип һорай.

– Юҡ, – ти Ҡашиҡәрип.

Улар тағы осортоп китәләр. Баралар, баралар, тағы бер ауылға барып төшәләр.

– Күҙеңде ас, ауылың ошомо? – ти теге кеше.

– Эйе, тик минең бер көндә ҡайтыуыма ышанмаҫтар, берәй һөнәргә өйрәт әле, – ти Ҡашиҡәрип.

Теге кеше ат тояғы аҫтынан бер ус тупраҡ алып бирә.

– Был тупраҡты ете йыл һуҡыр булып ултырған кешенең күҙенә һөртһәң, күҙе асылыр, – ти.

Ҡашиҡәрип теге кешегә рәхмәттәр уҡып тороп ҡала.

– Мине өйөгөҙгә индерегеҙ әле, йоҡлап ҡына сығайым, – тип әсәһенең өйөнә инә.

– Төшөрмәйем. Үҙем бына ете йыл һуҡырмын. Балам ситкә киткәнгә илап, һуҡыр булдым, – ти әсәһе.

Шул саҡ ҡыҙы әсәһенә:

– Инһен, бәлки, ағайымдыр, – ти.

Әсәһе:

– Ҡуй, юҡты һөйләмә, үлгән кеше кире ҡайтамы? – ти.

Ҡыҙы ялынғас, әсәһе риза була. Ҡашиҡәрип инә, сисенеп, үҙ хәлдәрен һөйләй башлай, кем икәнен белгертмәй. Шул саҡ күҙе ҡурайға төшә:

– Инәй, рөхсәт итһәгеҙ, ҡурайҙа уйнар инем, – ти.

– Ҡуй, балам, ғәзиз баламдың ҡомартҡыһы ул, төҫө итеп һаҡлайым, – ти әсәһе.

Егет үҙ һүҙендә тора. Ныҡыша торғас, ҡурайҙы ала.

– Бында уйнама, ана, байҙарҙа туй бара, шунда барып уйна, – ти ҡарсыҡ.

Егет, ҡыуанып, ҡурайҙы ҡулына тотоп, туй барған өйгә китә. Рөхсәт һорап инә. Уны ишек төбөндәге ҙур һандыҡ өҫтөнә генә ултыртып ҡуялар. Егет моңландырып ҡурайҙа уйнай башлай.

– Кем һин? – тип һорайҙар унан.

Ҡашиҡәрип исемен үҙгәртеп әйтә. Үҙе күргәндәрҙе, башынан үткәндәрҙе дөрөҫ итеп һөйләп бирә. Һөйләй торгас, үҙенең Ҡашиҡәрип икәнлеген таныта. Туйҙағы кешеләр ышанмайҙар.

– Ышанмаһағыҙ, ете йыл һуҡыр ултырған бер кешене алып килегеҙ, шуның күҙен асам, – ти.

Ҡыҙ быны ишетеп, йүгереп ҡайтып, әсәһен алып килә.

Ҡашиҡәрип был әбейҙең күҙенә теге тупраҡты һөртә. Шунда уҡ ҡарсыҡтың күҙе асыла. Ул, алдында торған улын танып:

– Балам! – тип ҡосаҡлап ала.

Ҡашиҡәриптең ҡайтҡанын ишетеп, Мәһимөһир ҙә йүгереп килеп етә, Ҡашиҡәрипте ҡосаҡлап ала. Туйҙағылар аптырашта ҡалалар. Бай малайы ни эшләргә белмәй. Ҡылыс алып, Ҡашиҡәрип менән Мәһимөһирҙе үлтерәм, тип етеп килгәндә, Ҡашиҡәрип ҡалған тупраҡты тегенең күҙенә һибә. Бай малайы шунда уҡ һуҡырая. Ҡашиҡәрип, Мәһимөһирҙе, әсәһен, һеңлеһен алып ҡайтып, ҡурайын уйнап, туйҙы үҙ өйөндә дауам иткән, ти.

## 79. Беренсе матур

Борон бер бай йәшәгән, ти, был донъяла. Уның бик сибәр ҡатыны булған. Бер аҡһаҡалдан:

– Минең ҡатыным матурлығы яғынан беренсеме икән? – тип һораған, ти.

Аҡһаҡал әйткән:

– Һинең ҡатының – икенсе, беренсе матур әле тыумаған, – тигән.

Бай кеше ул тыуасаҡ матурҙы ла үҙенеке итмәк булып ҡәһәтләнгән, ти. Был йыш ҡына теге аҡһаҡал янына барып, әле тыумағанмы, тип беренсе матурҙың донъяға килеүен көткән.

Берҙән-бер көндө байҙың бисәһе ҡыҙ таба. Ул бик зифа буйлы, сибәр бер ҡыҙ булып үҫеп, ун ете-ун һигеҙ йәштәренә еткәндә, әсәһе вафат була.

Бай һаман да беренсе сибәрҙе алыу тураһында хыяллана, ти. Бер көн тағы аҡһаҡалға килеп һораһа:

– Ул тыуған, тик һиңә никахҡа ярамай, – тип әйткән, ти, аҡһаҡал.

Бай бик көсләшә башлағас, аҡһаҡал әйтергә мәжбүр булған.

– Ул бит һинең ҡыҙың, – тигән.

Шунан бай уйға ҡалған. Әммә бер һүҙ биргәс, үтәмәй ҡалмаҫҡа тағы ла ҡәһәтләнгән был.

Ҡыҙына был турала әйткәс, ул ҡаршы тороп ҡарай ҙа, булдыра алмаҫтай булғас, ахырыһы, илай-һыҡтай ризалыҡ бирә. Ул өс костюм тектерергә, беләҙектәр эшләтергә әйтә атаһына. Шунан, ҡушылыр мәл етеп килгәндә генә, теге костюмдарҙы, мунсаҡтарын, беләҙектәрен бер сумкаға тултыра ла, үҙенең урынына әсәһенең күпмәһен йомарлап һалып, тәҙрәнән сығып ҡаса был бер көндө. Эй бара был, эй бара. Бара торғас, таң да ата, тағы кис була. Төндө ағас башында үткәрергә була.

Иртә менән, әле ысыҡ та кипмәгән мәлдә, быны бер егет күреп ҡала. Уны бер шүрәле икән тип, был һунарсы атмаҡсы була. Шунда ҡыҙ:

– Мине атма, егетем. Мин әҙәм затынан, – тип үтенгәс, егет тоҙәгән мылтығының яһауын кире ала. Шулай ҙа, тәүге табышты юғалтмаҫ өсөн, ҡыҙҙы ла эйәртә был. Өйөнә алып ҡайтып, әсәһенә:

– Бер шүрәле эпкилдем, – ти ҙә ҡыҙҙы айырым бер бүлмәгә бикләп ҡуя.

Был табыш бер ҙә генә шүрәлегә оҡшамай. Етмәһә, әсәһе бер көндө уның баш йыуыын, сәс тарап ултырыуын да күрә. Уның эшкә эшкингәндәй йән эйәһе икәнен күргәс, әсәһе улынан йомошҡа тотонорға рөхсәт һорай.

– Тик минең тупһаға баҫтырма, унда беренсе булып баҫҡан ҡыҙ минең ҡатыным булырға тейеш, – тип тотонорға рөхсәт итә.

Ҡарт әсә алдында ҡыҙ тотоноп рәхәтләнә. Уның бешергән аш-һыуҙарын егет тә бик яратып ашай.

Был егет әбейҙең берҙән-бер улы булған була. Ул ҡайҙалыр бер ерҙә театрҙа уйын ҡуйыусы булып эшләй, буш ваҡытын һунарға йөрөү менән үткәрә торған булған икән.

Бер көндө был театрға йыйына. Йыуынырға итһә, һабын юҡ, ти.

– Әсәй, һабын бир, – тип ҡысҡырһа, әбейҙән элек теге ҡыҙ быға һабын килтерә.

– Әсәй, индермә, тип әйттем дә инде, ни эшләп минең янға ул шүрәлене ебәрәһең? – тип асыуланып, ҡыҙҙың башына теге һабын менән ебәрә был.

Ярай. Егет театрға китә. Ул яҡшы киткәйне*, ти, ҡыҙ матур итеп кейенеп, гәүһәр таштарын алып, извозчикка ултырып, егетенең артынан китте, ти.

Театрҙа егеттең был ҡыҙға күҙе төштө, әммә уның шүрәле тип үҙе алып килгән ҡыҙ икәнен белмәне, ти. Адресын һораһа, ҡыҙ:

– Мин Күҙһабынымэнәнбашҡаһуҡҡанский ҡалаһынан, – ти ҙә, оҙаҡ та тормай, егеттән алда ҡайта ла китә.

Егет тынысһлығын юғалта. Әммә ҡыҙ әйткән ҡаланы картанан да, һорашып та таба алмай.

Икенсе бер ваҡыт, һунарҙа йөрөп-йөрөп, тағы театрға китергә торһа, теш йыуырға порошок юҡ, ти. Әсәһенән порошок һораһа, тағы теге ҡыҙ килтереп бирә.

– Әсәй, индермә минең бүлмәгә, тип әйттем дә инде! – тип йәнә быныӊ башына порошок менән һуҡты, ти.

Театрҙа тағы ла теге һылыу ҡыҙҙы осраҡан, ти, был егет. Ҡайса ваҡытында адресын һораһа, ҡыҙ йәнә быға:

– Порошокменәнбашҡаһуҡканский ҡалаһынан, – тип яуап биргән, ти, шунда извозчигы килеп, уны алып сығып та киткән.

Ҡайтҡас, егет тағы картанан эҙләй, ти, эй эҙләй, ти, ҡыҙ әйткән ҡаланы – юҡ, таба алмай, ти, ундай ҡаланы. Үҙенең өйөндә йөрөгән шүрәле тип килтергән ҡыҙға әйләнеп тә ҡарамай, иғтибар ҙа итмәй, ти.

Көндәрҙән бер көндө, һунарҙа йөрөп-йөрөп, тағы ла театрға китергә йөрөй, ти, егет. Шунда хушбый һөртәйем тиһә – хушбый юҡ, ти.

– Әсәй, хушбый бир әле, – тип ҡысҡырған егет.

Йәнә ҡыҙыҡай килтереп бирә бит быға. Тағы тупһанан аша атлаған өсөн, башына ебәрә теге хушбый менән.

Ярай, ҡыҙ, башының ауыртыуына ҡарамай, әлеге извозчик менән тағы ла егеттең артынан китә.

Театрҙа егетте аптыратып тағы ла:

– Мин Башҡахушбыйменәнһуҡканский ҡалаһынан, – тип әйткән, ти, адресын.

Тағы егеттән алда ҡайта ла, бер нәмә лә булмаған кеүек, өй эштәре менән булыша икән.

Егет ҡайта. Был ҡыҙҙың ҡалаһын тағы ла таба алмай.

Хәҙер инде егет элекке хәленән үҙгәрә. Ни генә эшләмәһен: һунарҙа ла, ятһа ла, торһа ла – әлеге театрҙа күргән ҡыҙ ғына, ти, бының башында. Әсә күңеле балаһының күңелендә ни барын, ни юғын һиҙмәй буламы һуң? Улының һаташыуҙарынан, эшкә лә илке-һалҡыланып, атын да ҡарамай, этен дә ҡарамай, уҡ-һаҙаҡтарын да рәтләмәй, шүрәле тип килтергән ҡыҙға күҙ һалмай йөрөүен күреп, берҙән-бер көндө егеткә:

– Һуң һин арғымағыңды ла ҡарамайһың, этеңде лә оноттоң, килтергән шүрәлеңә лә күҙ һалмайһың. Ул бит һис кенә лә шүрәлегә оҡшамаған. Күҙ һалыр инең, – тип әйтте, ти.

Егет шул көндән һуң әлеге ҡыҙға күҙ һала башланы, ти. Уға күҙ һалғас, этен тәрбиәләргә лә, ҡоралын йүнәтергә лә дәрте килә башланы, ти. Ҡыҙҙы күргәндән-күргеһе килеп кенә торҙо, ти.

Әсәһе улының теге ҡыҙға күҙе төшөүен һиҙенә. Егет яҡшылап ҡарай торғас, был ҡыҙҙың теге театрҙа танышҡан матур булыуын аңлай.

Берҙән-бер көндө әсәһе аша ҡыҙҙы һоратып, ҡыҙҙың ризалығын алып, ҡушылалар.

Бала-сағалы булып, ҡыуанышып, әле булһа ла йәшәп яталар, ти.

Әкиәтем ары, үҙем бире.

## 80. Айгөл

Борон заманда Ҡарахан исемле батша йәшәгән. Һунарға йөрөү менән шөғөлләнгән. Һунарға ул һәр ваҡыт үҙенең вәзире менән йөрөр булған. Бына улар бер ваҡыт ғәҙәттәгесә вәзир менән икәүләп һунарға киткән. Киткән ваҡытта икеһе лә ҡатындары менән яҡшы теләктәр әйтешеп хушлашҡан: икеһенең дә ҡатындары ана-бына тип кенә торалар: бала көтәләр икән.

Һунарға йөрөгәндә, батша менән вәзир йыш ҡына өй хәлдәрен хәтергә төшөрөп, ҡатындары, буласаҡ балалары тураһында һөйләшер булған.

– Әгәр ҙә һинең дә, минең дә ҡатын ул тапһа, ниндәй яҡшы булыр ине, – тигән батша, – юҡ, минең ҡатын һис шикһеҙ ул табырға тейеш, – тигән. Һунарға киткәндә, батша үҙенең ҡатынына: «Ул табырға тейешһең! Ул булһа, бөтә батшалыҡты саҡыртып туй яһармын. Ҡыҙ бала булһа, мин ҡайтҡансы, өйҙән сығып кит», – тип бойороҡ биргән була.

Батша вәзире менән һунарҙа йөрөгән мәлдә уларҙың ҡатындары икеһе лә донъяға бала килтерә. Ҡарахан батшаның ҡатыны ҡыҙ таба, ә вәзирҙеке – ул.

Ҡарахан батшаның ҡатыны ҡыҙ балаһы барлығын берәүгә лә әйтмәй, йәшерен һөйләшеп, ҡыҙын вәзир ҡатынының улына алмаштыра.

Бына һунарсылар ҡайтып төшә. Ҡарахан, ир балаһы тыуыу шатлығынан, бөтә батшалығын саҡыра, бала туйы яһай. Вәзир иһә үҙенсә ҡыҙ туйы үткәрә. Ул ҡыҙына Айгөл тип исем ҡуша.

Айгөл бик матур, һөйкөмлө ҡыҙ булып үҫә. Әсәһенең яҡын ярҙамсыһына әйләнә. Күҙгә күренерлек булып ҡалҡып еткәс, уны күптәр һоратып, яусы ла ебәрә башлай. Айгөлдө Ҡарахан да күреп ҡала һәм бер күреүҙә ғашиҡ була.

– Ул ҡыҙ, һис шикһеҙ, минеке булырға тейеш, – ти ул.

Айгөл йәшәгән өйгә көн дә Ҡарахан батша яусыһы килеп кенә тора. Ҡыҙҙың ата-әсәһе уны биреүҙән баш тарта. Ысынында, атаһы риза булырға уйлап-уйлап та ҡуя, сөнки ул Айгөлдөң Ҡарахан ҡыҙы икәнен белмәй. Ҡатыны нығ тора. Вәзир уның һүҙен йыҡмай. Ҡарахан батша: «Әгәр Айгөлдөң ата-әсәһе уны миңә бирмәһә, өсөһөн дә илдән ҡыуам!» – тип ҡурҡыта. Ҡыҙҙың ата-әсәһе ҡайғыра. Айгөл ата-әсәһенең ҡайғырыуҙарын күрә, уларҙың хәлен аңлай. Был ҡайғы үҙе арҡаһында сығыуына эсе боша. Шунан ул: «Мин булмаһам, бәлки, атай-әсәйемә еңелерәк булыр», – тип уйлап, тыуған ауылын, ата-әсәһен ташлап сығып китә. Үҙе бара, үҙе ҡайҙа барғанын да белмәй. Һәләнән-әле артына әйләнеп ҡарай. Уға Ҡарахан батша ҡыуып килгән һымаҡ тойола. Көнөн китә, төнөн китә, кеше аяғы баҫмаған ҡара урманды үтә, икһеҙ-сикһеҙ яландар үтә. Бара торғас, Айгөл арый, асыға, һыуһай. Шунан ул көс-хәл менән бер тау башына менә лә ап-аҡ таш өҫтөнә ял итергә ултыра.

Арыған кешегә күпме кәрәк, аҙ ғына ултырыуы була, Айгөл йоҡоға тала. Ул шундай төш күрә: уның алдына башына аҡ сәллә ураған, йәшел сапанлы, йәшел таяҡҡа таянған ап-аҡ һаҡаллы бер ҡарт килеп баҫҡан икән, ти. Ул Айгөлдө һөйөп, йыуатып ошоларҙы һөйләй:

– Ҡыҙым, мин бәхетһеҙмен, тип илама, һинең бәхетең алда. Һинең сәсең Ҡушҡанат илендә йәшәүсе Сыуанхан тигән егеттең сәсенә бәйләнгән. Һин уның менән йәшәргә тейешһең. Бына, ҡыҙым, һиңә ат, бына, һыуһағанда, һыу алып эсергә көмөш сүмес, – ти. Ошо ваҡыт Айгөл ҡапыл уянып китә, уянһа – алдында ҡарт юҡ, ә ул биргән ат көтөп тора, янындағы таш өҫтөндә көмөш сүмес ята. Айгөл тиҙ генә атҡа атланып ала ла, көмөш сүместе биленә ҡыҫтырып, аҡ һаҡаллы бабай күрһәткән яҡҡа юл тота. Эй китә, эй китә был. Китеп бара торғас, бер йылғаға барып етә. Атынан тиҙ генә төшөп, көмөш сүмес менән һирпеп һыу алып эсергә тип йылғаға ынтылһа, һыуҙа бер егет шәүләһен күреп ҡала. Аптырап китә. Башын ҡалҡытып ҡараһа, йылғаның икенсе ярында мыҡты кәүҙәле бик һылыу бер егет торғанын күрә. Был егет әле бая төшөнә ингән ҡарт һөйләгән Сыуанханға оҡшаған ине, ти.

– Сыуанхан, әллә һинме?

– Айгөл, әллә һинме? Ҡулыңдағы көмөш сүмес менән миңә һыу бирсе, – ти егет. Айгөл уға йылғанан һирпеп, көмөш кеүек таҙа һыу алып бирә.

Сыуанхан һыуһыны ҡанғансы эсә лә Айгөлдө күтәреп, йылғаның икенсе яғына алып сыға. Үҙенең был йылға буйына нисек килеп сығыуы тураһында һөйләй. Ул бынан бер аҙна элек кенә иптәштәре менән һунарға сыҡҡан. Уға бер бүре осраған. Сыуанхан шул бүрене ҡыуып китә лә иптәштәренән айырыла. Бүре ошо йылғаға килеп етә, шунда күҙ яҙҙыра. Айгөл төш күргән көндө Сыуанхан да ошондай уҡ йөкмәткеле төш күрә. Әлеге бүре, изге йән эйәһе булып уны, Айгөл менән осраштырыу өсөн, ошонда эйәртеп алып килгән. Айгөл менән Сыуанхан яр буйында ҡалып торһон, беҙ егеттең йортондағы хәлдәргә киләйек.

Был ваҡытта Сыуанхандың әсәһе, әбей батша, бөтә һунарсыларҙы ла йыйып алып, улының ҡайҙа икәнлеген, ҡайҙа ҡалғанлығын һораша, улын таптыра. Бер кем бер ни белмәй. Уның бер бүре артынан китеүен генә хәбәр итәләр. Бер аҙна үтә, Сыуанхан һаман юҡ, ти. Улының ҡайтыуынан өмөт өҙөп, әсәһе уның етеһен уҡытырға тип әҙерләнә башлаған. Шул ваҡыт, Айгөлдө эйәртеп, Сыуанхан иленә ҡайтып төшкән. Ауыр ҡайғы бүлешергә йыйылған халыҡҡа Сыуанхан ҡайтыу шатлығын, килен төшөүҙе хәбәр итәләр. Көтмәгәндә бергә килгән ике байрам шән үтә.

Сыуанхан йыш ҡына алыҫ илдәргә сәйәхәткә сығыр булған. Ул күрше илдәр менән сауҙа иткән.

Бер ваҡыт быларҙың йортона бик насар ғына кейенгән күрәҙәсе килеп төшә. «Һеҙҙең киләсәгегеҙҙе әйтеп бирәм», – тигәс, әбей батша бынан фаллама (боронғо китап асып юрау) астырырға булған. Әбейгә күрәҙәсе:

– Һеҙҙең киленегеҙ бар икән. Ул бик холоҡһоҙ ҡатын. Һеҙҙең улығыҙҙы тиңһенмәй. Уның яратҡан башҡа кешеһе бар, – ти. Ә был ваҡытта Айгөл менән Сыуанхандың улдары булып, уға Илморат тигән исем ҡушҡан булалар.

Көндәрҙең береһендә Сыуанхан, әсәһенең ҡушыуы буйынса, тағы ла алыҫ илдәргә сәйәхәткә китә. Был ваҡытта теге күрәҙәсе, әбей батшаға яҡшы күренеп, көтөүселеккә инеп алған була. Сыуанхан илдән киткәс, Айгөл улы менән үҙҙәренең сирмәһендә йәшәп ҡала. Төндә Илморат илай башлағас, Айгөл йоҡоһонан уянып, балаһын имеҙергә була, шул ваҡыт уның ҡулы Илморат өҫтөндә ятҡан сөсө икмәккә тейә. Ул, бер ни уйлап тормайынса, икмәкте өҙөп ҡаба – шунда уҡ һуштан яҙып йығыла. Иртәнсәк торғас, әбей батша килененең был хәлен күреп, аптырап ҡала. Был мөғжизәнең сәбәбен белә алмай аптырай. Бағыу күрәҙәсегә әйтә. Күрәҙәсе Айгөлдө тәртипһеҙлектә ғәйепләй: «Был төндә уның янына сит кешеләр килгән. Шулар киленде сихырлап киткән. Иренең өҫтөнән йөрөгән кешене хөкөм итергә кәрәк», – ти.

Әбей батша ил һаҡалдарын саҡырта, кәңәш һорай. Айгөлгә бик ҡаты яза биреү тураһында һөйләшәләр. Әбей тиҙ генә хәбәр ебәреп, Сыуанханды ла ҡайтарып ала. Хөкөм ҡаты була: ҡырҡ ҡыҫыраҡты бергә бәйләп, уларҙың ҡойроҡтарына Айгөл менән улын тағып, урамда йөрөтөргә, аҙаҡтан уларҙы бейек тау арьяғына алып барып, шунда ташлап китергә тейештәр. Был эште үтәүҙе үҙ теләге менән күрәҙәсе ҡырҡ ҡыҫыраҡ алып, уларҙың ҡойроҡтарына Айгөл менән улын бәйләп, тау яғына йүнәлә. Улар тау башына менәләр. Күрәҙәсе аттарҙы туҡтата. Тегеләрҙе ат ҡойроҡтарынан сисеп, кәпәсен һала. Кәпәсен һала ла Айгөл ҡаршыһына килеп баҫа.

Мине таныныңмы инде? Теге ваҡытта миңә кейәүгә сығырға ризалыҡ бирһәң, бындай хурлыҡтарҙы күрмәҫ тә инең. Кем арҡаһында ошо хәлгә төшкәнеңде хәҙер аңланыңмы инде? – ти.

Үҙенең атаһына барған кешене ҡасан күргәнең бар? Һин минең атайым да инде! – тип Айгөл әсәһенән ишеткәнде туҡмайһөмәй һөйләп бирергә уйлай – Ҡарахан уны тыңларға ла теләмәй. Һүҙ көрәштереп ултыра торғас, ныҡ арығанлыҡтан, Ҡарахан тәрән йоҡоға талған. Ошонан файҙаланып, Айгөл улын

алған да урман араһына ҡасҡан. Ҡарахан унын китеүен һиҙмәй ҙә ҡалған.

Айгөл урман эсенән йүгергән дә йүгергән, йүгергән дә йүгергән. Шулай йүгереп ҡасып бара торғас, бер аҡланға килеп сыҡҡан. Аҡландан һуң киң, асыҡ ер икән, ти. Алыҫта бер ауыл күренгән, ти. Айгөл малайын күтәреп, һуңғы көсөнә шул ауыл яғына ыңғайлаған. Ауылға барып еткәс, бер өйгә инеп, ҡунып сығырға фатир һораған. Был йортта яңғыҙ ғына ҡарт йәшәгән икән, ти. Ҡартҡа Айгөл бик оҡшаған. Ул фатир биргән. Бер төнгә генә түгел, бөтөнләй ҡалып йәшәргә рөхсәт иткән. Айгөлдө беренсе көндән башлап, ҡыҙым, тип йөрөтә башлаған. Унын улын, ейәнем, тигән. Ярар. Улар шулай ҡарт янында ҡалып торһон.

Ошо ваҡыт Сыуанхан ниндәй хәлдә йәшәгән һуң? Хәҙер унын тарафтарына киләйек.

Сыуанхан ғәҙәтенсә иптәштәре менән һунарға сыҡҡан. Һунарҙа уға йәнә теге бүре осраған. Ул иптәштәре менән шул бүрене йәнә ҡыуырға тотонған. Оҙаҡ, бик оҙаҡ ҡыуғандар улар бүрене. Бүре йәйләүҙән йәйләүгә саба икән. Ҡыуып бара торғас, бүре бер ауыл йәйләүенә барып еткән дә туҡтаған, ти. Сыуанхан да килеп еткән, ти. Шул йәйләүгә еткәс, ғәжәп, бүре йәнә юҡ булған. Көн кисләгән, инде ҡайһы яҡтан килгәнен дә, ҡайҙа килеп төртөлгәнен дә белмәгән. Сыуанхан ошонда ҡунып китергә булған.

Ул иң оста йәшәгән бер ҡарттан фатир һораған. Ҡарт рөхсәт иткән. Ҡарттың ҡыҙы Сыуанханға сәй ултырта. Егет һиҙҙермәй генә уға күҙ һала. «Бәй, был һуң минең Айгөлгә оҡшаған да баһа!» – тип уйлап ҡуя. Ләкин үҙенең уйын белдерергә ашыҡмай.

Бер аҙ ваҡыт үткәс, ул ҡарттан ҡыҙ тураһында һораша. Тик ҡарт бер ҙә ыңғай яуап бирмәй. Ыҡ-мыҡ итә лә ҡуя йә һүҙҙе икенсегә бора.

Сыуанхан был йортта бер аҙ йәшәй, сөнки ул һунарҙа йөрөп, бик йонсоған, етмәһә, әле үҙенең ҡайҙа килеп сығыуын да белмәй. «Бер аҙ ял иткәс ҡайтырмын», – тип уйлай.

Көндәрҙең береһендә Сыуанхан, бөтә батырлығын йыйып, ҡарттың ҡыҙының кемлеген һорашырға тотонған. Шул ваҡыт Айгөл дә серҙе сисергә мәжбүр була.

– Бында нисек килеп сығыуыбыҙҙың сәбәбен Илмораттан һора, – ти. Илморат уға барыһын да түкмәй-сәсмәй һөйләп бирә.

Шунан улар бергәләшеп ҡайтып китәләр.

Йортҡа ҡайтыуҙарына шул асыҡланды, ти. Ҡарахандың үҙ ҡыҙын алырға йөрөүе фашланып, уны ил менән ҡыуғандар имеш, тигән хәбәр таралған, ти. Шуны ишеткәс, киленен нахаҡтан рәнйетеүенә үкенеп, ҙур ҡайғыға төшкән әбей батша, түшәк тартып, ауырып ята, ти. Сыуанхандың кәләше менән улын

әйәртеп ҡайтып төшөүенә сикһеҙ шатланды, ти. Уларға өрәнсынан туй үткәрҙе, ти. Шунда килененә:

– Килен, биғәйбә, дошман һүҙенә төштөм. Рәнйемә, – тине ти. Улына әйләнеп: – Улым, бөтә ғәм алдында әйтәмен. Бөгөндән мин түгел, һин батша, – тине, ти. Барса халыҡ, был һүҙҙе хуп күреп:

– Афарин! – тиеште, ти.

Сыуанхан бөгөн булһын батшалыҡ итә, Айгөлө менән теттереп ғүмер итә, ти.

## 81. Губернаторҙы дворник иткән егет

Борон бер ҡалала бер губернатор йәшәгән, ти. Ошо уҡ ҡалала бик һылыу, бик сибәр, бик зифа бер ҡыҙ булған. Губернаторҙың күҙе төшкән бит быға. Ә ҡыҙҙы бер ярлы ғына егет яратып йөрөгән икән. Ҡыҙға ла был егет бик оҡшай икән, ти. Былар, кеше-ҡаранан йәшеренеп кенә, осраша, һөйләшә торған булғандар.

Губернатор егетте бер эштә гәйепләп, ун йыл каторга, ун йыл ирекле һөргөнгә Себер ебәрткән, ти.

Егет айырым бер камерала ята икән. Ул йылдар буйы камераһын аҫтан тишеп, тишә торғас, күрше камераға инә. Унда бер ҡарт кеше ята, ти. Был ҡарт бында оҙаҡ ятып, егеттән аҡ һаҡаллы ҡартҡа тиклем ғүмер уҙғарыуын һөйләй:

– Минең фәлән утрауҙа, фәлән илдәрҙә фәләнсә ҡәҙәр алтын-көмөшөм, башҡа байлыҡтарым бар, – тип, быға шул байлыҡтарға, имен-һау ҡотолған хәлдә, хужа булырға васыят әйтеп ҡалдыра.

Бер көндө бабай үлә. Үлгән кешене тоҡҡа һалып диңгеҙгә ташлай торған булғандар. Егет ятҡан ҡәлгә-төрмә диңгеҙ ураһында булған. Шунан егет үҙе тишкән юлдан бабайҙы үҙенең бүлмәһенә, үҙе бабайҙың бүлмәһенә инә лә үлгән булып ята. Мәйетте ала килеүселәр был егетте тоҡҡа һалып, диңгеҙгә ырғыталар. Тоҡ ауыҙын нисек тә ысҡындырып, был диңгеҙ өҫтөнә сыға. Ҡыйралған караптан ҡалған бер таҡтаға йәбешеп, диңгеҙ өҫтөндә гиҙә торғас, бер карап быны ҡотҡара. Унда егет капитан дәрәжәһенә тиклем үрләй.

Бер көндө ҡыҙҙы һағыныуы көсәйә башлағас, хужаһынан ҡайтырға һорай. Хужаһы быға:

– Алмашҡа кеше әҙерләһәң, ҡайтаһың, – тигәс, был бер егетте капитан итеп өйрәтә.

Шунан хужа быға бер карап бүләк итә. Егет тотҡон бабай әйрәткән алтын-көмөштө эҙләп табып, тейәп ала.

Ҙур капитандың карап менән ҡайтып килеүен ишетеп, губернатор уны оркестр менән ҡаршы ала. Егет һарайға килһә,

ҡыҙҙы губернатор көс менән үҙенә алған икән. Тик ҡыҙ уға шундай шарт ҡуйған: алдында күренеп йөрөргә, бергә ятмаҫҡа. Губернатор риза булған икән, ти. Бер көн ҡырға сыҡҡанда, губернаторҙы диңгеҙ артында ҡалдырып, теге ҡыҙға өйләнә егет. Халыҡ уның үҙен губернатор итеп ҡуя.

Күп йылдар үтә. Губернатор ҙа ҡайта. Ул бик ҡартайған була.

– Һеҙҙең алдығыҙҙа булһа ла йөрөрмөн, һеҙҙе күрмәй түҙә алмайым, – тип, бик ялынғас, егет уны дворник итеп ҡуя, ти.

Шулай итеп, ярлы егет үҙе губернатор булып, бай губернаторҙы дворник итеп тотоп, кәләше менән әле булһа ла тигеҙ ғүмер һөрә, ти.

## 82. Батша ҡыҙы

Бынан күп заман элек йәшәгән, ти, бер батша. Уның булған, ти, бер ҡыҙы. Был ҡыҙ уңғанлығы, матурлығы, аҡыллылығы яғынан был батшалыҡта ғына түгел, бөтә тирә-яҡта дан тотҡан, ти. Күршеләге илдә йәшәгән, ти, бер батша. Ул шул тиклем яуыз булған, ти. Теге батшаның ҡыҙына күҙе төшкән дә яусы ебәргән, ти. Был батша ҡыҙын бирергә риза булмаған.

– Был барыбер миңә тынғылыҡ бирмәҫ, – тип, ҡыҙын йәшерергә ҡарар иткән, ти.

Батшалығындағы бөтә кешеләрҙән ер аҫтынан юл һалдырырға уйлаған. Ете аҙна буйына көнө-төнө эшләп, бик яҡшы итеп, ат менән үтерлек юл һалғандар, ти, былар.

Яуыз батша был батшаға һуғыш асҡан. Был батша ла ғәскәр йыйып яуға киткән. Ҡыҙына күп итеп алтын, байлыҡтар биреп, ер аҫты юлынан сығарып йәшереп ҡуйған, ти. Күрше батша ғәскәре был ҡаланы уратып алған. Ҡаланан бер кемде лә сығармағандар, ҡалаға индермәгәндәр ҙә, ти. Тиҙҙән ҡаланы баҫып алғандар ҙа батшаның ҡыҙын эҙләргә тотонғандар. Ете көн, ете төн эҙләгәндәр, ти, былар, ләкин таба алмағандар. Яуыз батша ҡаланы емерергә ҡушҡан. Ҡаланан күмер менән көл генә ятып ҡалған, ти.

Батшаны әсирлеккә алып киткәндәр, ҡыҙы урманда йәшеренеп тороп ҡалған.

Батша ҡыҙы урманда йәшеренеп бик оҙаҡ йәшәгән, ти. Унан, ҡалала ниндәй хәлдәр бар икән тип, ҡалаға барырға уйлаған. Ҡыҙ хәйерсе кейеменә кейенгән дә сығып киткән, ти. Ҡаланың ҡапҡа алдында бер ҡартты күргән, ти. Ҡыҙ был ҡарттан:

– Был ҡаланың кешеләре ҡайҙа булған? – тип һораған, ти.

Ҡарт:

– Был ҡаланың кешеләрен сит батша ғәскәрҙәре тар-мар итте, батшаны әсирлеккә алып киттеләр, – тип әйтте, ти.

Ҡыҙ яңынан урманға киткән, күп итеп еләк йыйған да ҡалалар, ауылдар буйлап һатырға сыҡҡан, ти. Шулай йөрөй торғас, теге батшаның баш ҡалаһына барып сыҡҡан, ти. Батшаның баш вәзире был ҡыҙҙы өйөнә саҡырған. Ҡыҙ быларҙа йәшәргә тороп ҡалған, ти.

Ҡыҙ быларға аш-һыу әҙерләп, өйҙәрен йыйыштырып торған, ти. Ул вәзирҙән төрлө хәлдәр тураһында һораштырып, атаһының зинданда ятҡанын да белгән, ти. Атаһын ул нисек булһа ла ҡотҡарырға уйлаған.

Бер ваҡыт баш вәзир ҡунаҡтар йыйған, ти. Ҡунаҡтарға тигән бөтә һыйҙы был ҡыҙ әҙерләгән, ти. Һый шул тиклем шәп булған.

– Был ашамлыҡтарҙы кем әҙерләне? – тип һораған батша.

Вәзир теге ҡыҙ тураһында һөйләп биргән. Батша был ҡыҙҙы үҙенә аш бешереүсе итеп алған, ти. Ҡыҙ батшаға аш бешереп йәшәй башлаған. Ышаныста инеп алғас, баш вәзир ҡыҙға зиндандың асҡысын да ҡалдырып киткеләгән. Ҡыҙ атаһы янына барып йөрөгән. Атаһы тәүҙә үҙ ҡыҙын үҙе танымаған икән.

Был ҡыҙға батшаның күҙе төшкән, уға өйләнергә уйлаған. Ҡыҙ ризалыҡ биргән. Тик шундай шарт ҡуйған, ти:

– Шундай, шундай зинданда ятыусы ҡартты ҡотҡарып, емерелгән ҡаланы төҙәттереп бирһәң, барам, – тип әйткән, ти.

Батша зинданда ятыусы ҡартты килтерткән дә:

– Мин нисек дошманымды ҡотҡарайым инде? – тип әйткән, ти.

Шулай ҙа батшаның ҡыҙға булған мөхәббәте көслө булған, ул теге ҡартты ҡотҡарырға ҡушҡан, үҙе емерткән ҡаланы үҙе ер-яңынан төҙөткән. Шунан һуң өс көн, өс төн туй булған. Әсир батша үҙенең ҡыҙын таныған. Ҡыҙ менән батша бик оҙаҡ замандар йәшәгән, ти.

## 83. Буйҙаҡ батшаның төштә ғашиҡ булғаны, өндә кәләш алғаны

Элек бер буйҙаҡ батша йәшәгән, ти. Вәзире гел генә унан ҡалмай, янында булыр булған, теләгән ваҡытта, һорап-нитеп тормаҫтан, батша янына инеп-сығып йөрөй алған. Бер ваҡыт вәзир батшаһы йоҡлап ятҡан мәлдә килеп инә. Шул мәлдә генә батша төш күреп ятҡан була. Вәзире килеп ингәс, уяна ла батша, ырғып тороп, ҡылысына йәбешә, тегене сапҡылап ташларға уҡтала. Шул саҡ вәзир:

– Сабыр ит, батшам, сапмай тор, аҙаҡ сабырһың! – тип әйтеп өлгөрә.

Батша ҡылысын төшөрөп, уйланып торған да:

– Ярар. Хаталыҡ миндә. Әле мин төшөмдә бик һылыу ҡыҙ күреп ята инем. Ғүмере ундай ҡыҙ осратҡан юҡ ине. Ни сара ҡылып ҡарарға икән инде хәҙер, ҡайҙан, ҡайһылайтып ҡына табырға икән шул ҡыҙҙы? – тигән.

– Ни ҡиәфәтлерәк ине? Шуны ғына әйтеп бир миңә. Хоҙай насип иткән булһа, мин уны табырмын, – тине, ти, вәзир.

Батша, ҡыҙҙы нисек итеп күргән, шулай һөйләп бирә. Вәзире ҡағыҙға яҙып ала ла, шуның буйынса ҡыҙҙың һүрәтен төшөрөп, юл сатына ҡуя, ти. Икенсе бер ҡаланан килеп, үтеп барыусы бер әҙәм һүрәтте күреп:

– Собханалла, беҙҙең ҡала батшаһының ҡыҙы ла баһа. Кем эше булыр икән был? – тип хайран ҡалды, ти, ҡыҙҙың кем булыуын һөйләп бирҙе, ти.

– Бер ваҡыт йылға ярындағы баҡсала ултырғанда, янғын башланып китә. Баҡсала тутыйғоштар йәшәгән, ти. Балаларын ҡотҡарам тип, инә тутыйғош утта янып үлде, ата тутыйғош балаларын уйлап та бирмәне, уттан ҡасып, осоп китте лә барҙы, ти. Шул хәлде күргәс, батша ҡыҙы, ирҙәр мәрхәмәтһеҙ булалар икән тип, кейәүгә бармаҫҡа тәүбә итә. Шунан алып әлеге ваҡытта ла ҡыҙ көйө ултыра, ти.

Шуны ишеткәс, вәзир:

– Мине шул ҡалаға ебәр әле, табып алып ҡайтайым шул ҡыҙҙы, – тип батшанан рөхсәт һораны, ти.

Батша вәзирен сәфәргә оҙата.

Тегендә барып еткәс, төрлө буяуҙар менән өй эстәрен биҙәп, вәзир үҙенең һөнәрен күрһәтә башлай. Батша ҡыҙы ишетеп ҡала ла атаһына:

– Беҙҙең ҡалаға бер оҫта килгән, ти. Өй эсен бик матур итеп биҙәй, ти. Мин йәшәгән өйҙө лә биҙәтеп алғанда инде, – тип әйтте, ти.

Атаһы вәзирҙе табып килтереп, ҡыҙы йәшәгән йортто биҙәтергә әмер бирә.

Вәзир ҡыҙҙың өйөн йәтеш кенә итеп буяй. Унда үҙенең батшаһының һүрәте лә, балалары менән инә ишәк, ата ишәк тә төшөрөлгән була. Баҡсаға ҡойорға һыу ташығанда, ишәк балалары ағ ла китә. Уларҙы ҡотҡарам тигәнсә, ата ишәк үҙе һыуға бата. Инә ишәктең балаларында эше лә юҡ, ти, бесән ашарға киткән дә барған, ти.

– Аңланыңмы, һүрәттәр ни һөйләй? – тип һорай вәзир ҡыҙҙан.

– Юҡ, аңлашылып етмәй, – ти ҡыҙ.

– Әләйһәң, былай ул, был ишәктәрҙе күргәс, беҙҙең батшабыҙ ҡатын-ҡыҙ халҡынан һис кенә лә мәрхәмәт өмөт итерлек түгел икән ул, тип кәләш алмаҫҡа булды, – тип аңлатып бирә вәзир.

Шунан ҡыҙ:

– Мин, ирҙәрҙә саҡ ҡына ла мәрхәмәт юҡ, тип йөрөһәм әле, ҡатындар ҙа мәрхәмәтһеҙ була икән. Шулай тип, нисәмә ерҙән яусы килеп тә, кейәүгә бармағайным. Былай булғас, атай бирһә, тормошҡа сыҡмай булмаç, – тип һалды, ти.

Шул һүҙҙе ишетеүе була, вәзир батшаға: «Ҡыҙың тормошҡа сығырға риза. Һин уны беҙҙең батшабыҙға бирмәçһеңме икән?» – тип хәбәр ебәрә. Батша: «Улай булһа, бик ҡулай», – тип яуап бирҙе, ти.

Вәзир ҡайтып, бөтәһен дә түкмәй-сәсмәй батшаһына һөйләп сыға. Был хәбәрҙе батша бик хуш күрә лә вәзирҙең үҙен яусы итеп ебәрә. Ҡыҙҙың атаһы быға ҡыуанып бөтә алмай.

– Һоратыуы ысын булһа, ул батшаны минең янға килтерегеҙ, – тип буйҙаҡ батшаға кешеләрен ебәрә.

Улар барып, буйҙаҡ батшаны алып та киләләр. Батша уны:

– Кейәүем дә кейәүем, – тип өҙөлөп ҡаршы ала ла, шунда уҡ ҡыҙын биреп, никах уҡытып, ҙур туй яһанылар, ти.

## 84. Рәссам менән батша ҡыҙы

Борон-борон заманда бер ҡатын менән бер ир йәшәгән. Уларҙың балалары күп булған. Бер ваҡыт, атаһы үлеп киткәс, әсәһе, балаларымды нисек ҡарармын инде, тип ҡайғырған, һыуға барып батайым да үләйем, тип тә уйлап ҡуйған. Иң кесе малайын йәлләп, был уйынан кире ҡайтҡан. Ҡайтҡан да, ҡалған балаларым теләһә нимә эшләһен, тип иң кесе улын етәкләп сығып киткән. Сығып киткәс, ҡатын баҙарға бара. Унда ул:

– Улым, һин ошонда йөрөп тор. Мин хәҙер икмәк алып килермен, – тип улын ташлап китә лә бара.

Теге бала әсәһен көтә лә көтә. Көтөп-көтөп тә килмәгәс, илай-илай ҙа бер өйҙөң солан аçтына инеп йоҡларға итә. Был өйҙә бер әбей менән бабай йәшәгән була. Төндә әбей тышҡа сыҡҡанында бер тауыш ишетә лә бабайға әйтә. Шунан, килеп ҡарап, малайҙы табып алып, өйгә индерәләр. Йыуындырып, ашағын туйҙырып, йоҡларға һалалар.

Малай, көтөргә алһалар-нитһәләр, тип, малдарға бесән һалып, аçтарын таҙартып, тиҙәген ташлап, ихлас эшләп йөрөй. Әмәлгә ярағандай, әбей менән бабай, был малай арыу ғына булмаҡсы, тип көтөргә уйлай.

Малай рәсем төшөрөргә бик ятҡан. Бабай уға төрлө-төрлө буяуҙар, ҡәләмдәр алып биргән.

Бабай сауҙа менән кәсеп иткән. Караптарына малын тейәп, төрлө илдәрҙә булған. Малай үçкәс, бабай уны ла сауҙа итергә ебәрә. Егет бабайҙың ҡустыһына барып төшә. Был барған ере бик матур ер була. Ян-яҡ йәм-йәшел баҡсанан ғына тора. Егет йөрөй:

– Баҡсаға сығып йөрөргә яраймы, ағай?

Ағаһы уға:

– Йөрө. Ләкин уртала бер баҡса бар. Уға барып инә күрмә, – ти.

Егет баҡсаға сыға. Ҡарап йөрөй-йөрөй ҙә, ниңә ағай урталағы баҡсаға инмәҫкә ҡушты икән, тип эскә инеп ҡарай. Инһә, ул баҡса бик матур, ти, ә уртала бер ҡыҙ ултыра, ти. Ҡыҙҙы күргәс, егетең телһеҙ ҡала: баҡса матур, баҡсанан бик ҡыҙ матур, ти. Эргәһендә ҙур көҙгө тора, ти. Шунан малай:

– Һин бында нимә эшләп ултыраһың? Һине нисек ҡотҡарырға була? – ти.

– Һин мине ҡотҡара алмаҫһың. Бик күп батырҙар ҡотҡарып ҡаранылар, ҡотҡара алманылар, – ти ҡыҙ.

Ҡайтҡас, ағаһынан:

– Ул ҡыҙ ниңә ултыра, уны нисек ҡотҡарырға? – тип һорай.

Ағаһы:

– Мин һиңә унда инергә ҡушманым. Ниңә унда индең? – тип асыулана.

Егет нисек тә ҡыҙҙы ҡотҡарырға төрлө уйҙар уйлай.

Ағаһы әйтә:

– Ул ҡыҙҙы ҡотҡарыр өсөн, – ти, – шул ҡыҙ ауырлығы алтын кәрәк, – ти.

Шунан был егет һатырға алып килгән нәмәләрен, карабын һата ла алтын йыя. Шунан алтынды бер яҡҡа, ҡыҙҙы бер яҡҡа ҡуйып, боронғо үлсәүҙә үлсәйҙәр. Ҡыҙ әҙ генә ауыр була. Егет аптырай. Ҡыҙ шул мәлдә килелгән кеше була ла малайға алтын балдағын ырғыта. Егет:

– Бына инде аҙаҡҡы алтыным, – ти ҙә алтын балдаҡты алтындар яғына һала.

Хәҙер инде ҡыҙ менән алтын тигеҙләшә. Шунан һуң егет ҡыҙҙы алып, бер ҡалаға барып, бергә тора башлайҙар. Малай төрлө матур һүрәттәр эшләй, ҡыҙ сығарып һата. Шулай итеп көн күрә башлайҙар. Былар киткәс, теге ағаһы: «Бик шәп малайың бар икән. Бөтөн нәмәләреңде, карабыңды һатып, батша ҡыҙын алды», – тип бабайға хат яҙған.

Ҡыҙ менән егет тора бирәләр. Рәссам егет ҡыҙҙың үҙенең һүрәтен ҙур итеп төшөрөп тышҡа ҡағып ҡуя. Ҡыҙҙың атаһы икенсе ҡалаға ҡунаҡҡа барғанында ошо ҡаланан үтеп китә. Шунда һүрәттәге ҡыҙҙы таный ҙа тегеләргә борола. Бының инеп килгәнен күреп, егет ҡыҙҙы йәшерә лә үҙе һүрәт төшөрөп ултырған кеше була. Теге кеше килеп инә лә:

– Һин был ҡыҙҙы ҡайҙан күрҙең? Ул ҡыҙ ҡайҙа хәҙер? – тип һорай.

Теге егет:

– Мин уны бер китаптан күсереп эшләгәйнем, – ти.

– Әйтмәҫһеңме, ул ҡыҙ ҡайҙа икән? Уны нисек ҡотҡарып була? – тип һорай теге кеше.

– Ул ҡыҙҙы ҡотҡарыу өсөн, үҙе ауырлығы алтын кәрәк, – ти егет.

Теге кеше:

– Мин һиңә карап ебәрермен, алтын тейәп. Һин шуны түләп ҡыҙҙы ҡотҡарырһың, – ти ҙә үҙ юлына китә.

Карап оҙаҡламай килеп етә. Ҡыҙ менән егетте алып ҡайтҡанда капитан:

– Бөтә матростарға ла йоҡларға! – тип бойороҡ бирә.

Кеше йоҡлап бөткәс, үҙе теге егетте мискәгә һалып, диңгеҙгә ырғыта ла ҡыҙ янына китә.

– Ҡайтҡас, атаңа ошо кеше ҡотҡарҙы, тип әйт. Әйтмәһәң, үҙеңде лә һыуға ырғытам, – тип ҡурҡыта.

Ҡыҙ күнергә мәжбүр була.

Теге егет мискәһе менән китә диңгеҙ гиҙеп. Шулай итеп бара торғас, балыҡсыларға тап була. Балыҡсылар мискәне тотоп алалар ҙа асып ҡарайҙар. Егеттең саҡ-саҡ ҡына йәне була. Уға һөт эсереп, саҡ әҙәм итеп алалар.

Был ваҡытта карап ҡайтып етеп, батша шатлығынан тирәяҡҡа: «Фәләнсә көндө туй була. Туй буласаҡ өйҙө биҙәү өсөн миңә рәссам кәрәк», – тип хәбәр тарата.

Теге егет балыҡсы кейемдәрен кейеп, батшаға барып, туй барасаҡ өйҙө биҙәп ҡарарға теләүен белдерә. Батша уға ҡырҡ көн ваҡыт бирә. Егет, ҡасан да эшләп бөтмәйенсә, берәүҙе лә өйгә индермәүҙәрен һорай.

Егет эшләй башлай. Беренсе ҡатта үҙенең бәләкәй сағындағы тормошон төшөрә; икенсе ҡатта бабайҙарҙа торғанын, сауҙа итергә киткәнен; өсөнсө ҡатта ағаларына барып, баҡса эсендә йөрөгәнен, ҙур баҡса уртаһындағы бәләкәй баҡсала ултырған ҡыҙҙы, ҡыҙ менән үҙе һөйләшеп ултырғанды; дүртенсе ҡатҡа ҡыҙ менән киткәнен, һыуға ташлатылыуын, балыҡсыларға эләгеүен төшөрә.

Ҡырҡ көн тула. Ҡырҡ көн тулғас, батша, ҡыҙы, әлеге капитан ҡарарға төшәләр. Һүрәттәрҙе ҡарай баралар, яратмай:

– Былары кәрәкмәй, – тип һанға һуҡмай китеп баралар, ти.

Һуңғы бүлмәләге һүрәттәрҙе күргәс, ҡыҙ иҫе китеп йығыла ла ҡуя. Батша әйтә:

– Әллә ниндәй һүрәттәр эшләгәнһең. Ҡыҙымды сихырланың, – ти. – Бына хәҙер башыңды өҙәм, – ти.

Теге егет аҙ ғына ваҡыт һорай ҙа сығып, балыҡсы кейемдәрен сисеп, үҙ кейемдәрен кейеп килеп инә. Ҡыҙ тора, айнып, егетте таный ҙа булған хәлде атаһына һөйләп бирә.

Атай, ошо кеше мине ҡотҡарыусы. Капитан уны диңгеҙгә ташланы. Мине, үлтерәм, тип ҡурҡытып, үҙен ҡотҡарыусы тип әйтергә ҡушты. Ул мине ҡотҡарманы. Ошо егет ҡотҡарҙы мине, тип егетте күрһәтә.

Шунан батша вәзирҙәрен саҡырта ла капитанды сапҡылап

ташларға бойороҡ бирә. Ҡыҙ менән был егеткә бик ҙур туй була. Шунан егет теге үҙен ҡарап үҫтергән бабайға бара, әйберҙәрен, карабын һатҡан өсөн аҡса түләп, алтын биреп, ризалыҡ алып, ҡыҙ менән атаһы торған ҡалаға кире барып, әле лә шунда йәшәп яталар, ти.

## 85. Кәримдең башынан үткәндәр

Борон-борон заманда бик йыраҡ бер батшалыҡта йәшәгән, ти, бер балыҡсы бабай менән әбей. Уларҙың булған, ти, Кәрим исемле малайҙары менән бер ҡыҙҙары. Балыҡсы үҙенең балыҡ тота торған ҡорамалдарын ала ла кәмәгә ултырып, диңгеҙгә китә икән. Бер көн шулай иртә менән, һәр ваҡыттағыса, ҡорамалдарын йыйған да, кәмәһенә ултырып, диңгеҙгә киткән, ти. Балыҡсы диңгеҙ уртаһына еткән, йылымдарын һалғас та, бик ныҡ ел сығып китеп, кәмәһен әйләндерә һуҡҡан. Балыҡсы һыуға сәсәп үлгән, ти. Кәрим ҡарындашы, ҡартайып бөткән әсәһе менән генә ҡалған.

Былар урманға барып төрлө емеш йыйып, уны баҙарға сығарып, икмәккә алыштырып, тамаҡ туйҙыра башлағандар. Бер тапҡыр шулай урманға барғанда, әсәләре бик шәп емеш табып алып, һоҡланып китеп ашаған икән – йығылған да үлгән. Ул емеш кеше ашамай торған ағыулы емеш булған икән. Кәрим менән ҡарындашы илаша-илаша, әсәләрен шул урынға күмгәндәр. Үҙҙәре ҡайҙа барырға белмәй, баш һуҡҡан яҡҡа сығып киткәндәр. Төн булһа, ағас баштарына менеп йоҡлай-йоҡлай, юл таба алмайынса, әллә нисә көндәр йөрөгәндән һуң, бер бәләкәй генә һуҡмаҡҡа килеп сыҡҡандар. Ҡурҡа-ҡурҡа шул һуҡмаҡ буйлап киткәндәр. Китеп бара торғас, ҡурҡыныс, ҡараңғы урманға килеп сыҡҡандар. Урман араһынан бара биргәс, бер болонға килеп еткәндәр. Болон уртаһында бәләкәй генә бер өй булған, ти. Өйгә керәләр. Өйгә керһәләр, бер кеше лә булмаған. Былар шикләнешеп ҡаушап ҡалғандар. Шул ваҡытта тышта аяҡ тауыштары ишетелгән. Кәримдәр тиҙ генә урын аҫтына йәшеренгәндәр. Өйгә бер ҡарт килеп ингән дә, мылтығын сөйгә элеп ҡуйып, үҙ алдына үҙе һөйләнә башланы, ти. Балалар уның мөңгөрәнгәнен тыңлап ятып, һунарсы икәнен белгәс, урын аҫтынан сыҡҡандар, ти.

– Ниндәй балалар һеҙ? Нисек бында килеп индегеҙ? – тигән.

Кәрим уға атаһының кем булғанын, нисек үлгәнен, әсәләренең урманда үлгәнлеген, үҙҙәренең аҙашып йөрөүҙәрен, ахыр килеп, ошо өйҙө күреп ҡалып, килеп инеүҙәрен һөйләп биргән икән, ҡарт:

– Ярар инде, балалар. Әсәйегеҙ ҙә, атайығыҙ ҙа булмағас, бер ҡайҙа ла бара алмайһығыҙ инде, миндә тороғоҙ. Мин һеҙҙе тәрбиәләрмен. Мине атай тип йөрөрһөгөҙ, – тигән, ти.

Былар өсәүләп бик күңелле генә йәшәй башлағандар, ти. Кәрим үҫеп ҙурайып киткән. Бер көндө бабайға:

– Атай, мине лә һунарға алып бар әле, өйҙә ултырыуы күңелһеҙ, – тигән.

– Юҡ, Кәрим улым, мин һине һунарға алып бармайым. Ҡалаға алып барам, уҡырға бирәм, – тигән.

Кәрим быға риза булмаған.

– Кәрәкмәй, атай, – тигән. – Минең уҡығым килмәй. Һин миңә баҙарҙан ҡағыҙ менән ҡәләм алып ҡайт. Мин рәсем төшөрөргә яратам. Мин һүрәт төшөрөрмөн, һин баҙарға сығарып һатырһың, – тигәс, һунарсы риза булған; баҙарға барып, бик күп ҡағыҙ, ҡәләм алып ҡайтҡан.

Кәрим һүрәт төшөрә башлаған. Төшөрөп бөткәс:

– Атай, һин һүрәттәрҙе баҙарға алып барып һатып ҡайт, – тигән.

Һунарсы ҡарт рәсемдәрҙе алып баҙарға киткән. Оҙаҡ та үтмәгән, бер бай килгән дә:

– Күпме һорайһығыҙ? – тигән.

Һунарсы күпме һорарға белмәй аптырап ҡалған.

– Унынһын мең һумға бирәһеңме? – тигәс, бабай бик аптыраған: шундай рәсемдәре өсөн мең һум биреүҙәренә шатлана-шатлана, ҡайтҡанында ике йөҙ һумлыҡ төрлө буяуҙар, ҡағыҙ һатып алған.

Кәрим атаһы алып ҡайтҡан буяуҙар менән тағы ла яҡшыраҡ итеп төшөргән дә атаһы менән һатырға киткән. Һатҡанының аҡсаһын тотторол, бабайҙы ҡайтарып ебәреп, үҙе, рәсемдәрен һатып бөтөрөргә тип, тороп ҡалған.

Рәсемдәрен һатырға ғына торғанда, бының янына батша килеп сыҡҡан.

– Был рәсемдәрҙе кем төшөргән? – тигән батша.

– Мин, – тигән Кәрим.

– Бына, улым, минең бик сибәр ҡыҙым бар. Мин уны бер үҙен бер ҡайҙа ла сығарып йөрөтмәйем. Һин шуның һүрәтен төшөрөп бирмәсһеңме икән? – тигән.

– Ник төшөрмәҫкә? Төшөрөргә була ул, – тигәс, батша Кәримде һарайына алып киткән, ҡыҙын күрһәткән. Ҡыҙы ысындан да бик сибәр булған. Кәрим, оҙаҡ мыштырҙап тормай, ҡорамалдарын, буяуҙарын әҙерләгән дә ҡыҙҙың һүрәтен төшөрә башлаған. Күп ваҡыт та үтмәгән, төшөрөп бөткән дә батшаға күрһәткән, ти. Батшаға һүрәт бик оҡшаған, ти. Кәримгә төшөргән өсөн бер бот алтын, бер йыллыҡ кейем биргән, бер йыл үҙендә ашатып тәрбиәләргә булған.

Кәрим, алтынын, еләнен, бүтән кейемдәрен алып, атаһы менән һеңлеһенә алып барып килеү өсөн, ҡайтып киткән. Ҡайтҡас ҡайҙа булғанын, был тиклем мөлкәтте ҡайҙан алғанын

һөйләп биргән. Иртәгеһенә Кәрим, батша һарайына бармайынса, атаһы менән һунарға сығып киткән. Ашап-эсеп, кейенеп сығып китеп, оҙаҡ та йөрөмәгәндәр, бер тау башында ҡыр кәзәһе күреп, төҙәп атып ебәргән. Аяғына ғына тейгән икән, ҡыр кәзәһе торған да ҡасҡан. Кәрим уның артынан төшкән. Урман буйлап бик оҙаҡ йөрөгән, кәзә тоттормаған. Кире ҡайтырға юлды юғалтып, атаһына ҡысҡырып ҡараған, ләкин ул бик алыҫта ҡалған, ишетмәгән. Ҡысҡыра торғас, Кәримдең тауышына алты ҡараҡ килеп сыҡҡан. Быны күҙен, аяҡ-ҡулын бәйләп, ҡайҙалыр алып киткәндәр, ти. Байтаҡ барғас, быны сискәндәр. Ҡараһа, уны бик ныҡ крепосҡа килтергән булалар. Ҡараҡтар Кәримде үҙҙәренә аш бешереүсе итеп ҡуйғандар. Әҙме-күпме ваҡыт үткәс, ҡараҡтар Кәримде саҡырып алғандар ҙа:

– Өс көнлөк юлға сығып китәбеҙ. Һин бер үҙең генә ҡалаһың. Көнөнә өс мәртәбә аш бешерергә тейешһең. Бешергән һайын ике кешегә етерлек итеп яраштыр. Береһен үҙең аша, береһен ошо тишеккә ҡуйырһың, – тип Кәримгә таштан, тимерҙән бик ныҡ нығытып эшләнгән тишек күрһәтәләр. – Тик ҡолағың ишетһен, был тишеккә аш биргәндә, алдың менән килмәйһең. Артың менән килеп бир. Әгәр беҙ ҡушҡанса эшләмәһәң, беҙ барыбер белербеҙ, һине үлтерербеҙ, – тигәндәр.

Ҡараҡтар сығып киткән. Кәрим ҡараҡтар ҡушҡанса эшләгән. Көнөнә өс мәртәбә аш бешереп, бер өлөшөн, арты менән барып, тишеккә биргән дә, арты менән барып, һауыттарҙы алған. Өс көн үтеп, дүртенсе көнгә сыҡҡанда, бик күп алтын, көмөш, ебәктәр тейәп, байығып, ҡараҡтар ҡайтҡан. Ҡайтҡас та ашағандар, эскәндәр ҙә теге тишекте ҡарағандар. Шикләнерлек нәмә тапмағас, Кәримгә бер нәмә лә әйтмәгәндәр. Шулай итеп, крепостарында бер аҙна тик ятып ашап, ял иткәндән һуң, Кәримде тағы ла саҡырып алғандар.

– Хәҙер беҙ бер аҙналыҡ юлға сығып китәбеҙ. Ҡара уны, беҙ элек нисек ҡушҡан булһаҡ, шулай эшлә. Шулайтмаһаң, ҡайтҡас, үлтерербеҙ, – тигәндәр ҙә бик ныҡ ҡоралланып сығып киткәндәр.

Ҡараҡтар киткәс, Кәрим аш бешергән, ашты әлеге тишеккә биргәндә, әйткәнде тыңламай, алды менән алып барған. Ни күҙе менән күрһен – тишек ауыҙында әлеге батша ҡыҙы ултыра, ти. Батша ҡыҙы ла Кәримде таныған да нисек тә тиҙерәк үҙен был ҡараҡтар ҡулынан ҡотҡарыуын һораған, ти.

Кәрим оҙаҡ уйлап тормаған, ҡулына лом алып, таштан, тимерҙән яһалған ояны вата башлаған. Бер туҡтамай, ашамай, эсмәй өс көн, өс төн ватҡандан һуң ҡыҙҙы оянан сығарған. Ҡыҙ, бик аҫтынан сыҡҡас, Кәримде ҡосаҡлап үпкән дә:

– Мине яуыз ҡараҡтар ҡулынан ҡотҡарҙың, әйҙә, хәҙер минең атайым янына ҡайтайыҡ та туй үткәрәйек. Мин һинеке булам, – тигән.

Юлға аҙыраҡ алтын алып, ҡайтырға сыҡмаҡсы булғандар. Ләкин алдарында әле бик тә бейек, бик тә ныҡ крепость стенаһы булған. Былар күп уйлап тормағандар, стенаның аҫтынан ерҙе соҡой башлағандар. Ашамай, эсмәй ике көн, ике төн ҡаҙығандар, һаман сыға алмағандар, өс көн, өс төн үтеүгә, саҡ ҡаҙып килеп сыҡҡандар. Ҡараҡтар ҡайтырға бер генә көн ҡалған, ти.

Сыҡҡас та, шәп итеп йүгергәндәр. Бер көн, бер төн йүгергәндәр. Бара торғас арттарына боролоп ҡараһалар, ана тотабыҙ, бына тотабыҙ, тип ҡараҡтар сабалар, ти. Алға ҡараһалар – бер өй. Өй янында бәйле ат тора, ти. Кәрим йүгереп барып, ат эйәһенә бик күп алтын биргән дә, атланып та алғандар – ҡасып та киткәндәр. Тағы өс көн, өс төн сапҡандан һуң, ни күҙҙәре менән күрһендәр, алдарында сикһеҙ ҙур диңгеҙ күргәндәр. Диңгеҙҙе күргәс, былар бик ныҡ ҡурҡҡандар.

Беҙҙе хәҙер ҡараҡтар тоторҙар ҙа үлтерерҙәр инде, – тигәндәр.

Үҙҙәре шулай булһа ла һаман алға сапҡандар. Тағы алдарына ҡараһалар, диңгеҙ ситендә бер пароход күргәндәр ҙә аттарын аҙаҡҡы көсө сыҡҡансы ҡыуырға тотонғандар. Диңгеҙ ситенә килеп еткәндәр ҙә, аттарынан төшөп, тиҙерәк пароходҡа ултырғандар. Ултырыуҙары булған – пароход ҡысҡырта-ҡысҡырта ҡуҙғалып та киткән, ҡараҡтар торған да ҡалғандар. Кәрим менән батша ҡыҙы, ни эшләргә белмәй, ҡыуанғандар.

Диңгеҙҙә бер нисә көн барғандан һуң, Кәрим карап хужаһы капитан менән бик ныҡ дуҫлашҡан. Уға баштарынан үткән тарихты һөйләп биргән. Кәрим һөйләп бөтөрөүгә капитандың башына бер уй төшкән. «Минең башҡа тай типмәгән, шундай байлыҡтан, шундай ҡыҙҙан баш тартырға. Булмаһа, мин Кәримде ташлайым да, үҙем ҡотҡарҙым, тип ҡыҙын батшаға алып ҡайтып бирәйем. Уны үлтергәнде берәү ҙә белмәһен», – тип уйлаған да, ярға сығырға бер нисә саҡрым ҡалғас, пароход хужаһы тотҡан да Кәримде диңгеҙгә ырғытҡан, ти. Үҙе Кәримдең кейемдәрен кейеп ярға сыҡҡас, батша ҡыҙын батшаға алып барған, ти. Батша, шатланыуынан ни эшләргә белмәйенсә, ҡотҡарыусыға ҡыҙын, батшалығын бирергә булған. Туйҙы бик матур итеп үткәреү өсөн, батша бөтөн батшалыҡтан иң яҡшы музыканттарҙы, йырсы, бейеүсе рәссамдарҙы саҡырған да төрлөһөнә төрлө эш ҡушҡан, ти. Музыканттарға ҡыҙы менән буласаҡ кейәүе тураһында көйҙәр, йырсыларға йырҙар сығарырға, бейеүселәргә бейеүҙәр уйлап сығарырға, рәссамдарға матур рәсемдәр төшөрөргә ҡушҡан, ти.

Пароход хужаһы ташлағас, Кәрим бер ниндәй зыянһыҙ тулҡын ярҙамында ярға килеп сыҡҡан, ти. Батшаның иғланын ишетеп, ул да батша һарайына барған. Үҙен бер кемгә лә танытмаған. Батшаның шартын белеп, бер ай ваҡыт үтеп, ярыш көнө еткәс, батша ҡыҙы буласаҡ кейәүе менән музыканттарҙы уйнатып, йырсыларҙы йырлатып, бейеүселәрҙе бейетеп, тикше-

реп килә торғас, рәссамдарға килеп еткән. Кәримдең рәсемдәрен ҡарай башлаһалар, ул үҙенең башынан үткәнде: атаһы нисек үлгәнде, әсәһен урманда күмгәндәрен, ағас баштарында йоҡлағандарын, һунарсыға барып тора башлағандарын, ҡыр кәзәһе артынан китеп, нисек ҡараҡтарға юлыҡҡанын – береһен ҡалдырмай һүрәткә төшөргән, ти. Батшаға ла, ҡыҙы менән буласаҡ кейәүенә лә был рәсемдәрҙең береһе лә оҡшамаған, ти. Уларға оҡшамаған һүрәтте Кәрим арҡырылы-буйлы һыҙа барған, ти. Шунан һуң Кәрим ҡалған рәсемдәрен күрһәтә башлаған. Нисек ҡараҡтарға аш бешергәнен, улар киткәндә тишеккә аш биргәнен, таш ояны ватып, ундағы батша ҡыҙын ҡотҡарғанын, ҡасыуҙарын, пароходҡа ултырғас, капитандың нисек уны һыуға ырғытыуын, нисек уны тулҡындар ҡотҡарғанын һүрәткә төшөргән булған, ти. Батша ҡыҙы рәсемдәрҙе ҡарап бөтөрә алмаған, иҫтән яҙып йығылған да ҡуйған, ти. Кәрим дә, батша ла бер һүҙ ҙә әйтмәгән, ти. Иҫенә килгәс, батша ҡыҙы Кәримдең муйынына килеп аҫылынған.

– Атай, мине ҡотҡарған кеше бына ошо егет ине. Мин уға барырмын, тип һүҙ биргәйнем, – тигән. – Ә был, һинең капитаның, алдаҡсы кеше. Уның башын киҫтер, – тип карап хужаһының битенә төкөргән.

Шунда уҡ капитанды тотоп алып киткәндәр ҙә, башын киҫеп, яза ла биргәндәр, ти. Батша ҡыҙы менән Кәримде бер ай туйлағандан, ашағандан, эскәндән һуң, батша Кәримде батша итеп ултыртҡан.

Кәрим батша булғас, һунарсы атаһы менән һеңлеһен алып килергә тип, кеше ебәргән. Ләкин ебәргән кешеһе бик бойоғоп ҡайтып, Кәримгә былай тигән:

– Атайың менән ҡарындашың икеһе лә, һин юғалғас, бик ҡайғырып илап, хәсрәт менән үлгәндәр, – тигән, ти.

Атаһы менән ҡарындашының үлеүен ишеткәс, Кәрим бик ныҡ ҡайғырған, илаған, ти...

Хәҙерге көндә инде бик күңелле генә итеп, күгәрсен кеүек гөрләшеп, батша ҡыҙы менән ике бала үҫтереп, йәшәп ята, ти.

## 86. Төштә ғашиҡ булған

Борон бер батшаның бер улы була. Бер ваҡыт шул егет төш күрә. Имеш, ҡырҡ артылыш артында бер батшаның бик матур ҡыҙы бар, ти. Батша улы иртәнсәк, ата-әсәһенә лә әйтмәйенсә, аҙыҡ алып юлға сыға, төшөндә күргән батша ҡыҙы янына китә.

Ҡырҡ йыл, ҡырҡ ай, ҡырҡ көн, ҡырҡ төн үткәс, был батшалыҡҡа килеп сыға. Ул йәйәү ҙә килә, һыбай ҙа килә,

һыуҙа ла йөҙә. Ауылға килеп еткәс, иң ситтәге бер өйгә инә. Унда бер ҡарсыҡ ҡына торған була. Ул көндөҙ көнө буйы өйҙә була ла, эңер төшкәс, теге батшаның ҡыҙына китә. Батшаның ҡыҙы иптәштәре менән алтын һарайҙа йәшәй икән. Тыштан уны уҫал һаҡсылар һаҡлап торған. Был егет килеп, һарай тәҙрәһе төбөндә назым айый*.

Ҡыҙ быны ишетеп ҡала ла, сәкмәненең бер еңен кейеп, бер еңен киймәйенсә, тышҡа сығып йүгерә. Бында ул егет менән осраша. Егет үҙенең юлда күргән ҡыйынлыҡтарын, ул тип, атаәсәһенә лә әйтмәйенсә китеүен әйтә.

Егет менән ҡыҙ икенсе көндә лә осрашып һөйләшкәндәр. Һаҡсылар был эште белеп ҡалып, батшаға еткергәндәр. Батша быға бик ныҡ асыуланған, бөтә ауыл буйынса егетте эҙләргә ҡушҡан. Батшаның бер шымсыһы килеп егеттең йәшеренгән ерен әйтеп биргән. Батша был егет йәшәгән өйҙөң хужаһын саҡыртып алған.

– Егетте сығар! Ул ҡайһы ергә йәшеренде? – тип уны дөрә башлаған.

Әбей уға:

– Минең һандығымда ята ул, – тигән.

Батша егеткә ағыулы дарыу эҫкәтергә ҡушҡан.

– Әгәр ошо дарыуҙы эҫкәтмәһәң, үҙеңдең башыңды өҙәрмен, – тигән, ти.

Әбей бик ныҡ хафаға ҡалып ҡайтҡан да батшаның дарыуын һандыҡ тышынан эҫкәткән икән, егет үлгән дә ҡуйған. Батша ярҙамсылары егетте баҙарға алып барып, үлек кәүҙәһен аҫып ҡуялар. Ҡыҙ был ваҡытта егеттең үлеүен белмәгән була әле. Уның бер иптәш ҡыҙы егеттең үлек кәүҙәһенең баҙарҙа аҫылынып ҡуйылыуын әйтә.

Ҡыҙ нисек етте шулай кейенеп, һарайҙан сығып китә. Бөтә халыҡтан һорашып, егет аҫылынып торған ергә китә. Егетте аҫылынып торған еренән төшөрә лә батша ялсыларына алтын, көмөш, яҡуттан һарай һалдырырға ҡуша. Үҙенең һарайына ҡайта ла бөтә кейемдәрен иптәш ҡыҙҙарына өләшеп бирә. Шунан атаһының өйөнә килеп назым айый:

– Үҙ егетем булмағас, тере һөйәгем эт Зәйтүнгә бармаҫ, – тигән ҡыҙ.

Батша ҡыҙын Зәйтүн тигән бай егеткә бирергә булып йөрөгән икән. Ҡыҙ үҙе менән хәнйәр алып сығып китә. Был ваҡытта һарай әҙер булған була. Ул инде көмөштәре ялтырап, ынйы, гәүһәр, яҡуттан торған була, көмөш йылғалар ағып торған, өҙләкһеҙ ҡош-ҡорттары һайраған, тирә-яғы йәшеллек, сәскәлек булған. Батша ҡыҙы егетте ошо һарайға килтертеп һалдыра ла үҙе лә шул һарайға инеп бикләнә. Шунан, егете менән йәнәш ятып, хәнйәрен күкрәгенә ҡаҙай. Һарай инде бер

ваҡытта ла асылмаҫ була. Был хәлде егеттең ата-инәһе беләләр ҙә батшалыҡҡа киләләр. Һарайҙы асырға уйлайҙар, ләкин һарай асылмай. Ҡыҙҙың атаһы ла асып ҡарай, аса алмай. Ул бик үкенә, үкенһә лә, һуң була. Егеттең ата-инәһенә:

– Мине, яуызды, үҙегеҙ теләгәнсә үлтерегеҙ, – ти.

Ләкин улар уны үлтермәйҙәр, ер-һыу илап, ҡайтып китәләр. Был һарай ҡабат бер ваҡытта ла асылмай.

## 87. Фатиманың ҡотҡарылыуы

Борон заманда бер ауылда булған бер бай. Уның ун һигеҙ йәштәрҙәге бер улы булған. Исеме Мостафа икән. Йәнә булған Фатима исемле бер ҡыҙы. Уныһы ун алты йәштәрҙә булған. Бер ваҡыт Мостафа атаһынан рөхсәт һорап, ауылдағы ир-егеттәрҙе, ҡыҙҙарҙы ҡымыҙ эсергә ҡунаҡҡа саҡырған. Ауыл бер диңгеҙ эргәһендә булған була. Көн кисегеүгә, ҡунаҡтар ҡыҙышып алалар ҙа, ҙур-ҙур кәмәләргә ултырып, таҡмаҡтар әйтеп, ҡурайҙар уйнатып диңгеҙгә сығалар. Былар күп ер киткәс, Мостафа әйтә:

– Иптәштәр, беҙ шаулашып бер нәрһә* белмәй киләбеҙ. Беҙгә дошмандар килә. Әйҙәгеҙ, кире ҡайтабыҙ. Олатайҙар, атайҙар һөйләүенә ҡарағанда, күптән түгел ошо яҡын-тирәнән күп ҡыҙҙар әллә ҡайһы яҡтағы ҡараҡтар тарафынан ошо диңгеҙ өҫтөнән урланып киткәндәр. Әйҙәгеҙ, шәберәк ишергә! – ти.

Шул арала карап менән ҡараҡтар килеп етеп, йәштәрҙең ҡотон алмаға бер-ике мәртәбә мылтыҡ аталар. Күп ҡыҙҙар, был ҡараҡтарға бирелеп үлгәнсе, диңгеҙгә төшөп үләбеҙ, тип диңгеҙгә һикерәләр. Шул арала ауыл халҡы ишетеп ҡалып, быларға ярҙамға ташлана. Диңгеҙ өҫтөндә булған бар халыҡты йыйып алып сығалар. Диңгеҙ сигенә сыҡҡас ҡараһалар, Фатима менән Мостафаның һөйгән ҡыҙы Гөлбаян юҡ. Кәмә артына йәбешеп сыҡмағандармы, тип тикшереп ҡараһалар, бер ҡараҡ үҙҙәренең кәмәләренә ултырырға өлгөрмәй, быларҙыҡына йәбешеп сыҡҡан була. Мостафалар ҡараҡтың саң туҙандарын ҡағыштырып, таш һарайға алып барып ябып ҡуялар.

Мостафа өйөнә ҡайтһа, атаһы:

– Һин ләғнәт тип ниңә ҡымыҙ йыйҙым, тәкәләр һуйҙырып, ҡунаҡ йыйырға рөхсәт иттем? Диңгеҙҙә йөрөү ниңә кәрәк ине инде һеҙгә? – тип ажғыра. – Күҙемә күренмә, сығып кит. Табып алып килмәй генә ҡара Фатиманы, ышанмаһаң, ҡабырғаларыңды хисаплармын! – тип ҡыуалап сығарып ебәрә.

Мостафа: «Бындай һүҙҙәрҙе атайҙан һис ишеткән юҡ ине, туҡта, әсәйгә әйтеп, бер аҙ аҡса менән аҙыраҡ аҙып алыҡ, ҡола айғырҙы менеп китергә кәрәк. Тапһам да, тапмаһам да, һөйөклө ҡарындашым Фатима менән ғүмерлек иптәшем була торған Гөл-

баян өсөн һис бер йәнемде, көсөмдө аямай китәм», – тип барып ҡараҡтан адресын алып, уны ҡабат бикләтә.

– Мин ҡасан килермен, шунда һине саҡырырмын, – ти ҙә, ҡола айғырға менеп, ҡарындашы менән Гөлбаяның эҙләргә сығып китә.

Юлда һораша бара. Күп ер киткәс, өс һалдат тап булып:

– Эх, малай, тотолдоңмо? Давай, сисен, атабыҙ, – тип, бөтөнләй сисендереп ат арҡаһына артмаҡлап, тау-таш араларынан туғыҙ өйлө бер ауылға алып баралар ҙа өйҙә ултырыусы кәрлә ағайҙан:

– Ғәрәпйән ҡайҙа? – тип һорайҙар.

Кәрлә әйтә:

– Ул һеҙгә нимәгә кәрәк?

Һалдаттар:

– Беҙ уға бына Салих батшаны тотоп алып килдек. Беҙгә шуға кәрәк, – тиҙәр.

Кәрлә:

– Алай булһа, бирегеҙ әле миңә, ҡамсы менән туҡмап үлтерәйем, – ти. Һалдаттар бирмәй.

Былар ҙың тауышына тыштан Ғәрәпйән килеп инә.

– Кемдәр минең йортта тауыш ҡуптаралар? Йә, сығығыҙ әле! – тип ажғырып, кәрләнең арт һанына бер тибеп, сығарып ебәрә.

Һалдаттар:

– Ғәрәпйән ҡустым, дөрөҫ булһа, һиңә бер кеше алып килдек. Теләһәң ни эшлә. Бына тора. Беҙ, һинең әйтеүеңсә, ошо кешелер, тип алып килдек, – тиҙәр.

Ғәрәпйән үҙе лә Салих батшаны танымай.

– Остағы өйҙә бер әбей булыр. Ул Салих батшаны таный. Бар, шул әбейҙе килтер, – тип бер һалдатты сығарып ебәрә.

Һалдат әбейҙе алып килә. Әбей:

– Балалар, Алланың исеме менән ант итеп әйтәм, Салих батша ошо. Башҡа бер һүҙем дә юҡ, – тип сығып китә.

Күп тә тормай тағы бер кешене тотоп килтерәләр. Һорашһалар, шуныһы Салих батша булып сыға. Шул ваҡыт эсендә, гонаһһыҙ кешене үлтертә яҙғаны өсөн, әбейҙе аҫау айғыр ҡойроғона бәйләп ебәреп үлтерәләр. Салих батшаны ғүмерлек төрмәгә ябалар. Шунан Ғәрәпйән әйтә:

– Мостафа туған, ошо көнгә тиклем мин һис бер кемде лә бушҡа рәнйеткәнем юҡ. Салих батшаны эҙләтеүҙең төп маҡсаты быңа ошоларҙан тора. Батшалыҡ быуындан быуынға килә. Салихтың атаһы батша ваҡытында беҙҙең кеүектәрҙе тамаҡ туйҙырыу хаҡына көн буйы эшләткән. Эш хаҡын һораһалар, уларҙы өс көндән бер айға тиклем ултырткан. Ошо эштәренән ҡурҡып, өс-дүрт кеше бөтә ~~өй~~ эстәре менән урманға ҡасып, шунда төйәкләнгәндәр. Бына шул Салих батшаның атаһы минең атайымды үлтерҙе. Ата ҡонон алайым тип, Салих батшаны

ҡул аҫтыма алдым. Бына, Мостафа туғаным, хәлдәр шулай. Мин ғәйепһеҙ һис кемгә теймәйем ул. Әгәр батша төрмәһенән ҡасып, ятаҡ тапмай килгән халыҡтар булһа, ҡунаҡ итеп ебәрәм. Ярар, Мостафа, әйҙә, аш ашайыҡ. Һин ҡурҡма. Икебеҙ ҙә йәш егеттәр: һиңә ун һигеҙ, миңә егерме биш. Бынан һуң бергә-бергә ғүмер итәйек, дуҫ булайыҡ, – тип Мостафаға ҡулын бирә.

Кәрлә килеп инә лә Ғәрәпйәнгә:

– Әйҙә, Мостафаны үлтерәйек, – ти. – Ул беҙҙең ҡайҙа торғанды белде, батша кешеләренә хәбәр итер ҙә беҙҙең башҡа етер, ти.

Ғәрәпйән:

– Һин, ағай, бушҡа бушты бушатып йөрөмә әле. Бар, тыныс йоҡоңда бул. Ҡабат килеп, ул хәбәрҙе һөйләп йөрөмә, – тип ҡыуып сығарып ебәрә.

Ял итеп ул төндө үткәргәс, Ғәрәпйән бер атҡа менеп Мостафаны оҙатып алып китә. Ҡыҙ һатыла торған шәһәрҙе эҙләп байтаҡ ер барғас, Ғәрәпйән Мостафаға бер хәнйәр һәм әсе тулы киндер янсыҡ бирә. Мостафа быға оялып тора.

– Алтынды ал. Алмай, ташлап китмә. Ул һиңә кәрәк булыр әле, хуш, мин ҡайтайым. Әгәр ҡарындаштарыңды ала алмаһаң, миңә кил, күмәкләп алып ҡайтырбыҙ, – тип, хушлашып, Ғәрәпйән ҡайтып китә.

Күп көн үтмәй, Мостафа ҡалаға барып етеп, бер әбей менән бабайға фатирға төшә.

– Был ҡалала баҙар буламы? Баҙарҙа ниҙәр була? – тип һораша.

Әбей әйтә:

– Баҙарҙа, балам, йәнеңә кәрәге бар. Әле өс көн элгәре ике ҡыҙ һаттылар. Бик ҡиммәт һоранылар. Ошо беҙгә бик алыҫ түгел Тилеүгеҙ исемле бер бай алды. Ҡыҙ-ҡырҡынды духтыр кәмесийәһе менән ҡарап алалар. Ҡыҙ көйө булһа, бик ҡиммәт була. Былар ҙа ҡиммәткә үтте. Әллә ҡыҙҙарҙы бер-бер яҡтан урлап килтереп һаттылар, әллә ни. Уларҙың илауына баҙарҙағы бөтә халыҡ иланы. Хәҙер, мин белеүемсә, ул Тилеүгеҙ бай ҡырҡ бисә алды инде, Алланың эшенә аптырак булаһың.

Мостафа:

– Инәй, шул һөйләгән ҡыҙҙарҙың икеһе лә минең ҡарындаштарым. Уларҙың икеһен дә диңгеҙ өҫтөнән ҡараҡтар урланылар ҙа бында килтереп һатҡандар. Шул ҡарындаштарымды Тилеүгеҙ байҙан нисек булһа ла айырып алып ҡайтырға килгәйнем. Инәй, апа*, ярҙамда булығыҙ, – ти.

– Балам, уға ике юл бар. Үҙең Салих батшаға оҡшап тораһың. Батша булып, баструкка барып, икеһен ике беләгеңә элеп ҡырға алып сығар ҙа, ҡасыр ҙа китәрһең. Икенсе юл, духтыр булған булып барып, ҡарындаштарыңа иҫ китәрә торған дарыу биреп, «үлтереп» сығаһың да, күмгәс, «үлек»те оҙаҡламай ҡаҙып алаһың да, терелтеп, өй ҡайҙа, беҙ шунда тип алып

ҡайта ла китәһең. Ул эште эшләү өсөн күп кенә хәриз кәрәк булыр, балам, – ти әбей менән бабай.

Мостафа:

– Инәй, ошо бер тоҡсай саф алтын етәр әле, – ти.

Әбей:

– Уй, был булғас, балам, булды инде ул, – ти.

Арыу ғына көймә, арыу ат, яҡшы кейемдәр һатып алып, Салих батша булып кейенеп, Мостафа Тилеүгеҙ байға китә. Барғас:

– Салих батша килде, тип хәбәр итегеҙ, – ти ҡарауылсыларға.

Ҡарауылсылар байға хәбәр итәләр. Бай сығып:

– Күтәреп индерегеҙ, имгәтмәй генә, – тип бойора.

Килеп инһә, бөтәһе бар, ти. Сәй ултыртып, эсергә тотоналар. Мостафа әйтә:

– Һин, бай, мине беләһең. Әле мин кәләш алмағанмын. Атай ҙа күптән түгел үлде. Ул, әгәр эсең бошһа, күңел асырға уйлаһаң, шунда Тилеүгеҙ исемле бер бай апаң булыр, шуға аҙнаға бер барып тор, тигән була торғайны. Шулай булғас, атаһы дуҫтың – балаһы дуҫ. Давай, кәнизәктәрең* менән дә хөрмәт ит. Мин бер аҙ күңел асайым, – ти.

– Балам, ашыҡма, Хоҙайҙың көнө тарынан да күп, – тине, ти.

Күп эсеү арҡаһында, бай иҫерә. Мостафа булдыра алмай аптырап, йөрәгеп ыуалап ятҡанда, бер фонарь тотоп кәрлә килеп инә.

– Ах, һин, Мостафа, бында ята икәнһең. Хәҙер үлтерәм һине, – тигән. Мостафа Ғәрәпйәндән биргән хәнйәр менән сәнсәм тигәндә генә, кәрлә сығып ҡаса. Артынан, ҡарауылдар һөрән һалып, сасауайҙар* йүгерә. Шул ваҡытта Мостафа әбейгә ҡарай ҡаса. Ах-ух итеп, әбейҙәргә барып, мәсьәләне һөйләп, көлөшөп ҡуялар.

Иртәгеһенә Мостафа духтыр булып кейенеп, күҙелдерек кейеп, төрлө-төрлө буяуҙарҙы иҙеп, ваҡ ҡына дарыу шешәләренә ҡойоп, кеҫәләренә тултыра ла, ат егеп, тағы Тилеүгеҙ байға бара. Байҙың ҡапҡаһында тороусы ҡарауылсыларға:

– Байға, духтыр килде, тип хәбәр итегеҙ, – тип тауыш бирә. Был хәбәрҙе ишеткәс, бай:

– Ҡунаҡты өйгә индерегеҙ, – тип ҡуша.

Ҡарауылсылар Мостафаны бай ҡаршына индерә. Бай:

– Бик яҡшы килдең әле. Күптән бирле кәнизәктәремде тикшерткән юҡ ине. Әйҙә, йылы аштан ~~ҡабул~~ ит, – тип әйтте, ти.

Кискә ҡаршы быны кәнизәктәргә ҡарай үткәрәләр. Мостафаның теләгәненсә булып сыҡмай. Илле ике бүлмә. Һәр береһендә бер ҡыҙ. Ишектәр тыштан йоҙаҡланған. Һәр бүлмә ише-

гендә төнлөк һымаҡ берәр тишек эшләнгән. Ул да булһа, ҡул һыймалы ғына. Бай исемдәре менән кәнизәктәренә ҡысҡыра бара. Исеме сыҡҡан кәнизәктәр әлеге тишектән ҡулдарын бирә. Мостафа һаман ҡарындаштарының исемдәре сығыуын көтә. Илле ике кәнизәктең ҡырҡынсыһы Фатима була.

– Бына был кәнизәгендә ауырыу бар, – тип Мостафа уға буш дарыу яһап бирә.

Кис ятыр ваҡытта: «Был Гөлбаян сыҡманы. Ул икенсе кешегә киттеме икән», – тип уйлап ята ла, күп туҡрамай, көслө дарыу яһап, байға бирә.

– Ошо дарыуҙы ятыр саҡта теге кәнизәгеңә эсер, – ти. – Шунан сәләмәтләнер, – ти.

Мостафа ҡомған тотоп, тәһәрәткә сыҡҡан кеше була ла, ҡарауылсыларҙы үткәс, ҡомғанды ташлай ҙа ҡалаға ҡарай ҡаса. Бөтөн кейемдәрен, күҙелдерегән Тилеүгеҙ байға яҡын бер күлгә батыра. Шунан үҙенең фатирына ҡайтып етә.

Иртәгеһенә төш мәлендә, Фатиманы ҡаҙып алыу өсөн, зыяратҡа бара. Күлдәктәр тектереп алған була. Ҡыҙҙы ҡаҙып алып, кейемде кейҙереп ҡараһа – һис ҡарындашына оҡшамай. Шулай булһа ла, ҡыҙҙы терелтергә мәжбүр була. Ҡыҙ тороп әйтә:

– Ну, Мостафа, алданың. Байҙы ла алданың, үҙең дә алдандың. Минең исемем тәүҙә Мәрзиә ине. Һуңынан бай Фатима тип ҡушты. Бай һәр ваҡыт кәнизәкте алған көндө уға үҙе яңы исем ҡуша. Шулай ҙа бошонма, ҡарындаштарыңды барыбер алып ҡайтырбыҙ, – ти.

Мостафа әбейгә ят ҡыҙ бала менән икәүләп бара. Ҡыҙ һөйләй:

– Тәүҙә бай мине алды. Мине бер кем менән йөрөтмәй, үҙе менән алып йөрөнө. Ул миңә үҙенең серҙәрен дә һөйләп бирҙе. Уның бер йәшерен юлы бар. Таш ҡоймаларҙың эсендә баҡса. Баҡсаларҙың эсендә бер ҡотоҡ*. Шул ҡотоҡ ауыҙы ҙур тирмән ташы һалып ябып ҡуйылған. Ҡотоҡҡа төшкәндә, пар ат менән үтмәле сөгөн* торба, ти. Ул торба биш саҡрым ерҙә күл ҡабағы* аҫтына сыға, ти.

Ошо хәбәрҙе ишеткәс, Мостафа, күп туҡрамай, Ғәрәпйәнгә китә.

– Был юлдар менән булманы. Инде көскә ҡалды эш, – ти.

Ғәрәпйән ике балыуан* егетен тишкес, сүкеш кеүек төрлө ҡорамалдары менән алып, әбейгә килеп, ҡыҙҙы эйәртеп, Тилеүгеҙ байға яҡын күлгә барып, торбаның осон эҙләп табалар. Ҡыҙ әйтә:

– Ҡарындаштарың унынсы кумытта*, – ти. – Ҡара шаллы тағы бер кумыт бар. Уларына теймәгеҙ, – ти.

Ҡыҙ ат ҡашында ҡала. Егеттәр торба эсенән барып, ҡотоҡ ауыҙында ятҡан ташты онтап, бай йортоноң артындағы күрни-

сәнән инәләр ҙә, бирәрҙе төшөрөп, ҡыҙҙарҙы сығарыу өсөн, кумыттарын онтайҙар. Тәүҙә ике ҡара шаллы кумыт асыҡ була. Караһалар, байға ҡунаҡҡа килеп, кәнизәктәргә тамшанып ултырыусы иҫеректәр булған. Барыһының да баштарын ҡырҡалар ҙа бөтә кәнизәктәрҙе лә ҡотҡаралар. Мостафа менән Ғәрәпйән кәрләнең ҡарауыл һөрәнләп йөрөгәнен ишетеп, аңдып тороп, тотоп алып, ебәк билбау менән аҫып үлтерәләр. Шунан үҙҙәре лә ҡотоҡҡа төшөп китәләр. Кәнизәктәр ҡыуанып, күп рәхмәттәр уҡып, күл янында ҙур мәжлес яһап, барыһы ла үҙ иленә тарала башлай. Шул ваҡытта Мостафалар ҙа ике көймәгә тейәлеп, Ғәрәпйәндәргә барып, ҡунаҡ булалар. Мостафа үҙенең һөйгәне Гөлбаянға ҡушыла. Ҡарындашы Фатиманы Ғәрәпйәнгә ғүмерлек иптәш итеп бирә. Шунда туй яһап, ике көн ҡунаҡ булып, ике хадукка ике ҡыҙҙы ултыртып, ауылына ҡайта. Кейәүен ҡоҙаға* барырға саҡырып ҡайта. Ҡайтһа, аталары күптән үлеп бөткән икән, тип уйлап, төңөлөшөп бөткән булғандар. Осрашып, ҡыуанышып, илашып, Мостафа һөйгәнен алып, бөгөн дә булһа донъя көтөп яталар, ти. Әкиәтем ары, үҙем бире.

## 88. Әҙһәм менән Зөлхиә

Әҙһәм исемле егет булған. Мысыр илендә утын йөкмәп йөрөп һата, гел өс тин көмөшкә һата икән, шуның бер тинен уға, бер тинен быға бирә, бер тинен үҙенә алып ҡала. Уның бер ҡыҙыҡ ғәҙәте бар икән: кис булдымы, зыяратҡа китә лә төнө буйы ҡәберҙәр араһында йөрөй. Бер ваҡыт зыяратта йөрөгән сағында, бер ҡәберҙән тонок ҡына тауыш ишетә. Ул шул тауыш килгән ҡәбер эргәһенә бара ла:

– Ни ғазап менән ғазап сигәһең? – тип һорай.

– Йәнем тәнемә ҡайтанан керҙе, ҡәберҙе аса алмайым, – тип яуап биргән ҡәбер эсендәге тауыш.

Егет ҡәберҙе аса башлай.

– Һин кем булаһың? – тип һорай эстәге тауыш.

Егет:

– Ҡаһирә егете булам, – ти.

Ҡәберҙәге кеше:

– Мин Ҡаһирә ҡыҙы булам, – ти.

Әҙһәм ҡәберҙе асып бөтөп ҡараһа, унда хуш китерлек матур ҡыҙ ята, ти. Егет уны кәфене менән күтәреп алып сыҡҡан. Ҡыҙ егеттән энә менән еп һораған. Әҙһәм ҡайҙалыр барып энә, еп алып килгән. Ҡыҙ кәфененән күлдәк тегеп кейгән. Әҙһәм ҡыҙҙы өйөнә алып ҡайтып киткән. Былар өйләнешергә булғандар. Мулла саҡыртып, никах уҡыталар. Ҡыҙҙың исеме Зөлхиә була, ул үҙенең кем балаһы булыуын да әйтмәй. Былар

бергә йәшәй башлайҙар. Егет үҙ кәсебендә йөрөп көн дә өс дирһәмлек* утын һата. Бер ир балалары була. Ибраһим тип исем ҡушалар. Был бала биш-алты йәшкә еткәс, ҡала урамына сығып уйнап йөрөй башлай.

Ибраһимдың инәһе Зөлхиә бер батша ҡыҙы булған икән. Ул кинәттән генә үлеп киткән. Ләкин ул бөтөнләй үлмәгән, мәрткә киткән була. Күмгәс, йәне тәненә ҡайта. Уның бәхетенән шул ваҡытта Әҙһәм ҡәберҙәр араһында йөрөгән.

Зөлхиәне аҫрап үҫтергән бағыусы инәһе урамда Ибраһимды күреп ҡала. Ибраһим әсәһенә ныҡ оҡшаған, матур булған. Бағыусы үҙем аҫрап үҫтергән ҡыҙға оҡшаған, тип был балаға нан* бирә, бүл* бирә. Күршеләре быны күреп ҡалалар ҙа батшаға әйтәләр. Юҡты һөйләп, кешенең башын ҡатыраһың, тип батша бик асыулана тегегә.

Бағыусы ҡатын урамда Ибраһимды тағы күрә, был юлы ул Зөлхиәгә тағы ла нығыраҡ оҡшағандай була. Бағыусы уны һөйөп, уға тағы нан, тағы бүл бирә.

Шулай өс мәртәбә ҡабатлана, өсөһөн дә күреп, ханға әйтәләр. Батша ҡатынды саҡыртып ала.

– Һин әйт, ниндәй балаға нан бирәһең, бүл бирәһең? Әйтмәһәң, төрмәгә яптырам, – ти.

Теге ҡатын:

– Һеҙ уға, үҙегеҙ күрһәгеҙ, нан түгел, йән бирер инегеҙ. Ул үлгән ҡыҙыбыҙға бик оҡшаған, – ти.

Батша:

– Улай булһа, малайҙы алып кил. Беҙ ҙә күрәйек, – ти.

Бағыусы Ибраһимды алып килә. Зөлхиәгә оҡшатып, бөтәһе лә уны ҡосаҡлап алалар.

– Инәһе ҡайҙа, ни рәүешле? – тип һорайҙар.

Зөлхиәгә кеше ебәрәләр, ул йөҙөн күрһәтмәй.

– Мин фәҡир, бара алмайым, – тип яуап бирә.

Ебәрелгән кешеләр ханға:

– Ҡыҙ фәҡир, кейергә кейеме юҡ, шуның өсөн килмәй, – тип хәбәр итәләр.

Батша үлгән ҡыҙының кейемен ебәрә. Зөлхиә үҙенең элекке кейемен кейеп килеп инә.

– Битлегеңде күтәрһәңсе, – тип үтенәләр.

– Ниңә, – ти ҡыҙ, – ете йыл зарланған зарығыҙ мин булам, – ти.

– Ни эшләп ете йыл буйы беҙҙе һарғайттың? – тип һорайҙар.

Ҡыҙ, түкмәй-сәсмәй, бөтәһен дә һөйләп бирә. Ете йыл буйы ҡыҙыбыҙҙы ебәрмәй торғаны өсөн тип, Әҙһәмде аҫырға булалар. Ләкин Зөлхиә быға ҡаршы сыға. Шунан батша:

– Алып килегеҙ. Бөтә батшалығымды кейәүемә бирәм, – тигән.

Әҙһәм батша булып ала. Ҡайныһы уны, фәлән көтөүҙәрҙе ҡарап кил, тип ҡырға ебәрә. Әҙһәм атҡа атланып сығып китә. Бер өйөр мал күренә. Ул шул тиклем ҙур була, иге-сиге күренмәй.

– Кем малдары? – тип һорай.

– Әҙһәмдеке, – тип яуап бирәләр көтөүселәр.

Әҙһәм, миңә шул тиклем мал нимәгә ул, тип уйлай ҙа, үҙенең батша кейемдәрен сисеп, бер көтөүсегә биреп, уның иҫке генә сәкмәнен кейеп ала ла үҙенең элекке һөнәренә кире ҡайта. Тағы ла утын йөкмәп шәһәргә китә.

Ибраһим ете-һигеҙ йәшкә етә.

– Атайымды юллап табайым, – ти.

Әсәһе риза булмай. Инәлеп һорай торғас, инәһе һөйләп бирә.

– Ҡаланың утын һата торған баҙарында булыр атайың, – ти. – Ул гел утынын өс тин көмөшкә һатыр, береһен уға бирер, береһен быға бирер, береһен үҙенә алып ҡалыр, – ти.

Ибраһим Мысыр иленә сығып китә. Утын һата торған еренә бара. Ҡарап тора, береһен дә атаһына оҡшатмай. Бына бер саҡ урта буйлы бер кеше утын йөкмәп килә. Утынын өс тин көмөшкә һата ла бер дирһәмен уға, бер тинен быға бирә, береһен үҙенә алып ҡала. Ибраһим атаһын барып ҡосаҡлап ала:

– Инәм Зөлхиә, атам Әҙһәм, улың Ибраһим, – тип илап ебәрә.

Атаһы ла улын танып, ҡосаҡлап ала. Шул ерҙә икеһе лә һөйөнөстән үлә. Кешеләрҙе ҡайһы саҡта һөйөнөс тә үлтерә икән ул.

## 89. Ҡыҙ мутлығы

Борон-борон заманда әбей менән бабай йәшәгән, ти. Былар бик хәлле генә булған, ти. Әбей менән бабайҙың берҙән-бер генә ҡыҙҙары үҫеп буйға еткән. Ҡыҙ төҫкә-башҡа бик матур булған, ти. Буйға еткәс, быны һоратып, төрлө ерҙән яусылар килә башлаған. Ҡыҙҙың атаһы бик йомшаҡ күңелле кеше булған, ти.

– Ҡыҙыбыҙ әле йәш, үҙ иркенә ҡуяйыҡ, күңеленә оҡшағаны булһа, бирербеҙ, – тип әйткән, ти, ҡарсығына.

– Ярар һуң, – тигән, ти, уныһы.

Шулай тиешкән ҡарттар, аҙаҡ ниңләп әйттек тигән көнгә ҡалғандар: кем генә килмәһен, был ҡыҙ кире бороп тик ултыра икән.

Был ауылда тағы бер хәлле генә кешеләрҙең Әбделхәким исемле улдары булған, ти. Был егет һөлөк кеүек матур, оҙон буйлы, өҫтәүенә, һыҙҙырып ҡурайҙа уйнай икән, ти. Бахыр йәш ҡыҙ бала бер күреүҙә Әбделхәкимгә ғашиҡ булған да ҡуйған. Шулай күңеле бүтәндә булғанға, килгән бер яусыны кире бора

ла сығара икән. Үҙе бик баҫалҡы ғына булғандыр инде. Был турала еңгәләренә лә, бүтәндәргә лә әйтмәгән.

Көндәр шулай уҙа тора, Әбделхәким күңеленән сыҡмай ҙа ҡуя икән ҡыҙҙың. Шунан ҡыҙ: «Юҡ, былай ярамай, берәй әмәлен күрәйем, йә атайым, асыуланып, теләһә кемгә бирер ҙә ебәрер», – тип уйлаған да хәйләләргә булған.

Берҙән-бер көндө ҡыҙ сәсрәп ауырып киткән кеше булды, ти. Ике еңгәһе бының эргәһенән китмәй, ана үлә, бына үлә, тип алмаш-тилмәш көтөп ултырҙы, ти.

Бер ваҡыт бикәстәре «һаташа» башланы, ти. Шул «һаташҡан» арала ҡыҙ асыҡ ҡына итеп: «Еңгә бир әле ҡыҙыл ситегемде, Әбделхәкимдең алдынан, сыртылдата баҫып, бер үтеп китәйемсе!» – тип әйтеп һалды, ти. Ике еңгәһенең күҙе шар булды, ти. Эштең ниҙә икәнен һиҙеп ҡалған еңгәләр, бикәстәре һауығып аяҡҡа баҫыу менән, уны Әбделхәкимгә димләп, эште йайға һалырға һүҙ беркетештеләр, ти. Уларҙың шул һүҙен ишеткәс, ҡыҙ шул сәғәттә «һауыға» башланы, ти. Шунан күп тә үтмәй һикереп килеп торҙо, ти.

Еңгәләре йүгерешеп йөрөп Әбделхәкимдең ата-инәләренә хәлде аңғарттылар, ти. Улары: «Күктән теләгәнде ерҙән бирҙе», – тип, шунда уҡ яусылар ебәртеп, ҡыҙҙы әйттереп, никах уҡытып та ҡуйҙылар, ти. Ҡыҙҙың ата-әсәһе ҡыуаныстарынан ни алып, ни ҡуйырға белмәне, ти. Өс көн, өс төн туй уҙғарып ҡыҙҙарын Әбделхәкимгә оҙаттылар, ти.

Әбделхәким менән мут ҡыҙыҡай бик татыулыҡта, бала-сағалы булып, тиң ғүмер һөрҙөләр, ти. Ҡыҙ үҙенең мутлығын, иҫенә төшкән һайын һөйләп, көлөшөр булдылар, ти.

Әкиәтем ары, үҙем бире.

## 90. Бер бүрәнәгә – бер ҡыҙ

Ауылда Ғафар тигән егет йәшәй. Атаһы үлгән була. Инәһе менән генә тора. Ғафарҙың күршеһе тире-яры йыйып кәсеп итә торған кеше була.

Бер ваҡыт Ғафар һалдатҡа китә. Һалдатҡа китеп бер аҙ торғайны, инәһе үлеп ҡалды, ти. Был һалдаттың өйөндә бер бейәһенән башҡа бер нәмәһе лә булмай. Инәһенең үлеүен ишеткәс, әлеңге күршеһендәге тире-яры йыйыусыға хат яҙа инде был: «Фәлән дә төгән, фәсмәтән. Һин минең йорт тирәһенә күҙ-ҡолаҡ булып тор инде». «Ярар, – тип быныһы яуап яҙа, – ҡарап торормон», – ти.

Бер ваҡытты хеҙмәтен тултырып ҡайтып килә Ғафар. Балам-бәпкәм, тип ҡаршы алыр кеше лә юҡ, кешнәп сәләмләр бейә лә юҡ. Бейәне күршеһе көтөргә алған була. Шунан ни

Ғафар улай-былай иткәнсе тип, күршеһенә төшә. Һалдат ингәс, һөйләшәләр, хәл-әхүәл белешәләр. Шунан өй хужаһы:

– Йә, Ғафар, егет булып ҡайтҡанһың. Хәҙер башлы-күҙле булырға кәрәк инде. Фәлән байҙың ҡыҙы еткән, хәҙрәттеке лә кейәүгә бирерлек булды, – ти.

– Юҡ. Байҙар миңә ҡайҙан ҡыҙын бирһен инде.

– Улай тимә, кәңәш итәйек әле. Бай бирмәһә, хәҙрәттең ҡыҙын алабыҙ.

– Юҡ, – ти, Ғафар әйтә инде, – минең ниәт икенсе төрлөрәк әле, – ти. – Бәлки, шул ниәткә етеп булыр, – ти.

– Ярар, әләйһәң, шул ниәтең буйынса эш күр.

Уларҙың ауылынан алыҫ түгел бер сыуаш ауылы була. Уның тирә-яғы ҡарағай урманы ине, ти. Сыуаштар шул урманды ҡырҡып, йәкшәмбе баҙарында ағас һаталар икән. Баҙар көн Ғафар бейәһен күршеһенең оҙон арбаһына егеп китте, ти, шунда ҡарап. Ун ике саҡрымды һә тигәнсә үтеп баҙарға инә. Ҡарай – берәү бик шәп бүрәнә һатырға тора.

– Күпме тора бүрәнәң?

Ғафар һорай инде.

– Хаҡы бер тәңкә, – ти сыуаш.

Ғафар бүрәнәне һатып алып тейәй ҙә ҡайта. Ҡайтып килә лә ауылға, мәсет эргәһенә туҡтай. Мәсет хәҙрәт йортоноң ҡаршыһында ғына. Ғафар һалдат бүрәнәһен төшөрә. Уны күреп хәҙрәт килеп сығып ҡулы менән күләгәләп ҡапҡаһы төбөнән:

– Был ниндәй һалдат икән? Бүрәнә килтереп бушатып торасы, – тип, үҙ алдына һөйләнә-һөйләнә ҡарап тора.

Ғафар хәҙрәттең ҡарап тороуын күрҙе бит инде. Килеп сәләм биреп ебәрә:

– Әссәләмәғәләйкүм, хәҙрәт. Мин Ғафар һалдат булам. Мәсет иҫкергән бит. Хеҙмәттән, ошо мәсетте яңыртырға тип, ниәт итеп ҡайтҡайным, – ти.

– Бәй, бәй... Мин аңламай ҡалдым да баһаң, – ти хәҙрәт.

– Мин бик ҙур бол* менән ҡайтҡайным. Мәсет иҫкергән бит. Шуны яңыртайым тигән ниәт менән ҡайтҡайным, – ти.

– Бәрәкәт! Бик яҡшы, бик яҡшы! Һуң башлы-күҙле булғанһыңмы һуң үҙең?

– Юҡ әле, хәҙрәт. Әле килеү генә. Мин ҡайтыуға инәй ҙә мәрхүм булып ҡуйған.

Хәҙрәт өйөнә инеп китә. Инеп китә лә оло абыстайға әйтә:

– Тиҙ генә самауыр ҡуйып ебәрегеҙ. Ғафар хеҙмәттән ҡайтҡан. Ҙур бол менән ҡайтҡан. Мәсетте яңыртырға ниәт итеп ҡайтҡан икән. Шул эшкә тотоноп та йөрөй.

– Кит әле! – ти абыстай. Самауырын ҡуйып ебәрә. Ғафарҙы саҡырып индерәләр. Сәй эсәләр. Сәй эскәндә, ул-был хаҡында һөйләшәләр. Өйләнеү тураһында һүҙ сыҡмай. Сәй эсеп бөткәс, хәҙрәт әйтә:

– Хеҙмәтеңде тултырып имен-һау өйләнеп ҡайтыуың һәйбәт. Инде башлы-күҙле була һалырға кәрәк, – ти.

– Юҡ әле, хәҙрәт. Тәүҙә мәсетте эшләттерергә кәрәк. Шунан үҙемдең өй ҙә насар. Транса менән генә ябылған. Шуны эшләтәһе бар. Минең аҡса хеҙмәт иткән ерҙә һаҡлыҡ кассаһында. Тиҙҙән килеп етә.

– Күпме?

– Уны әйтергә ярамай инде, хәҙрәт.

Шул урында һүҙ бөтә. Ғафар тире-ярысы янына ҡайта. Ҡайта ла:

– Мин ниәтемдең бер башын башланым инде, – ти.

– Ул ниәтең нисек?

– Мәсет эшләтмәксемен.

– Нисек, нисек? Аңламайым да ерҙе лә*.

– Мәсет иҫкергән бит. Шуны яңынан эшләтергә ине.

Аптырай теге:

– Һуң, бүрәнәне ҡалай итерһең?

– Бүрәнәне, сыуаштарға барып, һөйләшеп ҡайттым. Алтмыш-етмеш бүрәнә әҙерләргә әйттем. Буйы фәлән аршин. Ошо арала барып ҡабул итеп алам. Мәсет һалыуға шул етә ул.

– Туҡта, туҡта. Мин аңламайым бит әле. Һин һуң ул эшкә тотонғансы ҡатын алырға кәрәк ине.

– Ҡатыны ла булыр. Ҡасмаҫ.

– Улай булғас, мин барып хәбәр һалайым. Тәүҙә инәйем хәҙрәткә. «Ғафар ҙур бол менән ҡайтҡан. Фәлән байҙың ҡыҙын күҙ уңында тотоп торабыҙ. Һин нисек ҡарайһың шуға?» – тип әйтәйем. Шунан оло муллаға инеп сығайым. «Ғафар ҙур бол менән ҡайтҡан. Мәсетте яңыртырға ағас алып килә башланы. Тағы ла ағас әҙерләргә ҡушып ҡайтҡан», – тигән булайым.

Китә был. Бара ҡарт муллаға.

– Ғафар ҙур бол менән ҡайтҡан икән. Мәсетте яңыртырға ниәт иткән икән. Ағас ташый башланы. Тағы йөҙ бүрәнә әҙерләргә ҡушып ҡайтҡан, – ти. Ҡарт мулла аптырап китә.

– Кит, бушты һөйләмә!

– Ысын.

Ышанмай барып ҡарай мулла. Барһа, ысынлап та, бүрәнә ята мәсет янында. Иҫе китә мулланың.

Инде тире-ярысы хәҙрәткә бара.

– Бик ҙур ниәт менән ҡайтҡан бит әле Ғафар. Әйткәйнем: «Өйләнә һал», – тип. «Юҡ, өйләнмәйем әле. Мәсетте эшләтәһе бар», – ти ҙә ҡуя. Аҡсаһын тотоноп бөтмәҫ элек өйләнгәне арыу булыр ине. Былай үҙебеҙ фәлән байҙың ҡыҙын иҫтә тотоңҡорап торабыҙ тороуға. Уларҙан тире-яры, йөн-мөн алғаным бар. Күҙәтеп йөрөйөм. Һай-һай, шәп ҡыҙ! – ти тире-ярысы.

– Һуң, кем ҡустым, беҙҙең дә ҡыҙыбыҙ бар ҙа баһа, – ти хәҙрәт. Хәҙрәттең оло абыстайынан балаһы юҡ ине, ти. Йәше-

нән бер ҡыҙ тыуып, буй еткергән була. – Һин улайтып әллә кайҙағы фәлән бай ҡыҙын алып бирергә йөрөгәнсе, шул минең кыҙҙы ғына бирәйек. Абыстайҙар менән кәңәш итәйем дә, – ти.

– Ярай, абыстайҙар менән кәңәш ит тә оҙаҡҡа ебәрмәйек, бөгөн үк хәл итәйек, – тип тире-ярысы ҡыҫтап алып китте, ти.

– Туҡта. Бөгөн, бөгөн дә бит. Ни бит әле. Йә, ярар, тәүҙә аш һалдырайыҡ әле. Ит бешертәйек.

Абыстайҙарҙы саҡыртып ала ла хәҙрәт:

– Йә, тиҙ генә ит һалып ебәрегеҙ. Ҡунаҡтар килә, ти.

– Кем килә?

– Ҡарт мулла килә, шунан күршеһе менән йәш һалдат Ғафар – бөтәһе дүрт-биш кеше булабыҙ.

– Һуң, ниңә киләләр улар? – Оло ҡатын һораша. – Ниңә киләләр?

– Һуң, ана бит Ғафарға фәлән байҙың ҡыҙын димләйем, тип әйтә. Ана Шәһәрбаныуҙы бирһәк шуға, арыу булыр ине, тим.

– Һун, ул нисегерәк кеше?

– Ул ни, мәсет эшләтә.

– Кем?

– Ғафар. Ул бына тигән һалдат. Бол менән ҡайтҡан.

– Булмаҫ та.

– Була. Ана ята бүрәнәһе.

Оло абыстай килеп тәҙрәнән ҡарай – бүрәнә ята.

– Бәй, булдырабыҙ улай булғас.

Шулай һөйләшеп, ҡутарғанса аш һалып ебәрәләр. Аш ашауға ҡарт мулла, тире-ярысы, тағы әллә кемдәр килеп тә етә – биш-алты кеше булып китте былар. Ғафар аҙағыраҡ керҙе. Хәҙер инде ашарға ултырҙылар. Төп ҡоҙа булып Ғафарҙан әйеңге тире-ярысы килгән бит инде. Һүҙҙе шул башлай. Ул да, Ғафар, ысынлап та, аҡса менән ҡайтҡан икән, тип уйлай бит инде. Бер тинде ике тингә әйләндерергә өйрәнгән нәмә ни, быйың аҡсаһын эләктереп булмаҫмы, тип уйлай икән. Хәҙрәттең кыҙын шул уй менән өтә һуғып һората икән.

– Ҡыҙға ла әйтер кәрәк. Бөгөн булмағас, булманы инде. Иргәгенән дә ҡалдырырға ярамай. Оҙаҡҡа ебәрһәң, белеп ҡалһалар, әллә кемдәр ҡыҙ бирәбеҙ, тип килеп етерҙәр. Хикмәт шунда.

– Ярай. Хуп, – тип хәҙрәт быныҥ әйткәнен хуп ҡылды.

Иртәгеһен мәжлесте ҙурайтып ебәрҙеләр. Ижәп-никах ҡабул иттеләр. Икенсе өйҙә кейәү менән кәләш ҡушылды, бер көн торҙо былар, ике көн. Шунан Ғафар ҡыҙға әйтеп ҡуя:

Атайыңа әйт. Өфөгә барып, өҫ-башҡа алайыҡ. Быныһы өр. Әйт, күп итеп биш-әрлек аҡса менән унарлыҡ алып барһын. Минең аҡса йөҙлөк. Ундағы ваҡ-төйәк кибеттә йөҙлөктө ваҡлап булыҡ аҡса булыр тиһеңме? – ти (ҡайҙан йөҙәрлек аҡса булһын инде һалдат кешелә? Барлығы өс тәңкә генә бар ине, ти).

– Ярай, – ти кәләше. Шунан атаһына бара:

– Атай, кейәүең Өфөгә барып өҫ-башҡа алайыҡ, тип әйтә.

– Ярай, барайыҡ. Кейәү күсер булып ултырыр.

– Һәйбәт тоҡ алырға ҡушты. Бер шарты ла бар ине әле кейәүеңдең.

– Йә, әйт, ниндәй шарт һуң ул?

– Уның аҡсаһы бик эре икән. Эре аҡсаны ваҡлатып торғансы, ти, һиңә бишәрлек, унарлыҡты күберәк алырға ҡушты, ти.

– Ярар.

Бының ни хәйергә төшкән аҡсаһы күп. Китәләр былар өсәүләп ҡалаға. Барып, таныш хәҙрәткә барып төштөләр, ти.

– Шулайтып, ҡыҙ биреп, кәрәк-яраҡ алырға килдек әле, – ти Ғафарҙың ҡайныһы.

– Ярар, бик хуп, бик һәйбәт. Әйҙә, туғарығыҙ атығыҙҙы, – ти хужа. Шунан атты ҡапҡа эсенә индереп туғаралар былар.

Иртәгеһенә ҡала буйлап сығып китәләр. Иң тәүҙә хәҙрәткә тип, бик шәптән бер сапан алалар. Абыстайҙарға ла алалар. Ҡыҙға ла алалар.

– Ярай, был магазиндан ошо алған етер, – ти Ғафар. Йөҙҙән ашып китһә, ҡайны: «Кейәү, һин түлә», – тиергә мөмкин бит. Шуға йәһәтләп сығыу яғын ҡайғырта.

– Ярар, – ти ҡайны.

Икенсеһендә әҙерәк булғас та, өсөнсөһөнә алып китә һалдат. Һәр магазинда алынған нәмәләрҙең хаҡын ун биш-егерме тәңкәнән уҙғармай хисаплап бара. Тоҡ тулды, күтәрергә лә ауыр була башланы. Ҡыҙ:

– Бер юлы тегенселәрҙе һорашып ҡайтайыҡ, – ти.

Хәҙрәт әйтә:

– Ниңә бында ҡалдырырға? Саҡырып ҡайтайыҡ, – ти. (Элек тегенселәр йөрөп тегә торғайны.)

– Мин дә шулай уйлап торам әле, – ти Ғафар.

– Ярар.

Шулайтып, тегенсене күреп, саҡырып ҡайтырға юлға сыҡтылар. Ҡайтып аҙна самаһы торҙолар, бер ай торҙолар. Егеттең «аҡсаһы эре» булғас ни ашап-эсергә ҡыҙ гел атаһынан алып ҡайта. Шулай йәшәп торалар.

Башҡорт өйөндә карауат булмаған бит элек. Тәгәрләп йоҡламалы киң урындыҡ булған. Ҡайһы бер яҡта уны һике тиҙәр. Шуның ситенә, таҡта башын терәп һалыу өсөн, бүрәнәне дүрткеллләп сабып урҙа ҡуялар. Уны беҙ урындыҡ ҡаҙнаһы тибеҙ. Башҡа яҡтарҙа татарҙарҙағыса йөҙлөк тип әйтәләр. Ғафарҙар янында ла «ҡаҙна» тимәй, «йөҙлөк» тиҙәр икән. Бер ай самаһы үткәйне, хәҙрәт үҙенең алдында йөрөгән йомошсо малайға:

– Бар, еҙнәйеңә барып белеш. Йөҙлөгөн ватманымы икән? – тип һорарға ҡушып, Ғафарға ебәрә. Аҡса яғы таҡырайып киткәндер инде.

Теге малай килә. Сәләм биреп инә.

– Шунан, ни йомош, ҡәйнеш? – тип һорай Ғафар.

– Ней, хәҙрәт әйткәйне: «Йөҙлөгөн ватманымы икән? Аҡса кәрәк ине», – ти малай.

– Ә-әй, ҡәйнеш. Йөҙлөктө ватыр инем дә ул, ватһаң, апайыңа ятыр урын юҡ, – ти Ғафар тегегә.

– Аңламайым, – ти малай.

– Үәт, йөҙлөктө ватһам, апайыңа ятыр урын булмай бит, – ти урындыҡ йөҙлөгөнә һуғып. Малай төтәтеп ҡайта ла:

– Хәҙрәт, еҙнәм йөҙлөктө ватһам, апайыңа ятыр урын юҡ, – тип әйтте.

– Аңламайым, – ти хәҙрәт, – ни һөйләйһең? – ти.

– Бына еҙнәм ошолайтып урындыҡтың ситенә һуҡты ла: «Йөҙлөктө ватһам, апайыңа ятыр урын юҡ», – тине.

– Алай икән...

Хәҙрәт башын тотоп ултыра төштө, ти. Мәсет һалыу түгел, ни түгел, алдап ҡыҙын алыуына төшөндө лә, ти, Ғафарҙы саҡыртып алды, ти.

– Һуң, был ни эш?

– Һуң, хәҙрәт, һалдат кәсептә йөрөймө ни? Бына батша биргән өс тәңкә аҡса.

– Ә был бүрәнәне нисек алдың?

– Бүрәнә бер тәңкә тора.

Шунан инде нишләһен хәҙрәт. Ҡыҙының буйына ҡарап, хисап итеп, олатай булыр мәл етеп килеүен дә аңлай бит инде, кешенең көлөүен дә уйлай. Нишләһен. Ҡапҡаның икенсе яғындағы йортон Ғафарҙарға бөтөнләй бирҙе, ти. Аҡса биреп сыуаштарҙан бүрәнә алдыртты, ти. Мәсетен һалдырткандырмылыр, нисектер, ул хәтлемен белгән юҡ. Һалдырып өлгөрмәһә, аҙаҡ йәштәр клуб итеп ултыртҡандарҙыр әле. Ни өсөн тиһәң, оҙаҡламай революция сыҡҡан. Шулай итеп, хәйлә ярҙамында Ғафар һалдат бер бүрәнәгә бер ҡыҙ алған, ти.

## 91. Ике кәләшле хан

Борон-борон заманда бер ярлы ғына балыҡсы булған, ти. Уның яңғыҙ ғына ҡыҙы бар ине, ти. Бер саҡ һунарҙа йөрөгәнендә, ул бер ханды осратҡан. Һөйләшеп киткән, ти, былар. Бабайҙың ҡыҙы барын белгәс, хан уны үҙенә биреүен һораған.

– Алайым ҡыҙыңды. Тик ул миңә бер малай табып бирһен, – тигән хан.

Бабай риза булған.

Никахлашып, ҡушылғас, бер ай йәшәгәндән һуң, хан әйтмәй-нитмәй ҡайҙалыр сығып киткән, ти. Ул китеп, һигеҙ ай үтеүгә, ҡатындан бер ир бала тыуған. Малай бик көслө булып үҫә башлаған. Урамда уйнағанында, ҡулының елпеүенән үк малайҙар әллә ҡайҙа тәгәрәп барып ятыр булған, ти. Халыҡтың быға бик асыуы килгән. Бер көндө күрше ҡатындар уға:

– Яҡшы бала булһаң, атаң ташлап китмәҫ ине, – тип үсекләгәндәр, ти.

Малай ҡайтҡан да әсәһенең ҡыр быуынына төшөп, атаһын һораша башланы, ти. Әсәһе:

- Һинең атаң үлде, – тип, һис дөрөҫөн әйтмәй икән.

Шунан был малай әлегеләргә барып:

– Ниңә алдайһығыҙ, атайым үлгән бит, – ти икән.

Шунан тегеләр:

– Әсәйеңдән ҡурмас ҡыҙҙырт. «Ҡурмас ашағым килә», тиген. Әсәйең ҡыҙҙырмай ҡалмаҫ. Ҡыҙҙырғас, ҡурмасты ул һиңә ҡашыҡ менән бирер. «Ҡулың менән бир», тиген. Ҡулы менән биргән сағында, усын йома тот та һора атаңды. Ул усының яныуына түҙмәҫ, дөрөҫөн әйтер, – тиҙәр.

Малай ҡайта ла улар әйткәнсә эшләй. Әсәһе атаһының хан булыуын, үҙе гоманлы ҡалғас, юғалыуын әйтеп бирә. Шунан һуң малай атаһын эҙләп сығып китте, ти.

Ай бара, ти, йыл бара, ти, һис ҡалаға барып етә алмай, ти. Бара торғас, арып китә был. Бер көндө зыяратҡа инеп, яңы ғына ҡәбергә башын һалып ятты, ти. Ятыуы ла була, йоҡлап та китә. Бик ҡаты йоҡлап ята ине, ти, ниндәйҙер тауыштар ишетеп, уянып китте, ти. Ипләңкерәп ҡолаҡ һалһа, тауыш ҡәбер эсенән килә, ти. Күп тә уйлап тормай, егет ҡәберҙе ҡаҙа башланы, ти. Ҡаҙһа, ни күҙҙәре менән күрһен, унда тере ҡыҙ ята, ти. Егет ҡыҙҙы кәфене-ниһе менән бергә күтәреп сығарған. Былар танышып киткәндәр. Ҡыҙҙы хандың әмере буйынса терeләй күмгән булғандар икән. Ирле-ҡатынлы булып, былар бергә йәшәй башлағандар.

Егет, берәй кәсеп менән булашырға булып, эш эҙләргә тотонған. Шулай эш эҙләп йөрөй торғас, бер көндө ҡалаға килеп сыҡҡан. Ҡалаға килеп инһә, ике хан хеҙмәтсе өсөн талашалар, ти. Егет шуларҙың береһенә ялланырға була. Хан уны алып ҡайта ла һатыусы итеп ҡуя. Егет бик оҫта һатыу итә икән: бер ай эсендә бының йылдар буйы үтмәй ятҡан тауарҙарын һатып бөткән, ти. Был хәлде күреп, күрше хан да уны бер аҙна үҙенә ебәреп тороуын һораған. Уның да тауарҙары үтмәй, өйөлөп киткән икән, ти. Хужа риза булған.

Егет килеп эшләй ҙә башлаған, икенсе хандың да йылдар буйы үтмәй ятҡан тауары һатылып бөткән. Уныһы ул әле, шул

арала хандың бер вәзиренең ҡыҙы егеткә ғашиҡ булып та ҡалғырғән, ти. Ғишҡына түҙә алмай, ҡыҙ хат ебәргән: «Әгәр ҙә минең менән танышырға теләһәң, – тигән, – үҙ бүлмәмдән магазинға ер аҫтынан юл һалдырам», – тигән. Егет тә, ризалығын белдереп, хат яҙып ебәргән.

Егет менән ҡыҙ араһындағы бәйләнеште хан менән вәзир һиҙеп ҡалдылар ҙа икенсе кейем кейеп, магазинға килеп инделәр, ти. Инделәр ҙә, ти, тауар һайларға тотонған кеше булдылар, ти. Шул саҡ хат ташыусы ҡыҙ килеп:

– Егет, һине вәзирҙең ҡыҙы фәлән сәғәттә көтә, – тип әйткән дә ҡуйған, ти.

Хан менән вәзир шикләнеүҙәренең бушҡа булмауына ышанғас, ҡыҙҙы ла, егетте лә аҫырға булғандар, ти. Майҙанға халыҡты йыйғандар, егет менән ҡыҙҙы алып килгәндәр. Аҫыр ваҡыт еткән. Аҫыр саҡта ҡыҙ:

– Минең гонаһым күберәк, алдан мине аҫығыҙ, – тигән.

Егет:

– Мөмкин булһа, миңә һүҙ бирегеҙ әле, – тигән дә, тегеләр ризалыҡ биргәс, – мин ханда эшләнем. Мәгәр уның кем икәнен белмәй үләм, – тип һүҙ башлаған да үҙе хаҡында һөйләргә тотонған, атаһын эҙләп сәфәр сығыуын да әйткән.

Шунан хан аҫтырылыуға хөкөм ителеүсене үҙ улы булыуын таныған. Улын таныгас, шул турала бөтә халыҡҡа әшкәр итеп, ханлығын уға биргән, вәзир менән ҡоҙа булышҡан. Йәш ҡыҙ менән никахлашып, өс көн үтеүгә, һораша-һораша килә торғас, егетте тәүге ҡатыны килеп тапҡан. Егет был турала атаһы менән йәш кәләшенә һөйләп биргән. Уларҙың ризалығын алып, ике ҡатын менән йәшәй башлаған, ти. Хандарҙың ике ҡатын алыу ғәҙәте шул замандарҙан башланған, ти.

## 92. Ғафи улы менән Сафи улы

Элекке ваҡытта ике туған булған, ти. Уларҙың береһе – Ғафи, икенсеһе Сафи исемле ине, ти. Ғафиҙың бер улы, бер ҡыҙы, Сафиҙың улы ғына бар, ти. Ғафи ошо тирәләге бик күп заводтарға хужа ине, ти. Сафи сауҙа итә ине, ти.

Ғафи Сафиҙан олораҡ булған. Ул ҡартая башлай, ти, бер заман. Ни эшләргә? Улы йәшерәк, заводтарҙы тотоп тора алмаҫ, тип ҡурҡа, ти. Бишәр йөҙ кеше тотҡан заводтары булған, ти, шул тегенең. Уйлай-уйлай ҙа, әҙерәк ипкә килмәсме тип, улын башлы-күҙле итеп үлмәксе була. Ҡырмышланып, кешенән ҡапҡанып түктереп йыйған малдарын, заводтарын тырым-тырағай итеп бөтәр, тип ҡурҡа, ти, инде был. Улын саҡырып ала ла:

– Йә, улым, күҙ терәп торғаным – һин. Мин инде ҡартаймыммын. Һине башлы-күҙле итеп, тынысланғым килә, – тигән.

Улы кире һуғып тормаған.

– Был тирәлә мин алырҙай ҡыҙ юҡ бит әле, – тигән.

– Егет күҙе үткер була. Ситкә сығып ҡараштырһаң да ярар. Тик тиҙерәк бул, – тигән бай.

– Ҡайһылайыраҡ ҡыҙ ҡарармын һуң? – тип кәңәш һораған улы.

– Һиңә яраған миңә ярар инде, – тип кенә ҡуйған Ғафи.

Китә малай сығып, ҡыҙ эҙләп, кәләш күҙләп. Бер-ике мең саҡрым урай был, тик үҙенә оҡшаған ҡыҙ тапмай ҡайта. Сафи малайы көлә икән бынан.

– Ҡыҙҙы һайлап табаларҙыр шул? Маңлайҙағы күҙ менән ҡарап ҡына алырға малдыр шул ул? Күңел күҙе күрмәгәс, – ти икән.

Ғафи малайы бер ваҡыт ярлы ғына ауылға туҡтай. Бының машинаһын күрергә йыйыла, ти, халыҡ. Бөтөн халыҡ бының машинаһына иҫе китеп, йығылып ҡарап тора, ти. Бер ҡыҙ һирпелеп тә ҡарамай, һыуға төшөп бара, ти. Егеткә был оҡшай ҙа ҡуя. Ҡарап тора, ти, тегенең ҡайһы өйгә ингәнен. Өйҙө самалай ҙа был:

– Анау өйҙөң хужаһы өйҙәме икән? – тип һорай.

– Көтөүҙә ул, – тип яуаплай халыҡ. Ғафи малайы старостаны саҡырта ла көтөүсене ҡайтарырға ҡуша, ти. Көтөүсе ҡайтҡас, Ғафи малайы старостаға:

– Әйҙә шул ҡартҡа инәйек әле, ҡыҙы оҡшай миңә, – ти.

Инеп, йомоштарын әйтеп, һөйләшмәксе булһалар, ҡыҙҙың инәһе:

– Минең ҡыҙым ярлы, байға нисек бирәһең? – ти икән.

Егет:

– Миңә мал түгел, ҡыҙ кәрәк, – тигән.

Ҡарт өндәшмәй, ти. Егет машинаһынан ашамлыҡ-эсемлек индерә. Ҡыҙ ҙа ҡаршы түгел тегегә. Шулай булғас, ата-инәләре лә күнә. Бөтөн туған-тыумасаларын саҡырып, ҡунаҡ булдылар, ти, ике көн буйына. Өсөнсө көндө Ғафи малайы:

– Әйҙәгеҙ, бөтәгеҙ ҙә беҙгә, – тип алып та китә тегеләрҙе.

Ҡайтып етергә йөҙ саҡрым ҡалғас: «Көтөп торһондар», – тип сапҡын ебәрҙе, ти. Туйҙы көтә халыҡ тегендә. Унда бер ай ҡунаҡ булалар. Көтөүсене Ғафи малайы кире илтеп ҡуя.

Рәхәтләнеп, май эсендәге бөйөр кеүек, бер-ике йыл торғас, Ғафи ҡарт ул тағы саҡырып ала.

– Минең инде хәлдән килмәй, һин заводтарҙы үҙең ал, – ти ҡарт. Эшен, малын, заводтарын улына бирә лә был, тынысланып, күп тә үтмәй, үлеп китә.

Арыу ғына йәшәп ятҡанда, бер заводы туҡтай Ғафи малайының. Шуға яңы машина алыр өсөн, был ситкә китә. Киткән саҡта Сафи малайы:

– Еңгәмде уйнатам, күрерһең, – тип бәхәсләшеп ҡала.

Ғафи малайы инәһенә:

– Киленегеҙҙе ситкә сығарып йөрөтмәгеҙ, – тип әйтеп, тиҫкеп* китә.

Сафи малайы Ғафи малайы һеңлеһенең алтынға ҡыҙғанын белгән була. Килә лә был теге ҡыҙға:

– Икенсе килеүемә еңгәндең берәй билдәһен белеп ҡуй, бер мишәк* алтын бирәм үҙеңә, – ти.

Ҡыҙ риза була. Сафи малайының килеүенә ул еңгәһенең тәнендәге билдәһен белеп ҡуйҙы, ти. Еңгәһенең кендеге ҙур икән, ти.

Бына бер ваҡыт Ғафи малайы ҡайтты, ти. Сафи малайы быны ҡаршы алырға бара. Теге шунда әйтә лә һала:

– Еңгәмде уйнаттым, туған, – ти.

– Булмаҫ!

– Булды инде. Ышанмаһаң, тәнендәге билдәһен әйтәм: кендеге ҙур икән, – ти.

Ҡайталар былар. Сафи малайы өйгә инеп торманы, ти.

Ғафи малайы ҡайта ла, бисәһе менән һөйләшмәй ҙә, ти. Шулай бер-ике көн һөйләшмәйҙәр. Бисәһе ҡоро көн* мунса яға. Ғафи малайы бисәһен кәмә менән йөрөргә алып сыға. Күл бик ҙур булған, ти, ер сите күренмәй, ти. «Был бисәне ситкә ебәрһәм, кешегә була, үҙем бик яратам», – тип уйлай Ғафи малайы, шунан тегене һыуға төртә лә төшөрә. Үҙе ҡайтып китә.

Әмәлгә ҡалғандай, ҙур ағас йөҙөп килә, ти. Теге йәш ҡатын шуға йәбешкән, ти. Тулҡын ағасты ярға ҡағып сығарған, ти.

Кейем-ҡараһы ҡылҡаһы* ҡалмай йыртылып бөткән, ти. Үҙе иҫһеҙ ята икән, ти. Бер аҙ ятҡас, иҫ керә быға. «Нисек килеп сыҡтым икән?» – тип уйлай үҙе. Йөрөп ҡарай, ти. Аяҡ-ҡулы имен, ти. Шунан уйлап тора-тора ла уңға китә лә бара был. Килә торғас, бер үлеккә осрай. Үлек әфисәр кейемендә, ти. Үлекте сисендереп, кейҙе лә, үҙенең иҫке кейемен тегегә япты ла, ти, ары китте, ти.

Бара торғас, был бисә-әфисәргә шишмә тап була. Яр башында бер йорт ултыра, ти. Был бик шәп бер курорт, имеш, ти. Бында бер батшаның малайы дауаланып ята, ти. Бер әбей менән бер бабай дауалай икән тегене. Малайың – ҡоро һөйәк кенә, ти. Бисә-әфисәр килгәс, бабай:

– Ҡайҙан килеп сыҡтың? – тип һорай.

Бисә-әфисәр аптырап ҡалмай, килешмәгәнде килештереп, һөйләп бирә, ти:

– Мин, – ти, – шулай-шулай карапта әфисәр инем. Дауылдарға осрап, баттыҡ. Бер мин ҡотолдом, – тип ебәрә был бисә.

Шунан үҙен бик кеселеклегә ҡуйып фатир һорай. Тегегә фатир бирәләр. Ашарға ни теләһәң, шул бар, ти, бында. Аҫҡа

ҡырҡылған бисәгә килешеп китә. Төҫө сыға. Төҫ-баш алғас, бисә-әфисәр ҡарттан һорай ҡуя:

– Ни эшләп япа-яңғыҙ тигәндәй сит-ҡара ерҙә былай ятаһығыҙ?

– Шул-шул, батшаның улын дауалаған эш тә бит, – ти ҡарт, – тик бер ҙә ыратып булмай, – ти.

Бисә-әфисәр рөхсәт һорап, малайҙы барып ҡарай. Шунан урманға сығып китә. Ул үҙе бик шәп табипсы булған икән, ти. Ире ситтә йөрөгәндә, эшһеҙ ятыуҙан ялҡып, уҡыған булған, ти. Ярлы балаһы бит. Ярлы эшкә барлы була ул. Шунан ни был урманда төрлө үлән, тамыр, сәскә һуты йыйып ҡына дарыу яһай ҙа малайҙы үҙе дауаларға тотона. Теге малай биш көндә тороп ултырҙы, ти, ун көндән сығып йөрөй башланы, ти. Егерме биш көн тигәндә, был ҡатын малайҙы кеше итте, ти бит. Мөғжизә инде бер! Егерме алтынсы көндө, белгән кеүек, малайҙың ата-әсәһе килә, ти, бит. Малай түҙмәй, йүгереп ҡаршы барҙы, ти.

– Нисек дауаландың? – тип һоранылар, ти, тегеләр.

– Бер әфисәр дауаланы, – ти был.

Аптырап, иҫ-аҡылдары китә. Теге әфисәр-бисәнең ҡайҙан булыуын, нисек килеп сығыуын һорайҙар. Уның хәлен белгәс, үҙенән яман ҡайғырыштылар, ти. Өс көн бында түйғансы ҡунаҡ булғас, былар ҡайтмаҡсы булдылар, ти. Бисә-әфисәргә:

– Үҙең теләгән иң һәйбәт эшкә урынлаштырабыҙ. Беҙгә кил, – тип саҡырып киттеләр, ти.

Бисә-әфисәр тәүҙә күнмәне, ти, быларҙың шартына. Шулай ҙа, бер аҙ ваҡыт үтеү менән, түҙмәне, ти:

– Эшкә урынлаштырығыҙ. Тик ятып ялҡтым, – тип, үҙе килде, ти.

– Ниндәй эшкә теләйһең? – тип һорайҙар унан.

– Прокурор ит, – тип әйтте, ти, теге батшаға.

– Хөрт эш бит әле һиңә, – тип әйтә, ти, батша. – Башҡа берәй арыу эш һора, – тине, ти.

– Юҡ, мине шунда ебәр, – тип, бик ҡаты тора, ти, бисә-әфисәр.

Ебәрәләр быны эшкә. Был эшләй башлай. Әллә нисә йыллыҡ эш ҡағыҙҙарын аҡтарып сығара. Кемдең кем булыуына ҡарамай бөтәһен дә яңынан тикшерә. Шуны ишетеп, әлеге теге көтөүсе лә ошаҡ менән килә быға. Прокурорҙың үҙ ҡыҙы икәнен ҡайҙан инде белеү. Ҡалтырап-ялбарып тора, ти, был. Шунан ни бисә-әфисәр, бер нәмә лә һиҙҙермәй генә һөйләшеп-һөйләшеп, көтөүсене оҙатып ҡуя ла ирен, әлеге Ғафи малайын, саҡырта. Өҫтәл һуғып һорау ала, ти, тегенән.

– Көтөүсенең ҡыҙы ҡайҙа? Бисәң ҡайҙа?

– Көтөүсене белмәйем дә, күрмәйем дә. Бисәм дә юҡ, – тип ҡырталаша, ти, Ғафи малайы. Бик серкелдәп тормай прокурор-

бисә тегенең менән, тота ла яптыра. Ғафи малайының инәһен килтертә был.

– Киленеңде ҡайҙа иттең? – тип таптыра тегенән.

– Килен алғаныбыҙ юҡ әле, – тип киҫә һуға әбей ҙә.

– Тағы кемегеҙ бар? – тип һорай бисә-прокурор.

– Ҡыҙыбыҙ бар, – тип бәлтерәп төшә теге Ғафи малайының инәһе.

Быны ла ултыртып ҡуя ла, ҡыҙҙы саҡырта был. Һай-һай, әште тиҙ йөрөтә, ти, был. Ҡыҙ менән дә бик ҡаты һөйләшә. Ҡыҙ ни шыр инде... Донъя күрмәгән нәмә теге.

– Ағайығыҙ бисә алғайнымы?

– Алғайны.

– Ул ҡайҙа булды?

– Кәмәлә сығып киткәйнеләр, шунан ҡайтманы, – ти ҡыҙ. Инәһен, ағаһын сығарып, күҙләштереп һорай теге.

– Ҡайҙа бисәң? – тип хәҙер мәсьәләне асыҡ ҡуя бисә-прокурор.

Дөрөҫләп менән йөҙгә-йөҙ килтергәс, Ғафи малайы түҙмәй:

– Минең менән шундай-шундай хәл булды шул, – тип теҙеп һөйләй ҙә бирә.

Бисә-прокурор аптырап, иҫе-аҡылы китә. Бик асыуы килә.

– Кем әйтте һиңә? – тип таптыра был.

– Сафи малайы бит: «Еңгәмде уйнаттым», – тине.

Сафи малайын елтерәтеп саҡыртып килтертә бисә-прокурор.

– Һин Ғафи малайының бисәһен уйнаттыңмы? – тип һорай был Сафи малайынан.

– Юҡ, мин шаярттым ғына, – тип ауыҙ йыра, ти, тегенеһе. – Ғафи ағайым бисәһенә ышанмай, теләһә кем һүҙенә ышанғанға шулай иттем, – тип әйтә, ти. – Һеңлеһенән еңгәмдең билдәһен һорағайным. Ул: «Алтын бирһәң, әйтәм», – тине. Мин алтын бирҙем. Ул әйтте, – тип әйтә.

Бисә-прокурор теге ҡыҙҙан:

– Ниңә әйттең? – тип һорай.

– Алтын өсөн, – ти тегенеһе.

Сафи малайын каторгаға һөрҙөрттө, ти, бисә-прокурор, ҡыҙҙы ла ултыртып ҡуйҙы, ти. Ә Ғафи малайына:

– Һин ҡайтып тор ҡапылда. Һине, моғайын, атырға тура килер, – тип әйтте, ти.

Ғафи малайы күп итеп алтын биреп ҡалмаҡсы булған, ти, бисә-прокурор яҡын да килмәй, ти.

– Бөгөн кис көт, – тип кенә ҡуя.

Был ике жандарм эйәртә лә китә кисен Ғафи малайына.

Ашайҙар, эсәләр инде. Бисә-прокурор әйтә, ти, жандармдарына:

– Мин бөгөн бында ҡалам, һеҙ ҡайтығыҙ, – ти.

Бисә-прокурор үҙенең элекке бүлмәһенә инһә, үҙенең кейемдәре тора, ти. Кейә лә ята. Ишеккә әллә нисә рәт килеп китте, ти, теге Ғафи малайы. Бер килгәнендә бисә ишекте шар асты ла ебәрҙе, ти. Теге Ғафи малайы ҡаҡ салҡан иҙәнгә йығыла ла ҡуя. Ни әйтһәң дә, ир менән бисә бит. Улар араһында ни булмаҫ тиһең. Килешәләр, ти, былар ҙа. Бик шәп йәшәп киткәндәр, ти.

## 93. Ҡырҡтартмасы

Борон заманда ҡырҡтартмасы бер малай булған, ти. Ул ҡараңғы төшкән ваҡытта бер ауылға барып ингән, ти. Ауыл башынан төшөп, ҡунырға ла һораған, ти. Һис бер кеше ҡунырға индермәгән, ти. Көн һис түҙәрлек түгел, ямғырлы булған, ти. Ауылдың иң осона сығып һорағас та, хужа:

– Юҡ, индермәйем, – тип ҡысҡырған, ти.

Унын ҡатыны балаға сирләгән булған икән. Уныһы:

– Индер әле шул баланы. Бәлки, аяғы еңел булыр. Нисә көндән бирле сирләп интегәм, – тигән, ти.

Ҡырҡтартмасы малай инеп, сисенә башлағас та, теге ҡатын ҡыҙ бала таба. Иртәгеһенә был малайҙы саҡырып ала ла:

– Улым, риза булып, ҡыҙымдың үҫкәнен көтһәң, уны һиңә бирәм, – тигән, ти.

Малайға ул саҡта ун дүрт йәш була. Хужа ҡатыны малайға китер сағында ун биш һум аҡса бирҙе, ти.

– Һин ошо аҡса менән әүеш-тәүеш итеп, сауҙа итә башла. Беҙҙең бәхетебеҙ булһа, ул аҡса ишәйер, – тине, ти.

Малай күрешеп, сығырға ғына әҙерләнгәйне, хужа килеп инде, ти.

– Ошо яҙыуҙы юғалтма, балам, – тип малайға бер яҙыу бирҙе, ти.

Малай яҙыуҙы һалып алды ла сығып китте, ти. Йөрөй, йөрөй. Нисә йыл үтһә лә, һаман мандыманы, ти, был малай, ҡулында һаман шул тартмаһы, ти.

Бер ваҡыт бының бик эсе боша, нимә эшләргә лә белмәй, ти. Шунан ул, тик ултырғансы, тип тартмаһын аҡтара башланы, ти. Тартмаһын аҡтара башлаһа, иң аҫтан бер яҙыу килеп сыҡты, ти.

Егет икенсе көндө үк ҡыҙҙың ауылына барып етә. Барып инһә, уларҙың йортон таба алмай, бер кешенән һорашып, бынан биш йыл элек үк ауылдан сығып киткәндәрен белә.

– Улар ҡайҙа киттеләр һуң? – тип һорағас, теге кеше:

– Улар ҡалаға китте. Ҡыҙҙың атаһы шунда һатыу асты, – ти.

Ҡырҡтартмасы ҡалаға сығып китә. Ҡалаға барып ингәс, бер һатыусынан фамилияһы менән теге кешене һорай.

– Ул бөгөн һатыуға сыҡмай, – ти был һатыусы.

– Улайһа, йорто ҡайҙа уның? – ти егет.

Һатыусының өйрәтеүе буйынса, егет бер өйгә бара ла ишекте дөбөрҙәтә башлай. Бер йәш кенә ҡатын ишекте аса:

– Әйҙә, әйҙә, керегеҙ, – ти ҡатын. – Хужа хәҙер йоҡоһонан торор, ултырып тороғоҙ, – ти.

– Егет, ни йомошоң бар? – ти ҡарт.

– Бөгөн һатыуға бармайһығыҙмы? Мин бер аҙ тауар алырға тип килгәйнем, – ти егет.

– Юҡ, – ти хужа. – Бөгөн мин һатыу итмәйем. Бөгөн минең ҡыҙыма ҡоҙа килергә тейеш, – ти.

Тап шул саҡта бик матур ҡыҙ килеп инә. Егет бер һүҙ ҙә әйтмәй тора бирә, шунан кеҫәһенән сығарып бер ҡағыҙ бирә. Уҡып сыға теге, егетте өйрөлтөп-өйрөлтөп ҡарай ҙа ҡатынын саҡыра:

– Бына бит беҙҙең кейәү ҡайтҡан, – ти.

Шунан тиҙ генә теге килешкән кешегә: «Беҙ ул эштән кире дүндек. Ҡыҙыбыҙҙы кире ҡайтарабыҙ», – тип, кейәү булам, тип йөрөгән егеткә яҙыу яҙып ебәрәләр. Теге егеткә әҙерләнгән туйҙы был ҡырҡтартмасыға бора ла ебәрәләр.

Ярар, былар бергә тора башлайҙар. Береһен-береһе бик яра-ғалар. Бер нисә йыл торғас, был ҡыҙҙың әсәһе үлеп китте, күп тә тормай, атаһы ла әжәл ауырыуынан ауырый башланы, ти. Шунан ул ҡыҙын, кейәүен янына саҡырып ала ла:

– Ҡыҙым, кейәүем, – ти, – мин үләм инде, – ти. – Һеҙ, мин үлгәс тә, бик яҡшы тороғоҙ.

Шунан кейәүенә:

– Ғүмереңдә кеше менән кәрт уйнама, кеше менән бәхәсләшмә, – тигән дә ҡарт үлеп тә киткән.

Ҡырҡтартмасы менән ҡыҙ бик яҡшы торалар, бер-береһен үлгесә бик яраталар, ти. Шунан был егет бер иптәше менән юлға сыға. Һүҙ әйәрә һүҙ китә, былар бәхәсләшеп китә. Һүҙ ҡатындар тураһында була. Ҡырҡтартмасы әйтә:

– Минең ҡатыным бер ваҡытта ла кешегә ҡарамаҫ, – ти.

– Ҡарамаҫ бына. Күрерһең, ҡатының миңә ҡарар, – ти.

– Юҡ, – ти ҡырҡтартмасы, – ҡарамаҫ, – ти.

Әлеге иптәше, юҡ сәбәбен бар итеп, бара торған юлынан кире боролған.

– Ҡарамаҫ, тинең. Ҡатыныңдың ҡулындағы йөҙөгөн кейеп килермен яныңа, – тип киткән, ти, киткәнендә.

Иптәше ҡайтты ла сихырсыға барҙы, ти.

– Әбей, ни һораһаң, шуны бирермен, – ти. – Нисек булһа ла ҡырҡтартмасы бисәһенең ҡулындағы йөҙөгөн алып килтереп бир, – ти.

Ҡарсыҡ әйтә:

– Бишлек алтын бир, килтереп бирермен, – ти.

Бирә был. Шунан ҡарсыҡ сығып китте, ти. Ҡырҡтармасыларға барып инде, ти. Ҡырҡтартмасының ҡатыны баш йыуырға йөрөй, ти. Сихырсы ҡарсыҡ унын сисеп һалған йөҙөгөн эләктерә лә йүгереп сыға ла китә. Байға алып барып бирә. Бай йөҙөктө кейеп ала ла ҡырҡтартмасы янына бара.

– Бына күрҙеңме? Ҡатыныңды үпкән саҡта сисеп бирҙе, – тип маҡтанды, ти.

Ҡырҡтартмасы өндәшмәне, ҡайны карттан ҡалған малдарҙы һатып, ҡатыны янына ҡайтмай, эсеп бөтөрҙө, ти. Бер мәлде төн уртаһында килеп инә лә, бер һүҙ ҙә әйтмәйенсә, ҡатынын алып сығып китә. Тегене алып барып, зыярат кәртәһенә бәйләп ҡуя ла, үҙе китә лә бара. Был ҡатын илай-илай зыярат кәртәһендә төн сыға ла иртән ысҡынып, ҡайтып китә. Иренең нимәгә былай ҡыланғанына бер ҙә төшөнә алманы, ти, был.

Бәләкәй тынысланғас*, ҡатын атаһынан ҡалған мал менән һатыу итә башланы, ти. Ир юҡ. Яңғыҙы үҙен үҙе ҡарап тора, ти. Малы атаһы бар ваҡыттағы кеүек һаман артыу өҫтөндә, ти.

Нисә йылдар үткәс, күпмелер илдәр гиҙгәндән һуң, ҡырҡтартмасы тағы ла ошо ҡалаға килеп сыҡты ла, ти:

– Хеҙмәтсе кәрәкмәйме? – тип ҡала буйлап эш эҙләп йөрөй башланы, ти.

Бер кеше уға:

– Бер-ике йорт үткәс, бер бай ҡатын булыр. Шуға мал ҡараусы кәрәкме-ниме тип һөйләйҙәр ине һөйләүен. Һин шунда барып ҡара әле, – тине, ти.

Шул өйрәтеү буйынса, барып инһә, бер бик таҙа ҡатын килеп сыҡты, ти.

– Һеҙгә хеҙмәтсе кәрәкмәйме? – тигән, ти, ҡырҡтартмасы.

– Бер хеҙмәтсе кәрәк ине, – ти ҡатын.

Эшкә ала ҡатын быны. Бер-ике көн үткәс, ат егергә ҡушҡан, ти.

– Әйҙә, баҙарға сығайыҡ, – тигән, ти, ҡатын.

Был күсер булып ултырып, ҡатынды баҙарға алып сығып киткән, ти. Быныҥ өҫтө-башы бик туҙған була. Баҙарҙан ҡайтҡас, ҡатын мунса төшөрөп, күлмәк-ыштан, аяғына хром итектәр, өҫтөнә яҡшы кейемдәр кейҙергән, ти, тегенең. Ҡатын быны сәй эсергә лә саҡыра. Был бик ҡартайған була. Ултыра торғас, ҡатын һораша башлай.

– Ағай, хәҙер һин нисә йәштәһең? – ти.

Ир быға шулай тип яуап бирә:

– Йәшем минең бик ҡарт түгел. Мин нужа менән ҡартайҙым, – ти.

Ҡатын:

– Ағай, һинең бисәң, бала-сағаң юҡмы ни? Ниндәй нужалар күреп ҡартайҙың? – тип төпсөнә.

Шунан теге ҡарт һөйләй башланы, ти.

— Мин күрмәгән нужалар ҡалманы...

Теге ҡатын һорай:

— Һинең бала-сағаларың юҡмы ни? Ҡатының ҡайҙа?

— Балам юҡ ине, ҡатыным бар ине, — ти ҡарт. — Хәҙер бармы, юҡтырмы, белмәйем, — ти.

Ҡатын әйтә:

— Ни өсөн ҡатыныңдан киттең? Бик насар кеше инеме ни? — ти.

— Ҡатыным бик яҡшы ине, — ти ҡарт.

— Ни өсөн шәп ҡатынды ташлап сығып киттең һуң?

— Ҡайным миңә васыят әйткәйне, шул васыятты тотмай осраным. Бәхәскә инмә кеше менән, тигәйне. Мин бер иптәшем менән бәхәсләштем. Мин: «Минең бисә — бик шәп бисә, бүтәнгә ҡарамай», — тинем. Минең юлдашым: «Ҡарап ҡарарбыҙ. Ышанмаһаң, ҡулындағы йөҙөгөн алып килеп күрһәтермен», — тигәйне. Мин: «Ала алмаҫһың», — тинем. Теге кеше ҡатынымдың йөҙөгөн килтереп күрһәтте. Ғәрлегемдән ҡатынымды зыярат баҡсаһына бәйләнем дә үҙем киттем. Ҡатынымдың гәйебе булғанмылыр, юҡмылыр, белмәйем. Ул иҫәнмелер хәҙер, түгелдерме, уныһын да белмәйем. Сығып киткәндән бирле ситтә йөрөйөм, — тине, ти, ир кеше.

Ҡатын:

— Аллаға шөкөр, төн уртаһында зыярат кәртәһенә бәйләп китһәләр ҙә, мин көн итәм әле. Аҫҡа үлмәнем, — тип әйтте, ти.

Шунан теге ир быны барып ҡосаҡлап алды, ти.

— Һин минең ҡылған эштәрҙе бәхилләә, — тип ялбарҙы, ти.

Ҡатын ирен ғәфү итте, ти. Шунан теге ялғансы байҙы сөкөмгә тарттырып, әүәлгенән дә былайыраҡ иттереп йәшәп ятып киттеләр, ти.

## 94. Ғәни сауҙагәр менән вәзир

Борон заманда бер батшаның ҡалаһына Ғәни исемле сауҙагәр килгән, ти. Уның бик сибәр бер һеңлеһе булған. Ғәни сауҙагәр үҙенең кибетендә батшаларға тәғәйен һәр төрлө малдар һатҡан.

Көндәрҙән бер көндө батшаның ҡыҙы уның кибетенән бер әйбер алған. Әйбер бик оҡшаған — батша Ғәни сауҙагәргә үҙенең ҡыҙын бирмәксе булған.

Был батшаның яҡын күргән бер вәзире булған. Исеме Заһит ине, ти. Батша элек ҡыҙын Заһиткә бирергә вәғәҙә иткән булған. «Батшаның ҡыҙын Ғәни сауҙагәргә бирәләр» тигән хәбәрҙе ишеткәс, Заһит батшаға:

– Һинең ҡалаҙа торған Ғәни сауҙагәр зинасы икән, – тип әйткән.

– Уны ҡайҙан беләһең? – тип һораған, ти, батша.

– Мин уның ҡарындашы менән зина ҡылдым. Унда Ғәни ҙә ҡатнашты, – тигән, ти, вәзир.

Батша сауҙагәрҙе саҡыртып алып:

– Һин шундай эштәр ҡылаһың, имеш. Һин минең ҡаламда торма, хәҙер үк сығып кит, юҡһа үлтерермен, – тигән.

– Эй, бадишаһым, әгәр ул минең ҡарындашым менән зина ҡылған булһа, әйтһен, ҡарындашымдың янбашында миңе бар, ул ҡайһы яҡта икән? Әгәр ҙә дөрөҫөн әйтһә, мине үлтерерһең, ялған әйтһә, уны үлтерерһең, – тигән, ти, Ғәни.

Батша Заһитте саҡыртып:

– Ғәниҙең ҡарындашының янбашында миңе бар икән, ҡайһы янбашында икәнен дөрөҫ әйтһәң, Ғәниҙе үлтертәм, ялған әйтһәң, һине үлтертәм, – тине, ти.

Заһит был һүҙгә бик көйҙө, ти, һыраханаға килеп, башын түбән һалып, бик оҙаҡ уйланып ултырҙы, ти. Шул сәғәттә бер ҡарсыҡ ишектән кереп, Заһиткә:

– Ниңә былай ҡайғырып ултыраһың? – тине, ти.

– Эй, әбей, эш шулай: Ғәни сауҙагәр һеңлеһенең янбашында миңе бар икән. Уң яҡтамы, һул яҡтамы – шуны белә алмайым, шуға хафаланам, – тигәс, әбей:

– Һин ҡайғырма, уны белеүе бик анһат. Миңә ун алтын бирһәң, үҙем белеп килермен, – тине, ти.

Ҡарсыҡ, хәйерсе булып кейенеп, Ғәни сауҙагәр йортона барған, тик Ғәни сауҙагәрҙең һеңлеһе өйҙә булмаған. Хеҙмәтсе ҡыҙҙар был хәйерсегә бәләкәй генә икмәк биргәндәр, ти. Ҡарсыҡ был икмәккә риза булмайынса:

– Ниңә һин миңә был тиклем бәләкәй икмәк бирәһең? Был икмәк Ғәни ҡарындашының уң янбашындағы миңе хәтле лә юҡ бит, – тине, ти.

Хеҙмәтсе быға:

– Уның миңе уң янбашында түгел, һулында, – тине, ти.

Әбей ашығып ҡайтып, Заһиткә әйтте, ти. Заһит бик шатланып, әбейгә рәхмәт әйтеп, батшаға барып:

– Уның миңе һул янбашында, – тип әйтте, ти.

Ғәниҙе саҡырып алып, был турала әйткәс, Ғәни:

– Заһит дөрөҫөн әйткән, – тине, ти. – Тик Заһиттең ҡарындашым менән зина ҡылыуы дөрөҫ булһа, ҡарындашымдың гәүһәр ҡашлы йөҙөгө бар, шуны килтерһен, – тине, ти.

Батша Заһитте саҡыртып, был һүҙҙәрҙе уға еткерҙе, ти. Күп тә үтмәне, теге әбей килеп тә керҙе, ти, Заһит уға үҙенең ҡайғыһын һөйләп бирҙе, ти.

– Әгәр миңә йөҙ алтын бирһәң, йөҙөгөн килтереп бирәм, – тине, ти, әбей. Заһит риза булды, ти.

Әбей Ғәни сауҙагәр өйөнә китте, ти. Ул барып ингәндә, Ғәнизең һеңлеһе, йөҙөгөн бер яҡ ситкә һалып ҡуйып, ҡамыр баҫып тора ине, ти. Хәйерсегә саҙаҡа бирәйем тип, икенсе бүлмәгә сыҡҡан арала, ҡарсыҡ йөҙөктө урлап сығып та китте, ти.

Йөҙөктө Заһиткә биреп, йөҙ алтын алып, ҡарсыҡ өйөнә ҡайтып китте, ти.

Заһит йөҙөктө батшаға алып барып бирҙе, ти. Батша Ғәнизе саҡыртып алып, йөҙөктө күрһәтте, ти. Ғәни йөҙөктө таныны, ти. Батша үҙенең хеҙмәтселәренә, халыҡты майҙанға йыйып, дарға аҫырға ҡушты, ти. Ғәни, һушы китеп, өйөнә ҡайтып йығылды, ти. Быны күреп, ҡарындашы ла һушынан яҙҙы, ти.

Ғәни һушына килгәс, бөтә башынан үткәндәрҙе ҡарындашына яҙып ҡалдырҙы ла, үҙе майҙанға китте, ти. Ҡарындашы яҙыуҙы алып уҡығас, аптырашта ҡалды, ти. Тиҙ генә пар ат ектереп, ҡиммәтле әйберҙәр алып, Ғәнизе аҫа торған майҙанға китте, ти. Юлда барғанда, бер һыңар бирсәткә бәйләне, ти.

Ул барып етеүгә, майҙанға Ғәнизе аҫырға килтергәндәр, ти. Ҡыҙ, Ғәнизең яҙып ҡалдырыуы буйынса, Заһитте таныны, ти. Заһиттең боғаҙынан алып, батшаға алып китте, ти. Ҡыҙ батшаға:

– Бына ошо кеше минең һыңар бирсәткәмде урланы, – тип әйткән, ти. Заһит:

– Мин ул ҡыҙҙы тәү тапҡыр күрәм, уны белмәйем, – тине, ти.

– Өс тапҡыр ант ит! – тине, ти, батша.

Заһит өс тапҡыр ант итте, ти. Шунан һуң ғына ҡыҙ:

– Мин Ғәнизең ҡарындашы булам, – тип әйтте, ти.

Батша быны ишетеп, Ғәнизе тағандан төшөрөргә ҡушты, ти. О яуыз вәзир Заһит үҙе соҡоған соҡорға үҙе төшөп һәләк булды, ти. Батша Ғәнигә ҡыҙын биреп, ҙур туй яһаны, ти.

Ике-өс йыл үткәс, батша үлеп китте, ти. Батша үлгәс, Ғәни батша булып ҡалды, ти. Ике улдары булды, ти. Шат, рәхәт, бер ҡайғыһыҙ торалар, ти.

## 95. Хәйерсе ҡыҙы

Борон-борон заманда бер хәйерсе әбей булған. Уның бер генә бөртөк ҡыҙы булған. Ҡыҙының бер бите ай, бер бите ҡояш булған. Әбей үҙенең дә, ҡыҙының да тамағын хәйер һорап тапҡаны менән генә туйҙырған. Тамағынан ҡалған аҡсаға сүбәк һатып алған. Ҡыҙы был сүбәкте бер ергә лә сыҡмайынса, көндәр буйы ебәк итеп иләп ултырған. Кескенә ҡараңғы өйҙәренең эсен уның ай менән көн биттәре яҡтыртып торған. Хәйерсе әбей

ҡыҙына ҡарап туялмаған, уның матурлығына, оҫталығына ҡыуанып бөтә алмаған.

Көндәрҙең берейендә батшаның улдары уҡ атышҡан. Уҡтары кем өйөнә барып төшһә, шуның ҡыҙын алырға булғандар. Алты улының уғы икенсе алты батшаның өй баштарына төшкән. Етенсе улының уғы әлеге хәйерсе әбейҙең өйө башына төшкән. Батша малайы был ҡара мунса кеүек ҡараңғы, тәҙрәһеҙ өйгә уғын алырға инәйем тиһә, әбей индермәгән:

– Һиңә нимә кәрәк?

– Минең уғым һеҙҙең өйөгөҙҙөң башына төшкәйне. Шуға килдем.

– Батша улы була тороп, кеше, беҙҙең кеүек хәйерсе өйөнә төшөрөрлөк итеп, уҡ атырмы? Кешене мыҫҡыл итеп йөрөйһөң!

Батша улы яңынан төшөндөрөп һөйләп биргән. Төшөндөргәс тә, әбей һаман әрләшкән, ти. Ахырыһы, батша улы атаһын алып килергә мәжбүр булған, ти.

Батша килгәс, әбей, ҡурҡышынан, ҡолап киткән, ти. Батша өйгә инһә, ни күҙе менән күрһен, бер бите ай, бер бите көн ҡыҙ ҡара мунса өйҙө нурлап нурҙар сәсеп, сүбәкте ебәк итеп иләп ултыра, ти. Батша быға бик аптыраған, ти. Улы уғын алған да:

– Атай, мин был әбейҙең ҡыҙын алам. Һеҙ был турала нисек уйлайһығыҙ? – тигән.

Батша быға риза булған. Был көндө улар әбейгә күп итеп аҡса биргәндәр. Аҙналар буйы балта оҫталары ебәреп, әбейҙең өйөнән үҙенә хәтлем алтын юл һалдыртҡан. Һандыҡ-һандыҡ ебәк күлдәктәр биргән. Күп итеп өй йыһаздары, тағы әллә ни хәтлем донъя кәрәк-ярағы, мал биргән, ти.

Шулай итеп көндәр үткән, туй булырға ни бары ике көн ҡалған. Батша әбейе ҡыҙҙың әсәһен үҙ өйөнә алдырған. Туйға бер ай буйы әҙерләнгәнлектән, туйы бик шәп үткән. Шулай итеп, хәйерсе ҡыҙы батша килене булып киткән. Уны батша улы ла, батша үҙе лә, бисәһе лә бик яратҡандар. Уның ҡыланыштары, зиһенле, ҡул эшенә оҫта булыуы оҡшаған.

Батша, батша әбейе, ҡыҙҙың әсәһе – өсәү батша һарайында торғандар. Батша улы менән хәйерсе ҡыҙы алыҫ түгел бер ҡалала башҡа йәшәгәндәр. Татыу, талашмай-тартышмай, берберейен кәмһетмәй, ике йыл торғандар.

Бер ваҡытты батшаның өлкән улдары, бергәләшеп, хәйерсе ҡыҙын алған энеләрен ҡунаҡҡа саҡырмаҡсы булғандар. Үҙен алып киткәндәр, ҡатынын саҡырмағандар ҙа, саҡырырҙар ине, алты батша улы энеләренең хәйерсе ҡыҙын алыуына риза булмағандар. Унан уларҙың бик татыу йәшәүҙәренә ғәжәп иткәндәр, көнләшкәндәр. Көнләшеүҙән үтеп, быларға берәй зыян килтермәк булғандар. Шулай мәжлестә ултырған ваҡыттарында бер батша улы:

– Бына, хәйерсе ҡыҙҙары насар булалар. Алдашалар. Бер ниндәй ҙә байлыҡ күрмәгәнгә шулай бит улар, – тип һүҙ башлаған, ти.

Быға башҡалары ла ҡушылып, алтаулап тороп етенсе батша улының ҡатынын хурлағандар. Ләкин ул быға ғәрләнмәгән дә:

– Үҙе хәйерсе ҡыҙы булһа ла, һеҙ алған һуҡыр, сатан, сулаҡ батша ҡыҙҙарына бер ҙә алыштырмайым мин уны! – тигән, ти.

Мәжлестә ултыра торғас, былар ҡыҙып китеп еңешкәндәр, ти. Ахырҙа батшаның йәш килененән ниндәй ҙә булһа бер нәмә алып килеп, уның алдаҡсы икәнен күрһәтмәксе булғандар. Ике батша улы етенсе малайҙың өйөнә киткән, дүртәүһе был мәжлестә ултырып ҡалған.

Теге ике батша улы энеләренең йортона килгәндәр. Ҡапҡа төбөндәге һаҡсыға бер кисәк, ишек төбөндәгегә ике кисәк, бала ҡараусыға өс кисәк алтын биргәндәр ҙә, хәйерсе ҡыҙының иң затлы әйберҙәрен алып, етенсе малайға алып барып күрһәткәндәр. Етенсе батша улының быға бик асыуы килгән. Ысынлап та хәйерсе ҡыҙҙары ышаныслыҙ булалар икән, тип кәләшен һыуға ағыҙырға булған. Шул уй менән ҡайтып килеп, бер мискә эшләтергә ҡушҡан.

– Уның ике тәҙрәһе булһын, эсенә өс йылға етерлек ашамлыҡ һалырлыҡ булһын, – тигән.

Ә ҡатынына:

– Иртәгә сәхрәгә сығабыҙ. Һин күп итеп ашамлыҡ нәмәләре бешерт, – тип бойорған. Иртәнсәк иртүк тороп ат ектереп, нәмәләр тейәтеп, бер диңгеҙ ярына барғандар. Батша улы ҡатынына:

– Бына ошо мискә эсенә инеп ултырып ҡара әле, – тигән.

Ҡыҙ ултырған икән, батша улы бөтә аҙыҡты тултырған да, мискәне ҡапҡаслап, тәгәрәткән дә ебәргән. Ҡыҙ бикләнгән көйө ай аҡҡан, йыл аҡҡан. Уның һаман бер бите ай, бер бите көн нуры һибеп, күк диңгеҙҙе ялтыратып барған. Шулай итеп, меҫкен ҡыҙ, ни эшләргә белмәй, мискәһе менән аҡҡан да аҡҡан. Ахырҙа тулҡындар уны бер мәмләкәткә килтергән. Диңгеҙ буйында йәшелleккә күмелеп ултырған бер бик матур баҡса булған. Ул батшаныҡы икән. Ошо баҡсаның ҡараусылсы бабайы балыҡ ҡармаҡлап ултырған ваҡытта әлеге ғәжәп мискәне күреп аптыраған. Мискә бабайға яҡынайғандан-яҡынайған. Бабай тиҙ генә өйөнән тәртешкә алып килгән дә тегене яр ситенә тартып сығарып, асҡан. Асҡан икән – ҡыҙ атылып килеп сыҡҡан. Бабайға:

Ҡурҡма, бабай, мин әҙәм заты, – тигән дә башынан үткән бөтә ваҡиғаларҙы һөйләп биргән.

Бабайҙың быға исе киткән. Ҡыҙҙы алып ҡайтып, сәй эсереп, ялған документтар яһап, ҡыҙҙы батша әрмиәһенән ҡайтҡан улы

итеп кейендереп алған. Юкһа батша, ҡыҙығып, ҡатынын айырып ебәрер ҙә ҡыҙҙы алып ҡуйыр, тип ҡурҡҡан. Ҡыҙ һалдат кейемендә йөрөгән, батшаға ялсы булып көн күргән.

Көндәрҙең береһендә батша сәйәхәткә киткән. Батша китеү менән, ҡатыны әлеге һалдаттан мунса яҡтырған да уның менән мунса төшөргә иткән. Һалдат был эшкә күнмәгән. Батша ҡайтыуға ҡатыны ауырыған кеше булып, һалдат тураһында ялған һүҙҙәр һөйләп, уны төрмәгә ултырттырған. Ҡыҙ аптыраған, ни өсөн зинданға ултыртып ҡуйғандарын белмәгән.

Һалдатты төрмәгә япҡан көндән үк батша ауырып китә. Күрәҙәгә күренә. Күрәҙә:

– Һеҙҙең нахаҡҡа ғына зинданға ултыртылған бер кешегеҙ бар. Шуны сығарығыҙ, хәҙер төҙәлеп китерһегеҙ, – тигән.

Батша тиҙ генә уйлап, эште тиҙ генә хәл итә. Ҡатынын ҡыҫмаҡҡа алғас, ҡатын һалдаттың ғәйепһеҙ икәнен таный. Һалдатты зиндандан сығарып ҡараһалар, ул ҡыҙ булып сыҡҡан. Ҡыҙҙы күргәс, батша, сирен онотоп, терелеп киткән. Батша ҡыҙға батшалығын тәҡдим иткән. Ҡыҙ риза булмаған. Ҡаланан ҡалаға суд яһап йөрөү эшен генә үҙ өҫтөнә алған.

Ҡаланан ҡалаға суд яһап йөрөй торғас, был ҡыҙ үҙ ҡалаһына ҡайтып еткән. Ҡайтһа, был ҡыҙҙың әсәһе имен булған. Ҡыҙы өсөн ҡайғырып илай торғас, күҙҙән ҡалған булған. Ҡыҙ әсәһен таныған. Таныһа ла, иламаған.

– Әбей, илама. Һинең ҡыҙың табылыр. Бер сәғәткә сабыр ит. Кем үлтергәне, ҡайҙа ҡуйғаны – барыһы ла асыҡ булыр, – тигән.

Ҡыҙ залда булған бөтә кешегә суд яһап бөткәс, үҙен ире ни сәбәптән ағыҙып ебәргәнен белер өсөн, тағы суд яһаған. Ахырҙа ире үҙен ни сәбәп менән ағыҙып ебәргәнен белгәс, батшаның теге алты улын, һатлыҡ йән ҡарауылсыларын үлтерткән. Ирен айырым бер бүлмәгә ябып, үҙе икенсе бүлмәлә кейенеп, тәүҙә әсәһен ҡосаҡлап илап-илап иҫәнләшкән. Шунан кейәүен ҡосаҡлап иҫәнләшкән.

Шулай итеп, яңынан ҡауышып, матур донъя көтә башлағандар, ти.

## 96. Батша булған батша ҡыҙы менән батша малайы

Борон-борон заманда булған икән бер батша. Уның булған, ти, өс улы, иҫәр ине, ти, кесе улы. Был батша бер мәлдә өс улын, өс карап тауар тейәтеп, сит илгә сауҙаға ебәргән.

Барып еткәндәр тейешле урынға, өсөһөнә өс магазин алғандар, сауҙа башлағандар. Батшаның оло улдары аршынлап, аялап ҡиммәт хаҡҡа һатырға тотонғандар. Кесе ул, миңә сауҙа

итеп кенә файҙа сыҡмаҫ, тип, сауҙагәрҙәргә күмәртәләй-күмәртәләй тейәтеп, тауарҙы ике-өс көн эсендә оҙатып бөтөрҙө, ти. Шунан дуҫ-иш яһарға тип, ҡалаға сығып китте, ти. Ҡалала йөрөгәндә бер ҡарт осраны, ти. Ҡарт менән иҫәнлек-һаулыҡ һораштылар, бер аҙ һөйләштеләр. Был ҡарт әйтте, ти:

– Һинең төҫ-башың сит кешенекенә оҡшаған. Ҡайҙан килдең?

– Беҙ сауҙа өсөн өс туған килдек. Ағайҙар әле тауарҙарының әсмүхәһен дә һата алмайҙар, ә мин күмәртәләй һаттым да дуҫ-иш яһарға ҡалаға сығып киттем, – ти егет.

Ҡарт әйтә:

– Бына, улым, ни. Әгәр мине тыңлаһаң, бер кәңәш бирәм.

– Тыңлайым, – ти егет.

– Икебеҙгә бер карап яһатайыҡ. Һин аҡса бир.

Егет шунда уҡ аҡса сығарып бирҙе, ҡарт кеҫәһенә һалды, ти.

– Иртәгә ошо мәлдә ошо ергә килерһең, – тине лә үҙ юлына китте.

Егет тә ике ҡулын ике кеҫәһенә тығып, үҙе туҡтаған ергә китте, ти.

Иртәгеһен тағы ла шул урында осраштылар, ти. Иҫәнлек-һаулыҡ һораштылар, ти. Егет:

– Бабай, карап өлгөргәнме? – тигәс, бабай:

– Аҡса етмәне. Аҡса бир әле тағы, – тине, ти.

Егет тағы ла өс мең һум аҡса бирҙе, ти. Ҡарт:

– Балам, элекке һөйләшкәнсә, иртәгә ошо урынға килерһең, – тип, аҡсаны һалып алып, үҙ юлы менән китте, ти. Малай, аҡсаһы бөткәнгә, бойоғоп ҡына фатирына ҡайтты, ти.

Төн үтте, таң атты. Егет йәнә теге урынға килде. Таяғына таянып, бабай ҙа килеп етте. Иҫәнлек-һаулыҡ һораштылар, ти. Егет әйтте, ти:

– Карап өлгөрҙөмө?

– Юҡ. Аҡса етмәне, – ти ҡарт.

Егет әйтә:

– Аҡса бөттө. Карабың да үҙеңә булһын, аҡсаһы ла үҙеңә булһын. Миңә хәҙер бер нәмә лә кәрәкмәй. Әйҙә, килгән зыян миңә килһен.

Ҡарт әйтә:

– Һинең ағайҙарың бар бит, – ти.

Егет:

Мин уларҙан нисек һорайым? – ти.

– Эй, улым, улым, белмәйһеңме инде. Үҙебеҙҙә булмаған тауарҙы алдым, тиһәң, бер һүҙ ҙә әйтмәҫтәр, – тине, ти, ҡарт.

Егет оло ағайы янына китте. Ҡарт өйрәткәнсә:

– Ағай, мин үҙебеҙҙә булмаған тауар алғайным. Шуға аҡсам етмәне. Миңә бер өс мең һум аҡса бир. Әгәр бирмәһәң, аҡса ла, тауар ҙа бушҡа китә, – тине, ти.

Оло ағай бер һүҙһеҙ аҡса бирҙе, ҡустыһы уны ҡартҡа килтереп тапшырҙы, ти. Ҡарт өс мең тәңкә аҡсаны алып кеҫәһенә һалды ла:

– Иртәгә тағы ла ошонда осрашырбыҙ, – тине, ти.

Ҡарт үҙ юлы менән китте. Егет: «Ағайымдан да аҡса алып бирҙем, бабай ултыртмаһа ярар ине», – тип, борсола-борсола, йәнә фатирына ҡайтып китте, ти.

Төн үтте. Таң атыуға ашап-эсеп, кейенде лә ҡарт әйткән ергә китте. Кәкре таяғын таянып, ҡарт та килеп етте, ти. Егет:

– Карап өлгөрҙөмө, бабай? – ти.

– Юҡ әле, улым, аҡса кәрәк, – тине, ти, ҡарт тағы.

– Инде, бабай, миңә карабың да кәрәкмәй, аҡсаң да кәрәкмәй. Минең аҡсам бөттө, – ти егет.

– Һинең бит әле тағы бер ағайың бар? Унан алып бир, – тине, ти, ҡарт.

– Тағы нисек кешенән һорайым?

Ҡарт:

– Кисәгесә бар ҙа һора, – тине, ти.

Был егет икенсе ағаһына йүгерҙе. Ағаһы ҡырына ашығыс ҡына барып керҙе лә:

– Ағай, мин үҙебеҙҙә юҡ тауарҙар алдым. Миңә бер өс мең тәңкә бир. Әгәр ҙә аҡса бирмәһәң, минең тауар ҙа, аҡса ла китә, – тине, ти.

Ағаһы был һүҙҙе ишеткәс, тиҙ генә аҡса һанап бирҙе. Егет алды ла ҡарт янына китте, ти. Ҡарт аҡсаны алғас:

– Иртәгә тағы ошо урынға килерһең, – тине лә үҙ юлына китте, ти.

Егет үҙ алдына үҙе һөйләнеп ҡалды, ти.

– Ай-һай, бабай үҙемде төп башына ултыртты. Инде ике ағайҙың аҡсаһын алдыртты. Алдамаһа ярар ине, – тип үҙенең фатирына ҡайтып китте, ти.

Көн кис булды. Ашаны егет, эсте, йоҡларға ятты. Ятһа ла байтаҡ йоҡлай алманы. Төшөндә бер матур караптың һыу өҫтөндә йөҙөп йөрөгәнен, карапта йөрөү өсөн матур-матур ҡыҙҙар килгәнен күрҙе, ти. Егет уянып китһә, төн дә үткән, ти. Кейенде лә был егет, бабай ҡушҡан ергә китте, ти. Оҙаҡламай ҡарт та килеп етте. Хәл-әхүәлде һораштылар. Шунан егет:

– Карап өлгөрҙөмө, бабай? – тигәс:

– Өлгөрҙө. Эйҙә минең менән, – тине, ти, ҡарт.

Егет менән китәләр. Китеп бара торғас, ҡала ситенә килеп етәләр. Ситтән бер өйгә барып керҙеләр, ти. Тормошона ҡарағанда, был кешегә һис тә ун биш меңләп аҡса бирерлек түгел, ти. Ҡалай самауыр ҡайнатты, аш һалды. Ашап туйғандан һуң,

бабай ҡулына борго алды, борго ҡысҡыртып ебәрҙе. Килеп сыҡтылар, ти, капитан менән бер нисә матрос. Ҡарт менән егет капитан менән матросты эйәртеп карап янына китте, ти. Карапты күргәс, биргән аҡсалары өсөн ҡайғыһы онотолдо, ти, егеттең. «Бындай карапты төштә лә күргән юҡ ине», – тип уйлап ҡуйҙы, ти, эстән генә. Карап ҡиммәтле аҫыл таштар менән биҙәп эшләнгән. Ҡояш кеүек балҡып тора. Алтын бутал менән «Сәғәтенә егерме биш һум түләп йөрөтә» тигән иғланы тора. Байҙар килеп, нәүбәт менән йөрөп киләләр. Уларҙан аҡса ағыла ғына, ти. Шул арҡала егет ағайҙарынан алған аҡсаны тиҙ арала түләне, аҡса һаман килеү өҫтөндә, ҡайҙа ҡуйырға ла урын таба алмай башланы, ти, был.

Көндәрҙең бер көнөндә егет батша пристаненә килә. Пристангә килһә, батша үҙ батшалығында булмаған балҡып торған ҡояш кеүек нурлы, аҫыл таштар менән биҙәп төҙөлгән карап күргәс, иғланды ҡыҙыҡһынып уҡый ҙа егерме биш сәғәт йөрөргә килешә. Карапка килеп инеп, диңгеҙҙә рәхәтләнеп йөрөп ҡайтҡас, ҡыҙҙарын, килендәрен ебәрҙе, ти. Улар ҙа, көнтөн ҡайтмай, йөҙөп йөрөп ҡайттылар, ти. Батша ҡыҙы, карапты онота алмай, төнөн саҡ үткәрҙе лә, еңгәләренә әйтмәй, тағы карапҡа китте, ти. Барып керҙе. Өс сәғәт йөрөргә килешеү төҙөно. Өс сәғәт йөрөнө, ти. Шул өс сәғәттә егеткә ғашиҡ булды. Ҡайтаһы килмәне, ти. Егет менән һөйләшеп, карап менән ҡасып киттеләр, ти. Ҡыҙ булмағас, батша карапты ҡарарға кеше ебәрҙе. Ҡараһалар, караптың үҙе түгел, эҙе лә юҡ, ти. Карапты ҡараусылар ҡайтып батшаға был турала әйткәс, батша карапты ҡыуырға ҡушты, ти. Ҡыуып киттеләр. Ҡыуып сыҡҡандарын һиҙгәс, егет капитанга:

– Ошонда урман эсендә диңгеҙ ҡалаһы бар. Тегеләр урап ҡайтҡанса, шунда инеп торайыҡ, – тине, ти.

Карап теге ҡалаға боролғас, ҡыуғынсы караптар килеп үтеп гә киттеләр. Шунан һуң былар диңгеҙгә сығып юлланалар, ти.

Шулай итеп, бара торғас, бер ҡалаға килеп еттеләр. Пристандә туҡтанылар. Туҡтағандан һуң, был егет кәләше менән ҡала ситенә сыҡты. Шунда бер ҡартҡа барып, ҡатынын ҡалдырып тороу өсөн фатир алды. Ҡатынды ҡалдырып, үҙе икенсе ҡалаға эшкә китте, ти.

Егет киткәндән һуң ҡарт бер хәйлә табып үҙенең ҡатынын баҙарға ебәрҙе. Ҡатыны баҙарға киткәс, йәш ҡатындың серен алыу өсөн, килеп уның теҙенә таянды. Йәш ҡатын күсеп ултырҙы. Ҡарт уның артынан тағы барып ултырҙы, тағы таянды, ти. Ҡатын ҡартҡа:

– Кит, яуыз ҡарт. Нимә ҡыланаһың? Үҙең намаҙ уҡып йөрөйһөң, үҙең миңә үреләһең. Ҡуй был эшеңде. Әгәр ҡуймаһаң, хәҙер иремә хат яҙам. Уны ҡайтартырмын. Ул ҡайтҡас, үҙеңде үлтертермен, – тине, ти.

Был һүҙҙе ишеткәс, ҡарт бик ғәрләнде. Егеттән хат ҡына көтә башланы. Бер хат килгәс, уны үҙ ҡулына алды ла, йәш ҡатынға яла яғып, яманлап хат һалды, ти. Егеткә хат барып етте. Егет хатты уҡыны, ти. Хатта былай тип яҙылған ине, ти: «Һин, егет, миңә фатирға әллә ниндәй яуыз ҡатын ҡуйҙың. Миңә бөтөнләй төн йоҡоһо бирмәй. Эсә. Янына бөтөн зимагур йыйыла. Мине бимазалай. Йорттан бәрәкәт китте». Хатты уҡығас егет: «Шулай уҡ ысын булырмы икән?» – тип аптырап ҡалды, ти. Шунан күп тә туҡтап тормай, ҡатыны ҡалған ҡалаға китте, ти. Бына ул караптың тышына сығып ҡарап килә. «Әгәр ҡарттың әйткәне раҫ булһа, ул түҙә алмаҫ, диңгеҙ буйында гүләйт итер. Әгәр ҡарт әйткәндәр раҫ булмаһа, өйҙә торор», – тип уйлап килә.

Ҡатынға япа-яңғыҙына сит ерҙә, сит илдә, сит кеше өйөндә тороу бик уңайһыҙ булды, ти. Көнөлә ташып, ҡайтып-фәлән килмәйме икән тип, диңгеҙ буйына төшөп китте, ти. Иренең ҡайтып килгәнен күрҙе. Диңгеҙ буйында кәмә менән өс балыҡсы тора ине, был шул балыҡсылар янына йүгерҙе, ти.

– Эй, егеттәр, мине анауы карапҡа кәмәгеҙ менән алып барығыҙ әле, – тине, ти.

Ҡатын кәмәгә ултырып, балыҡсылар менән карапҡа ҡаршы йөҙөп бара башланы, ти. Ҡатыны ят ирҙәр менән кәмәгә ултырғанды күреп, егет: «Ҡарттың әйткәне дөрөҫ икән. Бөтөнләй бөткән икән был боҙолоп: берәү менән түгел, өс егет менән бер юлы типтерә икән», – тип уйланы ла, кеҫәһенән наганын алып, ҡатынына атып ебәрҙе – ҡатын әйләнеп барып һыуға төштө, ти. Егет карапты борҙо ла үҙе теләгән ергә китте, ти.

Балыҡсылар ҡатынды һыу төбөнән алып сыҡтылар. Уның үлмәгәнен белделәр ҙә бүлешә башланылар. Тауыш сыҡты, ти. Кәмәсе әйтә:

– Минең кәмәгә ултырмаһа, уны атмайҙар ине.

Сумып алыусы әйтә:

– Әгәр мин алып сыҡмаһам, ул һыу төбөндә үлер ине.

Өсөнсөһө әйтә:

– Әгәр мин бәйләмәгән булһам, ҡаны ағып, үлер ине.

Өс балыҡсы мәслихәткә килделәр ҙә ҡатынды күтәреп алып, больницаға алып килделәр. Духтырға тапшырҙылар, ти. Духтыр дарыуларға тотондо, ҡатын терелә башланы, ти. Шунан духтыр:

– Миңә кейәүгә киләһеңме? – ти.

Был әйтә:

– Юҡ. Минең ирем бар, – ти.

– Килмәһәң, мин һине үлтерәм, терелтмәйем, – ти духтыр.

Ахырҙа, ул духтырға ҡатын булырға ризалыҡ бирә. Һауығып, больницанан сыҡҡас, духтыр алып ҡайтырға теләй. Был ҡатын әйтә:

– Һинең менән никахлаша барырға минең кейемем юҡ, – ти.

Духтыр әйтә:

– Мин кейем алып ҡайтайым, – ти.

Ҡатын әйтә:

– Мин кеше алып биргән кейемде яратмайым. Үҙем алып ҡайтайым, аҡса бир, – ти.

Ҡатын аҡсаны кеҫәһенә һалды ла, магазинға барам, тигән булып, кварталдан кварталға йәшенә-йәшенә китеп, ҡаланан сығып ҡасты, ти. Шулай итеп бара торғас, ике көтөүсегә осраны. Былар янына ултырҙы, ти.

– Туғандарым, һеҙҙең әҙерәк ашамлығығыҙ юҡмы? – тине, ти.

Көтөүселәр кәзә һауып, һөт эсереп, икмәк ашатып, ҡатындың тамағын туйҙырҙылар, ти. Шунан ҡатын әйтте:

– Эй, ҡәҙерле туғандар. Мин ҡатындар кейемендә йөрөргә ҡурҡам. Берәйегеҙ кейемегеҙҙе бирмәҫһегеҙме икән? Мин һеҙгә һәйбәт кейемемде, аҡса бирер инем, – тине, ти.

Көтөүселәрҙән кейем алып кейгәс:

– Инде мин һеҙҙе күрмәнем, һеҙ мине күрмәнегеҙ. Бер кемгә лә әйтмәгеҙ, – тип кейенде лә китте, ти.

Көтөүселәр ҡайтҡас, инәләре әйтә:

– Был кейемде ҡайҙан алдығыҙ? Кемде үлтерҙегеҙ?

Көтөүселәр әйтә:

– Юҡ, үлтермәнек. Ни эшләп беҙ кеше үлтерәйек?

Шунан әсәләре сыбыҡлап алып китте. Көтөүселәр:

– Беҙ әйтмәҫкә һүҙ бирҙек. Кейемде алмаштырып алдыҡ. Быға өҫтәп егерме биш һум аҡса ла бирҙе. Әгәр беҙ һөйләһәк, һеҙ һөйләп бөтөн донъяны тултырырһығыҙ, – тигәс, әсәләре:

– Ярар, улайһа, һеҙ ҙә әйтмәгеҙ. Мин дә ҡабат өндәшмәм, – тине, ти.

Йәш ҡатын, көтөүселәр янынан киткәс, бара-бара бер ҡалаға барып етте. Ситтәге етем генә ҡарсыҡтан фатир һораны. Ҡарсыҡты, аҡса биреп, ашамлыҡтар һатып алырға ебәрҙе. Ҡарсыҡ барып, һәр төрлө ашамлыҡтар алып ҡайтты, ти. Ул үҙе быңдай ашамлыҡтарҙы өнөндә түгел, төшөндә лә күргәне юҡ ине, ти. Шуға аптырап:

– Улым, был хәтле әйбер алып, аҡса әрәм иткәнсе, бер бот алабута оно алһаҡ, күпкә етер ине, – тине, ти.

Ҡатын:

Ҡайғырма, әбей. Иҫән булһам, һине ризыҡҡа аптыратмам. Һәр саҡта ла мин һине онотмам, ярҙам итермен, – тине, ти.

Шулай итеп торһалар, көндәрҙән бер көндө ҡала өҫтөндә ҡара флаг эленгән, ти. Ҡатын әйтә:

Әбей, һеҙҙең илгә нимә булды? Ҡара флагтар эленгән, – ти.

Беҙҙең батшабыҙ үлгән. Алты көндән бирле батша таба алмайҙар, – тине лә, ти, ҡарсыҡ батша һайлаған ергә китте, ти.

Батша һайлаған ерҙә бөтә халыҡты йыйып, бер ҡош осоралар, ти. Шул ҡош кемдең башына килеп ултыра, шуны батша итергә тейештәр, ти. Ҡарсыҡ килгәс тә, теге ҡошто сөйәләр. Ләкин ул бөгөн дә бер кемгә лә ҡунманы, ти.

– Йыйынға килмәй ҡалған тағы берәйһе юҡмы? Берәйегеҙҙә ситтән килгән кеше юҡмы? Булһа алып килегеҙ, – тинеләр, ти.

– Миндә бик аҡыллы егет бар, – тине, ти, ҡарсыҡ.

– Тиҙ генә алып килегеҙ әле шуны, – тиешкәндәр.

Шунан һуң теге ирҙәр кейемендәге йәш ҡатынды алып киләләр, урынға ултырттылар. Ҡошто сөйҙөләр, ти. Ҡош быныӊ башына килеп ҡунды. Йыйылған халыҡ шау-гөр килә башланы, ти.

– Кейеменә ҡарағанда, батшаға ярарлыҡ түгел, – тип ҡысҡырыштылар, ти.

Шунан ҡошто тағы осорҙолар, тағы осорҙолар – алты рәт осорҙолар. Ҡош һаман йәш ҡатындан башҡаға ҡунманы, ти. Шунан йыйылған халыҡ күнде, ти.

– Ошонан артыҡ батша булыр кеше булмаҫ, – тип был йәш ҡатынды батша яһанылар, ти.

Был ҡатын батша булып, халыҡтарҙы гәҙел хөкөм итә башланы, ти.

Шулай йөрөй торғас, үҙенең йәш сағындағы кейемдәре менән рәсемгә төшөп, уны биш һалдат ҡулына бирҙе.

– Барығыҙ, фәлән ҡалалағы баҙарға китә торған юл ситендәге бағанаға ҡағып ҡуйығыҙ. Берәй кеше килеп, биш минут ҡарап торһа, шуны тотоп миңә оҙатығыҙ. Әүәл килер бер кеше, шунан килер өс кеше, унан килер тағы бер кеше, унан килер ике кеше, унан килер бер кеше. Ун кешене тотҡас, рәсемде алып ҡайтырһығыҙ, – тине, ти.

Һалдаттар, батша әйткәнсә, рәсемде элделәр, биш минут ҡараған кешене тотоп алып, оҙата барҙылар, ти. Иң аҙаҡ башына ҡабаҡ ҡабығы, өҫтөнә сепрә, бер аяғына итек башы, икенсеһендә быйма башы кейгән кешене тотоп алып, батша алдына алып барып баҫтырҙылар, ти. Батша судья кейеме кейеп сыҡты ла:

– Атығыҙ был зимагурҙы, – тигән булды, ти.

Был һүҙҙе ишеткәс, теге:

– Эй, бадишам, мине атмағыҙ. Минең бер кемдең дә малына тейгәнем юҡ, кеше кеҫәһенә тығылманым. Үҙемдең генә аҡсама карап эшләттем...

Шулай итеп, тотолоусыларҙы хөкөм итә башланылар, ти. Өс балыҡсыны ла килтерҙеләр, ти.

– Һеҙ шундай, шундай ҡатынды беләһегеҙме? – тигәс, балыҡсылар:

– Беләбеҙ, беләбеҙ уны.

Уны ҡайҙа иттегеҙ? Үлтерҙегеҙме?

Юҡ, юҡ. Балнискә илтеп һалдыҡ.

— Ә ниңә уның өсөн һуғышып торҙоғоҙ, йәрәхәтен тиҙерәк врач, больницаға оҙатманығыҙ? Уның ире барҙыр, тип уйламанығыҙмы? Ул ҡатын һеҙгә әллә килә, әллә юҡ. Шуны белмәй тороп, ниңә һуғышып ятаһығыҙ? — тип суд быларҙы һуғырға ҡарар итте, ти.

Хәҙер духтырҙы килтерҙеләр, ти. Духтырҙан судья һорай:

— Шундай, шундай бер ҡатынды дарыулап терелттеңме?

Духтыр әйтә:

— Терелттем.

— Һин уға нимә тинең?

— Юҡ, әйтмәнем.

Судья:

— Ә һин ул ҡатынды ҡайҙа иттең? Үҙеңә килмәгәс, үлтерҙеңме ни? Һиңә матур ҡыҙҙар, матур ҡатындар дарыуланырға киләләр. Уларҙың һиңә килергә теләмәгән береһен үлтерә барырһыңмы ни? Бына ҡайҙа бара һинең боҙоҡ уйың, — тип, судья духтырҙы егерме биш йылға хөкөм итте, ти.

Килтереп сығарҙылар ике көтөүсене. Был көтөүселәрҙән һорайҙар:

— Йә, шундай ҡатын менән һеҙ ҡасан кейем алмашып, уның ғамағын туйҙырып ебәрҙегеҙ?

Көтөүсе малайҙар:

— Юҡ, юҡ! Беҙ ундай кешене күргәнебеҙ ҙә юҡ, белмәйбеҙ ә, — тип тик торалар, ти.

Серҙе йәшереп, ныҡ һаҡлауҙары өсөн, был малайҙарҙы баштан-аяҡ кейендереп, ғүмерҙәренә етерлек алтын биреп, арҡаларынан ҡағып-һөйөп, йорттарына оҙаттылар, ти.

Шунан иң аҙаҡ тотолған егетте индерҙеләр, ти. Судья бынан һораны:

— Һинең ҡатының бармы, әскесе?

Ул:

— Ҡайҙан миңә ҡатын? Яраткан ҡатынымды атып үлтерҙем, — тине, ти. Был яуапты алғас:

— Ошонда тороп тор, — ти ҙә судья шундағы бүлмәләрҙең береһенә инеп китә. Ингәс, батша кейемдәрен кейә лә икенсе ишектән килеп сығып:

— Судья ҡайҙа? — тип һорай.

Егет әйтә:

— Анауы бүлмәгә инеп китте, — ти.

Батша барып ҡараған була ла:

— Юҡ бит унда, — ти. — Ҡатыныңды үлтергәс, әллә уны ла үлтерҙеңме? — ти. — Мин хәҙер үҙеңде үлтерәм, — тигәс, егет түшенәлек менән башын эйҙе, ти.

Шунан батша вәзирҙәрен саҡырҙы ла:

– Бына ошо эскесене алығыҙ. Мунсала йыуындырып, һәйбәтләп кейендереп алып ҡайтығыҙ, – тине, ти.

Егетте мунсаға алып баралар, сәс, һаҡалын алдылар, яҡшы итеп кейендерҙеләр ҙә, судҡа килтереп, бер бүлмәлә ҡалдырып торҙолар, ти.

Суд барған ергә ҡартты индерҙеләр, ти. Судья әйтте, ти:

– Фәлән ваҡытта бер егет һиңә ҡатынын ҡуйып киткәйнеме?

Ҡарт:

– Киткән ине.

– Һин уға ниндәй күҙ менән ҡараның?

– Мин уны яҡшы тәрбиә иттем. Үҙ балам кеүек тоттом.

Судья:

– Һин уның менән зина ҡылырға теләнеңме? Һинең менән зина ҡылырға теләмәгәс, һин уның иренә боҙоҡ хат һалдыңмы?

Ҡарт:

– Юҡ, юҡ! Нисек мин оло башым менән ялған эш эшләйем, – тине, ти. Шунан теге егетте керттеләр, ти. Судья:

– Ни өсөн ҡатыныңды аттың? – тип һораны, ти.

– Ҡатынымды бер ҡалала фатирға ҡуйып киттем. Бер аҙ ваҡыттан һуң йорт хужаһынан яман хат алдым. Хатта ҡатынымдың аҙыуы тураһында яҙылған ине. Шунан уның насарлығына түҙә алмайынса, ҡайтып киттем. Мин ҡайтып килгән саҡта, ҡатыным бер кешенең кәмәһенә ултырып, миңә ҡаршы килә башланы. Мин, көнләшкәндән, уны шул ерҙә аттым да йыҡтым. Ул диңгеҙгә төштө. Ҡатынды атҡас, карапты һаттым да эсеп бөтөрҙөм.

Судья ҡарттан:

– Шундай хаттар һалдыңмы һин? – тип ҡабаттан һораны, ти.

Ҡарт бер һүҙ ҙә әйтә алманы. Боҙоҡ уй менән ялған хат яҙғаны өсөн, ир менән ҡатын араһын боҙғаны өсөн, ҡартты аҫырға хөкөм ҡылдылар, ти.

Шунан судья егеткә:

– Һиңә лә шулай булыр! – тине, ти.

Егеттең баҫып торор хәле ҡалманы, стенаға һөйәлде, ти. Судья кереп китте, ҡатындар кейеме кейҙе лә егет янына сыҡты, ти.

Егет, башын түбән эйеп, бөгөн ни күрермен, тип торғанда, ҡатын килеп инеп:

– Башыңды күтәреп, миңә тура ҡара, таныйһыңмы? – тине, ти.

Егет башын күтәрҙе, ҡатынға ҡараны. Таныны ла:

– Эх, ҡатыным, минең ҡатыным икәнһең дә! – тип ҡатынды ҡосаҡлап, илап ебәрҙе, ти.

Шулай итеп, был батша үҙенең ҡатын икәнен белдергәс:

– Бына был егет минең ирем, фәлән батшаның малайы. Ҡабул итһәгеҙ, мине батшалыҡтан төшөрөп, уны ҡуйығыҙ. Ҡабул итмәһәгеҙ, мине төшөрөп, башҡа кешене һайлағыҙ, – тине, ти.

Ҡатын гәҙел хөкөм иткәнгә, уның фекерен яҡлап, ирен батша итеп һайланылар. Шунан бөтәһе лә рәхәт ғүмер һөрә башланылар, ти.

## 97. Ғәзиз

Борон-борон бер заманда бер сауҙагәр йәшәгән. Уның Ғәзиз исемле улы була. Тиҙҙән сауҙагәр, улын етем ҡалдырып, үлеп китә. Атаһы үлгәс, быларға ҡырҡ бур килә. Уларҙың һәр ҡайһыһы үҙен танытып инә:

– Мин һинең ағайың!

– Мин һинең иптәшең!

– Мин һинең яҡташың!

– Мин һинең ҡустың!

Бөтәһе лә Ғәзизгә:

– Һинең көнеләндә яулайыҡ, тип килдек, – тигән булалар. Көнө буйына ашайҙар, эсәләр. Кәрт уйнайҙар ҙа иҫереп бөткән Ғәзиздең бөтә байлығын отоп бөтөрәләр. Ғәзиз ятып йоҡлағас, ҡалған донъяһын тейәп алып китәләр.

Ғәзиздең инәһе ҡайғыра-ҡайғыра ла:

– Йә, килер ҡаза шуның менән бөтһөн, хоҙай бирер әле, – ти.

Бер ваҡыт быларға үткенсе сауҙагәрҙәр фатирға төшәләр. Ҡаруан башлығы:

– Атанан күргән уҡ юнған, әсәнән күргән тун бескән. Улыңды беҙҙең менән ебәр, байып ҡайтыр, – тигән.

Ғәзиздең инәһе риза булған. Китер алдынан улына:

– Үҙеңә ҡалған бол* бөтмәҫ борон ҡалын* һатып ал, – ти.

Егет бер бик һылыу ҡыҙҙы ҡалындыҡҡа һатып ала ла, инәһендә ҡалдырып, каруансыларға эйәреп китә.

Егет киткәс, ҡыҙ ҡәйнәһен йыуындыра, кейендерә, ҡәҙер итә. Бер көн ул ҡәйнәһенән:

Был ерҙә алыпһатар бармы? – тип һорай.

Бар, – ти ҡәйнәһе.

Ҡыҙ, ҡалған аҫыл таштарҙы һатып, аҡса итеп ала ла икенсе көндө:

Оҫта бармы? – тип һорай.

– Бар, – ти ҡәйнәһе.

Оҫта тапҡас, ҡыҙ:

– Ошо ергә батшаныҡынан матурыраҡ итеп йорт һал, – тип ҡуша.

Бик матур йорт һалына. Йорт һалынғас, ҡыҙ ҡәйнәһенән:

– Бер әҙәм дә алдына сыға алмаҫлыҡ уҫал кеше бармы? – тип һорай.

– Бар, – ти ҡәйнәһе.

Ҡыҙ, уҫал кешене килтереп, йорттоң алдына ҡарауылға ҡуя.

Бер көндө ҡаланың башлығы, урам буйлап йөрөп ятҡанда, өсөнсө ҡатта йөн иләп ултырған бик һылыу ҡыҙҙы күреп ҡала ла ғашиҡ була. Күп тә үтмәй, ҡыҙға яусы килеп төшә. Тик яусыны ҡарауылдағы кеше һис тә керетмәй, яҡыныраҡ килһә, иҫен китәрә һуға ла ҡуя, ти. Яусы кире ҡайта. Ҡала башлығы тағы ла яусы ебәрә, тағы шул уҡ хәл ҡабатлана. Ахыры ҡала башлығы хәйләләргә була. Ҡыҙҙың иренә инәһе булып хат яҙа: «Һинең ҡалындығың бик боҙолған кеше булып сыҡты. Тиҙерәк ҡайт», – тип яҙа.

Ғәзиз ҡайта. Ҡайтһа, элекке өй юҡ, өр-яңы өй ултыра. Ҡыҙ ҡаршы алырға сыҡһа, егет ҡылысы менән ҡыҙға саба ла туғайға алып барып ташлай. Утынға килгән бер бабай, ыңғырашҡан тауыш ишетеп, ҡыҙҙы табып ала. Алып ҡайтып, яраларын дауалай. Ҡыҙ бик һылыу була. Ҡарт ҡыҙға үҙе өйләнмәксе була. Ҡыҙ төнө менән бабайҙан ҡасып китә. Бара торғас, ағалы-энеле ике егеткә осрай. Егеттәрҙең икеһе лә ҡыҙға ғашиҡ була, мин алам да, мин алам, тип ыҙғышып китәләр. Аҙаҡ килеп:

– Булмағас, беребеҙгә лә булмаһын, – тип, ҡыҙҙы йәшниккә һалып, һыуға ташлайҙар. Ҡыҙ:

– Ҡайһығыҙ мине йылға уртаһынан ала, шуға барам, – ти.

Йылға үҙе бик киң, үҙе бик ҡурҡыныс була. Йәшник һыу уртаһына барып етә, ике егеттең береһенең дә йөрәге етмәй.

Ҡыҙ дарья буйлап аға ла китә. Оҙаҡ ҡына ваҡыт үткәс, йәшникте бер балыҡсы күреп ҡала ла ярға сығара. Боронғо байҙарҙың хазинаһы ағып килә, тип уйлай. Асып ебәрһә – ҡыҙ. Балыҡсының ҡыҙҙары юҡ икән. Ул бик ҡыуана.

– Ҡыҙыбыҙ булырһың, – тип ҡыҙҙы алып ҡайта.

Күп тә үтмәй ҡыҙға йәнә яусылар килә башлай. Ҡыҙ үҙенең ирен онота алмай. Яусылар бик ҡаңғырта башлағас, тағы ҡаса.

Ҡасып китеп бара торғас, ҡуй баҡҡан ергә килеп сыға. Ҡуйсы ла ҡыҙҙы ҡатынлыҡҡа алмаҡсы була. Ҡыҙ тағы ҡаса.

Ҡасып китеп бара торғас, бер ҡалаға килеп инә. Ҡала уртаһында күп халыҡ йыйылған да бер ҡош осора икән. Ҡош бәхетле кешегә генә ҡунырға тейеш икән. Кемгә килеп ҡунһа,

шул кеше батша булып һайланырға тейеш икән. Ҡыҙ килеп етер-етмәҫтән, әлеге ҡош осоп килгән дә уның иңбашына ҡунған да ҡуйған. Алама ғына кейенгән була бит инде ҡыҙ. Быны тотоп алып туҡмап-туҡмап, ситкә ҡыуалар ҙа ҡошто тағы осоралар. Ҡош әҙләп килеп йәнә ҡыҙҙың иңбашына ултыра. Ҡыҙҙы тотоп алып, мунсаға бикләп, ҡошто тағы осороп ебәрһәләр, ҡош, мунса төнлөгөнән инеп, тағы ҡыҙға ҡуна.

— Ярар, батша булырға уға яҙғандыр инде, — тип ҡыҙҙы батша итеп ҡуялар.

Батша булып алғас, ҡыҙ шундай бойороҡ бирә:

— Кем минең һүрәтем эргәһенән ауыр көрһөнөп, йәш ҡойоп илап уҙа, шуны минең янға килтерегеҙ.

Шулай ти ҙә ҡыҙ, үҙенең кәртинкәһен кеше күп йөрөгән ерҙәргә элдереп, ҡарауылдар ҡуйҙыра.

Бер көндө берәү туҡтай ҙа кәртинкәгә ҡарап ауыр көрһөнөп ҡуя. Ул кешене шунда уҡ батша янына килтереп ябып ҡуялар. Икенсе көндө тағы берәүҙе ябып ҡуялар. Өсөнсө көндө ике егетте, дүртенсе көндө бер бабайҙы, бишенсе көндө йәнә бер егетте тотоп алып килеп, ябып ҡуялар. Иң аҙаҡтан Ғәзиз килә. Кәртинкәгә ҡарауы була, күҙҙәренән йәштәр тәгәрләй. Уны ла тотоп ябалар.

Хәҙер был ябылған кешеләрҙең берәм-берәм һорау ала башлайҙар. Беренсеһенән һорайҙар:

— Кәртинкәне күргәс, ни өсөн көрһөндөң?

— Мин был ҡыҙҙың өҫтөнән иренә ялған хат яҙғайным. Ире уны үлтерҙе, — ти.

Быныһы ҡала башлығы булып сыға инде. Икенсеһе әлеге бабай була:

— Мин уны урмандан табып алып ҡайтып, өйләнергә уйлағайным, ҡасты, — ти.

Шунан теге бер туған ике егеттән, үҙенә ҡыҙ иткән бабайҙан, ҡуйсынан һорау алып бөткәс, сират Ғәзизгә килеп етә:

— Минең ҡатыным ине ул. Кеше һүҙенә ҡарап, мин уны сабып урманға алып барып ташланым. Үҙ ғәйебемде белгәс, яраларына берәй төрлө дауа табып, терелеп-фәлән китмәнеме икән, тип эҙләргә сыҡҡайным. Бында килгәс, һүрәтен күрҙем дә илап ебәрҙем, — ти.

Шунан ҡыҙ ҡала башлығын төрмәгә ябып ҡуйырға ҡушты, балыҡсы ҡартҡа күп итеп аҡса биреп ҡайтарҙы, ә бүтәндәрен, ғәйептәрен таныгандары өсөн, ирекка сығарҙы, Ғәзизгә үҙен таныпты, ти.

— Мин һине артыҡ ғәйепләмәйем, һин кеше һүҙенә ышандың, сабырлығың етмәне, — тип үпкәләп алды ла шунан, ҡауышып, ирен үҙенең урынына батша итеп ултыртты, ти.

Бөгөн барып, кисә генә килдем, һәләк һәйбәт йәшәйҙәр.

## 98. Изге ҡатын

Элекке заманда бер һатыусы булған. Уның алтын сәсле, ҡыйғас ҡашлы бик матур ҡатыны булған. Ул ҡатынға берәүҙең күҙе төшкән. Бер ваҡыт сауҙагәр икенсе бер ҡалаға һатыу итергә сығып киткән. Сауҙагәр киткәс, көндәрҙән бер көн ҡатынға күҙе төшкән кеше килеп, үҙенә алырға һораған. Ҡатын барырға риза булмаған. Шунан ул кеше:

– Ирҙәр менән зина итте, – тип, ялған шаһиттар яллап, ҡатынды ҡазыйға алып барған.

Ҡазый, ул ваҡытта йола буйынса, ҡатынды таш менән атып үлтерергә, тип хөкөм сығарған. Шунан һуң йәлләттәр* ҡатынды тау башына алып барып, соҡор ҡаҙып, биленән түбән ергә күмеп, таш менән атҡандар. Таш менән атҡас, ҡатын иҫтән яҙған, бөтөн тәне ҡанға сумған. Шуға уны үлде тип ҡалдырып киткәндәр.

Бер нисә сәғәт ятҡас, ҡатын, иҫенә килеп, ҡаты тауыш менән ҡысҡыра башлаған. Ул юлға алыҫ булмаған икән, ти. Юлдан килә ятҡан берәү уның тауышын ишетеп, килеп биленән ергә күмелеп, бөтөн тәне, тирә-яғы ҡан менән тулған бер ҡатынды, күрә лә:

– Эй, ҡатын, һине ни өсөн былай ғазаплайҙар? – тип һорағас, ҡатын башынан уҙған ваҡиғаны һөйләп бирә.

Был кеше ҡатынды йәлләп, ерҙән ҡаҙып сығарып үҙҙәренә алып ҡайтып китә.

Тәрбиә ҡыла торғас, ҡатын тиҙҙән һауығып, бик матурайып китә. Ҡатынды алып ҡайтҡан кешенең бер хеҙмәтсеһе булған. Йәш ҡатынға бының күҙе төшөп, уны үҙенә ҡаратыу маҡсатына ирешергә уйлаған. Ҡатын риза булмаған. Хеҙмәтсе асыуланып, бер төндә хужаһының бишектәге балаһын сала. Ҡанын тамыҙа-тамыҙа, ҡатын ятҡан урын аҫтына баланы салған бысаҡты ҡыҫтырып ҡуя. Хужа ҡатыны тышҡа сығырға булһа, урындарына бер нәмә суп-суп итә. Шәм яҡтыртып ҡараһалар, ни күҙҙәре менән күрһендәр, бишектәге йәш бала салынған. Ҡаны тама-тама теге ҡатын ятҡан яҡҡа киткән. Барып ҡараһалар, ҡатындың урыны аҫтында ҡанлы бысаҡ ята. Шунан ҡатынды уятып:

– Ниңә баланы салдың? – тип һорайҙар.

Ҡатын:

– Салманым, – тип әйтеп ҡараһа ла, хужа ҡатыны сыҙамай быны туҡмарға тотона, ире туҡматмай алып ҡала.

– Иртәгә, таң атҡас, ҡарарбыҙ, – тип йоҡларға яталар.

Иртә менән торғас, хужа ҡатынды ашатып, эсереп, ҡулына алтын биреп:

– Мә, туған, ошоно ал да сығып кит. Атыу минең ҡатын берәй нәмә эшләтер, – ти.

Ҡатын ни эшләһен, риза була ла сығып китә. Бер нисә көндәр барғас, күрә: бер ерҙә бер кешене туҡмайҙар. Туҡмай торғас, теге кешенең иҫе китеп, бер аҙ ятҡас, тағы аңы башына килә. Унан һуң тағы туҡмап, иҫен китәреп ташлайҙар. Теге ҡатын ситтән ҡарап тора-тора ла теге кешене йәлләп:

– Ниңә былай уны туҡмайһығыҙ? – тип һорай.

Туҡмаусылар:

– Был кешелә беҙҙең алтыныбыҙ бар. Ул алтындарыбыҙҙы табып бирмәй. Беҙ уны шуның өсөн туҡмайбыҙ, – тигәндәр.

Изге ҡатын:

– Әгәр ҙә мин ул ярлы кеше өсөн ҡырҡ алтын бирһәм, һеҙ уны ебәрерһегеҙме? – ти.

Туҡмаусылар:

– Алтын бирһәң, ебәрербеҙ, – тиҙәр.

Шунан был изге ҡатын үҙендә булған ҡырҡ алтынды бирә. Таҡмаусылар ҡайтып китәләр. Туҡмалыусы бер аҙ ятҡас, аңы башына килә лә тороп ҡарай. Янында бер сибәр ҡатын тора. Туҡмалыусының шунда уҡ ҡатынға күҙе төшә лә уны үҙенә алмаҡсы була. Ҡатын риза булмай, ҡасып китә. Туҡмалыусы уның артынан эйәрә.

Ул ергә диңгеҙ алыҫ булмаған. Унда бер карап менән сит батшаға сығып китеүселәр әҙерләнеп торғандар. Ул карапта бер капитан менән бик күп матрос булған. Теге туҡмалған кеше:

– Минең ҡатыным ҡасты, тотоп бирегеҙ, – тип ҡысҡыра.

Тотоп бирергә теләүсе булмағас, ахырҙа теге ҡатынды капитанға һата. Капитан ҡатынды карапҡа алып инә. Юлға йүнәләләр. Бер нисә көндәр барғас, ҡатынға капитандың күҙе төшә лә ул да уны үҙенә алырға уйлай. Ҡатын бер ҙә риза булмай. Булмағас, капитан, бер һүҙ ҙә әйтмәй, ҡәҙерләп кенә алып бара. Бер ни ҡәҙәр замандан һуң карапта булған бөтә кеше ҡатынға ғашиҡ була. Барыһы ла үҙҙәренә алырға теләй, һәр береһе үҙенә һората. Изге ҡатын берәүгә лә риза булмағас, уны караптың башына сығарып һыуға ташларға булғандар. Ташларға йөрөгән ваҡытта, бик ҡаты ел-дауыл сығып, бөтөн карап халҡын һыуға алып ташлай. Бары теге ҡатын ғына ҡала. Бер нисә көндән һуң ҡатын бер ҡала янына килеп сыға ла ирҙәр кейеменә кейенеп, ҡаланың ҡазыйы янына барып, мулламын, тип үҙенә урын һорай. Ҡазый ҙа бер ҙә һаранланмай, урын биреп, бергә тора башлайҙар. Был ерҙә ҡатынға дауаланырға килгән кешеләр барыһы ла төҙәлеп ҡайталар. Ҡатын бөтөн донъяға мәшһүр табибә булып танылa. Уның даны хатта үҙҙәре яғына ла ишетелә.

Көндәрҙән бер көндө ҡатындың ире ҡайта. Ҡайтһа, ҡатыны юҡ. Ул йөрөп, кешеләрҙән һораша башлай. Кешеләр:

– Һинең ҡатының зина итеү сәбәпле, таш менән атып үлтерелде, – тип әйтәләр.

Ул эш шул көйө ҡала.

Бер ваҡыт изге ҡатынды зина итте, тип таш менән аттырған кеше бик ҡаты ауырыу менән ауырый. Табипсы мулла тураһында ишетеп, унда барып дауаланырға теләп, ҡатындың ире сауҙагәргә ялланып китә. Бер көн буйы барғандың һуңында бер ауылға етеп, фатирға төшәләр. Йорт хужаһы ҡатынды үлемдән ҡотҡарып та, аҙаҡ, хеҙмәтсеһенең үсләшеүе арҡаһында, уны өйөнән ҡыуған кеше булған. Баланы һуйған хеҙмәтсе ауырый икән. Иртән торғас, уны ла изге ҡатындың дауаһына алып китәләр.

Бер көн буйы барғас, тағы бер ауылда бер кешегә төшәләр. Теге ҡатынды капитанға һатып ебәргән кешенең өйө икән. Ул да бик ҡаты ауырыу менән ауырый икән. Иртә менән торғас, сауҙагәр уны ла алып китә.

Бер нисә көндәр барғас, изге ҡатын торған йортҡа барып төшәләр. Халыҡ бик күп булыу сәбәпле, уларға нәүбәт теймәй, ике көн шунда яталар. Бер көн халыҡ юҡ ваҡытта сауҙагәр изге ҡатын янына барып үҙҙәрен ҡарауҙы һорарға инһә, былар бер-береһен танышып, һыҡташып күрешәләр. Унан һуң ауырыуҙарҙы килтерәләр. Изге ҡатын ни күҙе менән күрһен, өсәүһе лә үҙенә енәйәт эшләүселәр булған. Изге ҡатын уларҙы бер бүлмәгә сығарып, ни сәбәптән ауырығандарын һораша. Улар йәшермәйҙәр. Башта ҡатын уларға:

– Табипсылыҡ итмәйем, – ти.

Тегеләр бик ялынғас, иң ахырҙа изге ҡатын табипсылыҡ итмәйем тигән теләген мәжбүр итеп, үҙенең кем икәнен белдереп, ни саҡлы насарлыҡ итһәләр ҙә, ул ауырыуҙарҙы дауалап терелтә. Уларҙы ҡайтарып ебәреп, үҙенең әүәлге ире сауҙагәр менән рәхәтләнеп донъя көтә башлайҙар.

Шулай итеп, һәр хәлдә кешегә изгелек ҡылыу сәбәптән, ҡатын үҙенең ире менән яңынан ҡауышҡан.

## 99. Батша ҡыҙын алған сауҙагәр улы

Борон Польша ерендә бик бай кеше йәшәгән. Өс улы, бер ҡыҙы бар икән. Ике оло улы сауҙа менән шөғөлләнгән. Икеһе ике карапҡа әйбер тейәп сит илгә сығарып һаталар икән.

Байҙың ҡыҙы:

– Атай ниңә кесе улыңды ла файҙа итергә ебәрмәйһең? – тип һораған. Атаһы риза була, кесе улына ла бер карапҡа бик күп итеп тауар тейәтә. Өлкән улдары, көнләшеп, кинйәне икенсе илгә ебәрәләр. Кире ҡайтҡанда, Питерҙа осрашырбыҙ, тиҙәр. Хәтһеҙ генә ваҡыт үтә. Өс ул да әйберҙәрен һатып бөтөп, осрашырға тейеш ҡалаға киләләр. Трактирҙа осрашалар былар.

Кесеһе һуңлабыраҡ килә. Туғандар килем тураһында һөйләшә башлайҙар.

– Күпме файҙа иттең?

– Нисә миллион?

– Алты миллион, – ти кинйә.

Э тегеләрҙең файҙалары икеһенә алты миллион икән. Өлкән улдарының кесеһенә асыуҙары килә. «Атай, аҡсағыҙҙы әсен бөткәнһегеҙ, тип әйтер. Нисек тә булһа берәй сараһын күрергә кәрәк», тиҙәр улар. Кинйәне әсереп, иҫертәләр ҙә аҡсаһын алалар. Шулай итеп, егет аҡсаһыҙ ҡайтып төшә өйгә. Апайына бөтә ҡайғыһын һөйләй.

Тегеләр күңел асалар икән.

– Атай, ниңә кинйә улыңды ла мәжлескә сығармайһың? Ул да күңел асһын, – ти ҡыҙы.

– Һәй, бер карап әйберҙе һыуға һалыуы етмәгән. Уға йылы һыу эсерергә лә йәл, – тип әрләй атаһы.

Бер аҙҙан һуң бай улдарын тағы сауҙа итергә сығарып ебәрә. Карттың ҡыҙы Англия батшаһының улы менән ғашиҡ тота икән. Ул тиҙ генә егетенә хат яҙа: «Минең ҡустыма шунса миллион аҡса бирерһең» ти ҙә бөтә эште аңлата. Был ваҡытта Англияла ун ике йыллыҡ йыйылыш бара икән. Батша улы: «Эште төшөндөм, – тип ҡыҙға хат яҙа. – Беҙҙә аш тәмһеҙ, тоҙ ебәр», – ти. Ҡыҙ ҡустыһының пароходына тоҙ тейәтә.

– Батшаның аш бүлмәһенә ин дә, кеше юҡ саҡта ғына, аштарына тоҙ һал, – ти.

Егет шулай эшләй ҙә өҫтәл аҫтына инеп ята. Төш еткәс, күп кешеләр килә. Аш телеңде йоторлоҡ тәмле икән. Кем шулай тәмләндергәнен һис белмәйҙәр. Шунда егетте күреп ҡалалар ҙа һорашa башлайҙар. Егет үҙенең ашты тоҙ менән тәмләндергәнен, уны бик күп итеп алып килгәнлеген һөйләй.

– Мин Рәсәйҙән килдем, – ти.

Тәмле аш өсөн егетте бик йомарт бүләкләйҙәр, бүләккә йөҙ мең һумлыҡ кейем бирәләр. Уның тоҙон тотош алып, алмашына иң яҡшы әйберҙәр тейәтәләр.

Кинйә ул ошо әйберҙәр менән Америкаға китә. Диңгеҙ буйында килгән сауҙагәрҙәрҙең затлы әйберҙәр килтергәнен ишетеп, Америка батшаһының ҡыҙы ла китә. Ул егет янына килә. Ҡыҙҙың, әйберҙәр алырға тип, карапҡа менеүе була, карап ҡуҙғалып та китә. Егетте апайы был хәйләгә алдан өйрәтеп ҡуйған була.

Әйберҙәреңде карап әсендә генә һат. Әгәр берәй байҙың йәки батшаның ҡыҙы әйбер алырға килһә, карабыңды ал да кит, ҡыҙҙы ҡулыңдан ысҡындырма, – тигән була.

Егет апаһының кәңәшен тотҡан. Батша ҡыҙы иҫенә килеп:

Мине кире ярға илтеп ҡуй, – тип күпме инәлһә лә, йәш сауҙагәр риза булмай.

Ҡыҙ ҙа артыҡ ҡаршылашмаған, сөнки ул егеткә баштан-аяҡ ғашиҡ булған да ҡуйған икән. Улар өйләнешмәксе булалар. Питерға етер алдынан егет ағайҙары менән осрашырға тейеш икәнлеге хаҡында ҡыҙҙы иҫкәртеп ҡуя. Элеккесә трактирҙа осрашалар. Һыра эсеп, ҡыҙмаса булып алғас, туғандар килем-файҙа, күпме аҡса эшләүҙәре тураһында һүҙ ҡуҙғаталар. Кинйә ул был юлы хәйләгә бара.

– Мин файҙа итә алманым. Юл уңманы, – ти.

Ә карап трюме эсенә бөтә әйберҙәрен, ҡыҙҙы ла йәшереүе тураһында өндәшмәй. Тегеләр ҡайғырышҡан булалар. Ҡустыһын эсергә көсләйҙәр. Егет тегеләрҙең мутлығын аңлай. Эсмәй. Шунан өсәүләп карапҡа китәләр. Ағайҙары карапҡа менеп, унын ныҡлығын тикшереп йөрөгән булалар ҙа аңғармаҫтан ҡустыларын диңгеҙгә ырғыталар. Быны күреп ҡалған ҡыҙ йәшеренгән еренән сыға ла егеткә һиҙҙермәй генә ҡотҡарғыс ырғыта. Егет пароходҡа менә лә йәшеренеп ята. Ағайҙар ҡыҙға бер нәмә лә һөйләмәҫкә ҡушалар.

Өйгә ҡайтып еткәс, улар ҡоторалар. Көн дә байрам, көн дә туй. Фарсит итәләр икән. Өлкән улы теге ҡыҙға өйләнергә була. Ҡустыһының иҫән икәнлеген башына ла килтермәй. Ул да ҡайтҡан була. Өйҙәгеләрҙең барыһы менән иҫәнләшеп сыға, тик ағаларына ғына күренмәй икән. Шулай оло туй яһап ебәргәндәр.

– Атай, ағаһының шатлығын күрергә кесе улыңды ла саҡыр инде, – ти байҙың ҡыҙы.

– Сыҡһын әйҙә.

Оло көрәгә менән бал килтереп ултырталар. Килен үҙ ҡулдары менән барыһына ла берәр уртлам бал эсереп сығырға тейеш була. Сират кинйә улына еткәс, ул бер йотом эсә лә ҡыҙҙың уң ҡулынан тотоп ала ла ысҡындырмай. Атаһы улын әрләй башлай.

Егет:

– Был ҡыҙ минеке, – тип дөрөҫөн һөйләп бирә, унын һүҙен ҡыҙ ҙа дөрөҫләй.

Халыҡтар кесе улды яҡлай башлайҙар. Ике ағаһы ла үсегеп мәжлестән сығып китә. Туйҙы кесе улға яһамаҡсы булалар.

Туй көнө уҙғандан һуң да ағалары этләшеүҙән туҡтамай. «Килен тоғро түгел. Ул һиңә тиклем беҙҙең менән йоҡланы», – тип нисек тә Кинйәне ғәрләндермәк булалар. Кинйә ғәрләнә лә кәләшен ҡара урманға алып барып, туҡмап, ташлап китә лә бара.

Ҡатын иҫенә килгәс, урмандан сыға ла, баш һуҡҡан яҡҡа тартып китә. Бер аҙ барғас, алда һыу күренә. Һыу аръяғында ҡала, ти. Кәмәселәр уны аръяҡҡа сығаралар. Ҡалаға етә алмай ҡала, аслыҡтан хәле бөтөп, ҡатын йығыла. Ҡалаға ҡайтып барған бер врач уны өйөнә алып ҡайтып тәрбиәләй. Ун биш көн

тигәндә ҡатын һауыға. Врач уны үҙенә кәләш итмәксе була. Ҡыҙ риза булмай, ҡаса. Палкауник кейеме кейә лә батшаға хеҙмәткә инә.

Көндәрҙең береһендә палкауник ҡатын баҙар ҡапҡаларына кәртешкәләрен элдертә лә:

– Кем ошо һүрәткә оҙаҡ ҡарап тора, шуны ябып ҡуйығыҙ, – тип әмер бирә.

Теге врач килеп оҙаҡ ҡарап тора һүрәткә. Унан ошо мәлдә генә хеҙмәткә саҡырылған ире оҙаҡ итеп ҡарап тора. Бүтән кешеләр үтәләр ҙә китәләр икән. Былар тора ла тора, ти. Шунан уларҙы ябып ҡуялар. Суд була. Ҡатын үҙе судья икән. Тәүҙә врачтан һорайҙар.

– Ниңә оҙаҡ ҡараның?

Врач һөйләп бирә булған хәлде.

– Һүрәт шул ҡыҙға оҡшаған, – ти. Шунан егеттән һорайҙар. Ул да дөрөҫөн һөйләп бирә лә:

– Хәҙер ул ҡайҙа икән? – тип һорай.

– Төнгө сәғәт ун икелә фәлән ергә бар ҙа тәҙрәне сирт өс тапҡыр, белерһең, – ти судья.

Егет килә. Ҡатын, кейенеп тороп, ҡаршы сыҡҡан икән. Егет шаҡ ҡатҡан. Шунан аңы инеп унын аяғына йығылып, ғәфү үтенә. Ҡатын ғәфү итә. Шунан яңынан берегеп донъя көтә башлайҙар.

## 100. Биреҡатыя

Әлек Шәмсит тигән бер сауҙагәр йәшәгән, ти. Уның Биреҡатыя тигән бик һылыу ҡыҙы булған. Биреҡатыяны сауҙагәр үҙенең яҡын кешеләренә тапшырып ҡалдырмаҡсы икән. Бер ваҡыт ул ҡыҙын үҙенә йәштәш Ильяс тигән бер бай сауҙагәргә бирергә булды, ти. Ҡыҙ атаһына:

– Юҡ, атай, бер аҙна көт әле, – тип ваҡытты һуҙмаҡсы икән.

Ҡыҙ был сауҙагәрҙе бер ҙә яратмай. Ни эшләргә белмәй, каңғырып йөрөй торғас, баҡсала ял итергә ятып торһа, йоҡлай ҙа китә.

Сауҙагәрҙең Мыстан тигән хеҙмәтсеһе була. Баҡсаға һыу һибеп йөрөгәндә, ҡыҙҙың һүрәтен табып алып, уга ғашиҡ булып йөрөгән икән. Әле ҡыҙ иҫ белмәй йоҡлап ятҡанда, егет һыу һибергә тип, баҡсаға килеп инә лә уның һылыулығын үҙ күҙҙәре менән күреп, шаҡ ҡатып тик тора, ти. Ҡыҙҙың йөҙөнән көләгәләр үткәндәй була. Ул уяна. Уянғас, егеттән:

– Ни эшләп тораһың? – тип һораны, ти.

– Һине ҡарап торам, – тигән Мыстан. – Бына йөҙөңдән көләгәләр үткән кеүек булды, шуны ҡарап торам, – ти.

Шунан ҡыҙ үҙенең ҡайғыһын һөйләп биргән:

– Мине атайым, – тигән, – Ильяс тигән ҡарт сауҙагәргә бирергә итә, минең барғым килмәй, – тигән.

– Атайға ҡаршы килеп булмай шул. Ни эшләйһең инде? – тигән була, ти, егет.

Бер аҙна ваҡыт үткәс сауҙагәр ҡыҙын саҡыра ла:

– Йә, ҡыҙым, ваҡыт етте, – ти. Ҡыҙ бер ни тип әйтмәй, тағы баҡсаға инә. Әлеге Мыстан килеп сыға. Ҡыҙ тағы уға үҙенең зарын һөйләй. Һөйләшә торғас, былар икәүһе лә йоҡлап китәләр. Быларҙың йоҡлап ятҡандарын Ильяс күреп ҡала ла ҡыҙҙың атаһына килеп әйтә. Атаһы ҡыҙын өйҙән ҡыуып сығара.

– Ҡайҙа теләйһегеҙ, шунда барығыҙ, тик күҙемә күренмәгеҙ, – ти.

Мыстан өйөнә ҡайтып китә, Бireҡатыя, бәләкәй генә төйөнсөгөн тотоп, Мыстандың өйөнә бара. Туй үткәрәйек тиһәләр, хәриздәре* юҡ. Мыстандың инәһе:

– Әҙерәк эшләп, аҡса йыйып кил, – тип, улын сығарып ебәрә. Мыстан тағы икенсе бер сауҙагәргә хеҙмәтсе булып яллана. Сауҙагәр быны Бәғҙәткә* ебәрә:

– Беҙҙең яҡта булмаған әйберҙәрҙе ебәреп ятырһың, – ти.

Ире киткәс, Биреҡатыя ҡәйнәһен йыуындырып, кейендереп, бик ныҡ хөрмәт итә. Ул-был әйберҙәрен һаттырып, өй һалдырып ала.

Бер көндө тәҙрә төбөндә ҡул эше эшләп ултырһа, Биреҡатыяны батша малайы күреп ҡала. Күрә лә ғашиҡ була, тиҙҙән яусы ебәрә. Ҡыҙ ҡапҡа төбөнә бик уҫал эт сынйырлап ҡуйған була. Яусылап килгән әбейҙе эт яҡын да ебәрмәй, ти. Яусылап ала алмагас, батша улы Мыстанға: «Ҡан илайым, балам. Ҡатының бик насар кеше булып сыҡты», – тип инәһе булып хат яҙа. Шунан Мыстан: «Мин ҡайтҡансы Биреҡатыя өйҙә булмаһын», – тип яуап хаты яҙа.

Инәһе был хатты алғас, уҡый ҙа иҫе китә. Килененә әйтә алмай оҙаҡ ҡына борсолоп йөрөй, ҡәйнәһенең борсолоп йөрөүен күреп, килене бер көндө ни булғанын һораша. Үҙе әйтергә теле бармай, ҡәйнә кеше хатты бирә. Хатты уҡып Биреҡатыя эштең ниҙә икәнен белә. Мыстандың инәһе иртәнсәк торһа, килене юҡ, ти.

Урмандар, тугайҙар менән бара Биреҡатыя. Бара торғас, бер зыяратҡа килеп сыға. Унда ни күҙе менән күрһен – бер йәш егет менән бер йәш ҡыҙ ята, ти.

Биреҡатыя тегеләрҙең өҫтөнә ябылған япманы асып ебәрһә – ҡыҙ менән егеткә йән керә.

– Ҡалай оҙаҡ йоҡлағанбыҙ.

– Һин кемһең? Ниндәй әҙәмһең? – тип һорайҙар ҡыҙҙан.

– Һеҙ үҙегеҙ кем, ни эшләп зыяратта ятаһығыҙ? – тип һорай Биреҡатыя.

– Беҙ сихырҙан шулай йоҡлағанбыҙ. Нәғәш ағайым мине көсләп алырға уйлағайны, беҙ ҡастыҡ, ҡыуыпта йәшәнек. Килеп ҡалдылар ҙа бына ошо хәлгә ҡалдырҙылар, – ти ҡыҙ.

Биреҡатыя ла үҙенең хәлен һөйләп бирә. Хәҙер инде өсәүләп йөрөргә булалар. Зыяраттан сығалар ҙа тау битенә баралар. Биреҡатыя һыу төшөп алырға була. Сисенә лә, һыуға төшөп, йөҙөп китә.

Был ваҡытта Мыстан өйөнә ҡайтҡан була. Инәһе улына килененең бик һәйбәт, таҙа булыуын, ялған яла арҡаһында башын алып сығып китеүен һөйләй. Мыстан бик үкенә, Биреҡатыяны эҙләп сығып китә. Ильяс та ошо ваҡытта ҡыҙҙы эҙләп йөрөгән була, кеше танымаһын өсөн йөҙөнә битлек ябынып ала. Ильяс юлда Мыстанды осрата, уны таный, ә Мыстан Ильясты таный алмай. Шулай килә торғас, бер текә яр буйынан үтергә тура килә быларға. Ильяс, һиҙҙермәй генә килә лә, Мыстанды ярҙан төртөп төшөрә лә ебәрә. Шишмәгә килеп етһә, Ильяс Биреҡатыяны күреп ҡала.

– Яҡшы ерҙә тура килдең әле, – тип ҡыҙ менән алышмаҡсы була. Биреҡатыя ла аптырап тормай, һыуҙан йүгереп сыға ла, бер таш алып, Ильястың башын яра һуға. Кеше үлтерҙем бит инде, тип ҡурҡыуынан ҡалтыранып ултырған ваҡытта, теге ҡыҙ менән егет Биреҡатыя эргәһенә килә.

– Ниндәй әҙәм был, ни булды? – тип һорайҙар.

– Һорамағыҙ, бик әшәке йыртҡыс әҙәм ине ул, – ти Биреҡатыя.

Шул ваҡыт бер кешенең ыңғырашҡан тауышы килә. Тауыш килгән яҡҡа барһалар, ҡанға батып Мыстан ята. Биреҡатыя Мыстандың яраһын һәйбәт итеп бәйләй ҙә өйөнә алып ҡайтып китә. Теге ҡыҙ менән егет тә Мыстандың ауылынан икән. Ҡайтып, бер юлы ике туй үткәреп ташлайҙар.

Әле лә иҫән-һау ғүмер итеп яталар, ти.

## 101. Вәзир ҡыҙы менән батша ҡыҙы

Борон-борон заманда батша ҡыҙы менән вәзир ҡыҙы уҡый. Батша ҡыҙы вәзир ҡыҙын яратмай. Вәзир ҡыҙы йыл да күсә. Батша ҡыҙы бер нәмә лә белмәй. Вәзир ҡыҙы һигеҙенсене, туғынсыны бөттө, батша ҡыҙы һаман беренселә ултыра. Батша ҡыҙы вәзир ҡыҙы менән ултыра, үҙенә алып ҡайта, ул нимә яҙһа, шуны ашата. Батша вәзиргә:

– Һинең ҡыҙың минең ҡыҙымды этләтә бит, – ти, – минең ҡыҙымды йә һинең ҡыҙыңды икенсе районға алып барып ташлайыҡ.

– Ҡуй, һин батша бит, – ти вәзир, – минекен алып барайыҡ. Урманға алып барайыҡмы?

– Урманға алып барма, һәйбәт ат бирәм, һандыҡҡа һал да баҙарға бар.

Юл ҡуйған, ат еккәндәр (борон Микулай заманында *аттарҙы юл ҡуйғандар*; беренсе аттар булған улар. – *Әкиәтсе иҫкәрмәһе*). Ҡыш көнө, һандыҡҡа ҡыҙҙы һалып, алып барҙылар, ти.

– Һандыҡ һатам, кем ала? – тиһә, бер егет:

– Миңә һат, – тип, һандыҡты алып ҡайта.

Ҡайтҡас, асып ҡараһа – баҙлап торған ҡыҙ! Өҫтөндә – батша ҡыҙы кейҙергән кейемдәр, ти. Муйынында – өс ҡат алтын мәрйен. Батшаның ҡыҙы, айырылышабыҙ, тип биргән быға. Ҡолаҡтарында алтын алҡа, ҡулдарында алтын йөҙөк. Батша ҡыҙының фамилияһы, исеме яҙылған, ти. Егет иҫе китеп аптырап ҡарап тора. Һандыҡты тәүҙә еҙнәһенә алып ҡайтҡан булған. Ҡыҙҙы күргәс, әсәһенә алып ҡайтып китә. Ҡайтҡас, һандыҡты асып ебәрһә, әсәһе лә аптырап ҡала.

– Нимә уйлап ҡына килдең бында, балам?

– Мин ирек менән килмәнем.

Ҡыҙыҡай хәсрәтен һөйләй (борон заман булһа ла, уҡыу бөткәс *диплом* бирер булғандар. Ҡыҙҙың дипломы ла бар. – *Әкиәтсе иҫкәрмәһе*).

– Инәй, кибет бармы? – тип һорап ҡуя (борон пәйғәмбәрҙәр заманында *лавканы кибет* тигәндәр. – *Әкиәтсе иҫкәрмәһе*).

– Кибет бар.

Шунан ҡыҙ бер генә мәрйенен өҙөп бирә лә:

– Әбей, аш-һыу, үҙеңә кәрәк-яраҡ алып кил, – ти.

Әбей барып алып ҡайта, самауыр ҙа ала. Күрше ауылдан ҡыҙын саҡырта. Ҡыҙы килгәндә, сәйгә һөт алып килә. Һөйләшәләр, ҡыҙ эштең нисек булғанын да төшөндөрөп бирә.

– Ярай, һин юғалмаҫһың, – тинеләр, ти, быға.

Эй, шулай йәшәп яталар, ти. Өй һалып, донъя төҙөкләндереп ебәрәләр. Бер заман әлеге егет ҡайтып килә. Ҡыҙ тәҙрә аша ҡасып сығып китәм тиһә, ҡулын ҡырҡа ла ҡуя. Юлда бер егеткә тап була. Был егет врач икән. Ул ҡыҙҙы балнисҡа һалып дауалап сығара. Дауалап сығара ла:

– Ҡыҙыҡай, бергә булайыҡ, – ти.

– Мин, ағай, һыу буйына ғына төшөп киләм, – ти ҡыҙ.

Барҙы ла, ти, һыу буйына кәмәгә ултырҙы ла егеттән ҡасты бит был. Ҡасып китеп ултыра, ҡасып китеп ултыра. Бәхетһеҙгә ел ҡаршы тигәндәй, ике егет ҡармаҡ һалып ултыра бит. Быны тоттолар ҙа алдылар, ти. Бына бер ваҡыт ҡыҙ өсөн бәхәсләшә башланылар, ти. Бер-берен еңә алмағас, ярышырға булалар.

– Әйҙә, уҡ атышабыҙ!

– Әйҙә һуң!

Уҡ атышалар, кемдеке йыраҡ китте икән, тип, шуны ҡарарға йүгерәләр. Шунан файҙаланып, ҡыҙ кәмәгә ултырып аға ла китә. Китеп ултыра был, китеп ултыра, алда ике мәхәлләле

ауыл күренде, ти. Шунда барып етә һалайым, тип, бара ятһа, йәнә бер егет баҫып тора. Һыбай, ти, быныһы.

– Һин миңә бул, – ти быныһы ла.

– Барһам барырмын. Ҡана, атыңды менеп ҡарайым, – ти ҡыҙ.

– Мә.

Ҡыҙ атты менде лә сапты. Бәй, ауылдың осонда ике һаҡсы тора.

– Был ауылдың батшаһы ауырый. Кем тура килә, шуны тотоп алып керергә ҡушылды. Ҙур йыйылыш бара. Ҡыҙыҡай, һинең грамотаң бармы?

– Бар. Кем килә, ошо атты шуға бир, – тине, ти, ҡыҙ, йыйылышҡа инеп китте, ти.

Ҡыҙ барып керһә, тегегә эре яҙыу ҙа, ваҡ яҙыу ҙа күрһәтәләр. Ҡыҙыҡай һыу шикелле уҡый ҙа бирә. Бик аптыраны, ти, халыҡ. Һораша башланылар, ти. Ҡыҙ һөйләп бирҙе, ти.

– Мин вәзир ҡыҙы. Ете төрлө тел беләм, фәлән-төгән фәсмәтән.

Шулай тигәйне, ҡыҙыҡайҙы батша итеп ултырттылар ҙа ҡуйҙылар, ти.

Шулай батша булып ултыра. Булған кеше быны тыңлай. Кыҙ, кәртешкәһен яһатып, быяла аҫтына ҡуйып, кешеләргә күрһәтергә әмер бирә.

– Ошо кәртешкәгә кем аптырап ҡарай, шуны бында алып килегеҙ, – тигән ҡыҙ батша. Быға бәйләнгән әлеге егеттәр батша кәртешкәһен күрә торалар, ҡыҙҙы танып, ауыҙ асып, ҡатып ҡала торалар. Ҡатып ҡалған берен, тотоп алып, батша һарайына алып килә торалар. Врач егеттә лә, ике балыҡсы егеттә лә эше юҡ, ти, ҡыҙҙың, һандыҡ менән бергә үҙен һатып алған егетте үҙе янына ҡалдыртты, ти. Шунан инде шуның менән бергә донъя көтөп алып китте лә барҙы, ти.

## 102. Ҡатындан уңған ир

Элек бер егерме йәшлек егет булған. Ул бер кешегә бер йыл хеҙмәт иткән. Бик тогро, гәҙел кеше булған. Шунан ил көнөнә ҡайтырға булған.

– Хужам, мин ҡайтам, иҫәпләшәйек инде, – ти икән.

– Рәхмәт әйтәйемме, аҡса бирәйемме?

– Аҡса бир.

Аҡса алып, ҡайтып ултыра. Юлда тегенең аҡсаһын талап алған да киткәндәр. Был кире теге кешегә килгән дә:

– Мин һиңә тағы бер йыл хеҙмәт итергә булдым, бай, – тигән.

Ярар, ит, – тигән бай.

Тағы бер йыл ғәзеллек менән хеҙмәт итте, ти. Шунан хужаһына:

– Ҡайтайым, хужам, – ти.

– Аҡса бирәйемме, рәхмәт әйтәйемме?

– Рәхмәтеңде бир.

Рәхмәт әйтеп, хужа аҡса ла бирҙе, ти, байтаҡ ҡына итеп.

Ҡайтып килә егет. Ҡайтып килә торғас, бер арыҫлан һатып алды, ти. Йәнлеген етәкләп килә, шунан бер илгә туҡтаны, фатир һораны. Фатир бирмәнеләр, ти, быға.

– Бөгөн батшаның ҡыҙын аждаһа йота торған көн, ҡайғылы көн, бирмәйбеҙ, – тиҙәр.

Ярар, был күп инәлеп тормай, йәнлеге менән бергәләп бер урман ситенә барып ятып йоҡлай. Төн уртаһында дауыл ҡуба. Бәй, аждаһа килә икән. Егеттең арыҫланы бәйенән ысҡынып китеп, аждаһаны ҡыуып етеп, башын өҙә лә ағасҡа элә.

– Ил кешеләре килһен, аждаһа башын күрһендәр, – тип егет хәбәр тарата.

Ил кешеләре йыйыла, батша шул ваҡыт:

– Һин никахлы кешеме, егет кешеме? – тип һорай.

– Егет кеше.

– Ошо ҡыҙымды алаһыңмы?

– Батша ҡыҙын алырға выжданым етмәй.

Батша ҡыҙынан һорай:

– Һин, ҡыҙым, барырға ризамы?

– Риза, әгәр алһа, – ти ҡыҙ.

– Минең йәнлегемдән башҡа бер байлығым да юҡ бит әле, – тип ҡарай, шулай ҙа ҡыҙҙы бирәләр быға.

Ҡыҙ бара, матур донъя көтөп яталар. Егет батша ҡыҙына:

– Сауҙагәрлек итәһе ине әҙерәк, – ти.

Ҡатыны иренә аҡса алып килеп бирҙе, ти. Сығып китте, ти, егет. Шул аҡсаһына өс һыйыр һатып алды, ти. Өс һыйырҙы етәкләп китеп ултыра ине, ти, ҡараһа, берәү дөлдөл менән килә, ти.

– Эй, дөлдөлөң шәп икән. Миңә бирәһеңме?

– Өс һыйырыңды бирәһеңме?

– Бирәм, – тине, ти, егет.

Өс һыйырын биреп, дөлдөл алды, ти, егет. Дөлдөлөн менеп китеп ултыра. Китеп ултыра торғас, быға бер бай осраны, ти.

– Эй, егет, дөлдөлөң бик шәп икән, һатаһыңмы?

– Һатам.

– Ни хаҡ һорайһың?

– Белмәйем.

– Бына баштағы ҡаракүл бүреккә бирәһеңме? – ти.

– Ярай.

Баштағы бүректе алды ла кейҙе, ти. Дөлдөлдө бирҙе лә китеп ултыра, ти. Бара бирһә, бер ерҙә бер байҙың пароходы батҡанын ишетте, ти. Пароходта алтын икән. Егет шул пароход

янына бара, шунда, ырғып менәйем тигәндә, бүреге һыуға төшөп, ағып китә. Бай күреп ҡала ла:

– Егет, бүрегең аҡты, донъяң бар инеме?

– Мин батша ҡыҙын алып донъя көтәм.

– Һинең бер әйберең ағып китте, ҡайтҡас, ҡатының һүҙ әйтмәҫме?

– Юҡ, әйтмәҫ.

Бай:

– Мин ышанмайым. Әйҙә бәхәсләшәйек. Әгәр ҡатының һүҙ әйтһә, ҡатының миңә була, әйтмәһә, ошо бер пароход алтын һинеке, – ти.

Килешеү төҙөп, ике яҡтан да ҡул ҡуйып, егеттең кәңәше буйынса, йөгөн теүештереп* һалып, карапты ҡуҙғалтып алып, бергәләп иленә китәләр. Бай бар әйберен юғалтып бөткән сауҙагәргә бик әләгер тип ышана бит инде. Егеттең иленә ҡайтып етәләр, өйөнә керәләр.

Ҡатын:

– Әй, ирем, ҡайттыңмы? – ти, ҡыуанып.

– Әйе, ҡайттым да ул, бар булған аҡсам, әйберем юғалды бит әле...

– Юҡҡа ҡайғырма, үҙең иҫән-һау ҡайтҡас, шул шатлыҡ, – тине, ти, ҡатын.

Быны ишетеп, бай аптыраны, ти. Шунан ни бер пароход алтынын бирҙе, ти.

Ҡатын сибәр, һәйбәт кеше булғас, тегеләрҙең донъяһы бөҙолмай. Әле булһа, яҡшы донъя көтәләр, ти.

## 103. Петр һалдат

Борон-борон заманда батшалар хакимлыҡ итә башлаған дәүерҙә Петр тигән бер егет булған. Ул бик матур, ҙур кәүҙәле, көслө, шуның менән бергә бик тыйнаҡһыҙ була. Ул гел эсеп, иҫереп, тура килгән кешене ҡыйнап йөрөй торған була. Ауыл халҡы унан бик зарлана башлай. Шунан ауылдың байыраҡ кешеләре уны ҡыуып ебәрергә план төҙөйҙәр. Берҙән-бер көндө улар барлыҡ халыҡты сходҡа саҡыралар. Сходта уны ҡайҙа ебәреү тураһында ҡыҙыҡ бәхәс китә. Байҙар менән улар яҡлылар:

– Петр Александрович Машинды ауылдан ҡыуырға. Ауылдан сығып китһен, теләһә ҡайҙа барһын, – тиҙәр.

Ҡайһылары, Петрҙың үҙе кеүек фәҡирерәктәр:

– Һалдатҡа китһен.

– Һалдатҡа ебәрергә кәрәк, – тип ҡысҡыралар. Шунан һалдатҡа ебәреүҙе артығыраҡ күрәләр.

– Унда батшаға хеҙмәт итһен, аҡылға ултырып ҡайтһын, – тиҙәр.

Шулай итеп, хөкөм сығарып, халыҡ Петрҙы һалдатҡа оҙата.

Петр бер ҡалаға барып хеҙмәткә инә. Уны бер офицер үҙенә денщик итеп ала. Был офицер ҙа эсергә яратыусы, торғаны бер хулиган була. Улар бик килешеп китәләр. Петр эсергә һәр төрлө эсемлектәр ташый. Шулай итеп, офицер тапҡан аҡсаны икәүләп эсеп бөтөрөп баралар. Күп ваҡыт кәрт уйнап ғүмерҙәрен үткәрәләр. Отҡан аҡсаларын тағы ашауға, эсеүгә генә тотоналар.

Шулай итеп, айҙар, йылдар үтә. Бер ваҡыт офицерҙың аҡсаһы бөтә. Кәрт уйнап та, аҡса ота алмай. Аптырап ҡалалар. Аптырауҙың сигенә еткәс, офицерҙың артыҡ әйберҙәрен һатып эсә башлайҙар. Ул ғына ла быларға етмәй. Шунан офицер:

– Хәҙер нимә эшләйбеҙ? Булмаһа, һин, аҡса һорап, атайыңа хат яҙ. Бәлки, ул табып ебәрә алыр, – ти.

Петр риза була.

– Һин минең хатҡа ҡул ҡуйырһың, мисәтеңде баҫырһың. Шулай булғанда, аҡса алып булыр, – ти.

Офицер риза була. Петр атаһына хат яҙа. Унда: «Хәҙер мин полковник булдым. Мине ҙур генерал яһамаҡсылар. Генерал кейемдәрен бушҡа бирмәйҙәр икән. Шуны алыу өсөн аҡса кәрәк. Һеҙ, нисек булһа ла, йөҙ илле-ике йөҙ һум аҡса ебәрерһегеҙ», – тип яҙа. Офицер дөрөҫләп ҡул ҡуя, мисәт баҫа.

– Генерал булып, ауылға ҡайтһа, беҙҙе харап итер. Унан ҡотолоу сараһы бирәү генә – үҙ-ара аҡса йыйып ебәреү генә, – тип күмәкләп аҡса йыйырға тотоналар.

Барлығы ике йөҙ илле һум аҡса йыйып, Петрҙың атаһы Александр ағайға:

– Мә, был аҡсаларҙы улыңа ебәр, – тиҙәр.

Бер ай үтеү менән, Петр атаһынан ике йөҙ илле һум аҡса ала. Офицеры менән берлектә тағы ашарға, эсергә, кәрт уйнарға тотоналар. Был аҡсалар ҙа күпкә бармай, бөтә. Уларҙы ла, офицерҙыҡын да эсеп бөтөргәс, тағы аҡсаға аптырап ҡалалар.

– Петр, ни эшләйбеҙ инде? Аҡса тағы бөттө бит, – ти офицер.

Петр бер ҙә бошонмайынса ғына:

– Һин миңә бер айлыҡ отпуск бир. Мин өйҙән күп итеп аҡса алып килермен, – ти.

Офицер был тәҡдимгә риза булып, Петрҙы бер айға отпускыға ебәрә. Петр йыйына ла станцияға барып, поезға ултырып ауылдарына ҡайтып китә. Поездан поезға күскән сағында, Петр вокзалға инә. Унда-бында ҡағылып ҡарай, бер ҙә күңеленә урын тапмай. Эсер ине, аҡса бик самалы, юллыҡ ҡына. Шулай йөрөй торғас, беренсе класлы салонда бер генерал менән бер нисә офицер кәрт уйнағанын күреп ҡала. Нисек унда керергә? Бының өсөн ниндәй хәйлә табырға? Петр артыҡ уйлап тормай,

керə лə честь биреп иҫəнлəшə, бер айға ҡунаҡҡа ҡайтып барыуын əйтə. Уны бер аҙ мыҫҡыллап алалар, лəкин матур ҙа, таҙа ла егет булыуына ҡыҙығып:

– Əйҙə, ултыр, һалдат. Мə, берҙе эсеп ал, – тип араҡы бирəлəр.

Петр бер стаканды төп күтəрə, уларҙы маҡтай-маҡтай рəхмəттəр уҡый. Быны ашамлыҡ, эсемлек артынан ебəрəлəр. Генералға Петр бик оҡшаны, ти. Шунан ул уны уйнарға саҡырҙы, ти. Петр бер ҙə ҡарышманы, аҡсаһы аҙ булһа ла, кəрт уйнарға тотондо, ти. Ике-өс сəғəт уйнағандан һуң, күп кенə аҡса отто, ти. Уйнай торғас, уйындар бик ҡыҙып китə. Аҡса бик күп суммала өйөлə. Петрға «туз» килə. Ул үҙенə сират килеп еткəнен сабырһыҙланып көтə. Уның янында ғына штабс-капитан ултыра, кеҫəһенəн өр-яңы йөҙəрлектəрҙе сығарып һала. Лəкин капитан отола.

Сират Петрға етə. Петр:

– Һəр береһе биш йөҙ һум, – тине, ти.

Унан көлгəн булдылар, ти. Генерал уға бер кəрт күрһəтте, Петр уны ҡырын ҡараны ла, ти:

– Унлыҡ, – тине, ти.

Банкылағы бөтə аҡсаны йыйып, кеҫəһенə тултырҙы, ти. Тағы дəртлəнеп уйнарға тотондо, ти. Ашарға, эсергə килтерҙе, ти, уйын ҡыҙҙы, ти. Тағы ике сəғəт уйнауға, штабс-капитан тамам бөлөп сығып китə. Петр ҙа уйнамаҫҡа итə, лəкин генерал:

– Уйнайбыҙ əле, – тип уны туҡтата.

Петр генерал менəн уйнарға тотондо, ти. Уйнай торғас, генералдың да аҡсаһы бөттө, ти. Шунан ул:

– Ну, һалдат, минең алтын сəғəткə уйнайбыҙмы? – тине, ти.

– Уйнайбыҙ.

Күп тə үтмəне, генерал сəғəтенəн яҙҙы, ти.

– Инде минең кейемдəргə уйнайбыҙмы? – тине, ти, генерал, һаман ҡуймай.

– Уйнайбыҙ.

– Аҡтыҡ тапҡыр, – ти генерал.

– Əйҙə, əйҙə, – ти, Петр əйтə.

Генерал кейемдəрен сисеп һала. Отола – кейемһеҙ ҡала.

– Ярар, мə, һалдат, кейен. Кейемдəреңде бир миңə, – тип генерал һалдат кейемен, Петр генерал кейемен кейеп ала ла генералға бер ни ҡəҙəрем аҡса ҡалдырып, честь биреп сығып китеп, йомшаҡ вагонға ултырып ҡайтып китə.

Үҙенең станцияһында төшөп ҡалғас, Петр бер матур тройка яллай. Ауылына алтмыш саҡрым ҡалған була. Юлда бик матур баҡсалы дачаға тура килə. Был бер генерал чинындағы кенəздеке булған икəн, ти. Петр, шунда туҡталып, хəл йыйып

китергә уйлай. Тройкала йәш кенә матур генерал имениеға килеп инеү менән, баяр ҡатыны, Мария исемле ҡыҙы, башҡа хеҙмәтселәр уны ҡаршы алырға сығалар. Был мәлдә кенәз үҙе өйҙә булмай. Уның ҡатыны йәш генералды ҡултыҡлап өйгә алып инә. Мария ла ни ҡыланырға белмәй Петр алдында йүгереп кенә йөрөй. Улар үҙҙәренең кем, ниндәй нәҫелдән икәнен һөйләп бирәләр, өй эсендәге карточкалары менән таныштыралар. Имение байрам төҫөн алды, «йәш генерал» өсөн махсус аштар әҙерләнде, ти. Марияның әсәһе Лиза:

– Его превосходительствоға беҙҙә күңелһеҙҙер. Мария, һин уны баҡсаға алып сығып йөрөт, – тип «йәш генерал»дан түбәнселек менән ғәфү үтенә.

Петр улар менән намыҫлы мөғәмәлә итә. Нисек булһа ла, үҙенең серен белгертергә тырышмай. Мария, уны ҡултыҡлап, баҡсаға йөрөргә алып сығып китә. Улар баҡсала төрлө һүҙҙәр һөйләшәләр, көлөшөп йөрөйҙәр. Лиза ҡыҙыҡһынып сарҙаҡтан ҡарап тора. Йәштәр бик тиҙ яҡынлашалар. Лиза:

– Һай, генерал! Шул ҡәҙәре йәш көйө нисек генерал була алды икән? – тип ғәжәпләнеп ҡуя, ти.

Бик тәмле итеп ашамлыҡ, эсемлектәр әҙерләнә, Лиза бик һөйкөмлө итеп кенә залға кереүҙәрен һорай. Петр менән Мария, күптәнән таныш кешеләр кеүек, һөйләшә-һөйләшә килеп инәләр. Мәжлес башланды, ти. Ашау-эсеү ҡыҙҙы, ти. Һәр кем батырыраҡ һөйләшә башланы, ти. Оҙаҡ ҡына ашап-эсеп, гәпләшеп ултырғандан һуң, Петр үҙенең тиҙ генә китергә теләгән белдерҙе, ти. Лиза ла, ҡыҙы Мария ла «генерал»дың тиҙ китеүенә ҡаршы төштө, ти. Һәр кем уның тағы ла ҡунаҡ булыуын һоранылар, ти. Артыҡ ҡарышып торманы Петр, ҡунып китергә булды, ти.

Төшкө аштан һуң һауа матур, ел юҡ, тыныс ине, ти. Лиза ҡунаҡтың кәйефен табыу өсөн, Мария менән уның баҡсаға сығыуын һорай. Мария ла әсәһенән ошоно ғына көткән икән, ти. Ул хәҙер Петрҙы баҡсаға алып сығып китә. Баҡса бик матур. Унда һәр төрлө емеш ағастары сәскә атып, хуш еҫтәрен сәсеп ултыра, һәр төрлө ҡоштар һайрай. Баҡсала бик матур күл бар. Уның тирә-яғы матур сәскәләр менән уратылған. Ҡыҫҡаса әйткәндә, баҡса шәһәр баҡсаһына оҡшай. Мария Петрҙы, әллә ҡасандан таныш кешеһе кеүек, баҡсаның иң матур урынына алып барып һөйләшә. Улар бик тиҙ бер-береһенә эйәләшеп китеп, бер-береһенә һөйөш тәҡдим итәләр. Петр үҙенең хәрби кеше булыуын, бында аҙ ғына ваҡытҡа ҡайтҡанын белдереп, әгәр ҡыҙ ысынлап та ярата торған булһа, ата-әсәләре менән һөйләшеп, хәҙер үк ирле-ҡатындар булырға тәҡдим итте, ти. Мария был тәҡдимгә бик тиҙ күнде, ти.

– Әсәйем риза булһа, бөгөн үк ҡушылабыҙ. Хеҙмәт урыныңа барыу менән, мине үҙ яныңа алырһың, – тине. ти.

Петр быға ризалығын белдерә.

Марияның әсәһе Лиза киске ашҡа саҡыра. Былар аш әҙерләнгән залға килеп инәләр. Ҡыҙ бик шат. Әсәһен икенсе бүлмәгә алып инеп китә. Әсәһенә үҙҙәренең вәғәҙәләре тураһында һөйләп бирә. Әш етдигә китә. Әсәһе «йәш генерал»ды саҡырып алып, уны тәбрикләй. Бер аҙ шикләнгән төҫ менән:

– Петр Александрович, мин һеҙгә ғәжәпләнәм. Һеҙ нисек итеп быңдай йәш көйөгөҙгә генерал булыуға өлгәшә алдығыҙ? Генерал булыу өсөн күп йылдар, күп замандар кисерергә кәрәк. Мин үҙ тормошомда быңдай хәлде беренсе мәртәбә күрәм, – ти.

– Бик дөрөҫ һөйләйһегеҙ, ҡәйнәм. Ләкин тормош барған һайын үҙгәрә бара бит.

– Ярар, уныһы шулай инде. Әле бик ҙур ниәт менән йөрөй икәнһегеҙ. Һуң, ирем ҡайтҡансы, сабыр итмәҫһеңме?

– Юҡ. Минең ваҡыт самалы. Ошондай ваҡытымда генераллыҡ дәрәжәһенә күтәрелгәнмен икән, тағы ла нығыраҡ тырышырға тейешмен. Тагы ла килер өсөн, ваҡыт теймәүе бар. Бирелгән ваҡыттан файҙаланып, тиҙерәк маҡсатыма ирешеп, урыныма ҡайтып етергә кәрәк.

– Ярар, бик яҡшы. Ҡыҙым, һин нисек ҡарайһың?

– Мин, хөрмәтле әсәйем, һеҙҙең рөхсәтегеҙ булһа, баш өҫтө. Атайымды нисек булһа ла күндерербеҙ әле. Мине ағайым ярата, шуға фекеремә ҡаршы килмәҫ, – ти Мария.

– Ярай, ярай, ҡыҙым. Мин һинең бәхетеңә ҡаршы килмәйем.

– Хөрмәтле генерал, бир ҡулыңды.

Лиза Мария менән Петрҙы, ҡулдарын тотторол, ҡуша. Петр, Мария һәр икеһе оялып ҡына үбешәләр.

– Ярай, Алла хәйерле ғүмер бирһен инде, балаларым, – ти әсәләре.

Имение тағы байрам төҫөн ала. Барыһы ла рәхәтләнеп хәл йыйҙылар, ти.

Петр өс көн, өс төн ҡунаҡ булып, үҙенең тройкаһына ултырып, ҡайтып китә. Уны оҙатыуға имениеның бөтә кешеләре сыҡтылар, хатта эттәренә тиклем ҡойроҡ болғап, кешеләр менән бергә торҙолар, ти. Мария менән әсәһе Петрҙы ҡосаҡлап, үбеп оҙаттылар, кенәздең өс-дүрт хеҙмәтсеһе ике-өс саҡрым ергә хәҙәре уны ат менән оҙата барҙылар, ти. Улар артынан кенәздең үҙе әте лә оҙата килде, ти.

Петр ауылына ҡайтып етте, ти. Барлыҡ ауыл халҡы: ҡыҙдарына йәш кенә генералдың ҡайтып килеүен күреп, ҡартҡарсыҡтар, ир уртаһы ирҙәр, ҡатындар – аяғына баҫҡаны Петрҙың атаһы Александр ҡарттың ихатаһына килеп тулдылар, ти.

Петр үҙе ауылдан киткән ваҡытта оҙатып ҡалған дуҫтарын саҡырып алды, ти. Уларға күп итеп аҡса бирҙе, ти. Шул

аҡсаға улары ике мискә араҡы алып ҡайттылар, ти. Барлыҡ халыҡ эсте, иҫерҙе, ти. Казанка ауылында был байрам Петр киткәнгә ҡәҙәре дауам итте, ти. Петр атаһына бик яҡшынан йорт һатып алып бирҙе, һабан, һыйыр, ваҡ мал алып бирҙе, ти. Петрҙы оҙатырға ауылда булған бөтә аттар егелгән ине, ти. Уны ун саҡрым ергә ҡәҙәре оҙаттылар, ти.

Петр тура станцияға барҙы, ти. Унда һалдат кейемдәре һатып алып, поезға ултырҙы, ти. Хеҙмәт иткән урынына биш көнгә кисегеп барҙы, ти. Шуның өсөн яза йөҙөнән офицеры уны картуф таҙартыусы итеп ҡуйҙы, ти.

Марияның атаһы, кенәз, «йәш генерал» уларҙа ҡунаҡ булып киткәс, ун көндән һуң ҡайтты, ти. Булып үткән ваҡиғаны ҡатыны Лиза менән ҡыҙы Мария баштан-аяҡ һөйләп бирҙеләр, ти. Генерал уларҙың был эшенә ҡаршы килмәне, тик кейәүҙең ҡайҙа хеҙмәт итеүен белмәүҙәре, адресын алып ҡалмауҙары өсөн шелтәләне, ти. Ете көндән килермен, тип тә, килмәүенән, берәй алдаҡсы ғына булманымы икән, тип шикләнде, ти.

Кенәз өйөнә ҡайтҡас, теүәл биш ай ваҡыт үтте, ти, ләкин Петрҙан бер генә лә хәбәр юҡ, ти. Марияның биш айлыҡ ҡорһағы ла булды, ти. Ҡыҙ үҙенең алданыуын һиҙеп, бик ҡайғырҙы, ти. Ул һарғайҙы, йәмһеҙләнде, ти. Кенәз дә, ҡатыны Лиза ла был эшкә аптырашта ҡалдылар, ти.

Ахыры кенәз бер көндө тороп, ашығып ҡына йыуынды, кейенде лә Марияға:

– Хәҙер беҙ Мәскәүгә барырға юлға сығабыҙ, әҙерлән, – тине, ти.

Мария атаһы менән Мәскәүгә китте, ти. Кенәз һуғыш министрына ваҡиғаны һөйләп бирҙе, ти.

– Нисек итеп ул генералды табырға? Адресы ла юҡ, – тине, ти.

Кенәз менән уйлағандан һуң, барлыҡ генералдарҙы йыйып, уларға смотр яһарға булдылар, ти. Барлыҡ генералдарҙы йыйҙылар, тик Мария улар араһында Петр Александровичтың юҡлығын әйтте, ти.

– Ни аҡыл табырға? Булмаһа, бөгөн офицерҙарға смотр яһайбыҙ, унда ла табылмаһа, барлыҡ һалдаттарҙы йыйып, смотр яһарбыҙ, – тине, ти, министр.

Көндәрен билдәләп, смотр яһалды, ләкин Петр табылманы, ти. Министр ҙа, кенәз дә аптырап ҡалдылар, ти. Инде ни эшләргә? Әллә строевой хеҙмәткә ярамаусылар араһында булырмы икән? Бөтөн ергә хәбәр иткәндәр. Приказда «Рядовой һалдаттарҙан фәлән числола кем отпускыға ҡайтҡан, шуларҙы ебәрергә» тиелә. Петрҙы денщик итеп тотҡан офицер: «Хәҙер үк Петр килеп етһен», – тип кухняға хәбәр итте, ти. Петр килгәс, уға хәҙер үк министр ҡырына барырға әмер бирә.

Петр һандыктан генерал кейемдәрен алып, алтын сәғәт, ҡылыстарын тағып, бик матур итеп кейенде, яһанды ла министр менән ҡарт кенәз эргәһенә китте, ти. Унда яҡынлашыу менән Мария:

– Ана, ул килә! – тип ҡысҡырып ебәрҙе, – атаҡайым, күрәһеңме, уның кеүек бер генә генералды ла күрмәнек бит! – тип Петрға ҡаршы сығып, йүгереп барып муйынына һарылды, ти. Кенәз менән министр аптырашып ҡалды, ти. Мөһабәт ҡиәфәтле Петр министр менән кенәзгә тулыһы менән честь биреп күрешкә, ти. Министр менән кенәз Петрҙы штабҡа алып кереп, уға булған хәлде һөйләргә ҡуштылар, ти. Ул тулыһы менән дөрөҫ итеп, булған ваҡиғаны һөйләп бирә.

Министр, уйнап, аҡсаһын, сәғәтен, ҡылысын, кейемдәрен оттороған генералды саҡыртып килтерҙе, ти. Ул булған ваҡиғаның дөрөҫлөгөн әйтеп бирә. Кәрт уйнап отолоусы генералдың кейемен Петрҙа ҡалдыралар, генералды рядовой итәләр.

Мария менән Петр кенәздең имениеһына ҡайтып, ҡунаҡ булдылар, туй яһанылар, ти. Туй бик күңелле булды, ти. Бик күп байлыҡ түгелде, ҙур мәжлестәр үткәрелде, ти. Тирә-яҡ крәҫтиәндәрҙән дә күп кеше ҡатнашты, ти. Шулай итеп, Мария менән Петр әле булһа рәхәт ғүмер кисерәләр, ти.

## 104. Сәлимйән

Бер байҙың Сәлимйән тигән бер улы булған. Ҡала кеүек бер ерҙә былар бик яҡшы ғына торғандар. Байҙың лавкалары өс ҡалала булған. Сәлимйән шул лавкаларҙан аҡса йыйып йөрөгән. Ул ун ете-ун һигеҙ йәштәргә еткәс, әсәһе атаһына:

– Сәлимйән егет ҡорона инде, ҡыҙ йәрәштерәйек, – тигән.

Атаһы ҡыҙ йәрәштерергә була. Ҡоҙа булып төбәләп барған беренсе урында уҡ ҡыҙ бирергә риза булалар. Килешеп, никах уҡыталар, туй була. Туйҙан ҡайтҡас, иптәштәре йыйылышып килеп, һорашалар:

– Шунан, кәләш оҡшанымы, Сәлимйән? – тиҙәр.

Сәлимйән:

– Оҡшаны. Кәләш үҙемә таман ғына, – ти.

Иптәштәре сығып киткәс, Сәлимйән атаһына керә.

– Йә, улым, йәмәғәт үҙеңдекеме? – ти.

– Юҡ, атай, минең йәмәғәт түгел, – ти.

Ҡарт:

– Һинеке түгел икән, тотмайыҡ, хәҙер үк ебәрәйек, – ти.

Кейәүләп бер барыу менән ҡыҙҙы айырып ебәрәләр. Атаһы шунан ҡыҙ һоратып барып, яңынан туй яһайҙар. Туйҙан ҡайт-

ҡас, тағы иптәштәре һораша. Сәлимйән тағы ла кәләшен маҡтай. Иптәштәре сығып киткәс, атаһы килеп инә лә һорай:

– Йә, улым, был йәмәғәтең үҙеңдекеме? – ти.

Сәлимйән бер аҙ уйланып тора ла:

– Юҡ, атай, йәмәғәт үҙемдеке түгел. Шулай ҙа быныһын айырмайыҡ, кеше көләр, – ти. – Әле генә берҙе айырҙыҡ бит, – ти. – Бай балаһы булғас, кешенән көлә, тиерҙәр, – ти.

Атаһы:

– Кеше йәмәғәте менән тороу яҡшы булмаҫ. Шулай ҙа үҙ балабыҙ булғас, риза булырбыҙ инде, – тип киленде алып ҡайтырға ризалыҡ бирә.

Бик ҙур әҙерлек менән киленде оҙатып алалар. Килен кеше быларға бик яҡшы хеҙмәт итә. Бик уңған булып сыға. Сәлимйәндең ата-әсәһе маҡтап бөтә алмай.

– Яҡшы әҙәм балаһы икән. Беҙҙең Сәлимйән белмәй алмаҫ, – тиҙәр.

Оҙаҡ та тормай, бай үлеп китте, ти. Бының бик күп алтын-көмөштәре: егерме дөйә йөгө алтын тәңкәһе, егерме дөйә йөгө көмөш тәңкәһе ҡала. Хазина ике гектар самаһы баҡсала ер аҫтындағы ҙур баҙҙа ине, ти. Унының асҡысы килендә ҡала. Сәлимйән атаһының нимә барын да белмәне, ти.

Күп тә тормай, әсәһе лә үлеп китә. Шулай итеп, хазина асҡысына килен хужа булып ҡала.

Сәлимйән төрлө ерҙәрҙә йөрөй. Кем нимә һораһа, шуны бирә. Шуның арҡаһында, лавкаларының малын таратып бөтөрә. Малын таратып бөткәс, ас торорға ла тура килә.

Сәлимйән шулай итеп йөрөгән арала, ҡатыны элекке йөрөгән егете, граф улы менән бәйләнеш тотоп, шуның менән йортҡа хужа булып ҡалыу тураһында уйлай башлай. Шуның өсөн берәр көнләп ас торһа тора, хазинаға кермәй. Сәлимйән:

– Әйберҙәрҙе һатыр инек, бөгөн генә һатып булмай. Ҡайҙан уға тиклем аҡса табып торорға инде, – ти.

Ҡатын:

– Граф балаһы бик бай. Барып, шунан берәй йөҙ һум һорап тор, – ти.

Сәлимйән барып, граф балаһынан:

– Беҙ бик асығабыҙ, әйберҙәрҙе һатҡансы, берәй йөҙ һум аҡса биреп тор әле? – тип аҡса һорай.

Граф балаһы, көнөн тәғәйенләп, аҡса бирә. Сәлимйән әйберҙәрен һатып алған бер йөҙ һумды түләй. Ҡалғанын ашарға, эсергә тотона. Лавка эсендәге малын һатып ашап бөткәс, өс көн ас торалар. Ҡатын һаман хазинаның барлығын әйтмәй, асҡысын күрһәтмәй:

– Эй, ҡарт, бик бай кеше балаһы инең. Бөтә байлыҡтарыңды бөтөрҙөң. Хәҙер өй эсендәге быны был әйберҙәрҙе лә һатырға

тура килә. Уны һатҡансы, граф балаһынан бер өс-дүрт йөҙ һум аҡса һорап торор инең, – ти.

Сәлимйән тағы граф балаһына бара.

– Минең баш бөткәс, бөткән инде. Бөтә нәмәләрҙе һатҡансы бер өс-дүрт йөҙ һум аҡса биреп тор әле, – ти.

Граф малайынан биш йөҙ һум алып ҡайта. Ҡайтҡас, ҡатынына аҡсаларҙы бирә лә:

– Бөтә нәмәләрҙе һатып түләрбеҙ ҙә, үҙебеҙ башты алып сығып китербеҙ, – ти.

Ҡатыны:

– Кешенең дә күңеле булыр, әллә граф балаһын саҡырабыҙмы? Йортто ла күреп китер ине, – ти.

– Ярар. Саҡырайыҡ, – тип, Сәлимйән үҙе саҡырыусы булып китә.

Бара ла был граф балаһына:

– Мин һине ҡунаҡҡа саҡырырға килдем. Бик күп ярҙам иттең. Йортто ла күреп китерһең, – ти.

Граф балаһы ризалыҡ бирҙе, ти. Хәҙер былар һый-хөрмәткә бик күп нәмәләр йәтешләп, ҡунаҡ көтәләр. Әйтелгән ваҡытҡа граф балаһы килеп төшә. Ҡатыны:

– Сәлимйән, йәнем, ана, ҡунағың килде. Ят кешегә йөҙ күрһәтмәйем, яҡшы түгел, – ти.

Сәлимйән сығып ала. Ҡунаҡ инә. Һый башлана. Сәлимйән хәйлә ҡапсығын кейеп ултыра. Үҙенә сират еткәс, араҡыны хәйлә ҡапсығына тултыра. Ҡунаҡ төп күтәрә эсеп ултыра. Сәлимйән иҫергән кеше булып, ҡунаҡ алдында еңелсә генә һөйләнә башлай, тиҙҙән ҡаты иҫергән булып, ҡысҡырып йырларға тотона. Шунан урындығы менән ауып, шул ерҙә йоҡлап та китә. Ҡунаҡ:

– Эй, Сәлимйән ағай, Сәлимйән ағай, үҙең ҡунаҡ саҡырғанһың, үҙең йығылып ятаһың, – тип тегеләй тарта, былай тарта, Сәлимйән тормай.

Шунан һуң Сәлимйәндең бисәһе килеп:

– Ни эшләне, әллә сәсрәнеме? Үлһә генә ярар ине, – ти.

Ҡунаҡ:

– Юҡ, үлмәгән. Үлмәһә лә бер нәмә лә белмәй, – ти.

Ҡатын:

– Ас торғанға, шулай тиҙ иҫерҙе ул, – ти.

Сәлимйән быларҙың һөйләшкәнен тыңлап ҡына ята. Ҡатыны килеп граф балаһын ҡосаҡлап ала...

– Инде быны бөтөрөргә тигәс, бөтөрөргә тотонғанмын. Барыбер бөтөрәм. Йорттарҙы һин ал. Минең ҡулымда ҙур хазина бар, – тине лә, ти, асҡыстарҙы алып, баҡсаға киттеләр, ти.

Улар сығып киткәс, ҡайҙа кергәндәрен ҡарап тора ла Сәлимйән үлән араһына инеп ята. Ул ваҡытта ҡатын Сәлим-

йәндең атаһынан ҡалған хазинаны граф балаһына күрһәтеп тора. Улар кире урап ингәнсе, Сәлимйән тағы ла урынына барып ята. Тегеләр икеһе бергә ҡуналар. Сәлимйән һаман иҙәндә ята.

Таң менән ҡатыны сығып китә. Сәлимйән үҙенә үҙе:

– Мин ни эшләнем? Хаталанғанмын бит. Ҡунағым да бар ине, – тип һөйләнеп ултыра.

Ҡунаҡ та уяна:

– Кисә бик кинәт кенә иҫереп киттең, Сәлимйән ағай, – ти.

– Бик маҙа китәрмәнемме? – ти.

Ул арала тыштағы эше менән булашҡан ҡатыны ла ҡайтып инә.

– Эй, Сәлимйән, Сәлимйән, үҙең ҡунаҡ саҡырҙың. Ҡунаҡты мин тәрбиәләй алманым. Әлдә ҡайтып китмәне, – ти.

Ҡунаҡ:

– Эскән саҡта ундай ғына була инде ул. Зарар юҡ, – ти.

Ашағас, эскәс, граф балаһы ҡайтып китә.

Аҡса бөткәс, Сәлимйән йортто һатыу тураһында иғлан тарата. Шул иғлан буйынса байҙар йыйыла, граф балаһы ла килә. Бер бай биш мең бирә. Шунан граф балаһы ун мең бирә лә йортто һатып ала. Һатып алған кеше, Сәлимйән өйҙән сығып китеүен хәбәр иткәс, килергә була.

Граф балаһынан алған аҡсаны Сәлимйән күпкә еткермәй бөтөргәс, ҡатыны:

– Эй, һин, былай тормайыҡ инде. Мине айырып ебәр, – ти.

Сәлимйән:

– Ярай, айырырмын, – ти. – Һатҡан нәмәләрҙең ярты аҡсаһын түлә. Һине алғанда, күпме аҡса түгелгән, шуны ла ҡайтар. Шунан айырырмын, – ти.

Ҡатын:

– Улар күпмегә етер һуң? – ти.

Сәлимйән:

– Фәлән тиклем, – ти.

Ҡатын граф балаһына барып:

– Теге нәмә мине айырам тигән була. Әммә: «Түгелгән малдар өсөн ярты хаҡын түлә», – тип әйтә. Мин шунан айырылып, араны өҙәйем, һин миңә аҡса биреп тор, – ти.

– Бирер инем дә, аҡсаны туҙҙырып бөтөрөлдө. Ҡайҙан алырмын инде? – ти граф балаһы.

Ҡатын:

– Һинең көйөңә бөтөн байлыҡтарымды бөтөрҙөм. Өйҙө һаттыҡ. Сәлимйән өйҙән сыҡмайынса, хазиналарҙы алып булмай, – тигәс, граф балаһы икенсе байҙан аҡса ала ла ҡатынға бирә.

Ҡатын аҡсаны Сәлимйәнгә килтереп биргәс, былар айырылышалар.

Ҡатын, өйҙән сығыу менән, граф балаһына китә. Граф балаһы Сәлимйәнде йорттан сығырға ҡыҫтай, Сәлимйән сыҡмай. Сәлимйән баҙҙың йоҙағын ватып, хазинаны теүәлләй, дуҫ-иштәренә инә. Улар керетмәй:

– Малыңды бөтөрҙөң, йөрөмә, – тип ҡыуып сығаралар.

Сәлимйән:

– Улай икән... Малың бөткәс, ҡәҙерең бөтә икән, – ти.

Атаһы менән ҡатнашып, бергә ашап-эсеп йөрөгән Төхвәй үҙенең бисәһе менән йортоноң өҫкө ҡатынан ҡарап торалар ине, ти. Бисә:

– Ана, бөтә байлығын бөтөргәс, был яҡҡа килә, – ти, Сәлимйәнде күреп.

– Аҫҡы ҡатҡа керетегеҙ әле, күрәйем, – ти Төхвәй.

Сәлимйәнде аҫҡы ҡатҡа индерәләр. Аҫҡы ҡатҡа ингәс, Сәлимйән ишек төбөнә генә ултыра ла:

– Төхвәй ағай өйҙәме? – тип һорай.

Хеҙмәтселәре:

– Өйҙә. Уларҙа йомошоң бар инеме? – ти.

Шунан өҫкө ҡатҡа инеп:

– Төхвәй ағай, һине бер алама ғына кейемле кеше саҡыра, – тиҙәр.

Төхвәй бай төшөп:

– Нихәл, энем? – ти.

Сәлимйән:

– Әле йән бар, – ти.

– Эй, энем, энем, яҡшы ғына кеше балаһы инең. Атаң бик яҡшы кеше ине. Бергә хеҙмәт иткәйнек беҙ. Ата малының ҡәҙерен белмәнең, туҙҙырып бөттөң, – ти.

Сәлимйән:

– Ни эшләйһең бит. Миңә яҙған мал булмағандыр инде, – ти.

Төхвәй:

– Әле ни эш бөтөрөп, нимә уйлап йөрөйһөң? – ти.

Сәлимйән:

– Мине өйҙән сығаралар. Минең ваҡ-төйәк нәмәләр бар ине. Шуны, берәй келәт бирһәң, һиңә ҡуйып тороп, үҙем ил гиҙеп сығып китер инем, – ти.

Бай:

– Һинең унда нимәләр бар? – ти.

Сәлимйән:

– Ваҡ-төйәк кенә инде шунда, – ти.

Бай:

– Унда һинең йүнле нәмәләрең ҡалмаған икән. Келәттәр буш түгел. Ана, ат аҙбары буш. Шунда ҡуйып торорһоң, – ти.

Сәлимйән:

– Миңә шул әйберҙәрҙе килтерер өсөн, бер ун дөйә бирер инең, – ти.

– Ярар, атаң бик яҡшы кеше ине. Кешегә ярҙамсыл ине, бирермен, – ти бай.

Сәлимйәнгә сәй эсереп, ҡайтарып ебәрә. Ҡайтҡанда, тоҡто күберәк алып барырға әйтеп китә. Бай оҙатырға сыҡҡас, тағы:

– Ағай, ебәрә күр инде, иртәрәк ебәр инде, – ти.

Байҙың кешеләре килеүгә аш-һыу әҙерләй. Ун ылаулы биш кеше килеп тә етә. Сәлимйән ҡаршы сығып ала. Теге бишәү:

– Был байғоштоң нимә генәһе бар икән? Был хәтлем ылауға балсыҡ тейәтәме икән? – тиҙәр.

Инһәләр, өҫтәл тулы һый-хөрмәт, барыһы ла бар, ти.

– Эсегеҙ, ашағыҙ, – ти Сәлимйән.

Килеүселәр:

– Әллә нимәләр йәтешләп, һый әҙерләгән булған бит әле, – тиҙәр.

Ашап-эскәс, ат менән баҡсаға керәләр. Әйберҙәрен әҙерләйҙәр. Баҙҙы асып ебәрәләр. Асып ебәрһәләр:

– Һи-и! Бында Төхвәй ағай ише генә түгел икән. Алтынына егерме ылау кәрәк! Көмөшөнә егерме ылау кәрәк! Хәҙергә баҡырын алайыҡ. Уныһы ун ылауҙа бөтәр, – тиҙәр.

Ҡайтһалар, Төхвәй ағай ҡаршы сыға:

– Ниҙәр алып ҡайттығыҙ? – тип һорай.

– Тегендә байлыҡ бөтөрлөк түгел. Унда ғүмерлек хазина бар. Беҙгә ун ғына ылау етмәй. Тағы ҡырҡ ылау менән барырға булдыҡ, – тиҙәр.

Бай ҡатынына:

– Улай булғас, үҙебеҙҙәге дөйәләр генә етмәй. Бар, ҡырҙан барып һорап алып кил, – ти.

Шунан ҡырҡ ылау алып, Төхвәй бай үҙе лә китә. Алтын-көмөштө алып ҡайтып, яҡшы келәткә бушаталар. Сәлимйән йорттан сыға ла граф балаһына йортҡа инергә хәбәр ебәрә. Граф балаһы бының элекке ҡатыны менән килеп инһә, өйҙә лә, баҙҙа ла бер ни ҡалмаған, ти. Граф балаһы:

– Сәлимйәнде алдаған кеүек, мине лә алданыңмы ни? Минең кешенән алған аҡсаларымды түләү өсөн, был өйҙәр генә етмәй. Шуның өсөн мин төрмәгә ултырам. Инде хәҙер һине ни эшләтәйем? Һуғып ҡына үлтерәйемме? – тип ҡатынды типкеләп сығарып ебәрә.

Ҡатын хәйер һорашып йән аҫрай башлай. Граф балаһы ла йорт, баҡсаларын һатып, бурыстарын түләй ҙә сығып китеп, хәйер һорашып йөрөй.

Хәҙер Төхвәй бай Сәлимйәнде өҫкө ҡатҡа алып инергә тырыша. Сәлимйән инмәй. Бай ҡатыны менән:

– Зиһенле егет. Бөтөрмәгән әле байлығын, – тиешәләр.

Байҙың бер ҡыҙы бар ине, ти. Шуны Сәлимйән алмаҫмы, тип һөйләшеп ултыралар.

– Был хәтлем байлыҡҡа бөтә кеше лә ҡыҙ бирергә риза булыр. Был малды ситкә ебәрергә ярамай.

– Был мал менән рәхәт йәшәргә булыр, – тиҙәр.

Шунан һуң бай Сәлимйән янына инеп һүҙ башлай:

– Инде гел яңғыҙ тора алмаҫһың. Йәмәғәт алырға тура килер. Беҙҙең берҙән-бер ҡыҙыбыҙ бар, шуны бирергә уйлайбыҙ, – ти.

Сәлимйән:

– Алай булһа, мин быяа шундай кеше инде. Ҡыҙығыҙ ятһа, – ти.

Ҡыҙ риза була. Бирәләр. Икеһен аҡ келәткә ябалар. Ҡуşылғас, йәмәғәт үҙемдеке, тип былар бик яҡшы тора башлайҙар.

Бай:

– Был байлыҡты әрәм итмәйенсә, файҙаланайыҡ. Сит илдә сауҙа бик шәп бара. Күн байҙар йөрөгән ергә беҙ ҙә барайыҡ, – ти.

Сәлимйән риза була. Төхвәй бай сауҙагәрҙәргә әйтә:

– Беҙ ҙә әҙерләнер инек, беҙҙең кейәүҙе лә алып барһағыҙ ине, – ти.

Тегеләр риза булалар. Былар әҙерләнгәндәр. Сәлимйән йөҙ дөйә менән китә. Ҡатыны, ун саҡрым ергә еткәнсе, оҙатып ҡала:

– Исән-һау ҡайт. Мин һине көтәрмөн, – тип илап тороп ҡала.

Сәлимйән китә. Байҙарҙан сит ил хәлдәрен һорашып бара. Барғас, алтынға әйләндерелгән йорт күрәләр. Сәлимйәнгә әйтәләр:

– Был йортта бер әбей тора. Унда инергә ярамай, байлығыңдан яҙырһың, – тиҙәр.

Йорт ҡырына килеп еткәс, Сәлимйән:

– Инәйек. Ошондай ергә инмәгәс, ҡайҙа инәбеҙ, – ти.

Әбей сығып:

– Өйгә инегеҙ. Урын бар. Әйберҙәрегеҙҙе ҡарауыллаусы ла бар, – ти.

Үҙе лә саҡырғас, былар инәләр. Ингәс, әйберҙәрҙе бушатҡанда, килешеү төҙөйҙәр.

– Минең өйрәтелгән бесәйем төнө буйы шәм тотоп сыға. Был шәм һүнмәҫ. Ҡарауылдар йоҡламаҫ. Әгәр ҙә шәм һүнһә, ҡарауылдар йоҡлаһа, мин дә һиңә йөҙ дөйә мал бирәп сығарам. Һүнмәһә, йоҡламаһалар, һин бөтә малыңды ҡалдырып сығырһың, – ти әбей.

Сысҡандар юҡ, ҡарауылсылар йоҡламай. Бесәй шәмде тота,

ут һүнмәй. Шулай итеп, Сәлимйән тейәп килгән бөтә малын ҡалдырып сығып китә. Байҙар янына бер ҡапсыҡ ҡына күтәреп килеп инә. Байҙар:

– Ни эшләнең һин, Сәлимйән? – тиҙәр.

– Ҡазаға юлыҡтым. Инде ҡайнымдарҙы көйәләндермәгеҙ, йәмәғәткә генә әйтегеҙ, – тип күрешеп сығып китә.

Байҙар сауҙа итеп, ҡайтырға юлға сығалар. Сәлимйәндең юлдаштары ҡайтҡанын ишеткәс, йәмәғәте уны һорашырға китте, ти. Улар иренең нисек итеп малын юғалтҡанын һөйләп бирәләр.

Ҡатын бик илап ҡайтып килгәндә, әсәһе сығып, ишек асып индерә.

– Ниңә илайһың? Әллә кейәү тураһында насар хәбәр ишеттеңме? – ти.

Ҡыҙы тағы нығыраҡ илап, бөтә ишеткәнен һөйләп:

– Сәлимйән кеүек ир ҡабат табылмаҫ инде. Бик һәйбәт ине, – ти.

Бер йыл торғас, теге байҙар тағы ла сит ергә китергә әҙерләнәләр. Сәлимйәндең ҡатыны:

– Элекке барған ерегеҙҙән барһағыҙ, Сәлимйәнде күрмәҫһегеҙме? Күрһәгеҙ, әйтегеҙ әле, ҡайтһын, миңә уның малы кәрәкмәй, үҙе кәрәк. Мин һеҙгә хат яҙып килтерермен, – ти.

Байҙар сәфәр сығыр саҡта, Сәлимйәндең ҡатыны хат яҙып килтерә. Хат яҡшы яҙылған.

– Һорашып, белеп ҡайҙа йөрөгәнен, үҙегеҙ менән бергә алып ҡайтығыҙ, – тип бик күп аҡса ла биреп ебәрә.

Байҙар элекке барған ерҙәренә баралар. Барғас, тауарҙы приказчиктарына һатырға ҡушып, Сәлимйән күрмәҫме тип, һәр бер лавка ҡырына ҡатынының хатынан күсерек элеп ҡуялар.

Сәлимйән ошо ҡалала була. Беҙҙең яҡтан байҙар булыр әле, тип ҡала буйлап ҡарап йөрөй. Бер байға керһә, иғлан таҡтаһындағы хатты күреп уҡый. Уҡыһа, күҙ йәштәре килеп сыға. Приказчик быны күреп:

– Ниңә аптырандың? – ти.

Сәлимйән:

– Бик яҡшы яҙылған. Ҡайҙа һуң был бай? Әгәр ҙә ҡайтһа, теге эҙләгән кеше бында икән, тип әйтегеҙ, – ти.

Бер аҙ барғас, икенсе лавка эргәһенә килһә, шул уҡ хатты күреп йәнә илай башлай. Унан:

– Ниңә илайһың? – тип һорайҙар.

Сәлимйән:

– Ошо егет менән бергә һатыу иткәйнек. Малынан яҙып, иленә ҡайтмаған кеше хаҡында ишеткәйнем. Шул булған икән. Минең дә йәмәғәтем бар ине. Ул да мине шулайтып көтәлер инде, тип уйлайым, – ти. Бай:

– Әгәр ҙә осратһаң, миңә алып кил. Мин һиңә күп нәмә бирермен. Уның малы кәрәкмәй, үҙе генә булһын, – ти.

Байҙар тағы ҡайтып төшә. Сәлимйәндең ҡатыны һорашырға килә.

– Күрмәнегеҙме, ишетмәнегеҙме? – ти.

Бай:

– Беҙ һинең хатыңды ҡуйған инек, минең приказчигыма бирәү, был кеше менән бер нисә ай бергә эшләгән инек, тигән, – ти.

Ҡатын бара икенсе байга. Уныһы:

– Бер кеше килеп хатты уҡығас: «Ошо ҡалала мин был кеше менән бергә эшләгән инем», – тине. Сәлимйән шул ҡалала икән, – тине, ти.

Быны ишеткәс, ҡатын бик шатланып ҡайтты, ти.

Эсәһе:

– Бик шатланып ҡайтҡанһың. Әллә ҡайтыу хәбәре бармы? – ти.

– Ул иҫән икән. Үҙен күреп, һөйләшеүгә һөйләшмәгәндәр, – ти ҡыҙы.

Икенсе йылда байҙар тағы ла китергә йыйына башлайҙар икән. Ҡыҙ:

– Атай, Сәлимйән китеп юғалды. Малдар тик ята. Мин шул малдар менән ҡалаға китәйем, паспорт алып бир әле, – ти.

Атаһы:

– Ярай. Ҡулыңдан килһә, паспортты үҙең барып ал, – ти.

Ҡыҙ паспорт ала. Паспортҡа Сәтәүи Тәхәүи улы тип ирҙәр исеме менән яҙҙыра, үҙенең исеме Фатима булган була. Ҡыҙ хәҙер Сәтәүи бай булып китә. Барырға әҙерләнгән, шул ҡалаға барып бер таланып ҡайтҡан байҙан теге әбейҙең нисек талаганын һораша.

– Уның йортонда сысҡан булмай, шуға бесәй ҡулындағы шәм һүнмәй. Беҙ, быға ышанмай, килешеү төҙөйбөҙ, – ти бай.

Фатима-«Сәтәүи бай» бер ситлек итеп сысҡан ала, байҙар менән сығып китәләр. Ҡалала теге ҡарсыҡтың йортона килеп еткәс, байҙар:

– Был ҡортҡаға инмә. Сәлимйәнде ошо харап итте, – тиҙәр.

Ҡыҙ инмәксе була. Тегеләр ҙә бүтәнсә ҡаршылашып тормайҙар, инәләр. Инеү менән, әүәлгесә килешеү төҙөйҙәр. Шәм һүнмәй, сысҡандар күренмәй. Бер сәғәттәй ваҡыт үтә. Бер сағында Фатима бер сысҡанды ең эсенән генә төшөрөп ебәрә.

– Ана, әбей, сысҡан! – тип ҡысҡырып та ебәрә, аңғанса бесәй сысҡан артынан ташлана – шәм һүнә.

Әбей:

– Бай, һин мине алданың, – ти.

Йөҙ дөйә менән килгән Фатима иртән ҡарсыҡтың йортонан ике йөҙ дөйә малы менән сығып китә. Һатыусыларына һатырға

ҡуша ла үҙе Сәлимйәнде эҙләп китә. Йөрөп ятһа, берәүҙең текләп ҡарауын һиҙә. Ҡараһа, бер ят кеше.

– Һин ниңә текләп ҡарап тораһың? – ти Фатима.

Һөйләшеп китәләр. Ул Сәлимйән менән бергә эшләгән кеше булған икән.

– Мин уның менән мунсала эшләйем. Кеше йыуабыҙ, – ти теге кеше.

«Сәтәүи бай»:

– Әйҙә, һин миңә шул мунсаны күрһәт, – ти. – Унда йомош бар ине, – ти.

Теге кеше байҙы алып барып күрһәтте, ти. Сәлимйән кешеләрҙең арҡаларын һабынлап йөрөй, ти. Хәл йыйырға сыға. Сыҡҡас, йәш кенә бер байҙы күрә лә:

– Эй, бай, һин ҡайһы яҡтан? – ти.

Фатима-«Сәтәүи бай» ҡайһы яҡтан булыуын әйтә.

– Мин дә шул яҡтыҡы, – ти. – Мин бик яҡшы йыуындырам. Әйҙә, һин дә минең янға ин, – ти.

Ҡатын иң эске кеймдәрен һалмай ғына йыуынырға инә. Йыуындыра ҡатынын. Ҡатын Сәлимйәнгә, ҡуйылған хаҡтан тыш, күп итеп аҡса бирә. Ҡатын:

– Һин беҙҙең яҡтан булғас, ниңә ҡайтмайһың? Кис менән миңә кил. Һөйләшеп ултырырбыҙ, – ти.

Сәлимйән байынан һорарға инеп китә:

– Беҙҙең яҡтан байҙар килгән. Шулар ҡырына барайым әле, – ти.

Ике сәғәткә генә бар. Ике сәғәттән ҡайтмаһаң, эшеңдән сығарып ебәрермен, – ти байы.

Сәлимйән «Сәтәүи бай» янына килә, ҡағыҙҙы күрһәтеп:

– Бына, ике сәғәткә генә рөхсәт итте, – ти.

Шунан «Сәтәүи бай» үҙенә барыу өсөн номер биреп китә. Сәлимйән ҡала, байҙар номерҙарына ҡайтып китәләр.

Кис була. Сәлимйән «Сәтәүи бай»ға китә. Өҫтөндә ҡатып бөткән тун булғас, ҡарауылсылар үткәрмәҫкә итә быны.

– Бында байҙар тора, – тиҙәр.

Сәлимйән «Сәтәүи бай»ға хәбәр биреүҙе һорай. Ҡарауылсылар барып әйткәс, бай рөхсәт бирә. Сәлимйән инеп китә. Ашарға, эсергә килтерәләр. Сәлимйән ил хәлдәрен һораша. Шунан бай:

– Һин үҙ хәлеңде һөйлә, – ти.

Эсеп йомшарғас, Сәлимйән:

– Минең күңел бик насар. Был донъяла минең бер йәмәғәтем бар ине. Иҫемә төшһә, ҡулыма тотҡан әйберҙәрем төшә. Ғәрләнеп, ҡайтманым, – ти.

Бай:

– Булыр, булыр. Һинең йәмәғәтең ҡартайғандыр бит инде. Хәҙер шул көйө түгелдер, – ти.

Сәлимйән:

– Юҡ, ул ҡартаймаҫ, тәрбиә менән тора ул, – ти. – Бына мине хәҙер Сәлимйән тип белмәҫтәр инде, – ти.

«Сәтәүи бай»:

– Һин үҙебеҙҙең яҡ кешеһе. Тартынма. Аша, эс. Минең тиҙ генә барып киләһе ерем бар ине, бара һалып киләйемсе, – ти.

Сығып китә «бай». Сығып китте лә, ти, был, ҡушылған саҡта Сәлимйән алып биргән кейемдәрен кейҙе лә Сәлимйән ултырған бүлмә аша әкрен генә уҙып китте, ти. Сәлимйән һикереп тороп:

– Фатима, һинме әллә?! – тип бер аҙ һушы китеп торҙо, ти. Шунан былар ҡосаҡтарына ташланышып, шул кисте үк яңынан ҡауыштылар, ти.

Был Сәлимйәндең бөтә кейемдәрен алып килгәйне, ти. Уны кейендереп, һатыусылар янына баш кассир итеп ҡуйҙы, ти. Сәлимйән кассир булып аҡса йыя. Былар ике йөҙ дөйәне дүрт йөҙ итеп, теге байҙар йөҙәр дөйәһен икешәр йөҙ итеп, ҡайтып киттеләр, ти. Илдәренә ҡайтып етеп, Сәлимйән менән Фатима бала-сағалы булып, татыу ғүмер итә башланылар, ти.

## 105. Аҡыллы ҡыҙ менән батша улы

Борон бер батша бар ине, ти. Унының бер генә улы булып был малай ун ике йәшкә етһә лә, атаһы уны уҡыта алмай, ти: тыңламай, ти, был. Ун бергә, ун икегә, ун өскә, ун дүрткә етә. Уны һаман да уҡыта алмайҙар.

– Уҡытмағыҙ! Уҡытһағыҙ, ғалимдарығыҙҙы аҫам! – тип әйтә икән был малай.

Шул уҡ ҡалала бер ҡарт менән бер әбей бар ине, ти. Ҡыҙҙары гимназияның аҙаҡҡы класында уҡый, ти. Шулай бер көн ҡайтһа, атаһы илап ултыра икән. Һорашһа, аталары:

– Батша һиңә улын уҡытырға ҡушты. Уҡыта алмаҫһың, балам, – тип ҡаңғырышалар. Ҡыҙ:

– Илашмағыҙ, уҡытырмын, – тип әйтте, ти.

Ҡыҙ батшаға барған да:

– Эш ниҙә, шуны асыҡларға килдем, – тигән. Батша:

– Улымды уҡытһаң, үҙең теләгән ергә өй һалдырып бирәм, – тине, ти.

Шунан былар ултырып һөйләшәләр. Ҡыҙ әйтә:

– Мин план бирәм, һин мәктәп эшләт, – ти. – Кеше сығырлыҡ булмаһын, стенаһы грифелле* булһын, – тип батшаға планын бирҙе, ти.

Күпмелер ваҡыттан әйләнеп килеп ҡараһа, мәктәп әҙер, ти. Батша улына:

– Әйҙә, мәктәпкә инәйек, – тип алып керә лә тегене бикләй ҙә ҡуя.

Мәктәптә был бер тәүлек ултыра. Шунан теге ҡыҙ асыуланып килеп инде лә малайға бер стакан һыу, бер телем икмәк бирҙе, ти. Батша улы стаканды иҙәнгә атып бәрҙе, ти. Ҡыҙ малайға дүрт бит хәреф бирҙе лә, сыҡты ла китте, ти. Теге аңлай башлай: уҡыһаң – ашаталар, уҡымаһаң – юҡ икән. Иртәгеһенә ҡыҙ килһә – малай дүрт стенаны тултырып хәрефтәр яҙған, ти. Өс көн эсендә бөтә хәрефтәрҙе танырға өйрәнеп, аҙна эсендә – йыллыҡ уҡыуҙы, бер ай эсендә – етенсене, ике айҙа – ун йыллыҡ уҡыуҙы бөттө, ти. Өс аҙнала егеттең ғилеме ҡыҙҙың ғилеменә етә. Шул хәтле зирәк, зиһене бик камил була. Ҡыҙ, батшаға килеп:

– Көн тулды, – тине, ти.

Батша ғалимдарын йыя, улына имтихан ҡыла. Малай яҙыуҙы ла уҡый, хисапты ла сығара. Атаһының бер яҙыуын күреп:

– Ошолай итеп яҙыу яҙҙыңмы? – тип, үҙе һәйбәт итеп фарман яҙҙы ла, уҡып ебәреп, йыйылған халыҡты хайран ҡалдырҙы, ти. Шунан ғалимдарға:

– Һеҙҙең белемдәрегеҙ миңә етмәй, – тип әйтте, ти.

Батша ҡыҙға йорт һалып, ашнаҡсы бирҙе, ти.

Ун етегә еткәс, батша улын өйләндерергә булған. Егет:

– Үҙемде уҡытҡан ҡыҙҙы ғына алам, – ти.

– Ярамай, – тиҙәр быға. Егет һаман үҙенекен һөйләй. Бик ныҡышҡас, аҙаҡ килеп:

– Ярар инде, йәшкә лә тиңдәр, – тип алып бирҙеләр, ти. Арыу ғына тороп ятҡанда, егет, мәктәпкә булһа ла сығып, башҡа донъя күтәм, тип, башҡа сыҡтылар, ти. Әҙме-күпме торғайнылар, һүҙ эйәрә һүҙ сығып, бәхәсләшеп китеп, батша улы ҡатынды ярҙы-ярҙы ла һунарға китте, ти. Ҡайтҡас, ашатмай ыҙа сиктерҙе, ти.

– Туҡта, әсәйем менән кәңәш итеп киләйем, – тип бисәһе, рөхсәт алып, атын менеп әсәһенә китә. Ҡайтып, икенсе батша ҡыҙының һүрәтен алып килә. Шул һүрәтте күреп ҡала ла ире:

– Миңә бир, – тип инәлә икән.

Бирә. Егет ҡыҙға ғашиҡ булып, уйға ҡала. Уйланып йөрөй-йөрөй ҙә, ҡыҙ артынан китергә әҙерләнә. Аҡсаларын һалып ала, генерал кейемен кейә. Китә күрергә.

Ул батша ҡыҙы үҙен һөйләштергән кешегә кейәүгә сығырға һүҙ биргән булған икән, ти. Кем, һөйләштерергә итеп тә, булдыра алмай, шуны аҫтыра, ти. Егет төнгө сәғәт ун икелә барып етә. Барып етһә – баҡса. Унда өс ҡыҙ кәрт уйнай. Егет тә уйнай башлай. Аҡсаһын, атын оттора. Ҡыҙ янына үтеү өсөн рөхсәт алырға алты-ете урынға бара. Рөхсәт алғас, барып, ҡыҙ янына ултыра. Ҡыҙҙы һаман һөйләштерә алмай, ти. Сәғәт етеп килә,

үтеп китә. Егет һөйләштерә алмай. Һөйләштерә алмағас, егетте аҫырға алып китәләр. Алып сыҡҡас, аҫыусылар:

– Егетте аҫмайыҡ, йәш. Мунсасыны аҫайыҡ, барыбер ҡарт, – тип мунсасыны аҫалар.

Егет мунсасы ҡарт урынына мунсала эшләй башлай. Ҡасыр әмәл юҡ. Был атаһына: «Ҡатынымды, ҡәйнәмде, ҡайнымды аҫ», – тип хат яҙа. Хат ҡатынының ҡулынан үтә. Ҡатыны: «Килененде яҡшы тәрбиәлә», – тип хатты ҡабаттан яҙа. Ҡатын бер һарай эшләтә, эсендә арғымаҡ тора. Бер төндө атты менеп, генералса кейенеп, теге батшалыҡҡа китә. Ҡатын күҙ бәйләй белгән, ти. Барып, күҙ бәйләп, теге кәртселәрҙең аҡсаларын отоп ала. Аҙаҡ ул ҡыҙҙарҙың үҙҙәрен дә óта.

– Ярҙам итешмәһәгеҙ, үҙегеҙҙе алып ҡайтып китәм, – ти, береһенә шкаф эсендә, икенсеһенә койка аҫтында, өсөнсөһөнә өҫтәл аҫтында ятып, әйткән саҡта, һөйләшергә ҡуша.

Тегеләр китәләр. Ҡатын, рөхсәт ҡағыҙы алып, батша ҡыҙы янына үтә. Сәғәт ун ике лә килеп етә. Теге ҡыҙ йөрөй арлыбирле, һөйләшмәй. Ҡатын:

– Койка, һөйләш! – ти.

Батша ҡыҙы:

– Эй, аҡылһыҙ, койка һөйләшә буламы ни? – ти.

– Эй, шкаф, һөйләш!

– Шкаф һөйләшә буламы?

– Һөйләшһә нишләрһең? Ну-ка, өҫтәл, һөйләш! – тип, ҡамсыһы менән өҫтәлгә һуғып ебәрҙе, ти. Теге ҡыҙҙар аҫтан һөйләшеп яталар икән. Был шулай итеп, батша ҡыҙын аптыратып, койканы, шкаф менән өҫтәлде һөйләштерҙе, ти, ҡыҙ. Мунса яҡтылар. Ҡыҙ мунсасы булып йөрөгән ирен ҡырындырып, үҙенең урынына кертеп ебәрҙе лә, үҙе мунсасы кейемен кейҙе, ти. Батша ҡыҙын алды, ти, егет. Шул ҡыҙ менән тора башланы, ти. Егеттең тәүге бисәһе генерал кейеме менән мунсасы кейемен алып, ҡайта ла китә. Егет тәүге бисәһенең тереләген ишетеп, атаһына хат яҙа: «Бисәмде ҡулға ал», – тип. Хатты алып барып бирәләр – бисәне ябып та ҡуялар. Егет бик күп мал алып, ҡыҙ менән ҡайтып китә. Ҡайтып еткәс, тәүге бисәһен сабам тигәндә:

– Бүләк бирәм, – тип бисәһе унын ҡулын тотоп ала. Бүләк тип биргән төргәкте егет һүтеп ҡараһа, генерал кейеме менән мунсасы кейеме килеп сыға. Егет бөтәһенә лә төшөндө, ти. Төшөнгәйне – теге батша ҡыҙын:

– Һинең арҡала аҡыллы ҡатынымды үлтерә яҙҙым, – тип һелтәне лә ебәрҙе, ти.

Батша аҡыллы киленен үҙенең урынына ултыртты, улын вәзир итте, үҙе ялға сыҡты, ти.

Бөгөн булһын һин дә мин татыулыҡта, рәхәтлектә донъя көтөп яталар, ти.

## 106. Мулланың шайтанға әйләнгәне

Боронғо заманда Төхвәй тигән бер малай була. Уның атаәсәһе булмай. Ошо малай бер йыл ситтә йөрөп ҡайта: яҡшы кейенгән, аҡсаланған, ти. Ҡайтыу менән, баш-күҙҙең һаулығынан, күршеләге муллаға бер унлыҡ, оҫтабикәгә бишлек алтын бирә. Был егеттең байлығына мулла менән абыстайҙың иҫтәре китә.

Мулланың еткән бер ҡыҙы бар икән. Нисек тә Төхвәйгә шуны бирергә ҡыҙыша башлайҙар.

– Үҙе бай, үҙе яңғыҙ, – тиешәләр.

Бер аҙҙан һуң Төхвәй тағы муллаға керә. Мулла менән оҫтабикә алсаҡ ҡаршы алалар быны.

– Түргә уҙ, әйҙә, түргә үт, Төхвәтулла, – тиҙәр.

Төхвәй ултыра:

– Ашығыс йомош менән индем, ваҡытым юҡ, рәхмәт. Мулла ағай, минең ҡалала банкыла аҡсам бар. Шуны алып ҡайтырға бот силәгең менән атыңды биреп тормаҫһыңмы икән? – ти. – Аҡсаны бот силәге менән генә үлсәп алам, – ти.

Мулла атын да, силәген дә бирә. Төхвәй ҡалаға барырға ла йыйынмай. Ҡайҙа етте шунда йөрөп, көндө уҙғарып, төпөн ҡайта. Ҡайтҡас, атты туғарып, муллаға тапшыра. Мулла:

– Аҡсаңды алып ҡайттыңмы, балам? – тип һорай.

Төхвәй:

– Алып ҡайттым. Тик һанап торманым инде. Хәҙер бушатам да, һанаһам, шунан һанармын, – ти.

Лапаҫ аҫтында Төхвәйҙең бер баҙы бар икән. Арбаһынан шул баҙға, шалтыратып, быяла ватыҡтарын бушата башлай. Мулла йәшенеп кенә ҡарап тора. Егет уны һиҙә. Арбалағы быяла вағы ун силәк була. Егет уны бушатҡан булып, баҙға ҡоя ла силәге менән кире һоҫоп, кире арбаға һала, арбанан йәнә баҙға бушата. Шунан мулла, уның утыҙ силәк аҡсаһы бар икән, тип аптырап ҡайтып китә.

Төхвәй баҙҙы күмеп ҡуя. Мулла Төхвәйҙән алда оҫтабикәһе янына ҡайтып керә.

– Утыҙ силәк аҡса алып ҡайтҡан икән! – ти.

Төхвәй силәк ярығына бер бишлек алтын, бер бишлек көмөш тәңкә ҡыҫтырып ҡалдыра. Ул аҡсаларҙы күрмәмешкә һалышып, силәкте муллаларға кертеп бирә. Төхвәй ҡайтып киткәс, мулла ҡатыны менән ул аҡсаны ала һалалар.

– Бик бай икән. Ҡыҙҙы бирмәй ҡалмайыҡ, берүк, – тиҙәр.

Тағы бер ни тиклем ваҡыт үткәс, Төхвәй йәнә муллаларға инә лә кәләшлеккә ҡыҙ эҙләп сығып китәсәген әйтә.

Мулла:

– Минең дә ҡыҙым бар бит. Башҡа ерҙәргә сығып эҙләп

маташма. Күргән ер, күрше генә торабыҙ. Ул минең берҙән-бер генә ҡыҙым, башҡа балам юҡ. Ҡарт көнөмдә мине лә ҡарар инең, – тип өҙмәй ҙә ҡуймай һөйләп алып китте, ти.

Төхвәй һалҡын ғына:

– Ярар, ҡарарбыҙ, улайһа, – тип сығып китә.

Икенсе көндө килешеп бөтәләр. Ҡыҙ ҙа риза була. Тик Төхвәйҙең аҡсаһы ғына юҡ, ти. Ул тиҙ генә хәйлә уйлап таба ла тағы муллаға бара. Исәнләшкәс:

– Бабай, минең аҡсалар күп, үҙең беләһең, тик уларҙы мин бик йыраҡ йәшереп ҡуйғанмын. Хәҙер генә ҡутарып алырлыҡ түгел, – ти. – Һин миңә туй мәшәҡәттәренә тотонорлоҡ аҡса биреп торорһоң, – ти. – Туйға етерлек булһын, һуңынан артығы менән ҡайтарырмын, – ти.

Мулла уға мең һумға яҡын аҡса, өҫтәүенә, бер һыйыр, бер һимеҙ һарыҡ та бирә. Шулай итеп, Төхвәй менән мулла ҡыҙына туй була. Ҡыҙға бик күп мал тейә. Атаһы ҡыҙына бер ҙур йорт һалып бирә. Донъя кәрәк-яраҡтарын – барыһын да бирә. Йәштәр донъя көтә башлайҙар.

Күп тә тормай, оҫтабикә лә, мулла ла ауырып, кинәт үлеп китәләр. Ҡыҙы менән кейәүе ике йортҡа, ике донъяға хужа булып тороп ҡала. Былар тағы ла байығалар. Ҡарт мәзин, икенсе муллалар быларҙың байлығына көнләшәләр.

Бер көн Төхвәй ҡатыны һыуға барғанда, ҡарт мәзин осрай.

– Нихәл, ҡыҙым? Ни хәлдә генә йәшәйһегеҙ? – ти.

Ҡатыны:

– Арыу ғына торабыҙ әле былай, – ти.

Мәзин:

– Бик һәйбәт булмаҫ инде ул. Бөтә малығыҙҙы биреп бөтөрҙөгөҙ бит бер берәҙәккә. Аҙыраҡ ҡына сабыр итһәң, үҙемә икенсе бисә итеп алыр инем әле, – ти.

Ҡатын:

– Ниңә, әле эш уҙмаған. Һөйләшербеҙ әле, – ти.

Мәзин:

– Ҡасан һөйләшербеҙ икән? Һинең менән бик һөйләшәһе килә ине әле ул, – ти.

Ҡатын әйтә:

– Бөгөн дә була. Бына ирем төнөн һаламға китә. Һин киске сәғәт биштәргә килерһең, – ти.

Мәзин әйтә:

– Ярар, булды, былай булғас, барырмын, – тип ялп та йолп ҡайтып китә.

Тағы ла бер аҙ барғас, ҡатынға йәш мулла осрай.

– Һеҙҙең менән әҙерәк һөйләшәһе бар ине, – ти.

– Һөйләшкегеҙ килһә, мулла абзый, бөгөн киске сәғәт алтылар самаһында барып ултырығыҙ. Мин көтөрмөн. Иремдән шикләнмә. Ул өйҙә юҡ, – ти.

Мулла бик шатлана.

Ҡатын һыуҙан урап ҡайтып килгәндә, ҡарт мулла осрай. Ҡатынға яҡыныраҡ килеп:

– Минең һиңә күҙем төшөп йөрөгәнде үҙең дә белгәнһеңдер? Бер ултырып һөйләшәһе килә. Нисегерәк ҡарайһың шуға? – ти.

Ҡатын быға ла:

– Мулла абзый, барып ултыр, – ти. – Ирем бөгөн өйҙә булмай. Киске сәғәт етегә килерһең. Шунда әйтер һүҙеңде әйтерһең, – тип ашығып ҡайтып китә.

Ҡайтҡас, барыһын да иренә һөйләп бирә. Һаламға барыу иренең уйында булмаһа ла, эштәр былайға киткәс, барырға булды, ти.

Сәғәт биш етә. Алтынсы бер минут та китмәй, тып итеп мәзин килеп тә керә Төхвәйҙәргә. Ҡатын ҡоймаҡ майлаған, сәй ҡайнатҡан икән. Мәзин менән сәй эсергә ултыралар. Ултыра торғас, сәғәт алты етә. Тағы ишек шаҡый башлайҙар. Мәзин, ҡайҙа ҡасырға белмәйенсә, иҙәндә сәбәләнеп йөрөй башлай. Икенсе бүлмәлә йөн алабы бар икән, шунда төшә лә ултыра. Ҡатын өҫтөнән ябып ҡуя ла ишекте барып аса, йәш мулла килеп инә.

Йәш мулла килеп ингәс, ҡатын самауырын яңыртып ебәрә. Ҡоймаҡтарын өр-яңынан майлап, шыжлатып килтереп ултырта. Былар икәү һөйләшә-һөйләшә сәй эсергә тотоналар. Шулай ултыра торғас, сәғәт ете етә. Тағы ишек шаҡый башлайҙар. Мулла урынынан һикереп тора ла, ҡайҙа барырға белмәй, сәбәләнеп, иҙән буйлап йөрөй башлай. Ҡатын тиҙ генә ҡулынан эләктереп ала ла:

– Әйҙә, беҙҙең теге өйҙә алап бар. Шунда инеп ят, – ти.

Мулла шул алапҡа инеп ята.

Ҡатын ишек аса, оло мулла килеп инә. Бының менән дә ҡоймаҡлап, баллап, майлап сәй эсәләр, һөйләшәләр. Ярты сәғәт ваҡыт та үтмәй, Төхвәйҙең шатыр-шотор ҡапҡанан килеп ингәне ишетелә. Мулла, ни эшләргә лә белмәй, урынынан һикереп тороп, сәбәләнеп, иҙән буйлап йөрөй башлай. Ҡатын уны ла тотоп ала ла, етәкләп алып барып, әлеге йөн алабына һала.

Төхвәй килеп инә лә, юрый ҡысҡырып:

– Тәгәрмәсем ватылды. Йыраҡ бара алманым, – тигән була.

Сисенеп, йыуына ла сәй эсергә ултыра.

– Ҡоймаҡтарың бик мул ғына күренә, әллә берәй кеше саҡырырға йыйынғайныңмы? – ти.

Ҡатыны:

– Оҫтабикәләрҙе саҡырырмынмы икән, тигәйнем, рөхсәт итһәң, – тигән булды, ти.

Төхвәй:

– Саҡырырһың шул, әҙерләнгәс, – ти.

Ҡатын тиҙ генә кейенә лә саҡырып та ҡайта – мәзин оҫтабикәһе килеп тә етә.

– Тегеләре оҙаҡлайсы, – тигән булып, Төхвәйҙең ҡатыны ҡалған оҫтабикәләр артынан сығып китә. Төхвәй менән мәзин оҫтабикәһе сәй эсә башлай. Оҫтабикә әйтә:

– Һеҙҙең һыйырығыҙҙың һөтө ҡуйылыр, ахыры.

Төхвәй:

– Беҙҙең һыйырҙың нәҫеле бик затлы ул, майҙы күп бирә, – ти.

Оҫтабикә:

– Нәҫел өсөн берәй быҙауығыҙҙы һатмаҫһығыҙмы икән? – ти.

– Абыстай, һеҙҙең өсөн һатып-нитеп тормабыҙ инде, – ти Төхвәй, абыстайға яҡыныраҡ килеп, – әле бында бер кеше лә юҡ, – тип ҡосаҡлап та ала.

Абыстай ҙа ҡаршы тормай. Үҙе:

– Ай, Төхвәтулла, мәзин һиҙһә, оятлы булырбыҙ бит, – ти.

Төхвәй:

– Бер нәмә лә булмаҫ, – ти.

Алаптағы ике мулла мәзинде төрткөләй башлайҙар.

– Мәзин, йә, ана, абыстайың нимә эшләй! – тиҙәр.

Ни тиклем түҙеүе ҡыйын булһа ла, мәзин өндәшмәй, түҙә.

Төхвәйҙең бисәһе ҡайтып инә. Тағы ла бөтәһе бергә ултырып сәй эсәләр. Мәзин оҫтабикәһен һыйлап оҙаталар. Күп тә үтмәй, йәш мулла оҫтабикәһе килеп инә. Бер аҙ сәй эскәс, Төхвәй бисәһе:

– Бер әҙерләнгәндә, оло абыстайҙы ла алып киләйем әле, – тигән булып йәнә сығып китә.

Төхвәй тағы ла һыйырын маҡтай башлай. Кесе оҫтабикә лә уның быҙауын һатып алырға һорай. Төхвәй әйтә:

– Һеҙгә лә быҙауҙы һатып бирһәң инде, – ти. – Мин бит, оҫтабикә, һине яратам, – ти. – Әле бер кеше лә юҡ, – тип ҡатынға яҡынлай башлай.

Алапта ятҡан мәзин менән ҡарт мулла йәш мулланы төрткөләй башлай:

– Ана, оҫтабикәң нимә эшләй! – тиҙәр.

Йәш мулла ҡысҡырыр ине, үҙе шөрләй. Түҙмәҫ ерҙән саҡ түҙеп ултыра. Оҙаҡ та тормай, Төхвәй ҡатыны ҡайтып инә лә:

– Хәҙер оло абыстай ҙа килә, – ти.

Йәш абыстай:

– Төхвәтулла, быҙауҙарығыҙҙы бирерһең инде, – ти.

Төхвәй:

– Бәй, бирмәй, иртәгә үк илтеп бирермен, – ти.

Абыстайҙы оҙаталар. Ул өйөнә барып та етмәгәндер, ҡарт мулла ҡатыны килеп инә. Ҡарт мулла ҡурҡып китә. Был да кеше алдында эште боҙоп ҡуймаһа ярар ине, тип шыртлай. Төхвәй бисәһе:

– Һеҙ икәүләп эсә тороғоҙ, мин хәҙер килермен, – тип йәнә сығып китә.

Төхвәй быҙау биреү шарты менән был абыстайҙы ла көйләй башлай. Алапта мәзин менән йәш мулла:

– Ана, күр әле, абыстайың, ҡартайғанмын, тип тормай, нимә эшләй, ә? Йөрәге йәш булғас, – тип мулланы үртәйҙәр.

Бер аҙҙан Төхвәй ҡатыны кире килеп инә. Былар оҫтабикәне өр-яңынан һыйлап, өйөнә оҙаталар. Бүлмәлә Төхвәй менән ҡатыны икәү генә тороп ҡала. Тора торғас, Төхвәй әйтә:

– Беҙҙең теге бүлмәлә әллә ендәр бар инде? Әллә нимәләр ҡыштырлай, – ти. – Ҡана, шунда мылтыҡ барҙыр, алып бир әле, йөн алаптарына ҡарап атайым. Ендәре сығып ҡасһын, – ти.

Ҡатын мылтыҡты алып бирә. Төхвәй шарт та шорт мылтығын ҡора башлай. Ҡурҡыштарынан теге бахырҙар алаптан сығып ҡасалар. Төхвәй:

– Ен! Ен! – тип тегеләрҙең баштарынан аша атып ҡала.

Ап-аҡ булып ҡаҙ мамығына буялған көйө мәзин менән муллалар өйҙәренә ҡайтып еткәнсе йүгерәләр, ти. Арттарынан ҡаҙ мамыҡтары ғына борлап ҡалды, ти. Тәҙрәләрҙән күргән халыҡтар аптырашып, белгән генә доғаларын уҡый-уҡый, йүгерешеп тышҡа сыҡтылар, шайтандарҙыр былар, тип, боҫоп ҡарап ҡалдылар, ти. Мәзин ҡайтып ингәйне, ти, ҡатыны:

– Ҡайҙа барып, шулай йөн булып бөттөң? Ҡайҙа аунаның? Кем менән аунаның? – тип осоп ҡунды, ти.

Мәзин:

– Һин ҡайҙа аунаның, мин дә шунда аунаным! – тигәс, ҡатыны шым булды, ти.

Нәҡ шул ваҡыт, быҙауын етәкләп, Төхвәтулла килә ята, ти. Тәҙрәнән күреп ҡалып, абыстай уның ҡаршыһына йүгереп сыға.

– Алып килә генә күрмә инде, Төхвәтуллаҡайым, алып килә күрмә. Кәрәкмәй, кәрәкмәй. Ағайың эште һиҙгән бит, – ти.

Төхвәт:

– Ярар, биргәнде алмағас, көсләшмәйем, – тип боролоп ҡапҡанан сыға ла, өйөнә ҡайтмайынса, йәш муллаларға китә.

Йәш мулла менән ҡатыны араһында ла мәзин менән абыстайы араһындағы кеүек һүҙ булған икән. Төхвәйҙең быҙау етәкләп килеүен күреү менән, йәш мулла оҫтабикәһе лә уға ҡаршы йүгереп сыға.

– Төхвәтуллаҡайым, алып килә генә күрмә, кәрәкмәй. Ағайың эште һиҙгән, – ти.

Төхвәтулла:

– Ярай, бик яҡшы. Минең артыҡ быҙауым юҡ, – ти ҙә ҡарт муллаларға китә.

Ҡарт мулла менән ҡатыны араһында ла әлегесә һүҙ булған икән. Оло абыстай ҙа Төхвәтулланы күреп ҡалып, йүгереп килеп етә:

– Килтерә күрмә, килтерә күрмә. Быҙау алмаҫҡа булдым, кәрәкмәй, кәрәкмәй, – тип ҡулдарын һелккеләй башлай.

Төхвәй:

– Әлеге шул вәғәҙә иткәс ни, алып килмәне тип, үпкәләмәһен, тип килтереүем, – тип быҙауын өйөнә кире алып ҡайтып киткән.

Шунан аҙаҡ муллаһы ла, мәзине лә борсомай, Төхвәй менән кәләше тыныс йәшәп алып киткәндәр, ти.

## 107. Он тартҡан мулла

Элек ярлы ғына бер йәш егет булған. Шул егеттең бик матур ҡыҙға күҙе төшкән. Ҡыҙ ҙа быны яратҡан. Былар өйләнешкәндәр, бергәләп донъя көтә башлағандар. Уларҙың бер нәмәләре лә: аттары ла, һыйырҙары ла булмаған, әммә бик татыу йәшәгәндәр.

Күршеләге мулла, был һылыу киленде күреп, бик һоҡланған. Уға күҙе төшөп, уны һәр саҡ күҙәтеп кенә йөрөгән. Күршеһе бер яҡҡа эшкә китһә, йәш киленде нисек тә күреп, һөйләшмәк була. Кәртә тирәһендә күрһә, тамаҡ ҡырған булып, киленде ҡаратып, юҡ-бар һүҙ ҡушҡан була. Бер һүҙ ыңғайында уның кейәүенең ярлы булыуын, уға үҙенең ғашиҡ булыуын, уның менән һис юғында бер кис бергә булырға теләүен әйткән. Тура килгән һайын шуны иҫенә төшөрөп:

– Бер һүҙемде йыҡма инде. Аллаһы Тәғәлә үҙеңә ожмах гүренән бирер урынды, – тип ныҡыша торған булған.

Йәш килен өндәшмәҫ булған. Бик ныҡышҡас мулла, бер ваҡыт тотҡан да уның был яман уйын иренә әйткән.

– Мулла абзый шулай, ти, хатта ни теләһәң, шуны эшләрмен, ти. Бына, асыуланмаһаң, һиңә әйттем инде. Ни эшләйек? – тигән.

Ире уға хәйләле рәүештә:

– Әйҙә, улай булһа, һин риза булған бул. Мин тирмәнгә киткән булырмын, әммә ҡайтҡанда артҡы ҡапҡанан ҡайтырмын. Шунан мулла абзыйҙың арт һабағын уҡытырбыҙ, – тигән.

Иртәгеһен теге мулла абзыйынан ат һораған:

– Мулла абзый, ат биреп тор әле, тирмәнгә барам тигәйнем, – тигән.

Мулла абзыйың ҡыуана-ҡыуана атын ектереп биргән. Күршеһе тирмәнгә киткән.

Кис кәртә тирәһендә йөрөгәндә, киленде күреп ҡалған да та-

маҡ ҡыра икән был. Килен дә аптырап тормаған, ыңғайлатып, тамаҡ ҡырып яуап биргән.

Кис булғас, мулла абзыйың килеп тә ингән.

– Һаумыһығыҙ, күрше ҡайтманымы әле? – тигән була. – Бына хәл белергә ингәйнем, ни хәлдә йәшәп ятаһығыҙ?

Килен кеше:

– Арыу ғына әле, мулла абзый, һәйбәт. Ярай әле улай итеп хәл белешкәс, рәхмәт инде, – тигән дә самауыр ҡуйырға булған. – Хәҙер, мулла абзый, сәй эсербеҙ, рәхмәт инде, өлкән башыңды кесе итеп хәл белешергә ингәс, – тип, һаман самауырын яйлатып, ҡайнатып сығармай, артҡы ҡапҡаны ҡарай-ҡарай, соланда мыштырлай.

Ҡараңғы төшкәс, шәм тоҡандыра. Мулла:

– Ул тиклем үк мәшәҡәтләнмә, килен, ярай, сәй эсеп тормаһам да, – тигән була.

Килен кеше лә ҡуймай:

– Ҡуй, мулла абзый, сәй эсмәйенсә буламы? Беҙгә тәүге инеүең, ҡоролай сыҡмаçһың инде. Хәҙер самауырҙы алып инәм, тип, соланға сыҡһа, артҡы ҡапҡанан иренең ҡайтып инеүен күреп ҡала ла, юрамал ишекте элгән булып, йүгереп килеп инә:

– Уй, мулла абзый, эш харап, ирем ҡайтты бит, ни эшләйбеҙ инде? – тип әйтеүе була, ире килеп ишекте шаҡый башлай.

– Ас, ни эшләп был ваҡыттан ишек бикләп ултыраһың, ас тиҙерәк, – тип ҡысҡыра.

Йәш ҡатын улай-былай иткәнсе, шул арала ишектең бигеп һәләт кенә аса ла килеп тә инә. Ни күҙе менән күрһен: өйҙә мулла ултыра. Шунан теге мулланың елкәһенән тотоп алған да:

– Әһә, бына кем икән бында ишек бикләткән. Хәҙер бөтә ауылға үҙеңде рисуай итәм. Мулла башың менән сит ҡатындарға йөрөйһөң икән әле һин бында! – тип тыпҡа һөйрәй башлаған.

Мулла ҡойолған да төшкән ҡурҡышынан:

– Берүк, тауыш сығарма инде. Ни теләһәң, шуны эшләрмен, артабан да ни ҡушһаң да тыңлармын. Урамға ҡысҡыра күрмә инде! – тип ялынған.

Күршеһе:

– Ярай, улай булһа, тауыш сығармайым. Тик бына бер тоҡ ашлыҡ, шуны таң атҡансы тартып бөтөр, мин тирмәндә тарттыра алмай ҡайттым, кеше күп ине, – тигән дә, мулланы ашлыҡ өçтөнә ботонан бәйләп ултыртып, ҡул тирмәнен килтереп ултыртҡан да эргәһенә бер тоҡ бойҙай ҡуйған. Мулла бахыр ни эшләһен, төнө буйы ҡара тиргә батып, бер тоҡ бойҙайҙы ҡул тирмәне менән тартып бөтөргән дә таң алдынан ғына, кеше күрмәçтән элек тип, ҡайтып киткән.

Иртәгеһенә килен кәртәлә йөрөгәндә, мулланы күрә лә әүәлге һымаҡ муллаға тамаҡ ҡырған була. Мулла уға:

– Эй, йүнһеҙ, онон бөттөләме ни? Кисә генә бер тоҡ он тарттырҙың! – тип яуап биргән.

## 108. Яуапкәр* егет

Алтмыш йәшлек бер мулла ун һигеҙ йәшлек ҡыҙҙы кәләшлеккә алған. Йәш ҡатын бик сибәр булған. Күршеләге бер фәҡирҙең ун һигеҙ йәшлек улы быға бик ҡыҙығып йөрөгән. Оҫтабикәне ҡайҙа күрһә лә, уйын-көлкө һүҙ әйтә. Оҫтабикә асыуланмай, көлөп кенә китә. Бик һүҙ күтәреүсән була, ти. Егет көндән-көн тағы дәртләнә.

Бер ваҡыт егет оҫтабикә менән һөйләшеп ултырырға теләүен әйтә. Оҫтабикә риза була.

– Бөгөн кис беҙҙең яңы өйгә инеп ултырырһың, – ти. – Үҙебеҙ иҫке өйҙә торабыҙ, – ти. – Мулла тәрәүех намаҙына* киткәс, керерһең. Шунда мин янына инеп ултырырмын, – ти. – Иҫке өйҙәге кеше белмәһен, – ти. Егет:

– Ярай, мин килермен, – ти.

Бер ваҡыт кис менән егеттең атаһы тәрәүех намаҙына иртәрәк сығып киткән. Мулла ла киткәндер, былай булғас, тип, егет мулланың яңы өйөнә килеп ултыра. Мулла әле намаҙға китеп өлгөрмәгән икән, ти. Тәһәрәт алып йөрөй. Оҫтабикә тыштa йөрөп керә лә:

– Беҙҙең яңы өйҙә берәү ултыра. Бар әле, мулла, сығып кер әле, кем икән ул? – ти. Мулла әйтә:

– Берәйһе яңылыш ингәндер, – ти.

Яңы өйөнә барып инһә – күрше малайы Шәриф ултыра.

Ҡараңғы төшөп килгәнлектән, мулланың күҙе етә лә күрмәгән.

– Кем бар бында? – тип һорай.

– Мулла бабай, мин, – тип Шәриф әйтә.

Мулла уны тауышынан танып ала.

– Нимәгә керҙең? – ти мулла.

Шәриф:

– Һеҙҙең мөрйәгеҙҙең формаһын ҡарарға керҙем әле, – ти. – Беҙ ҙә иртәгә мөрйә сығартабыҙ, – ти. – Һеҙҙең мөрйәне бик маҡтайҙар, – ти.

Мулла:

– Үлсә, үлсә, балам, үлсә. Беҙҙең мөрйә бик килешле шул, – ти.

Шәриф бер сыбыҡ һындырып алып мөрйәнең иңен-буйын үлсәргә тотонған була.

– Нәҡ һеҙҙеке кеүек итеп сығарттырабыҙ, – тигән була.

Мулла иҫке өйөнә сығып китә. Оҫтабикә һорай:

– Кем? – ти.

Мулла әйтә:

– Күрше малайы Шәриф, – ти. – Беҙҙең мөрйәнең формаһын ҡарай. Улар ҙа беҙҙеке кеүек итеп мөрйә сығарталар икән, – ти.

Оҫтабикә эсенән генә: «Яуап тапҡан», – тип ҡуя.

Мулла менән осрашҡандан һуң, Шәриф сығып ҡайтып китә. Икенсе көндө оҫтабикә Шәрифте күреп әйтә:

– Һин ниңә улай иртә килдең? – ти. – Мулла һиҙҙе лә яңы өйгә керҙе, – ти.

Шәриф:

– Атай киткәс, мулла ла киткәндер, тип уйлағайным, – ти.

Оҫтабикә:

– Ярай әле, яуабын оҫта тапҡанһың, – ти. – Бөгөн кис беҙҙең бесәнлеккә килеп ултыр, – ти.

Шәриф:

– Ярар, – ти.

Оҫтабикә:

– Мулла абзыйың намаҙға киткәс кенә кер. Кисәге кеүек ашығып кермә, – ти.

– Ярай, алайһаң, – ти Шәриф.

Әлегесә Шәрифтең атаһы мәсеткә иртәрәк китә лә бара. Атаһы киткәс тә, Шәриф мулланың бесәнлегенә инеп ултыра. Мулла әле мәсеткә китеп өлгөрмәгән була. Яңы саҡ тәһәрәт алып йөрөй. Оҫтабикә Шәрифтең килгәнен һиҙгән. Тышта йөрөп керә лә:

– Беҙҙең бесәнлектә кеше бармы әллә? Мулла, сығып кер әле. Бесәнде урламаһындар тағы, – тигән.

Мулла:

– Кем икән ул? – тип сығып китә.

Бесәнлеккә килеп:

– Кем бар унда? – тип ҡысҡыра.

– Мин был, мулла бабай, мин, күршең Шәриф, – тигән булған теге.

Мулла Шәрифтән:

– Ниңә керҙең унда? – тигәс, Шәриф:

– Мулла бабай, мин им өсөн саҡ ҡына бесәнегеҙҙе алып сығам, – ти. – Күршеләрҙең бесәнен урлап ҡаптырһаң, һыйыр тиҙ быҙаулай, тип әйтәләр, ти.

Мулла:

– Ал, балам, ал. Ҡурҡып торма, ал әйҙә, – тип кереп китә. Шәриф һыңар устай бесән алып сыҡҡан була.

Мулла ингәс, оҫтабикә:

– Кем бар унда? – тип һораған була.

Мулла:

– Әлеге шул күрше Шәриф, – ти. – Һыйырҙары быҙаулай алмай ята икән. Им өсөн бесән урларға ингән, – ти. – Күршенең бесәнен урлап ҡаптырһаң, һыйыр тиҙ быҙаулай, тип әйтәләр, ти.

Оҫтабикә эстән генә: «Тағы яуабын тапҡан икән, суҡынмағыр», – тип ҡуя.

Шәрифкә бөгөн дә, шулай итеп, һөйләшергә тура килмәне, ти.

Өсөнсө көндө Шәрифте оҫтабикә тағы күргән.

– Бесәнлеккә ингәнеңдә беҙҙең мулла һиҙеп ҡалды бит, – ти.

– Эй, беҙҙең атай иртә киткәнгә, мулла ла киткәндер, тип уйлағайным, – ти Шәриф.

Оҫтабикә:

– Бөгөн алайһаң, тәрәүехтән ҡайтҡас, сәй эсеп, ут һүндереп ятҡас, беҙ ятҡан өйгә кил. Мин ишекте элмәмен, – ти. – Мулла, тәрәүехтән ҡайтҡас, сәй эсә лә ятып йоҡлай. Мин үҙемә урынды уң яҡҡа йәйермен, мулла ятыр һул яҡтан. Һин керер ҙә минең ҡырға килеп ятырһың, – ти. – Мулла бер нәмә лә һиҙмәй ул, – ти.

Шәриф:

– Ярай, алайһаң, килермен, – ти.

Мулла тәрәүехтән ҡайтып, сәй эсә лә ята уң яҡтан, оҫтабикәһе һул яҡтан ята. Мулла шунда уҡ йоҡоға киткән, оҫтабикә йоҡламай, тыңлап ҡына ята. Бер аҙҙан һуң әкрен генә баҫып, Шәриф килеп инә. Шәриф шым ғына килеп, өҫтөн һалып, оҫтабикә әйткән буйынса, урынға килеп ята. Ята ла был мулланы һыға ҡосаҡлап ала... Мулла уяныи китә лә һикереп килеп торop:

– Кем кергән бында? – ти.

Шәриф:

– Мин, мулла бай, мин, – ти.

– Һин нимә эшләп йөрөйһөң төнө менән кешенең урынына килеп, Шәриф балам? – ти мулла.

Шәриф:

– Беҙ аулаҡ өйҙә бәхәс ҡорғайныҡ, – ти. – Унда малайҙар, мулла бик ҡаты йоҡлай, имеш, тип бер сиреккә бәхәс иткәндәр ине. Шуны асыҡларға тип, мине ебәргәндәр ине. Хәҙер белдем инде, һиҙгерһең икән, – ти.

Мулла:

– Шулай, улым, шулай. Бар, иптәштәреңә әйт, мулла һиҙгер йоҡлай, тиң, – тип әйтте, ти.

Мулла менән Шәрифтең һөйләшкәнен тынлап ятҡан оҫтабикә көлөп үлеп бара, ти: «Был үҙенә күрә түгел икән. бик яуапкәр егет икән. Ирең дә ошоноң кеүек булһын ине», – тип уйлап ҡуя.

Шәриф, мулланан бәлә-ҡаза күрмәй генә, кейенеп сығып китә.

Оҫтабикә менән мулла һөйләшеп яталар. Оҫтабикә:

– Нисек төндә беҙҙең янға килеп кергән әле ул, ҡурҡмай, – тигән була.

Мулла:

– Араҡы эскеһе килгәс, ҡурҡып тормай инде. Бер сиреккә бәхәс итешкәндәр бит, – ти.

Дүртенсе көндө иртә менән оҫтабикә Шәрифте күреп, йәнә һөйләшә.

– Бик яуапкәр егет икәнһең. Муллаға бармаған булһам, үҙеңә барыр инем, – ти.

Шәриф:

– Әле лә эш уҙмаған, айырылһаң, алам, – ти. Оҫтабикә былай ти:

– Алыуын алһаң, мулланан айырылмайынса ғына ла, барырмын да ул, – ти. – Әгәр ҙә һинең мине ысынлап та алғың килһә, мулла үҙе никах уҡып бирер һиңә, – ти. – Никах уҡығанын үҙе лә белмәй ҡалыр. Алһаң, мин һиңә барам, – ти.

Шәриф әйтә:

– Улай алыуға мин ризамын, – ти. – Ул саҡта, мулла һине айырмайынса ла, беҙгә никах уҡыр, – ти.

Оҫтабикә Шәрифкә, ул һораған саҡта, күп аҡсалар бирмәксе булды, ти. Улар шулай килешеп вәғәҙәләштеләр, ти.

Шәриф бер ваҡыт үҙҙәренең баҙынан мулланың баҙына тиклем дуҫтарынан ер аҫты юлы соҡота. Был юлды соҡоғанды мулла ла, оҫтабикә лә, Шәрифтең атаһы ла, әсәһе лә – һис кем белмәй. Оҫтабикә һүҙендә тороп, һораған һайын Шәрифкә күп итеп аҡса биреп тора. Бер ваҡыт, юлды эшләтеп бөтөргән көндө кис менән, Шәриф муллаға килеп инә.

– Мин бер ҡыҙ алып ҡайтҡайным, мулла бабай, беҙгә никах уҡып ҡына бирһәңсе, – ти.

Мулла әйтә:

– Төндә никах уҡымайбыҙ, – ти. – Иртән уҡырбыҙ, – ти. – Ҡыҙҙы ҡайҙан алып ҡайттың? – тип һорай.

Шәриф:

– Ғүмәр ауылынан, – ти.

Мулла:

– Кем ҡыҙы унда? – ти.

Шәриф әйтә:

– Камалетдин ҡыҙы Миңлекамал, – ти.

Мулла әйтә:

– Оҫтабикә лә Ғүмәр ауылыныҡы, – ти. – Камалетдин тигәндең ҡыҙы, исеме Миңлекамал, – ти. – Ҡайҙан былай исемдәре тура килгән? – ти.

Оҫтабикә әйтә:

– Түбән оста ла бер Камалетдин бар ине, – ти. – Бөкө Камалетдин тип йөрөтәләр уны, – ти. – Шуның ҡыҙы ла Миңлекамал исемле ине, – ти. – Шул ҡыҙҙы сығарып алып ҡайттыңмы ни, Шәрифйән? – тигән була.

Шәриф:

– Шул, шул, оҫтабикә, – ти. – Шул Камалетдин ҡыҙы инде, – ти. Оҫтабикә әйтә:

– Минең атайҙы Өйрәк Камалетдин тип йөрөтәләр ине, – ти.

Мулла:

– Ярай, алайһаң, иртәгә уҡырбыҙ, – ти.

Шәриф ҡайта. Үҙенең алып ҡайтҡан ҡыҙы ла юҡ. Мулланың оҫтабикәһен яҙҙырырға йөрөй.

Иртәгеһенә тағы килеп етә Шәриф:

– Әйҙә, мулла бабай, аш өлгөрҙө, – ти ҙә, оҫтабикәгә бер яҙыу биреп китә.

Оҫтабикә ала ла муллаға күрһәтмәй генә уҡый. Ҡағыҙға шулай яҙылған була: «Баҙға төш. Унда беҙҙең баҙға тиклем ер асты юлы бар. Мулла урамдан килгәнсе, һин баҙҙан беҙгә килеп етерһең. Шулай итеп, беҙ мулланан никах уҡытырбыҙ».

Мулла никах уҡырға урамдан китә. Оҫтабикә баҙға төшөп, ер асты юлы менән унан алда Шәрифтәргә барып етә.

Мулла түргә менеп ултырғас, бөркәнеп ултырған «килен»дең күлдәк осон күреп ҡалып, уны танып ала. Мулла шиккә ҡала ла, бер һылтау табып, өйөнә ҡайтып китә. Оҫтабикә баҙға төшә лә мулланан алда ҡайтып етеп, өйҙә ултырған була. Мулла ҡайтып инә лә, оҫтабикә өйҙә ултырғас, ҡара һауытын алған булып: «Оҫтабикә өйҙә икән әле», – тип тынысланып, кире Шәрифтәргә китә. Оҫтабикә тағы ла унан алда барып инеп, муллаға күренмәй, шаршау эсенә инеп ултыра. Халыҡтар ҙа күптән йыйылған, ти. Хәҙер мулла никах уҡый. Уҡып бөтөп, йәштәрҙе ирле-ҡатынлы итеп, хәйерен алып, бәлеш ашап, сәй эскәс, мулла ҡайтып китә. Ҡайтһа, оҫтабикәһе өйҙә юҡ. Тышты ҡараштырып инә – юҡ. Был ваҡытта оҫтабикә Шәрифтәрҙең мунсаһына һыу ташып йөрөй. Шунда ғына мулла уны күреп ҡала ла:

– Ниңә унда йөрөйһөң? – тип ҡысҡыра.

– Үҙең, никах уҡып, Шәрифкә биргәс, ҡайтмам инде. Ни эшләп ҡайтайым, ти? Мин хәҙер Шәриф бисәһе, – ти оҫтабикә.

Мулла:

– Ахмаҡ бисә, ни нәмә һөйләйһең һин? – ти. – Айырылмағансы, никах уҡыйҙармы ни? – ти. – Уның бисәһе Бөкө Камалетдин ҡыҙы бит, – ти. – Һин Өйрәк Камалетдин ҡыҙыһың, ти.

Оҫтабикә:

– Өйрәгем осто инде. Хәҙер мин һинеке түгел, – тип кенә ебәрә.

Шулай итеп, мулла, ҡатынын айырмай-нитмәй, үҙе никах уҡып, Шәрифкә биргән дә ҡуйған, ти.

Шунан һуң мулланың үҙен ғәйепле табып, уны муллалыҡтан төшөрөп, хөкөмгә тарттырып, штрафтар түләттерәләр. Аҙаҡ мулла төрмәгә лә юлыға. Ҡайғыһынан сиргә һабышып, шунда үлеп ҡала. Йортонда бер кешеһе лә булмай. Миңлекамалы менән никахын өҙмәгәнлектән, йорт-ҡураһы ла, мал-тыуары ла уға тороп ҡалған. Шәриф менән Миңлекамал әле булһа ла шунда донъя көтөп торалар, ти.

## 109. Сауҙагәр улы менән ярлы ҡыҙы

Каруан менән йөрөүсе бер сауҙагәрҙең улы булған. Ул яңғыҙ ғына ярлы ҡарсыҡтың ҡыҙын яратҡан. Ҡыҙ гөҫкә-башҡа матур ғына булған. Атаһы икенсе бер бай сауҙагәрҙең ҡыҙын алып бирергә теләһә лә, егет алмаған, шул яратҡан ҡыҙынан башҡа берәүҙе лә алмаҫын әйткән. Ахырҙа, бик күп мал биреп, ҡыҙҙы егеткә алып биргәндәр.

Сауҙагәр ратһа ла, ҡыҙ уны яратмаған. Шунан ни фронт менән үтеп барған бер офицерҙы яратып, шуның менән ҡасып киткән дә барған. Кәләшен ныҡ яратҡанға, егет уның артынан эҙләп киткән.

Ҡыҙҙың офицеры рота командиры булған икән. Сауҙагәр улы шуның торған ерен белеп, шул ротаға үҙе теләп һалдатҡа яҙылған да йомошсо булып хеҙмәт итә башлаған.

Егет хеҙмәт итә, ғүмер итә. Ҡыҙ уны танып ала. Таныған, нисек булһа ла уны бынан ебәрттергеһе килгән. Шунан ул командир булған иренең сәғәтен алып, һиҙҙермәй генә егеттең кеҫәһенә һала ла иренә: «Сәғәтең юғалған», – тип йомошсонан шикләнгәнен әйтә. Тентеп ҡараһа ире, сәғәт һалдаттың кеҫәһенән килеп сыға.

## 110. Һалдат менән батша ҡатыны

Бер батша, ҡатыны үлгәс, бик йәш кенә сибәр ҡатынға өйләнә. Ҡатын ирен хушһынмай, ти. Нисек тә уның өҫтөнән йөрөмәктә, ти, уйы. Шулай йәшәп яталар, йәшәп яталар. Шунан бер ваҡытты батша һалдаттарға тикшереү үткәрә. Тикшереүҙе ҡарарға һанаттарҙың ҡатындары менән бергә был йәш ҡатын да бара. Һалдаттарҙы күргәс, бының күҙҙәре уйнай башланы,

ти. Береһенән-береһе артыҡ киң күкрәкле, мыҡты йәш егеттәр, ти. Шунда һалдаттарҙы берәм-берәм алға сығарып, тикшерә башланы, ти, батша. Бер ваҡыт матурҙан да матурыраҡ бер һалдат алға сыҡты, ти. Батша бисәһе уны күреү менән тәҡәт итә алмай, йөрәге сығып, ҡолап китә яҙҙы, ти.

– Ни булды?

– Ни булды? – тип һанат бисәләре зыулаша башланы, ти. Батша ла йүгереп килеп етте, ти.

– Былай ғына, эҫе үткәрҙем, буғай, башым әйләнеп китте лә, – тип, батша ҡатыны ҡайтырға һораны, ти. Батша һанаттарына бисәһен һарайға алып барып ташларға ҡушты, ти.

Ярай, шулай йәшәп яталар, ти. Теге һалдатты ҡатын һис онотоорға сара таба алмай, ти. Шунан бер ваҡыт һалдаттың ҡалаға сыҡҡанын ҡарап ҡына торған да киткән, ти, бисә бының артынан сумкаһын тотоп. Тегегә етер-етмәҫ кенә әйәреп бара ла был, һалдат баҙарға боролғас, артынан барып, тиҙ генә сумкаһын тултырып әйбер ала ла теге һалдатты саҡыр:

– Кил әле, һалдат, алып ҡайтырға ярҙам ит, – ти.

Һалдат килә. Батша ҡатыны икәнен танып ҡала. Батша һарайына тиклем бының әйберен күтәрешеп бара. Юл буйынса ҡатын һалдаттың ҡайҙа хеҙмәткә алыныуын, башҡаһын һораша килә. Ҡайтып еткәс тә, тиҙ генә ебәрмәй, көсләп индереп, сәй эсерә, бер аҙ шараптан да ауыҙ иттерә лә килеп йөрөргә ҡушып, оҙатып ҡала.

Ошонан һуң ҡатын батшаға әйтеп, бик ипле һалдат, тигән булып, тегене үҙенә йомошсо итеп алдырта. Һалдат ҡатындың йомош юлына йөрөй. Ҡатын ипләп-ипләп кенә быға яҡыная бара. Шунан бер көн килеп һалдатҡа әйтә:

– Әйҙә икәү танып булайыҡ.

– Юҡ, үҙемдең батшама улай итергә ярамай. Булмай улай.

Хәҙер теге ҡатын асыулана ла ҡуя. Батшаға йә икенсе берәйһенә һөйләр, тип тә ҡурҡа. Шунан ни унан алда өлгөрәйем тип, бик ныҡ яманларға тотона бит был быны. Хәҙер был һалдатты язаға тарттырырға кәрәк бит инде. Нисек язалатырға? Батша һанаттарын йыйып ала ла кәңәш итә башлай.

– Бына шундай һалдат бар икән, – ти инде, һалдат тураһында бисәһенән ишеткәнде һөйләп бирә. – Батша бисәһенә йәбешергә иткән, – ти. – Шуға мин уны атырға йә аҫырға, тип әйтәм, – ти батша.

Һанаттары әйтә:

– Был ни әллә ни нәмә түгел бит, аҫып ултырмаға, – тиҙәр. – Булмай улай ғына. Беҙ былай итәйек. Беҙ уға берәй төрлө эш бирәйек, әгәр шуны башҡармаһа, ул саҡта атырға ла, аҫырға ла булыр, – тиҙәр.

– Ниндәй эш бирәбеҙ?

– Әйҙә, беҙ уны үҙебеҙҙең дәүләттән сығарайыҡ. Донъяла нисә ир, нисә ҡатын бар, шуны белеп килһен, – тиҙәр.

Шунан был сығып китә. Ул тиклем донъяны нисек һанап бөтмәк кәрәк? Йөрөй, йөрөй был, шунан бер әбейгә бара:

– Эх, мине аҫалар бит, әбей, – ти. – Баш китә бит. Нисек хисаплап бөтмәк кәрәк ул тиклем кешене?

– Һин былай итерһең. «Ир күпме донъяла, ҡатындар күпме?», – тиһә: «Ҡатындар күп», – тиң. «Ни өсөн?» – тиһә: «Мин шундай ирҙәрҙе лә ҡатынға һананым – ҡайыҙирке*, ҡатын һүҙенән сыҡмай, кешенән яманлыҡ ҡына эҙләп йөрөй».

Батша үҙенең һанаттарын йыйып ала. Һалдатҡа хөкөм сығарырға бит инде. Һалдат теге әбей өйрәткәнде ҡабатлаған. Шунда бының үҙенең дә иҫенә төшөп ҡала: «Бәй, мин үҙем дә ҡатын һүҙе менән эш итеп, бер һалдаттың башын ашарға йөрөйөм түгелме?» Шунан һалдаттан иплэп кенә һораша башлағас, эштең асылына төшөнгән батша. Аҡыллы һалдатын бисәһе һүҙе менән үлтерә яҙыуына бик үкенгән. Һалдаттан ғәфү үтенеп, бисәһен дөрөҫтө әйтергә мәжбүр итеп, һалдатты, күҙен асҡан өсөн бүләкләп, ирекка сығарған, бисәне хөкөмгә тарттырған, ти.

## 111. Хәйләкәр ҡатын менән зирәк һалдат

Батша заманында бер һалдат хеҙмәттән ҡайтып килә икән. Юлда туҡтаған был бер ҡалаға. Туҡтауын туҡтаған – ҡунып китер урыны юҡ, урын тапһа, түләүенә юҡ, ти, ашарына ла ризығы юҡ, ти. Ҡала буйлап ҡаңғырып йөрөгән-йөрәгән дә был, бер ҡунаҡҡаға ингән. Ҡунаҡҡасыға хәлен һөйләп биргән. Ҡунаҡҡасы бик ҡарун бәндә булған икән, ти.

– Үҙеңдең яйыңды үҙең ҡара инде, бәлки, берәй тол ҡатын һалдат кешене йәлләр ҙә ҡунырға индерер, – тигән.

– Самалап ҡарайыҡ, был да аҡыл, – тип китә һалдат урам буйлап. Ҡунаҡҡасының теленә бал ягылғыр, эскәмйәлә йәш кенә бер ҡатын ултыра, ти. Һалдат сәләм бирә, һүҙ ҡуша, хәлен һөйләп бирә.

– Әйҙә, йөрөмә ҡаңғырып, миңә ин. Ҡунаҡ булырһың, ҡунып китерһең, – ти йәш ҡатын. Шуны ғына көткән кеше ни, китә был йәш ҡатынға эйәреп. Барып инә өйөнә. Ҡатын йүгереп йөрөп аш-һыу яраштыра. Һалдаттың алдын төрлө-төрлө ниғмәттәр менән тултырып ташлай. Һыйлай башлай...

Һалдат менән ҡатындың табыны ҡыҙған ғына мәлдә берәү ишек шаҡый башламаһынмы! Ҡатын тороп ҡараһа – ире, ти. Нишләргә? Тиҙ генә һалдатты мөйөштәге икона артына йәшерә.

Йүгереп барып ишеген асып ебәрә. Ире килеп ингәйне – муйынына барып һарылды, ти.

– Әллә ҡасан уҡ аш-һыу әҙерләп, үҙеңде көтөп ултыра инем әле. Көтә-көтә, көтөк булдым. Ахырҙа үҙем ашап-эсә башланым, – тип хәйләләне, ти.

Ире бик ашығыс йомош менән ҡайтҡан булған икән. Тиҙ-тиҙ генә ҡапҡылай ҙа кире эшенә йүгерә.

Һалдат йәшеренгән еренән сығып, тағы һыйланырға тотона. Төндө шул ҡатын янында үткәрә.

Иртән һалдат тағы ҡала буйлап сығып китә. Йәнә теге ҡуналҡаға инә.

– Йә, нисек хәлдәр? Ҡайҙа булдың? – тип һорай ҡуналҡасы. Һалдат, шулай-шулай:

– Бер ҡатында ҡунаҡ булдым, – тип һөйләп бирә. – Тик кистән ире ҡайтып, эште боҙа яҙҙы. Ҡатын мине икона артына йәшереп алып ҡалды. Ире ашаны ла эшенә кире китте. Ул киткәс, йәнә һыйландым. Шул ҡатында төн ҡундым да әле шунан килеүем, ти.

– Маладис. Юғалып ҡала торған һалдат түгелһең икән! – ти ҡуналҡасы.

Кис булғас, һалдат йәнә теге фатирға бара. Ашай, эсә – буйғым һыйлана. Табын ҡыҙған саҡта ғына, йәнә ишек ҡағалар, йәнә теге ҡатындың ире ҡайтҡан, имеш. Был юлы ишекте һәләк нығыҡ дөбөрләтә. Һалдатты ҡатын кейем шкафына йәшерә.

Ир кеше килеп инә. Килеп инһә – тағы ла мул ғына ярашғырылған табын. Ир кеше табынға ҡырын ғына ҡарап ала ла ыңғай икона янына үтә. Артын ҡарай – бер ни юҡ. Бисәһе үпкәләргә тотона.

– Һин тип табындар ҡороп, һин тип өҙөлөп торған ҡатыныңа шик белдерәһең, рәнйетәһең, – тип илаған кеше була. Ир кеше нишләһен инде? Ышана.

– Ярар, ҡатын, былай ғына. Үткәнендә шунда бер нәмә ҡуйғайным. Шуны ҡарағайным да, – тип хәйләләп, ҡатынын «тынысландыра». Әҙер табындан бер аҙ ҡапҡылай ҙа кире төнгө эшенә китә.

Хужаһы киткәс, йәш ҡатын һалдатты йәнә сығарып ала. Улар тағы һыйланалар. Был төн дә һалдат өсөн байрамға әүерелә.

Һалдат иртәгеһенә тағы ла ҡуналҡаға инә. Килеп инеүе була – ҡуналҡасы өтәләнеп килеп тә етә, түҙемһеҙләнеп бынан һораша ла башлай.

– Йә, һалдат, бөгөн ҡайҙа ҡундың? Һыйлаусы булдымы?

– Тағы шул ҡатын янында булдым, – тип һалдат бөтәһен дә сүкмәй-сәсмәй һөйләп бирә.

Һалдат һыйлы-мыйлы урынға ҡапты бит инде. Ҡаланан ҡуҙғалғыһы ла килмәй башлай. Өсөнсө төнөн дә әлеге ҡатын

янында үткәрмәксе була. Ҡатын йәнә уны ҡунаҡ итә башлай. Табын ҡыҙғанда ғына, тағы ишек ҡағалар. Был юлы ир ишекте емереп кенә алып бара, ти, бигерәк ныҡ шаҡый, ти. Ҡатын һалдатын ҙур һандыҡҡа төшөрә лә йүгереп барып ишекте аса. Ире ашығып килеп инә лә алан-йолан ҡарана башлай: барып икона артын тикшерә, кейем шкафын ҡат-ҡат ҡарап сыға, башҡа урындарҙы тетеп ҡарап бөтә. Ҡатыны үпкәләп тә ҡарай, илап та ҡарай, янап та ҡарай, ялбарып та ҡарай – ире ҡолағына ла элмәй, эҙләнеүен белә. Бар нәмәнең аҫты-өҫкә килә. Эҙләнеп тә табалмағас: «Һалдат бөгөн тағы ла ошонда булмай булмаҫ. Һин хәйләкәр булһаң, мин дә хәйләкәр», – тип кәрәсин һибә лә өйөнә ут төртә. Ҡатын ялбарырға тотона:

– Йорт-йыһаздарыбыҙ янып әрәм була бит! Һис юғы оло һандығыбыҙҙы ҡотҡарайыҡ, – тип иҫ китмәле ауыр һандығын иренән күтәртеп, тышҡа сығартты, ти.

Йәш ҡатындың хәйләһе был юлы ла һалдатҡа килеште, ти, ул уттан имен ҡотолдо, ти.

Иртәгеһенә һалдат тағы ла ҡуналҡаға бара. Барһа – ҡуналҡасы ләх иҫерек. Һалдатты күреүе була – күҙе аҡая быныҥ.

– Һин тереме ни әле ул?! – ти.

– Эй, ҡарун ҡуналҡасы, һалдатты ут та алмай, һыу ҙа алмай. Байлыҡ – бер айлыҡ. Рәтен тапһаң, тапҡырлыҡ – мәңгелек, – ти ҙә һалдат үҙ юлына китә.

## 112. Үгәй әсә менән үгәй ул, батша менән ҡырҡ вәзир

Борон-борон заманда бер батшаның яңғыҙ улы булған. Ун бер-ун ике йәшкә еткәс тә, әсәһе үлеп, ул бала етем ҡалған. Оҙаҡ та үтмәй, батша күрше ҡаланан икенсе ҡатын эйәртеп алып ҡайтҡан, ти.

Бер аҙ торғас та, был йәш кенә ҡатын батшаны һис кенә лә хушһынмайынса, уны үлтереп, байлығын алып ҡалыу, малайын үҙенә ҡаратыу ягын уйлай башлаған, ти. Быны батшаның улы һиҙеп алды ла уйға ҡалды, ти. Бер көндө мәҙрәсәгә килгәс, мулла уның төҫөн күреп:

– Балам, һинең башыңа бәлә килә. Ҡырҡ көн буйына баш осоңда ҡамсы уйнар. Мин һиңә доға бирәм. Һин шуны ҡырҡ көн, ҡырҡ төн уҡы. Атаң, әсәң менән һөйләшмә, – тип ҡайтарып ебәрҙе, ти.

Бала ҡайтып сисенде лә, китабын алдына һалып, доғаһын уҡый башланы, ти.

– Йә, балам, бөгөн нимә уҡып ҡайттың? – тип һораны, ти, батша уның янына килеп.

Бала өндәшмәгән. Үпкәләгәндер берәй нәмәгә, әсәһен ебәрәйем әле, тип уйлаған да батша, ҡатынын ебәргән.

Ҡатын үгәй улын үҙенең бүлмәһенә индереп, алдына аш ҡуя ла шарап килтереп ултырта. Үгәй әсә шарапты эсергә димләй икән. Бала өндәшмәй ҙә, ашамай ҙа, эсмәй ҙә. Улай итә ҡатын, былай итә, бала өндәшмәй. Унан:

– Һиңә һүҙем бар. Минән ишет тә, үҙеңдә тот, үҙең беләһең, атайың ҡарт. Уны күңелем хушһынмай. Күңелем һиндә генә. Хәҙер итәгемдән инеп, иҙеүемдән сыҡ, – тигән.

Малай һаман өндәшмәгән. Улай ҙа булмағас, йәш ҡатын малайҙың муйынына һарыла, үбергә итә. Шул саҡ малай уның моронон ҡаната һуға ла ебәрә, шунан йәш ҡатын донъя иңғыратып илай башланы, ти. Тауышҡа батша йүгереп килеп етеүе булды – йәш ҡатын ялғанлап ошаҡлай ҙа башланы, ти.

– Балаңдың һөйләшмәүендә бер сәбәп бар икән шул. Бына әле миңә ҡул һалырға итте. Риза булмағайным, моронға сабып ебәрҙе.

Батша шунда уҡ улын зинданға ябып ҡуйырға ҡушты, ти. Малайҙы алып киткәс тә, ҡатын һаман һөйләнде, ти.

Батшаның ҡырҡ вәзире бар ине, ти. Һәр көн һайын берәүһе батша янына кереп хәбәр һөйләп, баланы язалауҙы кисектерергә тырышты, ти. Шулай ҡырҡы ҡырҡ хәбәр һөйләп йөрөй торғас, ҡырҡ көн үткән. Вәзирҙәр, малайын язаларға, тигән уйынан батшаны кире ҡайтара алманылар, ти.

Ҡырҡ беренсе көн килеп етте, ти. Майҙанға аҡ кейеҙ йәйеп, өҫтөнә малайҙы сығарып ултырттылар, ти. Йәллат баланың башын сабырға балтаһын әҙерләп тора, ти. Шул саҡ майҙандан баланың мәҙрәсәләге уҡытыусыһы үтеп бара икән, ти. Батша уны күреп ҡалған да:

– Баланы боҙоҡлоҡҡа өйрәткән – шул, – тип уны ла язалатып үлтермәксе булған, ти.

– Мин риза. Тик бер-ике һүҙ әйтеп үләйем, – тигән, ти, ул.

Батша ризалығын бирмәҫкә тырышһа ла, халыҡ шаулауынан ҡурҡып, ризалығын биргән, ти. Шунан мулла түкмәйсәсмәй уҡыусыһы менән булған хәлде һөйләп биргән, ти.

Унан һуң бала ла һүҙ һорай. Уны ла һөйләтәләр.

– Үгәй әсәйем атайымды ағыулап үлтерергә уйлай. Байлыҡтарын алып, күсеп ҡайтырға йыйына. Ул мине үҙенә һөйәр итергә лә ниәтләнгәйне. Мине үбергә ынтылғайны, һуғып ебәрҙем, – тигән.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс тә, ҡарттар:

– Шулай була торған булһа, был эште яҡшылап тикшерергә кәрәк, йәмәғәт, – тип ҡысҡырышҡандар, ти.

Мулла менән малай әйткәндәрҙе тикшереп-тикшереп, ул һүҙҙәрҙе дөрөҫ тип табалар.

Шунан батша йәш ҡатындың башын киҫергә әмер бирҙе, ти.

## 113. Ҡаҙ бешереп, ашамай ҡалыу

Борон-борон заманда бер бабай булған, ти. Бабайҙың ҡатыны бер байҙан ҡалған шаян ҡатын ине, ти. Был икәүҙең балалары ла, малдары ла юҡ ине, ти, тик бер ҡаҙ ғыналары бар ине, ти. Ҡатындың ире өҫтөнән йөрөгән бер егете бар ине, ти. Шул егет бер көн ҡатынға:

– Мине ысынлап һөйһәң, шул яңғыҙ ҡаҙыңды һуйып ашат. Мин һине ташламам, – тип әйтте, ти.

Ҡатын егеткә вәғәҙә бирҙе, ти.

Бер көндө бабай менән икәү генә ултырғанда, ҡатын:

– Кеше гел Ҡөрьән уҡыта. Беҙ ҙә уҡытайыҡ әле, – ти.

Бабай:

– Беҙ нимә менән аш әҙерләйбеҙ? Ҡөрьән уҡытҡас, әҙерәк аш та кәрәк була бит ул. Беҙҙең бер нәмәбеҙ ҙә юҡ бит, – ти.

Ҡатыны:

– Бәй, ана теге ҡаҙҙы һуйырбыҙ ҙа әҙерләрбеҙ, – тине, ти.

Быға бабай риза булып, аҡтыҡ ҡаҙҙы һуйҙылар, ти. Ҡатын ҡаҙҙы таҙартып, бешерергә һалды, ти. Бабайы:

– Ҡөрьән уҡытырға кемде алып киләйем? – тине, ти.

Ҡатыны:

– Бик яҡшы итеп тәһәрәт ал да мәсеткә бар. Унда уң яғыңда кем ултырһа, шуны алып ҡайтырһың, – тине, ти.

Бабай яҡшылап йыуынды ла мәсеткә китте, ти. Намаҙҙы уҡып бөттө, ти, бабай үҙенең уң яғындағы кешене алып ҡайтты, ти. Ҡатын егетенә бабайҙың уң яғына ултырырға әйтеп ебәрһә лә, ул яңылышып, һул яҡтан ултырған да ҡуйған, ти. Шунан бабай әллә кемде алып ҡайтҡан булып сыҡты, ти. Быны күргәс, ҡатын тиҙ генә хәйлә уйлай һалып тапты, ти.

– Бар, беҙҙең күмәс юҡ икән, ҡунаҡҡа ашатырға күмәс алып кил әле, – тип йомош табып бабайын сығарып ебәрҙе, ти.

Бабай сығып киткәс, ҡатын бер тимерҙе ҡыҙҙырырға һала. Ҡыҙҙыра ла һыуға тыға, ти, ҡыҙҙыра ла, ти, һыуға тыға, ти. Ҡатындың был эшенә ҡарап ултыра-ултыра ла ҡунаҡ:

– Былай тимерҙе ҡыҙҙырып нимә эшләйһең? - ти.

Ҡатын:

– Эй, ҡунаҡ, әйтергә лә оят инде. Беҙҙең ҡарт бик алама бит ул. Кешене ҡунаҡҡа тип саҡырып алып инә лә, ошолай итеп тимерен ҡыҙҙырып баҫа ла ҡуя. Әле бына шуның тимерен ҡыҙҙырыуым, ҡыҙып еттеме икән, тип, һыуға тығып ҡарауым.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, теге ҡунаҡ, кейем-һалымын да алып тормай, сыҡты ла йүгерҙе, ти. Шул арала ҡатындың һөйәре килеп, төпкө бүлмәгә үтте, ти. Ҡунаҡ сығып киткәс тә, ҡатын итте ҡаҙаны менән генә күтәрҙе лә, ти, егетенә индереп бирҙе, ти. Шул арала бабай ҡайтты, ти. Бабай:

– Ҡунаҡ ҡайҙа? Әллә сығып та киттеме? – тип һораны, ти. Ҡатын:

– Ҡунаҡ тип үҙең әллә ниндәй кешене алып килгәнһең бит. Ҡаҙҙы ҡаҙаны менән алды ла йүгереп сыҡты ла китте. Һурпаһын да ҡалдырманы бит, исмаһам. Ҡабаланып, кейемдәрен дә онотҡан, – тигән, ти.

Был һүҙҙе ишеткәс, бер һыныҡ икмәк алды ла, ти, бабай теге ҡунаҡ артынан йүгерҙе, ти. Быны күреп ҡалып, ҡунаҡ тағы нығыраҡ йүгерергә тотондо, ти.

– Һурпаһын булһа ла ҡалдыр йәки бергәләп ашайыҡ! – тип ҡулындағы икмәген күрһәтә лә йүгерә, күрһәтә лә йүгерә, ти, бабай.

Теге ҡунаҡ икмәкте ҡыҙған тимер икән, миңә баҫырға итә икән, тип, артына ҡарай-ҡарай тағы шәберәк ҡаса, ти. Бабай һаман ҡысҡыра-ҡысҡыра йүгерә, ти. Ә өйҙә ҡатыны йөрөгән егете менән, ахмаҡ бабайҙан көлә-көлә, рәхәтләнеп ҡаҙ ите ашай, ти. Бабай менән ҡунаҡ әле булһа ла шул көйө йүгерәләр, ти. Бабай әле булһа ла ҡунағына етә алмаған, ти. Бөгөн барҙым, кисә ҡайттым, бер сынаяҡ ваттым, оятлы булып ҡайттым. Тфү, тфү, тфү.

## 114. Ике бурҙың ҡатыны

Борон заманда бер ҡатын булған. Үҙенең ҡыҙлай барған ирен өйөнән ҡыуып сығарған да айырылған көндән башлап яңы ир һайларға тотонған. Күп кешене артынан йөрөткән. Күп ҡатынды ҡан илатҡан. Мәгәр үҙе берәүҙе лә оҡшатмаған.

Ике ир булған. Икеһе лә төпһөҙ уғры булған. Йөрөй торғас, әлеге ҡатын шуларҙың икеһен дә тиң яратып, икеһе менән дә йөрөй башлаған. Ҡайһыһы менән һөйләшеп ултырмаһын, уға:

– Донъяла иң yратҡаным, ирем кеүек күргәнем – һин. Һинән бүтән берәүҙе лә тиң күрмәйем, бүтәндәрҙе енем һөймәй, – тип алдар булған.

Уғрыларҙың береһе көндөҙгө, икенсеһе төнгө уғры булған. Бер көндө ҡояш байыр саҡта көндөҙгө уғры менән һөйләшеп, береһе алмаҡ, береһе бармаҡ булған. Шул көндө үк ҡушылғандар. Ир ҡатын өйөндә торорға булған. Таң атҡас, ир тороп кейенде лә:

– Минең бараһы ер бар. Көн дә ошо мәлдә китеп, ҡояш байыған мәлдә ҡайтырмын, – тип сығып киткән.

Ҡояш сығып, иртәнге тамаҡҡа ашағандан һуң, теге ҡатын кеше аркылы төнгө уғрыны саҡырып алып, уның менән йәнә баяғыса һөйләшеп, ирҙе үҙенә мәйел итте, ти. Ир кеше төнө буйы йоҡламай, уғрылыҡҡа йөрөһә лә, ит күрмәгәнгә үпкә лә

аш, тип, ҡатындың тәҡдименә күнде, бергә торорға булды, ти. Шулай итеп, ул көнөн ҡатын янында үткәрҙе лә ҡояш байый башлағас:

– Минең бараһы ер бар. Көн дә ошо мәлдә китеп, ҡояш сығыу менән ҡайтырмын, – тип кейенеп сығып китте, ти.

Ҡатын, шулай итеп, ике ир менән тора бирҙе, ти. Берҙән-бер көндө көндөҙгө уғры иртән тороп:

– Һин миңә дүрт көнгә етерлек аҙыҡ һал, – тине, ти. – Мин был сығыуымда оҙаҡ йөрөрмөн, тиҙ көтмә, – тине, ти.

Ҡатын, бер һарыҡтың арт һанын ҡап урталай ярып, яртыһын алъяпҡысының яртыһына төрҙө, ти, ҙур йомғаҡ майҙы икегә бүлеп, уның да яртыһын урап һалды ла ярты икмәк биреп сығарып ебәрҙе, ти. Уныһы китеүгә төнгө уғры ҡайтты, ти. Көнөн ҡатын менән үткәрҙе лә, ти, кис булғас, быныһы ла:

– Дүрт көнлөк юлға сығам, аҙыҡ йәтешлә, – тине, ти.

Ҡатын теге уғры иренән ҡалған арт һандың икенсе яртыһын, ярты йомғаҡ майҙы алъяпҡысының яртыһына төрҙө лә, ярты икмәк биреп, юлға оҙатты, ти, быны ла.

Китеп ултыра торғас, ике уғры тап булышып, арыулыҡ, һаулыҡ һорашып, хәл йыйырға ултырырға булалар. Бер аҙ ултырғас, береһе:

– Бик асыҡтырҙы әле, аш бешерәйек, – тине, ти.

Икенсеһе лә:

– Мин дә бик йонсоном. Әйҙә, булмаһа, бергә бешерәйек, – тине, ти.

Хәҙер ризыҡтарын тағата башлайҙар. Икеһендә лә бер үк һарыҡтың арт һаны, ти. Ит ҡайнап, бешеп сығыуға, туҡмас һалырға итһәләр, туҡмастары ла бер иш була. Быларҙың башына уй төшә. Мәгәр береһе береһенә һүҙ әйтмәйҙәр, ти.

Шунан һуң ашты ашарға булып, төшөрөп, килтереп ултырталар. Тоҡтарындағы икмәктәрен алһалар, икмәктәре бер икмәктең ике яртыһы, ти. Быныһына ла ғәжәп ҡылалар. Шунан былар, бер-береһенең кем, ҡайҙа, ҡасан тыуғанын, ҡайҙа тороп, ниндәй кәсеп менән көн итеүҙәрен һораша башлайҙар. Бигерәк тә төргән сепрәктең яртышар алъяпҡыс булыуын күреп, берберeһе менән тағы ла ҡыҙыҡһыналар. Ҡатындары бармы, ҡайҙа икәнен һораштылар, ти. Икеһе лә бер өйҙәге ҡатынды әйткәстәре, оторо ғәжәпләнеп:

– Мин дә шул өйҙә торам, минең дә ҡатынымдың исеме шулай ул, – тигәндәр. – Тәүҙә фәлән кеше менән тора ине, – тигәс тағы хайран ҡалдылар, ти.

Шунан былар аштарын ашағандар ҙа ашығып ҡайтырға булғандар.

– Ауылға килеп ингәс тә, кем ҡайһы йортҡа барыр икән, шуны ҡарап ҡарайыҡ, – тип үҙҙәрен тикшерергә һүҙ ҡуйыштылар, ти.

Шулай итеп, йөкмәнешеп алып, был ике ир, барыр ерҙәренә бармай, ҡатын хәстәренән кире ауылға ҡайталар. Ауылға килеп инәләр. Бер үк урам буйлап китеп ултыралар. Шунан тағы бара биргәс, икеһе лә бер үк тыҡрыҡҡа боролалар. Тыҡрыҡ буйлап китеп ултыра торғас, бер үк ҡапҡа янына килеп етәләр. Бер үк ҡапҡаға боролғас, ҡаршыларына бер үк ҡатын, әлеге ҡатын, килеп сыға. Былар тағы хайран, ғәжәп ҡылып:

– Ирең кем? – тип һорайҙар.

Ҡатын:

– Ирем – һеҙ, – ти.

Шунан һуң былар:

– Беҙ икебеҙ ҙә быға тиклем бер ҡатын менән йөрөгәнде белмәнек. Инде бынан һуң кем менән торорға уйлайһың? Беҙҙең ниндәй кәсепкә йөрөгәнде беләһеңме? – тиҙәр.

Шул ерҙә ҡатын быларға эштең әресәһен* һөйләп бирә:

– Эйе, һеҙҙең кем икәнегеҙҙе бик яҡшы беләм. Берегеҙ – төнгө уғры, икенсегеҙ – көндөҙгө уғры. Һеҙҙең менән фәлән көндән бирле торам. Һеҙ бер-берегеҙҙе ошоғаса күрмәнегеҙ, белмәнегеҙ. Мин һеҙгә бер арт һанды, бер йомарлам майҙы, бер икмәкте, бер алъяпҡысты ҡап уртаға бүлеп, бер иш туҡмас биреп ебәргәс кенә, бер-берегеҙҙе белгәнһегеҙ. Шунан аптырашҡанһығыҙ. Хәҙер килеп эштең кәнде әресәһен белгәнһегеҙ. Инде хәҙер ҡайһығыҙҙың минеке булырға тейешен белеү өсөн, һөнәрегеҙҙе һынап ҡарайыҡ. Ҡайһығыҙ һис бер шипкерт* белдермәй, оҫта урлаша, һис бер тотолмай, мин шуныҡы булам. Урлашҡан ергә бергә барабыҙ. Берегеҙҙең һөнәрен икенсегеҙ күрмәгеҙ, белмәгеҙ, – тине, ти.

Шунан былар өсәүләп ултырып ашайҙар. Ашағас, төнгө уғры әйтә:

– Мин фәлән байҙың өйөндәге һандығынан алтынын урлайым, – тине, ти.

Көндөҙгө уғры:

– Мин баҙарҙағы бер байҙың кеҫәһенән аҡсаһын алам да кире урынына ҡуям. Шунан, һин минең аҡсаны урлағанһың, тип бәйләнеп, аҡсаны һис бер дау сығартмай, үҙемдеке итеп, һалдырып алам, – тине, ти.

Ҡараңғы төшкәс, өсәүләшеп төнгө уғры әйткән байҙың өйө янына баралар. Ҡатын менән көндөҙгө бурҙы бер урынға ҡуя ла төнгө уғры өйҙө бер тапҡыр урап сыға. Ул шулай зыяраттан алған тупрағын һибеп йөрөгән икән, ти. Шуға күрә эт тә әсе йоҡланы, ти, өй эсендәгеләр ҙә үлек кеүек йоҡоға талды, ти. Уғры асмалы тәҙрәне асып инеп, яйлап йөрөп асҡысты эҙләп тапты, һандыҡты асты ла, бөтә алтынды быларға алып бирҙе лә өсәүләп ҡайтып киттеләр, ти. Ҡайтып, ҡатын бер үҙе бер түшәккә, ирҙәр икәүһе ике түшәккә ятып йоҡланылар, ти.

Иртә менән торғас, баҙар ҡыҙа башлау менән, баҙарға сыҡтылар, ти, былар. Мал баҙарында бер бай кем тура килһә лә һатыулашып килешә лә, малды ла бер ергә эйәртеп*, аҡсаны һуңынан бирергә була. Был бай йәнә бер кеше менән мал һатыулашып торған сағында, кендеҙге уғры килеп, бер шипкерт ҡалдырмайынса, тегенең кеҫәһенән янсығын ала ла бер ышыҡ ергә барып, аҡсаны һанай. Һанап бөткәс, бер тиненә лә теймәйенсә, янсыҡты янынан байҙың кеҫәһенә тыға. Шунан баҙарҙы бер әйләнеп сыға. Был эште ҡатын менән төнгө уғрынан башҡа һис бер кем белмәне, ти.

Бай, янсыҡтағы аҡсаһына самалап, мал алып бөткәс, аҡса бирергә тип, мал хужаларына килдениһә, теге уғры:

– Минең аҡсам юғалды. Һинән башҡа уны һис кем алманы. Аҡсам һиндә. Бир аҡсамды, – тип бәйләнә башланы, ти.

Теге бай:

– Һинең аҡсаңды алыу түгел, үҙеңде күргәнем юҡ әле. Кит бынан, алйот. Фәлән дә төгән, фәсмәтән, – тип әрләшә.

Уғры ҡуймай, һаман бәйләнә бирә. Шунан был теге байҙы, уның ай-вайына ҡарамай, ҡазыйға алып китә. Ҡазыйҙан байҙың кеҫәһен тентеүен һорай, янсыҡтағы аҡса күпме булыуын әйтеп бирә.

Бының һүҙе буйынса, тегенең кеҫәһен тентей. Янсыҡты тартып сығарып аҡсаны һанай башлай. Аҡса теп-теүәл уғры әйткәнсә, ти, бер тин артыҡ түгел, бер тин кәм түгел, ти. Шунан ҡазый уның һүҙен раҫ ҡуйып, байҙың һүҙен бушҡа сығарып, аҡсаны уғрыға бирә.

Аҡсаны алғас, көндөҙгө уғры тегеләрҙе эҙләп таба ла бергәләп өйгә ҡайтып китәләр. Төндә урлаған аҡсаны ла, көндөҙ урлаған аҡсаны ла дүрткә бүләләр. Теге ҡатын кем менән ҡалыуын әйтмәй әле. Әйтмәһә лә, уғрыларҙың береһе был ҡатын менән тороп ҡалырға тейеш, икенсеһе янынан ҡатын алырға тейеш була. Шуға күрә табыштарҙы дүрткә бүләләр. Аҡса, алтын дүрт өйөм булып ята. Ҡатын:

– Бер-берегеҙгә үпкәләшмәгеҙ. Икегеҙ ҙә шипкерт белгертмәйһегеҙ. Икегеҙ ҙә оҫта. Мәгәр төндә урлау – бер эш, көндөҙ урлау – икенсе эш. Йоҡоло кешенән урлауы – бер эш тә, аяғөҫтө йөрөгән кешенең ҡуйынынан алыу – икенсе эш. Мин көндөҙгө уғрыға барам, – тип ике өлөштө төнгө уғрыға бирҙе, ти, ике өлөштө үҙҙәренә алып ҡалды, ти.

Төнгө уғры үҙенә тейгән өлөштө ала ла сығып китә. Ҡатын көндөҙгө уғры менән тороп ҡала.

## 115. Урау̇сы егет

Борон заманда бер әбей булған, ти. Уның бер генә улынан башҡа бер кешеһе лә булмаған, ти. Кемдә эш булһа, шунда эшләп, кемдә аш булһа, шунда ашап көн күргәндәр, ти, былар. Әбейҙең улы йыл үҫәһен ай үҫеп, егет булып етте, ти. Улар хәҙер икәүләп эшләй башланылар, ти. Байҙарға ураҡ уралар, бесән сабалар икән. Үҙҙәренә бәләкәй генә өй һалып, баҡса яһап ебәрҙеләр, ти. Шулай бер ваҡыт ураҡ ваҡыты етте, ти. Егет әсәһенә:

– Мин ураҡ урырға үҙем генә китәм, һин донъя көтөп өйҙә ҡалырһың, – тигән.

Егет бер үҙе генә ураҡ урырға сығып китте, ти. Бер байға ялланып, ураҡ ура ла башланы, ти. Ураҡ урып, аҡса йыйҙы, ашлыҡ алды, ти. Эш бөткәс, әсәһе янына ҡайтырға булды, ти. Тәүҙә баҙарға барып, кәрәк-яраҡ әйберҙәр алайым тип уйлап, баҙарға йүнәлде, ти. Баҙарҙа йөрөй торғас, бик ныҡ һыуһаны, ти. Сәйханаға кереп сәй эсһәм, аҡсам кәмей тип уйлап, ҡойонан ғына һыу эсергә булды, ти. Ҡойо эргәһенә килеп, биҙрәһен ҡойоға төшөрҙө, ти. Тартып алайым тиһә, биҙрәһе ысҡынып төштө лә ҡалды, ти. Быны ҡойо хужаһының ҡатыны күреп ҡалды ла, йүгереп сығып:

– Ҡойоноң биҙрәһен һин төшөрҙөң, хәҙер үк төшөп ал, – тине, ти.

Егет, меҫкен, ни хәл итһен – бар әйберен ҡойо эргәһенә ҡуйып, ҡойоға төшөп китә. Егеттең төшөп китеүе була, хужа ҡатын уның өҫ кейемен, баҙарҙа алған әйберҙәрен алып, тиҙ генә өйөнә инеп юғала. Ҡойонан сыҡҡас, егеттең өҫтөнә кейер әйбере лә ҡалмай, шәрә тороп ҡала. Шулай булһа ла, ул аптырап ҡалмай, ҡатын артынан йүгереп өйгә инеп китә. Өйҙөң ишеге эстән бикле була. Урау̇сы егет соланға инеп ултыра. Был йәш ҡатын үҙенә таныш бер йәш кеше менән ҡунаҡ булып ултыра икән, ти. Уларҙың һөйләшкән һүҙҙәрен урау̇сы егет тыңлап ултыра, ти. Ҡатын:

– Мин ҡапҡаны яҡшылап бикләнемме икән, тайҙар сыҡмаһа ярар ине, – ти.

Быларҙы ишетеп ултырған урау̇сы егет тиҙ генә ҡапҡаны асып, тайҙарҙы сығарҙы ла ебәрҙе, ти. Тайҙар сығып, урам тулып китте, ти. Ҡатын менән уның ҡунаҡ кешеһе тайҙарҙы ябырға сыҡтылар, ти. Шуны ғына көтөп торған егет тиҙ генә һандерәгә менеп китте, ти. Тайҙарҙы ябып, тегеләр тағы ла инеп ултырҙылар, ти. Егетте һыйларға тип әҙерләгән бай табынды күреп, урау̇сы егеттең бик ашағыһы килеп китте, ти. Бер аҙ ваҡыттан йорт хужаһы ла эштән ҡайтып етте, ти. Ҡатын ҡунағын һандерәгә йәшерҙе, ти. Һандерәлә ике егет булды,

ти. Урaҡсы егеттең һәйбәт кейемдәрен теге егет кейеп тә алған булған икән,ти.

Хужа ҡатын егетен һыйларға әҙерләгән һый-хөрмәтен тиҙ генә төрлө яҡҡа йыйып, иренә картуф, сәй әҙерләп ултыртты, ти. Йорт хужаһы ашай башланы, ти. Урaҡсы егет үҙ кейемдәрен систереп, кейенеп алды ла, һәндерәнән килеп төштө, ти.

– Һаумыһығыҙ, хужа ағай, мин баҙарҙан өшөп килдем, һәндерәгеҙгә менеп ятҡайным, йоҡлап киткәнмен. Мин дә бер-ике сынаяҡ сәй эсәйем әле, – тигән.

Хужа риза булған, бергәләп сәй эсә башлағандар. Урaҡсы егет хужа ҡатынға:

– Апай, мин баҙарҙан алған күстәнәстәрҙе шкаф аҫтына ҡуйғайным, шуларҙы алып ҡуй әле, – тип ҡатындың йыйған һый-хөрмәтен таптыра башланы, ти.

Башта ҡатын ишетмәмешкә һалышты, ти. Урaҡсы егет үҙе һәндерәнән күреп ятҡан урындарҙан һый-хөрмәтте алып, йорт хужаһы менән ҡунаҡ була башланылар, ти.

– Ағай, һин беләһеңме? Һеҙҙең өйҙә шайтан бар бит, уны ҡыуырға кәрәк, – ти.

Хужа кеше аптырап ҡала. Ҡатынынан:

– Һин һәр ваҡыт өйҙә тораһың, һин беләһеңдер, – тип һораған.

Ҡатын ҡурҡып ҡына:

– Бер ни ҙә белгәнем юҡ, – тигән, ти.

Урaҡсы егет:

– Мин шайтанды ҡыуырға беләм. Әгәр ҡыуҙырмаһаң, һиңә ҙур зыян килтерер, – тигән.

Хужа егеттән ярҙам һораган. Егет шайтанды ҡыуған өсөн, хужанан ат һораған. Хужа быға ла риза булған. Егет:

— Апай, тиҙ генә самауыр ҡайнат, — тигән.

Ҡатын, теләмәһә лә, самауыр ҡуя. Күп тә үтмәй, самауыр ҡайнап сыҡты, ти. Урaҡсы егет:

— Бына хәҙер шайтанды ҡыуабыҙ. Апай, миңә ҡайнар һыу ағыҙып бир әле берәй ҡалаҡ, — тигән.

Егет ҡайнар һыуҙы һәндерәлә шәрә килеш ятҡан егеткә һибә башлаған, ти. «Һәндерә шайтаны»:

— Уф-уф! — тип ыңғыраша башланы, ти. Егет:

— Апай, ҡалаҡтың ҙурырағын бир әле, — тип ҙурыраҡ ҡалаҡ менән һибә башланы, ти.

Егете:

— У-у-у, — тип ҡысҡырып ебәрҙе, ти.

Урaҡсы егет ҡайнар һыуҙы «һәндерә шайтаны»на сүмесләп һипте, ти. Егет быға түҙә алмай, һәндерәнән һикереп төшөп, шәрә килеш йүгереп сығып китте, ти. Егет өй хужаһына:

— Күрҙеңме, ағай, ниндәй шайтан һәндерәндә йәшенгән, әгәр тағы килһә, миңә хәбәр ит, — тигән, ти.

Үҙенең бөтә әйберҙәрен алып, йорт хужаһы биргән атҡа атланып, хушлашып ҡайтып китте, ти. Ураҡсы егет үҙенең тапҡыр аҡыллығы менән һәр ҡыйынлыҡты шулай еңгән икән.

## 116. Ас һалдат

Бер һалдат хеҙмәтен тултырып ҡайтып килә, ти. Быға гел йәйәү ҡайтырға тура килә. Юлы ла бик йыраҡ булған. Был бик асыҡҡан, талыҡҡан. Бер ауылға килеп еткәс, өйҙән өйгә инеп икмәк һорап йөрөгән. Шулай бер өйгә килһә, тәҙрәһе асыҡ тора, ти. Һалдат тауыш иткән-иткән дә, берәү ҙә яуап бирмәгәс, тәҙрәнән өй эсенә күҙ һалған. Өйҙә бер кем дә күренмәгән. Һалдат тәҙрәнән кергән дә һәндерәгә менгән дә ятҡан. Бер аҙ ятҡас, өйҙөң хужаһы килеп инә. Ул бер йәш кенә ҡатын була. Ул ҡатын ары-бире йөрөй ҙә, мейескә яғып, ҡоймаҡ бешерә. Ҡоймағын ҡойоп бөткәс, майлай ҙа әйбер ябып, һәндерәнең ситенә ултыртып ҡуя. Шунан самауыр ҙа ҡуйып ебәрә. Ҡатын улай-былай йөрөгәнсе, һалдат ҡоймаҡҡа тейешә.

Самауыр ҡайнап сыға, шул мәл бер егет килеп инә. Ҡатын, йүгереп йөрөп, өҫтәлгә самауыр ҡуя. Ҡоймаҡты ла ҡуяйым тиһә, таба еп-еңел, ти. Асып ҡараһа – ҡоймаҡ ныҡ кәмегән, ти. Хужа ҡатын, бесәй ашаған, тип уйлай ҙа, мейес башында ятҡан зыянһыҙ бесәйҙе туҡмай башлай. Һалдат, ҡурҡып, мөйөшкә боҫҡан, ти. Бесәйҙән үсте алгас, тегеләр бар һый менән сәй эсергә ултыралар.

Һәндерә ситенә шыуыша килеп, былар нимә ашайҙар икән, тип үрелеп ҡарайым тигәнсе, яҙа таяна ла һалдат йығылып төшә лә китә. Теге икәү ҡурҡыштарынан икеһе ике яҡҡа тәгәрәп киттеләр, ти. Һалдат тиҙ генә торған да ишектән сығып ҡасҡан. Барыр урын булмағас, күтәрмә аҫтына кереп, ҡараңғы мөйөшкә боҫҡан, ти.

Тегеләр өйҙә һушҡа килгәс, әҙәмме был әллә шайтанмы, тип, ир кеше балта, ҡатын бысаҡ алып, эҙләргә тышҡа сығалар. Эҙләй торғас, егетте күтәрмә аҫтына барып керә. Ҡараһа, бер аҡ нәмә ҡыбырлағандай итә, ти. Егет иплән кенә бара ла саба тегегә. Теге нәмә, ух итеп, ҡолап китә лә тынып ҡала.

Ҡатын өйгә ингән була. Егете артынан инә лә:

– Мин теге нәмәне үлтерҙем, – ти.

Сығып ҡараһалар, ул ҡатындың аҡ башлы быҙауы булып сыҡты, ти. Быны белгәс, ҡатын:

– Һуҡыр! Күҙле бүкән! Быҙауҙы танымаған башың менән миңә килгәнһең, – тип бик ныҡ асыуланған да егетте ҡыуған да ҡайтарған. Шул шау-шыу араһында ҡоймаҡ ашап хәле ингән һалдат өйөнә тайған.

## 117. Хикмәтле ҡош

Әүәле бер егет юлға сыҡҡан, киҫкә тора ямғыр яуа башлаған. Ямғыр яуа. Шунан, ямғыр яуғас, килә ятҡанда күшеккән ҡошҡа тәл* булған. Ҡошто тотоп алып ҡуйынына тыҡҡан. Бер ауылға килеп кергән. Бер өйҙә ут янып тора, ти. Бәләкәс кенә ҡарындыҡ тәҙрә, тәҙрәнән эскә ҡараһа, бер ҡатын, бер егет ултыра, ти. Әүәле сыуал булған. Ҡатын сыуалдан икмәк, бер тәрилкә май алған. Әпкилеп, тегеләр ашарға ултырған. Шул саҡ берәү килеп ишек туҡылдатҡан. Ишек туҡылдатҡас, ҡатын икмәкте, майҙы сыуал артына ултыртып ҡуйған, теге егетте урындыҡ аҫтына индереп ебәргән дә сығып ишеген асҡан. Хужаһы ҡайтҡан икән. Шунан теге егет тә ҡуна һорап, ишек шаҡыған. Асҡандар. Сәй эсергә ултырғандар. Ҡатын ҡатҡан ҡорот-маҙар ғына ҡуйып сәй эсерә. Ҡош сыуал артында ултыра. Тегеләр сәй эсеп ултырғанда ҡош:

– Ҡоҡоҡ, – тигән, өшөгән нәмә ни.

– Ярар, ярар, эшең булмаһын, тик ултыр, – тигән егет.

Хужа:

– Нимә тип әйтә ул?

– Сыуал артында икмәк, май бар, тип әйтә, – ти егет.

– Бар, әләй булғас, әпкил, ни эшләп улай итәһең?

Ҡатын:

– Әллә, кеше килһә, тип йыйғайным.

Ҙур бер икмәкте, бер тәрилкә майҙы килтереп ултырта, былар яҡшы итеп ашайҙар. Шунан яҡшы итеп урын йәйгәндәр, ятырға йыйынғандар. Шул саҡ егет сыуал артындағы ҡошҡа тейгән икән. Ҡош йәнә:

– Ҡоҡоҡ! – тигән.

– Нимә тип әйтә? – тип һораған хужа йәнә.

– Ана, урындыҡ аҫтында бер егет ята, тип әйтә.

Ир барып ҡараһа – елле кәүҙәле бер егет ята. Һөйрәп килтереп сығарғандар тегене. Шунан ҡаҡҡылаштырып, сығарып ебәргәндәр. Ирле-ҡатынлы низағлашып, йоҡлап киткәндәр. Йоҡлап торғас та хужа:

– Ҡошондо һат миңә! – тип ныҡыша, ти.

– Юҡ, һатмайым, ас әле ул.

Хужа:

– Әләй булғас, ит һал, ит ашатайыҡ, – тигән дә үҙе сығып киткән. Ҡош эйәһе:

– Әгәр иттең арыу еренән һалмаһаң, бөтә ғәйебеңде һөйләп бөтөр ул, – тигән ҡатынға.

Ҡатын ҡурҡты бит инде. Бер ҡаҙан итеп итен һала. Ҡошҡа ла ашаталар, үҙҙәре лә яҡшы итеп ашап алалар. Хужа һаман ҡуймай, ти.

– Ҡошондо һат инде? Нимә һорайһың? – тип әйтә, ти.

Хужаның атынан башҡа әйбере лә булмаған инде булыуға. Шулай булһа ла, ҡуйырҙан ҡуймай, ҡыр быуынға төштө, ти.

– Атымды бирәм, әйҙә, һөйләтеп ҡара әле, – тип ныҡыша, ти. Ахырҙа егет риза булған булып:

– Ярар. Тик хәтереңдән сығарма. Мин китеп өс көн үтмәй, ул һөйләмәҫ. Өс көндән һуң да һөйләмәһә – һыуға ман. Унда ла һөйләмәһә – үңәсен бор. Шунан һөйләр, – тигән дә, егет атты менеп алған да үҙ юлы менән киткән дә барған.

Өс көн үткән, ҡош һөйләмәй. Хужа һыуға мана – һаман һөйләмәй. Шунан муйынын бора, булаша торғас, үлтереп ҡуйған тегене.

Шулай итеп, егет ҡошо менән аҙғын ҡатынды фаш итеп, үҙе атлы булып киткән, ти. Ҡатындың аҙғынлығы арҡаһында, ире атһыҙ ҡалған, ти.

## 118. Ярлы егет

Борон бер ярлы егет бәхет эҙләргә сығып киткән, ти. Китеп бара, китеп бара, китеп бара торғас, бер ябалаҡ тотоп ала. Ҡуйынына тығып ала, ары китә.

Тағы бер ғауым барғайны, бер ауылға барып етте, ти. Урман ауыҙында ғына бер өй ултыра ине, ти. Егет шунда борола. Ҡапҡаға барырҙан элек, тәҙрәнән ҡарай. Ҡараһа – эстә бер ҡатын да бер ир, ти. Бер-береһенә һыйынышып ҡына, ит ашап, бал эсеп, мыңғалай булып ултыралар, ти. Шул саҡта ғына урман ауыҙында ат менән ҡайтып килгән бай пәйҙә булды, ти.

– Абышҡа ҡайтып килә! – тип, әлеге ҡатын янындағы ирҙе баҙға, итте ҡаҙанға, балды һәндерә башына йәшерҙе лә, ти, үҙе ах та ух килеп, ауырыған кеше булып ятты, ти.

Бай ҡайтып инә. Ҡатынының сәсрәп ауырып китеүен күреп, ҡурҡып китә. Ни эшләргә лә белмәй, ти. Шул саҡ, етмәһә, теге егет килеп инә. Ингән кешене сығарып ебәреп булмай бит инде. Үҙе лә юл йөрөп, асыҡҡан кеше булғас, хужа тегеләрҙән ҡалған һыуыҡ сәйҙе яраштырып ебәрә. Шунда теге егеттең ҡуйынындағы ябалаҡҡа иғтибар итә ҡуя.

– Был ниндәй ҡош? – ти.

– Былмы? Был улай-былай ҡош түгел – әүлиә! – ти ҙә егет, үҙе ҡошона ҡағылып ала. Ябалаҡ тауыш биргәндәй итә.

– Ни тип әйтә әүлиә ҡош? – тип һорай хужа.

– Ҡаҙанда ит бар, тип әйтә, – ти егет. Хужа йүгереп барып ҡаҙанды аса, һимеҙ-һимеҙ ит тә ҡаҙы-ял, ти. Итте табаҡҡа һалып алып тороп икәүләп ашарға тейешәләр.

Ашап ултыра торғас, егет ябалағының башына йәнә берҙе төртөп алды, ти. Ябалаҡ йәнә тауышланып ҡуя.

– Ни тип әйтә? – ти хужа.

– Һәндерә башында бал бар, тип әйтә.

Хужа шатыр-шотор һәндерә башына менеп тә китә – балды килтереп тә төшөрә мискәһе менән.

Йырлаша-йырлаша был икәү бал эсергә тотонмаһындармы!

– Ауырыған кешегә маҙа бирмәйһегеҙ! Бар, ҡайҙан килгәнһең, шунда кит, йолҡош! – тип ҡатын егетте ҡыуа башланы, ти. Быға егеттең бик асыуы килә лә йәнә ябалағының башына сиртеп ала. Ябалаҡ тағы ҡысҡырып ҡуя.

– Ни ти тағы? – ти инде хужа.

– Баҙҙа егет бар, тип әйтә, – ти хәйләкәр егет. Хужа тора килеп баҙҙы асып ебәрһә – ултыра, ти, шул бер ят ир, бәзрәйтә ҡарап.

– Әһ-һә, эшегеҙ улай икән әле һеҙҙең! – тип бай ҡатынын да, теге ирҙе лә ҫүтеп-ҫүтеп, сығарып ебәрҙе, ти. Сығарып ебәрҙе лә, ти:

– Һат миңә шул әүлиә ябалағыңды! Йөҙ тәңкәм йәл түгел! – тип әйтте, ти.

– Байға йөҙ тәңкә йәл түгелдер ҙә ул. Мин унһыҙ йәшәй алмам шул, – тигән булды, ти, ярлы егет.

– Улайһа, һат, мең тәңкә бирәм! – тине, ти, бай.

– Ярай, һатһам, һатайым. Һатһам да, аҡсаңа ҡыҙығып һатмайым, бай ағай. Күңеленде уйлап ҡына һатам, – тигән була егет.

Мең һумды кеҫәһенә һалғас, ябалағын ҡалдыра һалып, егет сығып олаға. Иленә ҡайта ла кәләш ала, йорт һала. Матур иттереп йәшәп алып китә.

Ярлы егет сығып киткәс, күп тә тормай, бай ябалаҡты ҡулына ала: «Кем миңә ҡыҙын бирер икән?» – тип башына елле генә итеп сирткәйне, ти, ябалаҡ ысҡынып китте лә, тәҙрәне ярып, осоп сыҡты ла китте, ти. «Ах, ҡошо ҡош ҡына инеме! Затлы ҡош ине! Әрәм генә иттем бит!» – тип үкенеп бөтә алманы, ти, бай. Әле һаман да үкенеүендә, ти.

## 119. Ҡатын хәйләһе

Бер суфыйҙың бик матур, бик күркәм ҡатыны булып, суфый уны бик яратҡандан кешенән көнләп, эшкә киткәндә, өйҙә ҡалдырып, ишекте тыштан йоҙаҡлап, артты ныҡлытып, күңелде тынысланып китер булған, ти. Шулай ҙа ҡатын, нисек итһә лә итеп, бер егет менән танышты, ти. Ләкин иренең йоҙаҡлап китеүенән ғажиз* ине, ти. Ҡатын уйланы-уйланы ла бер асҡыс яһатты. Ул асҡысты егеткә бирҙе, ти. Егет менән ҡатын шулай күп кенә ғиш-ғишрәт ҡылдылар, ти.

Ул заманда яуыз, боҙоҡ кешеләрҙе бер изге тау тишегенә алып барып, йәмин* иттерәләр ине, ти. Әгәр нахаҡ булһа, бер нәмә лә булмай, боҙоҡлоғо хаҡ булһа, йәмин итеүсе шунда уҡ, эсе күбеп, эсе ярылып үлер ине, ти. Ҡатынының тоғролоғона шиге уянған суфый бер көн:

– Әй, фәләнә, мин һине тау тишегенә алып барып йәмин әйттермәйенсә, һинең паклығыңа ышанмайым, – тине, ти.

Ҡатыны:

– Миндә һис башҡа хәл юҡ, әгәр бик теләһәң, йөҙ ант итергә мөмкин, – тине. – Ләкин ант иттереү менән, һинең хәтерең төҙәлерме? – тине, ти.

Суфый:

– Бәлки, төҙәлер, сөнки хаҡлыҡ заһир* булыр, – тине, ти.

Ҡатын:

– Улай булһа, бик яҡшы, һинең күңелең тыныслыҡ тапһын, ҡасан барабыҙ һуң? – тине, ти.

– Насип булһа, йома көн барырбыҙ, – тине, ти, суфый.

Ҡатын:

– Хуш, эшем хаҡ булғас, бер түгел, мең йәмин итергә лә әҙермен, – тине, ти, бошонмай ғына.

Шунан һуң икенсе көн суфый эшкә киткәс, ҡатын егетен саҡырып алды ла, ти, кисәге мажараны һөйләне, ти. Егет ҡайғыға ҡалды, ти. Ҡатын:

– Ни өсөн ҡайғыраһың? Һис ҡайғырма, был юлда ла бер хәйлә ҡорормон, бәләнән, һәләк булыуҙан ҡотолормон, әүәлгесә йөрөрбөҙ, – тине, ти.

Егет:

– Ҡотолһаң, бик яҡшы, – тине, ти.

Ҡатын:

– Иртәгә йома көн, һин фәлән ергә барып, ишәгеңде әҙерләп тор. Шунда минең хәйләмде күрерһең, – тине, ти.

Иртәгеһенә суфый:

– Бөгөн тауға барабыҙ, әҙерлән, – тине, ти.

Ҡатын:

– Бик яҡшы. Мәгәр миңә менеп барырға ишәк кәрәк булыр, – тине.

Суфый:

– Ярар, юлда ишәктәр булыр, аҡса биреп, яллап барырбыҙ.

Былар икәү йыйынып ҡапҡанан сығып киттеләр. Бара торғас, юлда бер егет ишәген тотоп, ҡарап тора ине, шуны күрҙеләр, ти. Ул ошо ҡатындың һөйгәне ине, ти. Суфый уны күргәне булмағас, танымаPы, ишәген яллап, ҡатынды мендереп, ары китте, ти. Барып еткәс суфый әйтте, ти, егеткә:

– Инде ҡатынымды төшөрөп бир инде, – тине, ти.

Егет ҡатынды тотоп төшөрҙө, ти. Шул саҡ ҡатын егет ҡулынан ысҡынып киткән булып, юрый йығылып китте, ти. Йығылғанда итәге асылып, яланғас тәне күренде, ти. Егет шунда:

– Һай, ахмаҡ, ғәүрәтеңде күрһәттең, әҙәпһеҙ икәнһең, – тип ҡатынды шелтәләгән булды, ти.

Шунан ары һүҙ булманы, былар тау тишегенә барып инделәр, ҡатын тубыҡланып ултырып, суфыйына ҡарап, ант итте, ти:

– Минең тәнемде... һинең менән ошо әйәһе егеттән башҡа һис кем күргәне лә, тотҡаны ла юҡ. Инде лә һүҙем нахаҡ булһа, ошо ерҙә, эсем күбеп, үләйем, – тине, ти.

Инде ҡатындың был анты хаҡ булып сыҡты, ҡатындың эсе күпмәне лә, ярылманы ла, ти. Суфый ҡатынының паклығына ышанды, нахаҡҡа рәнйетеүе өсөн ғәфү ҡылыуын үтенде, ҡатын ғәфү ҡылды, ти. Шуның менән низағты ҡуйып, былар өйҙәренә ҡайтып киттеләр, ти.

Шул көндән алып суфый бахыр ҡатынын көнләүҙән арынып, ишеген йоҙаҡламай йөрөр булды, егет менән ҡатынға иркенләп осрашырға юл асылды, ти.

## 120. «Ышанысл‌ы» ҡатын

Ике бик дуҫ кеше йәшәгән. Береһе икенсеһенә әйтә икән:

– Ҡатыныма ныҡ ышанам.

Береһе:

– Мин ышанмайым, – ти икән. – Ярай, һин улай ҡатыныңа ышанһаң, бына шулай үлгән бул да ят. Ҡатының ни эшләр икән?

Шунан был аҙна буйы ауырыған булып, ашамай-эсмәй йөрөй, ти. Үҙе күрһәтмәй генә бер ерҙә ашайҙыр инде ул ашауын. Иллә ашамамыш кеше булған булып ҡылана, ти.

Бер көн килеп был ҡарт үлгән булып ятты, ти. Хәҙер тере ҡатын иренең дуҫына барып:

– Иптәшең үлеп ҡуйҙы бит әле. Ни эшләйбеҙ инде? – ти икән.

«Ҡатыныңа ышанма» тигән кеше:

– Эй, дуҫ, – тигән була ла үкереп илаған була, – дуҫ менән һөйләшәһе һүҙ бар ине, һөйләшә алмай ҙа ҡалдыҡ бит, – тип әйтә лә йәнә илай, ти.

– Нindәй һүҙ ине һуң ул? – тип һораны, ти, был ҡатын.

– Бына, мин үлһәм, минең ҡатынды ул алырға булғайны. Ул үлһә, уның ҡатынын мин алырға булғайным, – тип илай икән.

Шулай тип әйтеүе булған – теге ҡатын шунда уҡ был кешегә барырға ризалығын биргән.

Ҡатындың ире (үлмәгән бит инде) тыңлап ята-ята ла:

– Ҡәһәр һуҡҡан, ҡара һин уны! – тип һикереп килеп торған.

– Ә-ә-ә, ышандыңмы инде ҡатыныңа? Бына күрҙеңме инде: аңын-тоңон белмәй, кеше кешегә ышанмай, – тип әйтә, ти, теге иптәше.

## 121. Ун ике биғлый*

Борон бер ир ҡатыны менән ун өс йыл бергә ғүмер иткән. Бер ваҡыт йәй көнө бесәндә ятҡанда, ун ике биғлый килеп, бының ҡыуышын баҫҡан, ти. Былар быныӊ ҡатынын һорағандар. Ун өс йыл бергә торған ҡатынды биреп ебәргеһе килмәгән ирҙең. Ун ике биғлый ҡатынды тартып алып киткән дә барған. Ир кеше иртүк тороп, үҙенең этен эйәртә лә эҙләп китә. Эҙләп бара торғас, урман эсендә таба тегеләрҙе. Быныӊ ҡатынының алдында бер биғлый ята. Ҡатын уның башын ҡарап ултыра икән, ти.

Ире килә лә ҡатынға:

– Кил әле, – тип ымлай.

Ҡатын алдында ятҡан биғлыйҙы күрһәтә икән.

– Алдымда кеше бар, мин һинеӊ алдыңа бара алмайым, анауында иптәштәре бар, – тип әйтергә лә итә икән, ти.

Ир түҙмәй, теге биғлыйға килеп йәбешә. Биғлый көслө була, ирҙе еңеп алып бара. Ир ҡатынынан ярҙам һорай.

– Ярҙам ит, ҡатын, – ти.

Ҡатын:

– Ҡайһығыҙ еңә, мин шуныҡы, – тип, тик тора, ти.

Һуғыш бик хәтәр бара. Тегеһе был ирҙе бороп алып бара. Шунан ир үҙенең этенә ҡысҡыра, эте килеп биғлыйҙың балтырынан ала. Икәүләп биғлыйҙы үлтерәләр. Шунан ҡатынына әйтә ир:

– Ни өсөн мине яҡламаның? – ти. – Бер төн эсендә быларға әүрәп тә киттеңме? – ти.

Ҡатын әйтә:

– Мин ҡурҡтым. Иптәштәре килеренән ҡурҡтым, – ти. Ире әйтә:

– Мин тәүҙә уларын бөтөрҙөм, – ти.

– Алдама, – тип ҡатыны ышанмай, ти. Ире ҡанлы бысағын күрһәткәс, – уянып китер, тип яныңа бара алманым, – тип ялбарып ҡараған, ти.

– Улайһа, беҙ һуғышҡанда, ниңә: «Ҡайһығыҙ көслө, мин шуныҡы», – тип торҙоң? – тип үпкәләгән ир.

Быға ҡаршы ҡатын бер һүҙ ҙә әйтә алмаған. Аҙаҡҡы һүҙендә ир:

– Шул ҡылған ҡылығың өсөн, ҡатын, мин һине үлтерәм инде, – тип ҡатынды үлтерә лә бигләйҙарҙың ун ике атын алып ҡайтып китә.

Ауылға барып халыҡҡа хәлде һөйләп, дөрөҫөн яҙҙырған да:

– Атың менән ҡатыныңа ышанма, этеңә ышан икән, – тип ҡуйған.

«Атың менән ҡатыныңа ышанма, этеңә ышан» тигән мәҡәл шунан тороп ҡалған, ти.

## 122. Хәйләле мылтыҡсы ҡарт

Борон заманда бер мылтыҡсы ҡарт булған, ти. Ҡарсығы үлеп, был ҡарт яңғыҙ улы менән генә йәшәп ятҡан, ти.

Көндәрҙең береһендә ҡарт йәштән кәләш алған, ти. Арыу ғына торалар былар. Шунан бер ни тиклем ваҡыттан һуң йәш ҡатын ҡартты мөрхәтһенмәй башлаған, ти. Ҡарттың күршеһендә генә бер ҡарсыҡ булған, ти. Ҡатын шул ҡарсыҡҡа һәр ваҡыт үҙенең серҙәрен һөйләр ине, ти.

– Мин һис тә иремде яратмайым. Шуның ике күҙен һуҡыр итеп, ике ҡолағын һаңғырау итер инем мин, хәлемдән килһә, – тигән, ти, был бер ингәнендә.

Ҡарсыҡ өндәшмәй генә тыңлап ултырған да бөтәһен дә ҡартҡа еткереп торған, ти. Бер ваҡыт ҡарт күрше ҡарсыҡҡа былай тигән, ти:

– Әгәр минең ҡатыным тағы бер тапҡыр кереп, шулай һөйләнһә, һин уға: «Иреңде һуҡыр, һаңғырау итәһең килһә, фәлән урманда, эсе ҡыуыш ҡарама бар, шунда бар ҙа хәлеңде һөйлә», – тип әйт, – тигән, ти. – «Ул ағастан яуап килер», – тиген, – тигән, ти.

Бер көн ҡатын ҡарсыҡҡа кереп тағы ҡартынан зарланып ултырған да:

– Әй, әбей, һин берәй дарыу белмәйһеңме? Ҡарттың күҙен һуҡыр, ҡолағын һаңғырау итер инем, – тигән, ти.

Ҡарсыҡ ҡарт өйрәткәнсә яуап биргән. Иртән ҡатын ҡартына:

– Күрше ҡыҙҙары еләккә баралар, мин дә шулар менән барайымсы, – тигән булды, ти. Ҡарт:

– Бар, оҙаҡ йөрөмә, – тигән булды, ти.

Ҡатын бер һауыт алып киткән. Урманға барғас, еләктән әүәл теге ҡыуыш ҡараманы эҙләп тапты ла, ти, ҡарама төбөнә барып, эсендәге серҙәрен һөйләй башланы, ти.

– Иреңде һуҡыр, һаңғырау итәһең килһә, ҡайтышлай кибеттән май алып ҡайт. Һәр көндө майлы бутҡа, майлы ҡоймаҡ ашат, – тигән, ти, ҡарама.

Ҡатын бик шат булып, еләктә лә эше булманы, ти, ҡайтырға сыҡты, ти. Кибеткә инеп май алды, ти. Шул арала ҡарты ҡайтып ятты, ти. Бер аҙҙан ҡатыны килеп керҙе, ти.

– Эй, ҡарт, урманда еләк юҡ, буш ҡул менән ҡайтҡансы, май алып, бутҡа ашатайым, тип уйланым, – тигән, ти.

Ҡатын ҡартҡа һәр көн майлы бутҡа менән майлы ҡоймаҡ ашата, ти. Көндәрҙең береһендә ҡарт ҡатынына:

– Ҡарсыҡ, күҙем һыҙлай, ҡолағым һыҙлай, күҙҙән әллә яҙыуыммы икән, һаңғырау буламмы икән? – тигән була, ти.

Бер нисә көндән һуң:

– Күҙем күрмәй, ҡолағым ишетмәй, бер һүҙҙе, ике тапҡыр әйтмәйенсә, ишетмәйем, таянырға таяҡ бир, – тигән, ти. Күп тә тормай ҡарт аҡрын ғына мейес башына менеп ятты, ти. Ҡатын бик шатланып йөрөй башланы, ти.

Был ҡатындың бер һөйгән егете булған икән. Көндәрҙең береһендә ҡатын егетте өйөнә саҡырған, ти.

– Ҡартың өйҙә юҡмы? – тип һораны, ти, егет.

– Өйҙә, ҡурҡма, ул ишетмәй ҙә, күрмәй ҙә, – тигәс, егет өйгә инде, ти.

Егет ингәс, ҡарт улын саҡырып алды ла:

– Эй, улым, минең ҡолағым һаңғырау, күҙем һуҡыр. Әнием бик насар. Мин үлһәм, атаң һөнәрен тот, мылтыҡсы булып һунарға йөрө. Мылтыҡты бына ошолай итеп ҡоралар ҙа ошолай аталар, – тип теге егеткә төҙәп, тәтегә баҫҡайны, мылтыҡ атылды ла китте, ти, теге егет тәгәрәп барып төштө, ти. Ҡарт улына:

– Улым, әллә мылтыҡ атылдымы? – тигән булды, ти.

– Эйе, атылды, инәйемә килгән егеткә тейҙе, – тине, ти, тегеһе ҡысҡырып.

Ҡатын егетте бер умарталыҡҡа алып барып, ҡулына бал тотторол, һөйәп ҡуйҙы, ти. Теге кеше бал ашаған кеше кеүек баҫып тороп ҡалды, ҡатын ҡайтып китте, ти.

Ҡайтһа, ҡарт мейес башынан төшкән, күҙҙәре лә элекке шикелле сәләмәт, ҡолаҡтары ла ишетә башлаған, ти. Ҡатыны ҡайтыу менән, ҡатынын талаҡ ҡылды, ти.

Умарта ҡарауысыһы бер ҡарт булған. Ҡарауылсы тышҡа сыҡҡанда, күҙе егеткә төшкән, ти. Ул, тиҙ генә кереп, мылтығын алып сығып, һөйәлеп ҡуйылған теге егеткә:

– Кем унда бал ашап тора? Яҡшылыҡ менән кит! Әгәр китмәһәң, атып үлтерәм, – тип ҡысҡырҙы, ти. Ҡарауылсы күпме ҡысҡырһа ла, егет китмәне, ти. Егет китмәгәс, ҡарауылсы атып ебәрҙе – егет ҡолап барып төштө, ти. Ҡарауылсы: «Хәҙер быны ҡайҙа ҡуйырға инде?» – тип йөрөгәндә, урмандан алыҫ түгел ерҙә күл барлығы иҫенә төштө лә, ти, егетте кәмәгә ултыртып, күлгә төшөрҙө лә ебәрҙе, ти. Кәмә сайҡала-сайҡала ел ыңға-

йына китте лә барҙы, ти. Шул мәлдә генә бер егет өйрәк атырға ултыра ине, ти.

– Туҡта, өйрәкте ҡурҡытаһың, кит! – тип ҡысҡыра, ти, быны үлек тип белмәйенсә.

Тауыштан ҡурҡып өйрәк осоп киткән. Һунарсы асыуланып, кәмәләге егеткә атты ла ебәрҙе, ти. Егет кәмәһе менән ҡапланып һыу төбөнә китте, ти.

Меҫкен егет, бер аҙғын ҡатынға бәйләнеп, өс тапҡыр атылып, ошондай хәлгә тарыған, ти.

## III. ҮТӘ ҮҘ ҺҮҘЛЕ ҺӘМ ЯУЫЗ ҠАТЫНДАР, НАХАҠТАН РӘНЙЕТЕЛЕҮСЕЛӘР

### 123. Наҙлы ҡыҙ

Борон-борон заманда бер батша бар ине, ти. Уның бик матур ҙа, бик иркә лә, бик наҙлы ла бер ҡыҙы бар ине, ти. Ҡыҙ үҫеп, буйға-һынға килгәс, уны һорап яусылар килә башланы, ти. Уға төрлө ерҙән килделәр, ти. Ҡыҙ береһен дә яратманы, ти. Барыһынан да бер ғәйеп табып, яусыларҙан көлөп, ҡайтарып торҙо, ти. Быға батшанан да килделәр, ти, байҙарҙан да килделәр, ти.

Яусылар йөрөүе ун йыл дауам итте, ти. Наҙлана торғас, ҡыҙ олоғайып та китте, ти. Бара торғас, быны һоратып, яусы ла килмәй башланы, ти. Был хәлде күреп, батша бик ҡайғыра, бошона башланы, ти. Нисек кенә булһа ла, ҡыҙын кейәүгә биргеһе килде, ти. Шунан, ун йыл эсендә кем яусы ебәргән, шул егеттәрҙең барыһын да батша бер көндө үҙенә ҡунаҡҡа саҡырҙы, ти. Егеттәр барыһы ла килделәр, ти. Уларҙы бер бүлмәгә индереп, теҙеп ултырттылар, ти. Батша ҡыҙын егеттәр ҡаршыһына алып сыҡты, ти.

– Ҡыҙым, һиңә яусы ебәргән егеттәр ошолар ине. Хәҙер башҡа һоратыр кеше юҡ. Бына ошолар араһынан үҙеңә береһен һайла инде, – тине, ти.

Ҡыҙ егеттәр араһына инеп ҡаранды-ҡаранды ла, ти, береһен дә оҡшатманы, ти.

– Быныһы сыпсыҡ морон, быныһы йомран күҙ, бесәй ҡойроҡ, быныһы сөгөлдөр кеүек, быныһы ҡамыр кеүек, – тип барыһынан да бер ғәйеп табып сыҡты, ти.

Шунан был эшкә батшаның бик асыуы килде, ти. Ҡыҙына:

– Иң элек һине бер хәйерсе генә йырсы егет һораҡкайны. Ул әле бында юҡ. Бик асыуымды килтерһәң, мин һине шуға бирермен дә ҡуйырмын, – тине лә, ти, батша сығып китте, ти.

Ҡыҙ сыпсыҡ морон тип хурлаған егет икенсе бер батшаның улы икән, ти. Әле ҡыҙҙың атаһы әйткән һүҙҙе ишеткәс тә, бик иҫке кейемдәр кейҙе лә, тоҡтарын аҫып, таң менән батша янына килде, ти. Батша янына кергәс тә, егет бик һәйбәтләп йырлап ебәрҙе, ти. Шунан батшанан ҡыҙын һораны, ти. Батша риза булды, елтерәтеп килтереп сығарҙы ла, ти, ҡыҙын «хәйерсе егеткә» тотторҙо, ти. Егет ҡыҙҙы ҡолағынан тотто ла алып та китте, ти.

Китеп баралар, ти, егет менән ҡыҙ, китеп баралар, ти. Матур йорт күргән һайын ҡыҙ:

– Эх, бына был йортҡа керһәң! Ах, бына был йортҡа керһәң! – тип бара, ти.

Бара торғас, егеттең өйө тәңгәленә лә барып етәләр икән. Ул инде бигерәк тә матур, бигерәк тә бейек икән.

– Быныһы кем өйө? – тип һораны, ти.

Егет:

– Был ни һине һораткан батша улының өйө. Һин уны, сыпсыҡ морон, тип мыҫҡыл итеп ебәргәйнең, – ти.

Ҡыҙ:

– Ах, мыҫҡыл итмәгән булһам, шунда инер инем бит, – тип илап ебәрҙе, ти.

Баралар, ти, былар, һаман баралар, ти. Бара торғас, ҡыйыҡһыҙ бер ер өйгә барып еттеләр, ти. Унда барып еткәс, ҡыҙ егеттән:

– Бында нимәгә тупраҡ өйгәндәр? – тип һораны, ти.

Егет:

– Минең өй. Әйҙә, ошонда керәбеҙ инде, – тип, ҡыҙҙы ҡолағынан тотоп, елтерәтеп алып инде, ти.

Ҡыҙ ҡыҫҡырып илай-илай инеп китте, ти. Эскә ингәс, егет аш бешерергә, самауыр ҡуйырға, өйҙө йыйыштырырға ҡушты, ти.

Ҡыҙ:

– Мин ул эштәрҙе эшләй белмәйем. Аш бешергәнем юҡ, самауыр ҡайнатҡаным юҡ, өй йыйыштырғаным юҡ, – тип ҡарағайны ла, ти, егет уға:

– Ҡорһағың аса башлаһа, эшләү түгел эшләрһең, – тип сығып китте, ти.

Егет сығып киткәс, ҡыҙ ҡыҫҡырып-ҡыҫҡырып илап ҡараны, ти. Ни хәл итһен, асыға башлағайны, аш бешерҙе, ти, самауыр ҡуйҙы, ти, егет ҡайтҡансы, өйҙө лә йыйыштырҙы, ти. Шулай итеп, былар ир менән ҡатын булып йәшәй башланылар, ти. Егет көн дә иртә менән:

– Мин баҙарға барып эш йүнләп киләйем, – тигән булып сығып китә лә үҙенең теге бейек матур өйөнә ҡайтып китә икән, ҡыҙҙы, ер өйҙән сығармай, аслы-туҡлы ғына тота икән, ти.

Бер айҙай торғас, ҡыҙ йомшарҙы, ти. Иренә булышырға теләп, баҙарға сығыу тураһында уйлай башланы, ти. Был уйын егеткә лә белдерҙе, ти. Егет:

– Улай булһа, бына һин ошо йомортҡаларҙы һатып ҡайтырһың, – тип ҡыҙға бер йөҙләп йомортҡа бирҙе, ти.

Йәш ҡатын йомортҡаларҙы бер кәрзингә һалып, баҙарға сығып китте, ти. Баҙарға барып, кәрзинен асып бер мөйөшкә генә ултырғайны, ти, бик шәп ат еккән бер кеше, атын тыя алмайынса, бының кәрзинен ауҙарҙы ла китте, ти. Йомортҡалар ян-яҡҡа туҙып тәгәрәшеп, береһе лә имен ҡалманы, ти. Йәш ҡатын, ни әйтергә лә белмәйенсә, илай-илай ер өйөнә ҡайтты, ти.

– Ни генә тип яуап бирермен инде? Йә инде, – тип һөйләнә-һөйләнә, ире ҡайтҡансы иланы, ти, ул, күҙҙәре шешенеп бөттө, ти.

Шунан ире ҡайтҡас, хәлде йәшермәй, нисек булған, шулай һөйләп бирҙе, ти. Ире тыңланы ла, тыңлап бөткәс, бер һүҙ ҙә әйтмәне, ти. Шунан бер көндө:

– Һин, ана, теге һине һоратҡан сыпсыҡ морон батша малайының өйөнә бар ҙа эш һора. Унда һинлек кенә эш булыр. Арыу ғына йөрөһәң, тамағың да туйыр, өҫтөң дә бөтәйер, – тип кәңәш бирҙе, ти.

Кәләше был һүҙгә риза булды ла иртәнсәк теге бейек йортҡа барып, эш һораны, ти. Быны аш бешереүсегә булышсы итеп алдылар, ти. Был шунда һис ҡарышмай ғына эшләп йөрөй. Көнө буйы аш-һыу менән булаша, һауыт-һаба йыуа – һәммәһен дә эшләй, кис ҡайтып ире янында йоҡлай, таң һарыһы менән тороп, тағы эшкә китә, ти. Шулайтып, оҫта ашсы янында тырышып эшләй торғас, әллә нисәмә төрлө аш бешерергә өйрәнеп алды, ти. Бер ай тигәндә, бар эшсенән дә артыҡ аш бешереү оҫтаһы булып китте, башҡаларҙы үҙе өйрәтерлек булып етте, ти.

Шулай бик һәйбәт кенә йөрөгәнендә, берҙән-бер көндө йорт хужаһы булған батша улы йәш ҡатындың янына килеп, быны бер мөйөшкә ҡыҫырыҡлай башланы, ти. Ҡатын ҡысҡыра башланы, ти. Ҡатын ҡысҡыра, ҡысҡыра ғәжәп, берәү ҙә сығып ҡарамай, ти. Хәҙер быны егет өҫкө бүлмәгә һөйрәкләй башланы, ти. Йәш ҡатын тартышып ҡараһа ла, бер ни сығара алманы, ахырында еңелеп, менде, ти. Өҫкә менгәс, тәҙрәнән һикерергә итеп тә ҡараны, ишектән сығып ҡасырға ла итеп ҡараны, ти, булдыра алманы, ти. Ахырында егет быны беләнән тотоп, һикегә ултыртты ла, ти:

– Йә, миңә тура ғына ҡара әле, танырһыңмы, мин кем?

Йәш ҡатын ояла-ояла ғына баш ҡалҡытып бер һирпелеп ҡараны, ти. Шунан тағы ҡараны, ҡарай торғас ҡына, уның үҙ ире икәнен төҫмөрләне, ти.

– Бына мин һинең ирең. Үҙең сыпсыҡ морон тигән, атаң хәйерсе йырсы тигән кеше мин булам инде, – тине, ти.

Ҡыҙ аптырап ҡалды, ти. Оялып, оялышынан тағы иларға керешә, ти.

Егет:

– Илама, илама инде. Мин һине артыҡ наҙлы булғаныңа күрә, юрый хәйерсе булған булып алдым. Шуның өсөн һине аҙыраҡ ҡына балыҡсының ер өйөндә тоттом. Баҙар хәлен белһен тип, йомортҡа һаттырырға сығарҙым. Уны, ат менән бәрҙереп, һыттым. Унан һуң аш-һыу әҙерләргә өйрәттем. Ул артыҡ наҙлылығыңды хәҙер ҡабатламаҫһың, тип уйлайым. Беҙ икәү ошо өйҙә торорбоҙ, – тине, ти.

Шунан һуң кәләшенә яңы кейемдәр кейендереп, ҡайны-ҡәйнәләрен саҡырып, өр-яңынан туй яһаны, ти. Батшаның наҙлы ҡыҙы наҙланыуын онотоп, батша улы булған кейәүе менән бер-береһен яратышып, әле булһа ла шул бейек матур йорттарҙа йәшәйҙәр, ти. Тфү, тфү, тфү...

## 124. Кем аңра?

Борон-борон заманда бер бабай менән әбей йәшәгән. Уларҙың бер бөртөк кенә ҡыҙҙары булған. Берәү генә булғас, уны бик иркәләтеп үҫтергәндәр, эшкә өйрәтмәгәндәр.

Бына ҡыҙ буйға етә, тирә-яҡтан яусылар килә башлай. Әбей байыраҡ кейәү һайлаһа ла, бабай ризалашмай, үҙҙәре кеүек ярлыға бирмәк була икән. Ҡоҙалашып, туй яһап, бер һунарсыға бирәләр быны.

Шулай йәшәп китәләр былар. Ире иртән тороп, һунар китә. Кис бик һуң ҡайта.

Бер көндө ире көндәгесә һунарға сығып китә. Оҙон көн буйына тауҙан тауға артылып, арып-талып, төнләтеп кенә ҡайтып инә был. Ҡайтып инһә, аптырап ҡала: ашарға әҙерләнмәгән, өй йыйыштырылмаған, мейес яғылмаған, һыйыр һауылмаған, бисәһе өшөп, кәкрәйеп бер мөйөштә ята, ти. Икенсе көндө лә шул уҡ хәл ҡабатланды, ти. Көн дә шулай дауам итә. Һунарсы аптырай, ни эшләргә лә белмәй: туҡмар ине, алып ҡайтҡанда: «Ҡыйырһытмам!» – тип һүҙ биргән була. «Нисек аҡылға өйрәтергә был бисәне?» – тип баш вата икән был. Уйлана торғас, бер хәйлә таба был.

Бер көн иртәнсәк, йоҡоһонан торғас, һунарсы бесәйҙе тотоп ала ла бисәһе ишетерлек итеп:

– Мин ҡайтыуға, өй йыйылынған, һыйыр һауылған, тамаҡҡа бешкән, урын йыйылған булһын. Әгәр өй йыйыштырылмаһа, һыйыр һауылмаһа, тамаҡҡа бешерелмәһә, урын йыйылмаһа,

нимә эшләтергә белермен, – тип әйткән дә һыҙмаһын алып сығып киткән, ти.

Ҡатынҡай тора ла аталарына йүгерә, әсәһенең ҡайнаған самауырына өлгөрөргә тырыша был. Йырлап торған самауыр янында тирләп-бешеп сәй эсә үҙе:

– Минең ирем әллә аҡылдан яҙа башлаған инде, бөгөн иртән бесәйҙе тотоп алды ла: «Мин ҡайтыуға өй йылынған, һыйыр һауылған, урын йыйылған, тамаҡҡа әҙерләнгән булһын. Өй йылытылмаһа, һыйыр һауылмаһа, урын йыйылмаһа, тамаҡҡа әҙерләнмәһә, нимә эшләтергә белермен», – тине. – Бесәй аңлай тиме икән инде, иҫәр, – тип хәбәр һөйләй был.

Аталары:

– Һе, – ти ҙә ҡуялар икән.

Ҡатын аталарынан киҫкә табан ғына ҡайтып, ҡат-ҡат кейенеп ала ла ирен көтә башлай. Быуа һунарсы ла ҡайтып инә. Инһә – өйҙә әүәлге күренеш. Һунарсы бесәйҙе тотоп ала ла, ҡайҙа бәйләр урын тапмаған кеше булып, һөйләнә-һөйләнә үрле-түбәнле йөрөй. Шунан уны бисәһенең арҡаһына арҡыры бәйләп, ҡойроғо менән башын тотоп торорға ҡуша ла ҡамсы менән яра башлай. Эй яра был бесәйҙе, эй яра – ҡамсының иң әсе тейә торған осо бисәгә эләгә, ти. Бесәй ни, бәйле булғас, башы, ҡойроғо ҡулда булғас, тажылдап, тырнаҡтарын бисәнең арҡаһына батыра, ти. Шунан был түҙеме бөтөп:

– Йә, етер инде, тыңлар, – тигән булды, ти.

Бисәһе ялбара башлағас ҡына:

– Ҡабат та әйткәнде тыңламаһаң, тағы тетермен, әле бисәнең һүҙенә ҡарап ҡына ебәрәм. Юҡһа бөтөрә инем, – тип ир бесәйҙе сисеп ебәрҙе, ти.

Икенсе көндө иртән һунарсы тағы бесәйен саҡырып ала ла кисәге һүҙҙәрен ҡатыны ишетерлек итеп әйтеп китә. Ире сығып киткәс, ҡатыны, аталарына барып, кисәге хәлде һөйләй:

– Шулайҙыр шул, – тип кенә ҡуялар ҡарттар.

Кис етә, һунарсы арып-талып һунарҙан ҡайта – өйҙә һаман элекке күренеш. Тағы бесәйҙе тотоп ала был, бисәһенең арҡаһына бәйләп, кисәгенән дә нығыраҡ итеп ҡамсы менән яра башлай. Яра торғас, ҡатыны, ауыртыуға түҙә алмайынса:

– Туҡта инде, етер, иртәгә тыңлар, – тип ҡысҡыра башлай. Юҡ. Бесәй һаман ыҡҡа бармай, ти.

Өсөнсө көндә лә шул уҡ хәл ҡабатланды, ти. Ҡамсы тағы ла әсерәк төшкәс, ҡатын:

– Йә булды. Инде лә тыңламай ҡалмаҫ, – тип ялбара, ти.

Дүртенсе көндө ҡатыны:

– Анра бесәй ыңғайына туҡмалып тормаға ни, – тип, утын индереп, мейесен тоҡандырып ебәрә, йүгереп барып һыу алып килә, матур итеп өйөн йыйыштыра, ашарға ла бешереп ҡуя.

Кис була, һунарсы ла ҡайта. Өйгә инер саҡта танауына тәмле аш еҫе бәрелгәс, сикһеҙ ҡыуана, шатланып өйгә керә был.

Шунан бирле былар бик матур йәшәп яталар, береһенән-береһе сибәр ҡыҙҙар, береһенән-береһе көслө улдар үҫтерәләр, ти.

## 125. Халиҡ ҡыҙы Хәҙисә

Ғәли ағай ауылда аҡыллы булыуы менән дан алған кеше ине, ти. Уның берҙән-бер улы Ғабдулла, ата-әсәһе ҡарт булыу сәбәпле, һалдатҡа барыуҙан ҡотолдо, ти. Көҙ матур ғына үткәйне, атаһы сирләп китте лә, оҙаҡ та ятмай, үлеп ҡуйҙы, ти.

Ғабдулла ла, атаһына оҡшап, бик аҡыллы ине, ти. Ғәфифә ҡарсыҡ:

– Улым, үҙең кеше булдың инде. Мин бик ҡартайҙым. Балам, һиңә хәҙер йәмәғәт алырға кәрәк. Мин иҫәп саҡта өйләнеп ҡал. Хәҙер мин йортто ҡарарға булдыра алмайым. Бына үҙебеҙҙең ауылда ла һиңә ярарлыҡ ҡыҙҙар бар. Вәли ағайҙың Гөлсөмө үҙе аҡыллы, үҙе кейәү өсөн күптән әҙерләнгән. Атаһынан өйрәләп, ғүмерегеҙгә етерлек малы килер. Бәхетле тороһоғоҙ. Эшкә бик оҫта. Әллә шуға ҡоҙа ебәрәйекме? Мин үҙем дә барып ҡайтырмын, – тигән, ти.

Ғабдулла:

– Мин уны алырға һис кенә лә риза түгел. Уның байлығы миңә кәрәкмәй. Хәҙергә өйләнмәйем әле, – тигән.

Ғәфифә әбей, әллә был мин күрһәткән ҡыҙҙы оҡшатмаймы икән, тип үҙҙәренең ауылынан тағы бик күп ҡыҙҙарҙы күрһәтте, күрше ауыл ҡыҙҙарын һанап сыҡты, ти. Тик Ғабдулла береһенә лә риза булманы, ти.

– Минең күҙем төшкән бер ҡыҙым бар. Ул, ана, күрше ауыл Халиҡ ағайҙың Хәҙисә исемле кесе ҡыҙы, – тине, ти.

– Һин, балаҡайым, аҡылдан яҙҙыңмы? Уның Хәҙисәһе тиле ҡыҙ бит. Белгәне – тик ятыу бит уның. Уны алып, ике имгәк аҫрар инекме? Уның кеүек диуананы ҡатынлыҡҡа алалармы ни? Балаҡайым, атаң кеүек һин дә аҡыллы бит. Һиңә теләгән кеше теләгән ҡыҙын бирәсәк, – тине, ти, әсәһе.

Ғабдулла:

– Юҡ инде, әсәй. Мин өйләнһәм, шуға ғына өйләнәм. Өйләнмәһәм, бөтөнләйгә өйләнмәйем, – ти.

Улай булғас, балам, үҙеңә тапшырам. Ләкин уны алһаң, үҙеңдән көлөрҙәр генә бит.

Ғабдулла әсәһенең янғыҙ йорт эше менән шөғөлләнерлек түгел икәнен уйланы, ти. Берҙән-бер көндө күрше ауыл Халиҡ ағайға үҙенә үҙе ҡоҙа булып барырға булды, ти.

Халиҡ ағай ишек алдында арбаһын төҙәткеләп йөрөгәндә, Ғабдулла килә.

– Әссәләмәғәләйкүм, Халиҡ ағай, иҫәнме?

– Вәғәләйкүмәссәләм. Ғабдулла икән, әйҙә, балам, өйгә рәхим ит. Атаң бик үҙ кеше ине, бик тә бик аҡыллы кеше ине. Әйҙә, өйгә инәйек әле.

Улар өйгә инәләр:

– Ни хәлдәр бар, Ғабдулла?

– Хәлдәр арыу әле ҡапылда. Мин һеҙгә бик ҙур йомош менән килгәйнем әле.

– Рәхим ит, һөйләп ебәр. Ниндәй йомоштарың бар? Мин уны үтәп ебәрергә әҙер.

Ғабдулла былай тип һүҙ башланы, ти:

– Әле бына атам да үлеп китте. Әсәм: «Әллә, Ғабдулла балам, өйләнеп ҡуяһыңмы?» – тине, шуға һиңә килгәйнем. Һин ғәйеп итмәҫһең инде, мин һеҙҙең Хәҙисә исемле ҡыҙығыҙҙы иптәшлеккә һорап килдем.

– Эй, Ғабдулла, һин бит аҡыллы кеше. Минең Хәҙисә исемле ҡыҙым диуана бит ул. Уны һин алып, бер ни ҙә эшләй алмаҫһың. Минең Хәҙисәнән ҙурыраҡ Сажидә, Мәрйәм исемле ҡыҙҙарым бар. Һинең кеүек тәүәккәл кешегә мин уларҙы бирергә һәр ваҡыт әҙермен.

– Халиҡ ағай, мин үҙем Хәҙисәне бик яратам. Беҙ уның менән бик һәйбәт көн итербеҙ. Миңә шул Хәҙисәне генә бир инде, – ти.

Халиҡ ағай ҙа:

– Былай булғас, мин һиңә өс ҡыҙымдың ҡайһыһын алһаң да бирәм, – ти. Ғабдулла:

– Бик риза булып ҡына миңә Хәҙисәне бирһәң ине, – ти.

Халиҡ ағай:

– Бирәм, бирәм. Ҡайһыһын ғына алһаң да, бирәм. Тик һуңынан үпкәләмә. Мин Хәҙисәне һиңә ҡулай булыр тип уйламайым.

– Улай булғас, мин уны оҙаҡламай өйөмә алып китермен, әсәмә булышсы кәрәк, – тип Ғабдулла һүҙҙе нығытып ҡайта.

Ике-өс көндән Хәҙисәне алырға килә. Хәҙисәгә хәлде аңлаталар, ләкин ул бер ҙә мейес башынан төшөргә теләмәй.

– Мин кейәүгә бармайым, – тип тик ултыра.

Уны нисек етте шулай Ғабдулла янына индереп ҡуялар. Ике көн булғас, ҡәйнә, ҡайныһына тейешле бүләктәрҙе тапшырып, Ғабдулла кәләшен алып ҡайтырға рөхсәт һораны ла ҡайтып китте, ти.

Бер аҙна үткәс, Ғабдулла үҙенең күк тимер алашаһын ҡыңғыраулы дуға, яҡшы ҡамыттар менән ҡырандас арбаға егеп, күршеһе Сөләймән ҡарттың ун алты йәшлек Сәлихен кейәү егете итеп ултыртып алып китте, ти. Халиҡ ағайҙар әҙерләнеп,

көтөп торған булғандар. Ике кис ҡунаҡ булғас, Ғабдулла ҡайтырға әҙерләнә. Өйҙәгеләр Хәҙисәгә биреп ебәрәһе әйберҙәрен әҙерләйҙәр. Уларҙы килтереү өсөн, Халиҡ ағай ҡыҙына кырандасҡа егелгән бер атын да бүләк итеп бирҙе, ти.

Шулай итеп, Хәҙисәне ике апаһы мыҫҡыллау менән, атаәсәһе борсолоу менән оҙатырға сыҡтылар, ти. Аттар ҡуҙғалып китте, ти, Халиҡ ағай ҡорҡкаһы Хәлимә менән ҡапҡанан сығып илап ҡарап тороп ҡалдылар, ти.

Ике ауыл араһы өс кенә саҡрым. Бик тиҙ ҡайтып еттеләр, ти. Былар ҡайтып етеүгә, ҡапҡа төбөнә бик күп халыҡ, йәшелкенсәк, бала-сағалар йыйылып торалар ине, ти. Шулар араһынан Ғабдулланың Алабай тигән эте килеп, аяҡ аҫтында уралана, ялағайланып, ҡойроҡтарын болғап, ике артҡы аяҡтарына баҫып, мороно менән уның битен төрткөләй башланы, ти. Ғабдулла уға:

– Кит бынан! – тине, ти. Эт китмәне, ти. Ғабдулла тағы:

– Кит бынан! – тип ҡысҡырҙы, ти. Эт һаман ялағайланыуында булды, ти. Ғабдулла ала килеп башына сүкеш менән берҙе һуҡты ла үлтерҙе, ти.

Ҡапҡанан кереү менән Ғабдулла:

– Тыр-р! – ти. Ат һаман туҡтаманы, ти. Икенсе мәртәбә:

– Тыр-р! – тине, ти, Ғабдулла. Ат һаман да туҡтаманы, ти. Ғабдулла тиҙ генә күтәрмә төбөндә ятҡан балтаны алды ла атының башына сапты, ти.

Кәләше һаман арбанан төшмәй ултыра, ти.

– Хәҙисә, төш, – тине, ти, Ғабдулла.

Хәҙисә эште аңлап алды, ти: «Ике мәртәбә әйткәнде тыңламаһаң, рәт юҡ икән», – тип уйланы ла арбанан һикереп төшә һалды, ти. Ғабдулла уға:

– Өйҙө йыйыштыр, аш бешер. Күршеләрҙе ҡунаҡҡа саҡырырбыҙ, – тип ҡала.

Хәҙисә йүгереп йөрөп өй йыйыштыра, аш бешерә. Ҡунаҡтар килеп, һыйланып, килендең уңғанлығына аптырап ҡайтып киттеләр, ти.

Биш-алты аҙна үтеү менән, Хәҙисәнең әсәһе:

– Баламдың хәлен белеп киләйем әле, – тип Ғабдуллаларға килде, ти, иҫәнлек-һаулыҡ һорашты, ти. Ғабдулла уны бик яҡшы ҡаршыланы ла:

– Һеҙ ултырып тороғоҙ. Хәҙисә, һин сәй ҡайнат, һыйҙарыңды әҙерлә, мин лавкаға бара һалып киләйем, – тип сығып китте, ти.

Ғабдулла сығып киткәс, ҡыҙ менән әсәһе һөйләшергә тотондолар, ти. Әсәһе:

– Нихәл, балам, тормош ауыр түгелме? Яҡшы тораһыңмы?

– Эй, әсәкәйем, әйтмә лә инде беҙҙең тормошто. Бик ҡыйын

хәлдә торам. Эш ҡушҡанда, ике генә әйтә. Тыңламаһаң, үлтерә лә ҡуя, – ти Хәҙисә. Әсәһе:

– Ҡара һин уны, ҡәһәр һуҡҡыр нәмә, минең ҡыҙымды шулай тота икән. Йәнемде көйҙөрһә, ҡыҙымды алып ҡайтып та китермен, – тип әйтеүе булды, ишек артында тыңлап торған Ғабдулла бик ҡыҙыу килеп инә лә:

– Хәҙисә, ҡайҙа әле, әҙерлән. Хәҙер иң элек картуф ултыртып алабыҙ, тиҙ бул. Ҡәйнәм, һин дә ярҙамға барырһың. Хәҙер мин атты ҡарайым да, – тип өтәләнеп сығып китте, ти.

Хәҙисә менән әсәһе бик тиҙ арала баҡсаға китергә йыйындылар, ти.

– Ҡәйнәм, һин теге билсәндәрҙе йолҡ. Хәҙисә, һин минең арттан картуф ултыртырһың, – тине, ти.

Шулай итеп, ҙур баҡса тиҙ арала ултыртылып та бөтә.

– Бына хәҙер ашарға ла була. Хәҙисә, сәй ҡайнат, һый әҙерлә, тиҙ бул, – тигәс, Хәҙисә йүгереп инеп китеп, самауырға тотона.

Хәлимә әбей алдын-артын ҡарамай:

– Ҡәһәр һуҡҡыр кейәү, ғүмеремдә бындай эш эшләгән юҡ ине. Ҡулҡайҙарым ҡалманы, ярғыланып бөттө, тип тиҙерәк ҡайтыу яғына һыпырта.

Хәлимә әбей аһылдап, хәлдән тайып, ҡайтып йығыла. Әбейен шул хәлдә күргән Халиҡ ағай аптырап ҡала.

– Нимә булды һиңә? Әллә бер-берәү ҡыйнап ҡайтарҙымы? тип һорай.

– Ҡуй инде, ҡыҙыбыҙҙы кешегә түгел, торғаны бер шайтанға биргәнбеҙ икән. Бына сәй ҙә эсермәне. Етмәһә, баҡсаһындағы билсәндәрҙе йолҡтороп, ҡулдарымды бөтөрҙө. Ғүмеремдә эшләмәгән эшемде эшләтте. Ас көйөнсә эшләтте! – ти.

Халиҡ ағай:

– Туҡта әле, мин дә уларҙың хәлен белеп киләйем, – тип юлға сыҡты, ти.

Ғабдулла уны ла асыҡ йөҙ менән ҡаршы алды ла, ти:

– Хәҙисә, һин хәҙер самауыр ҡуй. Һыйҙарыңды әҙерлә. Мин лавкаға барып киләйем, – тип йәнә сығып китте, ти.

Атаһы һораша башлай:

– Нисек тораһығыҙ?

– Эй, атаҡайым, әйтмә инде, бик ауыр торабыҙ. Ғабдулла эшкә бер мәртәбә генә әйтә. Ике мәртәбә әйткәнен көтөп торһаң, үлтерә.

– Шулай кәрәк, ҡыҙым, бик һәйбәт итә икән кейәү, бик дөрөҫ эшләй икән. Һеҙгә шул да аҙ, – тине, ти.

Ишек артында тыңлап торған Ғабдулла, был һүҙҙе ишетеү менән, лавкаға йүгерә. Күп итеп ашарға, эсергә алып ҡайта.

– Хәҙисә, әле ашарға өлгөрмәнеме ни? Хәҙер барыһын да әҙерлә, – тигәс, шунда уҡ барыһы ла әҙер булды, ти.

Шунан Ғабдулла ҡайныһын һыйларға тотондо, ти. Халиҡ ағай шул хәтлем һыйланды, ти, өс көн ҡунаҡ булғанын белмәй ҙә ҡалды, ти. Өсөнсө көн кейәү тағы ҡаты һыйлап, күстәнәстәр биреп, ҡайтарып ебәрҙе, ти.

Халиҡ ҡарт өйгә бик күп күстәнәстәр менән ҡайтып инде, ти. Ҡайтҡас, әбейен аҙыраҡ орошоп алды, ти, кейәүен маҡтап бөтә алманы, ти.

Шулай итеп, йыл артынан йыл үтте. Халиҡ ағай тағы ла ике ҡыҙын кейәүгә бирҙе, ти. Бер йыл торғас, бөтә кейәүҙәрен ҡунаҡҡа саҡырҙы, ти. Ҡарт уларҙы ныҡ һыйланы, ти. Ҡунаҡтар ҡыҙып китәләр ҙә үҙ-ара:

– Минең кәләшем яҡшы.

– Минең кәләшем аҡыллы, – тип маҡтанышa башланылар, ти. Халиҡ ҡарт:

– Ярай, бушҡа бәхәсләшмәгеҙ, беҙ уларҙы һынап ҡарарбыҙ. Кем уңған, кем яҡшы, ҡайһыһы тыңлай, белербеҙ. Бөтәгеҙ ҙә йөҙәр һум аҡса бирегеҙ. Кемдең ҡатыны тыңлай, аҡсаны шуға бирербеҙ, – тине, ти.

Бөтә бажалар ҙа был тәҡдимгә ҡушылалар, аҡсаны ҡарттың ҡулына бирәләр. Өс кейәү өс йөҙ һум һалды, ти. Аҡсаларҙы ҡарт өҫтәлгә теҙеп ҡуйҙы, ти.

Ҡатындарҙы һынау башлана. Иң элек өлкән бажанан башлайҙар. Һөйләшеү буйынса, ул ултырған ерҙән генә үҙенең ҡатынын саҡыра:

– Мәрйәм, Мәрйәм, – ти.

Мәрйәм икенсе бүлмәнән:

– Әү! – ти.

– Мәрйәм, кил әле бында, – ти кейәүе.

– Ярай ҙа! – тип яуаплай Мәрйәме, инмәй.

Нәүбәт уртансы кейәүгә етә.

– Сажидә, ин әле тиҙ генә! – тип саҡыра уртансы бажа.

– Ярар ҙа! – тип ҡысҡыра Сажидә, инмәй.

Яңынан:

– Сажидә, ин әле, – тигәс,

– Нимә, һин әллә урманда аҙаштыңмы? – тип ҡысҡыра, инмәй ҡала.

Хәҙер сират Ғабдуллаға килеп етә:

– Хәҙисә, ин әле, – тигәйне, ти, Хәҙисә ялт итеп килеп тә инде, ти.

– Нимә кәрәк? – тип һораны, ти.

Ғабдулла:

– Ал анауы аҡсаларҙы, ырғыт мейескә, – тине, ти.

Хәҙисә аҡсаларҙы итәгенә һыпырып алып, мейес ауыҙына килеп, ырғытым тигәндә генә, Халиҡ ҡарт тотоп алып ҡалды, ти.

Ғабдулла менән Хәҙисә, аҡсаларҙы кеҫәгә һалып, ҡайтып китәләр. Халиҡ ҡарт:

– Тырышһаң, ташҡа ҡаҙаҡ ҡағырһың, тигән бабайҙар. Дөрөҫ әйткәндәр. Тырышһаң, диуананы ла кеше итеп була икән, – тип ҡалды, ти.

Ғабдулла, шулай итеп, Хәҙисәһе менән әле булһа ла донъя көтөп, теттереп йәшәп ята, ти.

## 126. Иренсәклек бәләһе

Борон кешеләр, йәй айҙары еткәс, йәйләүгә күсенер булғандар. Улар унда кейеҙҙән ҡыуыш ҡорғандар. Йәйләүҙән көҙләүгә күскәндә, ҡыуышты тиреп алып, яңы ерҙә тағы ҡорор булғандар. Шуға уны «тирмә-ҡыуыш», «тирмә» тип йөрөткәндәр. Тирмә өсөн күмәкләшеп кейеҙ баҫҡандар, кейенер өсөн дә йөн иләп, тула һуҡҡандар. Киндерҙән дә кейем теккәндәр. Шул заманда бер бабай әбейенә:

– Әбей, һинең нисә йомғаҡ иләнгән киндереӊ бар? Йә, хәҙер йәйге кейемдәр тегә башла, – тине, ти.

Әбейе:

– Эй, бабай, минең киндер әҙер ул, – тигән. Шулай тиһә лә, әбейҙең иләнгән бер генә йомғағы булған. Ул ошо йомғаҡты бабайға ҡат-ҡат алып күрһәткән: һандыҡтан алып күрһәткән дә кире һалған, кире һалған да йәнә алып күрһәткән. Шунан бабай һөйөнөп:

- Ҡасан һуға башлайһың? – тип һораған.

Әбейе:

– Һуғыр инем дә, кәләпләргә кәләп юҡ бит әле, – тигән.

– Эй, эш уныһына ҡалһа, уны ни хәҙер урмандан барып килтерәм мин, – тип, биленә балтаһын ҡыҫтырып, бабай сығып киткән, ти. Урманға барып етеп, кәләпкә ярарлыҡ саталы ағас эҙләгәнсе, байтаҡ ваҡыт үтеп тә киткән. Ул кәләпкә барырҙай ағас күреп, сабайым тип балтаһын күтәрһә, ағас башынан:

– Кәләп киҫмә, үлтерәм! – тигән тауыш килә, ти.

Бабай ҡурҡып киткән. Был ағас ярамай торғандыр, тип икенсеһен эҙләп табып, сабайым тиһә, тағы ла ағас башынан:

– Кәләп киҫмә, үлтерәм, – тигән тауыш ишетелгән.

Бабай тамам аптыраған да, урманға килеп буш ҡайтмайым, утын булһа ла алып ҡайтайым, тип, утын тейәп ҡайтырға сыҡҡан. Ҡайтһа, әбейе ашарға әҙерләп йөрөй, ти.

– Бабай, әллә кәләп алып ҡайтмағанһың инде?

– Уф, – тигән бабай, – ярай, аҙаҡ һөйләрмен.

Аҙыраҡ тын алғас:

– Әллә һаҡсым, әллә ағас эйәһе миңә кәләп ҡырҡмаҫҡа ҡушты, – тип урмандағы хәлде һөйләп биргән, ти.

Әбейе эстән генә көлөп ултырған. Баҡтиһәң, ағас башында бабайҙы ҡурҡытып йөрөүсе шул үҙе булған.

Йәмле май айҙары ла килеп еткән. Кешеләр дәррәү йәйләүгә күсә башлаған. Уларҙың өҫтәре бөтөн, күңелдәре көр, ти. Был бабай менән әбейҙең кейенгәне генә иҫке-моҫҡо, ти. Шуға оялыштан әбей:

Кешеләрҙән аҙаҡ күсенербеҙ, – тип бабайын туҡтатып ҡуя.

Башҡалар күсеп китеп бөткәс, әбей, илай-илай, бабайына шулай тип таҡмаҡланы, ти:

*Кесаҙна торҙом,*
*Йома ултырҙым,*
*Кеше йәйләү күскәндә,*
*Афәт эсенә ултырҙым.*

Афәт булмай, афәт инде, үҙе эшкә иренгәс.

## 127. Сертотмаҫ

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер әбей менән бабай. Бер заман бабай, урмандан ҡайтып килгәндә, юлдан бер тоҡсай аҡса табып алған. Аҡсаны алып ҡайтҡан да һарайға йәшереп ҡуйған. Йәшермәҫ ине, әбейенең ауыҙында һис тә һүҙ тормай икән. Кешегә һөйләп бөтөрөр, тип ҡурҡҡан ҡарт.

Бер көн үтә, ике көн үтә, бабай әбейгә бер нәмә лә өндәшмәй. Өсөнсө көндө бабай теге тоҡсайҙы алып керә. Әбей шатлығынан ни эшләргә белмәй, бабайын маҡтап бөтөрә алмай. Тик ҡарты алдан әйтеп ҡуя:

– Һин кешегә һөйләнеп йөрөй күрмә тағы. Ишетһәләр, харап булырбыҙ, – тигән, ти.

– Ярар, ярар, ҡарт, – тигән әбейе.

Шулай тиһә лә, әбейе оҙаҡ түҙеп йөрөй алмаған. Шул уҡ көндө һыуға барғанда, шишмә янында йыйылып торған бисәсәсәгә:

– Бабайым аҡса тапҡан. Иҫәбенә сыға алмаҫлыҡ күп, – тип әйтеп һалған.

Был һүҙ халыҡ араһында тиҙ үк таралып китә, бабайға ла килеп ишетелә. Иртәгеһенә бабай иртүк тора ла сәй эсеп, һыу буйына китә. Унан күп итеп тал киҫеп алып ҡайта. Ҡайтҡас мурҙа үреп ташлай. Был эшен бөтөргәс, баҙарҙа нәҙек тимер сыбыҡ һатып ала ла унан күп итеп тоҙаҡ яһай. Шунан әбейен эйәртеп, мурҙа менән тоҙаҡтарҙы алып сығып китә. Әбейе ҡарап йөрөй, бабайы ҡуянға тоҙаҡ ҡора, балыҡҡа мурҙа һала ла былар ҡайтып китәләр.

Иртәгеһенә бабай, әбейе һиҙмәгәндә генә, тоҙаҡ менән мурҙаһын ҡарарға китә. Барһа, тоҙаҡҡа ҡуян эләккән, мурҙаға бай-

таҡ ҡына балыҡ төшкән. Бабай тоҙаҡтағы ҡуянды мурҙаға һала, мурҙалағы балыҡтарҙы тоҙаҡҡа эләктереп сыға ла, әбейе һиҙмәгәндә генә ҡайтып төшә. Ҡайтып төшкәс, әбейен эйәртә лә мурҙа менән тоҙаҡты ҡарарға китә. Барһалар, әбейе ни күрә: мурҙаға ҡуян төшөп ятҡан, тоҙаҡҡа балыҡтар эләккән. Бабай был эшкә хайран ҡалған булды, ти. Әбейенең иҫе китте, ти.

Бер заман теге аҡсаларҙың хужаһы табыла бит. Әбейҙең һөйләгән хәбәре буйынса, ул дәғүәләшеп бабайға килә. Бер килә, ике килә – бабай бирмәй.

– Минең аҡса тапҡаным юҡ, – тип ҡаты тора.

– Һуң, әбейеңә күрһәткәнһең бит! Бөтөн халыҡ һөйләй, – ти теге дәғүәсе.

– Һи, минең әбейҙең һүҙенә ҡараһаң, – тип бабай бирмәй ҙә бирмәй.

Шунан теге әҙәм быны судҡа бирә. Судҡа геүаһ итеп әбейҙе лә саҡыралар. Әбей, булғанынса, барыһын да һөйләп бирә, бабайҙың аҡса табыуын дөрөҫләй. Әбейҙе сығаралар ҙа бабайҙы индерәләр. Бабай бер нәмә лә белмәмешкә һалыша.

– Ул аҡсаларҙы белгәнем дә юҡ, ишеткәнем, күргәнем дә юҡ, тип яуап ҡайтара.

– Әбейең: «Бабай аҡса тапты, иҫәбенә лә сығырлыҡ түгел», – тип әйтте бит, – тигәс, бабай:

– Әй, шул әбейгә кеше ышанырмы? Аҡылға бер төрлөрәк бит ул! Аҡса тапҡан, тип әйтә икән, ундай аҡса тапһам, мин әллә ниҙәр эшләп бөтөр инем. Һеҙ унан: «Аҡса тапҡас, бабайың нимә эшләне?» тип һорағыҙ, – ти.

Әбейҙе тағы саҡырып кертәләр ҙә һорайҙар тегенән:

– Бабайың аҡса тапҡас, иртәгеһенә ҡайҙа барҙы?

– Тал киҫеп алып ҡайтты ла мурҙа үрҙе. Шунан баҙарҙан тимерсыбыҡ алып ҡайтып, тоҙаҡтар яһаныҡ. Иртәгеһенә тоҙаҡ ҡороп, мурҙа һалып ҡайттыҡ. Икенсе көндө барып ҡараһаҡ, мурҙаға ҡуян төшөп ятҡан, тоҙаҡтарға балыҡ эләккән, – тип һөйләп бирә әбей.

Судтағы кешеләр әбейгә аптырайҙар:

– Аҡылдан шашҡандыр был. Туҙға яҙмағанды һөйләй бит, – тип, тегене иҫәрҙәр йортона ябып ҡуйғандар.

Ә бабай теге аҡсаларға рәхәтләнеп, бер үҙе генә ошо көндә лә йәшәп ята, ти.

## 128. Яман ҡатындан Аллам һаҡлаһын!

Элгәре бер ир кеше булған. Ҡатыны әйтә икән быға:

– «Яман ҡатындан Аллам һаҡлаһын», тип әйтерһеңме? – ти икән.

Теге ир кеше әйтә инде быға:

– Һәй, бынауы торған ҡамсым барҙа: «Яман ҡатындан Аллам һаҡлаһын», – тип әйтмәй үк ҡалайым, – ти. Бик ҡамсылы булған ире. Шул ерҙә ҡатын: «Ә-ә-ә, улай тип әйтә икәнһең әле», – тип, күңелгә һалып ҡуя.

Ир бер ваҡыт утынға китә. Ҡатын һыуға бара. Һыуға барғанда, нисектер бер өлкән балыҡ тотоп ала был. Тегене алып килә лә тере көйөнсә ире килә торған юлдың буйына алып барып һала. Бер ваҡытты был ҡайтып китһә, теге ир кеше утын менән килә ята, ти. Килә торғас ҡараһа, алдында бер нәмә ҡыбырлай инде. Ҡараһа – тере балыҡ.

– Эй, был анауы балыҡсының балығы төшөп ҡалған икән, моғайын. Яҡшы булды ла баһа әле ул миңә, – тип, төшә һалып алып, утынының араһына ҡыҫтырып, ҡайтып китә.

Алып ҡайтып етә лә бер ваҡыт, утынын ҡутара башлай. Балыҡты ҡатынына индереп бирә.

– Мин күршеләргә барып киләйем. Һин ошоно бешерә тор. Мин урап килеүгә бешереп ҡуй, – ти.

– Ярар һуң, – тип, ҡатын балыҡты алып ҡала.

Бер ваҡытты күршелә алай-былай һөйләшеп, ул-был итә торғас, иҫенә төшөп ҡала ирҙең: «Туҡта, балыҡ бешкәндер инде, ҡайтайым әле», – тип ҡайтып китә. Ҡайтып килә лә һорай:

– Балыҡ бештеме?

– Ҡайҙан балыҡ бешһен? Балыҡ бирҙеңме һин миңә?

– Бирҙем дә баһа.

– Ҡайҙан тоттоң?

– Тауҙан.

– Балыҡ тауҙа булалыр шул.

– Утындан килгәндә тоттом.

– Юҡты һөйләмә, тауҙа балыҡ булмай, – тип, ҡатын иренә ҡаршылаша инде.

– Һи, һин улай эшләйһең икән әле, – тип әлеге ҡамсыһын ала ла бер ваҡыт ҡатынды яра башлай ир. Эй яра, эй яра. Ҡатын ҡалай етте шулай ҡотолоп сығып ҡаса. Сығып ҡаса ла тегенең туғандарына бара.

– Ағайығыҙ утынға барғайны. Әллә енләнеп килгән, әллә ни. Юҡ балыҡты даулай. «Давай, йәһәт тә йәһәт» тип, мине ҡыйнай, – ти.

Бер ваҡыт ағай-энеләре йүгерешеп килә тегенең. Килһәләр, тегенең ҡаны ҡыҙып киткән, ти. Ҡатынды күргәс, балыҡ дәғүә итеп, тағы ынтыла, ти. Бер ваҡытты ағай-энеһе, еңгәләрен яҡлап, тегене бәйләп ултыртып ҡуялар. Теге һаман ҡуймай, бисәһен туҡмарға ҡызырта инде.

– Был ни, ысынлап енләнгәндер ул. Мулланы алып киләйек, – тип, нығытып мөйөшкә бәйләйҙәр ҙә муллаға китәләр. Мулланы барып саҡыралар.

– Шулай, шулай, ағай ауырып китте, йәһәтерәк бар инде, – тиҙәр.

Ҡоролған шаршау. Шаршауҙың эсендә теге ҡатын. Ҡаршы мөйөштә бәйле ир. Енләнеп ҡарап ултыра. Ҡатынды күрҙеме енен сәсә, ти. Йәненең көйөүе шул хәтле булған инде. Бер ваҡытты мулла килә. Килә лә шаршауға арты менән ултырып тороп, китаптары менән туҡмай-туҡмай теге ирҙе өшкөрә башлай. Мулла – тегеләй, ире шаршау яғына ҡарап ултыра бит инде. Теге ҡатын шаршауҙың юғарығы яғынан балыҡты күрһәтә, ти. Балыҡты күрҙеме, ир:

– Ана бит минең балығым! Ана бит минең балығым! – ти ҙә ынтыла, ти. Яҡшы тынысландырғандай булдымы, ҡатын тағы балыҡты күрһәтә, ти. Ир йәнә:

– Ана бит минең балығым! – ти ҙә ынтыла, ти.

– Бының ене яман ҡуҙа икән, бер ҡуҙһа, – тип, мулла әйҙә туҡмай тегене, әйҙә туҡмай, өшкөрә лә туҡмай, өшкөрә лә туҡмай. Шулай итеп хәлен алып, теге ир йоҡлап китә. Шул ваҡыт мулла, был ысын енләнгән, йоҡлаған сағында ҡайтып ҡалайым тип, ҡасыу яғын ҡарай.

Ир йоҡонан уянғас:

– Сисеп ал инде, ҡатын, – ти икән.

– «Яман ҡатындан Алла һаҡлаһын» тип әйтерһеңме һуң?

– А-ай, яман ҡатындан Аллам һаҡлаһын, – тип әйтеп ята, ти, шул ире.

Шулай иттереп, ҡатын яман ҡатындарҙың ниндәй ҡылыҡлы булғанын таныҡтан, ти, иренә.

## 129. Яуыз ҡатын менән дейеү бәрейе

Борондормо, яңыраҡтырмы инде, ул тиклемен кем белһен, бер заманда бик аҡыллы, бик итәғәтле бер кешенең биктән-бик яуыз ҡатыны бар ине, ти. Ул ирен гел генә тызыҡлап, мыжып әрләп кенә торған, ти. Ни генә эшләмәһен, бөтәһен дә ире теләгәндең киреһенә эшләр булған. Ир бөтә көсөн һалып, татыу йәшәргә тырышһа ла, һис кенә лә барып сыҡмаған, ти. Бисәһен юлға һалыр өсөн, бар саралар҇ы ла ҡулланып ҡараған – файҙаһы теймәгән, ти. Файҙаһы тейеү түгел, бисәнең яуызлығы артҡандан-арта ғына барған, ти. Ахырҙа килеп һуңғы сараны самалап ҡарарға булды, ти, ир кеше. Илдән сығып ҡасһам да, барыбер ҡотолоп булмаҫ, ҡуймаҫ, кеше белмәҫ бер урын табырға кәрәк, тип уйланы, ти.

Был ҡатын менән ир йәшәгән ергә яҡын ғына ҡаялыҡта упҡын бар ине, ти. Ир кеше шунда төшөп йәшеренмәк булды, ти. Был эшен ни хәтлем генә йәшереп эшләргә тырышмаһын, бисәһе һиҙеп алды, ти.

– Ҡайҙа бармаҡсы булаһың былайтып? – тип төпсөнә башланы, ти.

– Эш бар ине.

– Эш? Бирермен әле мин һиңә эште. Һин арҡан һатып, минән башҡа кәсеп итмәксе булаһың инде, моғайын. Һаттырырмын мин, һаттырмай ҙа. Киттек бергә, – тип тауыш күтәрергә тотондо, ти.

Хәл юҡ, упҡынға икәүләп киттеләр, ти. Упҡын янына килгәс, ир арҡанының осон аҫҡа төшөрә башланы, ти.

– Был ни эшең, ҡәбәхәт?

– Хазина ята бит унда. Шуны алмаҡсымын.

– Ҡана әле, үҙем төшөп алайым, һин өҫтә генә тороп тор.

– Юҡ, һин бында тороп тор, үҙем алып менәйем, – тине, ти, ире.

Ир менән ҡатын эй бәхәсләштеләр, эй бәхәсләштеләр, ти.

Ахырҙа ире сигенмәк булды, ти. Бисә упҡынға төшә башланы, ти. Бисә төшөп киткәйне, ирҙең башына бер уй килде, ти: бисәнең үҙен шунда ҡалдырып була ла баһа. Ир кеше тиҙ генә арҡанды киҫте лә, ҡыуанысы эсенә һыймай, оса төшә өйөнә ҡайтып китте, ти.

Талай ваҡыт үткәс, тыныс тормошта ирәүәнләп йәшәгән ир, нисектер, әлеге упҡын янынан үтешләй, бисәһенең хәлен белмәксе булды, ти. Соҡорға яҡын килһә, аҫтан йән өҙгөс тауыштар ишетелә, ти. Ни тиһәң дә, әҙәм балаһы бит инде, ир, йәлләп, меҫкен бисәһен сығармаҡсы булды, ти. Моғайын, рәткә инерҙәй булғандыр, тип уйлаған булды, ти. Шулай тип, упҡынға арҡан төшөрҙө, ти. Арҡандың осо төшөп тартылғандай булғас, бисәһе тотонған икән, тип өҫкә һөйрәй башланы, ти. Тартып тора, тартып тора арҡанды. Ана сыға, бына сыға, тип бисәһен көтөп торһа – бауға йәбешеп, һыңар күҙ бәрей сығып килә, ти. Күҙе маңлайының ҡап уртаһында быҙлап тора, ти. Ир, бауҙы ҡырҡып, кире төшөрөп ебәрмәк булғайны, ти, теге телгә килде, ти.

– Эй, мәрхәмәтле бәндәгенәм, мин ғүмер баҡый ошо өңөмдә тыныс ҡына йәшәгәйнем. Хәҙер булмай, яңыраҡ бер әҙәми бисә килеп төштө лә, көн бөттө миңә. Яфа сигеүҙәремдең сиге юҡ. Эй, мәрхәмәтле бәндәм, ҡотҡарһаңсы мине шул бисәнән. Һинең тоғро таянысың булырмын, сикһеҙ байлыҡ алып бирермен, – тип ялбарҙы, ти.

Теге кеше сығара был мәхлүкте. Был инде ҡыуанысынан ни алып, ни бирергә белмәй, ти.

– Һиңә өс тапҡыр иҫәпһеҙ күп аҡса алырға юл асылыр. Һин сикһеҙ байығырһың. Дүртенсе тапҡыр һорай күрмә, өмөт тә итмә, көтмә лә, һинән ҡотолған булырмын, юҡһа башыңа бәлә төшөр.

Бәрей ҡотҡарыусыһы янында йәшәй башлай, оҙаҡламай үҙенең вәғәҙәһен тормошҡа ашырырға тотона.

Был кешенән алыҫ түгел бер бай йәшәгән икән.

– Шул байҙың берҙән-бер ҡыҙы ауырыр. Атаһы һаранланмаһа, ҡотҡарып булыр. Ҡыҙ торған һайын яфаланасаҡ, енләнәсәк. Атаһы тирә-йүндән данлыҡлы бағыусыларҙы, муллаларҙы саҡырыр – файҙаһы теймәҫ. Һин барырһың да ҡыҙҙы һауыҡтырасағыңды әйтерһең. Уның өсөн, күпме теләйһең, шул тиклем хаҡ һорарһың. Мин ҡыҙҙы ысҡындырырмын. Ул әүәлгесә һап-һау булып китер. Шунан байҙан бүләк алырһың, – тине, ти, бәрей теге иргә.

Бөтәһе лә теге нәмә әйткәнсә булды, ти. Байҙың ҡыҙы сәсрәп ауырып китте. Һынсы тип һынсы, бағыусы тип бағыусы, мулла тип мулла ҡалманы, ти. Береһенән дә дауа-дарман тапманы, ти, ҡыҙ. Шунан был әҙәм китте, ти. Дейеү бәрейе өйрәткәнсә, тәүҙә бай менән хаҡ бесгеләр, ти. Килешеп бөтөп, ҡыҙҙы ҡарағайны, теге бәрей ҡыҙҙы ысҡындырҙы, ти. Ҡыҙ һин дә мин әүәлге сифатына ҡайтты, ти.

Ҡыҙ һауыҡҡас, теге бәрей:

– Онотма, бер шарт үтәлде, тағы ике генә шарт ҡалды, – тип иҫкәртеп китте, ти.

Оҙаҡ та үтмәй, бәрей тағы бер байҙың яңғыҙ ғына улының ауырып китеүен әйтә. Күп аҡсаға һөйләшеп, уны ла һауыҡтыралар.

– Инде бер генә шарт ҡалыуын онотма. Тағы һораһаң, үҙ башыңа булыр, – ти теге нәмә.

Тиҙҙән шул уҡ сир менән өсөнсө бер байҙың бисәһе ауырып китте, ти. Уны ла әлеге әҙәм бәрей ярҙамында күп аҡсаға һауыҡтырҙы, ти. Шунан теге бәрей ҡотҡарыусыһына:

– Мин өс шартты ла үтәнем. Бүтәнсә мине саҡырма. Саҡырһаң, башыңа булыр, – тине, ти.

Аңарсы булманы, ти, шул уҡ сир менән хан улы ауырып китте тигән хәбәр таралды, ти. Әлеге әҙәмдең быңдай сирҙе бик оҫта дауалауы тураһында ханға еткерҙеләр, ти. Хан уның артынан сапҡынсылар саптырҙы, ти. Хандың әмерен ишеткәс, бик ҙур уйға ҡалды, ти, теге әҙәм. Ҡайғыға ҡалмай ҡалай итһен, бармаһаң – яза, барһаң – үлем. Хәл юҡ, барырға була. Хан һарайына инер саҡта теге ҡотһоҙ бәрейенең тауышын ишетеп ҡала был.

– Нисек килдең һин бында, минең әйткәнде тотмайынса? Хәҙер үҙеңә үпкәлә инде.

– Мин бында һине ауырыу егеттең эсенән ҡыуып сығарыр өсөн килмәнем. Мин теге бисәнең, упҡындан сығып, һине эҙләп йөрөүен аңғартайым тип кенә килгәйнем, – тине, ти, был әҙәм.

Шулай тип әйтеүе була – теге нәмә, алдын-артын ҡарау юҡ, ҡалай етте шулай, тайыу яғын ҡараны, ти. Хан малайы сә-

ләмәтләнеп, әүәлге хәленә ҡайтып, ырғып килеп торҙо, ти. Хан «имсе»гә ҙур бүләктәр биреп, рәхмәттәр уҡып, ҡайтарып ебәрҙе, ти.

Шунан алып яман ҡатыны булған кешеләрҙән ен-бәрейҙәр ҡурҡыр булды, ти. «Боҙоҡ ҡатын ен-бәрейҙән яман» тигән һүҙ шунан ҡалған, ти, бит ул.

## 130. Яман ҡатындан дейеү бәрейе ҡасҡан

Элек: «Яман ҡатындан дейеү бәрейе ҡасҡан», – тип әйткәндәр бит. Ана шуның мәғәнәһен һөйләмәксемен. Ни сәбәптән ҡасҡан?

Бер кешенең ҡатыны булған. Ул бисә иренә һис бер баш бирмәгән. Бер ваҡыт бесән мәлендә китәләр былар ҡунаҡҡа. Китеп бара торғас, күрәләр: юл буйында күмәк халыҡ бесән сабып йөрөй, ти. Шулар араһындағы берәү бик матур итеп сабып киткән. Шуның бакуйын күргәс, ире әйтә:

– Һай, һай, бынау ирҙең сабыуы. Ҡалай ҡыра һелтәп киткән, – ти. – Ҡалай үткер булған салғыһы, – ти.

Ҡатыны әйтә:

– Беләһең. Салғы ҡырҡҡанмы ни уны? Ҡайсы ҡырҡҡан бит.

– Ни эшләп ҡайсы ҡырҡһын? Салғы ҡырҡҡан, – ти ире.

Икәүһе тырышынып, бер ваҡыт бәхәсләшеп, һуғышып китәләр.

Үҙ һүҙен бирмәй, йәнен көйҙөргәс, ире ҡатынды туҡмай ҙа ташлай.

– Салғы менән ҡырҡҡан, тип әйт! – ти ҙә һыҙыра, ти.

– Юҡ, ҡайсы менән ҡырҡҡан!

Туҡмалған һайын теге ҡатын үҙ һүҙен бирмәй, ти. Шулай итеп, туҡмап-туҡмап та, үҙ һүҙенән ҡайтмаған.

Былар бер ҡоҙоҡ янына килеп еткәндәр. Ир ҡоҙоҡ янына бара ла:

«Туҡта, быны әйттергәс, әйттертәйем», – ти ҙә теге ҡатынды ҡоҙоҡҡа төшөрөргә була. Дилбегәһен сисеп алып, ҡатынын биленән бәйләй ҙә:

– Салғы менән ҡырҡҡан, тип әйт! – ти, тегене ҡоҙоҡҡа төшөрә биреп. Юҡ, теге ҡатын һүҙен бирмәй:

– Юҡ, ҡайсы менән ҡырҡҡан! – ти. Шунан ир дилбегәһен ебәрә биреп, тегене һыуҙың төбөнә сумырып-сумырып ала ла йәнә һорай:

– Салғы менән ҡырҡҡан, тиһәң, тартып алам, әйтмәһәң – юҡ, – ти.

– Юҡ, юҡ, һөйләмә бушты, ҡайсы менән, – тип ҡатыны үҙ һүҙен бирмәй, ти.

Шунан ире дилбегәне ҡалдырып үҙ юлы менән китте лә барҙы, ти.

Бер-ике көн үткәс, был аҡылға килгәндер инде, тип, дилбегәһен тарта башлаһа, шарт-шорт бер дейеү бәрейе килеп сыға.

– Эй, ҡайҙа сабаһың шул тиклем? – ти икән ир.

– Әйтмә лә инде, мәҡаныма яман ҡатын килде, шунан ҡасып барам, – тигән дә, дейеү бәрейе куҙҙән юғалған.

«Яман ҡатындан дейеү бәрейе ҡасҡан» тигән һүҙ шунан ҡалған, ти.

Ярар. Бер ваҡытты ир ҡоҙоҡ ауыҙына ятып ҡысҡыра:

– Эй, йәнең бармы әле? Йәбеш, сығарам, – ти.

Ҡатыны дилбегәгә йәбешеп килеп сыға.

– Йә, шунан: «Салғы менән сапҡан!» тип әйтерһеңме инде? – ти ире.

– Юҡ. Ни эшләп салғы менән сапһын, ҡайсы менән ҡырҡҡан!

– Һаман аҡылға ултырмағанһың икән әле! – ти ҙә ир, тегене алып барып йылғаға һелтәй.

Ҡатын сәбәләнә-сәбәләнә лә һыу төбөнә китә. Үҙе һыу төбөнә батып бара, үҙе ҡулын күтәреп, бармағын ҡайсылата, ти, йәнәһе, «салғы менән сапмаған, ҡайсылаған!» тип әйтә була инде.

Бер-ике көндән ир шул урынға килә лә үр яҡты ҡарай башлай.

Бер кеше килеп сыға.

– Нимә эшләйһең унда?

– Эй, бисә батҡайны ла анауында, – тип түбән яҡты күрһәтә ир.

– Кеше һыуға батҡан кешене урҙән эҙләйҙер шул, ахмаҡ. Түбән яҡты ҡара, – ти теге әҙәм.

– Юҡ. Ул бик кире ҡатын ине. Түбәнгә аҡмаҫ. Аҡһа, үргә ағыр, – тине, ти, теге ир.

## 131. Ғәжәп исемдәр

Борон заманда ике бер туған батша булған. Бер үк йылды береһенең ҡатыны, икенсеһе үҙе үлеп киткән, ти. Бисәһе үлгән батшаның бер ҡыҙы булған. Шул батша үлгән энеһенең бисәһен алған. Әүәлге еңгә шулай итеп үгәй әсәй булып киткән. Еңгәле-ҡайынһеңлеле саҡта татыу ғына йәшәгән булһалар, хәҙер үгәйгә әүерелгәс, эштәр киткән, ти, кирегә. Үгәй әсә етем ҡыҙҙы һис кенә лә яратмаған. Һәр ваҡыт уны кәмһетеп кенә торған. Атаһына:

– Ҡыҙың ялҡау, үҙе гәрсел, – тип ошаҡлар булған.

Бер көндө килеп:

– Илтеп ташла, юғалт ҡыҙыңды күҙемдән! Ҡайҙа ҡуйһаң да ҡуй! – тип екергән.

Ҡыҙын бик йәлләһә лә, батша ҡатынының һүҙен йыға алмаған, ҡыҙын ҡара урманға алып барып аҙаштырған. Ҡыҙ был урманда байтаҡ ваҡыттар аҙашып йөрөгән. Йөрөй торғас, бер йылға буйына килеп сыҡҡан. Шунда ул һыуһынын ҡандырғансы һыу эсеп, йыуынып хәл алған да ағас башына менеп ултырған. Төндө ул шулай үткәреп, иртәгеһенә инде ни эшләргә, тип ултырһа, бер көтөүсе һыу алырға килеп төшкән. Һирпеп һыу алайым тиһә, һыуҙа бик матур ҡыҙ һынын күреп ҡала. Көтөүсе уны һыу ҡыҙы икән тип уйлай ҙа:

– Сыҡ, һылыу ҡыҙ. Сыҡмаһаң, сисенеп төшәм дә үҙем алып сығам, – ти.

Ҡыҙ өндәшмәгәс, был егет сисенә башлай. Шул саҡ ағас башындағы ҡыҙ:

– Ҡуй, төшмә, егет, һыуға. Минең өсөн әрәм булырһың, – тигән.

Егет тауыш килгән яҡҡа ҡараһа, ағас башында бер матур ҡыҙ ултыра, ти.

Ҡыҙ ағас башынан төшкән. Егеткә үҙенең бында нисек килеп сығыуын һөйләп биргән.

Егет ҡыҙҙы өйөнә алып ҡайтҡан. Улар ирле-ҡатынлы булып, бик матур итеп йәшәй башлағандар. Өс улдары тыуған. Беренсе улдары Нәиҙем, икенсеһе Нәулды, өсөнсөһө Нәулсаҡ исемле булған.

Бер саҡ ағалары бәләкәй Нәулсаҡты санаға ултыртып, береһе алдан һөйрәп, береһе арттан этеп, тауға киткәндәр. Тауҙан шыуғанда, сәфәрҙән ҡайтып килгән батшаға осрағандар. Һөйкөмлө йөҙҙәрен күреп, малайҙарға һоҡланып ҡарап торған да батша уларҙың исемдәрен һораған. Балалар әйтеп биргәндәр. Ят исемдәрҙе ишетеп, батша бик ғәжәпһенгән. Шунан ул малайҙарҙың атаһын саҡыртып алған.

– Шундай исемдәрҙе ҡайһығыҙ уйлап тапты? – тигән.

– Улдарымдың исемдәрен ҡатыным уйлап тапты, – тигән ир.

Батша ярлының ҡатынын да саҡыртҡан. Тик ҡатын:

– Өҫтөмә кейергә килдәгем юҡ, – тип саҡырған ергә бармаған.

Шунан батша уның янына үҙе барған. Барһа, ни күҙе менән күрһен – алдында үҙе урманға аҙаштырып киткән ҡыҙы тора, ти. Ҡыҙын бер күреүҙә үк таныһа ла, сер бирмәйенсә, теге балаларҙың исемдәре тураһында һорашҡан. Ҡатын әйткән:

– Элек мин бер батшаның берҙән-бер генә ҡыҙы инем. Унан көтөүсе ҡатыны булдым. Алда ниҙәр буласаҡ, уныһы билдәһеҙ. Шуға минең балаларым Нәиҙем – ни инем, Нәулды – ни булды, Нәулсаҡ – ни буласаҡ, – тигән.

Батша ҡыҙының ҡыйыулығына, зирәклегенә һоҡланып, шул урында үҙен танытҡан. Көтөүсе кейәүе менән ҡыҙын алып ҡайтып китеп, кейәүенә ярты батшалығын биргән, ти.

## 132. Батша малайының яуыз батша башына еткәне

Борон заманда бер батша үлеп китә. Ҡатыны һигеҙ йәштәге бер ир бала менән тороп ҡала. Берҙән-бер ваҡыт икенсе бер ҡаланан яңы батша һайлап ҡуялар. Ул батша тора торған урынына килеп, үлгән батшаның ҡатынын алып, үҙенең хөкөмөн йөрөтә башлай.

Бер ваҡыт был яңы батша төш күрә лә:

– Беҙҙең малай, бер аҡ-күк ат менеп килеп, мине һыуға һалған, башымды киҫкән икән тип күрҙем, – тип һөйләй.

Төш юраусылар саҡырып, батшаның төшөн тикшереп ҡарайҙар.

Улар батшаның үлеме малайҙан булырын дөрөҫләйҙәр. Батша малайҙан хәүеф тота башлай. Быны нисек үлтерергә, тип уйлай. Ҡатынына әйтә, ҡатыны риза булмай. Ире бик нығ ныҡышҡас, ҡайҙа барһын инде, бахыр, тора-бара ризалаша.

Малайҙы асыҡтырып үлтерергә мәслихәт итәләр. Төрмәгә ябып ҡуялар. Ҡарауылсылар уға ризыҡты бер тишектән генә бирәләр. Ике көн үткәс, батша бер ҡатын кешене малайҙың хәлен белергә ебәрә. Ҡатын барһа, теге бәләкәй туп уйнап ултыра.

– Эй, балам, хәлең нисек? Асығаһыңмы?

– Юҡ, мине бында асыҡтырмайҙар. Тәҙрә тишегенән һөт тә, икмәк тә бирәләр, – ти малай. Ҡатын батша янына китә.

– Нисек? Насарланғанмы?

– Юҡ, насарланмаған.

– Юҡ, ул былай үлмәҫ, әйҙә ағыулайыҡ, – ти батша.

Ағыулап, күмәс бешерәләр, бер шешә һөткә ағыу һалалар. Теге ҡатынды тағы ебәрәләр. Был ҡатын юл ыңғайында өйөнә инә һалып, бер телем икмәк, бер һауыт һөт алып сыға ла ағыулы икмәк менән ағыулы һөттө, һыу сыҡҡас та, быраҡтырып китә. Егеткә үҙенең ризыҡтарын ашата. Ашатҡас, тағы батша янына килә:

– Ашаттыңмы?

– Ашаттым.

Иртәгеһенә тегенең хәлен белергә батша йәнә был ҡатынды ебәрә. Ҡатын бара. Егет шәп бит инде. Кире ҡайтып, батшаға бара ҡатын.

– Һөйләшәме?

– Һөйләшә.

– Булманы былай булғас, әйҙә, аттырабыҙ!

Батша ике һалдат ебәрә. Һалдаттар малайҙы зиндандан сығарып алып китәләр ҙә:

– Һин, егет, ҡас, – тип малайҙы икенсе илгә ҡасырып, үҙҙәре мылтыҡтарын һауаға атып, батшаға ишеттерәләр ҙә ҡайтып китәләр.

– Булды былай булғас, – тип батша тынысланып инеп ятты, ти.

Малай китә. Күп ерҙәр киткәс, бер һыу буйына бара. Һыу буйлап китә. Арый. Арығас, йоҡларға була. Уянып китһә, һыу эргәһендә ята. Малай һыу эсте лә, ти, әҙерәк ризыҡ ҡабып, һалҡынға барып тағы ятты, ти. Ятҡас, йоҡлап китте, ти. Төндә өшөп китеп, уянып, ҡараһа – бер ут күренә, ти. Малай тороп, шунда ҡарай китте, ти. Барып етте, ти. Ҡараһа, икенсе бер мәмләкәттән бер пароход килеп туҡтаны, ти. Малай шул тирәлә бәләкәй тубын алып уйнап йөрөй башланы, ти. Шунда уны бер түрә күреп ҡалды ла:

– Һин ниндәй малай? – тине, ти.

– Мин шулай, шулай йөрөйөм.

– Атаң бармы?

– Юҡ, мин шулай йөрөп тамаҡ туйҙырам. Йоҡом килһә, ятып йоҡлайым.

– Һин беҙгә бараһыңмы?

– Барам.

Түрә малайҙы карапҡа алып инһә, унда тағы бер түрә.

– Мин бер малай таптым.

– Ай-һай, ҡалай анһат ҡына! Улай булмаҫ, әйҙә, шыбаға тотайыҡ малайға, – ти тегеһе.

Шыбаға тотҡайнылар, малай алып кергән кешегә сыҡты, ти. Малайҙы алып ҡайтып китәләр. Ҙурая малай. Матурая. Өйләнә.

Өйләнгәс, бының да бер ир балаһы була.

Шулай бер ашханаға барып инә. Инһә, бер буйҙаҡ егет ултыра.

Һөйләшеп, танышып китәләр.

– Һин ҡайһы яҡтан?

Егет һөйләп бирә хәлен. Яҡташ булып сығалар.

– Әйҙә ҡайтайыҡ.

Ҡайтырға һөйләшәләр, көн ҡуйышалар. Бер айҙан китергә булалар. Бер ай тулғас, пароход менән китәләр. Шунан пристандә төшөп, йәйәү китәләр. Китеп барһалар, бер йылғаға тап булалар. Шунда былар туҡтап ял итергә булалар. Ҡатынлы егет:

– Ары йөрөп киләйем. Берәй ҡошмо, ҡуянмы тура килмәҫме, – ти ҙә мылтығын алып сығып китә.

Сығып та китә, урманда юл таба алмай аҙаша ла ҡуя. Таң атҡас, тегеләр ҡалған ерҙе көс-хәл менән эҙләп таба. Килһә,

бәй, ни күрә: бер арыҫлан үлеп ята, ҡып-ҡыҙыл ҡан, теге егет тә үлеп ята. Ҡатын менән бала юҡ.

– Арыҫлан ашаған икән! – тип ҡайғыра батша улы.

Егетте был ситкә күмде, ти. Күмде лә ары китте, ти. Байтаҡ ерҙәр барғас, бер ҡала күренде, ти. Егет шунда барып, бер байға кереп, хеҙмәт итә башланы, ти. Бер йыл эшләне, ике йыл эшләне, ти. Өсөнсө йыл эшләгәндә, бер сабый килеп керә бының ҡырына. Егеттең эштән ҡайтып, сәй эсеп кенә ултырған сағы була. Сабыйға икмәк бирә.

– Энем, һин ҡайҙа йәшәйһең?

– Ошо ҡалала.

– Кемдәрең бар?

– Инәйем бар.

– Нисек көн итәһең?

– Бына ошолай йөрөп көн итәм, инәйем кер йыуа.

– Атаң ҡасан үлде?

– Атамды арыҫлан ашаған.

– Әйҙә инәңдең кер йыуған еренә барайыҡ, беҙгә лә кер йыуыусы кәрәк.

– Әйҙә.

Китәләр былар. Барһалар, алты мөйөшлө өй, ти. Малайҙың әсәһе кер йыуып йөрөй, ти.

– Ҡарындаш, ни хәлдә?

– Арыу ғына.

– Миңә кер йыуыусы кәрәк ине... – тип әйтеп тә бөтмәне, былар бер-береһен танып та ҡалдылар, ти. Китте, ти, илаш.

– Ни булды?

– Ни булды? – тип хужалар йүгереп килеп сыҡты, ти.

Шулай ҙа шулай, тип төшөндөрөп бирҙеләр, ти. Өс йыл йәнәш йәшәгәндәр, бер-береһен белмәгәндәр. Ҡайҙа инде хәҙер кер йыуыу ҡайғыһы?! Тышта кырандаслы ат тора, ти. Егет быларҙы ултыртып, үҙенең йортона алып китте, ти.

Бер йыл хеҙмәт иттеләр, ти. Өс йыл да булып китте, ти. Хужа ҡарт:

– Һин өс йыл хеҙмәт иттең. Өс кешегә ашарға-эсергә бер йылға етерлек аҡса бирәм, – ти. – Аҡ күк атты яратып менеп йөрөнөң, үҙеңә ал. Ана, кырандас-арба, уныһы ла һиңә булһын, – ти.

Тейәнеп, ирле-ҡатынлы малайҙары менән ҡайтып киттеләр, ти.

Хәҙер инде атаһының ҡалаһына килделәр, ти. Ҡайтып килеп бер әбейгә фатирға төштөләр, ти.

– Ни хәлдә йәшәү, инәй?

– Бик хөрт йәшәйбеҙ, балам. Батшабыҙ бик алама кеше булып сыҡты. Ғәҙел хөкөм итмәй, элекке батша һәйбәт ине. Уның улы, бәлки, насар батша булмаҫ ине лә. Әллә ни төш

күргән булып, аттыртып үлтертеп ҡуйҙы батша. Бына шулай бик ҡайғылы йәшәйбеҙ, балам, – ти әбей.

Был егеттең өҫтөндә ғәскәр кейеме. Ҡылысы бар. Күк атты менде, ти, батшаға килде, ти. Керҙе, ти. Керһә, инәһе сәс тарап тора, ти.

– Кем һине бында кертте?

– Рөхсәт менән керҙем. Ҡысҡырма.

Ҡылыс ҡумтаһы була бит инде. Ҡумта менән әсәһенең сикәһенә бер биреп алды, ти.

– Башта батшаның башын киҫәм, унан – һинең нәүбәт, – тине лә, ти, атына менеп, егерме биш саҡрымдағы ергә китте, ти. Барһа, бер рота ғәскәр тора, ти.

– Егеттәр, мин һеҙҙең менән иҫәнләшергә килдем, – ти, барып етеү менән.

Командирҙары айырым палаткала яталар икән, унда барһа, һаҡсылар ебәрмәй.

– Ебәрмәйһеңме?

– Юҡ.

– Әләйһә, бына һиңә.

Башын ҡырҡты ла ырғытты, ти, ҡаршы торған кешенең. Анса булмай, батша ҡыуышынан сығып, атын менеп ҡасты, ти. Был артынан төштө, ти, тегенең. Егет хәҙер һыуға ҡамалай тегене. Нисек кәрәк яр башына алып барып та еткерҙе, ти. Алып барып та еткерҙе – батшаның башын ҡыйып та төшөрҙө, ти. Һикереп төшөп ике ҡолағынан тишеп ҡанъяғаға бәйләне лә ғәскәр янына барҙы, ти:

– Егеттәр, асыуланмағыҙ. Мин батша малайымын. Мине был бәндә аттырмаҡ булғайны. Атамдың хаҡына һалдаттар атманы, мин ситтә йөрөп ир еттем. Әгәр ҡабул итһәгеҙ, һеҙгә хеҙмәт итәм, – ти.

Һалдаттар ҡысҡырып:

– Беҙ риза, беҙ риза, – тип унын һүҙен мәслихәт иттеләр, ти.

Егет илгә ҡайтып, батшалыҡ итергә тотона. Батша бар игенде юҡ, тип, халыҡты интектергән. Егет йән башына бишәр бот иген бирҙе, ти.

Шулай итеп, батшаның төшө дөрөҫкә килде, ти: батшаның башы киҫелде, ти. Яңы батша халыҡҡа кәңәш итеп, халыҡ менән бергә-бергә йәшәй, ти.

## 133. Батша ҡатыны

Элгәре заманда бер батша булған. Уның бер улы бар ине, ти. Батша ҡартайып үлеп киткәс, улы батша булып ултыра. Батша булып алғас, бер ваҡыт был вәзирҙәре менән ҡала буйлап йөрөргә сығып китә. Ҡалаға сыҡҡанында, бер ҡыҙға күҙе

төшә. Ул бер ярлы ҡыҙы була. Шул ҡыҙ менән һөйләшеп, береһе алмаҡ, береһе бармаҡ булып, һүҙ ҡуйышалар. Шунан һуң батша ҡайтып, инәһенә хәбәр итә:

– Инәй, һин асыуланмаһаң, бер хәбәр әйтәйем, – ти.

Инәһе:

– Әйт, балам, ниңә асыуланайым мин? – тине, ти.

Был егет әйтте, ти:

– Мин бер ҡыҙ менән һөйләштем. Шуны килен итеп алайыҡ.

Инәһе:

– Алдыңда булһын, балам. Һиңә оҡшаһа, миңә оҡшар, – тине, ти.

Шунан, эште оҙаҡҡа һуҙмай, яусы ебәреп, әйттерәләр ҙә алып та бирәләр. Шунан ул ҡатын:

– Мөмкин булһа, бер теләгем бар ине, – тине, ти.

– Алдыңда булһын теләгән теләгең, – тине, ти, егет.

Ҡатындар ул ваҡыттарҙа бик ауыр хәлдә ине, ти. Уларҙың табандарын телеп, тоҙ һалып, бик нык ыҙалаталар ине, ти. Батшаның ҡатынының теләге буйынса, улар шул язаларҙан, ыҙалыҡтарҙан ҡотолоп, ирек алдылар, ти. «Ирек» һүҙе шул ваҡыттан ҡалды, ти.

Оҙаҡ та үтмәне, ҡатын гоманлы булды, ти. Бер сәйәхәткә сығып йөрөгәндә, ҡатын:

– Бик ауырыҡһынам. Рөхсәт итһәң, ҡайтып китер инем, – тип әйтте, ти.

– Ярар, һин ҡайт, мин аҙыраҡ йөрөй бирәм, – тине, ти, батша.

Йөрөп ҡалғанында, батша бер ағас башында ҡош ояһы күрҙе, ти.

Унда бер ҡарға ике балаһына ем ашатып ултыра ине, ти. Бер ҡарсыға осоп килде лә, ҡарғаны өркөтөп ебәреп, ике балаһын да алып китте лә барҙы, ти.

Ҡайтып килгәс, ҡатынына әйтте, ти, батша.

– Һин ҡайтып киткәс, ғәжәп хәл күрҙем. Ояла баҫып ятҡан ҡарғаның ике балаһын бер ҡарсыға бер юлы алып китте.

Шунан ҡатыны әйтте:

– Беҙҙән игеҙ бала була. Әсирлеккә эләгәләр икән, – тине, ти.

Ҡатынынан шул һүҙҙе ишеткәс, батша бик ғәжәпләнде, ти.

– Шулай уҡ булырмы икән? – тине, ти.

Шунан бер аҙҙан тынысланып, йәнә тора башланылар. Бер ваҡыт батша сәфәргә сығып киткәнендә, ҡатыны игеҙ бала тапты. Батша ҡайтҡас, бәбәй туйы яһанылар, ти.

Бер аҙ тора биргәс, батшаның ҡатыны ҡәйнәһе менән һүҙгә килешеп, ҡәйнәһе батшаға килеп:

– Килен һин юҡта кеше менән йөрөнө. Балалар һинеке түгел, кешенеке, – тип хәбәр һалды, ти.

Инәһе шулай тип әйткәс, батша ҡатынды бикләргә әмер бирҙе, ти.

Бер ваҡыт ҡатынды хөкөм итергә халыҡты йыйҙылар, ти. Ул ваҡытта дарға аҫыу булған. Суд ҡатынды дарға аҫырға хөкөм сығара. Бөтөн халыҡ был хөкөмгә риза булмаған. Шунан уны балалары менән урманға алып барып ташлап, аҙаштырырға булалар. Ат егеп килгән һалдатҡа ҡатын:

– Батша миңә әйләнеп ҡарамаҫмы икән? Илсегә үлем юҡ, һин шуны барып әйт әле, – ти.

Һалдат барып, батшаға ҡатындың теләген белдерә:

– Ҡатының, әйләнеп ҡарамаҫмы икән, тине, – тигәс, батша:

– Юҡ. Әйләнеп ҡарамайым, аҙаштыр, – тине, ти.

Һалдат ҡатынды ике балаһы менән алып китте, алып барып, ҡара урманға индереп, ташлап ҡайтып китте, ти.

Һалдат ҡайтып киткәс, ҡатын иҫһеҙ ятып ҡалды, ти. Бер ваҡыт, иҫе инеп, ергә ҡараһа, урман күренә, өҫкә ҡараһа, йондоҙҙар күренә. Ул төндө ҡайғырып үткәрә лә, таң атҡас, бер яҡҡа тартып сығып китә. Асыҡҡас, ашарға эҙләгәндә, әтлек тамыры табып алып, шуны ашай. Әтлек тамырын ашау әҙәм балаһында шунан килеп сыға.

Ҡатын урман эсе менән китә башлай. Ул көн ҡараңғы төшкәс, бер ағас төбөнә барып, йоҡларға ята. Көнө буйы ер ҡыҙырып йөрөгән кеше ни, ҡаты йоҡлай ҙа китә. Шунан әсе тауышҡа уянып китеп ҡараһа, бер арыҫлан уның балаһын, күлмәккенәһенән эләктереп, алып китеп бара. Һалдырып алыр ине, сараһы юҡ бисараның. Шунан, йоҡоho осоп, йоҡламай төндө үткәрә. Таң атҡас, бер яҡҡа тартып китә башлай. Китеп барғанында, бер ер өй күрә. Ер өйгә барып, ишеген асып ебәрһә, тәне тотош йөнлө бабай күренә. Был хәлгә аптырап, ишекте япһа ла, бабай:

– Ин, түргә уҙ, – тине, ти.

«Түргә уҙ» тигән һүҙ шунан тороп ҡалды, ти.

Бабай әйтә:

– Һин ни эшләп йөрөгән ҡатынһың? – ти.

Ҡатын әйтә:

– Ирем эспүкеләнт итеп йөрөгәндә, аҙашып ҡалдым, – ти.

«Эспүкеләнт» тигән һүҙ шунан килеп сыҡҡан, ти.

Бабай:

– Бик яҡшы. Ошонда бергә-бергә тереклек итербеҙ, – тине, ти.

Бабай ашата, эсерә – бергә йәшәй башлайҙар. Көндән-көн малай үҫә. Бабай уға уҡ, ян эшләп бирә. Малай һунарға йөрөп, ҡуян, төлкө, тейен алып килеп, толоптай һуйып, һатырға ер

булмағас, эсенә һалам тултырып, ер өй эргәһен тултырып ташлай.

Бер көн, һунарға китәм, тип тышҡа сыҡҡас-иткәс, аяғы тартмай, малай кире ер өйгә инә. Ингәс, әпсәһе түшелдерегенә бер нәмә һалғанын күрә. Әпсәһенә:

– Шул нәмәне, ҡана, күрһәт, – ти.

Әпсәһенең күрһәткеһе килмәй. Малай ҡалай етте шулай, талап тигәндәй, алып ҡарай. Ул нәмә балдаҡ булып сыға. Ул балдаҡтың яҙыуын күргәс:

– Быныһы ниндәй яҙыу? – тип һорай.

Әпсәһе:

– Шулай-шулай, шул ваҡытта атаң тарафынан бирелгән балдаҡ, – ти.

Малай:

– Атайым хәҙер ҡайҙа? – ти.

– Атайың хәҙер ҡалала тора.

– Шулай булғас, – ти малай әйтә, – атайыма ҡайтайыҡ, – ти.

Әпсәһе әйтә:

– Атайыңа ҡайтырға тура килмәй.

– Ни өсөн тура килмәй?

– Шуның өсөн тура килмәй: һеҙ бәләкәй саҡта ул беҙҙе ошо урманда аҙаштырҙы. Һеҙ икәү инегеҙ. Берегеҙҙе арыҫлан алып китте.

Хәҙер киттек батша тарафтарына. Ҡатыны менән балаларын ҡыуып ебәргәс, батша бер ҙә генә тынғы таба алманы, табиптар алып килеп ҡаратһа ла, улар:

– Һиндә ауырыу юҡ, – тип әйтте, ти.

Ҡала араһында йөрөп килһә, әҙерәк тыныслыҡ табыңҡырай, ти.

Бер көн ҡала буйлап сығып китә. Шунда ул күрә ҡуя: бер вәзире, кеше көлһә лә, шымып ултыра.

– Ни эшләп һин улайтып бошонаһың әле? – тип һораны, ти, батша тегенән.

Вәзире бер нәмә тип тә әйтмәне, ти.

– Һиңә егерме дүрт сәғәт ваҡыт. Шул арала әйтмәһәң, дарға аҫтырам!

Шунан инде вәзир телгә килде, ти:

– Минең бошоноуым шул тарафтан. Минең бик матур ҡатыным бар ине, бер ҡарындашым да бар ине. Шул ҡарындашым миңә, еңгәм кеше менән шаяра, тип әйтә торғайны. Мин уға ышанмай йөрөй инем. Бер көн сәфәр йөрөп, төндә ҡайтып килгәнемдә, ҡарындашым ҡаршыма йүгереп сығып: «Бына мин әйтә торғайным, әйтһәм дә, һин ышанмай торғайның, хәҙер үҙ күҙең менән күр инде», – тине. Өйгә ингәндә, ҡатыным ятҡан бүлмәнән бер егет сығып ҡасты. Мин ингәндә, ҡатын йоҡлап

ята ине. Мин уны уятып торманым, аттым да үлтерҙем. Шул миңә мәңгелек уй булып ҡалды.

Вәзиренән шул һүҙҙе ишеткәс, батша аптырашта ҡалды, ти. Шул ваҡытта үҙенең ҡатынын аҙаштырғаны иҫенә төштө. Иҫенә төшкәс, ике вәзирен саҡырып алып, ҡайтырға әмер бирҙе, ти:

– Ҡайтып, минең әпсәмдән һорау алығыҙ, – тине, ти.

Вәзирҙәре ҡайтып, һорау алһалар, әпсәһе киленененең кеше менән йөрөгәненә дәлил килтерә алманы, ти.

Батша ҡайтҡас, инәһе улының хөзөрөнә килеп, сәстәрен туҙҙырып:

– Минеке хаталыҡ булды. Килен менән әҙерәк кенә һүҙгә килешеп, ҡурҡытайым әле быны, тип ошаҡлағансы, һин уны балалары менән аҙаштырҙың да ҡуйҙың.

Шул ваҡытта батша бик ҙур ҡайғыға ҡалды. Прәфисәрҙәрен йыйып, кәңәш итә башланы, ти.

– Шулай-шулай, минең ҡатын бар ине. Шулай-шулай, уны нахаҡтан хөкөмгә тарттырғайным. Шул тереме икән, үлеме икән? – тип һорашты, ти. Бер прәфисәре әйтә:

– Ул ҡатын тере булырға тейеш.

Шуны ишеткәс, батша эҙләргә бер взвод һалдат сығарып ебәрә.

Ул һалдаттар сығып, бер ни ҡәҙәр эҙләгәндән һуң, әлеге йөнлө бабай килеп сығып:

– Ни эшләп йөрөйһөгөҙ бында? – ти.

Һалдаттар ҡурҡыштарынан:

– Юлдан аҙашып йөрөйбөҙ, – тинеләр, ти.

Бабай:

– Әйҙәгеҙ миңә ҡунаҡҡа, – тип быларҙы үҙенең ер өйөнә алып ҡайта.

Ер өйгә алып ҡайта ла, ҡатын менән малайҙы күрһәтмәй. Шулай ҙа һалдаттар бер нәмә тип тә һорамаһалар ҙа:

– Моратығыҙға хасил булырһығыҙ, – тип ҡалды, ти.

Бара биргәс һалдаттар: «Моратығыҙға хасил булырһығыҙ» тигән һүҙ ни тигән һүҙ ул?» – тип, һорашырға килһәләр, ер өйҙөң ишеге лә юҡ, тишеге лә юҡ, ти.

Һалдаттар, аптырашып, ҡайтып киттеләр, ти. Аптырашып ҡайтып килеп, баяғы бабайҙы ла, бүтән күргәндәрен дә һөйләп бирәләр.

Бабай: «Моратығыҙға хасил булырһығыҙ», – тигәйне, беҙ уға: «Ҡасан булыр?» – тип барғайныҡ, ҡоро ер өй генә ултыра, бабай юҡ.

Ошо ваҡытта батшаның бүтән илдәрҙә ниндәй һөнәрҙәр бар икәнен белеп ҡайтырға ебәрелгән ике кешеһе, карап менән ҡайтып килгәндә, бер баҡсалыҡ урын күрәләр. Карапты туҡтатып, шул баҡсаға барһалар, унда бер яланғас егет күрәләр. Яҡыныраҡ барһалар, бер арыҫлан ырғып тора. Шул арыҫландан ҡур-

ҡып йүгерешкәс, теге егет эйәреп килә, уның артынан арыҫлан да килә. Шул ваҡытта уларҙы карапҡа индереп алалар. Теге егеткә һүҙ ҡушалар. Ул һөйләшә белмәй. Уға күлдәк-ыштан биреп, кейендереп, телгә өйрәтә башлайҙар.

– Ҡайҙа тыуҙың? – тип һораһалар, арыҫланды күрһәтә лә ҡуя, ти.

Көндәрҙең бер көндө былар ҡайтып килеп, батшаға сит ил хәлдәрен һөйләп:

– Арыҫлан менән бер ҡыр әҙәмен тотоп алып килдек, – тиҙәр.

Уны батшаның да күргеһе килә. Алдырып, бер бүлмә бирә. Егетте күргәс, ҡатынына оҡшатып ҡуя. Тел өйрәнгәс:

– Кемдән тыуҙың? – тип әйтһә, егет һаман да:

– Арыҫландан тыуҙым, – ти ҙә ҡуя икән.

Арыҫлан бынан бер иле лә айырылмағас, бишәр, унар минутлап, сәғәтләп, көнләп, уларҙы бер-береһенән һыуындыра баралар.

Ошо мәлдә икенсе бер батшалыҡ быларға ҡаршы һуғыш аса. Теге егет, батшанан һорап, һуғышҡа китә.

Шул ваҡыт урмандағы егет, атамды эҙләп табам, тип, әпсәһе менән талашыңҡырап торғанында, урман ҡарты килеп инеп:

– Балалар, нимәгә талашаһығыҙ? – ти.

Ҡатын әйтә:

– Улым «Атамды эҙләп барам», – ти.

Бабай әйтә:

– Улыңа рөхсәт бир. Мин уға ат, уҡ, ян бирермен.

Малай әпсәһенән рөхсәт алып, атаһын эҙләп сығып китә. Шул ваҡытта бер һуғыш урынына барып сығып, ҡарап тора ла һуғышҡа барып инеп китә. Бик көслө һуғышып, кис булғас, һуғышты туҡтатырға барабандар ҡаҡтылар, ти. Урмандан килгән егет ҡайҙа китергә белмәй аптырап торғанда, арыҫланлы егет тап булып, быны ҡунаҡҡа алып ҡайтып, үҙенең бүлмәһендә ултырған ваҡытында, бер-береһенән һораша башлайҙар. Урмандағы егет:

– Урманда тыуҙым, урманда үҫтем, – ти.

Арыҫланлы егет:

– Арыҫландан тыуҙым, арыҫлан менән урманда үҫтем, – ти.

Урмандағы егет:

– Әсәйем «Һеҙ икәү инегеҙ, берегеҙҙе арыҫлан алып китте», – тип әйтә торғайны. Һин, мин арыҫландан тыуҙым тиһәң дә, арыҫландан тыумағанһың. Арыҫлан алып китеп, шуның ҡулында ир еткәнһең. Беҙ бер туған булырға тейешбеҙ, – ти.

Шул ваҡытта батша ул ике егет эргәһенә ингәйне, урмандан килгән егеттең балдағына күҙе төшә ҡуйҙы, ти. Шунда уҡ ҡатынына биргән ынйылы балдаҡ икәнен танып, хайран ҡалып торҙо, ти. Бер аҙыраҡтан һуң:

– Был балдаҡты ҡайҙан алдың? – тине, ти.

Урмандағы егет:

– Урманда ҡалған әпсәмдән.

– Әпсәң әле бармы?

– Бар, – тине, ти, егет.

– Улай булғас, һеҙ икегеҙ ҙә минең уландарым булаһығыҙ. Бына мин һеҙгә бер рота һалдат бирәм, – тип, уландарын урманға оҙатты, ти.

Мисәп аттар ектереп, теге малай арыҫланлы егетте лә ултыртып алып, бабайҙың ер өйө яғына башлап китте, ти. Барып еткәс, ер өйҙө һалдаттар уратып алып, егет ер өйгә барып инде, әпсәһе быны күреп, шатлыҡтан шаҡ ҡатып, илап ебәрҙе, ти.

– Әсәй, илама. Атайымды таптым. Атайым һине алып ҡайтырға ебәрҙе, – тине, ти, егет.

Әпсәһе ышанмайыраҡ торҙо ла, алып килгән кейемдәрен кейендергәс кенә, ышанды, ти.

– Бына, әсәй, тағы бер һөйөнсө. Арыҫлан алып китте тигән туғаным да табылды, – тип, улы әпсәһен тағы бер ҡыуандырҙы, ти.

Шунан егет туғанын индереп күрештереп, урмандан сығып, ҡалаға етеп барғанда, батша команда менән ҡаршы сығып, ике команда бергә ҡушылған саҡта, «Смирно!» командаһы бирҙеләр, ти. Шул ваҡыттан «Смирно!» тигән һүҙ ҡалды, ти.

Батша ҡатынының аяҡтарына йығылып, ризалығын алырға теләне, ти.

– Яманлыҡты артҡа ташлайыҡ, яҡшылыҡты алға ҡуяйыҡ, тиң ғүмер итәйек, – тине, ти.

Малайҙары ла, ҡатыны ла был һүҙҙе хуп күреп, ҙур йыйын ҡороп, ҡыуаныстарын халыҡ менән уртаҡлашып, бөгөн булһа ла, яманлыҡты артҡа ташлап, яҡшылыҡты алға ҡуйып, тиң ғүмер итәләр, ти.

## 134. Турыйән менән Ғәлийән

Борон заманда бер батша йәшәгән. Уның Турыйән менән Ғәлийән исемле улдары булған.

Шулай бер көн ул батшалығын ҡарарға китә. Ҡатыны ауырыбыраҡ ҡала. Ҡалһа ла, өйҙә генә ятмай, матур көн, йәмле ваҡыт, үҙҙәренең баҡсаһына сыға. Байтаҡ ҡына һауа еҫкәп йөрөгәс, бер ағас төбөнә килеп ултыра. Шул саҡ ағас башындағы турғай ояһына күҙе төшә. Унда ике турғай балаһы сутылдаша ла сутылдаша, ти. Ипләберәк ҡараһа, ағас төбөндә генә бер инә турғай үлеп ята икән. Ҡатын аптырап ҡарап торған мәлдә, ата турғай икенсе бер инә турғайҙы эйәртеп ҡайтты ла, уны ояла ҡалдырып, үҙе ем эҙләп осоп китте, ти. Уның китеүе

була, теге инә турғай оялағы ике турғай балаһын, суҡып-суҡып, ағас төбөнә ташлап һәләк итә. Ошоно күргәс, ҡатындың ауырыуы тағы ла көсәйгәндәй итә. «Мин үлеп китһәм, минең балаларымдың да яҙмышы ошолай булыр инде», – тип ҡайғыра башлай. Шулай итеп, ул үҙенең баҡсала күпме ваҡыт ултырғанын да онотоп ҡуя.

Батша, инде сәфәрҙән ураап, өйгә ҡайтып төшә. Хеҙмәтселәрҙән:

– Ҡайҙа минең ҡатын? – тип һорай.

– Баҡсаға сыҡҡайны, – тиҙәр. Шунан батша уны алып ҡайтырға хеҙмәтселәрен ебәрә. Хеҙмәтселәре батшаның саҡыртыуы тураһында барып әйткәс:

– Батша үҙе килһен әле, – тип әйтә лә, ҡайтмайынса, ҡатып һаман шул урынында ултырып ҡала.

Батша үҙе бының ҡырына килә, ниңә ҡайтмауын һорай. Шул саҡ ҡатын әле генә күҙ алдында булып үткән турғай балаларының бәхетһеҙлеге хаҡында түкмәй-сәсмәй һөйләп бирә.

Батша бик диҡҡәт менән тыңлап ултыра ла:

– Ундай хәл була ҡалһа, мин башҡа ҡатынды тупһама ла баҫтырмам, – тип вәғәҙә бирә.

Былар өйгә ҡайталар. Байтаҡ ваҡыттар йәшәгәс, батшаның ҡатыны, сире көсәйеп китеп, донъя ҡуя. Батша, вәғәҙәһенә тоғро ҡалып, байтаҡ ваҡыт үҙе генә йәшәй. Әммә тирә-яҡ дуҫтары тиһеңме, вәзирҙәреме – барыһы ла:

– Батша кешегә былай ҡатынһыҙ йәшәү килешмәй ҙә, ярамай ҙа, – тип, уны өйләнергә өгөтләйҙәр. Өгөтләй торғас, батша ҡатын алырға мәжбүр була. Илгә хәбәр тараталар. Инде кәңәш итешеп, бергә уйлашып, батшаға йәш кенә бер ҡатын алып бирәләр. Аҙмы-күпме ваҡыт үтеүгә донъяға бер ир бала килә. Уның исемен Арслан тип ҡушалар. Арслан бик матур булып үҫеп килә, өс-дүрт йәшкә етә. Үгәй әсәй Турыйән менән Ғәлийәнде лә ситләтмәй, кәмһетмәй ҡарай.

Был батшаның һарайына күрше генә йәшәгән бер әбей булған.

Шул әбей, аралаша торғас, батшаның ҡатыны менән дуҫлашып китә бит. Шулай бер саҡ, әңгәмәләшеп ултырғанда, һүҙҙән-һүҙ сығып, ҡатын әбейҙән һорай:

– Әбей, минең Арсланым, батша ҡартайғас, батша булалыр инде? – ти. Әбей әйтә:

– Бәй, ни эшләп улай булһын. Турыйән менән Ғәлийәнде ҡайҙа ҡуяһың? Башта улар батша булырға тейеш, шунан ғына һинең улыңа сират етер, – ти. Шул саҡ ҡатын үҙенең аптырауын әбейгә һиҙҙерә. Әбей, быны күргәс, ҡатынға аҡыл өйрәтә башлай:

– Һин ҡайғырма. Бик ҡаты итеп ауыры ла кит. Үҙеңдең ауырыуыңды табиптарға, батшаның ике ир балаһын тырышып

ҡарауҙан, тип аңлат. Шул кәңәшләшеү урынына мине лә саҡырт, – ти. Батша ҡатыны, тап әбей өйрәткәнсә, бик ныҡ ятып китә. Батшалыҡтағы иң оҫта, иң күрәҙә табиптарҙы йыялар. Ҡатын кәңәшен тыңлап, теге әбейҙе лә саҡырталар. Былар инде хәҙер, ауырыуҙы бик ентекләп ҡарап, дауалайҙар, эй дауалайҙар, ти, ләкин дарыуҙарының шифаһы бер ҙә теймәй, ти. Шул саҡ табиптар, әбей, ҡатын үҙе бергәләп кәңәшләшәләр. Ҡатын серен аса, тегеләргә байлыҡ тәҡдим итә. Әбей әйтә:

– Батша ҡатыны Турыйән менән Ғәлийәнде ҡарап, улар хәсрәтенән ошо көнгә төштө. Шулай булғас, сир ҡайҙан килгән, шуның менән дауалау кәрәк, – ти.

Батша ҡатыны әллә нимәләр бирергә булғас, табиптар ҙа килешә инде. Шунан был уйҙы батшаға әйтәләр. Батша ишетеү менән үк ҡаршы төшә. Батшаның ай-вайына ҡуймайынса өгөтләүҙәрен дауам итәләр:

– Бер ятраҡан ҡатыныңдан тороп ҡалдың бит инде. Быныһы ла үлһә, ни эшләрһең? – тиҙәр.

Эй, ул һатлыҡ вәзирҙәр, һатлыҡ һанаттар, һатлыҡ табиптар үҙҙәренекен итмәй ҡуямы?! Батша артыҡ ҡарышмай башлай. Шунан инде өндәшмәҫ була.

– Әллә инде, – тип әйтеп һала.

Хәҙер инде Турыйән менән Ғәлийәнгә килһәк, улар шундай хәлдәр кисерә: Турыйәне үткерерәк була; ул, үҙҙәре тураһында ҡара уй уйлағандарын һиҙеп, ҡустыһы менән өләсәләрендә йәшәй башлаған, ти.

Батшаның закон кешеләре ҡағыҙ алып Турыйәндең өләсәһенә баралар, хәлде әйтәләр. Әбей илай башлай. Шул саҡ Турыйән:

– Мин был хәлде беләм. Бының алдан уйланыуы ла билгеле миңә. Арағыҙҙа ил күргән оло аҡһаҡалдар бар, улар тиктәҫкә йөрөмәҫтәр, шулай булғас, мин салынырға риза, тик Ғәлийән ҡустымды ҡалдырығыҙ. Ул бит үҙенең ни өсөн үлгәнен дә төшөнмәй, ун йәшлек сабый ғына, – ти. Ошоно ишетеп торған бер аҡһаҡал:

– Йәмәғәт, ысынлап уйлағанда, был йәндәрҙе ҡыйыуҙан бер файҙа ла юҡ. Әйҙәгеҙ, урамдағы этте салып, ҡанын ағыҙып, алып барайыҡ, шунан күҙ күрер, – ти. Кәңәш бирә: – Ә инде малайҙарға килһәк, – ти, – уларҙың дүрт яғы ҡибла. Сығып китһендәр, башҡа кеше күҙенә салынмаһындар.

Бына шунан һуң малайҙар, теге ҡартҡа рәхмәт әйтеп, өләсәләре менән илай-илай хушлашып, сығып китә. Ә тегеләр бер этте салып, ҡанын алып ҡайтып бирәләр. Шул ҡан менән ҡойоноуы була, теге яуыз терелә лә китә, йәнәһе. Хәҙер тыныс тормош башлана. Батша үлтерелгән малайҙар ҡайғыһын онота. Бер килке ваҡыт йәшәгәс, кинәт кенә Арслан ауырып үлеп китә. Бынан һуң батшаның ғаиләһендә ир бала ҡалманы бит

инде. Ул уйлана башлай. Ҡатыны ла ҡайғыға төшә. Үҙенең ҡара эше йөрәген тырнай. Бара торғас, ҡатын үҙе лә үлеп китә. Ошо хәсрәттән батша ауырыуға һабыша, батшалыҡ вазифаһын алып бара алмай башлай. Шунан уға, шәһәрҙән ситтә, урман эсендә бер йорт һалып биреп, шунда йәшәргә ҡушалар. Әйҙә, ул шунда ята торһон, беҙ уландар хәленә киләйек.

Теге сығып киткәндән һуң былар китәләр, китәләр, күп ерҙәр үтәләр. Турыйән Ғәлийәнде арҡаһына йөкмәп алып бара. Күп ауырлыҡтар күрәләр. Бара торғас, бер урманға барып етәләр. Турыйән ут яғып, туғанын һаҡлап, ҡарауыллап ултыра. Шул саҡ таңға табан үҙе лә ойоп китә. Улар уянғанда, төшкә ауышҡан була. Ҡалған ризыҡтарын ашап, юлдарын дауам итәләр. Бер ҡомлоҡ сәхрәгә барып сығалар, күп ҡыйынлыҡтар кисерәләр. Тағы бер урманға барып етәләр. Турыйән Ғәлийәнде йоҡларға һалып, үҙе ризыҡ эҙләп урман эсенә кереп китә. Төрлө йыртҡыс хайуандар осрап, шуларҙан ҡурҡып, ағас башына менеп ултыра. Шунда таңға тиклем йоҡлай. Иртән төшөп, энеһен эҙләй башлай. Шулай йөрөгәндә бер аҡлан ерҙә алдына фил килеп сыға. Турыйән ҡасып, ҡыйылып китмәксе булып ҡараһа ла, фил бер ҙә ҡалырға теләмәй: гел алдына килә лә сыға. Баҫтырыша торғас, фил мороно менән Турыйәнде эләктереп алып арҡаһындағы һандыҡҡа һалып ҡуйыуы була, һандыҡ бикләнә лә ҡуя. Ошо көйөнсә фил байтаҡ юл үтә, бер шәһәргә барып керә. Шәһәр халҡы, бының юлына келәмдәр йәйеп, батша һарайына тиклем оҙатып килә. Турыйән аңламай, айышына төшөнмәй торғанда, уға бер аҡһаҡал:

– Улым, беҙҙең батшалыҡтың йолаһы буйынса, батша үлгәс, батша буласаҡ кешене ошо фил арҡаһына һалып халыҡҡа алып ҡайтып бирә. Шул кешене беҙ батша итеп танныйбыҙ, – ти.

Ана шулай итеп, Турыйән батша булып китә. Икенсе көн үк шәһәр халҡын әлеге урманға Ғәлийән ҡустыһын эҙләргә ебәрә. Барһалар ҙа Ғәлийәнде эҙләп таба алмайҙар. Шунан, инде йыртҡыстар ашағандыр, тип ҡайғырышалар. Турыйән батшалыҡ эшен дауам итеп йәшәй бирә.

Хәҙер инде Ғәлийәнгә килһәк, ул йоҡоһонан уянып китә, бәй, ағаһы юҡ бит инде. Ғәлийән ағаһын тирә-йүндән эҙләп ҡарай, таба алмай. Шунан йыртҡыстар ашағандыр, тип уйлай ҙа аяғы тартҡан яҡҡа сыға ла китә. Бик оҙаҡ бара торғас, бер урманға етә, алда ғына матур йорт күрә. Керһә, бер бабай йәшәй икән. Хәл-әхүәл һорашып, һөйләшеп бергә йәшәй башлайҙар. Әңгәмәләшә торғас, Ғәлийәндең һөйләүҙәренән сығып, бабай улын танып ала. Был теге батша үҙе булып сыға. Бер улы табылһа ла, ҡарт башынан үткән ҡайғыны һаман да онота алмай, Турыйән улын һағына, хата эштәре өсөн үкенә. Шулай уйлана торғас, аҡылға еңеләйә башлай, ауырыуға һабыша. Аҙаҡ сиктә

үлеп ҡуя. Атаһын ерләгәс, был урман яғында ҡырҡ көн буйынса өҙләкһеҙ ямғыр ҡоя. Көн сыуаҡланғас, Ғәлийән юлын дауам итә. Бара торғас, бер ҙур шәһәргә барып сыға. Шәһәр ҡапҡаһына етһә, тегене керетмәйҙәр. Ҡарауылсы зиндан башлығына хәбәр итә. Ә зиндан башлығы Ғәлийәнде зинданға яба ла ҡуя.

Был шәһәрҙә Фәтих исемле сауҙагәр йәшәй икән, пароход менән һатыу итеп йөрөй. Уның пароходы китә алмай торһа, бер кеше ташлар булғандар, сөнки шунһыҙ пароходты оло балыҡтар ебәрмәйенсә тотоп торалар икән. Юлға сығам тиһә, Фәтих байҙың пароходы ҡуҙғалмай. Шунан ул зиндан башлығына кеше ебәрә. Зиндан башлығы:

– Ана, яңы ғына бер малай алғайныҡ, шуны ал, – ти.

Ғәлийәнде алып киләләр. Төшөндөрөп бирәләр. Ғәлийән:

– Туҡтағыҙ, миңә өс көн ваҡыт бирегеҙ, – ти.

Шунан ул, бер ҙур кәмә алып килеп, йөктө аҙыраҡ бушатҡайны, пароход күтәрелә лә ултырған еренән сыға. Фәтих бай, Ғәлийәндең үткерлеген күреп, уны үҙе менән алып китә. Диңгеҙ буйлап баралар былар, бара торғас, бер батшалыҡҡа етәләр. Үҙҙәренең эштәре менән йөрөгән саҡта, бер иғлан күреп ҡалалар: батша ҡыҙын кейәүгә бирә икән. Был батшалыҡта шундай ғәҙәт икән: батша ҡыҙы ун һигеҙ-егерме йәшкә еттениһә, бөтә тирә-яҡҡа хәбәр таратып, егеттәрҙе саҡыралар икән. Әле лә: «Бына беҙҙең ҡыҙыбыҙ етте, дәртле егеттәр, килегеҙ. Батшаның ҡыҙы кемде ярата, шуға биреп туй яһайбыҙ», – тип яҙып ҡуйғандар.

Ошо иғлан буйынса бында батша уландары, бай балалары, тағы әллә күпме егеттәр – бик күп халыҡ йыйылған, ти. Фәтих бай ҙа шунда китә.

Бынан бер-ике көн элек батшаның ҡыҙы төш күрә. Төшө нисегерәк булғандыр инде, уны төш юраусыға барып һөйләй:

– Мин бына шулай-шулай төш күрҙем. Ул нимә булыр икән? – ти.

Төш юраусы быны шулай юрай:

– Һин тормошҡа сығырға әҙерләнәһең бит, – ти. – Һиңә, беҙҙең ҡалаға шундайын аҡыллы, шундайын баһадир, шундайын бер аҡыл эйәһе килгән. Ләкин әле ошо көндә ул бик түбән йәшәй. Шулай булһа ла, һеҙҙең теге егет һайлау туйына килер. Һин уны алдан күҙәт, табырға, күрергә тырыш. Уның бит-йөҙө бына шулайыраҡ булыр, кейемдәре шулайыраҡ булыр, иң артта бер үҙе генә ултырыр, – ти.

Ярар, төш юраусынан ҡайта был хәҙер, уйлап йөрөй. Шунан теге тәғәйенләнгән көн килеп еткәс, бөтә халыҡ батша һарайының алдына – майҙанға йыйыла. Бында егеттәр саф-саф булып теҙелеп ултыралар: иң алда – батша улдары, унан бай малайҙары, шунан башҡа егеттәр. Күп инде, йөҙләгән егет, барыһы

ла алтын да көмөштән генә кейенеп-яһанып килгән. Һәр ҡайһыһының нисек кенә булһа ла батша ҡыҙына оҡшайһы килә инде. Үҙенең түрәһенә эйәреп, бында Ғәлийән дә килә. Фәтих бай алғараҡ үтә, ни тиһәң дә – сауҙагәр бит инде, өҫтө-башы ярарлыҡ. Ә был тегеләрҙең артында ағас төбөндә генә ултырып ҡала.

Эй, ултыралар былар көтөп, ултыралар. Шулай ултыра торғас, бына бер саҡ, зыңлатып, батшаның сәғәте һуҡты. Сәғәттең һуғыуы булды, балконға батшаның яҡындары, һанаттары, башҡалары сыҡты. Шунан һарайҙың алтын менән ялатылған ишегенән ҡыҙы килеп сыҡты. Күҙҙең яуын алырлыҡ итеп кейенгән-яһанған, ҡулында сәскә. Ғәҙәт буйынса, ул ҡулындағы сәскәне ниндәй егеткә илтеп бирһә, шул егет менән туй яһарға тейеш икән.

Әкрен генә атлап килә был, килә. Алда ултырған батша улдарын үтеп сыҡты – береһенә лә сәскә тотторманы. Шунан бай малайҙарын үтте, улар ҙа буш ҡалды. Башҡа егеттәргә килде, бында ла күңелгә оҡшағаны табылманы. Барыһын да үтеп сыҡты ҡыҙ – теләгәнен тапманы. Бында һемәйгән егеттәр гөж килә, тегендә балкондағылар «бәй-бәй!» тип аптырап ултыра...

Ҡыҙ ҡарап торҙо-торҙо ла иң артта, ағас төбөндә күңелһеҙ генә ултырған егетте күреп ҡалды. Ныҡлабыраҡ ҡараһа, теге төш юраусы әйткән егет. Батша ҡыҙы килә лә сәскәһен уға бирә. Ғәлийән аптырабыраҡ ҡалһа ла, ни эшләп былай тип алмаҫҡа тейеш түгел. Ул да егет ҡоронда бит инде хәҙер.

– Бына ни ҡәҙәре батша улдары, ни ҡәҙәре бай малайҙары, ни ҡәҙәре бынамын тигән башҡа егеттәр була тороп, һин бер йолҡошто, иң түбән егетте һайланың. Нәҫтә эшләп сәскәңде шуға илтеп тотторҙоң? – тип, батша ҡыҙына үпкәләй хәҙер.

Ҡыҙы әйтә:

– Атай, – ти, – мин үҙ теләгем менән һайланым. Кемде һайлаһам да, мин шуға риза, – ти. – Һин асыуланып китмә әле. Асыуланма, атай, – ти.

Батша асыуланып та ни ҡырһын: үҙенең йолаһы, егет һайланған, эш бөткән! Туй үткәрергә кәрәк хәҙер.

Батшаның ҡыҙы Ғәлийәнде етәкләп алып инде, үҙенә башҡа бер бүлмәгә индереп ултыртты ла иптәш ҡыҙҙарына уны тәрбиәләп кейендерергә ҡушты. Кейендереп ебәргәс, бынамын тигән егет булып китә был: шул тиклем мөһабәт, шул тиклем матур, әйтеп бөтөргөһөҙ! Ғәлийән үҙе лә батша балаһы бит инде, аҡыл эйәһе.

Шунан былар бик шаулы туй үткәрәләр. Туйҙан һуң да батша тыныслана алмай, һаман асыулана: бер ҙә кейәүен ҡыҙы менән тотҡоһо килмәй. Хушһынмай инде ләғнәт, кейәүем түбән заттан, ти.

Батша һуҡранһа ла, бала бала бит инде ул, быларҙы һыйхөрмәт менән оҙатып ҡала. Фәтих бай, бөтә тауарын тейәп, быларҙы алып ҡайтып китә.

Киттеләр былар. Эҫе көн. Ғәлийән менән батша ҡыҙы шул ҡәҙәре матур пароходтың рәшәткәһенә ултырып, икәүһе генә һөйләшеп киләләр. Ике йәш йөрәк серләшә инде. Батша ҡыҙы, һандығын асып: «Бына минең батша ҡыҙы икәнлекте күрһәтә торған ҡалпағым», – тип, ҡалпағын башына кейеп күрһәтә. Ғәлийән күреп аптырай: әллә ниндәй ҡиммәтле алтын-көмөш, бриллиант таштарынан эшләнгән, ҡараңғы төндә лә яҡтыртып торорлоҡ шундайын ялтырауыҡлы таштар менән биҙәлгән, иҫ китерлек! Быны Фәтих бай күреп ҡала.

Хәҙер Фәтих бай нисек тә быны Ғәлийәндән айырыу яғын уйлай. Уйлап ултыра торғас: «Әгәр мин улар янынан үтеп киткәндә шул ҡалпаҡты һуғып осорһам, Ғәлийән уны алырға һыуға төшөр. Шул ваҡытта ул һәләк булыр, батша ҡыҙы миңә тороп ҡалыр», – тигән фекер туплай. Эй шулай эшләй. Тегеләрҙең эргәһенән генә атлап китеп барған була ла, ҡапыл теге ҡалпаҡты һуға ла төшөрә диңгеҙгә. Батша ҡыҙы «ой!» тип ҡысҡырып ебәрә:

– Ой, ҡалпағым осто! Ул булмаһас, минең батша ҡыҙы икәнлекте кем белә? – ти.

Шул ваҡыт Ғәлийән уны-быны уйлап тормай, бер кәмә бар, шул кәмәне ала ла диңгеҙгә төшөрә, ҡалпаҡ артынан китә. Ғәлийәндең кәмәгә ултырыуы була, Фәтих бай матростарға әйтә:

– Теге яҡҡараҡ, теге яҡҡараҡ ҡыҙҙырығыҙ! – ти. Һаман йырағайтып, Ғәлийәнде торғоҙоп ҡалдырырға тырыша.

Шулай итеп, былар пароходты yҙлыҡтыралар. Ғәлийән кәмәлә тороп ҡала. Ҡайтып еткәс, Фәтих бай батша ҡыҙын үҙенең йортона ҡуя. Бер аҙна-ун көнмө йәшәгәс, ҡыҙ янына керә.

– Бына, – ти, – һинең Ғәлийән диңгеҙҙә тороп ҡалды, ул инде һәләк булды, – ти. Һин миңә тормошҡа сыҡ, – ти.

Ҡыҙ һис риза булмай. Шулай ҙа, теге бик ныҡығас, ахыры шулай ти:

– Әгәр өс йылдан ҡайтып етмәһә, мин һиңә тормошҡа сығырмын, – ти.

Фәтих бай риза була. Ни эшләһен инде, башҡа сараһы табылмағас.

Ғәлийән кәмә менән теге ҡалпаҡтың артынан китте лә китте. Китеп ултыра, китеп ултыра, китеп ултыра торғас, инде ҡалпаҡты үрелеп алам тигәндә, һауанан бер ҡош килеп сыға ла, тырнаҡтары менән эләктереп, ҡалпаҡты ала ла китә. Бына һиңә, мә! Хәҙер аптырауға ҡала инде был. Ни эшләргә белмәй, тегенең артынан да барып ҡарай, юҡ. Етерһең осҡан ҡош артынан!

Ғәлийән кәмәһен ярға килтереп һуҡты. Ҡараһа, ҡалпаҡ яр буйындағы ағас башында тора. Ағастың башына менә лә ҡалпаҡты ала. Шул ваҡытта бейектән тирә-яғына ҡарай. Бик йыраҡта урман ситендә бер йорт ултыра, уның аръяғында бер шәһәр күренә. Егет иплэп кенә төшә лә шул йортҡа ҡарай китә.

Йортҡа барып етә, бер бабай килеп сыға, уның артынса – бер әбей. Был бик хәлһеҙләнгән, арыған бит инде, бахыр.

– Эй, хөрмәтле әбей менән бабай! Саҡ ҡына миңә ризыҡ бирмәçһегеҙме икән? Бик асыҡтым, – ти.

Бабай менән әбей быны өйгә алып инәләр, ашаталар, эсерәләр, бик ихтирам итәләр. Һәйбәт ҡарттар булып сыға былар. Ғәлийән ошонда бер өс көнмө, аҙнамы ял итә. Быға хәл керә хәҙер. Шунан бер көндө бабай һорай:

– Улым, һин ҡайҙан килеп сыҡтың, ниндәй бәндә һин? – ти. – Ни эшләп ул ҡәҙәр йонсоноң? – ти.

Ғәлийән әйтә:

– Мин, – ти, – шулай-шулай йөрөгән бер малай. Атайым да юҡ, әсәйем дә юҡ. Ҡайҙа тамаҡ туйҙырһам, шунда үçкән егет инде, – ти.

– Һуң улай булғас, улым, һин беҙҙә ҡал, беҙгә ул булырһың, – ти бабай.

Ғәлийән риза була, әбей менән бабайға ул булып йәшәй башлай. Бик изгелекле була Ғәлийән, тырышып эшләй: утынын ҡырҡа, һыуын килтерә, бөтәһен дә эшләй.

Бер ваҡытта сәй эсепме, аш ашапмы ултырһалар, тыштан ҡысҡыралар:

– Бабай, ҡарауылға бар!

– Хәҙер барамын, хәҙер. Һай, аһаҡ ҡошо, ҡайҙан килеп сыҡты шул?!

– Бабай, нимә ҡарауыллайһығыҙ?

– Бер ҡыҙҙы ҡарауыллайбыҙ... Торғаны бер аһаҡ инде, әллә ҡайҙан килеп сыҡты. Бай шуны ҡарауыллата.

– Һы, – ти ҙә Ғәлийән тороп ҡала, бабай китә.

Бабай ҡайтҡас, Ғәлийән тағы һорай:

– Бабай, ниндәй ҡыҙ һуң ул?

– Кем белһен инде уны. Ҡайҙандыр бай алып ҡайтҡан. Алып ҡайтҡан да бит, ҡыҙ риза түгел икән, өс йыл көтөргә ҡушҡан. Бына шул, хәҙер өс йыл буйы һаҡлайбыҙ инде. Кис булдымы, дүрт кеше һаҡҡа баçабыҙ. Ә көндөҙ янында ҡыҙҙар тора, – ти бабай. Барыһын да һөйләп бирә.

Ғәлийән уйлай: «Бәй, былай булғас, бай тигәндәре теге мине ташлап киткән сауҙагәр түгелме икән? Шулай булһа, бабайҙың «аһаҡ ҡошо» тигәне – моғайын, минең ҡатындыр... Туҡта, бер әмәлен табырға кәрәк бының», – ти.

Бабайға ҡарауылға барырға яңынан сират килеп еткәс, Ғәлийән әйтә:

– Бабай, ҡарауылға мин барайым, – ти. – Һинең урынға, ризаһыңмы? – ти.

– Бар, балам, бар, – ти бабай. – Һин йәш кеше, хәҙер беҙҙең улыбыҙ бит инде, – ти. Быға ышана инде, ышанғас ебәрә.

Ғәлийән Фәтих байҙың йортона килде, тәҙрәнән ҡараны – кәләшен күрә алманы. Ҡапланған инде тәҙрәләр, ныҡ ҡапланған. Шунан ҡарауылсылар менән һөйләшә:

– Нимә ҡарауыллайбыҙ һуң беҙ? Кемде ҡарауыллайбыҙ?

Тегеләр ҙа шул уҡ фекерҙе әйтә:

– Бына шулай бер ҡыҙ һаҡлана бында. Өс йылдан кейәүе килмәһә, Фәтих байға барырға риза булған.

Хәҙер бабай урынына ҡарауылға гел Ғәлийән йөрөй. Бабайға рәхәт инде хәҙер, ул булғас, ышаныпп, уны ебәрә. Ғәлийән, шулай йөрөй торғас, ҡыҙҙы бик йәтеш осрата, әлеге ҡалпаҡты кейеп күрһәтә. Кейеп күрһәткәйне, ҡыҙ быны таныны, үҙенең ире Ғәлийән икәненә ышанды. Яйын табып, күрешеп йөрөй башланылар. Шулай бер көн Ғәлийән быға әйтә:

– Һин кинәт кенә ауырып киткән бул, ә мин үҙемде был шәһәргә йыраҡтан килгән бик оҫта табипсы итеп таныттырмын, – ти. Тегенеһе риза була инде, риза булмаған ҡайҙа ул.

Һөйләшкәнсә, ҡыҙ бик ҡаты сырхау булып китә. Фәтих байға ҡайғы төшә. «Үлеп ҡуймағайы», – тип һөйләнеп йөрөй. Шәһәрҙәге иң үткер табипсыларҙы саҡырып дауалап ҡарайҙар, – бер ҙә ярҙам итмәй. Шунан Фәтих бай шәһәрҙә, йыраҡ илдән килеп, ҡайҙалыр үтеп барыусы бер табип бар икән тигән хәбәр ишетеп ҡала. Шунан Ғәлийәнде Фәтих байҙың кешеләре килеп алып китә. Ғәлийән ҡыҙҙы дауалауы була, ул аяҡҡа баҫа ла китә, Ғәлийәндең даны бөтә шәһәргә тарала.

– Китмә, шәһәр ҡунағы булып, бер аҙ беҙҙә ят, – тип инәләләр быға.

Ғәлийән риза булған булып, бында ҡала инде. Ҡыҙҙы үҙенең ҡулына төшөрөргә кәрәк бит.

Ғәлийәндең ағаһы Турыйән ошо шәһәрҙә батша булып тора икән. Шулай бер көн батша ҡатыны сирләп киткән тигән хәбәр тарала. Ғәлийәнде халыҡ белгәс ни, шунда уҡ:

– Батша, шәһәребеҙҙә оҫта табип бар, шуны саҡырырға кәрәк, – тиҙәр батшаға.

Ғәлийәнде Турыйән ҡырына саҡырғандар икән, былар бербереһен танып, ҡосаҡлашып күрешкәндәр. Ошо шатлыҡ-ҡыуаныстан еңгәһе лә терелеп киткән, ти.

Оло ҡунаҡ булғандан һуң, Ғәлийән ҡыҙҙы алып үҙ батшалығына ҡайтып киткән. Ана шулай итеп, үҙҙәренең батшалығында – Ғәлийән, күрше батшалыҡта Турыйән батша булып йәшәп киткәндәр, ти.

## 135. Инә арыҫлан

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер батша. Батша яҡшылығы менән халыҡта дан алған. Тик уның яуыз инәһе генә халыҡты ҡан илатыр булған. Батшаның бер ҡыҙға күҙе төшкән. Туй үткәргәндәр. Яуыз ҡәйнә киленен бер ҙә генә күрә алмаған. Нисек кенә булһа ла улын айыртырға тырышҡан. Килене, етмәһә, йөклө икән.

Берҙән-бер көндө батша оҙон юлға сыға. Батшаның ҡайтыуына ҡатыны ике игеҙ улан таба. Инәһе улының ҡайтыуына ағыу әҙерләп, бүлмәһенә индереп ҡуя. Улы ҡайтҡас та, инәһе былай ти:

– Һинең йөклө бисәң вәзиреңдән ике ул тапты, ҡайтыуыңа бына ағыу әҙерләне.

Батша, инәһенә ышанып, ҡатынына ике балаһын күтәртеп, ҡара урманға алып барып ташларға ҡуша. Һалдаттар ҡатынды йәлләп илаһалар ҙа, ни эшләтә алһындар, батша әмеренә ҡаршы барып булмай.

Ҡатын, ике балаһын күтәреп, бик күп ерҙәр йөрөй. Еләк менән туйына. Арып-талып малайҙарынимеҙеп ятҡанда, йоҡлап китә. Баланың әсе тауышына уянып китһә, ни күҙе менән күрһен, ниндәйҙер арыҫлан бер малайҙы алып ҡасып бара. Ҡатын, яңғыҙ ҡалған балаһын күтәреп, байтаҡ ер үткәс, бер ҡалаға килеп керә. Тамаҡ туйҙырып сығыу ниәте менән ситтә генә ултырған өйгә инә. Өйҙә яңғыҙ ғына бер ҡарт була. Ул быларҙың хәлен аңлап, үҙендә ҡалдыра. Кис менән ай яҡтыһында ҡатын, ире биргән йөҙөккә ҡарап, буҫлығып-буҫлығып илай икән. Ҡарт сәбәбен һорап ҡараһа ла, ҡатын дөрөҫөн һөйләмәй, ҡунаҡҡа барғанда аҙаштым, ти, икән. Байтаҡ ғүмер уҙа, малай ҙа ҙурайып килә, ти.

Был ваҡытта әлеге батшаға икенсе бер батша һуғыш асҡан, ти. Батша илгә шундай яҙыу тарата: «Кем дә кем миңә килеп ярҙам итә, ул кеше минән хөрмәт күрәсәк, минең иң яҡын дуҫым буласаҡ».

Был ваҡытта малай, ун биш-ун алты йәшкә етеп, яҡынтирәлә ал бирмәгән батыр булып танылған, ти. Егет, батша саҡырыуын ишетеп, яуға китергә теләүен әйткәс, инәһе ҡайғырып илай ҙа:

– Бына, улым, аманат йән һаҡлар тигәндәр, – тип улына йөҙөгөн һалып бирә лә оҙатып ҡала.

Бер заман батша хеҙмәтселәре һунарҙа йөрөгәндә ялан аяҡлы эҙ күреп ҡалалар. Эҙҙе юллап барып ҡараһалар, бер ағас төбөндә үҫмер малай менән арыҫлан ятҡанын күрәләр. Һунарсылар малайҙы саҡырып алалар ҙа, уға кейем кейҙереп, үҙҙәре менән алып китә башлайҙар. Шул ваҡыт арыҫлан илай-илай малай артынан эйәргән, ти.

Өйгә ҡайтып еткәс, хеҙмәтселәре батшаға арыҫлан менән бер егет алып ҡайтҡанлыҡтарын хәбәр иткәндәр. Батша егетте алып килергә ҡушҡан. Егетте күргәс, аптырап киткән, уны ҡайҙалыр күргән кешеһенә оҡшатып, ҡарай ҙа ҡарай икән.

Яу сыҡҡас, батша егетте һуғышҡа ебәрә. Дошмандарға елдауыл булып ташлана, ти, был егет. Икенсе яҡтан, теге егет дошманды тар-мар итә, ти. Яуҙы түңкәреп, дошман ғәскәрен ҡырып бөтөп, был егеттәр батшаға килгәндәр. Сапҡынсылар алдан батшаға ике бәһлеүәндең дошманды ҡыйратыуҙары тураһында хәбәр иттеләр, ти.

Батша быларҙы өс көн байрам иттергән, ти. Бөтә халыҡ та өс көн, өс төн һыйланған. Арыҫлан менән бергә килгән егеткә күрһәтеп, халыҡ:

– Был егет – беҙҙең ҡотҡарыусыбыҙ! Ул ни тип әйтһә, батша уны тыңларға тейеш! – ти икән.

Шул ваҡыт арыҫлан менән килгән егет, икенсе егеткә күрһәтеп:

– Был егет булмаһа, мин бер үҙем генә еңә алмаҫ инем, – тип әйтте, ти. Батша был ике егеттең бер-береһенә ике тамсы һыу кеүек оҡшағанлыҡтарын күреп иҫе китте, ти. Шул ваҡыт егет, инәһенең йөҙөгөн алып, батшаға күрһәтте, ти. Батша ни тип әйтергә белмәй, бер ағарынды, бер буҙарынды, ти. Тора биргәс кенә, батша:

– Эй, балам, – тип әйтә алды, ти.

Батша егетте инәһен алырға ебәрҙе, ти. Инәһе, улын һағынып, ғазап эсендә янған, ти. Улы инәһенә бөтәһен дә һөйләп бирҙе, ти. Егетте тәрбиәләп үҫтереп кеше иткән өсөн, ҡартҡа күп итеп мал биреп китте, ти, был ҡатын. Батша һарайына килеп ингәс, арыҫлан эргәһендәге егетте күреп, аптырап ҡалды, ти. Батша:

– Арыҫлан тәрбиәләп үҫтергән улың ошо инде, – тип әйткәс, ҡатын хатта иҫен юғалтты, ти. Иҫенә килгәс, ҡатын барыһын да һөйләп биргән. Шатлыҡтарынан ни эшләргә белмәгәндәр былар. Батша теге яуыз ҡарсыҡты урман төпкөлөнә алып барып ташларға әмер биргән. Һалдаттар уны илтеп ташланылар ҙа еңел тын алып ҡуйҙылар, ти.

Батша ике улының ярҙамында әле лә яҡшы батшалыҡ итә, имеш.

## 136. Кәримйән менән Хәкимйән

Борон-борон заманда бер батша йәшәгән. Уның ауырыу ҡатыны булған. Уларҙың Кәримйән һәм Хәкимйән исемле улдары булған. Батша ҡатыны улдарын бик ныҡ яратҡан, уларҙың һәр теләген үтәргә тырышҡан. Бер көн ул баҡсаға сығып ултыра.

Тышта бик күңелле. Ағастар йәм-йәшел япраҡтарға, сәскәләргә күмелгән. Ҡоштар үҙҙәренең ҡошсоҡтары менән сыр-сыу килә. Уларға ашарға килтерә. Батша ҡатынының алдындағы ағас башына оя ҡорған ҡоштар ҙа балаларына ем эҙләп осоп китә. Шул ваҡыт был ояға икенсе бер ҡош килеп ҡуна ла ундағы ҡошсоҡтарҙы берәм-берәм этеп төшөрә. Оя бушап ҡалғас, үҙенең ҡошсоҡтарын ташый. Был хәлде күҙәтеп ултырған әсәнең йөрәге һыҡрай: «Мин ауырыумын.... мин үлеп китһәм, балаларымды үгәй әсә шулай ҡыйырһытыр, ситкә тибер, бер-береһенән айырыр», – тип илай.

Күп тә үтмәй батша ҡатыны үлә. Батшаға ла, уның улдарына ла был ҙур ҡайғы алып килә.

Тиҙҙән батша икенсе ҡатынға өйләнә. Был ҡатын төҫкә бик һылыу, ләкин уҫал була. Көндәр үтә, йылдар үтә. Был ҡатын да батшаға бер ир бала табып бирә. Ата-әсәһенә шатлыҡтар өҫтәп, бала бик тиҙ үҫеп китә. Инде батша ла ҡартая башлай. Мәкер уйлы батша ҡатынының башына шундай уй килә: «Батша ҡартайҙы, үлеп китер ҙә батшалығын улы Кәримйән алыр. Минең улым батшалыҡтан буш ҡалыр. Былай ярамай. Нисек булһа ла батшалыҡты улымда ҡалдырырға кәрәк. Мин Кәримйән менән Хәкимйәнде үлтертәйем!»

Бер аҙҙан батша ҡатыны күрәҙәсегә бара ла былай ти:

– Әгәр ҙә батшаның ике улын үлтертһәң, мин һинең һәр теләгеңде үтәйәсәкмен.

Күрәҙәсе:

– Мин ни эшләргә тейешмен һуң? – тип һорай. Батша ҡатыны:

– Мин ауырып киткән булырмын. Һин батшаға әйт: «Ике малайыңдың ҡанын эсһә генә, терелер», тиген, – тигән.

Көндәрҙең бер көнө батша ҡатыны «ауырып» китә. «Тәүге ҡатыным кеүек, быныһы ла үлә инде», – тип, бик ныҡ ҡурҡа батша. Ҡатынды төрлөсә дауалап ҡарайҙар, тик ул «һауыҡмай» ҙа ҡуя. Шунан ҡатын үҙен күрәҙәсегә алып барыуҙарын һорай. Күрәҙәсе иһә:

– Ҡатыныңдың ауырыуы бик көслө. Һин уны, ике малайыңдың ҡанын эсереп кенә, ҡотҡара алаһың, – тип яуап биргән. Батша улдарын йәлләй, ләкин ни эшләмәк кәрәк, ҡатыны үлһә, тағы ла етем ҡаласаҡ. Батша ҙур ауырлыҡ менән булһа ла, улдарын үлтерергә риза була.

Бына хеҙмәтселәр батшаның көймәле арбаһын биҙәй башлай, үҙҙәре туҡтауһыҙ илай. Бөтәһе лә әҙер булғас, батша улдарын саҡырып ала.

– Мин һеҙҙе бик йыраҡ илдәргә ебәрәм. Һеҙ унда уҡырһығыҙ, ҙур кешеләр булып сығырһығыҙ. Бәхетле юл һеҙгә, балаларым! – ти батша.

Юлда барғанда, оҙатыусыларҙың ниңәлер илауҙары малайҙарҙың күңеленә шик төшөрә. Ҡара урманға барып еткәс, оҙатыусылар эштең нимәлә икәнлеген әйтеп бирәләр. Малайҙар бик ныҡ илайҙар, үҙҙәрен үлтермәүҙе ялбарып һорайҙар. Оҙатыусылар, батша йортона ҡайтмаҫҡа ҡушып, малайҙарҙы ирекkә ебәрәләр. Ә үҙҙәре, эйәреп килгән этте һуйып, ҡанын һауытҡа тултыралар ҙа ҡайтып китәләр. Батша ҡатыны был ҡанды «әҙләп эсә» лә «һауыға».

Ә ике малай урманда аҙаша. Хәлдән тайып юл эҙләйҙәр. Энеһе бик арығас, Кәримйән уны ағас төбөнә ултырта ла:

– Ошо урындан бер ҡайҙа ла китәһе булма, – тип, үҙе юл эҙләргә тотона. Бер саҡ ул ҙур аҡланға барып сыға. Уға ҡаршы ҙур мөгөҙлө мышы килеп сыға һәм Кәримйәнде мөгөҙөнә элеп тә ала. Кәримйән:

– Мышыҡай, мине төшөр, ағас төбөндә минең бәләкәй энем ҡалды, зинһар, ебәр, ул бер үҙе ҡурҡыр, – тип ялбара. Ләкин мышы:

– Беҙҙең батшабыҙ үлде. Халыҡ мине батша эҙләргә сығарып ебәрҙе. Мин тәүге осратҡан кешемде илемә алып ҡайтырға тейешмен. Бына һин беҙҙең батшабыҙ булырһың, – ти ҙә елеп сығып китә.

Хәкимйән, ағаһын эҙләй-эҙләй, хәлдән тая. Бына ул бер ҙур һыу буйына барып сыға. Яр буйында кешеләр ҡайнаша. Улар бер карапты ҡуҙғатырға маташалар. Ә карап ҡымшанмай ҙа. Үҙҙәренә яҡынлашҡан ят малайҙы күргәс, аранан берәүһе:

– Әйҙәгеҙ, ошо маңҡа малайҙы ҡорбан итеп һыуға ташлайыҡ. Ашарҙарына булғас, карапты тотҡан балыҡтар беҙҙе ебәрер, – тип ҡысҡыра шатланып. Хәкимйән уларға:

– Балыҡтар минең кәүҙәмде бик тиҙ ашап бөтөрөрҙәр, һеҙ барыбер карапты ҡуҙғата алмаҫһығыҙ. Йөгөгөҙҙө икенсе карапҡа бушатһағыҙ, был бәләнән ҡотолорһоғоҙ, – ти. Шулай итәләр ҙә. Карап ҡуҙғалып китә. Хәкимйән дә карапҡа элә. Ошондағы кешеләр:

– Был бик башлы малайға оҡшай, әйҙәгеҙ, ул беҙҙең капитан булһын, – тиҙәр. Шулай итеп, Хәкимйән бер нисә йыл капитан хеҙмәтен үтәй. Бер саҡ был карапҡа ике сауҙагәр йөктәрен тейәй. Береһенең бик һылыу ҡыҙы, ә икенсеһенең улы була. Тәүге күреүҙән үк ҡыҙға Хәкимйәндең күҙе төшә. Улар танышалар, йыш ҡына осраша башлайҙар. Сауҙагәр малайы ла ҡыҙҙы бик яратып йөрөй икән. Капитан менән ҡыҙ араһын нисек боҙорға? Бер көндө бай егет ҡыҙҙың эшләпәһен һыуға ташлай. Ҡыҙ бик ҡайғыра, егетте эскерлелектә ғәйепләй ҙә капитан янына килә.

– Әгәр ҙә мине яратһаң, эшләпәмде табып бир, – ти капитанға.

Капитан риза була:

– Эшләпәңде тапһам, әйләнеп килермен. Мине өс йыл, өс ай, өс көн көтөрһөң, – ти.

Хәкимйәнгә эшләпәне тотоу өсөн, бер нисә көн буйы һыуҙа йөҙөргә тура килә. Тамам хәлдән тайҙым тигәндә генә, егет эшләпәне тотоп ала. Көс-хәл менән ярға сығып йығыла. Бер аҙ иҫ йыйғас, йыраҡта күренгән ҡалаға юл тота. Юл буйында дарыу үләндәре йыйып бара. Ҡалаға килеп кергәс, иң ситке йорттан фатир һорай. Хужалар риза булыр ине, бөтәһе лә ауырып ята икән: әбей ҙә, бабай ҙа, ҡыҙҙары ла. Егет аптырап ҡалмай, йыйып килтергән үләндәренән дарыу яһай ҙа уларҙы дауалай башлай. Тиҙҙән улар һауыға. Тик был ауырыу бөтә ҡаланы баҫып алған була. Был ғаиләнең терелеүен белгәс, күрше-тирә, унан бөтә ҡала халҡы ярҙам һорап килә. Егет уларҙы ла үлемдән ҡотҡара.

Батшалыҡта ниндәйҙер табип-мосафирҙың халыҡты дауалауы тураһында батша ла ишетә. Ул мосафирҙы үҙенә алып килергә бойора, сөнки батшаның ҡыҙы ла бик ҡаты ауырый икән.

Батша янына Хәкимйән ҡурҡа-ҡурҡа ғына бара. Батша ауырыу ҡыҙы эргәһендә бик ҡайғырып тора икән.

– Табип-мосафирҙы килтерҙек, – тип хеҙмәтселәре хәбәр итеүгә, батша әйләнеп ҡарай, бер минутҡа ҡатып ҡала һәм:

– Хәкимйән, туғаным! – тип мосафирға ташлана. Был батша Хәкимйәндең бер туған ағаһы – Кәримйән була.

Бер-береһен тапҡас, туғандарға йәшәү, тормош шатлығы өҫтәлә. Хәкимйән үҙенең һөйгән ҡыҙын таптырып, матур итеп туй уҙғартып, гөрләшеп йәшәп киткәндәр, ти.

## 137. Батша улы

Борон-борон заманда бер батша йәшәгән, ти. Берҙән-бер көндө ул батшаның ҡатыны үлеп киткән, ти. Уның бер улы ҡалған. Шунан һуң батша икенсе батшалыҡтан үҙе бик сибәр, үҙе иркә ҡатын алып ҡайтҡан.

Бер аҙ йәшәгәс, батшаның яңы ҡатынынан да улы булған. Балалары бер аҙ үҫкәс, батша ологая төшкәс, йәш ҡатын: «Үгәй малай атаһы урынына ултыра», – тип ҡурҡып, уны юҡ итергә юлдар эҙләй башлаған. Ул ауырыуға һалышҡан.

Бер көндө батша ҡатыны батшаға әйткән:

– Мине дауалаған ҡарсыҡ әйтте: «Әгәр ҙә һауыҡҡың килһә, үгәй улыңдың ҡанын эс», тине, – тигән.

Батша күп уйлаған. Уйлаған, уйлаған да, сара тапмағас, риза булған. Бер хеҙмәтсеһенә баланы үлтереп ҡанын алып ҡайтырға ҡушҡан. Хеҙмәтсе малайҙы урманға алып барып, уның ҡаны урынына эт ҡаны алып ҡайтып биргән. Малайҙы урманда ҡалдырған. Бала күп йөрөгәндән һуң икенсе батшалыҡ

еренә барып сыҡҡан. Ул бер көтөүсегә тура килгән. Уны көтөүсе үҙенә ярҙамсы итеп алған. Батша малайы көслө, матур булған. Кис көтөүҙән ҡайтҡанда, батша ҡыҙы күреп ҡалған да уға ғашиҡ булған. Ҡыҙ ҙа егеткә оҡшай. Батша ҡыҙы ла, был егет тә бер-береһен яратҡандар. Ҡыҙының көтөүсе менән бергә йөрөүен күреп, батша бик асыуланған һәм ҡыҙын икенсе кешегә бирергә булған, ти. Ҡыҙ риза булмаған, атаһын күндерергә тырышҡан. Бик оҙаҡ ялынғандан һуң, батша риза булған. Һәм батшалығын ҡыҙ менән кейәүенә биргән. Шуның хөрмәтенә батша бик ҙур мәжлес йыйған. Күрше батшаларҙы ла ҡунаҡҡа саҡырған. Егеттең атаһы ла, үгәй әсәһе лә килгән. Мәжлес ваҡытында егет үҙенең башынан үткәндәрҙе һөйләп биргән. Үгәй әсә ҡурҡышынан йөрәге шартлап үлгән. Атаһы үҙенең дә батшалығын алыуҙы һораған. Егет быға риза булмаған, үҙ атаһының батшалығын үгәй әсәһенән тыуған ҡустыһына бирергә ҡушҡан һәм үҙе матур итеп йәшәй башлаған һәм әле лә йәшәйҙәр икән, ти.

## 138. Үгәй ҡыҙ менән ун ике ҡасҡын

Борон заманда бер ҡарт булған, ти. Уның бер ҡыҙы бар ине, ти. Ҡатыны үлгәс, алған яңы ҡатыны ҡыҙҙы һис яратмаған, уны урманға илтеп ташларға ҡушҡан, ти. Ҡарт, йәш бисәһенең һүҙен йыға алмай, ҡыҙын урманға алып китә. Урманға килеп еткәс:

– Ҡыҙым, һин ошонда тороп тор, – тип әйтеп, ситкәрәк барып, шаҡылдай, шаҡылдай ҙа ҡайта ла китә. Ҡыҙ ултыра, ултыра – атаһы юҡ, ти. Шунан был илай башлай. Илап-илап арығас, тора ла бер юл менән китә лә бара. Эй бара был, эй бара. Бара торғас, бер йортҡа барып сыға. Йортҡа керә. Керһә, өҫтәл өҫтөндә ун ике туҫтаҡ. Туҫтаҡ һайын бер өлөш. Ҡыҙ ун ике туҫтаҡтан да ауыҙ итеп, йүгереп йөрөп өйҙө йыйыштырғас, әләүкә башына менеп ята.

Ярты төн үткәс, ун ике кеше килеп инә. Ҡараһалар, өй йыйыштырылған. Аптырай былар. Шул арала берәүһе:

– Бәй, минең өлөштө киҫеп алғандар бит, – ти.

– Минекен дә киҫкәндәр, – ти икенсеһе.

– Минекен дә.

– Минекен дә.

Бәй, ҡараһалар, ун икеһенең дә өлөшөнә тейгәндәр, ти.

Өй эсендә берәй кеше юҡмы икән тип эҙләһәләр, әләүкә башынан ун биш йәшлек бер ҡыҙҙы табып алалар. Һорашып, кемлеген белгәс:

– Был баланы һәләк итмәйек, үҙебеҙҙең туғаныбыҙ итеп йөрөтәйек, – тип кәңәш ҡоралар.

Был егеттәр ҡасҡындар була. Улар көн дә үҙҙәренең кәсебенә сығып китә, ҡыҙ өйҙә ҡала. Өй йыйыштыра, ағайҙары ҡайтҡанса, тамаҡтарына әҙерләп ҡуя.

Берҙән-бер көндө ҡыҙ ҡырына бер егет килеп инә. Ул һунарға сыҡҡан батша малайы икән. Ҡыҙ менән танышып, бик ягымлы ғына һөйләшеп, үҙенә ҡарата ла, алып ҡайта ла китә.

Ағалары ҡайта. Өйгә инһәләр, юҡ, ти, ҡыҙ. Эҙләп, эҙләп, таба алмағас, юллап артынан китмәгә итәләр.

– Мин тауышын беләм, – ти бер ағаһы.

– Эҙен еҫенән таныйым, – ти икенсеһе.

Өсөнсөһө әйтә:

– Күккә ҡарап, яҡ айырам, – ти.

Ҡыуып китәләр ҡыҙҙы. Эҙен еҫкәп, бара торғас, батша йортона барып етәләр. Батша йортона былар керә алмайҙар. Шул ваҡыт һарай эсендә эт өрә.

– Эт ниңә өрә ул? – тип һорайҙар тауыш айырыусынан.

– «Һеҙҙең туғаныгыҙ бында», тип өрә, – ти тегеһе. Шул саҡ этәс ҡысҡырып ебәрә.

– Этәс ни ти?

– Батшаның алтынын алырға ҡуша, – ти ҡош телен белеүсе.

Тағы береһе ер тыңлап ҡарай ҙа, ул-был шикерт һиҙелмәгәс, ун икеһе лә кереп, батшаның алтынын урлап, ҡайтып китәләр.

Батша алтынды эҙләп табыу өсөн өс белемсе кеше һората. Шул хәбәрҙе ишетеү менән, өс бур батша ҡырына барып:

– Беҙ һинең ҡайғыңды ишеттек тә ярҙам итмәгә булдыҡ. Һиндә бер ҡыҙ бар икән. Шул ҡыҙ урманда бер ҡыуыш барын белә. Алтының шунда булыр. – тиҙәр.

Шул һүҙҙе ишеткәс, батша егеттәрҙе ҡыҙ янына индерә. Ҡыҙ ағаларын таный. Таныһа ла белгертмәй. Ҡараҡтар ҡыҙға эште аңлатып бирәләр. Шунан күмәкләшеп барып ҡараһалар, алтын ысынлап та шунда була. Батша ҡыуанысынан ни эшләргә лә белмәй. Ҡасҡындарҙы саҡыртып ала. Улар был юлайы ун икеһе лә килә. Батша уларҙың ун икеһен дә ғәскәр башлыҡтары итеп ҡуя. Ҡыҙ бала үҫеп еткәс, уны улына килен итеп алып бирә.

Етем ҡыҙ менән батша улы, ғәскәр башы – ун ике ҡасҡын әле лә бер ил булып бергә-бергә йәшәйҙәр, ти.

## 139. Мулла менән сауҙагәр ҡыҙы Көнһылыу

Борон-борон заманда бик ҙур бер ауылда бай сауҙагәр йәшәгән, ти. Ул ҡыҙы Көнһылыу менән бергә һатыу иткән. Берҙәнбер көндө сауҙагәр утыҙ дөйә егеп, алыҫ илдәргә тауар алырға киткән. Сығып китер алдынан, үҙенең иҫән-һау йөрөп ҡайты-

уын телəп торор өсөн, шул ауылда йәшәүсе муллаға хәйер биреп сыҡҡан, ти.

Атаһы алыҫ илдәргә сығып киткәс, Көнһылыу бер үҙе генә һатыу итә башлаған.

Байҙың сығып китеүенә өс көн тулыуға, мулла үҙенең ҡыҙы Хәрбиҙәгә: «Ҡыҙым, тыуған көнөңә дуҫтарыңды ҡунаҡҡа саҡыр», – ти. Кемдәрҙе ҡунаҡҡа саҡырырға кәрәклеге тураһында ла әйтә.

Ҡунаҡтар йыйылышып бөткәс, мулла өйөнөң икенсе ҡатында уйын-көлкө, күңел асыу башлана. Хәрбиҙәгә тыуған көнө менән ҡотлап бүләктәр килтерәләр. Көнһылыу Хәрбиҙәгә бүләк итеп бик ҡиммәтле көмөш ҡомған килтерә. Мулла Көнһылыуҙы үҙенең янына, беренсе ҡатҡа, саҡыра ла көмөш ҡомғандан үҙенең ҡулын йыуырға һыу һалып тороуын һорай. Шул ваҡыт ул Көнһылыу менән шаярмаҡсы була, уны ҡосаҡлап алырға итә. Ҡыҙ мулланы бик ныҡ итеп этеп ебәрә. Икенсе ҡабат ынтылғанында, көмөш ҡомғаны менән башын яра һуға ла ҡуя. Мулла иҫһеҙ йығыла. Тауыш булмаһын өсөн, ҡыҙҙарға Көнһылыу был турала бер кемгә лә һөйләмәҫкә ҡуша.

Башы ярылғас, мулла ун көн мәсеткә бара алмай. Хәҙер ул кешеләргә башы нимәнән ярылғанын нисек аңлатыу тураһында хәйлә уйлай. Уйлай-уйлай ҙа тәһәрәт алғанда, башыма ай ватылып төштө, тип әйтермен, ти. Йәтеш яуап табыуына мулла эстән генә ҡыуанып бөтә алманы, ти. Ҡыуанһа ла, күңеле тыныслыҡ тапманы, ти. Нисек тә булһа, байҙың ҡыҙына яуызлыҡ эшләргә уйлай башланы, ти, был. Байҙың бик ҙур алма баҡсаһы, һыйыр көтөүе, йылҡы көтөүе булған була. Мулла бер көндө байҙың алма баҡсаһын ҡараусыны, малдарын көтөүселәрҙе үҙенә саҡырып ала.

– Мин һеҙгә бик күп аҡса бирәм, һеҙ алма баҡсаһын ҡоротоғоҙ, һыйырҙарҙы, йылҡыларҙы үлтерегеҙ, – тип ағыу бирә.

Ун көн эсендә бик күп ерҙә алмағастар ҡорой, бер нисә баш һыйыр, йылҡы үлә.

Китеүенә ҡырҡ биш көн тулды тигәндә, сауҙагәр утыҙ баш дөйәгә тейәлгән мал менән ҡайтып төшә. Иң беренсе муллаға килеп керә.

– Сәфәрҙән һәйбәт кенә ҡайтып киләм, аҫыл тауарҙар килтерәм, – тип, муллаға бик һәйбәт еләң кейҙерә.

Мулла уға:

– Юлда һәйбәт йөрөп ҡайтҡанһың да ул, бында эштәр насар бит әле, – ти. – Алма баҡсаһы ҡорой башланы, йылҡы, һыйырҙар зыян күрҙе. Һин киткәс, Көнһылыу һатыу эше менән булашманы, егеттәр араһында күңел асыу булды бар шөғөлө, – ти.

Сауҙагәр донъяһын барып ҡараһа, ысынлап та, алма баҡсаһы ҡороған, малдары үлгән. Икенсе көндө мулла байға:

– Һинең ҡалған донъяң бер йылдан ҡороп бөтөргә тейеш, – тип әйтә. – Донъяң ҡороп бөтмәҫ борон, Көнһылыуҙың күҙен, ҡулын бәйләп урманға алып бар ҙа башын ҡылыс менән саптырып, миңә унын ҡанын килтереп эсерт, – ти.

Икенсе көндө сауҙагәрҙең ҡолсоһо* Көнһылыуҙы егерме саҡрымдағы урманға алып килә. Бында бер батальон һалдат тактика буйынса өйрәнеү үтеп йөрөгән була. Ҡолсо Көнһылыуҙың күҙен сисеп, ҡулын ысҡындырып, ҡылыс менән сабам тигәндә генә, бик әсе тауыш ишетелә. Был эште командир күреп торған булған икән. Йүгереп килеп, ҡолсоно туҡтата ла эштең рәтенсиратын һораша. Ҡолсо бөтәһен дә һөйләп бирә. Командир уйға ҡала. Уйлай торғас, бер ҡуян тотоп килтерә. Ҡолсо, командирҙың өйрәтеүенсә, ҡуянды һуйып, ҡанын ағыҙып алып ҡайтып, муллаға эсерә.

Көнһылыуҙы командир үҙенә алып ҡала. Улар бик татыу ғаилә ҡороп ебәрәләр.

## 140. Яуыз ҡарт

Борон-борон заманда бер әбей менән бабай йәшәгән, ти. Улар бөтә тирә-яҡҡа дандары сыҡҡан мәшһүр бай булған. Урамдары тулы мал, келәттәре тулы иген, һандығы тулы йыһаз да аҡса икән, ти... Уларҙың матурҙарҙың-матуры, һылыуҙарҙың-һылыуы, бар кешене таң ҡалдырырлыҡ бер генә бөртөк ҡыҙҙары ла булған, ти.

Бер ваҡыт хужаның ҡатыны, ҡапыл ғына ауырып, үлеп киткән. Хужа икенсе ҡатын алған.

Берҙән-бер көндө байҙарҙы бик йыраҡтағы нәҫелдәре саҡырып хат ебәрәләр. Хужалар йорттарына күршеләге бабай менән әбейҙе ҡалдыралар ҙа үҙҙәре ҡунаҡҡа китәләр.

Күрше бабайы Яуыз ҡушаматлы була. Яуыз бабай өйҙө лә ныҡлап ҡарап торорға, ҡыҙға ла күҙ-ҡолаҡ булырға ышандырып ҡала. Хужа бигерәк тә ҡыҙҙы ныҡ һаҡларға ҡуша:

– Еткән ҡыҙ, күп сығып йөрөмәһен, унын янына егет-елкенсәктәр килмәһен, – ти.

Кис етә, ҡараңғы төшә. Яуыз бабай менән әбей ҡуна китәләр. Күрше булыуына ҡарамаҫтан, был ҡарттың ҡыҙҙы ошо көнгә тиклем ныҡлап күргәне лә, яҡындан ҡарағаны ла юҡ ине, ти. Күргәс, ҡыҙҙың сибәрлегенә Яуыз бабайҙың һушы китә лә ҡыҙға ғашиҡ була, ҡыҙ менән һөйләшкеһе, уны ҡосаҡлағыһы килә. Ҡыҙ менән аулаҡ ҡалыу ниәте менән, бабай:

– Балаларға күҙ-ҡолаҡ булырһың, үҙебеҙҙең өйҙә ҡун, – тип ҡатынын ҡайтарып ебәрә.

Ҡарсыҡ, бер ни ҙә һиҙмәйенсә, ҡайтып китә. Ҡарсығы ҡайтып киткәс, бабай үҙенең мөхәббәте тураһында ҡыҙға әйтә.

Ҡыҙ, был һүҙҙе ишетеп, бөтөнләй аптырап ҡала. Унын өҫтөнә бер эҫе һыу, бер боҙло һыу ҡойолғандай була. Ҡыҙ ҡурҡыуынан үҙенең бүлмәһенә йүгереп инеп китә лә ишеген элә лә ултыра. Ҡарт төнө буйына ҡыҙҙың янына инергә теләй, ишекте дөбөрҙәтә:

– Яҡшылыҡ менән асмаһаң, ишекте ватып керәм, – тип ҡурҡыта.

Ишекте ватып керергә итһә, ишек бик ныҡ була, тиҙ генә ватылырлыҡ түгел, ти.

Яуыз бабай шулай һәр көндө килеп ҡуна ла һәр көндө ҡыҙҙы ҡурҡыта. Ҡыҙ бик ҡайғыра, ҡурҡа, ашауҙан яҙа, һаргая, ябыға. Тәҙрәнән күҙен алмай, аталарының ҡайтыуын көтә. Атаһына Яуыз бабайҙың этлектәрен һөйләп, унан тиҙерәк үс алдыраһы килә.

Яуыз бабай ҙа башһыҙ булмай. Ҡыҙын ҡурҡытҡаны өсөн, хужанан өлөш эләгәсәген белә. Бынан ҡотолоу өсөн, хәйлә уйларға тотона.

Бына бер ваҡыт, яҡшы аттарын уйнатып, ҡыңғырауҙарын ҡыңғыратып, хужалар ҡунаҡтан ҡайтып төшәләр.

Иң алдан Яуыз бабай ҡаршы йүгереп сыға ла тегеләр төшөртөшмәҫтән, ҡыҙға яла яғып, үҙ хәбәрҙәрен һөйләй башлай:

– Һинең маҡтаулы ҡыҙың бик боҙоҡ булып сыҡты, беҙҙең йөҙөбөҙгә ҡара яҡты. Һин мине хужа итеп ҡалдырһаң да, минең һүҙҙе тыңламаны, уйы егеттәрҙә булды, уларҙы саҡырып килтереп ҡунып йөрөнө, боҙоҡлоҡ итә торғас, хатта ябығып та бөттө, – ти.

Хужалар өйгә инеп ҡараһалар, ҡыҙ ябығып-һарғайып бөткән. Яуыз бабайҙың һүҙе дөрөҫкә сыға. Хужалар унын һүҙенә ныҡлап ышаналар ҙа ҡыҙҙан ҡотолоу юлын уйлай башлайҙар. Үгәй әсә үлтерергә өндәй. Атаһы быға риза булмай, аҙаштарырға кәңәш бирә. Ҡыҙҙы урманға алып барып ташлап китергә булалар. Атаһы ҡыҙҙы матур итеп кейендереп:

– Урмандарҙы күрһәтеп йөрөргә итәм, – тигән булып, атҡа ултыртып алып сығып китә.

Арбаға ярыҡ ҡаҙан, ярты табаҡ он, ярыҡ табаҡ, ярты ҡалаҡ тоҙ һалып алалар. Бик күп ваҡыттар барғандан һуң, әҙәм үтә алмаҫлыҡ ҡара урманға барып инәләр. Урман эсе буйлап күп ерҙәр барғандан һуң, бер ағас төбөнә туҡтайҙар. Атаһы ҡыҙына ошо ерҙә ҡаҙанын аҫып, ононан туҡмас ыуып, тоҙон һалып, аш бешереп торорға ҡуша.

– Ашың бешеп сығыуға, мин әйләнеп килермен әле. Мин яҡында ғына утын киҫә торайым, минең утын киҫкән тауыштарым ишетелеп торор, – ти ҙә атына ултыра ла китә.

Ҡыҙҙың атаһы бер бейек ағас башына имән туҡмаҡ аҫа ла үҙе ҡасып ҡайтып китә. Имән туҡмаҡ елгә бәүелеп ағасҡа таҡ-тоҡ, таҡ-тоҡ итеп бәрелеп тора, ти. Ҡыҙ аш бешерергә ҡуя,

атаһы һаман килмәй. Аш бешеп сыға, атаһы һаман да юҡ. Таҡ-тоҡ, таҡ-тоҡ итеп утын киҫкән тауышы ғына ишетелә. Көтә торғас, ҡыҙ арып бөтә, шомлана башлай ҙа тауыш ишетелгән яҡҡа килһә, ни күҙе менән күрһен – ағас башында бер туҡмаҡ аҫылынып тора, ти. Шуның тауышы балта тауышы булып ишетелгән икән. Ҡыҙ хәҙер эштең нимәлә икәнлегенә төшөнөп ала. Тәгәрәп-тәгәрәп илай ҙа бер яҡҡа сығып китә. Күпме генә йөрөһә лә, күпме генә тырышып ҡараһа ла, урман ситенә барып етә алмай. Һаман да шул бейек, эре ағастар. Ағас араһынан күк йөҙө саҡ-саҡ ҡына күренә. Ул ағас еләктәре, мәшкәктәр, бөрөләр ашап тамаҡ туйҙыра.

Бына берҙән-бер ваҡыт йыраҡта: «Һайт та һайт, һайт та һайт», – тигән тауыштар ишетелә.

Ҡыҙ шул тауыш ишетелгән яҡҡа китә. Эттәр эйәртеп, мылтыҡтар аҫып, һайтылдап ҡысҡырышып, ҡыҙҙың ҡаршыһына һунарсылар килеп сыға. Улар икенсе бер яҡта йәшәүсе бер бабайҙың уландары була. Ҡуян атырға һунарға сыҡҡандар икән. Ауылдарҙан бик йыраҡта булған был урманда бер ҡыҙ баланың килеп сығыуына һунарсылар бик ғәжәпләнәләр, бында нисек килеп эләгеүе тураһында һорашалар. Ҡыҙ баштан-аяҡ бөтәһен дә дөрөҫ рәүештә һөйләп бирә. Егеттәр, уны йәлләп, үҙҙәре менән бергә өйҙәренә алып ҡайтып китәләр. Малайҙарҙың ата-әсәһе был табып алған ҡыҙға үҙ балалары кеүек күреп, мәрхәмәт менән ҡарайҙар.

– Ниндәй матур, аҡыллы баланы ташлап ҡасырға намыҫы еткән ата ниндәй кеше икән, шуны күрһәң ине, – тип үҙ-ара һөйләшеп тә алалар.

Бер саҡ былар ҡыҙ тураһында бер нәмә лә белдермәйенсә, ҡыҙҙың аталарын, әбейе менән Яуызды ла ҡунаҡҡа саҡыралар. Ҡунаҡтар киләләр. Яҡшы мәжлес ҡорола. Мәжлес барған ваҡытта хужа:

– Минең бер етем хеҙмәтсе малайым бар, шуны индереп, ишеткән-күргәндәрен һөйләтеп алайыҡ әле, – ти.

Алдан һөйләшелгән буйынса, ҡыҙ хеҙмәтсе малай кейемдәре кейеп, ишек төбөнә генә инеп ултыра.

Малай:

– Ишеткәнемде һөйләһәм, буш булыр, күргәндәремде һөйләйем әле. Былай булды. Урманға барғанымда, атаһы тарафынан аҙаштырып ҡалдырған бер ҡыҙ бала осраттым, – тип үҙенең башынан үткәндәрҙе бөтә дөрөҫлөгө менән һөйләп бирә.

Ҡыҙ һөйләй килә, аталары эштең нимәлә икәненә төшөнә баралар, төшөнә баралар, ти. Шунан килеп ҡыҙҙы ла танып алалар ҙа, аңын-тоңон белмәйенсә, яуызлыҡ эшләгәндәре өсөн, ҡыҙҙарын ҡосаҡлап, түгелеп илайҙар. Шулай итеп, танышып, табышып бергә ҡунаҡ булалар.

Иртәгеһен ҡыҙ ҡунаҡтарға мунса яға, эҫе башларға Яуыз менән әбейен ебәрә. Улар барып алдынан мунса ташы өҫтөнә

бер ҡуш устай тауыҡ тиҙәге алып барып һала. Ҡарттар мунсаға ингәс тә, ҡыҙ ишекте тыштан йоҙаҡлай ҙа китә. Яуыз бабай менән әбейе шунда тонсоғоп үлә.

Ата-әсә менән осрашыу туй мәжлесенә әйләнеп китә. Ҡыҙҙы урмандан табып алып ҡайтҡан егеттәрҙең иң йәшенә кейәүгә бирәләр: улар шул көндән башлап бер-береһен яратып йөрөгән булалар. Бик яҡшы итеп туй үткәреләр. Ауылдағы бер кешене лә ҡалдырмайынса һыйлайҙар. Ҡыҙҙың атаһы менән әсәһе йәштәргә оҙон ғүмер, шатлыҡ менән бәхеттәр теләп, үҙҙәренә ҡайтып китәләр.

Кейәү менән ҡыҙ матур итеп донъя көтә башлайҙар. Улар әле булһа шулай донъя көтөп, йөн тетеп йәшәп яталар, ти.

## 141. Хажи ҡыҙы

Борон заманда йәшәгән, ти, бер бай. Уның бер улы, етеп килгән бик сибәр бер ҡыҙы булған, ти. Был бай бер көн улы менән хажға китергә уйлай, ләкин ҡыҙын ҡалдырып китер кешеһе юҡ, ти. Ышаныслыраҡ кеше итеп, ҡыҙын бер муллаға тапшырып, улы менән икәү юлға сыҡты, ти.

Мулла менән ҡыҙ бергә ашап-эсеп, бер йортта тора. Бер нисә көн үтеүгә, ҡыҙға күҙе төшөп, мулла төрлө хәйләләр ҡора башлай. Ләкин ҡыҙ уны һис бер яҡын килтермәй. Хәйләле уйҙарын ғәмәлгә ашыра алмағас, ахырҙа килеп мулла ҡыҙҙы ҡыҫмаҡҡа ала башлай. Ҡыҙ һаман ҡаршылаша. Түҙеме бөткәс, ауыл ситендәге бер ярлы ғына ҡарсыҡҡа барып, хәлен һөйләп бирә. Ҡарсыҡ уға өйөнә ҡайтмаҫҡа кәңәш бирә.

– Атайыңдар ҡайтҡансы, үҙемдә тороп торорһоң, – ти.

Ҡыҙ өйөнә ҡайтмай, шул әбейҙә тора башлай. Мулла был ҡыҙға асыу итеп, аталарына: «Ҡыҙығыҙ тамам аҙҙы, көн дә егеттәр килтерә. Ситтә ҡунып ята. Егеттәре тәҙрәләрҙе ватып бөттө», – тип хат яҙа. Атаһы хатты алып уҡый ҙа улына:

– Һин хәҙер ҡайт та ҡарындашыңды үлтер, күҙем күрмәһен шуны, – ти.

Егет ҡайта. Күрә, ысынлап та, тәҙрәләр ватылған, ҡыҙ өйҙә юҡ.

Мулла:

– Бына шулай аҙҙы. Хәҙер ҡайтмай ҙа башланы инде, ти.

Егет ҡыҙҙы эҙләргә тотона. Эҙләй торғас, таба ла ни эш менән килеүен һөйләп бирә. Ҡыҙ ағаһына:

– Минең һис бер гонаһым юҡ. Миңә мулла үҙе ҡыҙышты. Шуға мин бына ошо әбей янында һеҙ ҡайтҡансы тороп торорға булдым, – тип, башынан үткән хәлдәрҙе һөйләп бирә.

Егет һеңлеһен бик йәлләй, үҙе ни эшләргә лә белмәй: атаһының әмерен еренә еткерергә тейеш, еткермәҫ ине, атаһынан

ҡурҡа. Ахыр сиктә һеңлеһенә әйтә лә икәүләп ҡалын урмандар араһына инеп китәләр. Бик күп ерҙәр барғас, ҡара урман уртаһында ағаһы:

– Мин һине үлтерә алмам инде. Ҡулым бармай. Һине ҡыҙғанам. Һин ошо урманда ҡал. Иҫән ҡалһаң, ҡалырһың, иҫән ҡалмаһаң, үлерһең. Һин хәҙер беҙҙән айырылаһың инде, – ти ҙә ҡыҙҙың яңғыҙын ҡалдырып, урман араһына инеп юғала.

Ҡыҙ, ҡайҙа барғанын үҙе лә белмәй, бер яры сыға ла китә. Күп ерҙәр үтә, күп һыуҙар кисә. Бик асыға был. Ни тура килһә, шуны ашай. Өҫ-баштары йыртылып бөтә. Кеше күҙенә күренер ере лә ҡалмай. Бара торғас, арып, асығып, хәлдән тайҙым тигәндә, бер күл эргәһенә килеп сыға ла шуның эргәһендәге бер ағас башына менеп ултыра. Бер аҙ ваҡыт үткәс, был күлдә өйрәктәр атырға тип, бер һунарсы егет килә лә, ағас башындағы ҡыҙҙы күреп, уның ни икәнен белмәй, атырға итә. Ҡыҙ ҡысҡыра:

– Эй, егет, мине атма, мин әҙәм балаһы. Минең гонаһым юҡ, – ти. Егет аптырап китә лә:

– Улай булһа, төш, минең эргәгә кил, – ти.

Ҡыҙ уға:

– Минең өҫ-башым бик насар, йыртылып бөткән, төшергә оялам, – ти.

Өҫтөндәге кейемен һала ла егет, үҙе ситкә китеп тора. Ҡыҙ төшөп кейенеп, егет эргәһенә бара. Егет ҡыҙҙы күреп аптырап ҡала. Ҡыҙ иҫ киткес сибәр, ләкин үҙе бик ябыҡ, ти. Һунарсы егеткә ҡыҙ үҙенең башынан үткән ваҡиғаларҙы һөйләп бирә. Егет уны бик ҡыҙғана:

– Әйҙә, беҙгә ҡайтайыҡ. Мин һине һөйәм, үҙемә ҡатын итеп алам, – ти.

Ҡыҙ ҡаршы килә.

– Минең кеүек урмандан табылған кеше нисек һеҙгә тиң була алһын инде. Һеҙ, моғайын, бер ҙур кешенең балаһылыр әле, – ти.

Егет уға:

– Эйе, мин батша улы, – ти ҙә үҙенең теләген ҡабатлап әйтә.

Ҡыҙ аптырап тора-тора ла риза була.

– Ләкин ете йыл үткәс, ете көн дә тормай, мине атайымдарға илтеп күрһәтерһең, – тип үҙенең шартын да әйтә.

Егет риза була. Ҡыҙҙы алып ҡайтып тәрбиә ҡылдыра. Ашаттыра, эсертә, яҡшы тәрбиәләтә. Бер айҙай ваҡыт үтеүгә, ҡыҙ көрәгәп, таҙарып китә, донъяла тиңе булмаған сибәр ҡыҙға әйләнә.

Ошо ваҡытта аталары егетте саҡырып алып:

– Һин үҫеп еттең инде. Һине өйләндерергә ваҡыт. Беҙ һиңә фәлән батшаның ҡыҙын димләйбеҙ, шуны һиңә алып бирмәк булабыҙ, – тиҙәр. Егет аталарына ҡаршы:

– Минең яраткан ҡыҙым бар. Мин шуға өйләнер инем, – ти.

Аталарының ҡыҙҙы күргеләре килә. Егет үҙенең ҡыҙын бик яҡшы итеп кейендерә лә аталарына килтереп күрһәтә. Ҡыҙҙы күргәс, ата-әсә улдарының теләге менән килешмәҫкә сара тапмайҙар. Егет был ҡыҙға өйләнә. Улар бик яҡшы итеп тора башлайҙар. Быларҙың ике балаһы була. Батша улы генерал булып атаһына хеҙмәт итә, эше буйынса төрлө яҡтарға сығып йөрөй. Киткән һайын ҡатыны һағынып, көтөп алыр була. Ҡатыны йылды, көндө иҫәпләп кенә тора.

Бер ваҡыт быларҙың ҡауышыуына ете йыл тула. Ете йыл тулып, өс көн үтеп китә. Ире сәфәр сығып йөрөп, быны онотоп китә. Эшен бөтөрөп, бер көн ҡайтып килһә, бисәһе ҡаршы ла сыҡмай, өйгә инһә, өндәшмәй ҙә. Генерал бик аптырай. «Быға ни булды икән?» ти. Бисәһенән сәбәбен һорай – бисәһе өндәшмәй. Генерал инәлә башлай. Шунан һуң бисәһе уға әйтә:

– Ете йыл тулып уҙҙы, һин вәғәҙәңдә торманың, – ти.

Генерал ғәфү үтенә, эш менән онотоп ташлауын белдерә лә:

– Хәҙер илеңә оҙатам. Үҙем һаман да бара алмайым, мөһим эштәр бар. Тағы командировкаға китәм, – ти.

Эммә кем менән оҙатырға? Ышанысты кеше юҡ. Шунан батшаның бик хыянатһыҙ һаналған вәзиренә ышанып, ике балаһы менән карапта оҙатырға була.

Юлда был ҡатынға вәзирҙең күҙе төшә. Уңай ваҡыттан файҙаланып ҡалырға уйлай. Ҡатын һис яҡын килмәй. Вәзир төрлө хәйләләр ҡора, ҡурҡытып та ҡарай. Һаман эш сыҡмай. Ахыр сиктә был ҡатындың бер балаһын һыуға ташлай. Ҡатын һаман риза булмай. Икенсе балаһын да ташлай вәзир, тик һаман да эш сығара алмай. Иң һуңында был ҡатынға:

– Хәҙер үҙеңде һыуға ташлайым, – ти.

Ҡатын:

– Ташлаһаң, ташларһың инде, – тип һаман ҡаршы килә лә ҡотолоп булмаҫты һиҙгәс, ахырҙа: – ярай, риза булам. Мин хәҙер сисенәм, һуңғараҡ инерһең, – ти ҙә, бүлмәгә бикләнеп, сисенә лә эске күлдәксән генә һыуға ташлана.

Вәзир урап инһә, ҡатындың күлдәктәре генә ята, үҙе юҡ. Шунан һуң вәзир матростар менән бороло ҡайта ла батшаға, ҡатындың ире генералға:

– Теге ҡатын кеше затынан булмаған икән. Ике балаһын ашап бөттө лә, үҙе осоп китте, беҙҙән ҡасты, – ти.

Һыуға ташланған ҡатын бик күп йөҙөп баргас, ярға етә. Яр буйынан уҡ ҡуйы урмандар башлана. Ул ағастарға йәбешеп кенә сыға ла тағы урман буйлап китә. Үҙенең ҡайҙа барғанын да белмәй. Бара торғас, бер ҡалаға барып сыға. Ҡалаға инергә өҫ-башында юҡ. Аптырай. Ҡала эргәһенә килә лә башын ғына ҡалдырып юл буйындағы тиреҫкә күмелеп ята. Ошо ваҡыт

ҡаланың бер ҙур врачы командировканан ҡайтып килгәнендә, был башты күреп, туҡтай ҙа ҡарай. Ҡараһа – тере кеше башы. Врач һораша. Ҡатын мәсьәләне һөйләп бирә. Врач өҫтөндәге халатын һалып бирә лә был ҡатынды үҙе менән алып китеп, больницаға һала. Ҡатын ашай-эсә, ял итә, таҙарып китә.

Врач был ҡатынды яратыуын белдерә. Ҡатын ҡаршы килә, аҙаҡ ҡаса.

Тағы бик күп ер китә. Бара торғас, тағы бер ҡалаға барып сыға. Унда ҡала ситендәге бер ярлы ғына ҡарсыҡҡа инә лә ҡалала эш эҙләй башлай. Эҙләй торғас, бер байға һатыу эшенә инә. Бик яҡшы эшләй башлай. Халыҡ был ҡатынға ҡыҙығып, кәрәкһә-кәрәкмәһә лә килеп тора, тауарын һатып алып китеп тора.

Был ҡатын бер аҙ аҡса йыйып хәлләнә лә үҙенә генерал кейеме тектерә, унан ҡулына бер наган тотоп ала ла был ҡаланан сығып китә.

Бара торғас, ҡатын бер ҙур һыуға килеп етә. Кәмә һорай. Быға бер егет кәмә бирә. Был ҡатынды күреү менән уға егеттең күҙе төшә. Һыу уртаһына тиклем килеп етә лә егет кәмәне ишмәй, ҡатынды шаярта башлай, кәмәне сайҡалдыра. Ҡатын ҡапыл кеҫәһенән наганды сығара ла:

– Арьяҡҡа сығараһыңмы, юҡмы? – ти.

Егет шыр... Тиҙ-тиҙ генә кәмәһен ишеп, ҡатынды сығарып ебәрә. Бара торғас, ҡатын ире торған ҡалаға барып етә. Ҡалала батша: «Генерал кәрәк» тип белдереү тараҡҡан була, сөнки был ҡатындың ире генерал, уны ныҡ ратҡанға, уның тураһында яман хәбәр ишеткәс, ҡайғыһынан эсеүгә һалышып, бик яман алкоголикка әйләнгән ине, ти. Төрмәгә инеүсе лә, канау буйында ятыусы ла шул ине, ти. Был ҡатын, генерал кейемдәрен кейеп, батша генералы булып хеҙмәткә инә. Генерал булып эшләй башлағас, элекке ире менән төшкән карточкаларын табып ала. Табып алғас, уларҙы күбәйттерә лә, мөйөш һайын йәбештерергә ҡуша. Кем дә кем килеп ҡарап, уны таныһа, шунда уҡ тотоп алып хибескә ябырға әмер бирә.

Бер ваҡыт был ҡатындың аталары өйөндә ҡалған мулла был карточканы килеп ҡарап торһа, тотоп алып китәләр ҙә ябып ҡуялар. Ҡатын-генерал был кешене килеп ҡарай ҙа өндәшмәй. Унан һуң батшаның вәзире килеп ҡарай, уны ла ябалар. Кәмәлә сығарыусы егет тә тә килеп ҡарай, уны ла ябып ҡуялар. Ахырҙа был ҡатындың ире килеп, аптырап ҡарап торғанда, уны ла ябып ҡуялар. Бер көн ҡатын-генерал был кешеләрҙе хөкөмгә саҡырта. Иң әүәл мулланы саҡырта ла һораша:

– Һин был карточкаға ниңә ҡараның? Кемде таныйһың? – ти.

Мулла был ҡатындың аталарын алдап хат яҙыуынса яуап бирә.

– Был шул ҡыҙ булырға тейеш, тип тора инем, – ти.

Ҡатын:

– Алдайһың, оятһыҙ мулла, – ти ҙә шунда уҡ йөҙ ҡамсы һуғырға әмер бирә.

Мулла урынынан ҡалҡып та тора алмай. Унан һуң вәзирҙе саҡырта. Вәзир ҙә был ҡатын тураһында уның иренә, батшаға алдап әйткәненсә яуап бирә:

– Был ҡатын шул булырға тейеш бит, тип ҡараным, – ти.

Ҡатын быға ла йөҙ ҡамсы һуҡтыра.

Саҡырта врачты. Врач ваҡиғаны һөйләп бирә. Ҡатын-генерал:

– Һинең шулай ярҙам итеүең өсөн рәхмәт, әммә ләкин бынан былай һәр бер яратҡан ҡатынға улай ҡарама. Һәр бер матур ҡатын һинең ҡатының була алмаҫ. Бар, ҡайт, – ти.

Кәмәлә сығарыусы егеткә лә:

– Бынан былай осраған бер ҡатынға улай итмә. Бар, ҡайт, – ти.

Иң аҙаҡ үҙенең элекке ирен саҡырта ла шундай уҡ һорау ҡуя.

Ире йығыла ла китә, йығыла ла китә – бер һүҙ ҙә әйтә алмай, был ҡатынды танымай ҙа. Ҡатын уны яңынан ялтырып ҡуя.

– Аҙаҡ килерһең, – ти.

Шунан ҡатындар кейеме кейә лә ирен тағы саҡырта. Эскесе генерал бисәһен таный ҙа иҫһеҙ булып йығыла. Унан һуң иҫ йыйып, һөйләшәләр, аңлашалар ҙа ҡабаттан ҡушылып өр-яңынан рәхәтләнеп тора башлайҙар.

# IV. МӘКЕРҘӘР, ТАРАТАР ҺӘМ ҠЫЙЫУ ҠЫҘҘАР

## 142. Мәскәй

Борон заманда аҙмағанды аҙҙырып, туҙмағанды туҙҙырып йөрөүсе бер мәскәй булған, ти. Бер заман бер ҙур ҡалаға инеп кенә бара ине, бик сәйер шыңшып килгән бер шыҡһыҙ малайға тап булды, ти, был. Мәскәй малайҙан:

– Йырлауыңмы был һинең, илауыңмы? – тип һораны, ти.

– Илауым, – тип әйтте, ти, малай.

– Һин ниндәй малай булаһың һуң? – тип һораны, ти, мәскәй.

– Шайтан малайы булам, – тип әйтте, ти, малай.

– Ниңә илайһың?

– Көн дә иблис туҡмай, шуға илайым.

– Ниңә туҡмай һуң?

– Ошо ҡаланың батшаһын аҙҙыра алмаған өсөн. Батша ҡатыны менән бик татыу тора. Был эш иблискә бер ҙә оҡшамай. Шуға мине көн дә батшаны аҙҙырырға ебәрә. Аҙҙырып та, туҙҙырып та булмай, бына шунан иблис мине хәлдән тайғансы туҡмай, әҙерәк хәл инә башлаһа, йәнә батшаға ебәрә. Ҡайтһам, тағы туҡмап һалып ҡуя.

Мәскәй:

– Шуны ла булдыра алмаһаң, шайтан булып йөрөүең ҡороһон! – тине лә төкөрөнөп ҡуйҙы, ти. Шунан һуң: – Бар, өйөңә ҡайт, шайтан малайы, батшаны үҙем аҙҙырырмын, кәрәк булһа, туҙҙырырмын да! – тип әйтте лә ҡалаға инеп китте, ти.

Мәскәй батша янына инде лә, әйтер һүҙен әйтә алмаған булып, илай башланы, ти. Батша:

– Ниңә илайһың, әбей? – тип һораны, ти.

– Бик насар хәбәр, иллә-мәгәр, насар булһа ла, ысын хәбәр алып килдем, шаһым-солтаным, шуның өсөн илайым. Ауыр

булһа ла, әйтәйем инде, ҡатының үҙеңде үлтереп, баш вәзиреңә кейәүгә сығырға итә, – ти мәскәй.

Тәүҙә батшаның быға бер ҙә ышанғыһы килмәй тора. Ләкин мәскәй уны бик тиҙ үҙ яғына ауҙара.

– Ышанмаһаң, батшам, үҙең һынап ҡара, бөгөн төндә йоҡлаған булып ят, ләкин бик һаҡ бул. Бына шунда күрерһең инде ҡатыныңдың кем икәнлеген, – ти ҙә мәскәй сығып китә. Сыға ла батшаның ҡатыны янына инеп, әйтер һүҙен әйтә алмаҫ булып, илай башлай.

Батша ҡатыны:

– Ниңә илайһың, әбей? – тип һорай.

– Бик насар хәбәр, иллә-мәгәр, насар булһа ла, ысын хәбәр алып килдем һиңә, шуның өсөн илайым. Ауыр булһа ла, әйтәйем инде, батша һине үлтереп, өлкән вәзиренең ҡатынын үҙенә алырға итә. Улар әллә ҡасандан бирле ирле-ҡатынлы булып торалар инде, һин генә белмәйһең уны, – ти мәскәй.

Тәүҙә батша ҡатыны быға бер ҙә ышанғыһы килмәй тора. Ләкин мәскәй уны ла үҙенә тиҙ ҡарата.

– Әгәр батша үҙеңде үлтереп, өлкән вәзиренең ҡатыны менән рәхәтләнеп тормаһын тиһәң, батшаңды ул ҡатындан тамам биҙҙерергә кәрәк, гишҡын баҫырға кәрәк, – ти мәскәй.

– Быны нисек эшләргә һуң? – ти батша ҡатыны.

– Бының өсөн бер генә әмәл бар, – ти мәскәй, – ирең йоҡлап ятҡанда, һиҙҙермәй генә уның өс бөртөк һаҡалын ҡырҡып алаһың да иртә менән ашҡа ҡушып үҙенә ашатаһың. Бына шунан һуң инде һин күр ҙә мин күр: батша һине генә өҙөлөп яратыр, теге вәзир бисәһенә ҡарарға ла ерәнер.

Мәскәй шулай тип әйтте лә сығып китте, ти.

Төн еткәс, батша ҡатынынан ҡурҡып, ҡатыны батшанан ҡурҡып яттылар, ти. Батша йоҡлаған кеше булып ятты, ти. Бер ваҡыт ҡатыны түшәгенән шым ғына торҙо ла ҡайсы алып, батшаның өс бөртөк һаҡалын ҡырҡып алмаҡ булды, ти. Быны күреп,батша, был мине, ысынлап та, сәнсеп үлтерергә итә икән, тип һикереп торҙо ла тиҙ генә ҡылысын ала килеп, ҡатынын сабып үлтермәк булды, ти. Ҡатыны шул арала тәҙрәнән тышҡа һикерҙе, ти.

Шул һикереүенән батша ҡатыны кире әйләнеп инмәй, атаһы янына ҡайтып китә. Атаһы күрше илдең батшаһы ине, ти. Батша ҡыҙының зарын тыңланы ла, намыҫланып, үҙенең кейәүе булған батшаға ҡаршы һуғыш асты, ти.

Яуыз мәскәй арҡаһында башланған был һуғыш ете йыл буйы барҙы, ти. Бик күп кеше һәләк булды, бик күп ҡан ҡойолдо, ти, был һуғышта.

## 143. Кеше һүҙе кеше үлтерә

Элек бер әбей менән бабай йәшәгән. Уларҙың балалары булмаған. Байлыҡтары мул икән. Ҡартая башлағас, үҙҙәрен ҡарарға, үлгәс, байлыҡтарын ҡалдырырға кеше табырға уйлағандар. Шулай эҙләй торғас, күрше ауылдан былар бер тол ҡатын таптылар, ти. Ҡатын бик егәрле, таҙа ине, ти. Көнделдәренә оҡшаны, ти. Әбей менән бабай быға:

– Беҙ үлгәс, донъя һиңә ҡала, беҙҙе тәрбиәлә, – тинеләр, ти.

Байтаҡ йылдар үткән. Ҡарттар, тәрбиәле булғас, йәшәй биргәндәр. Ҡарттар һаман үлмәгәс, ҡатын уйлана башлаған. Үҙенең башы етмәгәс, бер ҡарсыҡҡа барып, кәңәш иткән был. Ҡарсыҡ:

– Бабайыңа: «Һинең ҡарсығың кеше менән йөрөй бит», – тип әйт. Әбейеңә: «Бабай кеше менән йөрөй бит», – тип әйт, – тигән, ти.

Был ҡатын ҡайтҡан да тәүҙә әбейгә әйткән. Әбей һорай икән:

– Ни эшләргә һуң?

– Бабай йоҡлағас, һаҡалын ҡырҡып ал да, яндырып, көлөн бөтә тәненә ышҡырһың. Шулай итһәң, бабай һине һис ташламаҫ, – тигән.

Бабайға былай тигән:

– Бабай, әбейең өҫтөңдән икенсе кеше менән йөрөй, һаҡлан, һине үлтерергә итәләр, – тигән.

Бабай һаҡланып ҡына йоҡлап ята. Бына бер саҡ әбей бысаҡ ала ла бабайҙың һаҡалын ҡырҡырға итә икән. Шул ваҡыт бабай, мине салмаҡ була икән был, тип һикереп тора ла ҡарсығын үлтерә лә ташлай.

Ҡатындың туғандары килеп, апайҙарын үлтергән өсөн, үлемгә-үлем, тип бабайҙы ла үлтерә.

Шулай итеп, донъяга теге ҡатын хужа булып ҡала.

## 144. Кеше менән шайтан

Борон заманда бер шайтан булған. Ул шайтан кешеләргә дошман булып, уларҙы үҙ-ара һуғыштырып йөрөй икән, ике кеше дуҫ булһа, уларҙың араһын боҙоп, дуҫлыҡтан айырырға тырыша икән. Ул шайтандың [illegible]р эше шул булған.

Бер ваҡыт был шайтан бер һуҡыр менән бер һаңғырауҙың дуҫ булғанын күрә. Улар шундай дуҫтар, ти, һыу ҡойоп та айырырлыҡ түгел, ти. Шайтан уларҙың да араһын боҙмаҡсы була. Тик эше һис ыңғайламай, ти. Шайтан бөтә оҫталығын һалып ҡарай – юҡ, булмай, ти. Ул тырышҡан һайын, һуҡыр менән һаңғырауҙың дуҫлығы арта ғына бара, ти. Аптырай шайтан.

– Ғүмерҙә быңдай эш күргән юҡ ине әле, – тип, ни эшләргә белмәй, ти.

Шулай аптыраған-аптыраған да үҙе кеүек кеше араһын боҙоусы бер кешегә кәңәш итеп ҡараған.

– Әгәр шул һуҡыр менән һаңғыраулың араһын боҙһаң, ни һораһаң, шуны бирермен, – ти.

Теге кеше шайтандан шул һүҙҙе ишеткәс:

– Шулмы инде һинең шайтанлығың? – ти, – мин уларҙы бер күреү менән һуғыштырырмын, бер-береһен күрә алмаҫлыҡ итеп һыуындырырмын, – ти.

Шайтан тағы аптырай. Теге кеше шайтанды эйәртеп, һуҡыр менән һаңғырау янына бара. Үҙе шайтанға:

– Эй, һин, шайтан, ҡарап тор. Бына мин уларҙы нисегерәк ыҙғыштырам! – ти.

Бара ла был һаңғырауҙы тышҡа саҡырып сығара. Сығара ла, өйгә ишетелерлек итеп, ҡолағына ҡысҡыра:

– Һуҡыр иптәшең өйҙәме?

– Ул нимәгә кәрәк? – ти һаңғырау.

– Ул кәрәген кәрәк түгел, һин булһаң да ярай.

Былар ни һөйләшәләр икән тип, һуҡыр эстә тыңлап ултыра, ти.

– Мин һеҙгә бик ҡиммәтле бүләктәр бирәм. Уларҙың береһен үҙеңә ал, береһен иптәшеңә бир. Икегеҙгә лә ғәҙел итеп, тигеҙ бүлешеп алығыҙ, – ти теге кеше.

– Ярар, ярар. Кешенеке миңә кәрәкмәй. Тапшырырмын, – ти һаңғырау.

– Мә, улайһа, быныһы үҙеңә, быныһы һуҡырға, – тип, теге кеше быны уңлы-һуллы сәпәкләгән, ти.

Һаңғырау өйгә башын тотоп килеп инә. Һуҡыр аҡ һалған күҙҙәрен бысҡылдатып бер асып, бер йомоп:

– Ҡайҙа, ҡайҙа, килтер, дуҫ, теге кеше ни бүләк итте? – тип түҙемһеҙләнеп һорай. Һаңғырау:

– Нимә бирһен? Бер ни ҙә бирмәнсе, – тигән.

– Юҡты һөйләмә, алдашма. «Берҙе үҙеңә, икенсеһен иптәшеңә бир», тип әйтте бит. Мин ишетмәгән икән, тиһеңме? Ишеттем. Ниңә бирмәйһең? Бир, – тип даулаша. Һаңғырау:

– Эй дуҫ, һиңә ул биргәнде бирһәм, асыуланырһың бит, белмәй һорап, быуынды ҡыраһың! – тип ҡарай, ти.

Юҡ, һуҡыр алдына алғанын ҡуймай, ти:

– Бирмәһәң, асыуланам, йә, йә, бир, – тип быға ынтыла ла башлай.

– Улай бик тә һорағасың, бирәйем инде, – тип кирелеп тороп, һуҡырҙың яңаҡ төпкә тондорҙо, ти, һаңғырау. Һуҡыр:

– Ә-ә-ә? Иптәш, һин мине үлтерергә итәһең икән әле, үлтереп бүләкте үҙең генә алмаҡсы икәнһең әле, туҡта әле! – тип тегегә барып йәбешә.

Былар ысынлап һуғыша башлайҙар, ти.

Һуғышып-һуғышып, хәлдән тайҙылар, ти. Шулай итеп, дуҫлыҡтан бер нәмә лә ҡалманы, ти.

Ситтән тамаша ҡылып торған шайтан:

– Кешенең яуызлығы минекенән яман икән, – тип бот сабып аптыраны, ти.

## 145. Бабай менән әбейҙең байып киткәне

Бик фәҡирлектә, бик аслыҡта бер бабай менән әбей йәшәгән, ти. Донъялары ла бик наҡыҫ ине, ти. Балалары ла булмаған быларҙың. Зарланышып ҡына көн артынан көн иткәндәр, ти. Көтөп, көтә торғас, бер заман әбейҙең малайы тыуа. Әбей менән бабай шатланышып бөтә алмай. Күҙ ҡараһындай һаҡлап, ауыҙҙарынан өҙөп, нисек кәрәк шулай, малайҙы үҫтерәләр. Ҡартлығыбыҙҙа таяныс булыр, беҙҙе ҡарар, тип тырышалар. Малай шат күңелле, таҙа булып үҫә. Егет ҡорона инә. Шунан ата-әсәһен йәлләп (ҡартайғандар бит инде) уларға ярҙам итмәксе булып эш эҙләргә сығып китә. Ҡарттар илашып оҙатып ҡалалар. Егет ауылдан ауылға йөрөй, бер байҙан икенсеһенә керә, әммә ярлылар күп булғанға уға эш ҡалмаған, ти. Шунан бер заман был баҙарға барып сыға. Баҙарға барып сыҡһа, бер йыуан ҡорһаҡлы бай кешеләрҙе эшкә саҡыра икән:

– Кем дә кем минә эшкә яллана, шуға күп иттереп аҡса бирәм. Эш еңел, аҡсаһы күп. Тик урманда, йыраҡта, – тип ҡысҡыра икән.

Уның янына ярлы-ябаға йыйылып киткән. Тик бай йәшерәктәрҙе, көрөрәктәрҙе һайлап ала икән. Һөйләшеп, аҡса бирә лә икән:

– Бар, өйөңә ҡайтып кил, хушлаш. Минең менән барһаң, тағы ла күберәк алырһың, – ти икән. Эшһеҙ, ас ярлы-ябағаға оло шатлыҡ инде был хәл. Беҙҙең егет тә барып, һөйләшеп байға эшкә ялланған. Күп итеп аҡса алып ҡайтып, ата-әсәһенә ҡалдырған да, уларҙы илатып, хушлашып сығып киткән.

Барһа, кеше йыйылған, арбаларға тейәлгән, ти. Был егет тә барып ултырған. Юл оҙон, урман аша үтә икән. Кешеләрҙе арыттырмайса, туҡтай-туҡтай алып баралар, ти. Туҡтаған һайын ҡаҙан-ҡаҙан ит бешерәләр, май бирәләр икән. Бай үҙе һыйлай икән. Әлеге шул ярлы – намыҫлы бит инде. Күбеһе:

– Бушҡа ашамайбыҙ, – ти. Бай:

– Барған ерҙә эш ауыр. Урман эше, хаҡын тулыһынса шунда ҡайтарырһығыҙ, – ти икән. Ул шулай тигәс, ялланған кешеләр әйҙә һыйланған. Күбеһе апаруҡ көрәйеп, мандып та киткән. Байҙар ише, ҡорһаҡ һыпыра башлаған, ти. Хужаға был оҡшай икән.

Шунан бер көндө барыр ерҙәренә килеп еткәндәр былар. Унда матур-матур рәшәткәле, һарай һымаҡ йорттар ултыра, ти. Кешеләрҙе амбар һымаҡ ергә алып барып япҡандар:

– Эш башларға иртә әле, ял итегеҙ, – тигән бай.

Һый һаман элеккесә: табаҡ-табаҡ ит, ҡымыҙ, ти. Егет бер көн, ике көн түҙгән, өсөнсө көнөнә эшһеҙлектән ялҡып, амбар буйлап киткән. Эй оҙон, ти, был. Ике яҡлап килә һикеләр, һикеләрҙә һимеҙ-һимеҙ кешеләр, ти. Һәр ишек артында шундай хәл, ти. Урындарынан торалмай, һөйләшалмай ҙа ултыралар.

Егет шулай көн дә күҙәтә башлаған, ти. Теге ашарға килтергән кешеләр көн дә иртән килеп, ашатып, иң һимеҙ кешеләрҙе һайлап алып сығып китәләр икән. Егет тегеләрҙең ҡайҙа киткәндәрен күҙәтеп торған да эйәреп барырға итһә, уны ҡыуып ебәргәндәр, ти. Бик оҙаҡ бикләнеп ятҡанға, ата-әсәһен уйлап ҡайғырғанға, егет бер ҙә һимермәгән. Шуға уны бер көн килеп хеҙмәтселәр үҙҙәре менән алып киткән. Егетте урамда аҫылған ҙур-ҙур ҡаҙандарға утын киҫеүсе итеп ҡуйғандар. Ул урман киҫкән, бер бабай уның киҫкән утынын шул ҡаҙан аҫтарына яғып торған, ти. Бабай бер ҙә һөйләшмәҫ кеше икән, ти. Шулай бер заман ата-әсәһен иҫкә төшөрөп егет ауыр һулап алған да шул турала һүҙ ҡушҡан. Бабай был егеткә аптырап ҡарап торған да былай тип әйткән, ти:

– Эй, улым, һин бында ғүмерлеккә эләккәнһең инде. Бынан ҡотолоу юҡ. Тирә-яҡта һаҡсылар ҡасҡан кешене тотоп торалар. Мин дә йәш саҡта ҡасам, тип, ошо хәлгә ҡалдым, – тип һөйләгән, ти. Бабай имгәтелгән булған икән. Аяҡтары йөрөмәй, ти. Шуға усаҡ янынан бик йыраҡҡа китмәй икән. Көндәр үтә, егет һаман ағас ҡырҡа. Шунан бер заман, бабайҙан айырып, уны икенсе эшкә ҡушҡандар. Ул ағас соҡоп кәмә һымаҡ һауыт эшләй башлаған. Тик бөтәһе лә ҡапҡаслы, ун ике тишекле икән, ти. Шунда бабайҙың һөйләгәне иҫенә төшә.

Шулай бер көн ул, ағас һайлап, кешеләр гелән аҡырған яҡҡа китмәксе була. Барһа, ни күҙе менән күрә, береһенән-береһе ябыҡ эшселәр, ҡараңғы ағас төптәрендә соҡорҙа йыландар ажғырып тора, ти. Шунан кешеләр килгәнен күреп, егет тиҙ генә йыуан ағас башына менеп ултыра ла бында ниндәй эш ҡылына икән, тип, күҙәтергә ултыра. Хеҙмәтселәр бер һимеҙ кешене (ул үҙе атлап та йөрөй алмай) килтереп, теге кәмә һымаҡ нәмәгә килтереп һалғандар ҙа өҫтөн ҡаплағандар. Ә теге ун ике тишектең һәр береһенән йылан тыҡҡандар. Теге кеше аҡырып ебәргән. Баҡһаң, теге йыландар уның майын кимерәләр икән. Егет күҙенә аҡ-ҡара күренмәй, тороп сапҡан бабай янына.

– Нишләтәләр уларҙы, нишләп улай? – ти икән.

Бабай һөйләп биргән.

– Аҙаҡтан ул йыландарҙы ошо ҡаҙандарға һалып ҡайнаталар ҙа иң һәйбәт һабын эшләп иң бай әҙәмдәргә, батшаларға ебәрәләр икән. Ошолай һәр ваҡыт кешеләр килтереп торалар, бынан еҫле һабын ебәреп торалар. Ә ҡасып сығыр юл тик бер генә, һеҙ килгән ҡарурманда, – тигән. Нисек бынан ҡотолорға, тип егет бер нисә көн баш ватҡан. Бабайға ла һөйләгән. Тәүҙә күңеле бер ҙә тартмаған бабай ҙа хатта ышанған бығa (тыуған илен бик күргеһе килгән инде). Шунан ул әйткән егеткә:

– Һин кешеләрҙе килтергәс, кире киткәндә, шул арбалар артынан китерһең. Тик алдан утын әҙерлә лә, мин һинең урынға усаҡ янында булһа ла балта менән ағасҡа һуғып торормон. Һин эшләй икән тип белһендәр.

Егет шулай иткән дә. Арбалар артынан барып, ағастарға билдә яһай икән. Кире икенсе көндөң таңына ғына әйләнеп ҡайтҡан. Шунан уңайлы ваҡыт табып, бабайҙың таныш хеҙмәтселәре менән байҙың иң яуыз хеҙмәтселәрен юҡ иткәндәр. Тотҡондағы кешеләрҙе сығарып, уларға бөтәһен һөйләп биргәндәр, тегеләр илашалар, ти. Шунан балталар менән ҡоралланып киткәндәр байҙың өйөнә. Ундағы һылыу ҡыҙҙарҙы ҡотҡарып, байлыҡты бүлешеп алғандар.

Байҙың үҙенә ул үлтергән кешеләрҙең яҙмышын күрһәтергә тигәс, бай ялына башлаған. Бөтөн байлығын сығарған:

– Тик ҡотҡарығыҙ! – тип әйтә, ти. Ләкин шул тиклем кешенең башын ашағас, уны йәлләмәгәндәр...

Ҡайтыр юлға сыҡҡандар.

Егеттең ҡайтыуына өмөт өҙгән ата-әсәһе инде ныҡ ауырып, асlыҡтан үлем хәленә еткән булғандар. Улдары байып ҡайтҡас, уларға хәл кереп киткән. Үҙе менән нимә булғанды егет бер кемгә лә һөйләмәгән, тик үҙ яғындағы байҙарҙы бөлдөрөп, бөтәһен дә ҡыуған. Уларҙың бөтмәҫ байлығын ярлыларға биргән. Үҙе шул урында ғәҙел батша булып киткән. Ярлы-фәҡиргә ярҙам иткән. Бабай менән әбей улдарына өйрәтеп торғандар. Улдары ир уртаһы еткәс, үлеп киткәндәр, ти.

## 146. Ярлы егет менән завод хужаһы

Борон бер бай булған. Ул завод тотҡан, ти. Бының заводында әллә ике-өс йөҙ, әллә биш йөҙгә яҡын эшсе эшләгән. Бай торған урындан утыҙ саҡрым тирәһендә йөҙҙән артыҡ дисәтинә ере лә булған. Ул ерҙәр урман да баҡса ине, ти. Бай шунда мал, ҡорт тота. Унда ла эшсеһе күп ине, ти.

Шул рәүешле бай йәшәп ята. Бының яңы ғына донъяға килгән бер генә ҡыҙы бар ине, ти. Шул ҡыҙҙы былар һәр бер картсенән, үткән-һүткәндән дә кәрт һалдырып ҡараталар, күрәҙгә лә күрһәтәләр. Бөтә ҡараған кеше лә:

– Быны бер бик фәҡир кеше ала бит, – тиҙәр.

Бай аптырай, бисәһе аптырай:

– Ошо хәтле заводтар, мал, ер тотоп, ярлы кешегә нишләп бирәйек беҙ? – тиҙәр.

Ҡыҙ хәҙер өс-дүрт айлыҡ булды, ти. Йәше лә тулып килә, ти. Бай күрәҙәлек ҡылғандың береһен тота:

– Ярлының ҡайҙан икәнен белмәйһегеҙме?

– Йөрөп киләйем, белерем, – ти уныһы.

Йөрөп килде, белеп килде, ти.

– Бер ауылдың ситендә генә, заводыңа ун саҡрым ерҙә таптым ул баланы, – тип әйтте, ти, кире килеп.

Был бай ул баланы барып алмаға итә үҙенә. Күрәҙә байҙы теге кейәү булаһы малайҙың ауылына алып барҙы, ти, күрһәтте лә, ти, үҙе ҡасты, ти. Бай керҙе, ти, иҫәнләште, ти, өй эсе фәҡир генә, ти. Иҙәне ер, насар. Ғаилә ҙур, әллә ун икеләп бала, ти, араларында ҡыҙҙар ҙа бар, ти. Хужаның һуңғы балаһын һорай:

– Миңә һатығыҙ, – ти.

Былар:

– Баланы һатмайбыҙ, һатһаң, ул беҙҙеке булмай, һеҙҙеке була. Күп булһа ла, бала ата-әсәнән артмай ул, – тиҙәр.

– Мин уны уҡытырмын, – ти бай. – Аҙаҡ урыныма ҡуярмын. Бала һеҙҙеке булып ҡалыр, – ти. – Һеҙгә хәҙер үк аҡса бирәм, – ти.

Ул ваҡытта аҡса ҡыйбат инде.

– Хәҙер мин ошо бала өсөн мең ярым һум аҡса бирәм, – ти, килешеп.

Аҡса бирҙе лә, ти, баланы алып та китте, ти, был. Алып ҡайта ла баланы арлы-бирле иттереп тамағын туйҙырҙы ла бер әрйә яһатты, ти. Үҙенең эргәһенән генә, Иҙел һыуы шекелле һыу аға, ти. Әрйәгә һалып шул һыуға баланы ташланы ла ебәрҙе, ти. Китте, ти, әрйә. Ағып китеп ултыра, китеп ултыра. Утарҙағы кешеләр быны күрәләр бит.

– Бер аҡ нәҫтә ағып килә!

– Һандыҡ, һандыҡ! – тип ҡысҡырышалар, ти.

Эсендә ни икән тип, йүгерешеп сыҡтылар, ти. Утарҙың управляющийы кәмә менән барып тотоп, алып сыҡты, ти. Асып ҡараһа – бала. Сығарҙы, ти, управляющий был баланы. Бала матур, ҡарап туйғыһыҙ таҙа, ти.

– Әйҙә аҫрайыҡ.

– Әйҙә, барыбер беҙҙең ир балабыҙ юҡ, – тип бисәһе менән кәңәш итештеләр ҙә, ти, аҫрарға алдылар, ти. Теге йәшникте инде ҙур келәткә индереп, өрлөккә аҫа ла ҡуялар.

Ир бала үҫте, ти, егерме йәшкә етте, ти, хәҙер. Таҙа егет булып сыҡты, ти. Уҡыттылар, ти, быны. Был егет үҫеп еткәс, әлеге бай ни йомош менәндер келәткә инә. Әлеге һандыҡты

күрҙе бит инде был. Хәҙер асҡан да ҡарап тик тора, ти. Управляющийын саҡырып ала:

– Кил әле, кил. Быны ҡайҙан алдың?

– Эй, хужа, әйтергә онотҡанмын. Иҫтән сыҡҡан бит. Егерме ике йыл була инде быны тотоуға. Эсенән бер бала килеп сыҡҡайны, – тип көлгән булды, ти, управляющий. Тегеләә көлкө ҡайғыһы юҡ, ти, аптырай, ти, бай.

– Ул бала ҡайҙа әле ул? – ти.

– Анауы килгән егет шул була инде, – ти управляющий.

Аптыраны, ти, бай: берәме көслө егет, ти, теге, торғаны бәһлеүән, ти. «Ә-ә-ә, шулай икән», – тип эскә һалып ҡуйҙы, ти, өндәшмәне, ти. Шунан был ҡәләм, ҡағыҙын сығарып хат яҙа ла теге егеткә тоттора.

– Минең йортто беләһеңме? – ти.

– Беләм.

– Белһәң, бына тот ошоно, минең ҡатынға алып барып бир, – ти бай.

Хатында: «Килеп кереү менән, был егетте, бер нәмәгә ҡарамай, үлтерт, – тип яҙған була. – Мин бер өс көнһөҙ ҡайтмам, мин ҡайтыуға был бала булмаһын». Егет алып китә хатты. Байҙың һүҙҙәрен бер бик шәп егет тыңлап торҙо ла, ти, китте, ти, теге егет артынан. Ҡыуып етте, ти:

– Туҡта, егет, ҡайҙа бараһың?

– Ваҡыт юҡ. Туҡтарға ҡушманы хужа. Тиҙерәк барып етергә кәрәк.

– Тороп тор, тороп тор, бергә барырбыҙ. Ни апараһың? Әллә берәй нәҫтә апараһыңмы?

– Бына хат бирҙе хужа, мин шуны алып китеп барам.

– Тороп тор, бергә барайыҡ, тим бит. Бына миңә лә бирҙе. Мин дә барам. Ҡайҙа ҡарайыҡ әле, ни тип яҙған икән. Иплэп кенә ҡарайыҡ.

– Юҡ, хужа ҡушманы.

Теге кеше үҙенекен аса ла, уҡып ишеттереп кире бикләй.

– Ҡайҙа, һинекен ҡарайыҡ әле.

Егет бирә. Был алып ҡарай ҙа: «Барып төшөү менән ошо егеткә ҡыҙҙы бир. Мин ҡайтҡансы, бөтөн кешене йыйып, никах уҡытып, туй яһарға әҙерләнеп тор», – тип яҙып, егеткә тоттторҙо, ти.

– Бына хәҙер булды. Әйҙә, киттек, – тине, ти.

Китәләр. Был егет хатта шәп атлай. Хатты төҙәткән кеше ҡала бара, ҡала бара. Шунан ул:

– Һин бик ҡурҡаһың икән, шәп бар, әйҙә, – ти ҙә бөтөнләй тороп ҡала.

Алдан китте, ти, егет. Барып керҙе лә, ти, бирҙе, ти, теге байҙың ҡатынына әлеге хаты. Уҡып ҡараны, ти, ҡатын мисәтте асып. Арлы-бирле ҡаранды ла, ти:

– Йә, нишләргә инде, ҡыҙҙы бирергә ҡушҡан бит, – тине, ти.

Бер өс-дүрт кеше индерҙе лә никах уҡытып, сәй эсерҙе лә ҡыҙҙы бирҙе лә ҡуйҙы. Әлеге егет ҡыҙҙы алды, ти.

Бер көн уҙҙы, ике көн уҙҙы, өс көн. Ҡайтып килде, ти, бай. Ул ваҡыт ат бит инде, машина юҡ. Ҡатын йүгереп сыҡты, ти:

– Йә, хат алдыңмы?

– Алдым.

– Эш булдымы?

– Булды.

– Рәхмәт! Маладис! Һуң мин яҙғансамы?

– Һин яҙғанса.

– Ярар. Ә ҡайҙа ҡуйҙығыҙ уны?

– Ҡайҙа тип ни, бында, өйҙә ҡыҙ менән бергә.

– Ҡыҙ менән бергә?! Мин шулай яҙғанмынмы ни? Бар, килтер хатты!

Хатты уҡып ҡарай: «Барып төшөү менән ошо егеткә ҡыҙҙы бир. Мин ҡайтҡансы, бөтөн кешене йыйып, никах уҡытып, туй яһарға әҙерләнеп тор». Ҡултамға үҙенеке, мисәт үҙенеке. Нишләргә лә белмәй бай. Ҡалтыранды, арлы-бирле итте, ти. Ҡатынға ла бер һүҙ әйтергә ярамай бит инде. Ашап-эсеп тә торманы, йүгерҙе, ти, заводҡа.

– Бына бөгөн, – ти, – ун ике тулып беренсе киткәс кем килә, завод утына ташлағыҙ, – ти. – Мин килһәм, мине лә ташлағыҙ, – ти эшселәренә.

– Һине ташлаһаң, эш ҡалай була һуң? – тиҙәр тегеләр.

– Ташлағыҙ!

– Дөрөҫләп, ҡулыңды ҡуй.

Ҡултамғаһын бирҙе, ти.

– Беҙ һине ташламаһаҡ, аҙаҡ үҙебеҙҙе ташларһыңмы?

– Ташлармын, – тип ҡурҡытты ла сыҡты ла китте, ти, был хәҙер.

Теге эшселәр кәңәш итте: «Бында ниндәйҙер хәйлә бар. Аң булырға кәрәк», – тинеләр, ти.

Бай ҡатынына әйтте, ти:

– Заводты тикшермәгә кейәүҙе ебәр, – тине, ти.

Кейәү бармаға итә. Бай ҡатыны кейәүгә нығытып әйтә:

– Кейәү, бар. Сәғәт беренселә эшен тикшер, – ти.

Бай ҡатыны бара ла сәғәтте һаман артҡа ебәрә, артҡа ебәрә. Ә бындағы «заводтағы» сәғәт дөрөҫ бара. Беренсе ярты еткән. Бай сыҡты ла, ти, йүгерҙе, ти. Теге барған тип белә инде. Барып керә:

– Йә, килдеме берәй кеше?

– Юҡ, береһе лә килмәне. Бына үҙең килдең.

Тоталар быны. Бай ҡасырға итә. Тағы тоттолар, ти.

– Һин нимә тип әйткәйнең әле? Ҡултамғаң бына!

Шулай итеп, әлеге егет заводҡа хужа булып ҡалды, ти. Әле һаман шунда йәшәп яталар, ти.

## 147. Ен ҡараҡтары

Бер ҡара урманда әбей менән бабай йәшәгән. Уларҙың бер улдары менән ҡыҙҙары булған. Әбей-бабай күп йәшәмәгән, үлеп киткән. Ҡыҙ менән малай икеһе генә тороп ҡалғандар.

Малай, йәйә, ҡаҙау башаҡлы уҡтар яһап алып, көн дә ҡуянға һунарға йөрөй торған булған. Шулай йөрөй торғас, егет булып еткән.

Уларҙан бик алыҫ түгел бер ер өйҙә ҡараҡтар йәшәгән. Яҡтынан ҡасып, ер аҫтында йәшәгәнгә, уларҙы «ен ҡараҡтары» тип атағандар. Егет һунарға киткәс тә, ен ҡараҡтарының иң кесеһе ҡыҙҙар кейеме кейеп:

– Дуҫ булайыҡ, – тип, көн һайын ҡыҙ янына килеп, аш ашап, сәй эсеп, – әхирәт, һин беҙгә ҡунаҡҡа бар, – тип саҡырып ҡайтып китә торған булған.

Бер көндө ҡыҙ, быйың һүҙен йыҡмай, барырға булған. Барһа, береһе лә өйҙә юҡ, ишектәре шар асыҡ тора икән, ти. Ҡыҙ инһә, өйҙә тәмле генә аш еҫтәре сығып тора икән, ти. Ҡараһа – мейестәге суйында бығыр-бығыр килеп әҙәм ите бешеп ултыра, ти. Ҡото осоп, аңҡы-тиңке торған саҡта, бер тауыш сыҡҡанға тәҙрәнән ҡараһа, ен ҡараҡтары аҡыртып бер кешене тотоп алып ҡайтып киләләр, ти. Ҡурҡыуынан ни эшләргә, ҡайҙа барырға белмәй, ҡыҙ һике аҫтына инһә, унда тулып әҙәм баштары ята, ти. Төпкәрәк ингән дә ҡыҙ әҙәм баштарына ышыҡланған.

Ен ҡараҡтары теге кешене өйгә алып инеп, бишеһе биш урындан бысаҡ менән сәнскеләп ҡанын эскәндәр. Эсеп туйғас, бөтәһе лә ятып йоҡлап киткәндәр.

Улар яҡшы йоҡлап ҡына киткәйнеләр, ти, ҡыҙ ипләп кенә сыҡты ла, ти, ҡасып ҡайтып китте, ти. Ҡобараһы осоп ҡайтып инһә, ағаһы өйҙә ултыра, ти. Ҡыҙ күргәндәрен түкмәй-сәсмәй ағаһына һөйләп бирҙе, ти. Ағаһы:

– Әҙҙәренән белеп, мин ул яҡҡа бер ҙә бармай торғайным. Һин ни эшләп барҙың? – тигән. – Улай булғас, улар бында килмәй ҡалмаҫ, килерҙәр, – тип ҡылысын бик ныҡ итеп үткерләгән дә мейес артына инеп йәшенгән.

Күп тә үтмәй, теге йәш ҡараҡ, ҡыҙҙар кейемен кейеп, тағы ла килеп еткән дә:

– Әхирәт, һин ни эшләп беҙгә бармайһың? Ни эшләп беҙгә бармайһың? – тигән. Ҡыҙ:

– Барыр инем дә, мин төшөмдә һеҙҙе күреп бик ҡурҡтым, – тигән. – Һеҙгә барған икәнмен, һеҙ бер кешене ҡысҡыртып алып килеп, бишегеҙ биш ерҙән тереләй сәнсеп, ҡанын эсеп туйғас, биш ерҙә ятып йоҡлап киткәнһегеҙ икән, һикегеҙ аҫты тулы әҙәм баштары икән, тип күрҙем, – тигән. Теге:

– Барғанһың! Һин беҙгә барғанһың бит! – тип ҡыҙға ташланырға ғына торғанда, ағай кеше, тиҙ генә мейес артынан сығып, ен ҡарағының башын сабып өҙгән дә иҙән аҫтына төшөрөп, иҙәнде кире ябып ҡуйған.

Күп тә үтмәй, йәш ҡараҡтың бер иптәше ҡара эт эйәртеп килеп еткән.

– Минең иптәшем бында юҡмы? – тип ҡысҡырған был.

– Юҡ, юҡ. Бында бер кем дә килмәне, – тигән ҡыҙ.

Ул арала эт килеп, ишекте тырнай башлаған:

– Килгән бит! Һин алдайһың! – тип өйгә килеп ингән, ти, ҡараҡ.

Ингәс тә, эт иҙәнде тырнап илай башлаған. Теге ен ҡарағы, эйелеп, иҙән аҫтын ҡарай башлаған икән, егет мейес артынан килеп сыҡҡан да бының башын өҙә сапҡан да ҡуйған. Эт сыйылдап сабып ҡайтып киткән. Ҡайтҡан да икенсе ҡараҡты эйәртеп алып килгән, ти. Шулай итеп, эт бөтә ен ҡараҡтарын берәм-берәм алып килеп торған, егет әлегесә уларҙың башын ҡыйып торған, иҙән аҫтына йыйып торған. Бишеһен дә үлтереп, ағай менән ҡарындаш тыныс ҡына йәшәп алып киткәндәр, ти.

## 148. Һалдат менән юлбаҫарҙар

Бик борон да түгел, уртаса. Бер һалдат хеҙмәт итте лә, йылы тулып, ҡайтып килә, ти. Ҡайтып килә торғас, урманға етә. Урманға еткәйне, ҡараңғы төштө, ти. Был шунда юлбаҫарҙарға тап була. Улар кеше үлтерәләр, кеше һуялар икән. Араларында атамандары ла бар, ти. Егетте уратып алдылар ҙа:

– Аҡсаң бармы? – тинеләр, ти.

– Аҡсаң бармы, тиһеңме? Мин әле ике кеше үлтерҙем, икеһенән йөҙ тәңкә аҡса сыҡты.

– Ни эшләп кеше үлтерәһең?

– Үлтермәй, мин ҡастым бит.

– Ҡайҙан ҡастың?

– Батшанан ҡастым, батшанан хеҙмәттән.

– Бәй, был беҙҙең иптәш тә. Аҡсаң ҡайҙа?

– Мына... Йөҙ тәңкә.

Аҡсаны ҡырҡ кеше ала ла үҙ-ара бүлешә. Егетте бергә алып китәләр. Бер тәңкә алып ҡайтһалар ҙа, юлбаҫарҙар уны үҙ-ара бүлешер булғандар. Был юлы бер иптәштәренә аҡса етмәй ҡала бит. Һалдат әйтә:

– Атаманығыҙҙың аҡсаһы бар, ул һеҙгә бирмәй генә. Ниңә шул бер кешегә ҡарап тораһығыҙ? Бына мине атаман итеп ҡуйығыҙ, – ти. – Шулай көндә лә аҡса таба аламы ни кеше? Мин көн һайын таптырмам, – ти. – Күрәләтә кеше үлтермәм, – ти.

Шул етә ҡала юлбаҫарҙарға. Башлыҡтарына:

– Беҙ һине ташлайбыҙ. Һин бик хәтерҙе ҡалдырҙың. Урыныңа бына һалдатты ҡуябыҙ, – тиҙәр.

Һалдат атаман булып ала. Быға ун ике аҫҡыс бирҙеләр, ти. Ун өсөнсөһөн биргәс, әйтәләр:

– Бына быныһын асма, – тиҙәр.

– Ярар, – тине, ти, егет.

Юлбаҫарҙарҙы бер көндө һалдат өс көнлөк юлға ебәрҙе, үҙе йортта ҡалды, ти. Тегеләр китте, егет бөтә бүлмәләрҙе асып ҡараны. Ун ике бүлмәлә юҡ нәмә юҡ, ти. Ун өсөнсө бүлмәне асып ебәрһә, бер һылыу ҡыҙ ултыра икән, ти. Һалдат ҡыҙға:

– Һин кем? – ти. Ҡыҙ:

– Мине хәҙер танымайһыңмы? Урлап алып килдең дә, – ти.

– Танымайым.

– Мин бында бер йыл ултырам бит инде хәҙер.

– Ә-ә-ә, алай икән.

– Һин мине ҡотҡара алаһыңмы?

– Ҡотҡарырға тейешмен. Тегеләр киттеләр, өс көндән ҡайталар.

Юлбаҫарҙарҙың алты кәмәһе булған. Һалдат уларҙың бишеһен тиште лә, береһенә ҡыҙ менән ултырып, китте лә барҙы, ти. Ошо ваҡыт юлбаҫарҙарҙың береһе төш күрә бит.

– Ҡаҫҡандар! – тип ҡысҡырып уяна был.

– Булмаҫ! – тиҙәр бүтәндәре.

– Бына күрҙегеҙме, һеҙ ышанған үткенсе нимә эшләтте? – тип үсәй элекке башлыҡ.

– Әйҙә, барып ҡарайыҡ.

Йүгереп ҡайтһалар – юҡ тегеләр. Эҙләп ҡарайҙар, тапмайҙар. Кәмә менән ҡыумаҡсы булалар, кәмәләре тишек.

– Вәт, ҡыҙҙы ла алып ҡаҫҡан бит, – тиҙәр.

– Әйҙә, һин бер бүрәнә, мин бер бүрәнә алып киләйек, һал булыр, – тиҙәр берәүҙәре.

– Юҡ, кәмәне ямау кәрәк, – тиҙәр икенселәре.

Кәмәне ямап бөттөләр, ти, былар. Ишәләр күмәкләп.

Теге егет яйлап китеп ултыра. Шулай тыныс ҡына бара ятһа, әллә ҡайҙан уҡ тегеләрҙе күреп ҡалды, ти. Ҡыҙ:

– Ҡотҡар, ҡотҡар! – тип сәбәләнә башланы, ти.

Юлбаҫарҙар ҙа быларҙы күреп ҡалып, шәберәк килә башланылар, ти, хәҙер. Инде ярға ла күп ҡалманы, ти. Ярҙа батшаның офицеры ҡарап торған икән. Быларҙы ҡарап-ҡарап тора ла ғупты бора.

– Залп бирегеҙ! – ти.

Бер-ике рәт залп төшөргәндәр ине, ти, тегеләрҙе сайрата һуҡты ла ҡуйҙы, ти.

Һалдаттан һорайҙар:

– Ҡайҙа бараһың?

Һалдат әйтеп бирә инде. Шунан былар уны кәмә төбөнә ырғыттылар ҙа ағыҙҙы ла ебәрҙеләр, ти. Ул төнө буйы аҡты, ти. Ҡыҙ офицерҙың ҡулына керҙе, ти. Егет уянып ҡараһа, ҡараңғы. Ҡыҙ юҡ. Торҙо ла кәмәне ярға һуғып сыҡты, ти.

Бер йорт күренә. Барһа, бер әбей генә. Инһә, теге юлбаçарҙарға әләкте лә ҡуйҙы, ти. Бер ҡарт биш малайы менән кеше талап ята икән. Китмәксе булғайны, әбей:

– Китмә, ашап-эс, – ти.

Быға араҡы сығарып эсерә. Был ышанды бит. Шунда ҡалды, утын ҡырҡты, ваҡ-төйәген итте, ти.

Әбей быны нисек тә үлтермәгә итә. Өçтөндәге һалдат кейемдәрен алмаға була. Егеткә урын йәйеп:

– Бабай ҡайтыр. Ул ҡайтҡансы, ятып тор. Үҙем уятырмын, – ти.

Егет ятһа, бер төрлө еç сыға. Был ниндәй еç икән, тип аптырай. Әбей шул арала ишекте бикләне лә ҡуйҙы, ти. Сығырға урын юҡ. «Эп, әләктем, былай булғас, моғайын, үлтерерҙәр», – тип уйлай. Иҙәнде ҡараһа, бер кешене үлтереп, һалып киткәндәр. Шул кешене урынына алып һалды ла сыҡмаға урын эҙләй башланы, ти. Ныҡыша торғас, иҙән аçтынан урын табып сыҡты бит теге яҡҡа. Сыҡһа – тауыш. Шым ғына ҡараһа – ҡыҙҙар.

– Ҡайҙан килдең? – тип һорашалар ҡыҙҙар.

– Бына шулай-шулай килеп сыҡтым.

– Әле ҡайҙан?

– Бына йоҡлатмаҡ булғайнылар, шунан.

– Эп! Юлбаçарҙарға әләккәнһең бит. Улар беҙҙе лә урлап алып килделәр. Ай, егет, ниңә килдең инде һин бында? Ҡайһылайтып ҡына ҡотҡарып ҡайтарайыҡ? Һай, беҙҙе лә алып ҡайтһаң! Атайҙарыбыҙ ҡайһылай ҡәҙер итерҙәр ине һине.

– Ҡалайтып ҡайтырға? Ҡайҙан төшөргә? Бик бейек бит.

– Беҙ төшөрөр инек тә ул төшөрөүен, белмәһәләр.

Ҡыҙҙар шәл бәйләйҙәр икән дә, әбей шуларҙы баҙарға сығарып һата икән. Ҡыҙҙар әйтә:

– Ҡурҡма, беҙҙең атайҙар – генерал.

Шулайтып, биш ҡыҙ ҙа хат яҙҙы, ти. Юлбаçарҙар ҡайтып, эсмәгә тотондолар.

Бер ат бәйле тора. Ашамаға биреп киткәндәр, эйәр ҡашында ҡылыс бәйле тора. Егет атты менеп алды ла, уңлы-һуллы сыбыҡлай-сыбыҡлай, сапты, ти. Таң атҡанса китте. Тегеләр тик эсеүен белде. Атта береһенең бер ҡайғыһы булманы, ти.

Егет ҡалаға барһа, бер ерҙә һалдат өйрәтәләр. Был бер генералдың өйөн һораша. Тиҙ өйрәтеп ебәрҙеләр, ти. Йортто тапты, честь бирҙе лә хатты тотторҙо, ти.

– Господи, что такое? Ни хәл? – тине лә, ти, был генерал тиҙ генә ғәскәрен шунда алып китте, ти. Биш ҡалған хатты ҡыҙҙарҙың аталарына апарып тапшырҙы, ти. Шунан ғәскәр башында ғәскәргә юл өйрәтеп, китте, ти. Барып етәрәк, бер генералдың ҡыҙы атаһын таныны ла ҡысҡыра башланы, ти. Ҡыҙҙарҙың сәрелдәшеүенә иҫерек ҡараҡтар йүгерешеп килеп сыҡты, ти.

Былар юлбаҫарҙарҙы берәм-берәм сапҡыланылар ҙа өйҙәренә ут төртөп ебәрҙеләр, ти. Ҡыҙҙарҙы алып ҡайттылар, ти. Бер генерал егетте үҙенә ярҙамсы итеп алды, бер кырандасҡа өс ат ектереп, күсер биреп, ҡайтарып ебәрҙе, ти.

Егеттең юлы әлеге үҙе ҡотҡарған ҡыҙҙың иле аша үтә икән. Ҡыҙҙың атаһы шул илдә батшалыҡ итә ине, ти. Әлеге офицер уға:

– Ҡыҙыңды үҙем ҡотҡарҙым, – тип, ҡыҙҙы кәләш итеп алмаға, туй үткәрмәгә йөрөй, ти. Яҡшы-яҡшы аттарҙы һәйбәт кырандасҡа егеп килеп төшкән һалдатты батша ҙур түрәләй күреп:

– Әйҙә, әйҙә. Яҡшының ҡунағы бер көндә. Бөгөн миндә ҡунаҡтар күп. Урының түрҙә булһын, – тип, үҙе сығып, ҡаршы алып, түргә үткәрҙе, ти. Шул ваҡыт батша ҡыҙы быны күреп ҡалды ла:

– Атай, офицерың түгел, ошо егет ҡотҡарҙы мине. «Өндәшһәң, үлемеңде минең ҡулдан табырһың» тигәнгә, ошоғаса әйтмәй килгәйнем, – тип, йүгереп килеп, һалдат егеттең ҡулынан тотоп алды, ти.

Шул сәғәте батшаның ярандары теге офицерҙы тотоп алдылар, ти. Тотоп та алдылар, башын да ҡыйҙылар, ти.

Шунан ни булған икән, тиһәгеҙ, башланған туй дауам иткән. Ете көн, ете төн барған.

Һалдат егет батша кейәүе булып алғас, иленә ҡайтып, атаәсәһен күсереп алып килгән. Биш ағаһына әлеге биш генералдың ҡыҙҙарын алып биргән.

Һалдат егет ағалары менән татыу ғүмер һөрҙө, ти, ата-әсәһен ҡәҙер-хөрмәт итте, ти. Ҡайны үлгәс, батша булып, оҙаҡ ғүмерҙәр ил башы булып, халыҡтан күп рәхмәттәр ишетте, ти.

## 149. Яңғыҙбикә

Борон-борон заманда, Тоноҡкүл тигән күл ярында йәшәгән, ти, бер әбей менән бабай. Улар, бик теләһәләр ҙә, бер ҙә балалары булмаған.

– Ҡарт көнөбөҙҙә нисек кенә йәшәрбеҙ инде? Түшәктә ятҡан саҡта, ауыҙыбыҙға бер тамсы һыу һалыусыбыҙ ҙа юҡ бит, – тип ҡайғырышҡандар.

Берҙән-бер көндө теләгәндәре алдарына килә: ҡыҙҙары тыуа. Әбей менән бабай һаман ҡәнәғәт түгелдәр, ти. Улар хәҙер малай тыумағанға ҡайғырғандар.

– Ҡарт көнөбөҙҙә һунарға йөрөп ризыҡ табыр ине беҙгә, малай булһа, исмаһам, – тигәндәр.

Хәл юҡ, тора килә булғанына шөкөр иткәндәр. Балалары яңғыҙ ғына булғанға, уға Яңғыҙбикә тигән исем ҡушҡандар.

Яңғыҙбикә бик тиҙ үҫеп еткән. Уға төрлө яҡтарҙан яусылар килә башлаған. Күп-күп малдар бирергә вәғәҙә иткәндәр. Ләкин Яңғыҙбикә береһенә лә кейәүгә сыҡмаған. Күңеленән генә бер көтөүсе егетте яратып йөрөгән. Егет күл буйында мал көткән, ҡурайҙа уйнаған.

Яңғыҙы булғанға, Яңғыҙбикә үҙе ҡыҙҙар эшен дә, малайҙар эшен дә башҡарған. Ул балыҡ та ҡармаҡлаған. Балыҡ ҡармаҡларға һыу буйына килгәндә, көтөүсенең ҡурай моңон бирелеп-бирелеп тыңлаған.

Бер көндө гәҙәттәгесә шулай балыҡ тотоп ултырғанында, Яңғыҙбикә һыҙғырған тауыш ишетә. Артына әйләнеп ҡараһа, унын янына ике кеше килә ята. Ҡыҙ, улар ҙа балыҡ ҡармаҡларға килә ятҡан әҙәмдәрҙер, тип уйлай. Яҡшылап ҡараһа, ҡулдарында бер ни ҙә булмай. Шул арала тегеләр килеп етәләр ҙә, Яңғыҙбикәнең ауыҙын ябып, урман эсенә алып инеп китәләр. Ярай әле, күҙен япмайҙар. Был тирәлә күп йөрөгәнлектән, Яңғыҙбикә яҡын-тирәне яҡшы белгән. Шул арҡала ҡыҙ үҙен ҡайҙа табан алып китеүҙәрен ҡарап барған. Ҡасырға-фәлән тура килһә тип, күңеленән генә билдәләр билдәләй барған. Урмандың иң төп ҡараңғы бер урынына барып еткәс, тегеләр бер бик тә йыуан ағас төбөндә туҡтап ҡалалар. Уларҙың береһе ниндәйҙер серле өс һүҙ әйтеү менән, ағас икегә айырылып китә – алда бер ҡыуыш барлыҡҡа килә. Теге икәү Яңғыҙбикәне күтәреп, ошо ҡыуышҡа инеп китәләр. Инһәләр, Яңғыҙбикә ни күҙе менән күрһен, бер бәләкәй генә бүлмә, мөйөштә ап-аҡ сәсле бер әбей ултыра, бер кәҙә тора. Теге ике кешенең береһе әбей янына барып, унын ҡолағына ниҙер әйтте, ти. Шунан икәүләп тороп был ике ир Яңғыҙбикәнең аяҡ-ҡулын нығытып бәйләнеләр ҙә, ти, бауҙың бер осон әбей ҡулына тоттороп, үҙҙәре кире сығып киттеләр, ти. Улар сығып киткәс, әбей телгә килә:

– Ҡыҙым, был кеше ашаусыларҙың күҙе төшөрлөк булғас, һин бик сибәрһеңдер, моғайын. Тик мин һине күрә алмайым шул, – тигән әбей.

Яңғыҙбикә шунда ғына әбейҙең тома һуҡыр икәнен аңғарып ҡала.

– Һин, әбей, бында ни эшләйһең? – тип һораған Янғыҙбикә.

– Мине лә, ҡыҙым, һинең кеүек йәш, матур сағымда улар урлап алып киттеләр. Шунан үҙҙәренең уртаҡ ҡатыны иттеләр. Ҡасмаһын тип, ике күҙемде лә соҡоп сығарҙылар. Бөгөн килеп: – Һин ҡартайҙың инде. Хәҙер хәжәтең – бер тин. Яраһаң, ашауға ғына ярарлыҡһың. Бына әле, бөгөн-иртәгә һине ашайбыҙ, тип сығып киттеләр. Һин, исмаһам, бында әрәм булма, ҡыҙым. Зинһар ғына ҡас бынан. Мин йәшем етеп әбей булмағанмын, бында күргән ғазаптарҙан әбей хәленә еткәнмен мин. Һине лә минең хәлгә төшөрөрҙәр. Ҡас! – тигән әбей.

– Бик ҡасыр инем дә бит, ҡул-аяҡтарым бәйле шул, әбей. Уларға ҡатын булғым килмәй. Өйҙә атам мӗнән әсәм ас ултыра. Әбей, зинһар, ярҙам итә күр, – тип, Янғыҙбикә әбейгә ялына башлай.

Әбей, һәрмәнеп йөрөп бысаҡ табып, шуның менән ҡыҙҙың бәйҙәрен киҫә лә сығарып ебәрә. Үҙе теге кәзәһен сырмай ҙа баяғыса бауҙың осон тотоп ултырып ҡала. Күп тә үтмәй, теге ике кеше ашаусы ҡайтып етә. Әбейҙең ҡулында ҡыҙ юҡлығын күргәс, сығырҙарынан сығып шашыналар.

– Ҡыҙ ҡайҙа? – тип таптырғандар унан.

– Аһ-аһ, күрмәйһегеҙме? Бына бит, – тип, әбей уларға кәзәһен күрһәткән.

Асыуҙарынан тегеләр әбейҙе туҡмағандар ҙа Янғыҙбикә артынан ҡыуа сыҡҡандар. Янғыҙбикә бик алыҫ китеп өлгөрмәгән була. Артынан һыҙғырған тауыш ишетә лә, теге икәүҙең килгәнен белеп ҡалып, яҡында торған бик бейек ялбыр ағасҡа менеп китә. Кеше ашаусылар ошо ағас төбөнә туҡтайҙар ҙа бәхәсләшә башлайҙар. Береһе әйтә:

– Ул бөтән бер ерҙә лә түгел, ошо ағас башында, – ти.

Икенсеһе:

– Бушты һөйләмә, – ти.

Шунан ағасҡа менмәҫкә булалар. Китер алдынан шулай ҙа ағасҡа бик осло ҡаҙаҡтар ҡағып китәләр.

– Әгәр ул ошо ағас башында булһа, төшкән саҡта ботоноң ите һыҙырылып ҡалыр, – тиҙәр.

Арыу китеп, бер аҙ йөрөп, тағы ошонда килһәләр, ни күҙҙәре менән күрһендәр, ҡаҙаҡтарҙа, ысынлап та, бот ите һыҙырылып ҡалған була. Улар, яғалашыуға етә яҙып, йәнә үҙ-ара әрләшеп ала. Күп туҡтамай, кире боролоп, тағы ҡыуа китәләр. Шул мәл юлдан бесән тейәгән атлы китеп бара икән. Теге икәү тағы бәхәсләшә башлағандар. Берәүһе әйтә:

– Ҡыҙ ошонда, – ти. – Башҡа бер ерҙә лә түгел, – ти.

Икенсеһе әйтә:

– Юҡ, – ти, – һөйләмә бушты, – ти.

Шунан береһе:

– Бая ла һинең һүҙеңә ҡараған булып, ағас башына менеп ҡараманыҡ. Әйҙә, был юлы йөктө бушатып ҡарайбыҙ, – тип ныҡышҡан.

Йөк хужаһы:

– Бушатығыҙ, нимә табылыр икән. Тик кире тейәп бирерһегеҙ, – тигән.

Тегеләр йөктө бушата башлағандар. Ҡыҙ юҡ. Былар һаман бушата. Арбаның төбөндә бер күтәремдәй бесән ҡалғас:

– Әйттем бит, юҡ тип, булманы. Һинең һүҙеңә ҡарап, ҡоро бушҡа ваҡытты ғына әрәм иттек, – тип, береһе икенсеһенә ҡаҙалған.

Былар эште ҡуйғандар. Йөктө кире тейәп, ҡартты ҡайтарып ебәргәндәр. Ә Яңғыҙбикә, ысынлап та, шул йөктә була, һуңғы бер күтәрем бесән аҫтында ҡала.

Йөк хужаһы йөгөн туп-тура Яңғыҙбикәләрҙең өйөнә алып барып, ихатаға ингән дә бушатырға тотонған. Был ни хәл, тип, Яңғыҙбикәнең ата-әсәһе йүгерешеп килеп сыҡҡандар ҙа ҡартты быжғырта башлағандар:

– Был ни тигән эш?

– Нишләп, һорамай-нитмәй, бесән бушатып ятаһың?

Шул саҡ бесән аҫтынан Яңғыҙбикә килеп сыҡҡан да йортҡа йүгереп инеп киткән. Бөтә башынан уҙғандарҙы ата-әсәһенә һөйләп биргән. Һөйләп бөтөүе булған – һыҙғырған тауыш ишетелгән. Яңғыҙбикә ата-әсәһенә мунса яғырға ҡушҡан да өй башына ҡасҡан. Теге ике кешене Яңғыҙбикәнең ата-әсәһе бик һәйбәт ҡаршы алғандар, һис тә һис ҡәҙерләп, ҡунаҡ кеүек итеп һыйлағандар, һуңынан мунса инеп сығырға ебәргәндәр. Улар сисенеп бөтөп мунсаға инеү менән, шуны ғына көткән Яңғыҙбикә өй башынан төшкән дә ишекте тыштан бикләп тә алған. Шунан мунса башына менеп, ҡыҙған таш өҫтөнә төнлөктән һыу ҡойған. Әҫегә түҙмәй, теге икәү тотонғандар аҡырырға, ишекте типкеләргә. Нисек кенә ҡысҡырһалар ҙа, Яңғыҙбикә уларға иғтибар ҙа итмәгән, төнлөктән әҫе ташҡа һыу һипкән дә һыу һипкән, һыу һипкән дә һыу һипкән. Әҫе быуға бешеп, тегеләрҙең береһе – ишек тупһаһына, береһе тәҙрә тупһаһына башын һалып, йән биргән, ти.

Шулай итеп, Яңғыҙбикә үҙен ашайым тигән кеше ашаусыларҙан анһат ҡотолған. Үҙе лә ҡотолған, ағас ҡыуышындағы әбейҙе лә ҡотҡарған. Шунан алып Яңғыҙбикәне ҡыйыу ҡыҙ тип йөрөтә башлағандар. Яусылар тағы ла күбәйгән. Тик Яңғыҙбикә ҡурайсы көтөүсе егетен генә үҙенә тиң күргән. Оҙаҡламай шул егеттән дә яусы килеп, Яңғыҙбикә үҙенең теләгенә ирешкән, ти.

## 150. Ҡырҡ караҡ

Борон-борон заманда бер әбей менән бабай йәшәгән, ти. Әбей менән бабай тигәс тә, яңғыҙ түгел инде, берәү генә булһа ла ҡыҙ балалары бар ине, ти, быларҙың. Шул ҡыҙ бала ҙурайған, еткән.

Хәҙер йөрөйҙәр, йөрөйҙәр былар. Шунан әбей менән бабай алыҫҡа ҡунаҡҡа китергә булдылар, ти.

Яңғыҙ тороп ҡалғас, ҡыҙҙары әхирәттәрен йыйып, сыра яндырып, төндә киндер иләйҙәр, ти. (Сыра яндырмай, ни менән яҡтыртһындар, лампа булмаған бит әүәле.)

Былар иләйҙәр, иләйҙәр, иләйҙәр, ти, төнөн. Шулай иләп ултыра торғас, был өй хужаһы ҡыҙҙың орсоҡ башы баҙға төшөп китә. Шунан һуң ул:

– Уй, иптәштәр, орсоҡ башым баҙға төштө лә китте, төшөп кенә алайыммы икән, алмайыммы икән? – тип әйтә, ти.

Теге ҡыҙҙар:

– Алаһың инде, – тип әйтәләр, ти.

Шунан был баҙҙы асып төшһә, бер кеше ултыра, ти. Усына йомған, ти, теге орсоҡ башын. Орсоҡ башын тырнаҡ осо менән генә тырнап алған да, ти, был ҡыҙ сыҡҡан да баҙҙы япҡан да ҡуйған, ти, хәҙер. Ҡурҡҡан үҙе эсенән, иптәштәренә әйтмәгән.

– Иптәштәр, булмаһа иләмәйек, ҡуй, ятайыҡ, ятайыҡ, – тип әйтә, ти.

Ҡыҙҙар әйтә:

– Ни эшләп иләмәйбеҙ? Ни эшләп, иләй бирәйек әле, иләй бирәйек.

– Ҡуй, ятайыҡ, ҡуй, ятайыҡ, ҡыҙҙар, сыра ла бөттө, – тигәс, ятҡандар, ти, күмәкләшеп теҙелеп.

Әүәле урындыҡ бит инде, бүтән нәмә юҡ. Теҙелешеп ятҡандар ҙа теге ҡыҙҙар шул арала йоҡлап та киткәндәр. Был йоҡламай ята. Ята был, ята, теге кешене ҡарап ята, ти: «Сыҡмай ҡалмаҫ, сығыр, моғайын», тип. Шунан, көтөп ятһа, теге кеше баҙ ҡапҡасын күтәреп, ипләп кенә килеп сыҡҡан. Ул ҡырҡ караҡтың береһе булған, ти. Ҡыҙҙар йоҡлағанды иптәштәренә әйтмәк булып, урамға сыҡҡан икән, ҡыҙ тора һалып, йүгереп барып, ишектәрен элгән дә ятҡан. Инде ни эшләргә? Был килә бит инде тағы.

Теге караҡ килгән ишеккә. Килгән дә ишекте тартҡан – ишек бикле. Хәҙер тәҙрәне алып ҡына инмәк була, был ҡыҙҙы үтеп алырғамы инде, тегеләрҙең бөтәһен дә үлтерергәлерме инде. Кереп кенә килә икән – был ҡыҙ башын өҙә сапҡан да ҡуйған теге караҡтың. Хәҙер кәүҙәһе тышта, башы эстә, ти, тегенең. Был ҡыҙ ни эшләргә белмәгән. Теге ҡыҙҙар йоҡлай, ҡалай итәһе икән? Башты алып тәҙрәнән ырғытҡан да, ишекте тышҡан бикләп, бер туған абзыйы бар икән яҡын ғына, шуға йү-

гергән. «Абзыйыма әйтәйем дә бер нәмә ҡыялтайым»*, тип уйлаған. Йүгереп барып, тәҙрәһен сирткән. Абзыһы сыҡҡан:

– Абзый, әйҙә әле, беҙгә бар, мин берәүҙе үлтерҙем бит әле, – ти ҡыҙ.

– Ай Алла, ай Алла, ни эшләнең, ни эшләнең? – тигән дә кейенгән абзыһы, килгән.

Хәҙер был ҡыҙ менән абзыһы ат егә һалды, алып барып таш бәйләп, бер күлгә ташланылар, ти, теге ҡараҡты. Шулай итеп, йыйыштырып ҡайтҡандар, аңарса таң атҡан. Был ҡыҙ, тегеләр торғансы, өйҙө йыйыштырып, иҙәндәрен дә йыуған. Бер нәмә лә һиҙелерлек түгел, ти.

Тегеләр торҙолар, ти. Торғас та:

– Ҡайтабыҙ, ҡайтабыҙ, – ти башланылар, ти.

– Атаҡ, ни эшләп был хәтлем ағарҙың, ни эшләп был хәтлем ағарҙың? Әллә берәй нәмәнән ҡурҡтыңмы? – тип бынан һорашырға тотондолар, ти.

– Юҡ, ҡурҡманым, ҡурҡманымсы. Ерле генә йүнле йоҡлай алманым, шуға шулаймындыр, – тигән, ти, ҡыҙ.

Шунан хәҙер ҡыҙҙар ҡайтып киткәндәр. Был һаман да ҡурҡып: «Инде ни эшләйем инде, ни эшләйем? – тип йөрөй ти инде. – Быларҙың тағы береһе килер инде бында. Килер, килмәй ҡалмаҫ. Был ниндәй гәләмәт булды?», – тип әйтә икән ҡыҙ.

Икенсе көндө әсәйҙәре ҡайтҡан.

– Ай Алла, балам, ауырығанһың бит. Берәй нәмәнән ҡурҡтыңмы әллә? Төҫтәрең дә ҡасҡан, ябыҡҡанһың да, – тип әйткән, ти, әсәһе.

– Юҡ, ҡурҡманым, әсәй. Бер нәмәнән дә ҡурҡманым, – тип әйтеүҙән башҡа өндәшмәгән, ти, ҡыҙ.

Шунан әсәләре менән әүәлгесә донъя көтөп торалар инде.

Бер мәлде бер кеше килгән быларға. Шул хәтлем бай кейемле, мөһабәт кеше, ти. «Нимәгә килгән икән был кеше? Был кеше тигенгә килмәгән бит, моғайын», тип уйлаған ҡыҙ. Был кеше ҡыҙ һората, ти. Ҡыҙ еткән булған бит инде. Еткән тип ни, әүәлге заман бит, булһа, шул ун алтыла йә ун биштә булғандыр инде күп булһа.

– Шулай итеп, һеҙҙең ҡыҙығыҙҙы һоратырға килгәйнем әле. Шулай-шулай туй яһарбыҙ, шулай-шулай нәмәләр алып килермен, – тигән теге кеше.

Әсәһе:

– Әллә шул. Беҙҙең ҡыҙ берәү генә. Улай йыраҡ ергә бирмәбеҙ, ауылға ғына бирербеҙ. Бер генә бала бит, – тип әйтә, ти.

– Ни эшләп йыраҡ булһын. Йыраҡ тип ни, ҡапҡан* ер түгел бит. Бик йыраҡ тиһәгеҙ, ошонда ла торорҙар, – тип теге буран көсләй*, быуындарына төшә, ти.

Көсләшә торғас, кискә табан килешкәндәр былар. Әллә ниндәй басалы тундар, сапандар, eләндәр, ҡашмауҙар алып килер-

гә, әсәһен, атаһын вис кейендерергә, ҡыҙҙы ла яҡшы итеп кейендерергә. Был ҡыҙ шикләнеүҙәрен әйтмәгән, риза булып ҡалған.

– Фәләнсә көндө кейәү килеп, шунан яҡшы туй яһарбыҙ. Һеҙҙең яҡтың сығымын да үҙебеҙ күтәрербеҙ, – тип ҡайтып китә теге.

Бер ике-өс көн үткәс, теге кейәү килгән быға. Бөтә нәмәһен тейәп, байлыҡ менән килгән. Был бахырҙар ни, ярлы кеше, кейемгә алданғандар инде. Ҡыҙ һаман шиген әйтмәгән. «Айһай, шуларҙың береһе инде. Алып китә инде», тигән дә эстән генә ҡурҡып тик йөрөгән. Кейәү булып алғас, хәҙер был:

– Ҡыҙҙы бергә алып ҡайтам, ҡалдырмайым, – тип әйтә, ти.

Әсәләре:

– Әле үҙең генә ҡайтып тор ҙа һуңынан килеп алырһың. Берҙән-бер балабыҙҙы ҡапыл биреп ебәрһәк, яңғыҙ ҡалырбыҙ инде, – тип илай, ти.

Ни эшләһен инде, бахырҙар, биреп ебәрергә булғандар. Өс кис ҡунған да кейәү ҡыҙҙы алып киткән, ти. Киткәндәр, киткәндәр икәүләп, ҡара урман араһынан үткәндәр. Был ҡыҙ ҡурҡышынан: «Харап ҡына булдым, мине шул ҡараҡтар алып китте инде», – тип илап тик бара икән. Урман араһында ҡараҡтар бар икән тигән хәбәрҙе электән ишетеп йөрөгән булған. Киткәндәр, киткәндәр, төн еткән, төн үтеп, таң атҡан. Шунда бер ергә барып еткәндәр. Был ҡараҡтарҙың урыны шул ҡара урман араһындағы бер баҙҙа икән. Ҡырҡыһына ҡырҡ бүлмә икән. Кейәү ҡыҙҙы шунда алып төшөп киткән. Киткәндәр, киткәндәр, төптәге бүлмәгә кереп, былар йоҡларға ятҡандар. Был көндөҙ булған хәл инде. Кис булып ҡараңғы төшкән, бөтәһе лә, баҙҙы асып, кәсепкә сығып киткән, ҡыҙ бер үҙе ҡалған. Хәҙер ишектәрҙе асып ҡарап йөрөй, ҡарап йөрөй, ти, был. Бер бүлмәгә керһә – ит, бер бүлмәгә керһә – ҡаҙы, бер бүлмәгә керһә – май, бер бүлмәгә керһә – кейем. Рәттән шулай сыҡты – бөтәһендә лә ашып-ташып торған нәмә, ти. Йәнә бер бүлмәгә керһә, бер әбей ултыра, ти. Бәйләп бөткәндәр, саҡ йәбешеп ултыра, тора алмай ҙа, ти.

– Уй, балам, һин бында ҡайҙан килеп сыҡтың? – тип әйткән, ти.

– Уй, инәй, мин яңылыштым, яңылыштан килеп сыҡтым, – тип, был ҡыҙ илап ебәргән, ти.

Теге әбей ҙә илай, ти:

– Мин әбей түгел, мин йәп-йәш кенә ҡыҙ инем әле. Һинең шикелле йәш кенә саҡта мин дә, ошо ҡырҡ ҡараҡтың ҡулына эләгеп, сығып китә алманым. Бына ошолайтып имгәнеп бөтөп, хәҙер ҡартайып ултырамын. Хәҙер сығыр ҙа хәлем юҡ. Тамағыма индереп ырғытһалар, шуны ашайым да ошонда ултырам, – тип әйтә, ти. – Бында яҡты донъяны күрә алманым,

хәҙер инде үлемемдә көтөп ултырам. Ниңә генә, балам, килдең, белмәнеңме ни? – тип әйтә, ти.

– Аҙыраҡ ҡына ишетеп ҡала инем, һиҙә тороп, харап булдым, – тип әйтә, ти, теге ҡыҙ. – Әсәйемдәр байлыҡҡа, кейемгә алданды, – тип әйтә, ти, – аҡсаға алдандылар ҙа бына шулай итеп бирҙеләр ҙә, мине өс көндә алып та китте, – тип әйтә, ти.

– Әй, балаҡайым, харап булмаҫ борон, ҡас һин, балам, ҡас. Бына шулай итеп, эңер булһа, сығып китәләр, таң яҡтырыуға ҡайтып киләләр ҙә бөтәһе гөр-шар йоҡлай. Ишеген, ҡапҡасын ҡарап ҡына йөрө лә, уныһы йоҙаҡһыҙ була уның, төртөп кенә сыҡ та ҡас һин. Кис була башлаһа, бер ер табып, йәшен. Шулайтып өс көн эсендә, балам, ҡас. Алтын ал аҙыраҡ, билеңә ана саҡ ҡына ҡорот менән бал баҫып бәйлә лә ҡас. Үҙәгең өҙөлгәндә, ялғап алырһың. Ҡас, балам, нисек кенә булһа ла, ҡас, – тип өйрәткән быға теге әбей.

Был хәҙер сығып китеп, һаман бүлмәләрҙе ҡараған. Ҡараған да аптыраған, ҡараған да аптыраған. Хәҙер таң атҡан, тегеләр ҙә ҡайтып килгәндәр.

Шул кис үк ҡасайым тигән инде теге ҡыҙ. Кис булған. Төн дә булған хәҙер. Тегеләр сығып китеп бөткән, ти, хәҙер. Был әлеге балға баҫып ҡорот менән алтын бәйләгән дә биленә, сыҡҡан да ҡасҡан. Йүгергән дә йүгергән. Ашау ҡайғыһы ла юҡ, эсеү ҡайғыһы ла юҡ. Ҡара урман, ҡайҙа китеп барғанын да белмәй был хәҙер. «Ҡайҙа ғына барайым икән, ҡайҙа ғына барайым икән?» – тип аптырап килһә – алдында бүре ояһы, ти. Шуны күргән дә, ни булһа ла булыр, Аллаға тапшырайым да ошоға инәйем, тип, аяҡ яғы менән керең, баш яғына тупраҡ өйөп, шунда бикләнеп ятҡан.

Төн булған икән, сыҡҡандар тегеләр сабышып бының артынан:

– Күрһәк, атайыҡ, үлтерәйек, йәнен генә алайыҡ, ҡуй, йәнен генә алайыҡ, – тиҙәр.

Дөрһөлдәтеп, бының өҫтөнән үтеп китәләр, ти, тегеләр. «Әй Хоҙайым, үләһе көндәрем ошонда икән, Хоҙайым, үҙең генә ҡотҡар инде», — тип ята, ти, теге ҡыҙ. Әй дөрһөлдәнеләр, әй дөрһөлдәнеләр, шул хәтлем күп йөрөнөләр, ти. Шунан тауыш тымған. «Әй Аллам, тауыштары тымды, таң аттымы икән?» — тип, ипләп кенә соҡоп ҡына ҡараһа, таң атҡан, яҡтырған, ти.

Был хәҙер сыҡҡан да тағы йүгергән. Йүгергән дә йүгергән. Йүгергән дә йүгергән. Һыу булһа, һыу ғына эсеп алған да йәнә йүгергән. Инде хәҙер тағы кис булып бара. Ҡояш саҡ ҡына төшә, ти. «Инде кис була бит инде, ҡайҙарға гына керәйем икән?», — тип, урын эҙләй, ти. Урын эҙләй ҙә урын эҙләй, ти. Ҡараһа, бер тирәк йығылып ята, ти. Эсе серең төшөп бөткән, ти. Үҙе умартанан да йыуан, ти. Шуны ҡараған да: «Әһә, был

кереп ятырлыҡ икән», тип, аяҡ яғы менән кереп, баш яғын был яҡҡа ҡуйып, серектәре менән ҡамап ятҡан инде хәҙер.

Тегеләр йәнә сыҡтылар, ти, эҙләргә. Һәммәһе һыбай, шарт та шорт аталар, ти, эй аталар, ти. «Килеп кенә теймәһен инде», тип ята, ти, ҡыҙ ҡурҡышынан ҡалтыранып. Береһе:

– Эй, ошонда юҡмы, ғуй, ошонда юҡмы, ғуй? Ай, ошондалыр, – тип әйтә, ти. Икенсеһе килеп:

– Ни ҡылып ятһын ул бында? – тип әйтә, ти.

– Тотһаҡ, атып үлтерер инек, – тип йөрөгәндәр-йөрөгәндәр ҙә әйләнеп ҡайтҡандар.

Тота алмағандар, тауыш бөткән, ғауға баҫылған.

– Эй Аллам, ҡарайым әле, – тип ҡараһа ҡыҙ, яҡтырып бөткән, көндөҙ, ти.

Инде сыҡҡан да тағы йүгергән. Йүгерә, йүгерә, йүгерә, һыу тура килһә, һыу ғына эсә лә тағы йүгерә икән был. Инде йәнә кис булып бара, ти. Ҡыҙ бер аҡланға килеп сыҡҡан.

– Эй Аллам, йүгерә торғас, әллә үҙебеҙҙең яҡтарға килеп сыҡтыммы? – тип, ҡараһа, бер бабай тора, ти, бесән тейәп ырҙиуан менән.

– Эй, бабай, ҡайҙан ғына килеп сыҡтың? Мине генә ошо арбаңдың аҫтына һал әле. Шулай-шулай мине ҡараҡтар алып ҡасҡайны, шуларҙан ҡасып килә инем. Бабай, мин һиңә алтын бирермен, беҙҙең әсәйҙәр ҙә бай. Бүтән нәмә лә бирермен әсәкәйҙәрҙән алып. Эй, бабай, арбаңдың аҫтына ғына һал инде, – тип инәлә, ти.

– Улай булғас, ҡуй, һалмайым, балаҡайым, улар һине лә табырҙар, мине лә атырҙар, үлтерерҙәр. Һалмайым, балам, – тип әйтә, ти.

– Бабай, һал инде. Ни булһа ла булыр. Аллаға тапшырып, мине генә ошо арбаға һал, – тип инәлә, ти, ҡыҙ.

Ырҙиуан эсен тултырып тейәгән бесәнгә был бабай һалған тегене сараһыҙҙан. Ҡыҙ ятҡан, бабай уның өҫтөнә бесән тейәгән хәҙер.

– Үлмәмен әле, бабай, баҫып, тапап, нығытып тейә, – тип әйтә, ти.

Шунан бабай тейәгән, арҡан тартҡан. Күҙенә яулыҡ бәйләгән. Ул ҡыҙҙың эсенә бәйләгән яулығы булған. Уны тегеләр белмәгән булған.

– Бабай, ҡуҙғалып кит инде. Күҙеңде бәйлә лә, килеп һораһалар: «Эй, балалар, миндә кеше ҡайғыһы юҡ, күҙем күрмәй, саҡтан-саҡ йөрөйөм. Бына юлға ғына төшөрөп ебәрегеҙ инде мине, үҙегеҙгә теләк теләрмен», — тип аяҡтарына тәгәрәп инәл, бабай, – тигән булған ҡыҙ.

Хәҙер ҡараңғы төшөп килә бит инде. Теге ҡараҡтар килеп сыҡҡандар.

– Бабай, ошонда бер ҡыҙ күрмәнеңме, ғуй? Ҡасҡан ҡыҙҙы? – тип әйткәндәр, ти.

– Юҡ, балам, күрмәнем, күрмәнем.

– Юҡ, бабай. Һин күрҙең уны. Һин йөк аҫтына ҡалдырғанһың. Бушат әле йөгөңдө, бушат, – тигән береће. Икенсеһе килеп:

– Ниңә тейәһең ул уға? Йөк аҫтында кеше ятамы ни? Ебәр, ғуй! – ти. Өсөнсөһө килеп:

– Ошонда, ошонда, – тип әйтә, ти. Дүртенсеһе килеп:

– Ҡуй, ҡуй, бабайҙы яҙаламағыҙ, – ти икән.

– Быңа күҙемде бәйләгәнмен, күҙем дә күрмәй, балалар. Хоҙай хаҡы өсөн ебәрегеҙ, ниндәй ҡыҙ килеп бесән аҫтына инеп ятһын, юҡты һөйләмәгеҙ. Быңа юлды күрмәйем, балалар. Ҡараңғы төшә хәҙер, мине, зинһар ғына, Хоҙай хаҡы өсөн, юлға ғына төшөрөп ебәрегеҙ инде, – тип әйтә, ти.

Береһе етәкләп, бының атын юлға төшөрөп ебәргән. Киткән был хәҙер ҡотолоп. Киткән, киткән, ауылына барып еткән. Хәҙер ауылына барып еткәс, бесәнен бушатҡан, теге ҡыҙҙы төшөргән инде. Теге ҡыҙ яулығын сискән дә тегегә алтын биргән. Ауылдары бынан яҡын ғына булған икән.

– Рәхмәт мине ҡотҡарыуың өсөн, мин онотмам әле, атайымдан тағы берәй нәмә алып бирермен үҙеңә, – тип, был төшөп йүгереп ҡайтып киткән.

Хәҙер төн бит инде. Ҡайтып етеп тәҙрә сирткән, әсәләре асҡандар.

– Ай, балам, ай, балам, ҡайҙан килеп сыҡтың?! – тип әсәһе ҡосаҡлап алған тегене.

– Шулай, шулай, быңа хәлдәр шулай булды. Ҡараҡ бар тигәндәре ысын хәбәр икән. Ҡырҡ ҡараҡҡа эләгеп, харап ҡына була яҙҙым. Унда бер әбей ултыра. Шулайтып бәйләп тороп ултыртып ҡуйғандар. Хәҙер инде ул эшлектән сыҡҡан. Шул әбей әйтеп, быңа өс көн эсендә ҡасып, саҡ ҡотолдом, – тип ҡыҙ башынан үткәндәрҙе һөйләп биргән.

Ҡыҙҙарының үлемдән ҡотолоуына ҡыуанышып, хатта хәйерҙәр биргәндәр. Хәҙер был ҡыҙ:

– Өс көндән миңә теге бай ҡараҡ килер. Бер һүҙенә лә ышанмағыҙ. «Ярар, ярар», тип кенә әйтегеҙ, мин хәҙер бер эш ҡылам, – тигән.

Шунан һуң былар хатта ҡурҡып һаҡланалар, ти, инде.

Өс-дүрт көн үткән икән, теге ҡараҡтарҙың башы килгән. Ул тегеләрҙең иң байы булған була. Хатта инде матур кейенеп килгән, ти, теге.

– Һеҙҙе саҡырырға килдем. Ҡыҙығыҙ бай, бәхетле урынға тура килде, кейәүегеҙ ҙә бында килер. Һеҙҙе быңа туйына саҡырырға килдем, алырға килдем, – тип, быларҙы алып ҡайтырға килгәнлеген әйткән.

– Улай булмай ул, ҡоҙа. Беҙҙе ала килеү менән, беҙҙең дә үҙебеҙгә күрә, алама булһа ла, донъябыҙ бар, әле генә беҙ бара алмабыҙ. Бына ҡыҙ менән кейәү ҡунаҡҡа килеп ҡайтһындар, шунда эйәреп барырбыҙ. Шулай тип әйт һин унда. Әле генә беҙ нисек ҡуҙғала һалып китәйек? Анһыҙ ҙа һағындыҡ инде ҡыҙыбыҙҙы, һағындыҡ, – тигәндәр, ти, былар.

– Ярар атыу, тройкалар менән төндә килеп үҙегеҙҙе алып китербеҙ. Әҙерәк торғас, сығығыҙ, кеше эҙләп табығыҙ ҙа донъяғыҙға, – ти теге.

Хәҙер тегенең менән һөйләшеп, аҡсалар биреп тегегә, аҙыраҡ эсереп, алдаштырып, ҡайтарырға булалар. Ҡыҙ, үткер балта тотоп, әҙерләнеп тора, ти, ишектән сығыуына, быны сабырға. Шулай итмәй ни эшләһен инде, үҙәгенә үткәс бахырҙың. Хәҙер был сығып ҡына килә икән, теге ҡыҙ ишек артында ғына торған да үткер балта менән башын өҙә сапҡан да ҡуйған.

– Уй Алла, харап булдыҡ, – тип әсәһе ҡурҡышынан тәгәрәп тә киткән. Атаһы:

– Уй, ҡыҙым, ни эшләйбеҙ инде хәҙер? Уны нимә эшләтәбеҙ инде хәҙер беҙ? – тип йыя һалып ҡына ҡуйғандар ҙа (хәҙер төн бит инде, төнгә ҡаршы йөрөй бит инде теге ҡараҡтар), теге ҡыҙ абзыһына йүгергән.

– Абзый, әйҙә, мин ҡайттым, шулайтып, береһен харап иттем, әйҙә әле беҙгә, – тигән.

Абзыһы ат алып килеп, арбаға һалып әлегене, күлгә алып барып, таш баулап, күлгә һалып, ҡотолоп ҡайтҡандар. Шунан ҡыҙ өйҙөң эсен-тышын йыуып, бер эҙен дә ҡалдырмай, таҙартып ҡуйҙы, ти.

Ҡараҡтар быларҙың йортона бүтәнсә аяҡ та баҫмаған, ти. Килерҙәр ине, ныҡ ҡурҡҡандар, ти. Ҡурҡмаҫтар ине, ҡыҙ икәүһенең башына еткән. Шунан әбей менән бабай ҡыҙҙары менән ҡыуанышып, шатланып, донъя көтөп, йөн тетеп торалар, ти.

## 151. Аҡ келәт

Бынан мең йылдар элек бер байҙың ике ҡыҙы булған, ти. Ул ҡыҙҙар гел аҡ келәттә йоҡлап йөрөгән булғандар. Аталары күршеһендәге ярлы ғына бер кешене күрә алмаған. Уны үҙҙәренә бушҡа эшләткән, рәтләп ашатмаған. Ярлы ҡатынының имсәк балаһы булған. Уны хатта төшкөлөккә балаһын имеҙергә лә ҡайтармаған, ти, бай. Байҙың этенең көсөктәре күп булған, ти. Ул ярлы ҡатынға шуларҙы имеҙергә ҡушҡан. Ҡатын, илай-илай, шуларҙы имеҙә торған булған. Ҡушҡанды эшләмәҫтәр ине, ашарҙарына булмаған. Эшкә килмәһәләр, уларҙы туҡмап килтергәндәр.

Ярлы бер саҡ тал киҫеп, ситән үреп, баҙарға алып барып һатайым тип, һыу буйына төшөп киткән. Таллыҡта ул үҙ алдына һөйләнеп, байҙы әрләп йөрөгән ваҡытта ике ҡасҡын килеп сыҡҡан, ти.

– Эй, ағай, ниңә былай зарланаһың, кемде шул тиклем ҡәһәрләйһең? – тигәндәр тегеләр.

– Беҙҙең ауылда бер яуыз бай йәшәй. Көнө-төнө беҙҙән ауыр эш эшләтә. Ҡатынымдың етенсе балаһы донъяға килгәндә, уны балама имеҙҙермәй, үҙенең эт балаларына имеҙҙерә, – тигән.

Ярлы һөйләп бөткәс, ҡасҡындар:

– Беҙ һиңә ярҙам итербеҙ, ләкин бер шарт менән, – тигәндәр.

Ярлы:

–Ниндәй шарт ул? – тигән.

– Һин беҙгә байыңдың ике ҡыҙын урларға ярҙам ит.

– Мин һеҙгә бай ҡыҙҙарын урлашырға ярҙам итермен, – тип риза булған. Тегеләр был ярлыға:

– Бик күп аҡса бирербеҙ. Өҫтөң яланғас булмаҫ, тамағың ас булмаҫ. Ҡыҙҙары юғалғас, байҙың һиндә ҡайғыһы ла булмаҫ, – тигәндәр.

Ярлы ҡарт өйөнә ҡайтҡас, ҡырҙа булған ваҡиғаны ҡарсығына һөйләп биргән, ти.

– Эй, юҡҡа маташаһың, әлегә тиклем рәхәт күрмәгәс, кеше ҡыҙҙарын һатып, байыға алмабыҙ инде. Бай белеп ҡалһа, ауылда бер көн йәшәтмәҫ, ҡырып бөтөрөр, – тип, әбейе тәүҙә риза булмаһа ла, ҡарты уны күндергән, ти.

Бына ҡояш байыған. Ауыл малдары көтөүҙән ҡайтҡан. Ярлы байҙың малдарын ҡарағансы, ҡараңғы төшкән, ти.

Төн етеүгә ҡасҡындар яҡшы аттарға атланып ярлының баҡса артына килеп тә туҡтағандар, ти.

Был кисте ҡыҙҙар ниңәлер оҙаҡ йоҡлай алмай йырлашып ятҡандар. Ярлының ҡатыны бай бисәһенең тауышына оҡшатып:

– Ҡыҙҙарым, ишек асығыҙ әле. Көтмәгәндә ҡунаҡ килеп төштө. Май кәрәк ине, – тип әйткән икән, кесе ҡыҙы йүгереп барып келәттең ишеген асып ебәргән.

Ишек асылғас, ҡасҡындар ҡыҙҙарҙы күтәреп алып, аттарына һалып урманға кереп тә киткәндәр. Ярлыға ғүмерҙәренә етерлек алтын-көмөш ҡалдырып киткәндәр, ти.

Байбисә иртән тороп, ҡыҙҙарын уятайым тип, барып керһә, урындар буш булғанын күргән. Ҡыҙҙарҙы күпме генә эҙләһәләр ҙә, таба алмағандар, ти. Теге ярлылар белмәмешкә һалышып, көлә биреп кенә тик йөрөйҙәр, ти.

Тегеләр урманға кергәс, бәләкәй генә һуҡмаҡтан сапҡандар ҙа сапҡандар, ти. Оло ҡыҙы, бәйләнгән күҙен сисә биреп, ҡарап бара икән. Мәмерйәгә барып инһәләр, бик күп ҡасҡындар эсеп-иҫерешеп ултыралар, ти. Ҡатындар, ҡыҙҙар ҙа бар, ти. Былар

килгəс, туй башланған. Туйҙа кесе ҡыҙ илай ҙа эсə, йырлай ҙа эсə икəн. Оло ҡыҙ эсмəй, эскəн кеше булып аҫҡа түгеп тик ултыра икəн.

Бер ваҡыт ҡаҫҡындар иҫерешеп, хур ҙа шар йоҡлап киткəндəр, ти. Кесе ҡыҙ ҙа ныҡ иҫергəн. Шунан оло ҡыҙ ҡасып сығып киткəн. Эй йүгергəн, эй йүгергəн. Йүгерə бирə лə, ергə ятып тыңлап ала, йүгерə бирə лə ергə ятып тыңлап ала, ти. Шулай килгəндə, ҡаршыһына ҙур айыу килен сыҡҡан. Айыу туп-тура ҡыҙға ҡаршы килə икəн. Үҙе ҡулы менəн ҡыҙҙы үҙенə саҡыра, ти. Үлемем ошолор инде, тип, ҡыҙ айыу янына барған. Айыу үҙенең усын күрһəткəн. Ҡараһа, усына ҡарағай энəһе ҡаҙалған, ти. Ҡыҙ, уны тартып алайым тип, тартып ебəрə – ергə барып та төшə. Ятып тыңлаһа – яҡында ғына ат тояҡтары тауышы ишетелə, ти. Күп тə үтмəй, ҡаҫҡындар килеп тə еткəн, ти. Айыу ҡыҙҙы артына йəшергəн, үҙе ҡаплап тора икəн, ти. Ҡаҫҡын айыуға ҡылысы менəн һуғам тигəндə, аты өркөп, ҡылысы ергə төшөп киткəн, ти. Икенсе ҡаҫҡын ҡурҡыуынан кире сапҡан, ти. Шулай итеп, айыу ҡыҙҙы һаҡлап алып ҡалған, ти.

## 152. Хəтирə

Борон-борон заманда бер ауылда йəшəгəн, ти, бер бабай менəн əбей. Бабай һунарга йөрөгəн, əбей орсоҡ илəгəн дə киндер һуҡҡан. Шулай ғүмер иткəндəр, оло йəшкə еткəндəр. Уларҙың булған, ти, Хəтирə исемле берҙəн-бер ҡыҙҙары.

Ата-əсəһе ҡартайғас Хəтирə уларҙы үҙе ҡараған. Ул, күрше ауылға барып, бер итексегə эшкə ялланған. Уға ниндəй эш ҡушһалар, шуны эшлəгəн. Бер ваҡыт быларҙың утындары бөткəн. Бабай Хəтирəгə урманға утынға барырға ҡушҡан. Хəтирə ат егеп, балта алып, урманға киткəн. Урманда атын ашарға ҡуйған да, үҙе утын йыя башлаған. Утын йыя торғас, көн кискə ауышҡан, ти. Хəтирə, утынын тейəп, ҡайтырға сыҡһа, юл буйында ат тояғы, кеше тауыштары ишеткəн. Хəтирə тиҙ генə йəшеренгəн дə, уларҙы күҙəтə башлаған. Был кешелəр бөтəһе ҡырҡ ике булып сыға. Күренмəй генə арттарынан күҙəтə-күҙəтə, ҡыҙ уларға эйəрə. Күп тə үтмəгəн, был кешелəр мəмерйə янына килеп еткəндəр. Алдан килгəне:

– Сиҙəм, асыл! – тип əйткəн, ти.

Шул ваҡыт мəмерйə ауыҙын ҡаплап торған таш асылып киткəн икəн, кешелəр берəм-берəм тау тишегенə инеп бөткəндəр. Иң һуңынан башлыҡтары:

– Сиҙəм, ябыл! – тип əйткəн.

Хəтирə, быларҙы ҡарап, тыңлап торон, күңеленə һалып ҡуйған да, ти, аты янына барып, ҡайтып киткəн, ти. Күргəндəре тураһында бер кемгə бер ни һөйлəмəгəн.

Икенсе көндә иртән иртүк торған да тағы утынға киткән. Урманға килеп еткәс, утын-фәлән йыйып тормаған, ынғай әлеге тау тишеге янына киткән. Теге кешеләрҙең сығып киткәнен көтөп кенә торған да, китеүҙәре булған, тау тишеге янына килеп:

– Сиҙәм, асыл! – тип әйткән.

Таш асылып киткән. Хәтирә эскә ингән. Тирә-яғына ҡараһа, тауҙың эсе тулы алтын, төрлө ҡимmәтле таштар, ти. Ул арбаһына тейәгән-тейәгән дә ҡайтып киткән. Сыҡҡан саҡта:

– Сиҙәм, ябыл! – тип әйткән икән, таш ябылып тороп ҡалған.

Бер көндө хужа был байлыҡтың иҫәбен белер өсөн, уны үлсәп ҡарарға булған. Ул Хәтирәне үҙенең бер туғанына бизмән алырға ебәргән, ти. Был туғанының ҡатыны былар нимә үлсәмәк булалар икән тип, үлсәүҙең төбөнә май һөртөп ебәргән, ти. Хужа ҡарт хазинаһын үлсәп бөтөргәс, үлсәүҙәрен илтеп биргәндәр. Хәтирә ҡайтып киткәс, теге ҡатын, бизмәнен ҡараһа, бер алтын киҫәге йәбешеп килгән, ти. Был хәлде ул тиҙ генә иренә һөйләй һалған, ти.

Икенсе көндө был ҡатындың ире Хәтирәнең артынан төшкән, ти. Был ир Хәтирәнең байлыҡтарҙы тейәп ҡайтып киткәнен ҡарап торған да, ул ҡайтып киткәс:

– Сиҙәм, асыл! – тип әйткән, ти.

Таш асылғас, ул тау тишегенә инеп киткән. Теге ир, бындағы байлыҡҡа иҫе-аҡылы китеп, әле бер ергә, әле икенсе ергә барып бәрелә, ти. Шулай йөрөй торғас, көн кискә ауышҡан. Был хәҙер тауҙың эсенән нисек сығырға белмәй аптырап тора икән. Ни өсөн тиһәң, ул Хәтирә әйткән һүҙҙе онотҡан, ти. Шулай торғанда, ҡараҡтар ҡайтып ингәндәр. Улар:

– Бына кем икән беҙҙең байлыҡты ташыусы, – тип, тегене үлтереп, йылға буйына илтеп ташлағандар, ти.

Туғаны ҡайтмағас, итексе уны эҙләргә сыҡҡан. Эҙләп йөрөй торғас, табып алып ҡайтып күмгән.

Теге кешене үлтерһәләр ҙә, ҡараҡтарҙың байлығы һаман кәмей, ти. Шунан былар йыйылышып һөйләшкәндәр ҙә ауыл һайын сығып киткәндәр. Ҡараҡтарҙың башлыҡтары Хәтирәләрҙең ауылына киткән, ти. Бының беренсе ингән өйө әлеге итексе ҡарт өйө булған да ҡуйған. Ҡараҡ итексе ҡартҡа:

– Эй, бабай, үҙеңдең күҙҙәрең насар, үҙең итек тегеп ултыраһың, – тигән, ти. Ҡарт уға:

– Минең күҙҙәрем насар булһа ла, үлтерелгән туғанымды эҙләп табып алып ҡайтып күмергә эшкиндем әле, – тип яуап биргән, ти.

Ҡараҡ башлығы эштең ниҙә икәнен һиҙеп алған. Ул ҡарттарҙа тамаҡ ялғап алған да иптәштәре янына сығып киткән, ти. Ҡараҡ ҡапҡаның бер таҡтаһына буяу һөртөп киткән, ти.

Хәтирә был эште күреп ҡалған да, кис булғас, бөтә ҡапҡаларға ла буяу һөртөп сыҡҡан, ти.

Икенсе көндө ҡараҡтар килһәләр, теге ҡарттарҙың өйҙәрен таба алмай баштары ҡатҡан: бөтә ҡапҡалар ҙа буяулы булған. Бер нисә көн үткәс, ҡараҡтарҙың теге башлығы мискәләр тейәп, мискәләр эсенә иптәштәрен ултыртып ҡапҡаслап, баҙарсы булған булып, итексе ҡартҡа фатирға төшкән.

– Баҙарға май һатырға тип китеп барам, – тигән.

Кис булғас, ашап-эсеп алырға булғандар. Ҡараҡтарҙың башлығы урамға сығып, иптәштәренә:

– Мин йырлай башлағас, берәм-берәм ,кереп аяҡ-ҡулдарын бәйләгеҙ, – тип әйткән, ти.

Хәтирә быны ишетеп торған. Мискәләрҙең бишеһендә генә май, ҡалғандарында ҡараҡтар ята, ти. Башлыҡ инеп киткәс, Хәтирә бер мискә майҙы ireткән дә ҡалған мискәләргә ҡойоп сыҡҡан. Шулай итеп, Хәтирә ҡырҡ бер ҡараҡтың башына еткән, ти. Башлыҡтары:

– Мискәләрҙе ҡарап инәйем әле, – тип сыҡһа, иптәштәре барыһы ла майға янып үлгәндәр, ти.

Ҡурҡып, яңынан был өйгә инеп тормаған, ҡасмаҡ булған, ти.

Бик күп ваҡыттар үткәс, был ҡараҡ икенсе төрлө кейенеп, тағы итексе ҡарттарға килгән. Ҡарт уны танымаған, Хәтирә күреү менән таныған. Нисек булһа ла был ҡараҡты ла үлтерергә ҡарар иткән ҡыҙ. Ҡараҡты ашарға саҡырған да һиҙҙермәй генә уның ашына йоҡлата торған дарыу һалған. Теге ҡараҡ ашағанда бик ҡаты йоҡлап киткән икән, Хәтирә билендәге бысағы менән ҡараҡтың үҙен сәнсеп үлтергән дә ҡуйған. Шулай итеп, ҡырҡ ике ҡараҡтың башына еткән. Шунан һуң, былар тынысланып, теге тау тишегендәге бөтә байлыҡты алып ҡайтҡандар, ти. Хәтирә атаһы менән әсәһен үҙенең янына алдыртҡан. Хәтирәнең батырлығына һоҡланып, итексе ҡарт уны үҙенең улына кәләш итеп алып биргән, ти. Бик мул итеп һый әҙерләп, былар туй үткәргәндәр. Ошо көнгәсә татыу, матур итеп йәшәйҙәр, ти.

Шундай ҡыйыу ҡыҙҙар булған, ти, элекке замандарҙа.

## 153. Батыр ҡыҙ

Борон-борон заманда бер өйгә балалар йыйылғандар ҙа бәхәс ҡорғандар, ти. Бәхәстәре ни булған – батырлыҡ тураһында булған, ти. Барыһы ла «мин – батыр» ҙа «мин – батыр», тип күкрәк һуғалар икән, ти.

- Кем дә кем батыр – шул төн уртаһында зыяратҡа барып сәскә алып килә.

– Мин барам, – тигән, ти, бер ҡыҙ.

Бөтәһе лә аптырашта ҡалғандар, ҡыҙҙар ҡурҡышып киткәндәр, ти. Теге ҡыҙ зыяратҡа барып етһә, ни күҙе менән күрһен – зыяратта бер эйәрле ат тора икән, ти. Ә эйәренә бер тоҡ аҡса бәйләнгән, ти. Батыр ҡыҙ аптырап тормаған, эйәрҙәге аҡсаны алған да, сәскәне лә өҙөп алып, ҡайтып киткән, ти. Иптәштәренә сәскәне килтереп күрһәтә, ә аҡса тураһында бер һүҙ ҙә әйтмәй.

Ә был ваҡытта ҡараҡтар магазинға төшкән булғандар, ти. Зыяратҡа аттары янына килһәләр – аҡса юҡ.

Икенсе көндө ауылда хәбәр таралған: «Хәсән ҡарттың ҡыҙы зыяраттан сәскә алып ҡайтҡан».

Ҡараҡтар был хәбәрҙе ишеткәндәр ҙә ҡыҙҙы кәләшлеккә ҡоҙалап килгәндәр, ти. Ләкин ҡыҙҙың ата-әсәһе ҡараҡҡа ҡыҙ бирергә теләмәгән, ти. Ә ҡыҙы:

– Ярай, әсәй, мин ризамын, бирегеҙ мине, – тигән, ти.

Ҡараҡтар туй көнөн көтөргә ҡайтып киткәндәр, ти, ә ҡыҙ улар артынан төшкән, ти. Эй баралар, ти, эй баралар, ти. Ҡараҡтар – юлдан, ҡыҙ – урман эсенән. Бара торғас, урман эсендә бер бәләкәй генә өй күренде, ти. Ҡараҡтар шул өйгә кергәндәр ҙә, ҡоралдарын алып, һунарға сығып киткәндәр, ти.

Тауыш-тын баҫылғас, ҡыҙ өйгә ингән. Инһә, ни күҙе менән күрһен: өй тулы кеше һөйәктәре. Ҡыҙ бер кеше ҡулын, бер кеше аяғын алған да ҡайтып, милицияға хәбәр итеп ҡуйған, ти.

Туй көнө килеп еткән. Ҡунаҡтар йыйылып табынға ултырышҡандар, ти. Ошо ваҡыт ҡыҙ ҡоҙа булып килгән ҡунаҡтарға кеше ҡулы менән кеше аяғын күрһәткән. Ҡараҡтарҙың күҙҙәре дүрт булған, ти, ҡоттары осҡан. Сығып ҡасмаҡсы булһалар, уларҙы милиция ҡамап алған, ти.

Шулай итеп, батыр ҡыҙ ауылды ҡараҡтарҙан ҡотҡарған, ти.

Әкиәтем ары китте, үҙем бире ҡалдым, бер телем әпәй менән Хәҙисәгә йөкмәттем.

# ИНЕШ МӘҠӘЛӘЛӘ
# ФАЙҘАЛАНЫЛҒАН ӘҘӘБИӘТ


1. Азадовский М. К. История русской фольклористики. М., 1963. Т. II. 364 с.

2. Алиева А. И. Поэтика и стиль волшебных сказок адыгейских народов. М.: Наука, 1986. – 279 с.

3. Алиева М. М. Уйгурская сказка. Алма-Ата: Наука, 1975. 151 с.

4. Алиева Ф. А. Социально-бытовая сказка народов Дагестана: Дис. канд. филол. наук. Махачкала, 1979. 205 с.

5. Аникин В. П. Русская народная сказка. М.: Госучпедиздат, 1959. 256 с.

6. Бараг Л. Г. Белорусская казка. Мінск: Вышійшая школа, 1959. 256 с.

7. Бахтина В. А. Время в волшебной сказке // Проблемы фольклора. М.: Наука, 1975. С. 157–163.

8. Бахтина В. А. Время в русской волшебной сказке // Прозаические жанры фольклора народов СССР: Тезисы докладов. Минск, 1974. С. 179–180.

9. Башкирские народные сказки / Зап. и пер. А. Г. Бессонова; Под. ред. Н. К. Дмитриева. – Уфа: Башгосиздат, 1941. 367 с.

10. Башкирское народное творчество. Т. 5. Бытовые сказки / Сост. А. М. Сулейманов; Вступ. ст., коммент. Л. Г. Барага, А. М. Сулейманова. Уфа: Башкнигоиздат, 1991. 496 с.

11. Башкирское народное творчество. Т. 6. Шуточные сказки и кулямасы / Сост. А. М. Сулейманова; Вступ. ст., коммент. Л. Г. Барага, А. М. Сулейманова. Уфа: Башкнигоиздат, 1991. 464 с.

12. Башҡорт дәүләт университетының башҡорт әҙәбиәте һәм фольклоры кафедраһы янындағы фольклор фонды.

13. Башҡорт халыҡ ижады. 2-се т. / Төҙ. ред. баш һүҙ һәм иҫкәр. биреүсеһе Ә. И. Харисов. Өфө, 1959. 283 б.

14. Башҡорт халыҡ ижады: Экиәттәр. 1-се кит. / Төҙ. М. Х. Минһажетдинов, Ә. И. Харисов; Яуаплы мөхәрр. Н. Т. Зарипов. Өфө, 1976. 376 б.

15. Башҡорт халыҡ ижады: Экиәттәр. 2-се кит. / Төҙ. М. Х. Минһажетдинов, Ә. И. Харисов; Яуаплы мөхәрр. Н. Т. Зарипов. Өфө, 1976. 376 б.

16. Башҡорт халыҡ ижады: Экиәттәр. 3-сө кит. / Төҙ. Н. Т. Зарипов, М. Х. Минһажетдинов; Яуаплы мөхәрр. Н. Т. Зарипов, Ғ. Б. Хөсәйенов. Өфө, 1978. 352 б.

17. Башҡорт халыҡ ижады: Риүәйәттәр һәм легендалар / Төҙ., инеш мәҡ. һәм аңлатмалар авт. Ф. Нәҙершина; Яуаплы мөхәрр. К. Мәргән. Өфө, 1980. 416 б.

18. Башҡорт халыҡ ижады: Экиәттәр. 4-се кит. / Төҙ. Э. Сөләймәнов; Яуаплы мөхәрр. С. Ғәлин. Өфө, 1981. 393 б.

19. Башҡорт халыҡ ижады: Экиәттәр. 5-се кит. / Төҙ. Э. Сөләймәнов; Яуаплы мөхәрр. Н. Т. Зарипов. Өфө, 1983. 390 б.

20. Башҡорт халыҡ ижады: Эпос. 3-сө кит. / Төҙ. Н. Т. Зарипов; Яуаплы мөхәрр. Ғ. Б. Хөсәйенов. Өфө, 1981. 344 б.

21. Белоруская народная творчасць.: Сацыяльна-бытовая казка. / Скл. тома аут. ступ. артык. А. С. Фядосік; Скл. камент. Л. Р. Бараг. Мінск, 1976. 520 с.

22. Березин Н. Турецкая хрестоматия. Т. 3. Казань, 1876. 162 с.

23. Бикчурин М. Начальное руководство к изучению арабского, персидского и татарского языков с кратким объяснением существующих в Оренбургском крае наречий башкир, киргизов и с приложением к нему русско-персидско-татарских слов, разговоров и прописей. Казань, 1859. 128 с.

24. Борщевский Ю. Сказки древней столицы // Сказки Исфахана. М.: Наука, 1976. С. 5–12.

25. Бромлей Ю. В., Подольный Р. Г. Создано человечеством. М.: Политиздат, 1984. 272 с.

26. Вавилова М. А. Термин «бытовая сказка» и объем понятия, обозначаемого этим термином // Аспирантский сборник: Гуманитарные науки. Вып. 1. Вологда, 1972. С. 123–131.

27. Вавилова М. А. Русская бытовая сказка: Учебн. пособие. Вологда, 1984. 80 с.

28. Валеев Д. Ж. Происхождение морали / Под ред. Ф. Б. Садыкова. Саратов, 1981. 168 с.

29. Ведерникова В. М. Русская народная сказка. М.: Наука, 1975. 135 с.

30. Великорусские сказки Пермской губернии с приложением двенадцати башкирских сказок и одной мещерякской: Сб. Д. К. Зеленина. Пг., 1914. 656 с. (Записки ИРГО. Т. XVI.) 656 с.

31. Вилданов Ғ. Төрөк милләттәре әҙәбиәттәрен тикшереү һәм уларҙың йәкүне // Башҡорт аймағы. – 1926. № 2. 3–26-сы б.

32. Волков Р. М. Сказки: Разыскания по сюжетосложению народной сказки. Т. 1. Харьков, 1924. 236 с.

33. Глонти А. А. Исторические корни грузинских народных новелл: Автореф. дис. ... д-ра филол. наук. Тбилиси, 1958. 53 с.

34. Грузинские народные новеллы. Изд. 3-е / Сост., обработка, ред. предисл. и примеч. А. А. Глонти. Тбилиси: Мерани, 1984. 376 с.

35. Гусев В. Е. Эстетика фольклора. Л.: Наука, 1967. 504 с.

36. Далгат У. Б. Вопросы юмора и сатиры в народном творчестве: На материале дагестанского фольклора // Вопросы народно-поэтического творчества. М., 1960. С. 73–106.

37. Дорри Дж. Персидская сатирическая проза. – М.: Наука, 1977. 216 с.

38. Дунаевская Л. Ф. Поэтика украинской народной сказки: Дис. канд. филол. наук. Киев, 1982. 198 с.

39. Зайнуллин М. В. Употребление временных и модальных форм глагола в языке башкирских сказок // Фольклор народов РСФСР. Вып. 1. Уфа, 1974. С. 92–72.

40. Ильминский Н. И. Башкирский рассказ // Учен. зап. Казанского ун-та. Кн. 3. Казань, 1861.
41. Каргаполов Н. А. Художественные особенности русских бытовых сатирических сказок: Автореф. дис. ... канд. филол. наук. М., 1956. 12 с.
42. Кейекбаев Ж. Ғ. Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы: Уҡыу ҡулланмаһы. Өфө, 1966. 275 б.
43. Кирәй Мәргән. Башҡорт халыҡ ижады: Юғары уҡыу йорттарының филология факультеты өсөн дәреслек / Яуаплы мөхәрр. Ә. М. Сөләймәнов. Өфө, 1982. 232 б.
44. Колесницкая И. М. Загадки в сказке. Л., 1941 (Учен. зап. ЛГУ. Сер. филол. наук. Вып. 12). С. 98–142.
44 а. Каргаполов Н. А. Хдожественные особенности русских бытовых сатирических сказок: Автореф. дис. канд. филол. наук. М., 1956.
45. Конкка У. С. Карельские сатирические сказки. Л.: Наука, 1965. 152 с.
46. Костюхин Е. А. Александр Македонский в литературной и фольклорной традиции. М.: Наука, 1972. 190 с.
47. Котляр Е. С. О некоторых чертах фольклора Африки южнее Сахары // Фольклор и литература народов Африки. М.: Наука, 1970. С. 167–191.
48. Курдовинадзе Т. Д. Поэтика грузинской волшебной сказки: Автореф. дис. ... д-ра филол. наук. Тбилиси, 1978. 57 с.
49. Лазутин С. Г. Поэтика русского фольклора. М.: Высш. шк., 1989. 353 с.
50. Лихачев Д. С. Поэтика древнерусской литературы. Л.: Наука, 1979. 353 с.
51. Лупанова И. П. Русская бытовая сказка: Автореф. дис. канд. филол. наук. Л., 1950. 15 с.
52. Мелетинский Е. М. Происхождение героического эпоса: Ранние формы и архаические памятники. М.: Изд-во восточ. лит., 1963. С. 462.
53. Мингажетдинов М. Х. Сказки моей матери Мавзифы Магафуровны Мингажетдиновой // Фольклор народов РСФСР. Уфа, 1974. Вып. 1. С. 161–172.
54. Минһажетдинов М. Х. Тормош-көнкүреш әкиәттәре // Агиҙел. – 1981. № 12. 113–118-се б.
55. Михайлов Г. И. Проблемы фольклора монгольских народов. – Элиста, 1971. – 234 с.
56. Молдавский Д. М. Русская сатирическая сказка // Русская сатирическая сказка. М.; Л., 1955. С. 169–210.
57. Монгольские сказки / Сост. Г. Михайлова. М.: Худ. лит, 1967. 264 с.
58. Народные русские сказки А. Н. Афанасьева: В 3-х т. / Изд. подгот. Л. Г. Бараг, Н. В. Новиков. М.: Наука, 1986. Т. 3. 496 с.
59. Научный архив Уфимского научного центра РАН. Ф. 3.
60. Никифоров А. И. Теория сказки Альберта Весельского // Советская этнография. 1934. № 3. С. 46–63.
61. Новиков Н. В. Образы восточно-славянской сказки. Л.: Наука, 1974. 256 с.
62. Обидов Д. Таджикские бытовые сатирические сказки: Автореф. дис. канд. филол. наук. Душанбе, 1971. 20 с.
63. Окладников А. П. Утро искусства. Л.: Искусство, 1967. 136 с.
64. Померанцева Э. В. Русская народная сказка. М.: Изд-во АН СССР, 1963. 128 с.

65. Пропп В. Я. Исторические корни волшебной сказки. Л.: Изд-во ЛГУ, 1986. 365 с.
66. Пропп В. Я. Мифология сказки. 2-е изд. М.: Наука, 1969. 168 с.
67. Пропп В. Я. Русская сказка / Отв. ред. К. В. Чистов и В. И. Еремина. Л.: Изд-во ЛГУ, 1984. 336 с.
68. Рошияну Н. Традиционные формулы сказки. М.: Наука, 1974. 216 с.
69. Савушкина Н. И. Поэтика комического в русской бытовой сказке // Прозаические жанры фольклора народов СССР: Тез. док. Минск, 1974. С. 171–174.
70. Сакали М. А. Туркменский сказочный эпос. Ашхабад: Изд-во АН Туркмен. ССР, 1956. 155 с.
71. Сидорова Е. С. Сюжеты чувашских бытовых сказок // Чувашский язык, литература и фольклор. Чебоксары, 1974. С. 171–122.
72. Соболева Н. В. Типология и локальная специфика русских сатирических сказок Сибири / Отв. ред. Т. Г. Леонова. Новосибирск: Наука, 1984. 172 с.
73. Соколов Ю. М. Русский фольклор. М.: Учпедиздат, 1941. 557 с.
74. Сөләймәнов Ә. М. Тормош-көнкүреш әкиәттәре: Жанр үҙенсәлектәре / Яуаплы мөхәрр. проф. Ғ. Б. Хөсәйенов. Өфө, 1990. 272 б.
75. Тарасенкова Е. Р. Русская народная сатирическая сказка в записи конца XIX и начала XX века: Автореф. дис. ... канд. филол. наук. М., 1955. 20 с.
76. Тарасенкова Е. Ф. Жанровые своеобразия русских народных сатирических сказок // Русский фольклор. М., 1957. Т. 2. С. 62–84.
77. Татар халык иҗаты: Экиятләр. 3 нче кит./ Төз., кереш мәк. язучы, искәрм. хәзерл. Л. М. Җамалетдинов.; Фәнни ред. Ф. В. Әхмәтова. Казан, 1981. 360 б.
78. Турецкие сказки / Сост. пер. с турецк., вступ. ст. и примеч. И. В. Стебелевой. М.: Наука, 1986. – 400 с.
79. Турсунов Е. Д. Генезис казахской бытовой сказки. Алма-Ата: Наука, 1973. 216 с.
80. Унгвицкая М. А. Хакасская бытовая сказка. Абакан, 1966. 72 с.
81. Усенбаев Али. Социальная борьба в киргизской бытовой сказке: Автореф. дис. ... канд. филол. наук. Фрунзе, 1973. 32 с.
82. Харисов Ә. И. Әҙәбиәт теорияһы. Өфө, 1944. 222 б.
83. Харисов Ә. И. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы. Өфө, 1965. 416 б.
84. Хөсәйенов Ғ. Б. Быуаттар тауышы: Башҡорт әҙәбиәте тарихы, теорияһы һәм тарихи поэтика буйынса очерктар. Өфө, 1984. 304 б.
85. Хасанов М. А. Дунганские народные сказки: Автореф. дис. ... канд. филол. наук. Фрунзе, 1969. 28 с.
86. Чичеров В. И. Русское народное творчество. М.: Изд-во МГУ, 1959. – 522 с.
87. Шукасаптати: Семьдесят рассказов попугая. М.: Изд-во восточ. лит., 1960. 129 с.
88. Юдин Ю. И. Русская народная бытовая сказка: Автореф. ... д-ра филол. наук. – Л., 1971. 31 с.
89. Яшин Д. А. Удмуртская народная сказка. Ижевск, 1965. 135 с.

# АҢЛАТМАЛАР

## Комментарии

Составлены по следующему плану:

I. Когда, где, кем и от кого записан публикуемый текст, затем указывается место хранения рукописи (или машинописи) и публикации (печатные источники).

II. Анализ сюжетного состава сказки по международному каталогу Аарне-Томпсона (типы сюжетов, не учтенные в международном каталоге, отмечены звездочкой впереди номера по Аарне-Томпсону, к которому примыкают эти сюжеты), сообщаются наиболее существенные особенности публикуемого варианта, краткие сведения о творческой истории и распространения сюжетов.

III. Другие, в том числе иноязычные варианты.

Примечаниями к комментариям служат примечания и глоссарий.

### Принятые условные обозначения:

АА – Н. П. Андреев. Указатель сказочных сюжетов по системе Аарне. – Л., 1929.

Абазин. ск. – Абазинские народные сказки / Сост., пер. В. Е. Тугова. – М.: Ред. вост. лит., 1985.

Абхаз. ск. – Абхазские народные сказки. перевод с абхазского / Сост. и прим. К. С. Шакрыла; Предисл. К. С. Шакрыла и Ш. Х. Салакая; Типологич. анализ сюжетов И. Левина и У. Мазинга. – М.: Гл. ред. вост. лит., 1975.

Авар. ск. – Аварские народные сказки / Сост., пер., примеч. Д. И. Атаева. – М.: Гл. ред. вост. лит., 1972.

Азер. ск., 1977 – Азербайджанские сказки / Собрал и обработал С. Н. Сеидов. – Баку: Азер. книж. изд-во, 1977.

Азер. ск., 1983 – Азербайджанские сказки. – Баку: Маариф, 1983.

Алиева, Поэтика – Алиева А. И. Поэтика и стиль волшебных сказок алыгских народов. – М.: Наука, 1986.

Алиев, Юсупова – Подлинные рассказы о могущественном Халифе Харун-ар-Рашиде, острослове Аву Нувасе и хитроумном Джухе / Пер. с араб. Р. Алиева и Д. Юсуповой. Ответ. ред. и авт. предисл. Б. Шидфар. – М.: Наука, 1976.

Амхар. ск. – Амхарские народные сказки / Пер. с амхарского, предисл. и примеч. Э. Б. Ганкина; Ст. и типол. анализ Е. С. Котляр. – М.; Л.: Гл. ред. вост. лит., 1979.

Арайс-Медне – Арайс К., Медне А. Указатель типов латышских народных сказок. Рига: Зинантие, 1977.

Армян. ск. – Армянские сказки / Сост. А. И. Иоанисиани. М.: Худ. лит., 1968.

Армян. ф-р. – Армянский фольклор / Сост. и пер. Г. О. Карапетяна. М., 1967.

АТ – The Types of the Folktale. A. Classification and Bibliography Anti Aarne's Verzeichnis der Märchentypen (FFC 3). Translated and Enlarged by S. Thompson. Helsinki, 1961 (FFC 184).

Аф. – Народные русские сказки А. Н. Афанасьева: В 3 т. / Изд. подгот. Л. Г. Бараг, Н. В. Новиков. М., Наука, 1984–1986.

Афган. ск. – Афганские сказки и легенды / Сост., предисл., примеч. К. А. Лебедева. М., 1972.

Ахундов – Азербайджанские сказки / Сост. А. Ахунов. Ред. О. Эрберг. Баку: Изд-во. АН Аз. СССР, 1956.

Баширов – Баширов Г. Тысяча и один мээк / Авт. пер. с татарского И. Законова. – Казань, 1989.

БГУ – Издательство Башкирского Госуниверситета.

Бедье – Bedier J. Les Fabliaux. Paris, 1893.

Бессонов – Башкирские народные сказки / Зап. и пер. А. Г. Бессонова; Ред. Н. К. Дмитриева. Уфа, 1941.

Бирюзовый ларец – Бирюзовый ларец: Узбекские народные сказки / Сост. М. Шевердин. Ташкент, 1967.

БЛ – Башкирские легенды / Сост., коммент., ред. М. Х. Мингажетдинова, К. Мэргэна; Предисл. М. Х. Мингажетдинова и А. М. Сулейманова. Уфа: БГУ, 1969 (на башк. яз.).

БНС, 1956 – Башкирские народные сказки / Сост. Г. Ишбулатов. Уфа, 1956 (на башк. яз.).

БНС – Башкирские народные сказки / Сост. А. Н. Усманов: Лит. обраб. А. Платонова; Предисл. и ред. Н. К. Дмитриева. М.; Л., 1949; 4-е изд. Уфа, 1969.

БНС, Ишбулатов – Башкирские народные сказки / Сост. Г. Ишбулатов; Предисл. и ред. А. И. Харисова. Уфа, 1965 (на башк. яз.).

БНТ, 1959 – Башкирское народное творчество. Т. 2 / Сост. ред. предисл. и примеч. А. И. Харисова. Уфа, 1959 (на башк. яз.).

БНТ: Сказки. Кн. 1, 2, 3, 4, 5. Башкирское народное творчество: Сказки. Кн. 1–5 / Сост. и вступ. ст. М. Мингажетдинова и А. Харисова – кн. 1–2; Н. Зарипова и М. Мингажетдинова – кн. 3; А. Сулейманова – кн. 4, 5. Коммент. Л. Барага и М. Мингажетдинова – кн. 1; Л. Барага и Н. Зарипова – кн. 2, 3; Л. Барага и А. Сулейманова – кн. 4, 5. Редколлегия. Уфа, 1976, 1978, 1981, 1983 (на башк. яз.).

БНТ: Эпос. Кн. 3 – Башкирское народное творчество: Эпос. – Кн. 3 / Сост., вступ. ст. и коммент. Н. Т. Зарипова. – Уфа, 1981 (на башк. яз.).

БНТ. Т. 2: ПЛ – Башкирское народное творчество. Т. 2. Предания и легенды / Сост., вступ. ст. с коммент. Ф. А. Надршиной; Ответ. ред. Л. Г. Бараг. – Уфа, 1987. Пер. с башк.

БНТ. Т. 3 БС – Башкирское народное творчество. Т. 3. Богатырские сказки / Сост. Н. Т. Зарипова; Вступ. ст. и коммент. Л. Г. Барага и Н. Т. Зарипова; Ответ. ред. Л. Г. Бараг. – Уфа, 1988. Пер. с башк..

БНТ. Т. 4: ВС – Башкирское народное творчество. Т. 4. Волшебные сказки и сказки о животных / Сост. Н. Т. Зарипов; Вступ. ст. и коммент. Л. Г. Барага и Н. Т. Зарипова; Ответ. ред. Л. Г. Бараг. – Уфа, 1989. Пер. с башк.

БКИ – Башкирское книжное издательство.

БНТ. Т. 5. – Бытовые сказки. – Башкирское народное творчество. Т. 5. Бытовые сказки / Сост. А. М. Сулейманов; Вст. ст., коммент. и указатели Л. Г. Барага и А. М. Сулейманова. – Уфа: Башкирское кн. изд-во, 1990.

БНТ. Т. 6. Шуточные сказки и кулямасы – Башкирское народное творчество. Т. 6. Шуточные сказки и кулямасы / Сост. А. М. Сулейманова; Вст. ст., коммент. и указатели Л. Г. Барага и А. М. Сулейманова. – Уфа, 1992. Пер. с башк.

Бурят. ск. – Бурятские народные сказки / Сост. Е. В. Баранникова, С. С. Бардаханова, В. Ш. Гунгаров; Под общей ред. Е. В. Баранниковой. – Улан-Удэ, 1973 (кн. 1), 1976 (кн. 2).

Бурят. ск., Элиасов – Бурятские сказки / Сост., вступ. ст. и примеч. Л. Е. Элиасова. – Улан-Удэ, 1959.

Венгер. ск. – Венгерские сказки / Сост. Анатоль Гидаш. Пер. с венгерского. – М.: ГИХЛ, 1958.

Вентäхел – Kurdische Märchen / Hrsg. von L. CH. Wentschel. – Düsseldorf * Köln: MdW, 1978.

ВОО – Вестник Оренбургского округа, 1912.

Глонти – Грузинские народные новеллы / Сост., обработка, ред., предисл. и прим. А. А. Глонти. – Тбилиси, 1984.

Груз. нар. ск. – Грузинские народные сказки: Сто сказок / сост. и пер. Н. И. Делидзе. Под ред. проф. М. Я. Чиковани. – Тбилиси, 1971.

Даргин. ск. – Даргинские сказки / Пер., предисл., прим. М. З. Османова. – М.: Гл. ред. вост. лит., 1963.

Двадцать три Насретдина – Двадцать три Насретдина / Сост., вступ. ст., прим. и указатели М. С. Харитонова. – М.: Гл. ред. вост. лит., 1978.

Диковины Аму – Диковины Аму. Каракалпакские сказки / Под ред. М. И. Шевцова. – Нукус, 1968.

Долидзе – Грузинские народные сказки: Сто сказок / Сост. и пер. Н. И. Долидзе; Под ред. М. Я. Чиковани. – Тбилиси, 1971.

Дунган. ск. – Дунганские народные сказки и предания / Сост. М. Хасанов и И. Юсупов; Ответ. ред. Б. Л. Рифтин. – М.: Гл. ред. вост. лит., 1977.

Забавные рассказы – Забавные рассказы про великомудрого и хитроумного советника индийского падишаха Акбара. 2-е изд., испр. М.: Наука, 1978.

Зеленин – Великорусские сказки Пермской губернии с приложением двенадцати башкирских и одной мешярской / Сост. Д. К. Зеленин // Зап. РГО. Пг., 1914. Т. 17.

Зийа ад-Дин Нахшаби – Зийа ад-Дин Нахшаби. Книга попугая (Тути-наме) / Пер. с перс. Е. Э. Бертельса; Подготовка к изданию, предисл., прим. Д. Е. Бертельса; Отв. ред. А. Н. Болдырев. – М.: Гл. ред. вост. лит., 1979.

Иаятулах Канбу – Иаятулах Канбу. Книга о верных и неверных женах, или Бехар-е данеш. – М.: Гл. ред. вост. лит., 1966.

Игра Веталы – Игра Веталы с человеком: Тибетские сказки / Пер. с тибетского Ю. Парфиновича. – М.: Наука, 1969.

Имад Мухаммед ан-Наари – Имад ибн Мухаммед ан-Нари. Жемчужины бесед / Пер. с перс. М. Н. Исманова; Ответ. ред. О. Ф. Акимушкин. – М.: Гл. ред. вост. лит., 1985.

Истребитель колючек – истребитель колючек: Сказки, легенды и притчи современных ассирийцев / Сост., пер. с ассирийск. и европейск. яз. К. П. Матвеева (Бар-Маттая). – М.: Наука, 1974.

Казах. ск. – Казахские сказки. Т. 1–3 / Под ред. В. М. Сидельникова. – Алма-Ата, 1965–1968.

Казах. ск., 1959 – Казахские сказки. – Алма-Ата, 1959.

Калмыц. ск., 1962 – Калмыцкие сказки / Сост., прим. С. Д. Алексеева и Л. С. Сангеева. – Элиста, 1962.

Калмыц. ск., 1982 – Калмыцкие сказки / Сост. и предисл. Б. Джимбинова. – Элиста, 1982.

Каракалп. ск. – диковины Аму: Каракалпакские народные сказки / Под ред. М. Н. Шевцова. – Нукус, 1968.

Каракалпак. ф-р – Каракалпакский фольклор / Т. 1: Каракалпакские народные сказки / Сост. Калбай Мабетназаров. – Нукус, 1977 (на каракалпак. яз.).

Карамзин – Б. Карамзин. Сказки / По мотивам башкирских сказок. – Уфа: БХИ, 1974.

Карельск. ск. – Карельские народные сказки. Южная Карелия / Изд. подг. У. С. Конкка, А. С. Тупицына. – Л.: Наука, 1967.

Каскабасов – Каскабасов С. А. Казахская волшебная сказка. – Алма-Ата: Наука, 1972.

Киргиз. ск., 1962 – Киргизские народные сказки / Лит. пер. К. Эшмамбетова и Д. Брудного. – Фрунзе, 1962.

Киргиз. ск., 1968 – Киргизские сказки. – М., 1968.

Киргиз. ск., 1985 – Киргизские народные сказки / Подготовка текстов, коммент. А. Токомбаевой. Фрунзе, 1985 (на киргиз. яз.).

Кн. о судах – Книга о судах и судьях: Легенды, сказки, басни и анекдоты разных веков и народов / Сост. вступ. ст. и прим. М. С. Харитонова. – М.: Гл. ред. вост. лит., 1975.

Коми ск. – Коми народные сказки / Сост. Ф. В. Плесовский. Сыктывкар, 1975.

КС, I, II, III – Казахские сказки. Т. 1–3 / Сост. и ред. В. Сидельникова. – Алма-Ата, 1956 – 1968.

Кумык. ск. – Кумыкские народные сказки. – Махачкала, 1967 (на кумык. яз.).

Курд. ск. – Курдские народные сказки / Запись. пер., предисл., прим. М. Б. Руденко. – М.: Гл. ред. вост. лит., 1975.

Кшижановский, Параллели – Krzyzanowski J. Paralele. Studia Porownawcze z pogranicza literatury i folkloru. Warszawa, 1961.

Кшижановский – Krzyzanowski J. Polska bajka lubova w ukladzie systematycznym. T. I–II. Wroclaw–Warszawa–Krakow, 1962–1963.

Левин – Armeniscge Märchen/Hrsg. von Isidor Levin in verbundung mit Uku Masing – Düsseldorf-Köln, 1982.

Малов – Малов С. Е. Уйгурский язык: Хамийское наречие. М., 1954.

Мальсагов – Сказки и легенды ингушей, чеченцев / Сост., пер., предисл., прим., типологич. анализ сюжетов А. О. Мальсагова; Отв. ред. А. И. Алиева. – М.: гл. ред. вост. лит., 1983.

Марзольф – Typologie des persischen Volksmärchen von Ulrich Marzolph. – Beirut, 1984.

Марий. ск. Четкарев – Марийские народные сказки / Сост., зап., пер. и ст. К. А. Четкарев. – Йошкар-Ола, 1956.

Марий. ск. – Марийские народные сказки / Сост. В. А. Акцорин. – Йошкар-Ола, 1960; 1984.

Матер. Башк. и Урала – Материалы и исследования по фольклору Башкирии и Урала. Вып. 1 / Отв. ред. Л. Г. Бараг. Уфа: БГУ, 1974.

Медноволосая девушка – Медноволосая девушка: Калмыцкие народные сказки. – М., 1964.

Молдав. ф-р – Молдавский фольклор. – Кишинев, 1967.

Монголь. ск. – Монгольские сказки / Сост. Г. Михайлова. – М., 1967.

Мордов. ск. – Мордовские народные сказки / Сост. К. Т. Самородов. Изд. 2-е. – Саранск, 1978.

НА – Научный архив Уфимского научного центра РАН.

